

Фәниҙә ИСХАҠОВА



# КЕШЕ-КҮСЕРМӘ



Фәниҙә ИСХАКОВА



(Фантастик роман һәм повесть)

ӨФӨ
«КИТАП»
1996

ББК 84 Баш
И 82

**Исхаҡова Фәниҙә**

И 82 Кеше-күсермә: Роман, повесть.— Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1996.— 352 бит.

ISBN 5-295-01696-X

Фәниҙә Исхаҡованың был тәүге китабы. Йәнле, шаян тел менән яҙылған мауыҡтырғыс роман һәм повесть уҡыусыларҙың күңеленә хуш килер.

И $\frac{4803110100—84}{М121(03)-96}$ 114—96

ББК 84 Баш

ISBN 5-295-01696-X

© Исхаҡова Фәниҙә, 1996
© Байназаров Марат һүрәттәре, 1996

# КЕШЕ-КҮСЕРМӘ

(Фантастик роман)



## БЕРЕНСЕ КИҪӘК

### 1

Байып барыусы ҡояштың һуңғы нурҙарын мөһәбәт һынында уйнатып, ҙур самолет һалмаҡ ҡына түбәнәйә башланы. Оҙаҡ ултырып ялыҡҡан юлсылар, ҡайһылары сәйәхәттәренең тамамланып килеүенә ҡәнәғәтләнеп, бәғзеләре яҡындары менән тиҙҙән буласаҡ осрашыу шатлығына хәҙерҙән үк иҙерәп, сәфәр аҙағында була торған ғәҙәти мәшәҡәттәренә бирелде. Ишектән ярайһы уҡ алыҫ ултырған бер егет кенә, тыны менән һурып алырҙай булып, иллюминаторҙан ерғә төбәлгән. Э-эх, күпме көттө ул ошо көндө, календарь биттәрен һанай-һанай, был йәйге кистә ни булаһын уйлап татлы хыялдарға бирелә-бирелә... Барыһының да кирегә әйләнеп китерен кем белгән. Бер аҙна элек Айвар төньяҡ нефть яҡкылыҡтарына эш менән сәфәр сыҡҡайны. Әммә өс көнгә иҫәпләнгән эштең осо ла, ҡырыйы ла күренмәне. Әле бына шәмбе көн, ниһәйәт, мәшәҡәттәренең сигенә сығып, ҡайтып килгән мәле. Күңеле, бәлки, тыныс та булыр ине, әммә, үс иткәндәй, самолет һуңланы. Бөгөнгө көндөң Айвар өсөн ни тиклем мөһим икәнен белһәләр, моғайын, уны һуңлатырға бер кемдең дә батырсылығы етмәҫ ине.

Бынан өс сәғәт элек Айвар Гөлүзәләрҙең ишек ҡыңғырауына баҫырға тейеш ине. Аэропорттың тынсыу бинаһында ултырған килеш, ошо мәлде ул ҡат-ҡат күҙ алдынан үткәрҙе. Бына ул төймәгә бер-бер артлы ике тапҡыр баҫып ала. Уң ҡулында янып торған роза сәскәләре, һулында кескәй генә, әммә бик затлы бүләк. Гөлүзәнең йүгереп түгел, осоп килгәне ишетелә. Бына ул ишекте аса, Айварҙың битенән үбеп ала. Нәфис хушбый еҫе егеттең танауын ҡытыҡлай. Елберләп торған зәңгәр күлдәктәге ҡыҙ ҡош кеүек осоп китерҙәй тойола уға.

...Ошо күренеште ҡабат-ҡабат күңеленән кисергән Айвар тынсыу һауанан әлһерәп, иҙерәй башлағайны инде, ултырыш иғлан иттеләр. Ләкин, ни сәбәптәндер, Өфөгә килеп төшкәнсе, ошо күренештән ҡотола алманы ул. Бәйләнсек төш кеүек, күҙ алдында әйләнеп тик тора. Егеттең тәҡәте ҡороно. Юл йонсотоуы, йоҡоһоҙлоҡ ергә аяҡ баҫыу менән онотола төштө. Ҡулына еңел ҡатырға сумаҙан ғына тотҡан егет такси туҡталышына йүгерҙе. Эйе, һөйгәне янына бармай ҡалырға хаҡы юҡ уның. Гөлүзәгә егерме йәш тула бөгөн. Ошо көндә ҡыҙҙың ата-әсәһенең ризалығын алырға һөйләшкәйне улар. Егет менән ҡыҙ артабанғы яҙмыштарының айырым булырын инде күҙ алдына ла килтермәй. Дуҫлашыуҙарына хәҙер өс йыл. Ҡыҙҙың тыуған көнөнә Айвар дуҫ егете менән килгәйне. Тәү күреүҙән үк был һөйкөмлө ҡыҙ уны сихырланы, әле килеп нисәмә йыл Гөлүзәһеҙ йәшәй алғанына ғәжәпләнә. Айварҙың институт тамамлағанына йылдан ашыу ваҡыт үтте. Уға йәш белгес тип кенә түгел, һәләтле инженер ҙа тип ҡарайҙар. Үҙ-үҙен ихтирам иткән ир-егет өсөн был аҙ баһа түгел.

Гөлүзә университеттың тарих факультетында уҡый. Ҡыҙ тәүҙә уҡып бөтәйем, тағы ла ике йыл бар бит әле, тип ҡараһа ла, егет уны тәки күндерҙе. «Бына был беләктәр кемделер ҡурсалар өсөн яратылған»,— тине ул ярым шаяртып, көслө мускулдарын уйната-уйната. Ҡыҙға был оҡшаны. Үҙен ышыҡ аҫтында тойоу ҡайһы ҡатын-ҡыҙ күңеленә хуш килмәҫ...

Үҙ уйҙарына сумған егет еңел машинаның талғын ғына туҡтауына һиҫкәнеп китте. Такси ҡыҙҙың йорто ҡаршыһында тора ине. Тейешле хаҡты түләгәс, малай-шалай шикелле, йортҡа табан тороп йүгерҙе. Көн кисләй, инде ҡунаҡтар ҙа таралышҡандыр. Шулай ҙа инмәй китеү ярамаҫ.

Йорт мөйөшөнән ишек алдына атылып сыҡҡан егет шып туҡтаны. Саҡ ҡына арыраҡ Гөлүзә бер егет менән һөйләшеп тора ине. Айвар әкрен генә шыуып ишек ҡырындағы стенаға һөйәлде. Егетте хәлһеҙлек баҫты. Үҙ күҙҙәренә ышанырға теләмәй, тағы ла берҙе үрелеп ҡараны. Гөлүзә — Гөлүзә инде, уға тик һоҡланырға ғына мөмкин. Ә бына теге егет... Айварҙың үҙе ине буғай. Егет, ышанырға теләмәй, үҙ-үҙен семтеп ҡараны... ауырта. Бәлки самолетта йоҡлап киткәндер, барыһы ла төш кенәлер, тип тә уйлап ҡараны. Нисек килгәнен иҫләй ҙә баһа, ҡайһы урында абына яҙғанына тиклем. Айвар тегегә һаҡ ҡына тағы ла бер күҙ төшөрҙө: өҫтөндә тап уныҡы һымаҡ ҡыҫҡа еңле аҡ күлдәк, тар ҡара галс-

тук, килешле салбар. Етмәһә аяҡтары янында ҡара дипломат күренә.

Быларҙың барыһын да егеттең аңы һыйҙыра алмай ине. Әллә юл йонсоуы баҫты, әллә кисерештәр артығыраҡ булды — Айвар стенаға һөйәлгән килеш әкрен генә шыуып ергә ултырҙы. Күпме ваҡыт ошо ҡиәфәттә ҡалыуын да аңлай алманы, уны кинәт ҡыҙҙың ғәжәпһенгән тауышы иҫенә килтерҙе:

— Айвар! Нисек, һин ҡабат әйләнеп килдеңме ни?

Егет әкрен генә күҙҙәрен асты:

— Нисек ҡабат? Мин бында килгәйнемме ни?

Гөлүзә ғәжәпләнеүҙән ни әйтергә белә алмай торҙо.

— Бәй, мин бит һине әле генә оҙаттым.

— Мине? Ә мин ҡасан килгәйнем?

— Сәғәт етелә, хәҙер ун беренсе китте... Айвар, әллә һин сирләп киттеңме? — Ҡыҙҙың йөҙөнә борсолоу йүгерҙе.

— Белмәйем... Белмәйем... Гөлүзә, ә һин мине кем менәндер бутамайһыңмы?

— Нисек инде бутайым? Һин үҙ аҡылыңдамы?

— Мин бит әле генә таксиҙан килеп төштөм. Самолет өс сәғәткә һуңланы. Сәғәт етелә мин бөтөнләй сит ҡалала инем, Гөлүзә.

Ҡыҙҙың күҙҙәре ҙур булып асылды, ирендәре дерелдәй башланы, күҙҙәренән йәш атылып сыҡты.

— Һин... һин... Нисек шулай әйтә алаһың? Бөгөнгө көн минең иң бәхетле көнөм ине. Ата-әсәйем дә бәхет теләп, ризалыҡтарын бирҙе. Ә һин иң һуңынан үҙең үк ошо бәхетте боҙҙоң... — Ҡыҙ битен ҡулдары менән ҡаплап, йүгереп инеп китте. Айвар ерҙә ултырған килеш ҡалды. Ул бер нәмә лә аңламай ине. «Әллә мин аҡылдан яҙам, әллә был донъя күсәренән ысҡынған...»

## 2

Көн төшкә ауышҡан. Айвар, шулай оҙаҡ йоҡлауына ғәжәпләнеп, һикереп торғайны, хәлһеҙләнеп, ҡабат ултырҙы. Башы шаңҡып ауырта, йөрәге сығырҙай булып тибә. Маңлайын тотоп ҡарағайны — эҫе. Тимәк, температура. Хәйер, тын алыуҙан уҡ самаларға мөмкин — өтөп бара.

Үҙ-үҙен белә-белгәндән бирле күнекмәләрҙе тын алыу кеүек ғәҙәтигә әүерелдергән, сыныҡҡан һәм һығылмалы кәүҙәле егет өсөн был сәйер ине. Һуңғы тапҡыр ҡасан сирләп ятҡанын ул иҫләмәй. Тимәк, башҡа сәбәп...

Айварҙың хәтеренә кинәт кисәге кис булған хәл килде. Сәйер... Күҙенә күренгән, тиер ине, ул бит Гөлүзә менән дә һөйләшеп торҙо. Уны рәнйетте лә шикелле, тик ни өсөн үпкәләткәнен генә аңлай алманы.

Былар бөтәһе лә үтә аңлайышһыҙ ине. Әле үҙенең сирләп ятыуы егеткә мәғәнәһеҙ төш булып күренә башланы. Ни ҙә булһа төшөнөргә тырышып, тирә-яғына күҙ йүгертте. Кисә кис кейгән кейемдәре бөхтә итеп элгескә эленгән. Ҡара салбарҙа стенанан «иҫтәлек» ҡалған. Тимәк, был — ысынбарлыҡ. Уға күңелһеҙ булып китте. Эс бушатыр кеше лә юҡ бит, исмаһам. Ғилми-тикшеренеү институтында ярты йыл эшләгәс биргәйнеләр уға был бүлмәне. Шул ваҡыттағы һөйөнөүҙәре!.. Әле иһә, хәленән килһә, эске кейемдә килеш сығып ҡасыр ине ошонан...

Өс көндән һуң ғына Айвар эшкә сыға алды. Ни телефон булмағас, ни үҙе табипҡа күренә алмағас, егет, бик теләһә лә, эшләгән еренә үҙ хәлен хәбәр итә алманы. Берҙән, ауырыуҙан йүнләп төҙәлеп бөтмәгәнгә, икенсенән, бүлек мөдиренә эшкә сыҡмауының сәбәбен аңлатырға кәрәклеген уйлап, ул күңелһеҙ генә үҙ кабинетына үтте.

Унда телгә бөткән, ғүмерҙә лә бойоға белмәҫ Зәбир менән пеләш башлы Шамил Мотаһаровичтан башҡа, ни сәбәптәндер, бүлек мөдире үҙе лә бар ине. Айвар уны тап итеүенә шатланып та, хафаланып та, хатта һаулыҡ һорашырға ла онотоп, шул яҡҡа ынтылды:

— Мансур Талипович! Мин...

— Һуңынан... һуңынан...

Ишек шап итеп ябылды. Зәбир, хахылдап көлөп ебәрмәҫ өсөн, ауыҙын баҫты.

— Һин нимә, ҡартлас, бөтә донъяны баш түбән әйләндерҙең дә, Мансур Талипович, тип өтәләнгән булаһың. Мөдир ярай крокодил түгел, аҫыл ҡолаҡтарыңдың береһен булһа ла закускаға алыр ине. Ха-ха-ха!!!

— Бер нәмә лә аңламайым...

Зәбир үҙенең эш өҫтәле артынан торҙо, Айварҙы алдан-арттан бер-ике тапҡыр урап сыҡты. Айвар уның ғәҙәттәренә күнегеп бөткән, алдым-бирҙем холоҡло шарлатаныраҡ Зәбирҙе башҡа хеҙмәттәштәренә ҡарағанда яҡыныраҡ күрә. Был, бәлки, коллективта иң йәштәре улар булыуҙан киләлер, бәлки, Зәбир янында һәр саҡ уйын-көлкө булыуға бәйлелер. Ни тиһәң дә, бергә эшләүҙәренең тәүге көнөнән үк улар ныҡ ҡына дуҫлашып китте.

— Күрегеҙсе, ул бер нәмә лә аңламай! Хөрмәтле вә ғиззәтле Мансур Талипович креслоһынан — тү-тү! Ул

һине нисек ҡолас йәйеп ҡаршыларға тейеш әле, иптәш нәсәлник. Бына, күрмәһәң күр! — Зәбир уның ҡулына ниндәйҙер ҡағыҙ киҫәге тотторҙо. Был институт директоры ҡул ҡуйған бойороҡ ине. Ҡағыҙға, аҡҡа ҡара менән, Мансур Талиповичтың бүлек мөдире вазифаһынан бушатылыуы, уның урынына Айварҙың тәғәйенләнеүе яҙылғайны. Егет, уҡып бөткәс, лып итеп ултырғысына ултырҙы, ышанмай тағы ла бер-икене уҡып сыҡты. Ни булды һуң был? Етәксе булырлыҡ ниндәй эш ҡырҙы? Һорау бирә башлаһаң, башын иҫәргә һала, тиәсәктәр. Келт итеп Гөлүзә менән һуңғы осрашыу хәтеренә төштө. Тимәк, бында ла ниҙер булған. Ни эшләргә? Иң ҡулайлыһы — бер ниндәй ҙә һорау бирмәҫкә. Яйлап барыһы ла үҙенән-үҙе асыҡланыр. Улайһа алйот хәлендә ҡалыры ап-асыҡ.

Егеткә, мең һорауҙарға бата-бата, мөдирлекте ҡабул итеп алырға тура килде. Мансур Талиповичты ул хөрмәт итә ине. Ҡарт, пенсия йәшенә етһә лә, эшләрлек ине әле. Был көндөң ҡасан да булһа киләһен белеп, үҙҙәренә ошо урынды самалап, директор тирәһендә уранғылаған бер нисә кешене белгәнгә, был вазифаны биләргә мәжбүр булыуы уға көтөлмәгән хәл булды.

Үҙен кинәт түрә яһаған был көндө ул сағыштырмаса тыныс үткәрҙе. Эшлекле ҡиәфәт менән ҡағыҙҙар араһында соҡондо, үҙе иһә хеҙмәттәштәре һөйләгән хәбәрҙәрҙе хәтер һандығына тултыра бирҙе. Уларға ҡарағанда, имеш, Айвар өс көн буйына өйөндә аунап ятмаған булып сыға. Көн дә таң һарыһынан эшкә килә («Айвар Айбулатович, һеҙ һуңғы арала бик иртәселгә әйләндегеҙ, ете лә тулып өлгөрмәй, эш урынындаһығыҙ»,— быныһы вахтер ҡарт), дүшәмбе көн ниндәйҙер кәңәшмәлә бөтә институтты таң ҡалдырған («Айвар Айбулатович, һеҙгә беҙ бик ҙур өмөт тотабыҙ, төньяҡ нефть ятҡылыҡтарын бынан һуң да күҙ уңынан ысҡындырмағыҙ»,— быныһы институт директоры Биктимеров), етмәһә бөгөн иртән, нисек аҡланырға икән тип автобуста һелкенә-һелкенә китеп барған мәлдә, ул кем менәндер коридорҙа ла һөйләшеп торған, имеш.

Минут һайын ғәзиз башына ауҙарылып торған был яңылыҡтарҙан эш көнө аҙағына тиклем ул шул тиклем арыны, һуңға табан әленән-әле сәғәтенә күҙ һала башланы. Ярай ҙа кабинеты айырым, ошо килеш кеше алдында нисек сыҙар ине икән.

Кешелек йәмғиәтенән бер көн эсендә шул тиклем биҙгән Айвар, эш сәғәте бөтөр-бөтмәҫтән, кабинетын бикләп аҫҡа йүнәлде. Дуҫының кинәт юғары үрләүенә уның үҙенә ҡарағанда нығыраҡ шатланған Зәбир был

килде ресторанда матур итеп йыуыуҙың мәслихәт икәнлеген Айварҙың иҫенә төшөрөргә китеп барған ерэнән шып туҡтаны — тегеһенең артынан елдәр генә уйнай ине.

— Һе, мөдир... Уңған түрәләр, эшем эйәһе булып, банкаларҙың ҡайтып бөткәнен көтә. Бик һөнәр тапмаһаң, үҙеңдең бесәйҙән минең кәзә бәрәсенә сәләм әйтеп булһа ла хат яҙалар уны... — Һөйләнә-һөйләнә Зәбиргә тартәһен кирегә борорға тура килде.

Айвар, тәүге шаңҡыуҙан арынып, аныҡ бер ҡарарға килергә өлгөргәйне инде. Бында вахтер ҡарттың ярҙамы тейҙе. «Ете лә тулыр-тулмаҫтан, эш урыныңдаһың...» Был мәл егет аҫылының матур төштәр күреп ятыуы башына ла кереп сыҡмай ҡартластың.

Эйе, ул уны тап итергә тейеш. Кем һуң ул? Ни эшләп береһе лә ысын Айварҙы ҡайҙандыр пәйҙә булған игеҙәгенән айыра алмай? Кем булһа ла һәләттәре буйынса күпкә юғары. Улай булһа, өс көн буйына прогул яһап ятҡан егетте бөтә институт тота килеп ихласлап ихтирам итә башлар инеме ни. Дә-ә, эште быныһы тағы ҡатмарландыра. Ни өсөн икәнен дә белмәй, кинәт батшаның кейәүе булырға мәжбүр булған көтөүсе хәлендә ҡалды егет.

Фәлсәфәгә бирелеп ултырырға ваҡыт самалы ине — һәр минутта көлкөгә ҡалыу мөмкинлеген ул иҫенән сығармай. Шунлыҡтан иртән сәғәт етелә институт ишеген ул ҡаты ҡарарға килгән кеше тәүәккәллеге менән асты. Ни булһа ла булыр.

— Хәйерле иртә, Мөҙәрис Халиҡович.

— Һаумы, һаумы, улым.— Вахтер ҡарт йоҡоһо китеп бөтмәгән күҙҙәрен ҡул һырты менән һыпырып, асҡыстар эленгән сөйҙәргә үрелде.— Бәй, әле генә алдың да инде. Мин ҡартластың шул инде, ни биргәнемде онота башланым. Һин дә, шилма егет, ҡат-һат һаулыҡ һорашмаһаң...

«Тимәк, ул бында...» Айварҙың йөрәген ниндәйҙер шом биләп алды. Тәүәккәллеге лә кәмей төштө. Шулай ҙа ул, батырсылыҡ итеп, өҫкә, дүртенсе ҡатҡа, йүнәлде.

Институтта бушлыҡ хөкөм һөрә. Исмаһам, берәй йән эйәһе булһасы! Хәтәр билдәһеҙлеккә ҡаршы атлағанда, яңғыҙлыҡ бигерәк ауыр тойғо икән шул...

Сеү! Дүртенсе ҡатҡа күтәрелеп килгән Айвар шып туҡтаны — өҫтә аяҡ тауыштары ишетелә ине. Йәнен иҙеп килгән ауыр тойғоға бирешеп кирегә йүгермәҫ өсөн, Айвар тештәрен ҡыҫып, үҙ-үҙен мәжбүр итеп тигәндәй, алға атланы. Баҫҡыстан менеп, боролошҡа еткән Айвар үҙ кабинетының ишеге ябылыуын күрҙе. Ни булһа ла булыр! Ҡапыл тартыуҙан ишек асылып китте, егет эскә

ташланды. Ләкин бүлмәнең эсе буш ине. Өҫтәлдә — кабинет асҡысы. Айвар, хәлһеҙләнеп, эргәһендәге ултырғысҡа ауҙы.

## 3

Ял көндәрен Айвар Гөлүзә менән үткәрергә ғәҙәтләнгән. Һуңғы тапҡыр күрешеүҙәре әллә нисек сәйер тамамланһа ла, был юлы ла ҡыҙ янына барыуҙан ул баш тартырға йыйынмай ине.

Ишекте, ғәҙәттәгесә, Гөлүзә үҙе асты. Айвар уны үпкәһен онота алмағандыр, кире бормаһа ярай ҙа, тип шикләнгәйне, әммә көткәндең тап киреһе килеп сыҡты. Ҡыҙ йылмайып үҙенә тәғәйенләнгән сәскә бәйләмен алды, унан егеттең ҡуйы ҡара сәстәрен һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә итеп нәфис бармаҡтары менән тарап үтте.

— Ә мин һине көттөм...

— Гөлүзә, мин һинән ғәфү үтенергә теләйем. Үткәндә...

— Ҡасандан бер нәмә өсөн ҡат-ҡат ғәфү үтенергә өйрәндең әле һин? Ә-ә, белдем, замана түрәһенә тупаҫ булырға я-ра-май.— Ҡыҙ сыңғыратып көлөп ебәрҙе.

«Э-эх, бында ла өлгөргән...» Ләкин һыр бирергә ярамай ине. Айвар шуның өсөн көлкөгә һабыштырырға ашыҡты.

— Минең тел ҡайһы саҡ боҙоҡ патефон энәһе шикелле артҡа һикереп тик тора. Төньяҡ менән көньяҡ һауаһы алышыныу үтә лә хәтәр тәьҫир итте шикелле, һылыуым. Бына күрерһең, тағы ла бер килгәндә, иҫбатлау йөҙөнән, юрый ғына ғәфү үтенгән булырмын әле.

— Телең, ысынлап та, боҙоҡ патефон энәһенә торошло икән шул. Мин эй ғәжәпләнгән булам, ни өсөн был аҫыл егет үтә лә етдигә әйләнде икән тип. Йылмайыуҙың «й» хәрефен онотҡан аҡһаҡал тиерһең, абау, ҡурҡам...

Улар тел сарлай-сарлай залға үттеләр. Үтә кәйефле күренгән Айварҙың йөрәгендә ниндәй дауыл ҡоторғанын Гөлүзә белһә икән. Ул ниндәй хәлгә тарыуын кинәт тәненең һәр күҙәнәге менән аңланы. Институт, хеҙмәттәштәре — былар барыһы ла егет өсөн ул тиклем мөһим булмаған икән. Айвар ҡыҙҙың нәфис кәүҙәһенә, иңбаштарына күпереп төшкән йомшаҡ сәстәренә, нур бөркөп торған күҙҙәренә мөлдөрәп ҡараны. Тағы ла кемдеңдер ошо һөйкөмлө йән эйәһен «ҡәҙерлем» тип атауын ул күҙ алдына ла килтерә алмай. Янында ғына мөкиббән китеп ниҙер һөйләгән ҡыҙҙы мәңгегә юғалтыу мөмкинлеге уны минут

һайын нығыраҡ иҙә ине. Күпме тырышһа ла, шәп кәйеф кимәлендә Айвар оҙаҡ ҡала алманы. Теле туҙға яҙмаған көк барҙы әүәләй бирҙе, бер үк ваҡытта йөҙөнә әйтеп аңлатҡыһыҙ һағыш ятты. Был ваҡытта иң ҡулайлыһы — ҡыҙҙар менән матур ғына итеп хушлашыу ҙа ҡойроҡто һыртҡа һалыу. Шулай итеп, өс йыл тигәндә егет тәүге тапҡыр Гөлүзә янынан ҡабаланып китеп барҙы. Айварҙың шәп-шәп атлап алыҫлашыуын ике ҡулын күкрәгенә ҡауыштырып балкондан күҙәткән ҡыҙҙың йылмайыуы әкренләп һүнде.

Һуңғы арала егеттең алыштырған шикелле булыуы асыҡ ине. Һиҙгер ҡатын-ҡыҙ йөрәге быны әллә ҡасан аңлап алһа ла, ошоно үҙ-үҙеңә таныу еңел түгел. Бигерәк тә бәхетле мәлдең тегендә, бынан бер аҙна һуҙымындағы аралыҡта, ҡалыуын тойған мәлдә...

Гөлүзә үкһеп битен ҡапланы. Ярай ҙа атаһы менән әсәһе залда телевизор ҡарай. Төпсөнә башлаһалар, ни тип әйтер ине. Мәж килеп туйға әҙерләнәләр, бар мәшәҡәттәре шул. Ә бөгөн Айвар ул туй тураһында исмаһам бер ауыҙ һүҙ әйтмәне...

— Илама, сибәрем...

Гөлүзә тертләне. Таныш тауыш, тик, ни өсөндөр, әйләнеп ҡарарға ҡурҡыта. Уңарса булмай, ҡыҙҙың иңбашына таралып төшкән сәстәрен көслө ҡулдар һыйпап үтте.

— Илама, кәрәкмәй.

Ҡыҙ, батырайып, башын күтәреп ҡараны — балконда, тәҙрәгә һөйәлеп, Айвар баҫып тора ине.

— Айвар... Ни эшләп һин ҡабат килдең?

— Һиңә бик ауыр булыуын аңлап ҡалдым, һылыуым. Ни өсөн илай инең?

— Былай ғына. Күңел тулышып китте... Һин нисек тауыш-тынһыҙ ҡабат инә алдың? Мин ишекте бикләгәйнем бит.

— ...Гөлүзә, һиңә бер яңылыҡ әйтергәме?

— Рәхим ит.

— Ана-а, күрәһеңме, туғыҙ ҡатлы йортто. Мөйөштән икенсе.

— Эйе, күрәм.

— Шунда, дүртенсе ҡатта, икенсе подъезда, 42-се квартирала бер ғаилә йәшәй. Шул фатир бер айҙан минеке буласаҡ.

— Һинеке? Нисек?

— Шулай. Мин бит әле йәш белгес, өҫтәүенә мөдир, өҫтәүенә... Хәйер, барыһын да әйтеп бөтөү ҡыҙыҡ түгел.

Шулай ҙа минең буласаҡ телефон номерын яҙып ал, кәрәге тейер.

Гөлүзә, үҙе лә һиҙмәҫтән, тыңлаусан ғына ҡағыҙ менән ҡәләм эҙләп үрелде.

— Хәйер, эҙләп интекмә, бында ла бар.— Айвар ҡыҙға блокнот бите һондо. Унда, ысынлап та, алты һан яҙылғайны...

— Һуң, ул йортҡа бит телефон үткәрелмәгән. Һуғышта ҡатнашыусылар ҡала газетаһына инде нисә ялыу яҙҙы.

— Үткәрмәһәләр, үткәрерҙәр. Һин, шулай ҙа, был битте юғалта күрмә, йәме. Ярай, мин китәйем инде, һылыуым...

Айвар күрһәткән теге йорттоң дүртенсе ҡатынан кәрәкле тәҙрәне мөкиббән китеп эҙләгән ҡыҙ егеттең һуңғы һүҙҙәренә әллә ни иғтибар итмәне. Ниҙер әйтергә уҡталып боролғанда, балконда бер кем дә юҡ ине инде. Ҡулындағы телефон номеры яҙылған блокнот бите генә әлеге һөйләшеүҙең ысын булыуын раҫлай.

## 4

Ҡыҙыллы-аҡлы буй-буй һыҙаттар төшөрөлгән автобус ҡуҙғалып киткәс, Айвар бергилке ҡуҙғалмай торҙо. Уның менән бергә төшөп ҡалған юлсылар, ҡайтып етеүҙәренә һөйөнөп, ҡабалана бирә. Тик егеттең генә кәйефе юҡ. Юлда килгәндә ауылдаштары уның менән һүҙ ҡуҙғатып ҡараһалар ҙа, Айварҙың яҙа яуап биреүенән кәйефенең самалы икәнен күреп, тыныслыҡта ҡалдырҙылар. Әле иһә егеттең иҫе китеп юл сатында тороуына ғәжәпләнеп боролоп ҡарай-ҡарай, йорттарына ашығалар.

— Бәхетлеләр... — тип ҡуйҙы Айвар үҙе лә һиҙмәҫтән.— Уларҙы кемдер көтә. Бер кем дә улар яҙмышына дәғүә итмәй...

Теләр-теләмәҫ ата йортона атланы. Нисәмә айҙар буйы сит яҡтарҙа йөрөп, ошо ҡәҙерле йортто һағынып, оса-ҡуна ҡайта торғайны ул. Дөрөҫ, һуңғы арала ҡайтыуы һирәгәйҙе. Студент саҡ түгел шул, нишләйһең. Әле иһә өс ай самаһы тыуған йортонда булмаһа ла, йәне тартмай ғына өҫтөрәлеп килгән кеүек.

Элекке шикелле осраған бер кешегә әллә ҡайҙан сәләм биреп, һәр берәһенең хәл-әхүәлен һорашыр ине ул, ҡапҡаны асыу менән «Өләсәй!» тип ҡысҡырыр ине. Ләкин уларҙың «һин кисәге генә киткән инең бит», йә иһә «эй, улым, әле генә һаулыҡ һораштың» тип әйтеренән ҡыйынһына.

Мең уйҙарға батып, Айвар тыуған йортоноң тупһаһына аяҡ баҫты. Туҡылдатмай ғына, бесәй шикелле шым баҫып эскә үтте. Өләсәһе һике өҫтөндә йөн иләй ине. Кинәт пәйҙә булған Айварға һиҫкәнде, унан, шатлығынан нимәгә барып тотонорға белә алмай, өтәләнеп китте:

— Эй, улым. Көтә-көтә көтөктәр булып бөттөм. Яныңа әллә барып ҡайтырғамы, тип уйлаған инем. Һуңғы арала төшөмә гел күңелһеҙ генә инәһең.

— Һаумы, өләсәй.— Айвар уны ҡосаҡлап алды. Егеттең күңеле тулышҡайны — уның донъялағы иң ҡәҙерле кешеһенә билдәһеҙ игеҙәге әлегә дәғүә итмәй. Ошо уйҙан егеттең кәйефе бер аҙ күтәрелә төштө. Өләсәһенең өтәләнеп йөрөп табын әҙерләүен күҙәткән Айварҙың мейеһен яңшен тиҙлегендә бер уй телеп үтте. Эйе, тап шулай! Һуңғы аҙнала ул бит тыуған яғы тураһында бер минут та уйламаны. Тупаҫ итеп әйткәндә, ике ятып бер төшөнә инмәне. Игеҙәгенең бында килеп етмәүенең сәбәбе ошонда түгелме икән?!

Көтөлмәгән асыштан Айвар эргәһендәге ултырғысҡа ултыра төштө. Гөлйөҙөм әбей, ейәненең йөҙө үҙгәреүен күреп, хафаға ҡалды.

— Улым, ауырыйһыңмы әллә? Төҫөң юҡ. Ҡоро һөлдәгә ҡалып бараһың бит. Ни булды һуң?

— Юҡ, өләсәй, бер ни ҙә булманы.— Егеткә үҙен көсләп тигәндәй йылмайыуҙан башҡа сара юҡ ине. Шулай ҙа бер аҙҙан ул, ысынлап та, тынысланды.— Һуңғы арала әҙерәк сырхап алғайным, шуның ғәләмәтелер.— Унан, үҙен бөтөнләй ҡулға алып, тирә-яғына күҙ йүгертте.— Шунан, үҙеңдең хәлдәрең нисек? Сирләмәйһеңме?

Гөлйөҙөм әбей, тынысланып, шәшкеләргә сәй ҡоя-ҡоя, хәбәргә күсте.

— Әсәйеңдәрҙән хат килгәйне. Тыуған яҡҡа ҡайтмабыҙ инде, бындағы ҙур аҡсаға өйрәнгәс, унда нисек йәшәрбеҙ, тип яҙған.— Өләсәһе шымып ҡалды. Ейәненең бындай хәбәрҙәрҙе ауыр кисереүен ул белә, шулай ҙа әйтмәй сараһы юҡ ине.

— Беләм, өләсәй, беләм. Мин Төньяҡҡа эш менән барғайным, шунда кереп сыҡтым. Айһылыу ҙурайып бөткән. Атайымдың эш менән киткән сағы тура килде.— Айвар тәҙрә алдына барып баҫты. Кескәй сағында ошонда баҫып атаһының ҡайтыуын нисек көтә торғайны ул. Тәүҙә Айварға унда, алыҫ Төньяҡта, балалар баҡсаһы булманы. Үҫә биргәс, үҙе теләмәне. Шулай итеп, атайлы килеш ата һөйөүе күрмәй үҫте ул. Үҫмер сағында рәнйей ине уларға. Хәҙер ул үпкәләүе үтте. Ни эшләйһең, улар ҙа замана кешеләре, әҙәмсә йәшәйһеләре килә. Бына ошо

замандың бәхет эҙләп тыуған яғын алыҫ Төньяҡҡа алыштырырға мәжбүр булған атайҙар балаһы ине Айвар.

Ярай ҙа өләсәһе бар. Үҙ әсәһенән ҡәҙерлерәк ул егеткә. Тап шуның өсөн дә өләсәйен һәм уның инде ярты яҙмышы булып әүерелгән Гөлүзәне юғалтыу уның өсөн үлем менән бер булыр ине.

Күтәрмәгә ултырып, ихаталағы үҙенә бер төрлө барған тормошто күҙәткән егет ошо хаҡта уйланды. Ана, тауыҡтар йырлай-йырлай ем сүпләй, бер ҡайғылары ла юҡ. Айһылыуҙың яратҡан һары бесәйе һуҙылып ятып ҡояшта ҡыҙына. Бына кемгә ул рәхәт. Бер кем дә ошо Мыяубикәгә һинең хәҙер кәрәгең юҡ, артабанғы ғүмереңде мин йәшәрмен, тимәйәсәк. Ошоно уйлағас, егеттең кәйефе ҡабат боҙолдо. Кеше тигәнең сәйер: эштәре уң барғанда, ихатала ем сүпләп һөйөнгән тауыҡтарҙы күрмәй ҙә, кәмәһе ҡомға терәлгәс, шуларҙың тырнаҡ осондай ғына бәхеттәренә ҡыҙыға...

Айвар эшләгән еренә ҡабат әйләнеп ҡайтҡас, өләсәһе, ауылы хаҡында уйламай булдыра алмаясаҡ. Икенсе төрлө әйткәндә, әгәр егеттең һиҙенеүе дөрөҫкә сыҡһа, игеҙәге бында ла килеп етәсәк, тигән һүҙ. Ни эшләргә? Әгәр алыҫ-алыҫҡа, ғүмерҙә лә әйләнеп ҡайта алмаҫлыҡ ергә олаҡҡанда? Ай-һай, үҙ ғүмеренән дә ҡәҙерлерәк кешеләрен күрмәй нисек йәшәр ул. Икенсенән, унда китеп кенә ҡотола алырмын, тип нисек ышанырға мөмкин.

Әгәр ҙә... Егеттең был уйҙан башы шаулап китте, йөрәге дөп-дөп тибә башланы. Тартмаһа ла, ни эшләптер, түш кеҫәһенә, булмаған сигаретҡа үрелде. Эйе, әгәр ҙә ул был донъянан бөтөнләйгә китһә?! Бер кем дә һиҙмәйәсәк бит! Уның ҡарауы Айварға ул ғүмерҙә ҡылмаған ҡылыҡтарҙы япһарыуҙан туҡтарҙар. Ни эшләп ул ғүмер буйы, энә өҫтөндәге шикелле, һәр нәмәнән шикләнеп йәшәргә тейеш? Бер ниндәй ҙә яманлыҡ ҡылманы ла баһа!

Ҡалаға ҡабат әйләнеп ҡайтҡанда, егеттең күңеленә был уй тамам кереп ояланған, был ниәтен нисек итеп тиҙ һәм интекмәй башҡарып булырын самалай башлаған ине инде. Өләсәһе, һөйгәне тураһында ул уйламаҫҡа тырышты. «Минең юҡҡа сыҡҡанымды һиҙмәҫтәр ҙә әле»,— тип үҙ алдына рәнйеп алырға ла өлгөрҙө. Уларға ауыр булмаһын өсөн, кәбәнгә төшкән энә шикелле юҡҡа сығырға. Бына шул! Айвар Илбәков, насар ғүмер йәшәмәнең, саманды онотмай китә лә бел...

Ошо уйҙар менән егет ятаҡхана тупһаһына аяҡ баҫты. Ғәҙәте буйынса үҙенең бүлмә тәҙрәһенә күҙ һалғайны, һиҫкәнде — тәҙрәләрҙә ут бар ине. Һүндермәй онотоп

ҡалдырыу мөмкин түгел — төймәгә баҫҡанын егет асыҡ хәтерләй. Тимәк!... Игеҙәге! Ғүмерен ошо билдәһеҙ йән эйәһе арҡаһында көлгә әйләндерергә ниәтләп килгән егеткә барыбер ине — йәшен тиҙлегендә өҫкә ташланды. Айвар ҡасан ғына йоҙаҡлап киткән ишектең биге юҡ. Ул шар асылып китеүгә егет атылып килеп инде. Унда, өҫтәл артында, Айвар үҙе ниҙер яҙып ултыра ине. Егет уның йөҙөн күрмәне, арҡаһына ғына иғтибар итеп өлгөрҙө. Һәм шул мәл иҫтән яҙып йығылды.

Аңына килгәндә төн уртаһы еткәйне. Бүлмәлә башҡа бер кем юҡ, ишек яртылаш асыҡ. Ә өҫтәлдә... өҫтәлдә ниндәйҙер яҙыу. Һаҡ ҡына баҫып, егет уға яҡынайҙы, шунан, батырайып, ҡағыҙҙы ҡулына алды. Унда егеттең үҙенең ҡулы менән түбәндәгеләр яҙылғайны:

«Донъянан китергә ашыҡма. Мин бит шул уҡ һин. Үҙ-үҙеңә ҡул һалып ҡына минән ҡотолоу мөмкин түгел. Изге кешеләр аҡылына баш эй...»

5

— Һо-о, ҡартлас, һинең уңғанлығың алдында бөтә кешелек баш эйә, һәм мин, ошо кешелек вәкиле булараҡ, һеҙ гали йәнәштәренең гилем алдында ҙур ҡаҙаныштар яулауына омот бағлайым.— Зәбир, ғәҙәтенсә, бөгөләһығыла баш эйҙе лә ҡағыҙҙар араһында күмелеп ултырған Айварҙың өҫтәле ҡаршыһындағы креслоға килеп ҡунаҡланы.— Һин түрә булғандан бирле тормоштоң ҡыҙығы китте, малай. Тегендә пеләш башлы Шамил абзый көнөтөнө ҡағыҙҙар араһында соҡона, ни секретаршаһы кеше түрәләренеке шикелле билдәре өҙөлөп торған ҡыҙ йораты түгел. Пенсионерҙар йорто тиерһең, фу-у...

Айвар ҡағыҙҙары араһынан күтәрелеп, Зәбиргә төбәлде:

— Ни йомошоғоҙ бар ине, Зәбир Кәбирович?

Тегеһе тәүҙә аңламаны, унан, Айварҙы шаярталыр тип, йөҙөнә йылмайыу ғәләмәте сығарып аҙапланды. Ғүмерҙә лә юғалып ҡалмаған Зәбирҙе шундай ҡиәфәттә күреү мәҙәк ине. Әммә Илбәков, күҙен дә йоммай, ҡаршыһында ултырған хеҙмәттәшенә текләүен белде.

Ниһәйәт, Зәбир иҫенә килде, ғәфү үтенгән һымағыраҡ нәмәне ауыҙ эсенән мөңгөрләне лә сығып шылыу яғын ҡараны.

— Бына һиңә кәрәкһә,— тип һөйләнде ул, аптыраған ҡиәфәттә.— Был түрә йылмайырға оноtҡан тиһәм, кисәге дуҫтарын да танымай башлаған. Дә-ә, эштәр...

## 6

Аҙналар буйына ҡыҙған күмер өҫтөндә йөрөгәндән һуң көҙгөгә күҙ һалып ҡарағыҙ әле. Шаҡ ҡатырлыҡ күренеш, әйтәһе түгел. Әле бына Айвар ҙа, үҙ-үҙен таный алмай, иҫе китеп ултыра. Яңаҡтарын шырт баҫҡан, күҙҙәре төпкә батып тора, уларҙа нур әҫәре булһасы.

Ул бөгөн ныҡлы ҡарарға килеп таңды ҡаршыланы. Етте, барыһын да үҙ яйына ҡуйырға ярамай. Үҙ яҙмышы өсөн ни ҙә булһа эшләргә тейештер ҙә баһа ул.

Тәүге һорау — ни өсөн игеҙәге яҙыу ҡалдырған? Аңлашыла — ул егеттең уй-кисерештәрен әллә ҡайҙан белеп тора. Шуныһын ғына төшөнөп етмәй — Айвар уны бүлдерҙеме, әллә егеттең аңлай алыуына ышандымы. Изге кешеләр... Һы, кемдәр һуң ул хәҙерге заманда изге кешеләр? Кемгә ҡарама — үҙ мәшәҡәте баштан ашҡан. Алдыартты ҡарамай, ысын күңелдән һөйләшеп буламы икән берәйһе менән? Эскерһеҙлеккә мохтаж заман...

Икенсенән — ни өсөн игеҙәк менән һәр осрашыу аң томаланыу менән тамамлана? Шул уҡ ваҡытта Айвар уның йөҙөн күрергә өлгөрмәй, ә ул юҡҡа сыға. Томан кеүек ирей, тимәк, ғәҙәти юл менән түгел.

Айвар сәғәткә күҙ төшөрҙө — туғыҙ тулып килә. Был ваҡытта эш урынында була торғайны ул. Әле һис нәмәгә күңеле ятмай, тәҙрә алдында баҫып тора. Хәйер... ни эшләп эшкә бармаған ти. Игеҙәге инде таң һарыһынан Айварҙың кабинетында ҡуҡырайып ултыралыр әле. Ошо хаҡта уйлағас, егеткә күңелһеҙ булып китте. Ул һис кемгә лә кәрәкмәй, һис кемгә лә... Ҡасандыр атаһы менән әсәһе улдарын алыҫ Төньяҡтың ҙур аҡсаһына алыштырған инеләр, әле иһә хеҙмәттәштәре кәмселектәре һәм һәләте берҙәй етерлек кимәлдә булған Айвар тигән ябай ер кешеһен ниндәйҙер билдәһеҙ даһиға — игеҙәгенә алыштырасаҡтар. Күҙ ҙә йоммай...

Ярһып ишекле-түрле йөрөгән егеттең хәтеренә келт итеп бер нәмә килеп төштө. Стенала эленеп торған фотоһүрәттә группалаш дуҫын күреп ҡалды ул. Айвар институтта уҡығанда йәйге каникул ваҡытында балалар баҡсаһы төҙөлөшөндә эшләгәйне. Улар эшләгән поселокка күрше генә ятҡан кескәй ауылда йәшәүсе сәйер бер кешене ул әле лә хәтерләй. Йәшен аныҡ ҡына билдәләүе ауыр булған Асраров фамилиялы был имсене тирәяҡта белмәгән әҙәм юҡ. Ҡайһы берәүҙәр уға һоҡланып бөтә алмай, икенселәр шомланып ҡарай. Уның исеме телгә алынғанда йөҙҙәренә мыҫҡыллы йылмайыу ҡалҡҡан кешеләр ҙә аҙ түгел. Уны имсе Асрар тип йөрөтәләр.

Нисек был яктарға килеп сыҡҡандыр, элек ҡайҙарҙа йөрөгәндер — бер кем асыҡ белмәй. Заманында юғары белем алып, ҙур ғына урындарҙа ла эшләгән, тип һөйләйҙәр. Әллә ни ҡарт күренмәһә лә, сәстәре салланған был кешенең үҙ-үҙен тотошонда ниндәйҙер сер ярылып ята. Ауыл халҡы менән аралашып бармай, әммә унан игелектән башҡаны күргәндәре юҡ. Яҙа-йоҙа ишетелеп ҡалған хәбәрҙәрҙән уның ҡатыны менән ҡыҙының ниндәйҙер фажиғәгә тап булыуы, шул сәбәптәнмелер, Асраровтың ете ят булған ошо яҡтарға килеп сығыуы билдәле.

Төҙөлөш отрядында ике аҙна булғас, көн аша ишеткән ошо хәбәрҙәрҙән Айвар шул тиклем туйҙы, йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр күр, тигән ҡарарға килеп, иптәш егете менән был серле кеше янына барып ҡайтырға булды. Әммә имсе Асрар уларҙы ҡолас йәйеп ҡаршыларға йыйынмай ине. Егеттәрҙең әҙәпле генә һаулыҡ һорашыуына әллә ни яҡты йөҙ күрһәтмәне.

— Һеҙҙең ҡыҙыҡһынып ҡына килгәнегеҙҙе беләм, балалар, ләкин мин музей экспонаты түгел. Бәләгә тарып, ярҙамым кәрәк булһа, рәхим итегеҙ. Ә хәҙергә хушығыҙ.

Егеттәргә һаубуллашып сығып китергә тура килде. Ни эшләйһең, имсенең һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар ине шул.

Әле бына, ос йыл ваҡыт үткәс, ул бәләгә тарыны, шикелле. Үҙенең ошо уй-хәсрәттәре менән Айвар ҡайҙа бара ала? Больницаға, психотерапевҡамы? Таблетка яҙырҙар, саф һауала күберәк булырға ҡушырҙар. Дуҫтарынамы йә иһә етәкселәренәме? Ә улар ни әйтә ала? Теләһәң-теләмәһәң дә, сәйер мәсьәләләр менән сәйер кешеләргә барырға кәрәк. Башҡалар уның алдында көсһөҙ.

Бөгөн үк юлға сығырға кәрәк. Эйе, ваҡыт үткән һайын хәл ҡатмарлана бара ла баһа, ашығырға кәрәк. Айвар ҡабаланып әйберҙәрен йыйырға кереште. Бөтәһе лә әҙер, шикелле. Шулай ҙа эш менән ни ҡыландырырға? Әгәр игеҙәк тә уның кеүек берәй тарафҡа сәфәр сыға ҡалһа, эштәр хана, брат.

Шулай ҙа телефондан булһа ла шылтыратып иҫкәртмәй ярамаҫ. Зәбиргә әйтергә кәрәк, берәй ниндәй сәбәп уйлап сығара торһон. Ул яҡҡа Кәбировичтың башы хәтәр шәп эшләй торған.

Айвар кәрәкле һандарҙы йыйып бер-ике һүҙ әйтеүгә, теге яҡтан Зәбирҙең үтә лә ғәжәпһенгән тауышы ишетелде:

— Айв... — Ни сәбәптәндер, трубканы элделәр. Егет аптыраған ҡиәфәттә бер-ике минут уйланып торғандан һуң, ҡабаттан һандарҙы йыйып ҡараны. Әммә, күпме

генә маташмаһын, теге яҡтан ҡыҫҡа гудоктар ғына ишетелә ине.

## 7

Бер-ике көн төшөнкө ҡиәфәттә йөрөгәндән һуң, Зәбиргә күңелсәк кәйефе ҡабат әйләнеп ҡайтты. Һе, ниндәйҙер бер бармаҡ башындай түрә эшем эйәһенә әйләнгән тип, балауыҙ һығып ултыр, имеш. Был яҡты донъя тарафтарында Зәбир ағағыҙ ике тиҫтә лә тағы ла ярты тиҫтә йыл йәшәгән әле, әммә ләкин һис ҡасан бойоғоп ултырғаны юҡ. Шундай уйҙар менән үҙен дәртләндереп, ул еңел көйҙө ауыҙ эсенән мөңгөрләй-мөңгөрләй кабинетына үтте. Юл ыңғайы күҙ ҡырыйы менән генә мөдир кабинетына күҙ һалды. Уның билдәле инде — тирләй-бешә ниндәйҙер ауыр мәсьәләне хәл итеп ятҡан көнө. Иртән сәғәт алтынан килгән, тиерһең. Дә-ә, быңдай темп менән барғанда, Биктимеров ағаҡайым, һиңә лә йылы урыныңды бушатырға тура килмәҫме икән. Миңә тимәгәйе, президентлыҡҡа дәғүә итһен. Элек дуҫ булып йөрөгәне генә хәҙер асыуға тейә.

Зәбир шулай ҙа кәйефенең боҙолоуына юл ҡуйманы — юлда осраған бер-ике кешенең ҡайһыһына төртмә телләнеп, ҡайһыһын көлдөрөп, үҙ урынына барып ултырҙы. Пеләш баш Шамил абыҡай командировкала, көнө буйы был бүлмәлә яңғыҙың һарғайып үлмәк кәрәк. Әллә кәйефләнеп алыу маҡсатынан телефондан берәйһенең башын бутап алырғамы? Үҙ уйына үҙе һөйөнөп, Зәбир эргәһендәге телефонға үрелде. Ауыҙ эсендә ниндәйерәк бутҡа бешеререн самалап, башына килгән тәүге һандарҙы йыя ғына башлаған ине, ишектән, оло башын кесе итеп, ғали йәнәптәре Айвар Айбулатович үҙе килеп инмәһенме! Зәбир Кәбировичҡа хәтәр етди ҡиәфәткә инеп, сейле-бешле түрәгә иғтибарын йүнәлтергә тура килде.

— Хәйерле иртә, Зәбир Кәбирович.

«Һай, һай, ил аҡһаҡалы тиерһең. Ҡалай эре сирттерә». Үҙе бөтөнләй башҡаны һайраны:

— Һаумыһығыҙ, Айвар Айбулатович. «Вәт шулай. Ике илдең етәксеһе осрашҡандан кәм түгел. Телекамералар менән музыка ғына етешмәй».

— Зәбир Кәбирович, һеҙгә бер һорау бар. Һеҙҙең диссертацияғыҙҙың темаһы нефть ҡалдыҡтарын промышленноста ҡулланыуға арналған түгелме?

— Эй, тап шулай. Минең уйымса, ярты йылдан уның өҫтөндәге эште тамамларға мөмкин. Ҡайһы бер иҫәпләүҙәрҙең генә осона сыҡҡанда.

— Ашыҡмағыҙ. Нефть ҡалдыҡтарын хәҙерге ысул менән промышленноста ҡулланғанда уның яртыһынан күберәге юҡҡа сығарыла. Бында башҡа юл кәрәк. Минең бөгөнгө иҫәпләүҙәргә нигеҙләнгәндә...

Телефон шылтыраны. Үҙенең кабинеты булғанлыҡтан, уға Зәбир үрелде. Мөдирҙең үҙ ихтыярынан тыш трубкаға ынтылыуына аҙаҡ ҡына иғтибар итеп өлгөрҙө ул.

— Айв... — Телефон төймәһенә баҫтылар. Зәбир ғәжәпһенеп тирә-яғына ҡараны. Ләкин бүлмәлә бер кем юҡ ине. Айвар Айбулатович тотоп ингән ҡағыҙҙар ғына ҡайһыһы өҫтәлдә, ҡайһыһы иҙәндә туҙышып ята.

## 8

Институт директоры Биктимеров, ике ҡулы менән башын тотоп, уйға батып ултыра. Әле генә секретары министерствонан килгән хатты ҡалдырып сыҡты. Уны уҡығас, Ирек Ғимранович бергилке иҫен йыя алмай ултырҙы. Аҙ ҙа түгел, күп тә түгел, министр урынбаҫары ҡул ҡуйған хат ине был.

Бер нисә көн элек Биктимеров янына йәш ғалим Илбәков ингәйне. Бик иғтибар менән тыңлаған ҡиәфәттә ҡалһа ла, директор уның һөйләгән хәбәренә әллә ни әһәмиәт бирмәне. Үҙ власын күрһәтергә тырышыу инеме был, әллә башҡа сәбәпме, ни булһа ла бик белдеклегә әйләнә башлаған ғалим ишаратына ярты сәғәт ваҡытын бер файҙаһыҙға был кабинетта ҡалдырып сығырға тура килде.

— Үҙ урынын белһен әле, эшем эйәһе булып бара,— тип һөйләнде Биктимеров ҡәнәғәтлек менән.

Илбәковтың һөйләгән хәбәренә әһәмиәт бирмәүенең икенсе, төп сәбәбе бар — был еүеш танау, кем-кем, Биктимеров үҙе йылдар буйына алға һөргән ғилми ҡараштың тап киреһен һөйләй. Ҡайҙан табылған аҡыллы баш. Уға юл биреп ҡара — күпме тир түгеп эшләгән диссертацияһын бына-бына яҡлайым тип торғанда, бөтә эште боҙоуы бар. Күпме йөрөргә мөмкин фән кандидаты булып.

Ҡасан ғына үҙе үрләткән ошо егеттең министерствоға барып етере башына ла килмәгән бит, исмаһам. Ә ундағы урынбаҫар... Иҫе китә уның һиндәге бәйләнештәргә, дуҫиштәргә. Хәҙерге заманда музейға экспонат итеп ҡуйырлыҡ әҙәмдәрҙең береһе инде, валлаһи. Фән ихтыяжы

тигәндән башҡаны белмәй, кешелек йәмғиәтендә лә йәшәмәй тиерһең.

Ошо кирегә бөткән урынбаҫар йәш ғалим Илбәковҡа һәр яҡлап ярҙам күрһәтергә, мөмкин булһа, йәшәү шарттарын яҡшыртырға ҡушып, ул күтәргән мәсьәләнең бик мөһим булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алғайны.

Теләһәң-теләмәһәң дә ҡушҡанды үтәмәй сара юҡ. Улай ғына түгел, еренә еткереп үтәгәнде лә күрһәтмәй ярамаҫ. Файҙаһы бер теймәһә бер тейер.

Ошондай йөҙ төрлө һорауҙарға бата-бата, Биктимеровҡа Илбәковты үҙ кабинетына саҡырып алырға тура килде. Тегеһе оҙаҡ көттөрмәне. Ипле генә итеп ишек туҡылдатҡас, ышанысլы баҫып, директор өҫтәле эргәһенә үтте.

— Һаумыһығыҙ, Ирек Ғимранович. Ни эшләп кинәт кәрәк булып киттем?

— Үтегеҙ, Айвар Айбулатович.— Биктимеров эшем эйәһе ҡиәфәтендә кабинеты буйлап арлы-бирле йөрөп алды. Унан кинәт кенә һорап ҡуйҙы.— Йәшәү шарттарың насармы ни?

— Әллә ни зарланған юҡ. Шулай ҙа дөйөм ятаҡ тормошо билдәле инде, маҡтарлығы юҡ.

— Улай икән... Солтановҡа квартира һорап барғайныңмы?

— Юҡ, ул уй башҡа ла кереп сыҡҡаны юҡ. Урынбаҫар менән беҙ һеҙҙең менән үткәндә тикшергән мәсьәләне ҡараныҡ. Һүҙ ыңғайында йәшәү шарттары тураһында һорай ҡуйҙы.

— Аңлашылды. «Дә-ә, бында бәйләнерлек түгел».— Унан, йөҙөнә ҡыҙыҡһыныу ғәләмәте сығарып, үҙ урынына килеп ултырҙы.— Ҡана, тағы ла ҡарайыҡ әле һинең ул яҙма-һыҙмаларыңды.— «Бәлки макулатура буйынса планды ла арттырып үтәрбеҙ» тип әйтеүҙән ул саҡ тыйылып ҡалды. Ғүмер баҡый үҙен тәрбиәле кешегә һанап, юҡ-бар ыҙғыштарға һис ҡасан да ҡатышмаған Ирек Ғимрановичты ошо йәш егет ни өсөндөр түҙемлегенән сығара ине. Әллә мин-минлегенә тейә, әллә уның алдында көсһөҙлөгөн танығыһы килмәй, ни генә булмаһын, Биктимеров үҙендә ҡурҡыу һымаҡ тойғо уяныуын бар көсөнә йәшерергә тырышты.

— Рәхим итегеҙ.— Айвар үткәндә уға күрһәткәндәренә өҫтәп, тағы ла егерме-утыҙлап бит һалды.— Быныһы һуңғы ике-өс көн эсендә башҡарылған иҫәпләүҙәр.

Биктимеров күҙлеген бер кейҙе, бер һалды. Ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә шул күләмдәге эштәрҙе башҡарыу өсөн кәмендә даһи булырға кәрәктер. Ни ҙә булһа аңларға

тырышып, ҡағыҙ биттәрен ҡат-ҡат ҡарап сыҡты. Улар нефть индустрияһын тотошлайы менән үҙ эсенә алған математик таблица кеүек башланып, нефть ҡалдыҡтарын нисек итеп бәрәкәтле файҙаланыу һәм ер-һауаны бысратмауҙың иң ябай ысулдарын күрһәтеүгә ҡоролған һандар менән тамамлана ине. Ошо тиклем хәбәрҙар булыр өсөн кәмендә ғүмер буйы һис туҡтамай китап кимереп ятырға кәрәктер. Биктимеров нисәмә йыл ошо институтты етәкләһә лә, нефть ҡалдыҡтарын эшкәртеүсе өлкәлә махсуслашҡас, башҡа тармаҡтарҙа һай йөҙөүен үҙе лә белә. Фән кандидаты булған директор бигүк төшөнөп етмәгән нәмәләрҙе ошо аспирантураға бер аяғы инһә, икенсеһе тышта торған егет белһен, имеш. Ошоға кем ышаныр?

— Ә һин, ҡустым,— Ирек Ғимранович егеткә өҫтән һөҙөп ҡарап алды,— быларҙың бөтәһен дә үҙең иҫәпләп сығарҙыңмы? Кемдеңдер хеҙмәтенән сәлдермәнеңме, тиеүем.

Тегеһенең йөҙө үҙгәрешһеҙ ҡалды.

— Ә уны сәлдереүҙән ни фәтеүә? Был бит дөйөм кешелек өсөн. Ярылып күҙгә күренеп ятҡан нәмәләрҙе урап үтергәме ни?

— Ярай, аңлашылды. Хеҙмәтеңде иғтибарһыҙ ҡалдырмабыҙ. Министерствола ла белгәс... — Биктимеров егетте ишек тупһаһына тиклем оҙатыу яғын ҡараны. Уның менән бәхәсләшеү минут һайын ауырлаша барыуын тойоу уға һис ниндәй ҙә ҡыуаныс килтермәй ине. Илбәковтан ул эшкә ни өсөн сәйер йөрөй башлауының сәбәбен хатта һорарға онотто. Тегеһенең эш урынына йә таң һарыһынан, йә төн уртаһында килеүе, ҡайсаҡ көндәр буйы юғалып тороуы Биктимеровты һағайта ине. Ләкин өҫтәлендә ятҡан бер өйөм иҫәпләүҙәргә төбәлгән Ирек Ғимрановичтың был хаҡта төпсөнөргә һис ниндәй теләге ҡалманы.

— Дә-ә, фатир юлламай сара юҡ,— тип ҡуйҙы ул уфтанып.

9

— Туй көнөн аныҡ билдәләргә ваҡыттыр бит, һылыуым.

Ҡулдарын күкрәгенә ҡаушырып, фонтанға төбәлгән Гөлүҙә тертләне. Унан, Айварҙың янында булыуын да онотоп, үҙ уйҙарына бирелеүенә уңайһыҙланғандай, егеткә ҡарап йылмайҙы. Ләкин был көләслек интегеп кенә башҡарылған театр битлеген хәтерләтә ине. Бына нисәнсе көн инде ул егеткә бөтөнләй айырылышырға кәрәклеген,

улар араһындағы ихласлыҡ һәм һөйөүҙең бөтә барыуын әйтергә йыйына, ләкин булдыра алмай. Әле генә ошоно башҡарырға көсө етмәйәсәген ул бар булмышы менән аңланы. Йөрәге менән тоя: Айвар кемгәлер ғашиҡ булған. Ниңә һуң улайһа тураһын ғына әйтеп, боролоп китеп бармай? Ҡыҙ үҙе әллә нисә тапҡыр ошоно эшләргә ынтылды, әммә ихтыяры етмәне. Тапҡыр телле һәм шаян һөйгәненең нилектән сәйер һәм үтә ҡатмарлыға әйләнеүен төшөнә алмай. Гөлүзә үҙен белә — башҡаса Айварҙы яратҡан һымаҡ бер кемгә лә ғашиҡ була алмаясаҡ. Их, ошонда барыһын да һыҙып ташла ла онот ине. Ғүмергә...

— Һылыуым, һин яуап бирмәнең...

— Һин ни хаҡта? Ә, эйе, туй тигән инең бит әле... Һин уның кәрәге ҡалған тип уйлайһыңмы?

— Нисек кәрәге ҡалған? Беҙ бит һөйләшкәйнек. Һинең тыуған көнөңдә.

— Ә, эйе... Тыуған көндә... — Ошо көн иҫенә төшкәс, Гөлүзә кинәт тертләне. Бәй, бөтә был үкенеүҙәр, күҙ йәштәре тап ошо көндән башлана түгелме һуң? Уның күҙ алдына йорт ишеге алдында ерҙә ултырған Айвар килде. «Мин бит әле генә килеп төштөм, Гөлүзә. Сәғәт етелә бөтөнләй сит ҡалала инем...» Булмаҫ! Ә өс сәғәт буйына ул кем менән бейене, кемгә кейәүгә сығырға вәғәҙә бирҙе? Айварға түгелме ни?

Гөлүзәнең йөҙө күҙ алдында үҙгәреүен егет шунда уҡ тойҙо. Ни сәбәптәндер ҡараштарын ситкә төбәне.

— Ярай, миңә китергә кәрәк. Үҙең ваҡытын билдәләргә ҡыйынһынаһың шикелле, ике аҙнанан үткәрербеҙ. Әҙерләнергә ваҡыт етерлек. Ризаһыңмы?

Их, ни тип кенә аңлатырға йөрәгеңдә ҡайнағанды? Юҡ, тиһә, унан ғына бәхетле буламы, ризамын, тиһә, ҡайҙа барып төртөлөр тормош һуҡмағы...

Ҡыҙҙың өндәшергә теле әйләнмәне, керпеген генә ҡаҡты. Айвар уның ирендәренә һаҡ ҡына ҡағылып алды ла ҡабаланып үҙ юлына китеп барҙы.

## 10

Һис ҡасан нилектән үҙ ғүмеренең берҙән-бер, ҡабатланмаҫ булыуы хаҡында уйлағаны юҡ ине Айварҙың. Бына ул донъяға килде, ике тиҫтәнән ашыу ғүмер йәшәне. Ошо ваҡыт эсендә кемдәрҙе генә һөйөндөрмәгәндер, кемдәрҙе генә асыуландырмағандыр. Үҙен белә-белгәндән өләсәһенең йыуанысы, таянысы булды. Хәҙер ғәжәплә-

нэ — әгәр ни сәбәптәндер ул донъяға килмәгән булһа, өләсәһенең ғүмере ҡайһы яҡҡа үҙгәрер ине икән? Айварҙың донъяла булыу мөмкинлеге хаҡында уйлап та ҡарамай, нимәнәндер йыуаныс табып йәшәй бирерме, йә иһә яңғыҙлыҡтан биҙгән әҙәм хәлендә ғүмер һөрөр инеме... Әйтеүе ауыр. Ошо егерме өс йыл йәшәү дәүерендә үҙе менән осрашҡан, уның ғүмерендә саҡ ҡына юлаҡ ҡалдырған кешеләрҙе һанай китһәң, бик ҙур һан килеп сығыр кеүек. Әгәр ул донъяла булмаһа, был кешеләр яҙмышында ниҙер етмәҫ ине.

Донъяның ниндәй теүәл гармонияла булыуын һуңғы ваҡытта ғына төшөндө егет. Бөйөк көс ихтыяры менән тыуҙырылған тормошта яуызлыҡ һәм изгелек, һөйөү һәм нәфрәт үҙ урынын биләй. Һәр кеше үҙенә тәғәйен ғүмерҙе, ҙур бер оркестрҙың айырым ҡылында уйнағандай, булдыра алған тиклем йәшәй. Ошо нәҙек кенә ҡылға ике музыкант дәғүә итә башлаһа, ни булыр ине икән?..

Һуңғы ваҡытҡа тиклем Айвар был донъяла үҙенә бирелгән урынға ул ғына хужа икәнлегенә ышанып, илкеһалҡыраҡ йәшәне. Юҡ, тормоштоң һуңғы ҡатламында булманы ул. Әммә башҡара алырҙай эштәрен үтәргә иренгән, кешегә изгелек эшләрҙәй мәлдә йөҙөнә вайымһыҙлыҡ билдәһе сығарып үтеп киткән мәлдәре аҙ булманы. Игеҙәктең һис юҡтан пәйҙә булыуы Донъяны Барлыҡҡа Килтереүсенең уға үпкәһе түгелме икән? Иғтибар иткәне юҡмы ни егеттең — кешеләр күңелен мүк баҫа, вайымһыҙлыҡ биләй. Быларҙың барыһы ла әҙәмдәрҙең йәшәү ҡәҙерен белмәүендә, үҙҙәренә бирелгән ғүмерҙең һанаулы икәнен онотоуында...

...Ошондай уйҙар менән Айвар ауылдан ситтә ултырған йорттоң тупһаһын аша атланы. Сәйер, ғәжәберәк кешеләр, ни өсөндөр, башҡаларҙан ситтәрәк йәшәүсән була. Был уларҙың үҙенсәлегенә бәйлеме, йә иһә әҙәмдәрҙең ятһыныбыраҡ ҡарауы быға сәбәпсеме — аңлауы ауыр.

Егеттең әҙәпле генә ишек туҡылдатыуына эстән «үтегеҙ» тигән тауыш ишетелде.

Бынан өс йыл элек был тупһаны бик тиҙ кире атларға мәжбүр булыуын онотмаған Айвар шикләнеп кенә эскә үтте.

Бөхтә итеп йыйыштырылған өйҙөң төпкө бүлмәһендә сәстәре ярайһы салланған, әммә үҙ-үҙен тотошонда мәртәбәлелек, мөһәбәтлек ярылып ятҡан олпат кеше кушеткала ултырып китап уҡый ине. Айвар ингәс, ул күҙлеген сисеп, шундағы тәпәшәк өҫтәлгә һалды һәм инеүсегә ҡаршы атланы. Уның өҫтөндә затлы йорт хала-

тын күреп, Айвар бер аҙға албырғабыраҡ ҡалды. Ғөмүмән, ауыл ерендә был ят күренеш, ир-егеттәр өсөн, әлбиттә. Шулай ҙа уның ҡаушауы тиҙ үтте.

— Һаумыһығыҙ. Үтергә мөмкинме?

— Рәхим итегеҙ.

Хужа Айварға юл кейемдәрен сисеп, кәрәк-яраҡтарын урынлаштырырға булышты, унан сәй ҡуйып ебәрҙе һәм түргә уҙырға ымланы. Күптән түҙемһеҙлек менән көтөп торған тиерһең. Үҙенә булған сәйер мөнәсәбәтте аңлай алмай, егет шундағы ултырғыстарҙың береһенә барып ултырҙы.

Сал сәсле, ҡайһы яғы менәндер үҙен ихтирам итергә мәжбүр иткән, тормоштоң әсеһен-сөсөһөн байтаҡ татыған уйсан йөҙөнән ирҙәргә хас сабыр матурлыҡ китмәгән был кеше алдында Айварға ни өсөндөр ҡыйын ине. Ләкин Асраров бик итәғәтле булып сыҡты. Еңелсә ҡапҡыларға әҙерләп, сәй табыны яһағас, егетте өҫтәл эргәһенә саҡырҙы.

— Шунан, ни йомош менән килеп сыҡтың, ҡустым?

— Минең исемем Айвар, Айвар Илбәков. Институтта ғилми хеҙмәткәр булып эшләйем, командировкаларға йыш йөрөргә тура килә.— Егет һуңғы сәфәренән һуң булған ваҡиғалар хаҡында ентекләп һөйләп бирҙе. Иң ҡурҡҡаны — ҡаршыһындағы һөйкөмлө сал ирҙең уны аңламауы ине. Ләкин уныһы, баш һелкә-һелкә, егеттең бәйән ҡылыуын иғтибар менән тыңлай бирҙе, йөҙөндә әллә ни үҙгәреш сағылманы.

Егет тынды. Бүлмәлә бер аҙға тынлыҡ урынлашты.

— Һым... Бынан бер ике-өс йыл элек минең янда булып киткәйнең түгелме?

Айварҙың ғәжәпләнеүҙән бер ҡашы үргә сөйөлдө.

— Эйе... Һеҙ шуны иҫләйһегеҙме?

— Иҫләмәйсә. Һиндә бик көслө биополе бар, ҡустым. Биоэнергетик ҡулса. Үткәндә һине бороуын борҙом, һуңынан үкендем. Әгәр ҙә саҡ ҡына ваҡытымды бүлгән булһам, ошо хәлгә лә тарымаҫ инең. Эх, был ваҡыт, ваҡыт... — Асраров бер аҙ уйға батып ултырҙы, унан урынынан тороп Айварға ҡулын һуҙҙы.— Таныш булайыҡ, ҡустым, 1-се ранг капитаны Дамир Абдулла улы Асраров.

Айварҙың ҡулынан саҡ шәшкеһе төшөп китмәне.

— Нисек? Капитан? Һеҙ быны ни эшләп миңә генә әйтергә булдығыҙ... Дамир ағай?

— Эх, ҡустым... Ҡайһы яҡтандыр беҙ икебеҙ бер үк бәлә ҡорбандары... Ҡасандыр минең мөкиббән киткән карабым, һөйәктәрҙе иретерҙәй йылы көньяҡ ҡалаһында яҡты һәм ҙур фатирым, яратҡан ҡатыным, илгәҙәк ҡы-

ҙым бар ине. Һәм бер мәл килеп улар барыһы ла юкҡа сыҡты...

Асраров оҙаҡ ҡына бер нөктәгә төбәлеп ултырҙы, уфтанып ҡуйҙы һәм артабан дауам итте:

— Минең был хаҡта һис кемгә лә һөйләгәнем юҡ, ҡустым, хатта иң яҡын дуҫтарыма ла. Һин — тәүге кеше. Тик шуны иҫеңдә тот: бында ишеткәнең бында ҡалырға тейеш. Һиңә ышанырға мөмкиндер бит?

— Әлбиттә, ул яҡтан хафаланмаһағыҙ ҙа була.

— Мин йәш сағымда бик бәхетле инем. Яратҡан эшем бар, эштән талсығып ҡайтыуымды өҙөлөп көткән ғаиләм бар. Тик бер генә уңайһыҙлыҡ: диңгеҙ буйлап сәйәхәткә сыҡҡанда оҙон-оҙаҡ ҡатыным менән ҡыҙым янында була алмайым. Ни эшләйһең, диңгеҙҙе лә, ерҙе лә берҙәй ярата инем. Айҙар буйына һыу эсендә булғас, үлеп һағындырыла. Ошо артыҡ яратыуым да фажиғәнең башы булғандыр инде, күрәһең.— Асраровтың күҙҙәре дымланды. Айвар уның был тарихты бер кемгә һөйләмәгәнен әле генә бар булмышы менән аңланы.— Шулай сит илдән ҡайтып киләбеҙ. Айҙан артыҡ тыуған тупраҡты күргән юҡ. Минең экипаждағы һәр кешене икешәр-өсәр кеше ҡаршылай. Ҡатыным менән ҡыҙымды, күпме генә эҙләһәм дә, таба алманым. Йөрәккә әллә ниндәй шом йүгерҙе. Эштәрҙе ярҙамсыма тапшырҙым да телефонға ташландым — һис кем алмай. Ашығыс такси яллап, өтөлә-ҡырыла фатирым ҡаршыһында төшөп ҡалдым. Их, ошо көн... Килеп инһәм, ҡатыным тыныс ҡына диванда ята, ә тәне... һыуыҡ. Йоҡо дарыуының бихисап ҡаптары тирә-яҡҡа туҙышҡан. Минең кейемдәр унда-бында бәргеләнгән, әйтерһең, әле генә сисәнмен дә һалып сыҡҡанмын...

Шаңҡып байтаҡ ултырҙым, әммә ниҙер эшләргә кәрәк. Бәхеткә, күршеләр изге кешеләр ине, ҡатынымды тәрбиәләүҙе бөтөнләй тиерлек үҙ өҫтәренә алдылар. Үтә шаңҡығайным шул. Ҡыҙымдың яҙмышын белеү бөтөнләй аяҡтан йыҡты. Урта мәктәпте тамамлап килгән ҡыҙым аварияға эләгеп һәләк булған. Миңә быны, ғәжәпләнеп, ышанмай ғына һөйләнеләр. Йәнәһе, мин уны күмгәндә булғанмын. Таныш-белештәрҙең үҙ-үҙҙәрен тотошонан шуны аңланым: мин сәйәхәттән әле генә түгел, бынан ике аҙна элек ҡайтҡанмын, имеш. Тәүҙә аңлатып ҡараным, унан ҡул ғына һелтәнем — уның ҡайғыһымы ни. Кинәт мейемдә бер нәмә телеп үткәндәй булды: бынан өс көн элек телефон аша ҡатыным менән һөйләшкән инем бит. Уның тәүҙә иҫе китте, минең сәйәхәттә икәнгә ышанмай ҡат-ҡат һораны, ун көн самаһы инде өйҙә булыуым хаҡында ниҙер аңлатып маташты. Ни эшләптер, ҡатыным-

дың хәбәренә әллә ни әһәмиәт бирмәнем. Һөҙөмтәһе ҡайтҡас, үҙ күҙҙәрем менән күрҙем дә инде. Ҡыҙы һәләк булған, бында тип йөрөгән ире ҡайтып етмәгән — ҡатын-ҡыҙ йөрәгенә күп кәрәкме. Бигерәк ярата ине шул... Үлә килеш тә иҫ киткес матур ине минең Эльвирам...

Тәүге теләгем: мин булып фатирымда йәшәп ятҡан әҙәмде тотоп бәргеләү булды. Ләкин ул үтә һаҡ ине, эҙенә баҫтым тигәндә генә төтөн кеүек иреп юҡҡа сыға торҙо. Эльвираның уны минән айырмауын иҫләп, был теләгемдән һүрелдем. Эйе, был ғәҙәти кеше түгел ине. Йонсоп, ҡоро һөлдәгә ҡалғас, бер күрәҙәсегә барҙым. Ул минең күҙемде асты ла инде. Күрәҙәсе игеҙәкте эҙәрләү теләгенән һүрелдереп, уны үҙемә буйһондорорға кәңәш бирҙе. Нисек эшләргә икәнлеген өйрәтте. Рәхмәт уға, изге күңелле кеше булып сыҡты. Үҙенең серҙәрен минең кеүек ябай кеше менән уртаҡлашты. Өҫтәүенә, һиндә бик ҙур мөмкинлектәр ята, файҙалана ғына белмәйһең, тип тә ҡуйҙы.

Был ваҡытҡа мин карап менән етәкселек итеүҙән киткәйнем инде. Капитандың күңеле һил булырға тейеш, ә миндә ысын-ысындан шторм бара ине.

Сәйәхәттән ҡайтыуыма, дөрөҫөрәге, тормошомдоң аҫты-өҫкә килеүгә өс ай тигәндә, кескәй генә сумаҙан тотоп, тыуған ҡаламды ташлап киттем. Мәңгелеккә... Мин унда ғүмерҙә әйләнеп ҡайтасаҡ түгелмен. Атайымдың тыуған яғына юл тоттом. Ике йыл тау-таш араһында, кеше аяғы баҫмаған ерҙә, йәшәнем. Тап ошонда изге күрәҙәсе кәңәштәренең файҙаһын күрҙем дә инде. Әкренләп кенә игеҙәгем миңә буйһондо.— Асраров көрһөнөп алды. Ул, янында ултырған егетте бөтөнләй онотоп, үҙ алдына ғына һөйләнгән кешене хәтерләтә ине.

— Һеҙ урманда икәүләп йәшәнегеҙме ни?

Асраровтың йөҙөндә тәүге тапҡыр йылмайыу сатҡылары ҡалҡты.

— Эй, ҡустым, әгәр мөмкин булһа, беҙ һине икәүләп ҡаршылар инек.— Унан етди ҡиәфәткә инде.— Тәүге ҡағиҙә, һин уны бер минутҡа ла хәтереңдән сығарырға тейеш түгелһең: игеҙәк менән күҙгә-күҙ осрашырға ярамай, юғиһә ул юҡҡа сығасаҡ, улай ғына ла түгел, үҙеңдең теге донъяға китеүең бар.

— Мин уның менән осрашҡаным бар, берҙе генә лә түгел, икене.

— Бәхетең, йөҙгә-йөҙ тап килмәгәнһегеҙ. Тарихта әҙәм заттарының игеҙәктәре менән осрашыу факттары бихисап. Рус батшабикәләре Анна Иоановна менән Елизаветаны ғына алайыҡ. Иғтибар ит: уларҙың игеҙәктәре

Батша һарайында бер генә тапҡыр пәйҙә булалар, ә бер нисә көндән батшабикәләр теге донъяға юллана.

— Һәр ваҡыт үлем менән тамамланамы ни?

— Юҡ. Ҡайһы саҡ кеше был турала шикләнмәй ҙә йәшәй бирә, ә игеҙәге уның урынына ерҙә ирәбе баҫып йөрөп алыуҙан баш тартмай. Билдәле шәхес Ленинды ғына алайыҡ.

— Пролетар юлбашсыһы Лениндымы? — Айвар, үҙ ҡолаҡтарына ышанмай, ҡабатлап һораны.

— Әйе, уның нимәһенә ғәжәпләнәһең? Ул да кеше. Бына шул, Ленин Горкала ял иткәндә, игеҙәге машина менән уның эш урынына килә. Һаҡһыҙ-ниһеҙ, билдәле. Ошо хаҡта юлбашсының үҙенән һорағас, ул аптырауға ҡала. Ғәжәпләнмәҫлекме, был ваҡытта бит ул бер ҡайҙа ла сыҡманы!

— Миңә ни эшләргә һуң, Дамир ағай? — Айвар Асраровтың һөйләгән хәбәрен ауыҙын асып тыңлаһа ла, үҙенең ниндәй ауыр хәлгә тарыуын минут һайын асығыраҡ аңлай бара ине.

— Йә ошо тормошоңдо игеҙәгең ҡулына тапшырып, уны үҙеңә буйһондороу өҫтөндә бер-ике йыл янып-бешәһең, йә...

— Әйтеп бөтөрөгөҙ, мин барыһына ла әҙер.

— Ҡаршыһына сығып, күҙҙәренә төбәләһең. Ул томан шикелле ирен юҡҡа сығасаҡ һәм башҡаса күренмәйәсәк. Әммә үҙеңдең дә һуңғы көнөң булыуы бар.

## 11

Әкрен генә ишек шаҡыйылар. Асраров Айварҙы информацион-энергетик ҡулса хаҡындағы материалдары менән таныштыра ине. Килеүенә инде ике көн, әммә ул һаман бер нәмәне аңлап бөтә алмай: нисек инде бер кешенән һәр күҙәнәгенә тиклем оҡшаш икенсе шундай кеше айырылып сыға ала? Асраров уны нимә ти әле? Астраль игеҙәк, йәнәһе. Ҡайҙан тапҡандар ул һүҙҙе...

Туҡылдатыу йәнә ҡабатланды. Был юлы нығыраҡ шаҡыйылар.

— Инегеҙ.

Ишектә урта йәштәр самаһындағы ир кеше күренде.

— Мөмкиндер бит, Асрар ағай. Бөгөн ҡыҙым янына килермен, тигән инегеҙ, онотоп ҡуймағыҙ, зинһар. Һеҙ дауалай башлағаны бирле хәле еңеләйһә лә, һаман һауығып бөтә алмай.

— Борсолмағыҙ, теүәл бер сәғәттән булырмын. Шартты онотмағыҙ: бер кем ҡамасауларға тейеш түгел.

— Әлбиттә, әлбиттә. Ҙур рәхмәт һеҙгә.

Инеүсе артынан ишек ябылды. Асраров йәнә ниндәйҙер һыҙмалар яһарға кереште. Бер аҙҙан ҡул аҫтындағы ҡағыҙ битен Айварҙың алдынараҡ күсерҙе:

— Бына күрәһеңме, ҡустым, кеше һүрәте. Иғтибар ит: кеше контурын төрлө төҫтәрҙәге ҡулса уратып алған. Ошо була инде информацион-энергетик ҡулса. Биоэнергетик һүрәт туранан-тура дөйөм кешелекте, ә, бәлки, Ер шарын һәм Йыһанды урап алған биоэнергетик ҡулсаға барып тоташа. Шуның өсөн уға үткәндәге, хәҙерге һәм киләсәктәге хәбәрҙәрҙе белеү бер ни тормай.

— Дамир ағай, минең игеҙәктең бөтә институтты шаҡ ҡатырған сығыш яһауы шунан буламы ни, улайһа?

— Әлбиттә, башҡаса ҡайҙан булһын. Бына күрерһең, ҡайтыуыңа тағы әллә ниндәй күстәнәстәр әҙерләп ҡуйыр әле.

Икенсенән, астраль игеҙәк өсөн ара алыҫлығы тигән төшөнсә юҡ. Ул Ер шарының һәр нөктәһенә минут та ваҡытын юғалтмай барып сыға ала... — Асраров сәғәткә күҙ төшөрҙө.— Бер аҙға бүленеп торабыҙ, ҡустым. Минең дауалау ваҡытым яҡынлаша.

Асраров төпкө бүлмәгә үтте. Ун, унан егерме минут ваҡыт үтте. Ниһәйәт, ярты сәғәт булды. Дамир Абдулловичтың сирле ҡыҙ янына китерен көткән, етмәһә, имсе рөхсәт итһә, уға тағылырға ниәт тотҡан егет түҙмәне, шым ғына баҫып төпкө бүлмәнең ишеге янына килде. Ишектең шаршау ярығынан һаҡ ҡына күҙ төшөрҙө. Ғәжәпкә, Асраров тыныс ҡына диванда ята ине. Күҙҙәре йомоҡ, үҙе ҡымшанмай ҙа. Һы...

Бер сәғәттәй ваҡыт үтте. Ниһәйәт, төпкө бүлмәнән ныҡ ҡына йонсоған, күҙҙәре ҡыҙара төшкән Асраров сыҡты.

— Дамир ағай, теге ауырыу ҡыҙ янына мине лә алмаҫһығыҙмы? Әрһеҙләнә, тимәһәгеҙ...

— Әрһеҙләнерлеге ҡалманы инде. Мин унда булып ҡайттым. Бер аҙнанан, сирҙең ни икәнен дә белмәй, йүгереп йөрөйәсәк.

— Нисек? — Ошо ғәжәп кешенең хәбәрҙәрен тыңлап, мөғжизә менән ысынбарлыҡ араһындағы сикте инде күрмәй башлаған Айварға йәнә ғәжәпләнергә тура килде.

— Шулай, мин ул бала янына игеҙәгемде ебәрҙем. Ни өсөн тиһеңме? Уның мөмкинлектәре сағыштырғыһыҙ күп.

— Дамир Абдуллович... — Айвар, теләгәнен әйтергә

батырсылыҡ итә алмай, бер аҙ икеләнеп торҙо.—Ә миңә уны күрергә мөмкинме? Һеҙҙең игеҙәкте тим.

Асраров бер аҙ уйланып торҙо.

— Мөмкин генә түгел, һин уны күрергә тейешһең. Һис кем минең бер үк ваҡытта икәүгә әйләнә алыуымды белмәй, белмәүҙәре лә хәйерлерәк. Ләкин һин күрергә тейешһең. Ошо мәл киләсәгең, һине уратып алған яҡындарыңдың яҙмыштары, бәлки, хәл ителәләр. Әйткәндәй, берәй сирҙән йонсомайһыңмы?

— Сирҙән... Һис тә иҫләмәйем, ауырып ятҡаным юҡ. Хәйер... Һуңғы арала нервылар бик ҡаҡшаны. Үҙемдең күләгә менән мораль көрәштә бирештем, шикелле.

— Аңлашылды. Тимәк, нервы системаһын тәртипкә килтерергә кәрәк. Бөгөнгә үк булмаҫ, һәр сеанс иҫ киткес энергия талап итә. Иртәгә ҡарарбыҙ.

## 12

Көн кискә һарҡҡан. Асраровтың өйҙән сығып китеүенә ярты сәғәт ваҡыт үтте. Хәҙер ошо уҡ йортҡа уның игеҙәге килергә тейеш. Айвар юрый ишектәрҙе бикләне, тәҙрәләрҙең япмаларын тартты. Байып барыусы ҡояштың һаран нурҙары асыҡ ҡалған урындан һирәк-һаяҡ үтеп инһәләр ҙә, бүлмә ярым ҡараңғы.

Айвар диванда ултыра. Нисек кенә үҙен тыныс тоторға тырышмаһын, күңелендә әллә ниндәй ҡурҡыу ҡатыш ҡыҙыҡһыныу. Үҙ уйҙарына бирелеп, егет ойой башлағайны инде. Әммә кинәт уң яғында һиҙелер-һиҙелмәҫ ҡыштырлау ишетеп, тертләп күҙен асты. Тәҙрә янында егеткә арты менән Асраров баҫып тора ине. Бынан ярты сәғәт элек Дамир Абдуллович ниндәй кейемдә сығып китһә, бының өҫтөндә лә шул уҡ әйберҙәр. Һы... Информацион-энергетик ҡулса ниндәйҙер киҫәксәләрҙән тора, ти. Кейеме хужа кейгән әйберҙәрҙең ниндәйҙер ғәжәйеп сағылышы буламы ни улайһа? Уларҙың ҡыштырлауын нисек аңлатырға? Иҙәндә атлап йөрөүе реаль — шығыршоғор итеп ҡала. Башың етмәҫ, уйлай башлаһаң.

Хәйер, уның нимәһенә ғәжәпләнәһең — бер нисә аҙна буйына Айварҙы игеҙәгенән айыра алмайҙар. Был да ҡатырға һүрәт түгелдер инде, улайға китһә.

Астраль игеҙәк әкрен генә Айварға яҡынлашты. Егеттең йөрәген шом баҫты, бүлмәнән сығырға уҡталып ҡуйҙы. Уның урынында, моғайын, һәр кем ошондай тойғолар кисерер ине. Бер үк ваҡытта кеше лә, шул уҡ мәл

кеше лә түгел нәмә менән япа-яңғыҙың бер бүлмәлә ҡал әле...

Әкренләп егеттең хафаланыуы үтә башланы, улай ғына ла түгел, бөтә тәнен иҫ киткес еңеллек, ләззәт солғап алды. Мейеһен бер мәл сатҡы шикелле ялтлап уй ярып үтте: эйе, астраль игеҙәк уға шундай психик тәьҫир яһай ине.

— Миңә серем итергә мөмкинме? Ниңәлер йоҡо баҫа.— Сит кеше ишетеүҙән ҡурҡҡан шикелле, бышылдап ҡына һораны Айвар.

— Әлбиттә, миңә һинең йоҡлауың кәрәк тә инде.— Тауышы, нисектер, күкрәктән сыҡҡан кеүек йомшаҡ, бәрхәт.

Егеттең башы әкрен генә һалынып төштө, тәне быуынһыҙланды. Күпме ваҡыт ул ошо хәлдә ҡалғандыр. Аңына килеүенме, әллә йоҡонан уяныуынмы тойоп, Айвар әкрен генә күҙҙәрен асты. Бүлмәлә һис кем юҡ, ишектәр һаман да элеүле. Тик тәҙрә ҡорғандарының береһе генә шыуҙырылған, унан ергә һылаша башлаған эңер күренә.

Айвар үҙендә аңлатып бөткөһөҙ күтәренке кәйеф тойҙо. Хеҙмәттәштәре һәм Гөлүзә әгәр ҙә уны хәҙер күрһәләр, төньяҡҡа сәфәр сыҡҡан Айварҙы шунда уҡ танырҙар ине. Әйтерһең дә, һуңғы аҙналарҙа башҡа һыймаҫлыҡ хәлдәр булып бөтмәгән. Ләкин тынысланырға иртәрәк ине әле.

## 13

— Һиңә ашығырға кәрәк, туғаным.

Айварҙың бында килгәненә ун көн тигәндә, Асраров егеткә тәүге тапҡыр ошо һүҙ менән өндәште. Эйе, был һүҙҙәрҙә хәҙер тулы дөрөҫлөк бар. Һуңғы мәл нисек яҡынайғандарын улар үҙҙәре генә белә.

— Әллә берәй көтөлмәгән хәлме, Дамир ағай?

— Шулай тиһәң дә була. Бер-ике көнгә һуңлаһаң, яҙмышыңдың бөтөнләй икенсе яҡҡа әйләнеп китеүе бар. Астраль игеҙәгеңә хужа түгелһең — бөтә бәләң дә ошонда.

— Дамир ағай, әйтегеҙ әле, әлеге мәлдә ҡайҙа ул минең игеҙәк?

— Ҡайҙа булһын, беҙҙең менән. Икенсе төрлө әйткәндә, ул һинең уй-хыялың, күңелең, теләгең. Иғтибар иткәнең бармы, һуңғы ваҡытта ниҙер хаҡында уйлана башлаһаң, иҫ киткес арыу, бушлыҡ тояһың. Был астраль игеҙәк һинән айырылды тигән һүҙ.

— Ни өсөн хәҙер генә барлыҡҡа килде һуң ул? Игеҙәктең булыу мөмкинлеге ошоғаса төшөмә лә инеп сыҡҡаны юҡ ине.

— Һиндәге биополеның үҫеше юғары нөктәгә еткән. Аэропортта ултырғанда бер үк күренеште ҡат-ҡат күҙ алдыма килтерҙем, тиһең бит. Тимәк, үҙең дә һиҙмәҫтән, информацион-энергетик ҡулсаны шунда йүнәлткәнһең.

— Ә, эйе... — Егеттең күҙ алдына бынан бер нисә аҙна элек булған көн килде. Ниндәй тыныс, бошмаҫ булған Айвар ул ваҡытта. Күрәһең, кеше ни тиклем аҙ белә, шул тиклем тынысыраҡ йәшәй. Сәйер... Шулай ҙа ул һорамай түҙмәне.— Беләһегеҙме, Дамир ағай, мин бындай хәлдәр тураһында һис ишеткәнем юҡ ине. Ысынлап.

Асраров көләмһөрәне. Унан, урынынан тороп, шкафтан бер-ике китапты ҡулына алды.

— Ишеткәнең булһа ла, иғтибар итмәҫ инең. Ғәҙәти кеше өсөн ул бары уйҙырма ғына. Бына ҡара, әкиәт китаптары. Бер кем дә уларҙы ысынға ҡабул итмәй. Ә уйлап ҡараһаң...

Астраль игеҙәк бөтә кешелә лә бар, ҡустым, әммә төрлөсә кимәлдә. Ҡайһы берәүҙәрҙең кинәт кенә ниндәйҙер асыш яһауы, үҙҙәрен ни көтөүен һиҙемләүе — ошо информацион-энергетик ҡулса эше.— Асраров һуңғы һыҙмаларын, бер-ике йоҡа дәфтәрҙе Айварға һуҙҙы.— Ошоларҙы үҙеңә һалып ал, туғаным, кәрәге тейер. Ни эшләргә белә алмай йонсоғанда, күҙ һалырһың.

Айвар әйберҙәрен йыйып бөткәйне инде. Эргәһендә торған ултырғысҡа ултырып, йорт эсенә тағы бер тапҡыр күҙ йөрөтөп сыҡты. Үҙен юғалттым тигәндә табырға өйрәткән яғымлы йорт менән хушлашыу бер аҙ моңһоу ине.

— Ярай, Дамир ағай, һаубуллашайыҡ. Рәхмәт һеҙгә, минең өсөн бик ҙур эш эшләнегеҙ.

— Кәрәкмәй, рәхмәттәр һуңынан. Иң ауыры һинең башлана ғына. Ҡыйын булһа, был йортҡа юлды онотма. Йомаға тиклем ҡайтып етергә тырыш.— Һуңғы һүҙҙәрен Асраров баҫым яһап әйтте. Аңланы шикелле егет, боролоп ҡулын болғаны, күңелендә ел-дауыл уйнаһа ла, ихлас йылмайҙы. Бына боролоштан юғалды, ләкин йылмайыулы йөҙө һаман да ни өсөндөр Асраровтың күҙ алдынан китмәй. Унан, нилектәндер, был күренеште ҡатынының диванда һалынып төшкән һап-һалҡын ҡулы алыштырҙы. Үҙен оҙатып ҡалған ҡыҙы урынына ҡәбер өйөмө ҡаршылауын иҫләп, иңрәп ҡуйҙы.

— Өлгөрһөн ине, бары өлгөрһөн...

— Мин һеҙҙе аңламайым, Айвар Айбулатович.— Биктимеров егеттең һаулыҡ һорашыуына яуап та бирмәҫтән, тура һөжүмгә күсте.— Нисек инде етәксе башығыҙ менән бер кемгә бер ни хәбәр итмәйсә, аҙна буйына ҡайҙалыр юғалып йөрөргә мөмкин?

— Мин...

— Аҡланмағыҙ, кәрәкмәй. Теләк булғанда, бер эшкә йөҙ сәбәп табырға мөмкин. Һәм ниндәй ваҡытта бит әле. Фатир асҡысын ҡулға төшөргәс, эшкә сыҡмасҡа ла ярай.

Айвар, ниндәй фатир хаҡында һүҙ барыуын аңларға тырышып, һорарға уҡталғайны, Биктимеров ҡул ғына һелтәне. Уның ярһыуы бер аҙ үткәйне.

— Аңлатма яҙығыҙ, ҡалғандары һуңынан.— Үҙе шуның менән һүҙҙең тамам булыуын белдереп, эргәһендәге телефонға үрелде.

Айварға ғәйепле ҡиәфәт менән директор кабинетынан сығып китергә тура килде. Эйе, ун көн буйына эшкә сыҡмауының ғәйебе ҙур, бәлки, командировка юлларға кәрәк булғандыр, бәлки, ял алырға. Ни булһа ла, дөрөҫ эшләмәне Айвар, быныһы хаҡ. Икенсенән, бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймаған кеүек, бер тормошта ике Айвар йәшәй алмай. Донъялары һил кешеләргә ошоно нисек аңлатаһың. Етмәһә, Биктимеров ниндәйҙер фатир менән башты ҡатыра.

Әһә, тегендә Зәбир тора түгелме һуң?! Бына кемдең башында ҡайғы юҡ. Донъяға көлөп тыуған, әхирәткә киткәндә лә ауыҙы йырыҡ, тел осонда берәй мәрәкә булыр, валлаһи. Бында дуҫы әллә нисә ут араһында яңғыҙы ҡалып бәргеләнгәндә, ниндәйҙер нәҙекәйбилдең күңелен күтәреп, бөтә коридорҙы яңғыратып хахылдай.

— Сәләм, Зәбир дуҫ. Һинең көлкө минуттарыңды бүлдерергә тура килә, ашығыс эш бар. Ә һеҙ, туташ, ғәфү итегеҙ.— Айвар Зәбирҙе ҡултыҡлап, ситкәрәк алып китте.

— Һаумыһығыҙ, Айвар Айбулатович.— Зәбирҙең йөҙө хәтәр етди ир заты ҡиәфәтен алды.

— Бәй, бәй, Зәбир, һине әллә шайтан алыштырҙымы? Бындай етди лә була алаһыңмы ни һин, белмәгәйнем.

— Һин үҙең, Айвар... — Айбулатович тип әйтеүҙән тыйылды,— шайтан алыштырған шикелле. Шаяртып һүҙ ҡушып булмай, күҙлек аша һөҙөп ҡарай ҙа... вай, вай!

— Эх, Зәбир, Зәбир... — Айвар ауыр итеп көрһөндө. Ни эшләргә, дуҫына барыһын да һөйләргәме, юҡмы? Яңғыҙы ғына йырып сыға алырмы һуң ул был тиклем

ауыр мәлде? — Бына нәмә, Зәбир, һин бөгөн кискә минең янға кер әле, барыһы хаҡында һөйләшербеҙ. Мин бөгөн генә юлдан ҡайттым, ятаҡханаға кереп тә урағаным юҡ.

— Һин ниндәй ятаҡхана хаҡында һөйләйһең? Ә фатирың?

— Фатир? Ниндәй фатир?

Зәбир уға ғәжәпләнеп ҡараны, ғүмерҙә үпкәләгәне булмаһа ла, йөҙөнә рәнйеү бәреп сыҡты:

— Ярай, ятаҡта тек ятаҡта, әгәр тупһанан аша үткәрһәләр... — Унан ҡырт боролоп үҙ кабинетына инеп китте.

Айвар, алйот шикелле, коридор уртаһында баҫып ҡалды. Унан ныҡлы ҡарарға килгән кеше тәүәккәллеге менән баҫҡысҡа йүнәлде.

Ғәжәпләнәһе мәлдәре алда булған икән егеттең. Үҙ бүлмәһенә күтәрелеп, ишек йоҙағы менән булашҡан мәлдә, уныһы эстән тартҡанға асылып китте. Унда ғәжәп сибәр йәш ҡатын күкрәк балаһын күтәреп баҫып тора ине.

Айвар эскә уҡталған еренән шып туҡтап уға төбәлде, ҡатын иһә үҙ сиратында һораулы ҡарашын уға йүнәлтте.

— Һеҙгә кем кәрәк?

— Мин ошонда йәшәйем, был минең бүлмәм.

— Нисек? Һеҙҙең фатир алғанығыҙға аҙнанан ашты бит инде.

Биктимеров менән Зәбирҙең фатир тип тел сарлауҙарының мәғәнәһе Айварға шунда ғына барып етте. Һе, бына мәсьәлә — ул уны нисек табырға тейеш?

— Һеҙ белмәйһегеҙме, ниндәй адрес буйынса икән? — Ошо һүҙҙәр теленән ысҡынғас ҡына, бынан да алйот хәбәр булмауын хатта үҙе лә аңланы.

Йәш ҡатын тәүҙә ни әйтергә белмәне, унан йөҙөнә борсолоу бәреп сыҡты:

— Һеҙ әллә сирләп киттегеҙме, Айвар Айбулатович?

— Юҡ, юҡ, ғәфү итегеҙ...

Шунда торған дипломатын алып, таушалған аҙымдар менән тышҡа йүнәлде.

## 15

Гөлүзәләрҙең ишек төбөндә Айвар күпмелер ваҡыт икеләнеп баҫып торҙо. Ошо йорт хәҙерге мәлдә уның өсөн һуңғы терәк ине. Эшләгән ерендә донъяның аҫтыөҫкә килде, йәшәгән еренең ҡайҙа икәнен хатта үҙе белмәй. Әгәр донъялағы иң ҡәҙерле кешеһе яҡты йөҙ күрһәтмәһә, нишләр?

Ишекте Гөлүзәнең әсәһе Зәйтүнә апай асты. Айварҙы күргәс, йөҙө яҡтырып китте.

— Әйҙә, әйҙә, үт, улым. Гөлүзә үҙ бүлмәһендә.

Егет шым ғына баҫып ҡыҙҙың бүлмәһенә йүнәлде. Ишек ярығы аша һаҡ ҡына күҙ төшөрҙө. Күптән күргәне булмағанға, ҡыҙҙы тәүҙә ситтән күҙәтәһе килә ине егеттең. Уныһы иһә эске күлдәктән килеш кенә ҙур көҙгө алдында өйөрөлөпмө-өйөрөлә. Башына ни нәмә эләктереп алғанын Айвар тәүҙә аңлай алмай аҙапланды, унан Гөлүзә ап-аҡ ҡалпаҡты рәтләберәк кейеп, ебәк япманы иңбашына төшөргәс кенә барып етте — эйе, был кәләштең туй ваҡытында кейә торған баш кейеме ине. Айвар тәүҙә иҫенә килә алмай торҙо, унан ни эшләгәнен белмәй, ишекте бәрә асып ҡыҙ янына атылып инде. Гөлүзә көтөлмәгән хәлдән ҡаушаны, әммә Айвар икәнен күргәс, тынысланды, шулай ҙа йәһәт кенә халатын кейә һалып алды.

— Айвар! Ни эшләп шул тиклем дөбөр-шатыр йөрөйһөң? Һаумы, йәнем.

— Ни эшләнең һин? Был нимә? — Егет ҡулына баяғы баш кейемен эләктереп алды.

— Абау! Тәүҙә һаулыҡ һораш.— Ҡыҙ елбәҙәкләнеп егетте урап үтте лә, тәҙрә янына баҫып, ҡулдарын күкрәгенә ҡаушырҙы.— Һин бөгөн күктән төштөңмө ни? Туй кейеме, нимә булһын?

— Туй кейеме?! Һин кейәүгә сығаһыңмы? Кемгә? Ҡасан?

Гөлүзәнең тыныслығы әкренләп юғалды, һөйкөмлө йөҙөнә тимгел-тимгел ҡыҙыллыҡ бәреп сыҡты.

— Әсәй! Кил әле бында!

Ҡамырлы ҡулдарын таҫтамалға һөртә-һөртә, Зәйтүнә апай был яҡҡа сыҡты, бүлмәлә ни хаҡында әңгәмә барғанлығын аңларға тырышып, әле береһенә, әле икенсеһенә ҡараны.

— Ни булды, балалар?

— Әсәй, ишетәһеңме, Айвар минең кейәүгә сығаһым хаҡында бер ни белмәй.

— Нисек?

— Үҙенән һора.— Гөлүзә илап ебәрмәҫ өсөн быларға арты менән боролоп, тәҙрәнән ниҙер күҙәтә башланы.

— Нисек инде был, Айвар? Туй көнө килеп еткәс, әллә ниндәй хәбәрҙәр һөйләй башланығыҙ. Әллә күпме ҡунаҡ саҡырылған, иртәгә никахты теркәйһе бар.

— Аңлатығыҙ әле миңә, ниндәй туй һуң был? Кемгә сыға Гөлүзә?

— Етте! — Үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡыҙ әсе итеп ҡысҡырып ебәрҙе.— Күпме мыҫҡыл итергә мөмкин мине? Туй бул-

маясаҡ! — Гөлүзә йүгереп сығып, залдағы диванға йөҙ түбән ҡапланды.

— Ҡыҙым, нисек инде шулай кинәт кенә? Кеше алдында оят бит.

— Ишетәһем дә килмәй.— Гөлүзә үкһеп илай башланы.

Һуңғы минутта ғына әсә менән ҡыҙҙың ни хаҡында һөйләүен Айвар аңлап ҡалды. Эх, алйот, алйот, бөгөн, бер көн эсендә генә, күпме иҫәрлек ҡылды. Күрәһең, ситтә аҙна-ун көн йөрөп, һаҡлыҡ кәрәклеген онотоп ташлаған. Асраров янында ҡайһылай еңел булған уға. Ошо изге кеше янынан китеүенә ике көн үтмәне, әллә күпме алйотлоҡ эшләне...

Гөлүзә бит уға, Айварға, кейәүгә сығырға йыйына. Дә-ә, игеҙәк тик ятмаған бында. Ярай әле ҡайтып өлгөрҙө. Ҡыҙҙы шул тиклем рәнйеткәне өсөн Айварға бик ауыр ине. Ул, әкрен генә баҫып, уның янына килеп ултырҙы. Зәйтүнә апай, эштең бер аҙ көйләнә төшөүен күреп, быларға ҡамасауламаҫ өсөнмө, залдан сығып китеү яғын ҡараны.

— Гөлүзә! Гөлүзә, ғәфү ит мине.

Ҡыҙ өндәшмәне. Әллә ниндәй эске әрнеү менән һулҡылдап ҡуйҙы.

— Гөлүзә, кәрәкмәй, илама. Аңлашайыҡ, барыһын да асыҡлап һөйләшәйек. Ни өсөн шулай килеп сыҡҡанын мин һиңә аңлатырмын.

Ҡыҙ ятҡан еренән торҙо, өйрәнелгән хәрәкәттәр менән сәсен артҡа һыпырҙы, унан егеткә ҡараны. Уның ғорур ҡараштарында иҫ киткес нәфрәт ине. Егет бер аҙға хатта телһеҙ ҡалғандай булды.

— Аңлашайыҡмы? Бына бер ай инде мин һине аңларға тырышам. Ләкин һәр үткән көн яфа ғына килтерә. Туйға бер аҙна ҡалды тигәндә юҡҡа сығыуыңды ла бәлки бер ыңғай асыҡлап китерһең?

Айвар ниҙер әйтергә уҡталды, әммә ҡыҙ уға ирек бирмәне.

— Бына шулай, ҡәҙерлем. Һәр нәмәнең сиге була. Мөхәббәт хаҡына тип быларҙың барыһына ла иғтибар итмәҫкә тырыштым, әммә хәсрәттән башҡа нәмә бирмәгән һөйөүҙең ҡәҙере шул сама ғына. Ә хәҙергә хуш!

Ҡыҙ ҡырт боролоп үҙ бүлмәһенә йүнәлде.

— Туҡта! Китмә, Гөлүзә! Бер генә һүҙ әйткәнде көт! — Айварҙың тауышы ялбарыулы ине. Әллә шуғамы, ҡыҙ бер аҙ йомшарҙы, туҡтап, егеткә ҡараны.

— Их, Айвар, Айвар... Ошо һүҙеңде бер-ике аҙна элек әйтергә ине һиңә. Хәҙер һуң инде. Хуш, бәхил бул...

«Хуш, бәхил бул... Хуш, бәхил бул...» Ошо һүҙҙәр ниңәлер бер туҡтауһыҙ егеттең мейеһен сүкеп тора. Был уның йәшлегендәге иң матур, иң яҡты хисе менән генә хушлашыу түгел, ә, бәлки, ғүмеренең теүәл бер осоро менән дә һаубуллашыу ине шикелле.

Эйе, бөгөн ул был ҡаланан, уға яҡын һәм вайымһыҙ, мөкиббән һәм ҡырыҫ булған кешеләр яҙмышынан мәңгегә китәсәк. Бәлки алыҫ-алыҫ киләсәктә ҡабат әйләнеп ҡайтыр, ләкин ул хәҙерге Айвар түгел, ә бөтөнләй башҡа кеше булыр. Бәлки был кеше ҡайтҡас, әле генә үкһеп ҡалған ҡыҙҙың күҙ йәштәре кибер, рәнйеп ҡалған дуҫтың күңеле аяҙыр. Улар өсөн ниҙер эшләргә өлгөрә алмаһа, изгелеккә мохтаж кешеләр аҙмы донъяла? Бөгөн иртән үҙе өсөн бәлә булып әүерелгән игеҙәген юҡ итеү өсөн ниҙәр генә ҡылырға әҙер түгел ине. Хәҙер инде быны эшләүҙең кәрәге ҡалманы, уның ғүмеренең тулы бер осорона, теләһә-теләмәһә лә, нөктә ҡуйылды. Тимәк, Яҙмыш шулай ҡуша. Иртәгәһе көндөң таңына ул бөтөнләй башҡа кеше булып аяҡ баҫырға тейеш.

...Көй өҙөлдө. Сөнки бер ҡылға ике оҫта дәғүә итә ине.

## ИКЕНСЕ КИҪӘК

### 1

«Сеү, кемдер килгән кеүек».

«Күрмәйһеңме ни, ана бит, урмандан килеп сыҡты».

«Һин был кешене таныйһыңмы?»

«Юҡ. Нисек уйлайһың, ул беҙҙең өсөн ҡурҡынысмы?»

«Яуызға оҡшамаған. Мин унан ниндәйҙер изге йылылыҡ тулҡындары таралыуын тоям».

«Шулай ҙа һаҡ булырға кәрәк. Кешеләрҙең төрлөһө бар».

«Ҡурҡма, тынысла. Яҡынайған һайын уның яман уйлы түгеллегенә инана барам. Ул беҙҙең дуҫ».

Урмандан сыҡҡан кеше кескәй генә аҡланда үҫкән сәскәләрҙең шыбырлашыуын ишетеп туҡтап ҡалды. Ситтәрәк ултырған һомғол ҡайынға һөйәлеп, уларҙы бер аҙ тыңлап торҙо. Йөҙөндә һөйкөмлө йылмайыу сатҡылары уянғайны — ошо иртәнге саф мәлдә сәскәләр серләшеүен тыңлау йәненә хозурлыҡ бирә.

Аллы-гөллө сәскәләр һөйләшеүен тыңлап оҙаҡ торорға тура килмәне был кешегә. Уның артынса уҡ тиерлек, урмандан апаруҡ үҫеп килгән айыу балаһы алпан-толпан килеп сыҡты. Кеше һөйәлгән ҡайын эргәһенә

килеп еткәс, өйрәнелгән хәрәкәттәр менән уның кеҫәләрен, ҡултыҡ аҫтарын еҫкәштереп ҡараны.

«Миңә бер нәмә лә килтермәнеңме ни? Тамаҡ ас таһа...»

Кеше көлөп ебәрҙе.

— Ну килештерәһең. Килеп етмәнең, тентеү яһап алырға ла өлгөрҙөң. Әйҙә инде улайһа, һыйлайым. Ялҡауға әйләнеп бөттөң һин, Йөнтәҫкәй, һис тә ашарға үҙең табырға теләмәйһең.

Кеше, айыу балаһын иркәләп ороша-ороша, һуҡмаҡ буйлап китте. Тегеһе ауыр кәүҙәһен еңел күтәреп, алдағы тауҙың итәгендә ултырған яңғыҙ йортҡа табан сапты. Был кеше урман ҡараусы Айвар ине.

Улар текәрәк урындарҙы урап үтә-үтә, йорт янына төшөп еттеләр. Айыу балаһы өй янында яңғыҙ ғына үҫеп ултырған олпат ҡайындың күләгәһенә барып ятты. Кем-кем, әммә ул хужаның аш урыны ҡайҙа икәнлеген яҡшы белә. Айвар айыуға һөт ҡойоп бирҙе лә шундағы өҫтәл эргәһендәге ултырғысҡа ултырҙы.

— Һәр саҡ тәмле нәмә булмай инде, Йөнтәҫкәй, һөт менән хушланһаң да бик һәйбәт,— тип һөйләнде ул. Бүрек ҙурлығындай ғына бер-ике аҙналыҡ айыу балаһына имеҙлек менән һөт эсереүе күҙ алдына килде. Эйе, ҡолас етмәҫлек ирәбе солоҡ ҡарағайы эргәһендә тапҡайны ул уны. Әсәһенең эҙенә төшә алманы — ҡан таптары буйлап күпме барһа ла, улары оло юлға еткәс юҡҡа сыҡты. Кемдәр эше булыуы аңлашыла инде. Йәл, Аҡморондоң бүре менән алышҡандан һуң йүнәлә алмай ятҡан мәле тура килде. Үҙенекен ысҡындырмаҫ ине зирәк эт.

Йөнтәҫкәйҙең әсәһе татлы тамаҡ булғандыр күрәһең. Әжәлен солоҡ ҡарағайы янында табыуы ла тиктән түгел. Быҡыһының да шәрбәт ризыҡ күрһә, күҙҙәре йылтырарға тора.

Айвар ҡояштың ярайһы ҡыҙҙыра башлауын күреп йортҡа керергә уҡталғанда, сәйер тойғоға буйһоноп, ҡайынға һөйәлде. Туҡта, туҡта... Һиҙгер аңы ниндәйҙер төжәп тауыштарҙы тота. Тик нимә был, ҡапылдан аңлауы ауыр. Айвар уй-кисерештәрен бер нөктәгә тупларға тырышты. Юҡ, булмай... Һилерәк урын кәрәк.

Айыу балаһы һөтөн эсеп бөткән, ялҡау баҫып урман эсенә инеп бара ине инде. Айвар ҡайын төбөнә барып ултырҙы, күҙҙәрен йомдо. Әкренләп кенә ҡоштар һайрашыуын ҡолаҡтары ишетеүҙән туҡтаны, әйтерһең дә, күләгәләге һиләҫлек тә юҡ, ел дә әкертен генә иҫмәй. Аңы уны көньяҡ йүнәлешкә, ниндәйҙер сәйер тауыштарға табан алып китте. Бына, бына... Һирәк-һаяҡ үҫкән

ҡайынлыҡ артта ҡалды, йырып сыҡҡыһыҙ ҡыуаҡлыҡ башланды. Бер аҙҙан бейек ҡарағайҙар үҫкән ҡуйы урман хасил булды. Кескәй генә аҡлансыҡ. Әһә, бына нимәлә икән бар хикмәт! Илауҙан буҫлығып бөткән, ныҡ ҡына бысранған, йонсоған ҡыҙ бала...

Айвар күҙҙәрен асты. Сәйерһенеп, яңғыҙ ғына ултырған йортона күҙ ташланы. Өйрәнеп бөтә алмай ул һаман үҙенең һәләтенә. Шуға күрә тәүге минуттарҙа ысынбарлыҡҡа ҡайтыу йәне өсөн дә, тәне өсөн дә бигүк яйлынан түгел. Ул урынынан торҙо, йәһәт кенә йортона кереп, мылтығын алып сыҡты.

— Аҡморон! Аҡморон! Һин ҡайҙа?

Мыҡты кәүҙәле эт ҡайһы араларыр хужаһының алдында пәйҙә булды, үҙенә эш сығыуына һөйөнөп, Айварҙың тирә-яғында бөтөрөлдө.

Көньяҡ йүнәлеш... Был яҡтараҡ була инде улайһа. Йөнтәҫкәйҙең күҙенә күренмәй ысҡыныу хәйерле. Былай ҙа ҡурҡышынан йәне саҡ сыҡмай ултырған баланың, айыуҙы күрһә, йөрәге ярылыр. Йорт-ҡураны ҡараштырып торорға ла кәрәк бит әле.

Улар айыу балаһы йүнәлгән яҡты урабыраҡ үтеп, көньяҡ йүнәлешкә сыҡтылар. Атлауы тәүҙә еңел ине, ҡыуаҡлыҡтар арта килә ипһеҙләнде. Айвар әле унда, әле бында абынғылай башланы. Аяғындағы итеге торған һайын ауырайҙы. Урман-тау араһында итекһеҙ йөрөп булмай шул, нишләйһең. Ярай ҙа Аҡморон йылғыр. Хужаһы ырата алмаған урындарҙа тирә-яҡты әллә ни арала урап, ҡабат килеп етә һала.

Ҡыуаҡлыҡтар кинәт тамамланып, ҡарағайлыҡ башланды. Ылыҫ еҫе күкрәктәргә тулды. Иртәнге һауа еңелсә башты әйләндерә. Аҡморондоң күренмәүенә хафалана башлаған Айвар уның байтаҡ төптәрәк тоноҡ ҡына өргән тауышын ишетте. Тимәк, нимәлер бар — юҡ-барға сәбәләнә торғандарҙан түгел ул эт. Урмансы шул яҡҡа ашыҡты. Бер аҙҙан ҡарағай ағастары һирәгәйә барып, алдында кескенә аҡлан хасил булды. Теге башта түмәр өҫтөндә бөрөшөп кенә бер бала ултыра. Таныш булмаған эттән шөрләп, ергә һеңерҙәй булып кесерәйгән. Айварҙы күргәс, тәүҙә ҡурҡыңҡыраны, унан күҙҙәрендә һөйөнөү ишараты хасил булды. Шулай ҙа ултырған урынынан торорға ашыҡманы — шикләнә ине, ахыры.

Айвар баланың алдына барып сүгәләне, тынысландырыр өсөн туҙып бөткән сәстәренән һыйпаны.

— Ҡурҡма, туғаным, мин һине эҙләп килдем. Тыныслан, хәҙер ҡайтырбыҙ, унан ата-әсәйеңде табырбыҙ. Тик ҡурҡма, йәме.

Күрәһең, һуңғы төндә башынан үткәндәрҙән саҡ аҡылын юймаған бала, күңеле тулып, илап ебәрҙе. Айвар уны арҡаһынан һөйөп йыуата-йыуата, ҡулына күтәргән килеш йортона табан юл тотто.

Был ете-һигеҙ йәштәр тирәһендәге һөйкөмлө генә ҡыҙ бала ине. Өҫтөнә кейгән кейеме йоп-йоҡа, күрәһең, һис тә урманға барырға йыйынмаған булғандыр. Төнөн ныҡ ҡына өшөгәнгә оҡшай, өҫтәүенә, аяҡ-ҡулдары серәкәй талауҙан ҡыҙарышып бөткән.

— Йә, туғаным, әйт әле, исемең нисек?

— Нәфисә.

— Шулаймы ни, бигерәк матур икән исемең. Нисек килеп сыҡтың был урман эсенә, аҙаштыңмы ни?

—Беҙ ҡыҙҙар менән урман ситенә һөтлөгәнгә килгәйнек. Шунан йәшенмәк уйнаныҡ. Тапмаһындар тип, ҡыуаҡтар араһына йәшенгән инем, аҙаҡ үҙҙәрен юғалттым. Ҡайһы яҡтан килгәнде онотҡан да ҡуйғанмын. Кисә иртәнән бирле... Мин асығып бөттөм, ағай... Ҡурҡтым...— Бала тағы ла илап ебәрҙе. Айвар был юлы бер ни ҙә өндәшмәне. Йыуатып арҡаһынан ғына ҡаҡты. Сабыйҙы ярһытмаҫ өсөн, башҡаса һорамаҫҡа булды ул. Яйлап барыһы ла асыҡланыр әле.

Ҡайтып еттеләр. Йорт алдында ирәбе йөрөгән йөнтәҫ айыуҙы күреп, ҡыҙ Айварға сытырлатып йәбеште, кәүҙәһе менән ҡалтыранып уға һыйынды. Был бала өсөн урманда үткәрелгән төндөң эҙһеҙ китмәүен шунда ғына асыҡ аңланы егет. Тағы бер-ике тәүлек япа-яңғыҙы шунда ҡалырға тура килһә, ни менән бөтөрөн әйтеүе лә ауыр.

— Ҡурҡма, ҡурҡма, Нәфисә, ул аҡыллы айыу. Һинең кеүек ҡыҙҙар менән дә уйнай ул. Бына сәй эсеп йылынып алһаң, үҙең дә күрерһең.

Ләкин ҡыҙға тамағын туйҙырғас та айыу менән уйнарға тура килмәне. Айвар баланы саҡ-саҡ ашатырға ғына өлгөрҙө, тегеһе өҫтәл артында ултырған килеш, күҙҙәре йомолоп, бер яҡҡа ҡыйшайҙы. Йоҡоһоҙ үткәргән төндөң касафаты ине был. Айвар сабыйҙы күтәреп караватҡа алып барып һалды, йәйге йылы көн булыуға ҡарамаҫтан, өҫтөнә ҡалын итеп япты. Ныҡ ҡына тирләһә, төнгө һалҡын ул тиклем һиҙелмәй үтеп китер, бәлки.

Һаташа-һаташа йоҡлап ятҡан бала янында ултырған Айвар үҙ уйҙарына сумды. Ғәжәп... Ғүмер тигәнең үтә генә. Ошо урманда йәшәүенә лә биш йылдан ашып китте. Ниҙәр генә булып бөтмәне был йылдар һуҙымында. Кинәт кенә өләсәһе донъя ҡуйҙы. Әллә ни ауырыуҙан да йонсомай ине, бер ҡараһаң. Был донъяла ейәһе ризыҡтары бөткәндер. Хоҙайҙан бирелгән тиклем ғүмерҙең артығын

һорап алып булмайҙыр, күрәһең. Унан... Гөлүзә тормошҡа сығып китте. Кеше тигәнең барыһына ла өйрәнә икән. Шартлап һынырҙай булғайны ул мәлдәрҙә Айвар, әммә яйлап яралар уңала төштө, яҙмышына күнгән һымаҡ булды. Ошо хәлдәрҙән һуң үҙ эсенә бикләнде егет. Айварҙың урман ҡараусы булып китеүе күптәр өсөн көтөлмәгән хәл ине. Өмөтлө йәш ғалимдың ҡапыл ғына ошо эште һайлауы баш китерлек хәл булып күренгәндер. Әкренләп өйрәнделәр шулай ҙа, әммә сәйерһенеп ҡарауҙан туҡтаманылар. Ысын сәбәбен бер кем дә белмәй ине шул.

Үҙендәге ҡөҙрәтте Айвар бынан ике йыл элек тойҙо. Әле лә хәтерендә, төн уртаһында ҡапыл ғына уянып китте. Уяулы-йоҡоло ята торғас, карауаттан да тормаған килеш, ҡайҙалыр урман эсенә барып сыҡҡан һымаҡ булды. Тәне еп-еңел, ҡауырыйммы ни! Кемдәрҙер рөхсәт ителмәгән урында йыуан-йыуан ҡарағайҙарҙы ауҙара, арыраҡ йөк машинаһы тора... Ҡапыл аңына килгән һымаҡ булғас, Айвар карауатынан һикереп торҙо. Бергилке аңҡы-тиңке ултырҙы. Ни булып ятҡанын аңлағас, йәһәт кенә һикереп торҙо, ашыҡ-бошоҡ кейенде лә, мылтығын алып, урман эсенә ташланды. Ну кәрәген бирҙе лә һуң Айвар әлеге ҡороҡҡостарҙың. Ғүмерҙә лә хилаф эш ҡылмаҫтай һабаҡ алдылар. Тик бер нәмәне генә аңлай алманы улар — урман ҡараусы нисек итеп төн уртаһында уларҙы килеп баҫа алды? Төн убыры шикелле тәүлек әйләнәһенә урман һаҡлап йөрөмәйҙер бит...

Шул мәлдән һуң Айварҙың ҡулы аҫтындағы урмандарҙа ҡырын эш ҡылыусылар кәмене, сөнки саҡ ҡына боҙоҡлоҡ ҡылып ятҡан мәлде лә ҡарауылсы һағалап ҡына тора ине. Бер аҙҙан зыян итеүселәр бөтөнләй тигәндәй юҡҡа сыҡты, сөнки был тирәлә уралыу барыбер файҙаһыҙға — башыңа бәлә генә алырһың. Ә Айварҙың иһә үҙенә ышанысы нығығандан-нығыны — ул тантана итә ине. Ниһәйәт, бөтә юғалтыуҙарға өс йыл ғүмер уҙғас, уға игеҙәге буйһондо! Ниндәй ҡөҙрәткә эйә булыуын үҙе генә белә Айвар! Әммә уны ғүмерҙә лә яман эшкә йүнәлтмәйәсәк ул.

Шулай ҙа һуңғы мәлдәрҙә болоҡһобораҡ йөрөй Айвар. Күңеле мөһимерәк эш һорай. Ошо урман киңлегенә генә һыймай, ҙурыраҡ донъяға ынтыла уның булмышы. Егеттең хәҙерге мәле ташҡын алдынан һағайыбыраҡ ҡалған йылғаны хәтерләтә ине.

...Баланың ыңғырашыбыраҡ ҡуйыуы Айварҙы уйҙарынан арындырҙы. Һипкелле йөҙөнә, йомшаҡ сәстәренә

яратып ҡараны. Уның да үҙ сабыйын һөйә торған ваҡыты ла бит... Яҙмыштыр инде.

Ҡайҙалыр был баланың ата-әсәһе ут йоталыр. Нисек табырға йәшәгән ерҙәрен? Нәфисә үҙе асыҡ итеп әллә аңлата ала, әллә юҡ. Айвар үҙ уйҙарынан үҙе көләмһөрәп ҡуйҙы. Нисек асыҡларға, имеш, ул белмәһә, тағы кем белергә тейеш? Егет күҙҙәрен йомдо, башын артҡа ташлап стенаға һөйәлде. Ҡамасауламаһындар ғына...

...Бына иң яҡындағы Аҡсатыр ауылы. Айвар урам буйлап килә... Бесән ваҡыты шул, әллә ни кеше күренмәй. Әһә, ана тегендә, йорт алдындағы эскәмйәлә бер әбекәй ултыра. Хәл-әхүәл һорап китмәй булмаҫ.

— Һаумыһығыҙ. Иҫәнлек-һаулыҡ нисек, әбекәй?

— Аллаға шөкөр, улым. Үҙең ни хәлдәһең?

— Ал да гөл, әбей. Әйтегеҙ әле, һеҙҙең ауылда Нәфисә исемле 7-8 йәштәр тирәһендәге ҡыҙ бармы?

— Эй, улым. Беҙҙә бала-саға бармаҡ менән генә һанарлыҡ шул. Тик Нәфисә тигән баланы һис тә иҫләмәйем.

— Ярар, әләйһә, һау булығыҙ.

Аҡсатырҙан әллә ни алыҫ ултырмаған, унлап ҡына йорто булған Кәкүк ауылында ла үҙенә кәрәклене ишетмәне Айвар. Урманға терәлеп үк ятҡан Байгилдегә һуғылырға булды. Ул, әлбиттә, алыҫыраҡ, шулай ҙа кем белә. Көнө буйы аҙашып ҡаңғырып йөрөгән бала бер урында ғына тапанмағандыр бит.

Айвар тағы урам буйлап атлай. Бында хәл башҡасараҡ. Төркөм-төркөм кешеләр өйөлөшөп торғаны күренә, бер ситтәрәк милиция машинаһы ултыра. Тә-әк... Тимәк, бында ниҙер бар. Ҡырынлатып ҡына һорамай ярамаҫ. Айвар ситтәрәк торған бер апайға барып һүҙ ҡушты.

— Һаумыһығыҙ, ниҙер булғанмы әллә, апай?

— Һау ғына. Ишмырҙаның бәләкәй ҡыҙы юғалды бит, урманға ғына барған булғандар. Сәүиә бахырым ҡайғынан иҫен юя инде.— Апай эйәге менән ике-өс йорт ашаһына ымлап күрһәтте. Унда, ысынлап та, кешеләр күберәк күренә ине. Илап буҫлығып бөткән урта йәштәр тирәһендәге ҡатынды бисә-сәсә йыуатып маташа. Күрше-тирәләге ауыл кешеләре менән әллә ни аралашып бармаһа ла, был ғаиләне белә Айвар. Ишмырҙа ошондағы колхозда бригадир булып эшләй, Сәүиәне иһә һәр саҡ шаян йылмайып йөрөүенән хәтерендә ҡалдырғайны. Әле был ҡатын үҙ йәшенән кәмендә ун йылға ҡартыраҡ тойола.

Башҡа мәғлүмәт кәрәкмәй ҙә ине инде. Айвар әкрен генә үҙ асылына ҡайтты. Күҙҙәрен йомоп бер аҙ ултырғас, тынысланғандай булды. Күкрәген тултырып тын алды. Ике үлсәмдәге донъяла бер юлы йәшәүе ауыр, әлбиттә.

Шулай ҙа тыныс ҡына ғүмер йөгөн тартыуға ҡарағанда, атылып һүнгән йондоҙҙай йәшәү нығыраҡ тарта уны.

Егет күҙҙәрен асты, һәм был ваҡытлы булды — Нәфисә уянғайны. Үҙенең бында нишләп ятҡанын аңлай алмай аҙапланды, шунан Айварҙы күргәс, барыһы ла хәтеренә төштө, шикелле.

— Уяндыңмы ни, Нәфисә? Бигерәк арығанһың икән, көтөп хәлдәрем бөттө.

— Ағай, миңә айыу менән уйнарға яраймы? Ул тешләмәйме?

— Нәфисә, уйнар инең дә, тик бына ата-әсәң бик борсола бит әле. Нишләйбеҙ, ҡайтабыҙмы ауылға?

— Ҡайтайыҡ, ағай. Мин бик-бик һағындым атайым менән әсәйемде. Әсәйем миңә һәр саҡ ҡыҙыҡлы әкиәттәр һөйләй, ә атайым һыбай йөрөргә өйрәтә..

— Айыу менән икенсе килгәндә уйнарбыҙ, яраймы?

— Ярар, ағай.

Айвар ҡыҙҙы күтәреп алды. Улар таныш һуҡмаҡҡа барып төшкәндә, ҡояш төшлөккә ауышҡайны инде.

## 2

Байгилдегә барыу өсөн Айвар үҙе белгән иң тура юлды һайланы. Баланы күтәреп атлау бигүк яйлынан булмаһа ла, бер сәғәттәй ҙә ваҡыт үтмәне, улар ауылдың үҙәк урамына килеп төшкәйнеләр. Бая күргәндән хәлдәр башҡасараҡ тойола — төркөм-төркөм торған кешеләр юҡ, өй алдарында арлы-бирле бисә-сәсәнең генә һөйләшеп торғаны күҙгә салына.

Урман ҡарауысы туп-тура Ишмырҙаның йортона юл тотто. Әллә ни арала күрә һалып, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға йорттарынан йүгерешеп сыҡты. Ҡыҙыу бесән ваҡыты булыуға ҡарамаҫтан, сабыйҙың юғалыуы, күрәһең, бөтә ауылды аяҡҡа баҫтырған.

Нәфисәнең әсәһе уларҙы йорттарына барып етмәҫ борон уҡ күреп ҡалды. Дөрөҫөрәге, бер өйөр бала-саға шау-шыу ҡубарып, Айварҙан алда барып еткәйне. Төндө йоҡоһоҙ үткәреүе әллә ҡайҙан күренеп торған әсәһенең абына-һөрөнә улар янына йүгереүен күреү менән, Нәфисә, Айварҙың ҡулынан һыпырылып төшөп, уға ташланды.

— Әсәй!

— Балам! Ҡайҙа ғына юғалдың һуң? Ҡотомдо алдың бит, йөрәккәйем... Рәхмәт инде һиңә, туғаным. Нисек кенә күңеленде күрәйем һуң?

— Бер ни ҙә кәрәкмәй, апай, рәхмәт. Сабыйҙың иҫәнһау табылыуы үҙе ҙур шатлыҡ.

— Сәй эсеп булһа ла кит, ҡустым. Былай ғына ебәреү килешмәй бит. Бөтә ауыл ҡубарылып Нәфисәне эҙләргә сыҡҡан. Табып килтергәнеңә күрә һыйлы табын күрһәтмәгәнемә күрше-күлән алдында йөҙөм яҡты була алмаҫ, туғаным.

Айвар, бер аҙ икеләнеп торғандан һуң, риза булды. Ашығыуы ашығыу менән, икмәктән өҫтөн булырға ярамай. Әсәһенә урмансы ағайҙың ҙу-ур айыуы хаҡында өтәләнеп һөйләгән Нәфисә артынан өйгә табан атланы. Күрше-күлән, бисә-сәсә еңел һулап, йорттарына таралышты.

Улар бейек итеп һалынған ҡупшы йорттоң эсенә үттеләр. Хужабикәнең өй эшенә бөгөн ҡулы теймәгәнлеге әллә ҡайҙан ҡысҡырып тора — урын-ер күңел һалмай ғына йыйыштырылған, ситтәрәк бер өйөм йыуылмаған табаҡ-һауыт ултыра.

— Туғаным, ғәфү итерһең инде.— Хужабикә үҙе лә уңайһыҙланды шикелле.— Кисә кистән ҡаңғырып, ни тотһам, шул ҡулдан төшөп бара.

— Борсолмағыҙ, апай.— Айвар тәүге тапҡыр ихлас йылмайҙы. Ҡатындың табаҡ-һауыт өсөн ҡыҙарыныуы мәҙәк тойолдо. Әгәр ҙә ат башындай йоҙаҡ эленгән ишек аша ла Айварҙың рентген нурылай үтә алыуын белһәләр, ни эшләрҙәр ине икән? Ҡурҡырҙармы, йә иһә күрә алмай башларҙармы? Нисек булһа ла, икеһе лә еңелдән түгел. Вәт, донъя... Шулай ҙа уның кәйефе күтәрелеп китте. Нәфисәгә өндәште.

— Йә, Нәфисә, миңә үҙеңдең ҡурсаҡтарыңды күрһәтәһеңме?

— Әйҙә, ағай, минең уйынсыҡтарым күп ул. Тик мин хәҙер ошо айыу балаһын ғына нығыраҡ яратасаҡмын. Урман ағай, ҡара әле, ул һеҙҙең теге ҙур айыуға оҡшаған да инде, ибет?

Нәфисә, үҙе лә һиҙмәҫтән, Айварға исем йәбештереп ҡуйҙы. Урман ҡараусы был һүҙгә көлөмһөрәне, әммә айыу хаҡында ишетеү менән, ни өсөндөр, йөрәге сәнсеп алды.

Табын артына ултырғас, сәнсеү тағы ҡабатланды. Хужабикә һәм Нәфисә менән бөгөнгө көндөң мажаралары хаҡында һөйләшеү был тойғоно бер аҙға ғына баҫты, әммә хәбәр бүленеп торғанда йәнә ҡабатланды. Ниндәйҙер көс Айварҙы урман яғына тарта ине. Сәйҙе ашыҡ-боштоҡ ҡына эсеп, йыйына башланы.

— Ярай, апай, үпкәләмәгеҙ, оҙаҡ ултыра алмайым. Үҙегеҙ аңлайһығыҙ, эш күп.

— Билмән әҙерләрмен тигән инем бит әле.

— Рәхмәт, апай, икенсе ваҡытҡа ҡалһын. Һис тә баш тартмаҫ инем, тәмле ризыҡ һағындырған.— Егет ихлас йылмайҙы — был һүҙҙәрҙе ул ысын күңелдән әйтте.

— Инеп йөрө, туғаным.

— Әлбиттә.

Ауылды үтеп урманға барып ингәнсе шәп атлап барҙы, йорттар күренмәй башлағас, йүгерергә үк кереште. Бер аҙҙан хәле бөтөп ҡарағай ағасына һөйәлде — үргә табан йүгереүҙән ҡатыуы сыҡҡайны. Ни булһа ла булыр — Айвар ағас төбөнә ултырҙы, күҙҙәрен йомдо... Бына ул йортона барып етте. Әһә, бына ни өсөн йөрәге һыҙлаған икән! Нәфисәне эҙләп урманға сыҡҡан ирҙәр ҡарауылсының өйөнә килеп еткәйнеләр. Күрәһең, бала хаҡында ниҙер белешергәме, йә иһә ярҙам һорапмы, был яҡҡа ҡайырылған булғандарҙыр. Ләкин тау итәгендә хужаларса ирәбе йөрөгән апаруҡ ҙур айыу балаһын күргәс, ни өсөн килгәндәрен дә онотоп бөткәнгә оҡшайҙар. Йөнтәҫкәйгә нимә, кешегә өйрәнгәс, иҫе лә китмәй тегеләргә ҡарап ултыра, ҡасыу уйында ла юҡ. Аҡморон ғына хәлде аңлап алған — айыу балаһына ебәрмәҫкә тырышып, әле тегеһенә, әле быныһына ташлана. Мылтыҡ тотҡан ун бишләп ирҙең иҫе китә бер эттең сәңкелдәүенә — яйлап ҡына икеһен дә бер урынға ҡыҫырыҡлайҙар.

Эт менән айыуҙы урталағы кескәй генә түңәрәктә ҡалдырып, ян-яҡтан урап алғайнылар. Ҡайһы бер ҡыҙыу баштар тереләй тоторғамы, йә иһә атып алырғамы, тип хәбәр ҡуйырта. Һүҙ, әлбиттә, айыу хаҡында, этте иҫәпкә алған кеше лә юҡ.

— Йә, ағай-эне, һунар итеп буламы?

Бер ҡулын биленә таянып, икенсеһе менән ҡайын олонона тотонған урман ҡараусыны күреп, ир-ат уңайһыҙланып китте, бер-береһенә ҡараштылар.

— Туғаным, беҙ һиңә йомош менән килгәйнек бит әле.— Ишмырҙа алға атланы.— Минең кесе ҡыҙ...

— Беләм, һөйләмәһәң дә була. Нәфисәне мин ауылға алып ҡайттым инде, эҙләп тороуҙың кәрәге ҡалманы.

— Таптыңмы ни? Ай, рәхмәт, туғаным, мең йәшә. Ә беҙ бында һинең хужалығыңды тапап йөрөйбөҙ. Үпкәләмә инде.— Ишмырҙа, уңайһыҙланып, кәпәсен бер кейҙе, бер систе.

— Ниңә, айыуҙы ҡалдырабыҙмы ни? — Башҡаларға ҡарағанда йәшерәк, әллә ниндәй уҫал ҡарашлы егет әйтте

бынығын. Айвар уны танымай ине, күрәһең, ситтән кил гәндер.

— Ни һөйләйһең һин, Солтан, күҙле бүкәнһеңдер шул.— Ишмырҙа унын ҡолағына ниҙер шыбырланы. Тегеһе ҡул һелтәне, асыу менән сертләтеп ергә төкөрҙө лә ситкә китте.

— Ярай, рәхмәт, туғаным. Ағай-эне, урманда беҙгә эш ҡалманы, ҡайтышайыҡ.

Ирҙәр шаулашып ауыл яғына бара торған һуҡмаҡҡа йүнәлде. Ҡайтып еткәнсе һүҙ ҡыҙҙың табылыуы хаҡында түгел, урман ҡараусының ғәжәп айыуы хаҡында барҙы. Берәүҙәр уның тиреһен самалаһа, икенселәр, бигерәк тә Солтан, ҡалаға алып барып зоопаркка йә иһә циркка һатҡанда, күпме табыш эшләргә мөмкин икән, тип уфтанды. Ҡулға өйрәнеп бөткән югиһә, мәшәҡәтләнәһе лә түгел. Күпме аҡса әрәм булып ята инде урман төпкөлөндә, валлаһи.

Улар үтеп киткән һуҡмаҡтан ике-өс аҙым ғына ситтәрәк үҫеп ултырған ҡарағай төбөндә Айвар хәлһеҙләнеп йоҡлап ята ине. Бер көн эсендә ике тапҡыр рәттән икенсе үлсәмдәге донъяға күсеүгә уның кәүҙәһе өйрәнеп бөтмәгән ине әле.

## 3

Аҡһыл зәңгәр төҫтәге еңел машина ярайһы текә үргә әллә ни көсәнмәй генә менеп етте лә урман эсенә инеп киткән юлға ҡайырылып туҡтаны.

— Ошо юлдан китәбеҙме? — Руль артында ултырған урта йәштәрҙәге пеләш ир янындағы юлдашына өндәште. Унығы йәшерәк булыуға ҡарамаҫтан, улар араһында ниндәйҙер өҫтөнлөк менән файҙалана ине, күрәһең — эшлекле ҡиәфәттә ян-яҡҡа күҙ йүгертте лә ҡул һелтәне.

— Ҡуҙғал әйҙә ошо юлдан.

Артта ултырған ҡыҙ ғына бер ни өндәшмәне. Ирендәрен үҙ һүҙле бүлтәйтеп, тирә-яғын күҙәтеүен белде.

— Йә һин, ҡыҙ аҡтығы, әйтергә уйлайһыңмы-юҡмы? — Йәшерәгенең был һүҙҙе бөгөн генә әллә нисә тапҡыр ҡабатлап ҡырталашҡаны күренеп тора — ярһып китмәҫ өсөн үҙ-үҙен саҡ тыя.

Ҡыҙ өндәшмәне.

— Нисауа, аҫыл ҡош, телеңде сисербеҙ. Туғаным тип ҡарап тормам.

— Һы, ағай табылған. Һинең ағайлығың Николай заманынан ҡалған ике тинлек тишек аҡсаға ғына торорлоҡ.

Туҙын әйҙә, туҙын, минән барыбер бер ни ишетмәçһең.— Ҡыҙ ситкә боролдо.

— Ну, Айгөл, тим, әйт инде, ул бит минең өсөн бик мөһим. Ни теләйһең, шуны алып бирермен.

— Һинең бүләктәреңә мин мохтаж түгелмен. Үәт шулай, хөрмәтле Хәмит ағаҡайым, үҙеңә булһын татлы телмәрҙәрең.— Ҡыҙ ныҡ ҡына ярһығайны, өндәшмәй ҡалырға тырышһа ла, түҙмәй тағы ла керешеп китә.

— Туҡта ошонда. Был тутыйғоштоң ҡарҡылдауын күпме тыңларға мөмкин!

Машина урман эсендәге кескәйерәк ҡалҡыулыҡ эргәһенә килеп туҡтаны.

— Ни эшләтергә уйлайһың баланы? Онотма, ул һинең ике туған һеңлең.— Пеләш баш машинанан сығырға маташҡан Хәмиткә өндәште.

— Һеңле булмай шайтан булһын. Әлеге мәлдә миндә баш ҡайғыһы, аңлайһыңмы?

— Аңлайым да, әммә һиңә тәүҙә һәйбәтләп һөйләшергә ине уның менән. Ана бит, ҡайһылай киреләнде лә китте.

— Миңлеғәле, исмаһам, һин яраға тоҙ һалма. Уның киреләге бер бөгөнмө, атаһының балаһы бит.

— Шунан, хәҙер ни ҡылырға уйлайһың? — Улар ситтәрәк бер аҙ һөйләшеп алғандан һуң, ҡабат машина эргәһенә килделәр. Ҡыҙ урынында ултыра ине, күрәһең, бер ниндәй ҙә яманлыҡ ҡылмаçтарына ышана.

— Төш әле тиҙ генә машинанан, һылыуҡай.— Хәмит бер ҡарарға килгән кеше тәүәккәллеге менән ишекте асты. Миңлеғәле иһә бер аҙ борсолоп быларҙы күҙәтә ине.

— Төштөм дә ти. Шунан ни эшләрһең?

— Телеңә һалышма. Сыр яланғас сисендереп, ҡырмыçҡа иләүенә ултыртырға ла күп һорамам. Йә, әйтәһеңме, юҡмы?

Ҡыҙ өндәшмәне.

— Минең түҙемлекте күпме һынарға итәһең?

Айгөл үрелеп бер япраҡты өҙөп алды, унда ниндәйҙер ғәжәп нәмә күргән ҡиәфәт менән иғтибарлап ҡарарға кереште. Был иһә Хәмитте оторо ярһытты — асыу менән ҡыҙҙың ҡулындағы япраҡты тартып алып ергә быраҡтырҙы.

— Һин мине ҡотортма, үкенерһең.— Ир кеше ни ҡылырға ла белмәй ине.

Быларҙы бер аҙ аптыраған ҡиәфәттә күҙәтеп торған Миңлеғәле ҡабат машинаға кереп ултырҙы.

— Йә, ярай, киттек, ниңә юҡ менән булаһың. Күреп

тораһың бит, был ҡыҙҙан файҙа юҡ, икенсе юлын эҙләргә кәрәк.

— Тағы ниндәй юл? Әллә шул Хәбирҙән һорарға, тиһеңме? Бирер ул һиңә бирмәй ата ҡаҙҙың ҡаҡ башын. Йә, нимә унда йәйелеп ултыраһың, килтер арҡанды!

— Арҡан? — Пеләш баштың йөҙөнә ғәжәпләнеү бәреп сыҡһа ла, машинанан нәҙек сүс арҡан тотоп килеп сыҡты.

— Киттек! — Хәмит ҡыҙҙың арҡаһына төрттө. Тегеһе өндәшмәй генә алға атланы.

Юлдан байтаҡ ситтәрәк ултырған йыуан ағас янына килеп туҡтанылар.

— Бәйлә! — Хәмит ҡаты ғына итеп пеләшкә өндәште. Уның вайымһыҙ ҡыланыуы ирҙе сығырынан сығара ине. Етмәһә, был ҡыҙ аҡтығы ишәк кеүек киреләнә.— Йә, һылыуым, һуңғы мөмкинлек бирәм, әйтәһеңме-юҡмы? Әллә ошо ағас төбөндә бәйле килеш ҡалыу нығыраҡ оҡшаймы? Бында йырткыс йәнлектәр мыжғышып тора, туғанҡайым, закуска булаһың килмәйҙер бит?

— Йөрәгең етмәйәсәк. Эшем эйәһе булып екеренһәң дә, ҡурҡаҡ бит һин.

— Етте! — Хәмит ярһып, ҡыҙҙы йыуан ҡайын олонона ҡуша сырмарға кереште, унан кеҫәһенән ниндәйҙер бер сепрәк сығарҙы, уның ауыҙын ҡайырып тигәндәй асып, шунда тыңҡысланы. Уның хәрәкәттәрен албырғабыраҡ күҙәтеп торған Миңлеғәле тарҡау ғына атлап машинаға йүнәлде. Бына һиңә кәрәкһә, ҡыҙҙы тап ошоноң өсөн ултыртып урманға килтереүҙәре башына ла кереп сыҡмаған бит, исмаһам. Йә инде, тик торғанда енәйәттә ҡатнашты бит. Ә был бала менән бер-бер хәл булһа? Баш төрмәгә китерлек эш бит, тфү-тфү. Әшнәһе Хәмит барып киләһе ер бар, тигәс, риза булғайны. Бына бит, нигә килеп төртөлдөләр.

Йыш-йыш тын алған, һаман тынысланa алмаған Хәмит ишекте икенсе яҡтан асып, уның янына инеп ултырҙы.

— Йә, ҡуҙғал. Һиңә әйтәм!

— Баланы ошо килеш урманда ҡалдырып китергә уйлайһыңмы ни? Һин нимә, ысынлапмы?

— Ярай, телеңә һалышма, һинһеҙ ҙә беләм. Ҡотоң алынмаһын, бер-ике сәғәттән кире килербеҙ, ҡурҡытыр өсөн генә...

Машина ҡуҙғалып китте. Ун алты йәштәр тирәһендәге үҫмер ҡыҙ ағасҡа бәйле килеш урманда тороп ҡалды.

## 4

Йә, һеңлем, ниндәй ҡаһарманлығың өсөн быңдай язаға дусар булдың? Айвар мөмкин тиклем йомшаҡ итеп ҡыҙға өндәште. Ауыҙына сепрәк тултырылған йәш кенә сибәр ҡыҙҙы көпә-көндөҙ ағасҡа бәйләнгән килеш урманда осратып, ул албырғап ҡалды. Ғәжәпләнерлек тә — иртән генә ошо тирәнән үтте, бер ни ҙә юҡ ине, кеше йөрөгәне лә күренмәй ине, юғиһә.

Ҡыҙ өндәшмәне. Күрәһең, был хәлдән нығ ҡына йәберһенгән. Шулай ҙа үҙен ағастан сисеп алған егеткә ни ҙә булһа өндәшеүҙе кәрәкле тип тапты.

— Һеҙ кем?

— Мин урмансы. Һин, моғайын, белер инең, ситтән килгәнһеңдер, шулаймы?

Айгөл егеткә күпмелер ваҡыт төбәлеп торғандан һуң, ҡарашын ситкә күсерҙе. Ҡара урман эсендә ете ят кеше менән яңғыҙы ҡалыуҙан ул нығ ҡына шөрләй ине. Бөгөн иртән Хәмиттең татлы һүҙенә ышанып машинаға ултырып киткәне өсөн, үҙен инде әллә нисәнсе тапҡыр ҡәһәрләне ҡыҙ. Ят кеше бер-бер хилаф эш ҡылырға уйлай ҡалһа, тип, ҡайһы яҡҡа йүгеререн самалап, аҫтан ғына тирә-яғына күҙ ташланы.

Унын хәрәкәттәрен күҙәткән Айвар көләмһерәне.

— Ҡурҡма, һеңлем. Мин һиңә һис ниндәй яманлыҡ ҡылырға уйламайым. Киреһенсә, хәлдән килһә, ярҙам итергә әҙермен. Мә ҡушкөбәк, ышанмаһаң, кәрәк тапһаң, әсир алырһың.— Айвар шаяртып күҙ ҡыҫты.

Ҡыҙҙың йөҙө бер аҙ асылды, егеттең ихлас һөйләүенә ул инде шикләнмәй ине, буғай.

— Һеҙ ҡайҙа бараһығыҙ, ағай?

— Урман ҡараусымын бит, ошонда йәшәмәй тағы ҡайҙа бараһың? Минең йорт бынан әллә ни алыҫ түгел, күп булһа, бер-ике саҡрым ғына. Моғайын эҫенән сарсап бөткәнһеңдер. Урманда хуш еҫле сәй эскәнең бармы?

— Юҡ, ағай.

— Миңә Айвар ағай тип өндәшерһең. Ә үҙеңдең исемең нисек?

— Айгөл.

— Ысынлапмы? Беҙгә игеҙәктәр булаһы булған, һеңлем. Исемдәр оҡшаш, тимәк, юҡҡа ғына минең биләмәгә килеп юлыҡмағанһың.

Бер аҙҙан улар урман ҡараусының яңғыҙ моңайып ултырған өйөнә ҡайтып еттеләр. Йорт күренеү менән, Айвар ҡыҙҙы иҫкәртеп ҡуйыуҙы кәрәк тапты.

— Һеңлем, был тирәлә ҡулға өйрәнгән айыу балаһы йөрөргә тейеш. Ҡапыл ғына килеп сыға ҡалһа, ҡурҡа күрмә. Ул һиңә бер ниндәй ҙә зыян ҡылмаҫ... Аҡморон! Һин ҡайҙа?

Йорттан саҡ ҡына ситтәрәк ултырған кескәй һарайҙан шаруҡ ҙур эт атылып сыҡты. Эҫенән телен һәлберәтеп, хужаһы тирәһендә бөтөрөлдө.

— Кәйефең арыу ғына күренә, бимазалап йөрөүсе булмағандыр, ахыры.

«Тамаҡ ҡатты бит әле. Был эҫенән күләгәлә лә ҡотолоп булмай».

— Хәҙер, хәҙер, саҡ ҡына сабыр ит. Бына ҡунаҡты йортҡа саҡырайыҡ та. Һаулыҡ һораш, Аҡморон, әҙәпһеҙләнеп торма.

Эт ҡыҙ янына йүгереп килде, бер-икене сәңкелдәп өрҙө лә кире хужаһына йүгерҙе. Быны күреп, ошоғаса һағайыбыраҡ йөрөгән ҡыҙ ҡыуанысынан бала-сағалай сәрелдәп ебәрҙе, хатта сәпәкәйләп, баҫҡан урынында һикергеләп алды.

— Уй, Айвар ағай, Аҡморон шулай һәр әйткән һүҙегеҙҙе аңлаймы ни? Ой, ҡалай аҡыллы эт!

— Ул да бит йән эйәһе, Айгөл. Бөтә йән эйәләренең теле бар, хатта бына ағастар ҙа һөйләшә. Ишетәһеңме, әлеге мәлдә улар ни һөйләй? Оҙаҡламай, бер-ике сәғәттән, дауыллы ямғыр яуасаҡ, ти улар.

— Кит, булмаҫ та, Айвар ағай. Ана, ҡарағыҙ күккә, һис ниндәй, хатта ҡулъяулыҡ ҙурлығындай ҙа болот эҫәре юҡ.

— Йә, ярай, һеңлем. Сәй эсеп тамаҡ ялғап алайыҡ әле, был эҫе елеккә үтә башланы.

Улар йорт эсенә үттеләр. Айгөл ҡыҙыҡһынып тирәяғына күҙ йүгертте. Әллә ни йыһаз юҡ, әммә һәр ерҙә бөхтәлек, тәртип.

— Һин, һеңлем, бик булмаһа, бына журналдар ҡараштыра тор. Мин әҙерәк тамаҡ яғын ҡайғыртып алайым.

Үҙ йортонда байтаҡтан ҡунаҡ булмағанлыҡтан, Айвар нимәгә барып тотонорға белә алмай ине. Ярай, үҙе шикелле ир-ат булһа, ҡалай ҙа бата. Ҡатын-ҡыҙҙың күҙе осҡор булыусан. Урман эсендәмен тип, ҡырағайҙарса ҡылана алмай бит инде. Шулай ҙа йәшелсә-емеште төрлөсә ҡыландырып, ул өҫтәл өҫтөн тәки тултырҙы. Нисауа ғына табын килеп сыҡты һымаҡ. Ярай ҙа үҙе үҫтерә кәрәкяраҡты. Әлеге мәлдә ни эшләр ине икән. Кешелек йәмғиәтенән ни тиклем ситләшкәнен ул әле генә бар булмышы менән аңланы. Ғүмер бер тапҡыр ғына бирелә лә баһа. Һиңә ул шуны ла матур итеп йәшәп ҡалмаҫҡа тейеш?

Күңеленең иң төбөндә кешеләргә һыуһау ҙа ята ине уның. Шуға күрә осраҡлы ғына урманда тап булған ҡыҙҙың мөмкин тиклем күңелен күрергә тырышты.

— Һеҙгә бында яңғыҙығыҙ йәшәү ҡыйын түгелме, ағай?

— Элек һиҙмәй инем, һуңғы арала ғына яманһыу була башланы.

— Мин былдай эштә, ниңәлер, тик ҡарттар ғына эшләйҙер, тип уйлай торғайным. Һеҙҙе урмансы итеп күреү мәҙәк тә.

— Эйе, дөрөҫ әйтәһең, һеңлем. Ысынлап та сәйер...

Ул арала дөбөр-шатыр күк күкрәгәне ишетелде, сибегерәк ағастарҙы ергә яҡҡыра яҙып, көслө ел иҫте. Айвар һикереп тороп тәҙрә ҡапҡастарын ябырға ла өлгөрмәне, ҡойоп ямғыр яуа башланы.

— Ой, Айвар ағай, һеҙ ысынлап та дөрөҫ әйткәнһегеҙ. Бер сәғәт тә үтмәне.— Айгөлдөң теремек ҡараштарында егеткә ҡарата һоҡланыу ярылып ята ине. Быны күреп, Айварға бер аҙ уңайһыҙ булып китте, байтаҡтан ҡатын-ҡыҙ менән аралашмағанын иҫләп, йәһәтерәк үҙен ҡулға алды.

— Бына урман менән һөйләшергә өйрән, һеңлем, был донъяның һин уйлағанға ҡарағанда байтаҡҡа киңерәк икәнлеген үҙең дә аңларһың.

Тәҙрә янына баҫып, ҡойоп яуған ямғырҙы күҙәткән Айгөл кинәт егет торған яҡҡа боролдо.

— Айвар ағай, рәхмәт һеҙгә. Әгәр һеҙ осрамаған булһағыҙ, мин ни эшләр инем икән? Йәшендән ҡотом алынып ҡурҡам мин, әле бында һеҙҙең янда булғанға ғына нисектер хәүефһеҙ кеүек.

— Һин, һеңлем, миңә шулай ҙа әйтмәнең әле, нисек был урманға килеп сыҡтың, етмәһә ағасҡа бәйләнгән килеш?

— Дөрөҫөн әйткәндә, үҙем өсөн дө көтөлмәгәнерәк булды. Һис тә ошо ҡиәфәттә тороп ҡалырмын тип уйламаған инем. Мин һеҙгә барыһын да һөйләйем дә ҡуям, Айвар ағай, кемгәлер барыбер эс бушатаһы килә.

Минең атайым ҙур ғына заводта баш конструктор булып эшләй. Өс көн элек уның өйҙәге эш өҫтәленән мөһим һыҙмалары юғалды. Ҡайҙан ғына эҙләп бөтмәнек беҙ, кермәгән тишек ҡалманы. Атайым ахыр сиктә, берәйһенә бирмәнемме икән, тип шикләнә башланы. Әммә бөгөн иртән, үҙем дә аңғармаҫтан, ике туған ағайым Хәмит менән уның танышының һөйләшеүен ишетеп ҡалдым. Баҡһаң, ул әлеге һыҙмаларҙы ҙур ғына аҡсаға теге кешегә бирергә булған икән. Сер итеп, әлбиттә. Улар икенсе

бүлмәгә сыҡҡан арала, дипломатын астым да алдым. Ул шунда уҡ мин сәлдергәнде аңланы. Йәл, алыҫыраҡ йәшереп өлгөрмәнем.

— Ниндәй һыҙмалар ине һуң улар?

— Белмәйем, әммә атайымдың шулар өсөн борсолоуын күрһәң... Иртәгә үк күк убылып төшөргә йыйыналыр, тип уйларлыҡ. Айвар ағай, ысынлап та, мине тиктомалға ғына ағасҡа бәйләмәгәндәрҙер инде. Тимәк, улар бик мөһим. Хәмит ағай минән төпсөнә торғас, телдәре көрмәлә башланы.

— Ә һин уларҙы ҡайҙа йәшергәйнең?

Айгөл егеткә һағайыбыраҡ ҡараны, әйтергәме-юҡмы тип, бер аҙ икеләнеп торҙо.

— Кәрәк тип тапмаһаң, әйтмә, һеңлем, юҡҡа ғына һине борсойһом килмәй.

— Юҡ, мин һеҙгә ышанам, Айвар ағай. Йыуыныу бүлмәһендә ике кер йыуыу порошогының араһына тыҡҡан инем, ышаныслыраҡ итеп йәшерергә өлгөрмәнем.

— Тә-әк... Бәлки һиңә ярҙам итеп булыр. Берәй сараһын уйлай торорға кәрәк. Һин, һеңлем, ҡайҙа уҡыйһың әле? Йәшеңә ҡарап самалағанда, эшләрлек үк түгелһеңдер?

— Көҙгә ун беренсегә барам. Ниңә, ағай?

— Былай ғына. Ошо ҡағыҙ битенә адресыңды яҙ. Атаәсәйеңдең исемдәрен тулы итеп күрһәтергә онотма.

Ҡыҙ яҙып биргән ҡағыҙ битенә бер тапҡыр ғына күҙ һирпеп алды ла Айвар бүлмә буйлап арлы-бирле йөрөргә кереште. Уның ҡыланышын ғәжәпләнеберәк күҙәткән Айгөл тәҙрә яғына ҡарағас, саҡ ҡысҡырып ебәрмәне — урмансы йортона таныш машина яҡынлашып килә ине.

## 5

Кинәт кенә килеп сығып, дөбөр-шатыр күк күкрәтеп яуып ебәргән дауыллы ямғыр Хәмит менән уның юлдашын аптырашта ҡалдырҙы. Был һис кенә лә уларҙың планына инмәгәйне юғиһә. Әгәр ҙә теге тиҫкәре ҡыҙ менән бер-бер хәл булһа? Айгөлдөң атаһы былның өсөн Хәмиттең башын муйынынан бороп алырға ла күп һорамаҫ. Пружиналары ғына бәүелеп ҡалыр, мин һиңә әйтәйем.

Ҡыҙ ҡалған урындан биш-алты саҡрым самаһы алыҫлыҡта табын ҡороп ултырған ике әшнәгә боронғо телһеҙ киноларҙа ғына күрһәтелә торған тиҙлек менән тәгәмризыҡтарын ҡабат машиналарына тейәп, килгән юлдан кирегә олағырға тура килде. Хәмит Миңлеғәлене күпме ҡыумаһын, пеләш бахырың машинаһын күпме әрләмә-

һен — унығы сөскөрә лә туҡтай, йүткерә лә аҡһай. Урман эсендәге юл өсөн генә тыуған машина инде, валлаһи. Хәмит йүгереп сығып артына тиберҙәй булып килә. Әгәр ямғырға күшегеүҙән шөрләмәһә, үсен ҡандырып булһа ла керер ине, ҡыҙғаныска ҡаршы, унан да мәхрүм.

Туҙына-туҙына таныш урынға килеп еттеләр. Ҡыҙ йораты күшегеп бөткәндер, янына барып етеү менән ялбара башлар, тип уйлағайны Хәмит. Әммә тү-тү... — Айгөлдән елдәр иҫкәйне. Хәмиттең йөрәген был мәл ысынлап шом баҫты. Әгәр ҙә берәй януарға аҙыҡ булһа? Ул сағында ҡалаға ҡайтыу — башты элмәккә тығыу тигән һүҙ. Айгөлдөң улар менән киткәнен кәмендә ике-өс кеше күрҙе.

Хәмит йүгереп барып әлеге ҡайынды ҡараны, хатта бер нисә тапҡыр урап сығырға ла онотманы. Тегеһе ҡырмыҫҡаға әүерелеп япраҡ ябынып ултыра тиерһең.

— Хатта арҡан да юҡ. Йә, ни тиерһең?

— Ни әйтәһең... Ҡыҙ осҡан.

— Осҡан, осҡан, унығын үҙем дә күрәм. Ни ҡылырға?

— Эҙләп ҡарайыҡ булмаһа. Әллә ни йыраҡ китеп өлгөрмәгәндер.

— Бына был, исмаһам, эшлекле фекер. Улайһа тораһың йәнде үртәп.

Миңлегәле машинаһына ҡабат кереп ултырҙы, тегеһе иһә уның ҡуҙғалғанын көтөп тормай, юлында осраған һәр ағас төбөн ентекләп ҡарай-ҡарай йәйәү тыртаңланы. Был мәл Хәмит бөйөк эштәр өсөн йәндәрен фиҙа ҡылыусы әкиәт заттарынан һис тә ҡайтыш күренмәй ине. Әммә ләкин шул тиклем батырлыҡ ҡылыуҙан да, ҡыҙғаныска ҡаршы, бесәй тырнағындай ҙа фәтеүә булманы — ахыр килеп Хәмиткә, донъяла булған барлыҡ ҡатын-ҡыҙ затының ете быуын ата-бабаларын ҡалдырмай ҡатлы-ҡатлы итеп һүгә-һүгә, машинаға кереп ултырыуҙан башҡа сара ҡалманы. Шулай итеп, был урман төпкөлө бер баһадирҙан мәхрүм ҡалды. Хәс тә яралырға торған себеш был фани донъяларға йомортҡаһының форточкаһын ғына асып ҡарап, танау-һанауҙарын сирып, «гудь бай!» тип ҡабаттан шапылдатып ябып, кире кереп киткән шикелле инде, валлаһи.

Машинаға һыя алмай ҡабарып килгән Хәмитте Миңлегәлене тауышы һиҫкәндерҙе.

— Ҡара, ҡара, ниндәйҙер йорт! Урман ҡараусыныҡы түгелме икән?

— Шулайҙыр, был төпкөлдә ул булмаһа, убырлы ҡарсыҡ ҡына йәшәргә мөмкин.

Тау итәгенә һыйынып ултырған йорттоң һыңар тауыҡ тәпәйендә генә тормағанлығына ныҡлап ышанғас, янына туҡтарға ҡарар ҡылдылар.

Йорт хужаһы оҙаҡ көттөрмәне. Машина туҡтап бер-ике минут та ваҡыт үтмәне, ишек асылып китте. Тупһала йәп-йәш кенә баһадир кәүҙәле ир кеше баҫып тора ине.

— Эһем... Эһем... Беҙ урмансы тигәс тә, аҡ һаҡаллы кәкре ҡарттыр...

Хәмит юлдашына уҫал ҡараш атты, тегеһе шым булды.

— Һаумы, ҡустым. Беҙ юлайҡан ғына. Бер ҡыҙҙы эҙләйбеҙ, һеҙгә осраманымы, тип белешергә туҡталғайныҡ.

Айвар өндәшмәне. Күҙ алдына әле генә Айгөл менән булған күренеш килде. Машинаны күреү менән, ҡыҙ ағарынды, унан өй эсенә һыймай йүгереп бәргеләнергә керешә. Саҡ тынысландырҙы уны Айвар. Ата-әсәһенең йылы ҡанаты аҫтында үҫкән, ҡаты бәрелеүгә өйрәнмәгән үҫмер ҡыҙға бөгөн ниндәй йән йәрәхәте һалынғанын шунда ғына аңланы егет. Шуның өсөн генә лә хәҙер ошо икәүҙең тетмәһен теткәндә, кәм дә, артыҡ та булмаҫ ине. Ләкин ул Айгөлгә вәғәҙә бирҙе һәм һүҙендә торасаҡ.

— Юҡ, ниндәй ҡыҙ һуң тағы? Урман юлында юғалтып йөрөргә, ул төйөнсөкмө ни?

— Еләк ашайым тип ҡайын төбөндә ҡалғайны, кире килһәк, юҡ,— тигән булды Хәмит аптырағандан.

— Ҡарағыҙ, ағай-эне, бында йыртҡыс йәнлектәр аҙым һайын, бер-ике сәғәттән тапмаһағыҙ, ул фәрештәгеҙгә ясин сығаһы ғына ҡала.

Хәмиттең ҡобараһы осоп киткән сырайын күреп, Айвар эсенән генә көлөмһөрәне, бер һүҙ ҙә өндәшмәй ишеккә боролдо.

— Ҡара әле, кем, ҡустым, зинһар, табырға ярҙам итә күр, буш итмәбеҙ.

— Бик ҡыҙғаныс, ағай-эне, әммә тәҡдимегеҙҙе кире ҡағырға тура килер.— Айвар, ошоноң менән һүҙ бөттө, тигәнде аңлатып, ишек тотҡаһына үрелде.

— Ҡустым, туҡтап тор...

— Минең яман уй менән йөрөүселәргә һис ҡасан да ярҙам иткәнем юҡ.— Айвар үҙен тыныс тоторға тырышһа ла, тауышы уҫалая башланы. Тағы ла бер-ике минут былар янында ҡалһа, имандарын уҡытып алыуҙан баш тартмаясағын аңлап, ул йортона кереп китте.

Хәмит менән Миңлеғәле бер-береһенә ҡараშты. Бына һиңә кәрәкһә! Урман ҡараусы уларҙың ниндәй уй менән йөрөгәндәрен ҡайҙан белә? Йә егет Айгөлдө күргән, йә

иһә был урман бисураһы ҡарурманда көн күргән элекке мәскәй ҡарсыҡтарҙың хәҙерге варианты, йәғни мәҫәлән, ыштан кейгән сорты.

— Йә, ни уйлайһың был турала, ҡәҙерле ҡаҡ баш?

Ҡаҡ баш иһә түбәһенең пеләш ерен бер аҙ тызып алғандан һуң, унан, ысынлап та, бик аҡыллы фекер ҡырып сығарҙы.

— Күҙәтергә кәрәк был йортто, шунһыҙ булмай.

— Ну баш үҙеңдә, һинһеҙ мин ике ҡулһыҙ.— Хәмит үҙенең маҡтағанына үҙе ҡәнәғәт булып, баҫҡан урынында тапанып алды.— Машинаны арыраҡ илтәбеҙ ҙә — засадаға!

Ямғыр нисек кинәт килеп сыҡһа, шулай уҡ ҡапыл ғына үтеп тә китте, артынса ҡояш килеп сыҡты. Миңлеғәле машинаны саҡ ҡына арыраҡ ҡуйып килеүгә, Хәмит, ҡарауылсы йорто ус төбөндәй генә күренерлек урын табып, йыуан ҡайын төбөнә урынлашырға өлгөргәйне.

Бер-ике сәғәттәй ваҡыт үтте. Йорт эргәһендә әллә ни үҙгәреш күренмәне. Хужа ғына ихата-ҡура тирәһенә сығып әйләнгеләне. Ул түбәнгә шишмәгә төшкән арала, Хәмит, башына бик елле фекер килеүҙән ауыҙы саҡ ҡолаҡ артына һәлберәмәй, йортҡа табан елдерткәйне, мысҡыллы рәүештә кире сигергә мәжбүр булды. Һөҙөмтәлә Аҡморон Хәмит салбарынан трофей төшкән ыштан балағын тештәренән ысҡындырмай, ихата буйлап байтаҡ ҡуҡырайып йөрөнө. Бындай затлы малды ҡайҙа ҡуйырға белә алмай баш ватты, ахыры.

Хәмиттең асыуы килә башланы. Етмәһә, йәнде көйҙөрөп, эргәлә генә Миңлеғәле ғырылдай. Тау ишелеп төшмәгәйеме икән. Бер яҡтан, уның йоҡлап ҡалыуы файҙаға булды әле. Салбарҙың бер балағын теге сәңкелдәк эткә бүләк итеп киткәнде күрһә, урмандағы бөтә йыртҡыстарҙы ҡасырып бөтөрлөк итеп хахылдап көлөр ине. Хәмит үҙенең күҙенә лә йоҡо төйөлә башлағанына үртәлеп, әшнәһен уятырға тип үрелгәйне, аяғын ниҙер төрткөләгәнгә тертләне.

— Ах, йүнһеҙ эт, хәҙер мин һине... — Әҙерләп ҡуйған таяғын йәһәт кенә үрелеп алды, икенсе балаҡтан да ҡолаҡ ҡағаһы килмәй юғиһә. Әммә әйләнеп ҡарауға үҙ тауышына үҙенең йөрәге ярыла яҙҙы — аяҡ осонда ҙур йөнтәҫ айыу баҫып тора ине. Уның аҡырғанына хайуандың тертләүе ғәжәп түгел, әлбиттә, ләкин Миңлеғәле уянды — быныһы сәйер. Тағы бер секундтан ике әшнә әкиәттәрҙә генә була торған ҡырағай тауыштар сығара-сығара, ике яҡҡа елдерә ине. Хәмиттең ҡиәфәтенә ҡарағанда, салбарын үҙ теләге менән һалып бирер ине мәгәр. Ҡыҙ-

ғанысҡа, айыу ундай теләк белдермәне — бик тә аптыраған киәфәттә урынында ултырып ҡалды.

Аһылдашып, абына-һөрөнә машина янына барып еттеләр. Уларҙың ҡурҡыуы машинаға ла күсте тиерһең — иңолтмәй генә ҡабынып китте. Оло юлға барып төшкәс тә әле был икәүҙең аллы-артлы үткән юлға кире боролоп ҡарауҙарынан тайыш табандың уларҙа ниндәйерәк иҫтәлек ҡалдырғанын белергә булыр ине.

— Һинең һүҙеңде тыңлап йөрөгән мин ахмаҡ.—Оҙон көн буйына Миңлеғәле тәүге тапҡыр һуҡранды. Күрәһең, айыу кеүек гүзәл заттың иркәләп уятыуын ошоғаса татырға тура килмәгәндер байғошҡа.

— Йә, ярай, һөйләнмә, былай ҙа йән көйә.— Башҡа ваҡытта булһа, Хәмит уның ауыҙын да астырмай тиргәп ташлар ине, хәҙер иһә һүҙ ҡушырға ла теләге юҡ. Аптырамаҫлыҡ та түгел, һыҙмалар юғалды, ҡыҙҙан елдәр иҫте, ошо мәлдә уның ҡайҙа икәнлеген белгән кеше заты юҡ. Күпме аҡсанан ҡолаҡ ҡаҡты бит, йә инде. Туҡта, тағы ла бер урында һаҡланғаны бар бит әле! Уларын да осорорға ла, юҡҡа сығырға. Башҡа сара юҡ. Әгәр ҙә Айгөл менән бер-бер хәл булһа, баш барыбер төрмәлә серейәсәк. Былай, исмаһам, саҡ ҡына булһа ла ҡотолорға өмөт бар.

— Әйҙә, ҡыу машинаңды, Миңлеғәле дуҫ.— Тегеһе ғәжәпләнеп боролоп ҡараны. Ҡара һин уны, үҙенә кәрәккәндә, сөсө телләнә белә. Шулай ҙа газды өҫтәне.

Хәмит сәғәтенә күҙ төшөрҙө — эш көнө бөтөүгә тағы ике сәғәт ваҡыт бар. Тимәк, уның ҡарамағында йөҙ егерме минут. Уның күҙ алдына циркта күрһәтелә торған тамаша килде — һеләүһен янып торған утлы ҡулса эсенән һикереп үтә. Йә йөнөнә ут ҡаба, йә аҡтыҡ оҫталығын һалып, теймәй үтергә тейш. Эх, был донъяларҙа һеләүһен түгел шул Хәмит. Бары арыҫландар тирәһендә ураланған көсөк кенә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы...

## 6

Хәбир Ғүмәрович баянан бирле ишекле-түрле йөрөнә. Тәҙрә төбөнә килеп бер аҙ торғандан һуң, телефон аппараты янына килә. Уға тотоноуҙан файҙа сығырына ышанысы булмағанлыҡтан, ҡабат кире китә. Кабинет ҙур, ишектән түргәсә келәм йәйелгән. Бер яҡ стена буйында оҙон ялтыр өҫтәлдәр. Улар янындағы ултырғыстарына тиклем күркәм. Ошондай эш бүлмәһе биләүсенең мәшәҡәте баштан ашҡан, әлбиттә. Әммә хәҙерге мәлдә бер генә

нәмә мөһим. Тап бына ошо мәсьәлә Назаровҡа тынғылыҡ бирмәй ҙә инде.

Иртән сәғәт һигеҙҙә эш урынына килеп ултырыуы булды, телефон шылтыраны.

— Назаровмы? — тине кемдер ҡоро ғына. Ундай тупаҫ мөғәмәләгә өйрәнмәгән Хәбир Ғүмәрович ғәжәпләнергә лә өлгөрмәне, дауам иттеләр.— Бына нәмә, хөрмәтле конструктор иптәш, аңлайһығыҙҙыр, йәй, тәбиғәт ҡосағы, курорттар, сибәр ҡыҙҙар... О! — Яһалма кеткелдәп алдылар.— Ә быларҙың барыһы өсөн дә аҡса кәрәк.

— Ни өсөн миңә быларҙы һөйләүегеҙҙе аңлап бөтмәйем.

— Аңларһығыҙ, борсолмағыҙ, хөрмәтле, кем, әфәнде, Бына шулай килешәйек — һеҙ беҙгә 150 000 йәшел аҡса. Ҡурҡып китмәгеҙ, һеҙҙең заводтың валютаһы бар, алдашып ҡәҙерле минуттарығыҙҙы тәләф итмәгеҙ, зинһар.— Асыуға тейгес кеткелдәү йәнә ҡабатланды.— Ә беҙ һыҙмаларығыҙҙы кире ҡайтарып бирәбеҙ. Шул йыуғысҡа әйләнеп бөткән ҡағыҙ ишараттары өсөн борсолоуығыҙҙы күреп, үҙебеҙҙең йөрәк һыҙлана башланы. Ни тиһәң дә, нескә һөнәр кешеләребеҙ.

Назаров бер ни тиклем ваҡыт өндәшә лә алмай торҙо. Ни тиклем оятһыҙлыҡ! Ҡаршыһында торһалар, өҙгөләп ырғытыр ине. Ләкин телефон трубкаһын ташлап ҡуйыу өсөн күп ваҡыт кәрәкмәй. Шуның өсөн ул үҙен тыныс тоторға тырышты.

— Ярай, мин ул аҡсаны таптым да ти. Шунан һеҙ уны нисек алырға уйлайһығыҙ? Бәлки ҡабул итеү сәғәте билдәләргәлер? Секретаршаға кофе әҙерләргә ҡушырмын.— Бер аҙ мыҫҡыллап алыуҙан Назаров үҙе лә тыйыла алманы.

— О, юҡ, хөрмәтле әфәнде. Ул тиклеменә генә борсолмаһағыҙ ҙа була. Килештек, телефон шылтырауын көтөгөҙ.— Трубканы һалып ҡуйҙылар. Ниҙер һорарға ынтылған еренән Назаров ҡулын һелтәне, унан трубканы өҫтәлгә ырғытты. Йәне үртәлеүенә сыҙай алмай ярһып, ишекле-түрле йөрөп алды. Иң асыуға тейгәне — хәҙерге мәлдә үҙенең көсһеҙлөгөн тойоу ине. Эйе, теләһә-теләмәһә лә, уға көтөргә генә ҡала, башҡа сара юҡ. Аҡсаны табырға тура килер, сөнки был һыҙмаларға бик күптәрҙең көсө түгелгән, әгәр ҙә юғала ҡалһа, улай ғына түгел, сит ҡулдарға эләкһә, ни булырын әйтеүе лә ауыр — уларҙа сит илдә төҙөләсәк мини-заводтың эске ҡоролошо. Ах, һаҡлай алманы. Кемдең генә эше булды икән? Сит-ят кешеләрҙең уның ҡағыҙҙарына яҡын да юлағаны юҡ шикелле лә һә.

Аҡса юллап йөрөп байтаҡ ваҡыт үтте. Уныһы кеҫәнән генә сығарып һала торған мал түгел шул. Ҡара һин уларға, валюта кәрәк булған, имеш. Ашығыс командировка юлларға тура килде. Баш конструкторҙың теүәл 150000 долларға самалауы, күрәһең, бухгалтер ҡатынға сәйер тойолғандыр, күҙлек өҫтөнән ғәжәпһенгән ҡиәфәттә ҡарап ҡуйҙы, мәгәр өндәшмәне. Назаровтың эшлекле һәм һаҡсыл тигән даны ҡотҡарҙы, шикелле.

Көн киҫкә ауышҡас ҡына, арманһыҙ булып арып кабинетына ҡайтып инде. Иң борсолғаны — ул булмағанда шылтыратып, һыҙмаларҙан ҡолаҡ ҡағыу ине. Ләкин секретаршаһы биргән ҡағыҙҙа аноним адресат юҡ. Бына һиңә кәрәк булһа! Һәр төрлө ишек тупһаларын тапай-тапай, аҡса табыу буштка буламы ни улайһа? Юҡ артынан йөрөп, көндө әрәм итеүенә түҙергә була, ҡулға килеп инде тигәндә, тота алмай ҡалыу бигерәк үкенесле.

Бер аҙ тынысланып өсөн, өйөндәге телефон номерын йыя башланы. Айгөл бик һиҙгер ҡыҙыҡай, атаһының кәйефһеҙ сағын тиҙ тотоп ала, юҡ ҡына нәмәнән дә ҡыҙыҡ табып көлөргә әүәҫ. Ундағы кәйеф, ғәҙәттә, Хәбир Ғүмәровичҡа ла күсмәй ҡалмай. Ләкин күпме көтмәһен, яуап биреүсе булманы. Булған икән! Был ниндәй кирегә киткән көн? Сәғәтенә күҙ һалды — биш тулып килә. Назаров урынынан тороп тәҙрә янына килде. Ҡулдарын күкрәгенә ҡаушырып, күпме ваҡыт ошо хәлдә ҡалғандыр, кинәт ултырғыс шығырлауына һиҫкәнеп, артына боролдо. Кабинеттың арғы башында, тап уның ҡаршыһында аяҡтарын бер-береһенә салып, ултырғыста йәш кеше ултыра ине. Үҙе күҙҙәрен дә йоммай Назаровҡа төбәлгән. Был ҡараштан Хәбир Ғүмәровичтың арҡаһынан ҡырмыҫҡалар йүгерешкәндәй тойолдо, шулай ҙа ҡаушауын һиҙҙермәҫкә тырышып, егеткә өндәште.

— Ҡустым, һеҙ был кабинетҡа нисек үтә алдығыҙ? Бер кемде лә ҡабул итмәҫкә ҡушҡайным бит.

Егет бер ни ҙә өндәшмәне. Тыныс ғына ултырыуын белде.

— Әллә бик ашығыс йомошоғоҙ бармы?

Ниһәйәт, сәйер егет телгә килде.

— Эйе, бик ашығыс. Һеҙ Назаровмы?

«Ах, бына кем икәнһең һин, ҡара йөҙ. Аҡса өсөн тишектән дә сыҫҡан шикелле үтергә әҙерҙәр...»

— Ә, аңлашылды. Һеҙ, егет аҫылы, аҡса артынан инде улайһа.— Үҙен тыныс тоторға тырышһа ла, ярһып китеүҙән Назаров саҡ тыйылып ҡалды.— Һыҙмаларҙы өҫтәлгә һалығыҙ. Улар минең ҡулда булмайса, бер йыртыҡ аҡса ла ала алмаясаҡһығыҙ.

— Һеҙҙең ни хаҡта һөйләүегеҙҙе аңламайым. Миңә бер ниндәй аҡсаның кәрәге юҡ. Шуны әйтер өсөн генә туҡталғайным — Айгөлдө ике-өс көнһөҙ көтмәгеҙ, унын әлеге мәлдә күҙгә-башҡа күренеп йөрөмәүе хәйерле. Ә һыҙмаларға килгәндә... беҙ уларҙы ҡотҡарырға тырышырбыҙ. Аҡсаларығыҙҙы кире илтһәгеҙ ҙә була.— Егет тынып ҡалды.

Хәбир Ғүмәрович ишеткән ошо хәбәрҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөп етә алмай, ғәҙәтенсә ишекле-түрле йөрөп әйләнде. Һүҙҙең ҡыҙы хаҡында ла барыуы аңына барып еткәс, кинәт һиҫкәнде.

— Айгөл? Айгөл тиһеңме? Ҡайҙа ул?

Ләкин егет ултырған урын буш ине.

## 7

Йорт алдына килеп туҡтаған еңел машинанан тәүҙә Хәмит атылып килеп сыҡты. Ул, выжылдап осҡан күгәүендәй, подъезд ишегендә юғалыуға, яй ғына ҡыбырлап ялтыр баш күренде. Дөрөҫөн әйткәндә, Миңлеғәле әлеге мәлдә үҙен тәпәйенән тоҙаҡҡа эләккән сысҡан кеүек хис итә. Ҡасып ҡотолор әмәле юҡ, ни бер йүнле нәмә уйлап сығара алмай. Машина менән алыҫҡараҡ туҡтарға ине лә, Хәмит үҙ һүҙен һүҙ итеп өйрәнгән, уға минуттар ҡәҙерле. Былай тиҙерәк ҡапҡанға ҡабыры башына ла инеп сыҡмай.

Уға Хәмит артынан йортҡа табан өҫтөрәлеүҙән башҡа сара ҡалманы. Тегеһе мөкиббән китеп, Айгөл бүлмәһен аҡтара ине. Үҙе туҡтауһыҙ һөйләнә.

— Ҡайҙа тығып өлгөргән һуң йүнһеҙ ҡыҙ. Ун минуттай ғына ваҡыт үтте бит юғиһә.— Елкәһен ҡашып бер аҙ торғандан һуң, йәнә пыран-зыран итеп әйберҙәрҙе янъяҡҡа бәргеләргә кереште.— Ярай быларына теймәгән, белгән шикелле төпкәрәк тыҡҡайным. Тәүге мәлдә йән аҫрарлыҡ аҡса сығарырға бата. Тә-әк. Туҡта, туҡта... — Хәмит пеләште йыуыныу бүлмәһенә кереп барған еренән кире һөйрәп сығарҙы.— Теге ҡыҙ аҡтығы башҡа ергә кереп өлгөрмәне бит. Үҙ бүлмәһендә юҡ, бары ошонда булырға мөмкин.

Бер аҙҙан иҙәнгә дөбөр-шатыр һабындар, төрлө ҡаптар оса башланы. Күрәһең, Хәмит башҡаса эҙләү ысулы менән таныш түгел ине. Ысынлап та, был тоҫмаллауҙы әҙәми затҡа хас булмаған тауыш йөпләп ҡуйҙы.

— Таптым! Таптым, шайтан алғыры! Көн оҙоно һәлпәндәп йөрөгәнсе, ошонда ғына эҙләйһе ҡалған.

Күҙендә ҡырағай ҡыуаныс йылтыраған Хәмит, үҙе түҙҙырған ҡаптарға үҙе үк абынып, йыуыныу бүлмәһенән атылып сыҡты.

— Миңлеғәле! Тиҙерәк килтер дипломатты, тегендә, йоҡо бүлмәһендә.— Тегеһе туйтаңлап урап килгәнсе, һыҙмаларҙы ҡараштырҙы.— Барыһы ла иҫән. Ну, ағай-ҡайым, сығараһың былай булғас аҡсаларыңды. Был юлы еңел генә ҡотола алмаҫһың.

Хәмиттең ҡараңғынан ҡараған бесәйҙеке һымаҡ йылтыраған күҙҙәренә, ниһәйәт, сәғәт салынды.

— Алты тула! Ысҡындыҡ бынан тегеләр ҡайтмаҫ элек.— Үҙе ишеккә ынтылған еренән туҡтап, һыҙмаларҙы иҙәндәге дипломат өҫтөнә һалды.— Һаҡла! Күҙеңде ысҡындыраһы булма. Һыуытҡыста башланған зәмзәм бар ине. Бай халыҡты байытҡансы, үҙебеҙ менән алабыҙ.— Хәмит, йырлап ебәреүҙән саҡ тыйылып, аш бүлмәһенә йүнәлде. Моңло тауышы менән пәрейҙәрҙе өркөтөүҙән шыртланы, шикелле.

Миңлеғәле иһә, Хәмит менән бәйләнгәненә йөҙ ҙә беренсе тапҡыр үкенә-үкенә, кескәй ҡатырға сумаҙан янында тороп ҡалды.

— Себен алып китер инде ул һинең ҡағыҙ-һағыҙҙарыңды,— тип һөйләнде ул йәне үртәлеп. Үҙе инде нисәнсе тапҡыр ишек бигеn барып ҡараны — уныһы әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, ни бары өс йоҙаҡҡа бикләнгәйне.— Юғиһә...

Миңлеғәле башлаған һүҙен әйтеп бөтөрә алманы — тап уның ҡаршыһындағы стенанан томан шикелле һыҙылып ҡына сығып, бер фигура хасил булды. Тәүҙә үтә күренмәле тойолған һүрәт бер аҙҙан ир кеше ҡиәфәтен алды. Асҡан ауыҙын яба алмай, иҫе китеп торған Миңлеғәләненең алдындағы сумаҙан өҫтөндә ятҡан һыҙмаларҙы ҡабаланмай ғына алды, күҙ йүгертеп сыҡты һәм шундай уҡ тыныслыҡ менән боролоп кергән ерендә ireп юҡҡа сыҡты. Былар бөтәһе лә күп булһа, бер нисә секунд ваҡыт эсендә булғандыр. Ул күҙҙән юғалғас ҡына, Миңлеғәле иҫенә килеп аҡырып ебәрҙе.

— А-а-а-айй!

— Нимә булды? — Аш бүлмәһенән, бер ҡулына коньяк шешәһе тотоп, Хәмит йүгереп сыҡты.— Ниңә аҡыраһың?

— А... а... албаҫты! Албаҫты!

— Ниндәй албаҫты? Ни һөйләйһең?

Миңлеғәле яуап биреү урынына башын тотоп иҙәнгә сүгәләне. Әле генә булған күренеш уны һеңкәҙәткәйне. Хәмит күпме тартҡысламаһын, унан йүнле яуап ишетә алманы.



## 8

Урман эсендәге яңғыҙ йорт алдында йәш кенә бер кыҙ ултыра. Был тирәлә уның ят кеше икәнлеге әллә кайҙан кыскырып тора — ваҡыты-ваҡыты менән ҡурҡынып тирә-яғына күҙ йүгертеп ала. Унан хәүефләнерлек нәмә күҙенә салынмаған, йорт ишегенә төбәлә.

Өйҙән сығып торорға Айгөлгә хужа егет ҡушҡайны. Гәүҙә ни өсөн шулай кәрәклеген ҡыҙ башына һыйҙыра алмай аҙапланды. Был урман төпкөлөндә дүрт стена эсендә ҡото алынып ултырған кешегә күп кәрәкме. Әммә Айвар тыныс ҡына йылмайып «Барыһы ла яҡшы булыр, әлегә шулай кәрәк»,— тигәс, риза булды. Был сәйер егеттең ниндәйҙер сер төйөнө икәнлеген саҡ ҡына сырамыта башлағайны ул.

Байтаҡ ваҡыт үтте. Ҡыҙҙың күңеленә әкренләп кенә шом йүгерҙе. Әгәр егет ниҙер ҡыла икән, ни өсөн унан йәшерә? Башҡаларға изгелек теләүсе әҙәмдәр эштәрен бер касан да йәшерен-батырын башҡармайҙар ҙа баһа. Арыраҡ бер юл үтә. Туҡта, Хәмиттәр шунан килгәйнеләр түгелме һуң? Моғайын, ҡала яғына алып сығыр. Ағаһының Аҡморонға салбар балағын өҙҙөрөп, унан айыу балаһынан ҡурҡып сарый-сорой килеп йүгереүен иҫләп, кыҙ көлөмһөрәп ҡуйҙы. Аҡморон шул ғына ваҡыт эсендә уға өйрәнеп өлгөрҙө. Йөнтәҫкәйҙән иһә үҙе лә ҡурҡмай. Тимәк, әкренләп кенә юлға ҡуҙғалырға мөмкин.

Айгөл урынынан торҙо. Йорт яғына күҙ ташланы. Унда әллә ни үҙгәреш күренмәне. Аҡморон ҡыҙҙың ниәтен һиҙгәндәй, тирә-яғында бөтөрөлә ине.

— Ебәрәһең килмәйме ни? — Ҡыҙ эттең арҡаһынан һыйпаны. Тегеһе иһә ике тапҡыр өрөп ҡуйҙы.— Әллә һөйләшә лә беләһең инде. Мин китәм, Аҡморон, шулай кәрәк.

Эт сәбәләнеп ҡыҙҙың бер алдына, бер артына сыҡты. Айгөл уға моңһоу ғына ҡарап ҡуйҙы, шулай ҙа бер ни өндәшмәне, һуҡмаҡҡа йүнәлде. Сыйнай-сыйнай бер йортка, бер уға табан йүгергеләгән Аҡморонға яратып ҡарап куйҙы. Ысынлап та, бик зирәк эт. Юҡҡа ғына Айвар уның менән кеше менән аралашҡан шикелле һөйләшмәй икән шул. Айвар иҫенә төшкәс, ҡыҙ атлап барған еренән туҡтап ҡалды. Килешерме икән ошолай кинәт кенә, хатта һаубуллашмай китеп барыу? Егет бит уға бер ниндәй ҙә яманлыҡ ҡылманы. Етмәһә, бик ихлас күренә ине, ярҙам итергә вәғәҙә бирҙе. Әллә инеп сығырғамы? Йыраҡ китеп өлгөрмәне бит, «хуш» тип әйтеүҙән генә теле ҡоромаҫ.

Ҡыҙҙың кире боролоуын күреп, Аҡморон ҡыуанысынан һикерәндәй-һикерәндәй эргәһендә бөтөрөлдө. Әммә Айгөл болдорға йүнәлгәс, көтөлмәгән хәл булды — эт күтәрмәгә һикереп менде, ишеккә арты менән баҫты. Уның бар ҡиәфәте ажарланған януарҙы хәтерләтә ине. Әле генә һөйкөмлө булған йән эйәһенең кинәт үҙгәреүенән йөрәге шомланып, ҡыҙ артҡа сигенде. Эйе, эт уны йортҡа индерергә теләмәй. Артҡа табан әкренләп кенә күскән ҡыҙ шунда үҫеп ултырған ҡайынға башы менән бәрелде. Был уны иҫенә килтерҙе — ауыртыуҙы ла тоймай, баяғы һуҡмаҡҡа тороп йүгерҙе. Эт артынан ҡыуыр тип шөрләгәйне, уныһы ғәйепле ҡиәфәттә ҡыҙ яғына ҡарай-ҡарай, ҡайын төбөнә барып ятты.

Күпме барғанын ҡыҙ иҫләмәй. Тар ғына урман юлы буйлап йүгерҙе лә йүгерҙе. Байтаҡ ер үткәс кенә, ҡатыуы сығып олпат ҡарағай олонона һөйәлде. Эх, ошонда ғына ятып йоҡлар ине ул. Әммә ярамай — оҙаҡламай эңер төшәсәк. Ҡара урманда нисек төн үткәрмәк кәрәк. Әллә юҡҡа ғына киттеме урмансы йортонан? Алама кешегә оҡшамағайны бит, ни тиһәң дә. Хәҙер ҡайҙа ғына бара белә ул кис менән? Айгөл өмөтһеҙләнеп күҙҙәрен йомдо.

Ә ҡабат асҡанда... Уның ҡаршыһында Айвар баҫып тора ине. Шул уҡ һөйкөмлө йөҙ, ҡара бөҙрә сәстәр, үткер ҡараштар. Тик ниҙер етмәгән кеүек — әллә киң йылмайыуы, әллә башҡа нәмә, әйтеүе ауыр. Әле генә ошо кешенән ҡасҡанын онотоп, ҡыҙ ихлас аптыраны.

— Айвар ағай! Һеҙ мине нисек таптығыҙ?

— Мин үҙемде һине урмандан табыр өсөн яратылған итеп хис итә башланым инде, һылыуым.

— Шулай ҙа... Минең арттан йүгерҙегеҙме ни?

— Юҡ, атлап ҡына килдем. Күрәһеңме, минең аҙымдар нисек киң.— Егет ағас ышығына күсте. Байырға ауышҡан ҡояш яҡтыһында уның кәүҙәһенән күләгә хасил булмауын ҡыҙ абайламай ҡалды.

— Йә, аҡыллым, төн йөҙөндә урманда ҡалырға уйламайһыңдыр бит. Минән ҡурҡыуҙан туҡтарға ваҡыт. Үҙ ағаң ышығында тапмаған яҡлауҙы миндә табырһың. Ышан...

— Мин һеҙҙән шикләнмәйем дә ул, Айвар ағай. Тик бына...

— Ни әйтергә теләгәнеңде беләм. Һине йорт тышында көтөргә ҡушҡанға ғәжәпләнгәнһеңдер. Шулай кәрәк ине, һеңлем. Ҡасан да булһа мин һиңә һөйләрмен, әммә хәҙер түгел. Ҡайтайыҡ, Айгөл, инде кис етә.— Айвар тағы ла ниҙер әйтергә уҡталды, ләкин ҡыҙҙың үтеп бөтмәгән шомланыуын иҫләп, бер төргәк ҡағыҙҙы һиҙҙермәй генә

ең эсенә тыҡты. Улар нисәмә кешене төн йоҡоһонан яҙҙырған һыҙмалар ине.

Айвар менән ҡыҙ йорт янына ҡайтып еткәндә, уның янында хужаларса ҡиәфәттә Аҡморон ғына йөрөй ине. Уларҙы күргәс, ҡыуанысынан үрле-ҡырлы һикерәндәне. Баяғы ҡылығы өсөн ғәфү үтенгәндәй, Айгөл янында бөтөрөлдө.

— Һеңлем, бик йонсоу күренәһең. Бар, бик булмаһа, йылғаға төшөп йыуынып мен. Аҡморон, Айгөлдө оҙат, ишетәһеңме?

«Ишетәм дә ул. Тик ҡыҙ миңә үпкәләгән. Йортҡа кертмәгән өсөн».

— Айгөл һиңә үпкә тотмай. Шулай бит, һеңлем?

— Үндай аҡыллы эткә оҙаҡ асыуланып буламы ни. Киттек, Аҡморон. Мин хәҙер, Айвар ағай.

Ҡыҙ күҙҙән юғалғас, Айвар еңел һулап тәҙрәгә күҙ ташланы. Унда, карауатта, тып-тыныс ҡына ҡиәфәттә Айварҙың кәүҙәһе ята ине. Әгәр ҙә йортҡа кереп уны таба торған булһа, Айварҙы һәләк итерен ҡыҙ, әлбиттә, белмәй ине.

## 9

Миңлеғәле машинала ғына иҫенә килде.

— Әйтәһеңме-юҡмы, ҡайҙа ҡуйҙың һыҙмаларҙы? — Хәмит ярһығайны. Ҡулына килеп инде тигәндә, ҡабат ысҡынған аҡса тоҡсайы иҫенә төшкән һайын уны сығырынан сығара.

Тегеһе алйот ҡиәфәтендә ике күҙен ышҡып алды, башын һыйпап ҡараны. Әле генә булып үткән хәл ҡаҡ түбәһендә ҡара урман үҫтермәгәнме, тип шикләнде, буғай.

Белер-белмәҫ көйөнә этенә-төртөнә рулде борғолаған Хәмит әфәнде Миңлеғәлене булмаған һаҡалынан тотоп һелкерҙәй булып килә. Юлға кәләп һалып йән-фарманға елгән был ен арбаһынан әзмәүерҙәй КамАЗдар ҙа шөрләп, юл ситенә һырығышып ҡына үтеп китәләр, мәхлүктәр.

— Бел... Белмәйем, Хәмит.— Миңлеғәле, ниһәйәт, телгә килде. Тотлоға-тотлоға ниҙер аңлатырға маташып ятҡан көнө.— Ишектәр бик... бикле ине, юғиһә. Үҙем тикшерҙем. Стенанан сыҡты, ышанмаҫһың бына. Кеше... Кеше тиһәң, кеше түгел, үҙе ир ҡиәфәтендә. Мин ни эшләргә белә алмай ҡаттым да ҡалдым. Һыҙмаларҙы алды ла... алды ла кире стенаға инеп юғалды.

— Һин ул әкиәтеңде бала-сағаға һөйлә. Ҡайҙа ҡуйҙың ҡағыҙҙарҙы? — Хәмит машинаны юл ситенә туҡтатты.— Әйтмәһәң, үҙеңә үпкәлә. Минән йәшереп кенә аҡса эшләмәксе булдыңмы? Барып сыҡмаҫ. Әгәр ҙә һиндә булғанлығы аҙаҡ асыҡланһа, минән яҡшылыҡ көтмә.

— Һин нимә... Мин ул һыҙмалар менән ни эшләйем? Белгән нәмәм түгел.

Хәмит ни эшләргә белмәй шымып ҡалды. Сәйер, бик сәйер ине былар бөтәһе лә. Миңлеғәле — бер ҡатлы әҙәм, уның бындай юлға баҫырына үҙе лә ышанмай. Кәперенеп килеүе уны ҡурҡытыу өсөн генә. Әлеге ҡиәфәтен күргәс, уның ҡыҫылышы юҡлығына тамам ышанды. Ә һуң кемдең эше булырға мөмкин? Ишектәр бикле ине, быныһы хаҡ. Фатирҙа башҡа кешенең булмауы көн кеүек асыҡ. Ни булһа ла булды, һыҙмаларҙан ҡолаҡ ҡаҡтылар. Ә бит бөгөн теге аҡса тоҡсайын һелккеләргә тейештәр ине. Шылтыратып әйткәндәрҙер, хәҙер уның һыҙмалар менән барҙа күренеүен көтәләр. Ә улар — юҡ, осто... Уны көтөүсе галстуктағы ҡара күҙлек кейгән әҙәмде иҫләп, Хәмиттең кәйефе бөтөнләй ҡырылды. Эйе, ул халыҡ шаяртҡанды яратмай. Әгәр бөгөн ысҡынмаһа, ни булырын әйтеүе ауыр. Дипломатта тағы бер һыҙма бар бит әле. Уныһы улай уҡ мөһим түгел, әммә аҡса сығарырға бата. Әлегә ҡара көнгәсә тоҙлап торорға тура килер.

— Йә, ярар, асыуланма, Миңлеғәле дуҫ. Ярһып киткәнмен. Ә хәҙер аэропортҡа илтеп ҡуй. Миңә бынан ысҡынырға кәрәк. Мөмкин тиклем тиҙерәк. Шунһыҙ миңә — хана. Аңлайһыңмы?

Тупаҫ телдең, мыжыҡ көҙ көнө һирәк кенә күренә торған ҡояш нурҙарылай, һаран йомшаҡ һүҙҙәренән Миңлеғәле иреп китте.

— Хәҙер. Булдырабыҙ уны.

Рулгә Миңлеғәле күсеп ултырғас, ен арбаһы әҙәм рәүешле машина ҡиәфәтен алды.

Аэропортҡа барып еткәнсе ләм-мим өндәшмәнеләр. Хәмит нисек итеп эҙ юғалтыу хаҡында баш ватһа, Миңлеғәле гәзиз башҡайы артабан ни күререн уйлап борсола ине. Машина туҡтар-туҡтамаҫ һикереп төшкән Хәмит юлдашына иҙәне.

— Әйҙә, сыҡ бынан йәһәтерәк.— Ышығыраҡ урынға еткәс, Миңлеғәленең ҡолағына эйелеберәк бышылданы.— Эҙгә төшөүҙәре бар. Беҙ хәҙер ике ҡапҡан уртаһында. Берҙән, ҡыҙҙың юғалыуы мәғлүм булһа, тайыш табандар теләһә ҡайһы минутта эләктереп аласаҡтар. Икенсенән... — Был хаҡта әйтергә теле әйләнмәне, ахыры. Закон-ды сүп тә күрмәгән әҙәмдәр, һүҙ аҡса хаҡында барған-

да, уның һөйәгенән елеген һурып аласаҡтар — быныһы хаҡ. Шулай ҙа иҫкәртеүҙе кәрәк тапты.— Әгәр ҙә минең хаҡта һораһалар — белмәйһең дә, күрмәйһең дә. Беҙ һинең менән иртән генә күрештек, аңланыңмы? Хәҙер кит, э, юҡ, туҡта. Билет алышырға ярҙам итәһең инде, туған. Хәҙер йәй, үҙең беләһең.— Әйтеүен әйтте, шулай ҙа Хәмит бер аҙ икеләнеп торҙо. Эҙенә төшөп, телен сисһәләр? Эй, ҡаҙалып китһен, барған ерендә уларҙың килерен көтөп, вокзал башында аяҡтарын һәлберәтеп ултырмаҫ бит инде. Ай күрҙе, ҡояш алды. Вәссәләм...

Этешә-төртөшә, бер сәғәт була тигәндә, билет алдылар. Дөрөҫ, бының өсөн Миңлеғәлегә күҙ йәштәрен сығарып, етем ҡалған ғәзиз улан ролен башҡарырға тура килде. Әгәр ҙә үҙендә ниндәй бөйөк әртис әрәм булыуын ситтән генә ҡарап торһа, пеләш баш ғали йәнәптәре ысынтылап балауыҙ һығырға тотонор ине, хәлбуки. Ҡыҙғаныҫҡа, аллы-артлы тызаңлап сапҡан Хәмит кенә бындай ижад емеше менән рухи байығыу мөмкинлегенән мәхрүм булды.

Миңлеғәленең ҡот осҡос талантын һағыҙаҡ шикелле кескәй тәҙрәгә ябырылған әҙәми заттар ғына түгел, ошо бәләкәй генә тишек артында үҙен хан ҡыҙынан кәм тотмаған йыуа-ан ханым, хатта, баһаланы. Һөҙөмтәлә әфәндебеҙ үҙен тапай яҙып өйөлөшкән халыҡ ағымын, тештәренә ҡәҙерле ҡағыҙ киҫәген эләктереп, бик бәхетле ҡиәфәттә йырып сыҡты. Уның май ҡояшындай балҡыған йөҙөн күреп, кассирша ханым, бахырҡайҙың үлгән әсәһе ҡабаттан терелде, буғай, тигән һығымта яһаны аптыраған көндән.

— Ярай, Миңлеғәле дуҫ, ҡотҡарҙың. Мәңге онотмам,— тине Хәмит ҡанатланып. Әммә ләкин «мәңге» тигән төшөнсәгә нисә минут ваҡыт бүлеүен асыҡлап торманы.

Хәмиттең йүгерә-атлай алыҫлаша барыуын күҙәтеп торған Миңлеғәле, тегеһе осош майҙанына инеп киткәс, еңел тын алып ҡуйҙы. Бер иңкештән ҡотолдо, артабанниҙәр булырын әйтеүе ауыр. Әллә ауылға, әсәй ҡарсыҡ янына тайырғамы? Дачаға барып ятҡанда ла була. Аҙнаун көнгә күҙҙән юғалып торорға кәрәк. Иртәме-һуңмы, эҙгә төшмәй ҡалмаясаҡтар.

Шундай уйҙар менән Миңлеғәле еңел машинаһының ишеген асты. Башын күтәргәндә, уның янында ҡара күҙлек кейгән галстуклы кеше баҫып тора ине.

## 10

Иртәнге томан иренеп кенә тарала. Ни тиклем ергә һылашырға тырышмаһын, аҙмы-күпме ваҡыттан был аҡ рәшә юҡҡа сығасаҡ. Ҡайынға һөйәлеп, үҙ уйҙарына батып торған Айвар ошо күренештән үҙенсә һығымта яһаны — эйе, һәр нәмәнең үҙ мәле. Кеше йәш сағында эшләргә тейеш эштәрен ҡартлығына ҡалдыра алмай. Уға, Айварға, кешелек йәмғиәтенә әйләнеп ҡайтырға ваҡыт. Бында үҙ-үҙенә бикләнеп йәшәүҙән туйҙы. Шаулы тормошҡа һыуһаған күңеле уны ҙурыраҡ ҡалаларға, иркен далаларға әйҙәй. Тик бер мәсьәлә — йәшәй алырмы ул унда? Элекке замандарҙа мәскәй исемен күтәреүсе әбейҙәр тик урманда йәшәр булған. Тимәк, йә кешеләр уларҙы һыйҙырмаған, йә үҙҙәре теләмәгән. Был уйынан Айвар көләмһерәп ҡуйҙы. Ул мәскәй бабай булып сығамы ни улайһа?.. Сәйер, бик сәйер...

Кисә генә ҡыҙ менән булған хәл күңеленән китмәй. Әгәр Аҡморон ҡамасауламаһа, Айгөл мотлаҡ йортҡа инер ине. Ә ул саҡта... ул саҡта Айварҙың күсермәһе ғүмерҙә лә үҙ кәүҙәһенә әйләнеп ҡайта алмаясаҡ. Бына бит нисегерәк...

Егет Айгөл йоҡлаған арала һыҙмаларҙы ҡарарға сыҡҡайны. Уларға бер күҙ һирпеп ҡарау ҙа етте — ҡағыҙҙар теүәл түгел. Төргәкте бөтә алғайны ла һуң, ҡайҙа булырға мөмкин? Тимәк... Тимәк, теге икәүҙең дипломатында булырға тейеш. Һыҙмаларҙы тулы булмаған килеш ул ҡайтара алмай, ярты-йорто эште йәне һөймәй. Бер юл ҡала — эҙенә төшөргә. Бына шулай итеп үҙенән-үҙе хәл ителде. Тап бөгөн Айвар ҡасандыр үҙ теләге менән ташлап киткән кешелек йәмғиәтенә әйләнеп ҡайтасаҡ.

Айвар ныҡлы ҡарарға килеп, йорт ишеген асты. Ҡыҙ уянғайны инде. Уның ишектән инеүен күреү менән, онотоп ҡуйырға ҡурҡҡандай, ҡабаланып һүҙ башланы.

— Айвар ағай! Айвар ағай, миңә хәҙер үк ҡайтырға кәрәк. Әсәйемдәр минең ҡайҙа икәнлекте лә белмәй. Төнө буйы көтөп, ут йотоп сыҡҡандарҙыр.

— Мин тап кireһен уйлайым бит әле, һеңлем. Һиңә хәҙер ҡалала күренеү ҡурҡыныс. Үҙ ағаңдың ниндәй хәлдә урман төпкөлөндә ҡалдырып киткәнен онотторға ярамай. Уның артында ниндәй кешеләр тороуын беҙ белмәйбеҙ. Бер үҙе генә ундай эшкә тотоноуына ышанмайым, сөнки был бик етди нәмә. Иң яҡшыһы — һиңә хәҙергә ошонда ҡалып тороу.

— Һуң, Айвар ағай, аңлайһығыҙмы, әсәйемдең йөрәге

насар. Белә-күрә нисек итеп мин уны ут йотоп ҡайғырып ултырырға мәжбүр итәйем?

— Ә һинең менән бер-бер хәл булһа, әсәйең ҡайғырмаймы инде? Борсолма, мин уларҙы иҫкәртермен.— Айвар саҡ «иҫкәрткәнмен», тип әйтеп ысҡындырманы.— Ни бары ике-өс көн. Ошо ваҡыт эсендә мин барыһын да рәтләргә тырышырмын. Һиңә яңғыҙыңа ғына ошо йортта ҡалып торорға тура килер. Ҡурҡма, был урман тыныс, янында Аҡморон менән Йөнтәҫкәй булыр. Уларға ышанырға мөмкин.

Айгөл бер аҙ уйланып торҙо.

— Ярай, Айвар ағай, мин ҡалдым да ти. Ә һеҙҙең эшегеҙ?

— Уныһы өсөн борсолмаһаң да була. Мин сит илгә китергә йыйынмайым.

Иртәнгене ҡапҡылап алғас, Айвар юлға йыйынырға кереште. Гәзиткә уралған һыҙмаларға ҡарап, бер ҡарарға килә алмай торҙо. Юҡ, уларҙы үҙе менән ала алмай Айвар. Юлда ниндәй генә көтөлмәгән хәлдәр булмай. Ышаныслыраҡ урынға йәшерергә лә...

— Әллә берәй нәмәгеҙҙе оноттоғоҙмо, Айвар ағай?

— Юҡ, Айгөл. Былай ғына.

Кәрәк-яраҡтарын ҡабалан ғына ҡатырға сумаҙанға тултырҙы. Тап теге һыҙмалар ятҡан кеүек дипломат...

Айвар кейенеп ҡара күҙлек эләктергәс, Айгөл ҡулдарын сәбәкәйләп алды.

— Уй, Айвар ағай, һеҙҙе танырлыҡ та түгел.

— Шулай булһын шул, һеңлем. Кәрәкле ҡоштарҙы өркөткәнсе, хәйләкәрлек менән алдырыу яҡшы.

Егет ишеккә йүнәлгәс, Айгөлдөң йылмайыуы ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты.

— Китәһегеҙме ни? Ә мин нисек йәшәрмен һуң... яңғыҙым?

— Ҡурҡма, Айгөл. Һин бит батыр ҡыҙ. Бер нәмә лә булмаҫ, бары үҙеңде ышаныслы тоторға ғына кәрәк.

Шулай ҙа егет икеләнеп ҡалды. Әллә бында ғына ҡалып, юлға күсермәһен генә ебәрергәме? Күҙ асып йомғансы, эҙҙәренә төшәсәк. Әммә был осраҡта Айгөлгә тағы тышта көтөргә тура киләсәк. Ҡалаға ҡайтырға сығып, әллә нәмәгә осрауы бар. Етмәһә, үҙ ғүмере лә ҡурҡыныс аҫтында була бит әле.

Икенсенән, ул кешелек йәмғиәтенә әйләнеп ҡайтырға ҡарар итте. Унда күсермәһен генә ебәреп ята алмай бит инде. Тимәк, хәл ителде — ул юлға сыға.

— Айгөл аҡыллым, миңә ни бары ике көн кәрәк, аң-

лайһыңмы? Артабан да һуҙа алмайбыҙ. Атайың һыҙмаларҙы теүәл килеш ҡулына алырға тейеш.

— Йә, ярар, Айвар ағай, мин ҡалам. Һеҙ ҡайтҡансы бер ҡайҙа ла юғалмаҫҡа һүҙ бирәм.— Айгөл үҙен мәжбүр итеп тигәндәй йылмайҙы.

Айвар һуҡмаҡ буйлап урманға кереп юғалғансы, күҙен алмай ҡарап торҙо ҡыҙ. Егет күренмәй башлағас, кинәт йөрәген ҡурҡыу баҫты. Уның артынан тороп йүгерергә уҡталып ҡуйҙы. Ләкин Айварҙың һуңғы һүҙҙәре иҫкә төшөү менән, был теләге кинәт һүрелде. Атаһы уның өсөн өҙөлөп тора. Үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр ярҙам күрһәтергә мөмкинлек тыуғанда, ҡамасаулаһынмы инде Айварға? Етмәһә, егет уларға ете ят кеше, шулай ҙа үҙ бәләһендәй йөрәгенә яҡын ҡабул итте уларҙың мәшәҡәттәрен.

Ҡыҙ моңайып ҡына йорт ҡаршыһындағы эскәмйәгә барып ултырҙы.

## 11

Юлға сығыуын сыҡты, әммә эште низән башлары Айварға ҡараңғы ине. Эх, әгәр ҙә һыҙмаларҙың тулы булмауын элегерәк белһә! Уның ҡарамағында теүәл төн бар ине бит. Файҙалана алманы. Тағы бер көндө бушҡа үткәрә алмай ул.

Хәҙерге мәл иң уңай юл — кеше аяғы һилерәк урынды табыу һәм күсермәһен ярҙамға саҡырыу. Энәне кәбәндән эҙләп, теүәл аҙнаны бушҡа үткәрергә була. Ә Айгөл урман төпкөлөндә ике көндән дә артыҡ ҡала алмай. Һәр саҡ ата-әсәһе ҡосағында, дуҫтары янында ғүмер итеп өйрәнгән балаға был да самаһыҙ күп.

Айвар һуҡмаҡтан ситкә боролдо. Бынан алыҫ түгел һунарсыларҙан ҡалған ҡыуыш булырға тейеш. Шунда туҡтарға тура килер. Үҙ урманындағы һәр төпһәне яҡшы белгән кешегә уны табыуы әллә ни ҙур эш түгел — күпмелер ваҡыттан егет уның ҡаршыһында баҫып тора ине. Сит-ят күҙгә бәрелеп тормай ине ҡыуыш. Ел-ямғырҙан ышыҡланырға тип кенә әтмәләнгән нәмә ҡуйы сауҡалыҡ араһында урынлашҡан. Саҡ ҡына түбәндә йылға ағып ята. Быны ҡорған кеше, ысынлап та, урынды белеп һайлаған.

Егет үрелеп эскә күҙ ташланы. Байтаҡтан кеше аяғы баҫмағанлығы әллә ҡайҙан күренеп тора — ҡыуыш эсендә үлән күпереп үҫкән. Айвар, эйелеп инеп, шундағы түшәлгән келәм һымаҡ ишелеп ятҡан сирәм өҫтөнә ултырҙы. Башынан кинокадрҙағы һымаҡ теҙелеп, бер минут эсендә

йөҙ күренеш үтеп өлгөрҙө. Был уның игеҙәге тышҡа атыла ине. Егет башҡа уны ауыҙлыҡлай алманы, яй ғына һуҙылып үлән өҫтөнә тәгәрәне.

Бына ул урман буйлап елә. Секунд та ваҡыт үтмәне, Айвар урман төпкөлөндәге үҙ йортоноң ҡаршыһында баҫып тора ине. Эскәмйәлә Айгөл ултыра. Ҡайһылай моңһоу уның күҙҙәре! Ҡыҙ уны күрмәне, әлбиттә. Теләһә күренә лә ала бит ул. Әллә алдында хасил булып, күңел күтәргес бер һүҙ әйтергәме? Юҡ, ярамай... Айвар ҡыҙ ултырған эскәмйәне урап сыҡты ла артабан юл тотто.

Артында йәшен тиҙлеге менән үткән саҡрымдар һуҙылып ҡала. Егет ҡарашын да күсереп өлгөрмәне, уның алдында бейек-бейек йорттары менән ишелерҙәй булып ултырған ҙур ҡала һуҙылып ята ине. Ҡайһы урынға һуғылырға тейеш әле ул? Уға кем кәрәк? Тәүге сиратта, Айгөлдө эҙләп, уның йортона килеп сыҡҡан еңел машинаны табырға. Айварҙың фотоаппарат кеүек һәр нәмәне үҙенә һеңдерә барған хәтере уның номерын тиҙ күҙ алдына баҫтырҙы. Хужаһы ҡайҙа йәшәй һуң? ЭВМ-дағы кеүек хәтер китабы йәнә аҡтарылды. Секундтың йөҙҙән бер өлөшө эсендә меңләгән машина хужаһының адресы күҙ алдынан үтте.

Əһə, бына ҡайҙа ул! Күҙ алдында хасил булған адресҡа текәлде егет. Уға әллә ни көс түгәһе лә түгел — үҙенән-үҙе ошо фатир ҡаршыһына күсәсәк. Башын күтәргәндә, баҫҡыста тора ине. Ҡыңғырау төймәһенә баҫты. Ләкин өндәшеүсе булманы. Белә — фатирҙа кеше бар. Берәү генә лә түгел, икәү булырға тейештәр. Асмайҙар, кемдәндер шөрләгәндәр. Ярай, һорауһыҙ ғына инергә тура килер, ағай-эне, тупаҫыраҡ булһа ла.

Ул күләгәләй шым ғына ингәндә, Миңлеғәле диван өҫтөндә ята ине. Күҙҙәре йомоҡ, башы марля менән бәйләнгән. Йөҙө күгәргән. Ныҡ ҡына бәргеләгәндәр быны. Аш бүлмәһе яғынан ҡыштыр-ҡыштыр йөрөгән, сынаяҡ-һауыт шалтыраған тауыш ишетелә. Күрмәһә лә, белә Айвар — урта йәштәрҙәге, йөҙөндә ҡайғы билдәһе ятҡан ҡатын...

Йоҡлауы файҙаға булды әле был хәсрәт енәйәтсенең. Тағы ла бер күҙенә күренһә, биллаһи, йөрәге ярыласаҡ.

Айвар шундағы ултырғысҡа ултырҙы. Бер ни ҙә өндәшмәне, тегенең мейеһенә бойорҙо.

«Мин ни һораһам, шуға яуап бирәсәкһеңме?»

— Эйе.

«Кем туҡманы?»

— Күҙлек кейгән әҙәм.

«Ни өсөн?»

— Һыҙмаларҙы таптыра.
«Улар ҡайҙа?»
— Юғалды.
«Ә Хәмит?»
— Көньяҡҡа осто.
«Ҡасан?»
— Кисә кис.
«Ҡайһы ҡалаға?»
— Сочи.
«Унда тағы һыҙмалар бармы?»
— Эйе.
«Ҡайҙа?»
— Сумаҙанында.
«Хәмит хәҙер ҡайҙа?»

Гипноз аҫтындағы Миңлеғәле ыңғырашты. Айвар ҡулдарын уның йөҙө буйлап йөрөттө. Был үҙ файҙаһын бирҙе, шикелле — әлегә тиклем башынан үткәндәрен автоматик рәүештә генә ҡабатлаған Миңлеғәле кәрәкле информация тулҡынын тотоп алды.

— Ял йортонда.
«Ниндәй?»
— «Ынйыҡай».
«Йәшәгән бүлмәһе?»
— Икенсе ҡат, һулдан өсөнсө.

Ишек шығырлап асылды. Миңлеғәленең ҡатыны гәжәпләнеп үрелеп ҡараны.

— Атаһы! Атаһы тим, кем менән һөйләшәһең?

Тегеһе тертләп уянды.

— Мин? Ниңә йөрөйһөң бимазалап? Йоҡлап ҡына киткәйнем. Үҙ йортоңда ла тыныслыҡ юҡ... — Һөйләнә-һөйләнә арты менән боролоп ятты.

Ҡатынҡай гәжәпләнгән ҡиәфәттә уға ҡарап торҙо ла башын сайҡай-сайҡай бүлмәнән сығып китте.

## 12

Юҡ, урман төпкөлөндә ниндәй хазинаның әрәм булып йөрөүен онотманы Солтан. Йомош табып та, бер ниндәй сәбәпһеҙ ҙә, әйләнгән һайын алыҫ туған тейешле Ишмырҙаларҙа ураланды. Һәр саҡ тиерлек янында — ҙур фургонлы машина йөрөтөүсе әшнәһе. Икәүләп һунарға тип сығып киткән булалар, көнө буйы һәлпәндәп йөрөп, һуҡыр өйрәк тә ата алмай кире әйләнеп ҡайталар. Уларҙың тиккә генә был тирәгә һырыҡмауҙарын хужа һиҙҙе, әлбиттә, ләкин һәр саҡ томанлы ғына яуап менән хушланырға мәжбүр булды.

Тик торғанда был икәүҙең Байгилде ауылына ғашиҡ булыуының сәбәбе башҡала ине. Ул да булһа — урман ҡараусының ҡулға эйәләшкән айыуы. Тотоуын тота алһалар, урынлаштырыуы ҙур мәсьәлә түгел — Солтандың зоопаркта танышы бар. Шуның аша һис мәшәҡәтләнмәй генә осорорға мөмкин. Етмәһә, уныһы ла был тайыш табан арҡаһында аҡса эшләп алыуҙан баш тартмаясаҡ. Заманы шундай: кем йылғырыраҡ — шул бай. Дөрөҫөн әйткәндә, әлеге танышы булмаһа, был эшкә тиҙ генә тәүәккәлләп тотонмаҫ та ине Солтан. Тегеһенә бер генә һүҙ ысҡындырғайны, шул да етте. Әллә ҡайҙан машинаһын юллап табып, күңелгә бигүк ятмаҫтай томһайған әҙәм менән әшнәләштереп ҡуйҙы.

Солтан Ишмырҙаға үҙенең ниәттәрен еткерергә шыртлай ине. Ул — ауыл кешеһе, тәбиғәтендә лә шул ауылсалыҡ. Күҙгә бәрелеп торған ҡырын эшкә үлтерһә лә тотонмаясаҡ. Етмәһә, урман ҡараусыға ҡаршы. Айварҙың ҡыҙын нисек ҡотҡарғанын ул онота торғандарҙан түгел. Тимәк, уның ярҙамына өмөт итәһе түгел, хатта, киреһенсә, һағыраҡ ҡыланырға тура киләсәк. Бер-бер ҡырын эште һиҙә ҡалһа, ата-инәңдең исемен һорап тормаҫ.

Урмансы менән һағыраҡ ҡыланырға кәрәклекте Ишмырҙа менән һөйләшкәндә аңланы ул. Бына нисә йыл инде ошо урмандарҙа ҡырын эш эшләүсе юҡ, тип ғәжәпләнеп тә, һоҡланып та һөйләй уныһы. Тәүҙәрәк осраштырғылаған, ләкин иң ҡыҙған мәлдә генә, тәүлектең ниндәй ваҡыты булыуға ҡарамай, ҡарауылсы өҫкә килә лә сыға икән. Ошо хаҡта ишеткәс, Солтан был урман ҡарасҡыһының ҡайҙалыр алыҫҡараҡ киткән сағын һағаларға кәрәк тигән һығымтаға килде. Ниәтенән баш тартаһы килмәй ине уның.

Күпме ваҡыттың бушҡа үткәнен күреп, күңеленә төшөнкөлөк үрелә башлағайны. Ләкин һуңғы ваҡиғалар һүнә барған өмөттө яңыртты. Көн дә тигәндәй ҡарауылсы йортон күҙәткән Солтан сәйер хәлдең шаһиты ине — урмандағы яңғыҙ йортта йәш кенә ҡыҙ пәйҙә булды. Уның кем булырға тейешлеген ихласлап муйын өҫтөндә һерәйеп торған сүмесендә ҡайнатырға ла өлгөрмәне, ҡыҙ йоратының артынса уҡ тиерлек машина сабып килеп етте. «Ба-а! — тип башына ике ҡуллап йәбеште Солтан,— туй каруаны тиерһең. Ҡоҙа менән ҡоҙағый ғына етмәй бында. Кейәү үҙере лә бар хатта». Мәгәр кейәү бахырыңа салбар балағын бер сәкәләүек эткә һыйлап, табаңын ялтыратырға тура килде. Был икәүҙең айыу балаһынан ҡурҡып, ҡабат әйләнеп килмәҫтәй булып аҡырышып сабыуҙарына ихлас һаһаһайлап көлдө Солтан.

Бына бөгөн дә был эшкә ниңә тотоноуҙарына үкенеп, урман буйлап һәлпәңдәйҙәр. Отпускыһы үтеп бара, әммә ошо тирәлә уралыуҙан фәтеүә сығырҙай тойолмай. Солтандың юлдашының мыштым булыуына йәне көйә — күңелде асырҙай нәмә ишетермен тимә. Һыу ҡапҡандай арттан һөйрәлеп килә, «эйе» менән «юҡ»тан башҡа һүҙ тартып алырлыҡ түгел.

Улар ҡарауылсы йортона алып бара торған һуҡмаҡҡа килеп сыҡты. Шунда үҫеп ултырған имән ышығына саҡ һөйрәп өлгөрҙө Солтан ығыш Кәбирҙе — кескәй юл кинәт боролған ерҙән урмансы күренде. Тәүҙә танымаһылар. Ысынлап та, нисәмә йыл төпкөл урманда йәшәгән кешенең ошондай һомғол һылыу егет ҡиәфәтенә инеүе сәйер ине. Сит-ят күҙгә салынмаҫҡа тырышыуҙары ваҡытында йәшеренергә мөмкинлек бирҙе. Әгәр һуҡмаҡтан былай табан килһә, Айвар уларҙы күрмәй ҡалмаҫ ине, моғайын. Бәхеткә, тегеһе ситкә ҡайырылып, урман төпкөлөнә китте. Солтан уның шундай фырт ҡиәфәттә шырлыҡта ни эшләргә самалауын аңларға маташып, байтаҡ торҙо. Хатта ки Кәбир:

— Ары атламайбыҙмы булмаһа! — тип һалдырҙы. Был иһә Солтан ғали йәнәптәренә тик торғанда имән һөйләшә башлаған һымаҡ тәьҫир яһаны. Шуға күрә аптырап бер алдына, бер артына, бер юлдашына текәлде.

Шул мәл көтөлмәгән хәл булды — Айвар киткән яҡтан томанлы фигура килеп сыҡҡайны. Солтан, күҙемә күренәме әллә тип, һиңкеп торҙо хатта. Ул нәмә йәшен тиҙлегендә күсә барған һымаҡ ине. Бер урында хасил була, юҡҡа сыға һәм, ҡайҙа булды был тип аптырап торған арала, байтаҡ алыҫта торғаны күҙгә ташлана. Бер юғалып, бер барлыҡҡа килеп, был сәйер һын, ниһәйәт, томан шикелле юҡҡа сыҡты. Хатта үҙен йылғыр әҙәмдәрҙән һанап йөрөгән Солтан да иҫенә килә алмай ҡалды.

— Күрҙеңме?

Кәбир бик тә аптырап уға төбәлде.

— Нимәне?

— Нимәне, нимәне... Хәйер, һиңә аңлатып торғансы...

Әммә минут та ваҡыт үтмәне, әле генә күргәненең ысын булғанлығына Солтан үҙе лә шикләнә башлағайны.

— Был урман төпкөлөндә йөрөй торғас, әллә аҡыл яғы самалана башланы инде,— тип һөйләнде ул аптыраған көндән. Унан, иҫенә килеп, Кәбиргә бойорҙо.— Бына нимә — тиҙерәк тай ауыл яғына. Машина менән килерһең. Ә, онота яҙҙым, үҙебеҙҙең әйберҙәрҙе лә йыйып тейәп алырһың. Теге тайыш табанды тота алһаҡ, ауылға ҡабат ҡайтып тормабыҙ. Урмансы ҡайҙалыр китергә йыйына,

шикелле. Бөгөн эләктерә алмаһаҡ, башҡа йөрөүҙән файҙа юҡ.

Тегеһе баш ҡына ҡаҡты ла ауыл яғына ҡыбырланы. Уның бик тә ҡабаланып, һәр үләнгә текәлеп ҡарай-ҡарай мыштырлауына йәне көйһә лә, Солтан өндәшмәне. Әгәр саҡ ҡына тауыш сыҡһа, теге урман ҡарасҡыһы йылп итеп килеп сығыр кеүек тойолдо. Шуға хатта ғүмерҙә булмағанса шыбырлап ҡына бирҙе әмерҙе лә.

Байтаҡ ваҡыт тын алырға ҡурҡып ултырҙы ул имән ышығында. Кәбирҙең үжәтлегенең бер килеп файҙаһы тейҙе — йылдамыраҡ әҙәм булһа, әллә ҡасан донъя яңғыратып машинаһын үкертә-үкертә килеп етер ине. Быға иһә арҡыры ятҡан сүпте алып ташлау өсөн дә ваҡыт кәрәк. Иң ҡурҡҡаны — урман ҡараусының теге килгәнсе китеп өлгөрмәүе. Әгәр бер-береһенә тап булһалар, яуапты Солтанға бирергә тура киләсәк.

Әкрен генә ел иҫте. Ойоған аяҡтарын нисек яҙырға белмәй, ултырған урынында борғоланды хәсрәт аусы. Ләкин шул мәл янындағы ағасҡа һеңерҙәй булып йәбеште — унан бер егерме аҙымлап ситтәрәк әлеге үтә күренмәле һын баҫып тора ине. Әкренләп кенә был яҡҡа боролдо. Ғәжәпкә, йөҙ-ҡиәфәтен ап-асыҡ күреп була. Һыҙаттары бер асылып, бер төҫһөҙләнеп торһа ла, ир кеше икәнлеген сырамытырға мөмкин. Бер нисә секунд ҡына торҙо һәм шулай уҡ көтөлмәгәндә юҡҡа сыҡты.

Солтан аңына килә алмай байтаҡ ултырҙы, һәм был уны теләмәгән осрашыуҙан ҡотҡарҙы. Әлеге һын юғалған яҡтан урмансы күренде. Айвар тирә-яғына иғтибар итеп тормай, тиҙ-тиҙ атлап һуҡмаҡҡа сыҡты ла оло юл яғына йүнәлде. Солтандың тәүге теләге — баш һуҡҡан яҡҡа тороп йүгереү ине. Ҡарауылсының янынан үтеп китеүе был теләгенән һүрелдерҙе. Кәбир машина менән урман юлынан килеп сыҡҡансы, ултырҙы ла ҡуйҙы ул урынында. Тегеһенең һораулы ҡарашын күреп, айнығандай булды. Айыуҙы йә бөгөн тоталар, йә башҡаса килеп йөрөмәйәсәктәр ине. Быны Солтан хәҙер ап-асыҡ аңланы, шуға күрә йөҙөндә тәүәккәллек хасил булғайны.

— Машинаны ошонда ҡалдырабыҙ, ары үтеп булмай. Әүрәтеп килтерергә тура килер.

— Ыһы.

Һәр саҡ тигәндәй йорт тирәһендә уралған айыу балаһын табыуы ауыр булманы. Теге сәңкелдәк эт һиҙмәһен өсөн, алыҫыраҡтан йөрөһәләр ҙә, айыу ҙа йорт ҡарауыллап ятҡан лауылдаҡтар затынан түгел — байтаҡ алыҫта үҫеп ултырған ҡырағай ҡурай еләген сүпләп йөрөй ине. Солтан януарға һаҡ ҡына яҡынлашты — ни тиһәң дә,

айыу, шөрләтә. Ләкин тегеһенең бер ниндәй ҙә ҡурҡыныс вәғәҙә итмәгән мөләйем күҙҙәрен күреп, батырайҙы. Үҙе менән алып килгән тәпәндән мул ғына сумырып бал алды ла айыу балаһына һондо. Тегеһе тәүҙә, был әҙәм ни эшләй икән, тип, буғай, аптырабыраҡ торҙо. Балдың таныш еҫе үҙенекен итте — Йөнтәҫкәй әкренләп кенә был икәүгә яҡынлашты. Һағайыбыраҡ ҡалһалар ҙа, айыу телен сығарып яларға керешкәс, еңел тын алып ҡуйҙылар. Машинаға барып еткәнсе әүрәттеләр уны. Тәпәндең төбөндә саҡ ҡына ҡалғайны. Солтан уны ергә ултыртты. Йөнтәҫкәй уға башы менән тығылыуы булды, шуны ғына көтөп торған Кәбир уға ҙур ҡапсыҡ ҡапланы. Ҡалғаны күҙ асып йомған арала эшләнде — януар, иҫенә килеп өлгөргәнсе, машинала ята ине инде. Эштең былай йәһәт бөтөрөн хатта үҙҙәре лә көтмәгәйне. Хәҙер иң мөһиме — табанды тиҙерәк бынан ялтыратыу. Йөнтәҫкәй үрһәләнеп бәргеләнгән ҙур фургонлы машина ырғып урынынан ҡуҙғалды. Уны ошо хәлгә төшөргән, төбөндә балы ла бөтмәгән кескәй тәпән шунда тәгәрәп ятып ҡалды.

## 13

Сочиға килеп төшкәндә, көн кискә һарыҡҡайны. Бында тәүге тапҡыр булһа ла, ошо һөйкөмлө ҡупшы ҡаланың урамдарына һоҡланып йөрөргә ваҡыты юҡ ине Айварҙың. Ул тура ял йортона йүнәлде. Таксиҙан матур аҡ ҡаласыҡҡа етер-етмәҫтән үк төшөп ҡалды. Ҡалған юл парк аша ағастар араһынан ята.

Бына тора уға кәрәкле йорт. Күкрәген киреп, диңгеҙ ярына баҫҡан аҡсарлаҡ кеүек ғорур ултыра. Эсендә кемдәр генә юҡтыр уның. Ләкин Айварға был һоҡланғыс һарай ошо Хәмит ишеләр менән генә шығырым тулы кеүек.

Егет тәүәккәлләп йортҡа табан атланы. Әммә ишек тотҡаһына үрелгән еренән шып туҡтап ҡалды — кем үткәрә һуң уны эскә? Әлбиттә, оҙон ғына аҡса төртөргә мөмкин. Ләкин кәрәкме икән ошо әҙәм аҡтығы өсөн тир түгеп тапҡан хәләл ҡағыҙҙарҙы туҙҙырыу? Ул ҡырт боролоп килгән юлынан кире китте. Айварҙың башында план тыуып өлгөргәйне. Шундағы ағастар араһына инеп, кәрәк-яраҡтарын дипломатынан ҡупшы ғына пакетҡа бушатты. Хәҙер икенсе ҡатҡа күтәреләһе ҡала. Хәмит йәшәгән бүлмәнең ҡайһы тирәлә икәнлеген самалап алды, дипломатты бил ҡайышына нығытҡас, тәүәккәлләне.

Кәрәкле тәҙрә янына яҡынлашыу менән аңланы — бүлмәлә Хәмиттән башҡа тағы ла кемдер бар ине. Ял йорто хеҙмәткәреме икән тип бер аҙ көтөп торҙо. Йәйге көндә шар асыҡ торған тәҙрә аша тауыштар ап-асыҡ ишетелә. Бүлмәлә ҙур ғына янъял булғанға оҡшаған. Ыҙғыштан һуңғы кәйеф хөкөм һөрә ине бында. Береһенең тауышы ялбарыусан, өмөтһөҙ — быныһы Хәмит. Икенсеһе тупаҫ, кәрәк тапһа, башты муйынынан бороп ала торған зат менән аңҡый. «Ҡара күҙлек!» Айварҙың мейеһен йәшен тиҙлегендә ошо уй быраулап үтте. «Өлгөрмәнемме икән ни?» Һаҡ ҡына үрелеп эскә күҙ һалды. Унда ике ир кеше — береһе тәҙрәгә арты менән тора, Хәмит иһә йөҙ түбән иҙәндә ята.

— Һуңғы тапҡыр әйтәм, ҡайҙа ҡуйҙың?

Тегеһе өндәшмәне.

— Һиңә өс минут ваҡыт.

Хәмит ыңғырашты. Унан яй ғына тороп ултырҙы.

— Ҡаҙалып кит. Ана тегендә, кресло мендәренең аҫтында.

Йөҙөнән аяуһыҙлыҡ бөркөлөп торған оҙон буйлы әҙәм бер генә хәрәкәт менән кресло мендәрен әйләндереп төшөрҙө. Шулай уҡ етеҙ алым менән йәшерелгән дипломатты һөйрәп сығарҙы.

— Күптән шулай кәрәк ине. Мин шаярғанды яратмайым.— Йәһәт кенә асып ҡағыҙҙарҙы барланы.— Бында бөтәһе лә юҡ. Ҡалғандары ҡайҙа?

Хәмит өндәшмәне. Һонтор бер генә хәрәкәт менән уны елкәһенән эләктерҙе.

— Әйҙә, һалҡын һыу менән әҙерәк ҡойон, тиҙ хәтереңә төшөр.

Улар йыуыныу бүлмәһенә үтте. Һонтор менән Хәмиттең артынан ишектең ябылыуын ғына көтөп торған Айвар бесәй етеҙлеге менән тәҙрә аша һикерҙе. Дипломат шунда, кресло өҫтөндә тора ине. Башы йомро Һонторҙоң, әллә ни арала йоҙағын бикләргә өлгөргән. Айвар тиҙ генә сумаҙандарҙы алыштырҙы, тегеһен биленә беркетте. Егет тәҙрә артына саҡ сығып өлгөрҙө — өҫтөнән һыу тамып торған Хәмит, уның артынан теге әҙәм бүлмәгә үттеләр. Был икәүҙең артабан ни хаҡында гәпләшере Айвар өсөн ҡыҙығын юғалтҡайны. Шуға күрә оҙон-оҙаҡҡа һуҙып тормай, түбәнгә төштө.

Һонторҙо оҙаҡ көтөргә тура килмәне, ҡара дипломатты ҡулына тотоп, йорттоң фойеһында күренде. Гәрсә таныш булмаһалар ҙа, Айвар ышыҡҡа күсте. Был эштә эләгерҙәй төйөн ҡалдырырға ярамай, сөнки тегендә, урман төпкөлөндә, йәш кенә һылыу ҡыҙ ҡурҡып ултыра...

Ҡара күҙлек, бер аҙ борсоулы булһа ла, ҡәнәғәт ҡиәфәттә асфальт юл буйлап туҡталышҡа йүнәлде. «Тимәк, һиҙмәгән»,— тип уйлап алды Айвар. Әгәр ҙә сумаҙан урынында булмаһа, ни эшләтер ине икән был Хәмитте? «Йәшәһен әйҙә, ул да бит кеше»,— тигән уй йүгереп үтте егеттең башынан.

Йылы тыны менән һөйәктәрҙе иретерҙәй булып торған был ят көньяҡ ҡалаһында башҡа эш ҡалмағайны. Айвар әле генә иртәнән бирле бер тәғәм ризыҡ ҡапмағанын хәтерләне. «Әгәр игеҙәкте бында ебәргәндә, ашхана ҡайғыһы ла булмаҫ ине»,— тип уйланы ул, һәм үҙе үк көләмһерәп ҡуйҙы. Юҡ, кешелектең тулы хоҡуҡлы ағзаһы ул, һәм, һәр бер кеше кеүек, асығырға, шатланырға, борсолорға тейеш. Урман төпкөлөндә бикләнеп ятып кешеләр араһында күсермәһен йәшәтә алмай. Айварҙың ҡылған эштәрендә уның иҫ киткес был һәләте ярҙам итәсәк, ә киреһенсә түгел. Тәүге һынауҙы егет уңышлы үтте. Тимәк, тормош ҡосағына ташланырға ваҡыт.

Айвар яй ғына атлап аяҙ көндө лә ажарланып күпереп ятҡан диңгеҙ яры буйлап китте. Уны шундай уҡ тормош көтә ине.

## 14

Ваҡытты үткәрә алмай йонсоуҙан да ҡыйын нәмә юҡ икән. Һәр саҡ уйын-көлкө араһында йөрөгән Айгөлгә был күңелһеҙ бер асыш булды. Йортҡа керә лә сыға, шунда бөтөрөлгән Аҡморон менән һөйләшә. Күҙҙәре аҡыллы ҡараһа ла, уның ни уйлауын белә алмай шул. Ҡыҙ хатта тәүҙәрәк үҙе ҡото осоп шөрләгән Йөнтәҫкәй менән дуҫлашты. Тик уныһы ҡапыл күренмәҫ булды. Ул юҡҡа сыҡҡас, эт үҙен бик тыныҫһыҙ тота башланы — тирә-яҡты ҡыҙырып сабып йөрөп килә лә ҡыҙҙың аяҡтары янына ятып шыңшырға керешә. Әйтергә телкәйҙәре генә юҡ. Айгөл арҡаһынан һыйпап ҡарай — ҡайҙа ул тынысланыу. Урманға сығып әйләнер ине, юҡ шул. Айвар уны нығ киҫәтте, тыңламай әмәл юҡ. Икенсе яҡтан, үҙе лә атлығып тормай, сөнки хатта йорт янында үҙен ышаныслы тота алмай. Ни тиһәң дә, ҡара урман.

Үҙенең көсһөҙлөгөнә йәне үртәлеп, Айгөл йортҡа йүнәлде. Ҡулы менән ишек тотҡаһына тотонғас, бөгөн төндә күргән төш йәнә иҫенә төштө. Дөрөҫөн әйткәндә, төш булдымы, күҙенә күрендеме — үҙе лә әйтә алмай. Төнөн уянып, кинәт күҙен асты ул. Һәм шул уҡ секундта сытырлатып кире йоморға мәжбүр булды — тап уның караваты

ҡаршыһында бер һын торған кеүек ине. Ҡыҙ, ҡыҙыҡһыныуын еңә алмай, ҡабат ҡараны — юҡ, тора. Ғәжәп, Айварға оҡшаған кеүек үҙе. Туп-тура ҡыҙға төбәлгән. Нилектән ошо йортҡа юлығыуына үкенеп, байтаҡ ятты Айгөл. Күпмелер ваҡыттан күҙен асҡанда, бер нәмә лә юҡ ине инде. Ошонан һуң ҡыҙ кинәт йоҡлап китте. Иртән торғанда төнгө күренеш уның хәтерендә томанлы ғына ҡалғайны.

Әле килеп тағы хәтеренә төштө. Булыуы мөмкин түгел! Күрәһең, һуңғы көндәрҙә ул бик йонсоно. Һыҙмалар өсөн барған тартыш психикаға ла тәьҫир итмәй ҡалманы, ахыры.

Ҡасан Айвар ҡайта инде. Былай аҡылдан яҙырға мөмкин. Ике тәүлек үтеп бара, ә ул һаман күренмәй. Ҡыҙ бошоноп тирә-яғына күҙ йүгертте. Йортта, исмаһам, ваҡыт үткәрер өсөн уҡырға мөмкин булған китаптар байтаҡ. Ләкин уларға ҡарап хужаның ниндәй кеше икәнен билдәләп булмай — философия, дини китаптар, теософия, оккультизм... Ҡыҙ илтифатһыҙ ғына уларҙы аҡтарырға кереште. Һуңғы өйөмдө ҡарағанда, китаптар араһынан гәзиткә уралған ниндәйҙер төргәк төштө. Тәртипһеҙлекте ененд әй күрмәһә, бәлки, иғтибар итеп тә тормаҫ ине, юҡ, ҡыҙ ундайға өйрәнмәгән. Ҡыҙыҡһыныуын еңә алмай асты... һәм шул мәл таш һындай ҡатып ҡалды, күҙҙәре ҙур булып асылды. Эйе, былар Айгөл үҙ ҡулдары менән йыуыныу бүлмәһендә ике кер йыуыу порошогы араһына ҡуйған һыҙмалар ине. Ҡайҙан бында килеп сыҡҡан улар? Башҡа һыйырлыҡ түгел. Айвар ни өсөн, ҡайһы яҡтарға сәфәр сыҡты улайһа? Иң ябай юл — ошо төргәкте ал да ҡыҙҙы йортона оҙатып ҡуй ине бит.

Айгөлдөң башына ҡот осҡос фекер килде. Әллә... Әллә ҡиәфәтенән һөйкөмлөлөк бәреп торған ошо ағай бик уҫал енәйәтсеме? Ҡыҙ өтәләнеп әйберҙәрен йыйырға кереште. Тиҙерәк, тиҙерәк алыҫыраҡ китеп өлгөрөргә был йорттан! Һыҙмалар уралған төргәкте иҙеүенең эсенә тыҡты, еңел курткаһын эләктерҙе лә ишеккә ташланды. Ләкин шул мәл шып туҡтап ҡалырға мәжбүр булды — тау һуҡмағынан йортҡа табан Айвар төшөп килә ине.

— Бына, һеңлекәш, мин ҡайтып та еттем.— Ишектән инмәһә лә, тауышы алдан килеп керҙе. Ҡыҙ ҡымшанмай урынында тора бирҙе. Бына бит нисегерәк килеп сыҡты. Исмаһам бер сәғәт элегерәк тапһа ла, алыҫыраҡ китеп өлгөрә ине бит.

Ҡулына ҡара дипломат тотҡан Айвар ишектән мөләйем йылмайып килеп инде. Ҡыҙҙы күреү менән, ни булғанын һиҙҙе ул. Айгөлдөң ағарып киткән йөҙөнән

уның ни кисергәнен аңланы. Шулай ҙа һиҙҙермәҫкә тырышты, бер ни булмағандай, кескәй сумаҙанды өҫтәлгә ҡуйҙы.

— Тә-әк, туғаным, бына ул мөлкәт. Тик беҙгә аҫҡыһын бирмәнеләр бит әле был нәмәнең. Хәҙер, юлын табабыҙ уның.— Һөйләнә-һөйләнә ҡыпһыуыр, ҡаҙауҙарын алып, дипломат янына сүгәләне. Бер аҙ булышҡас, йоҙаҡ асылып китте. Айвар унан һыҙмаларҙы тартып сығарҙы.

— Һин үткәндә уларҙың яртыһын ғына йәшереп өлгөргәнһең. Ҡалғандары төптәрәк булған. Бына улар. Ә хәҙер, һеңлем,— Айвар мут ҡына йылмайып ҡыҙға ҡараны,— теге төргәкте килтер әле, ҡарайбыҙ, барыһы ла теүәлме икән.

Айгөл ҡыҙарынды, ни әйтергә лә белә алмай, тирәяғына күҙ йүгертте. Хужа егет ҡайтҡас, бер һүҙ ҙә өндәшмәүен иҫләп, уңайһыҙланды.

— Ни, Айвар ағай... Мин...

— Кәрәкмәй, туғаным, аңлатып торма. Барыһын да беләм. Һинең урынында мин дә ни эшләргә белә алмаҫ инем. Йә, ярар, барыһы ла яҡшы бөттө. Һине хәҙер иҫәнһау ғына ата-әсәң янына алып ҡайтаһы ҡала. Бында барыһы ла тәртиптәме? Мине, ни өсөндөр, бөгөн иртәнән бирле һеҙҙең менән ниҙер булған кеүек тойҙо ҡалдырмай. Үткән көндә был хаҡта уйларға ваҡыт булманы. Бәлки, шуғалыр.— Егет Айгөл биргән һыҙмаларҙы ҡарап, барыһын да бер урынға һалғас, ҡыҙға өндәште.— Һеңлем, мин йорт тирәһен ҡарап киләм.

Баяраҡ Аҡморон янында туҡтарға мөмкинлеге булманы Айварҙың. Сөнки Айгөл менән ниҙер булыуын йөрәге менән һиҙә ине, шуға йортҡа ашыҡты. Ул сығып өлгөрмәне, эт аяҡтарына килеп һырыҡты.

«Хәлдәр нисек, Аҡморон?»

«Насар. Айыу юҡ».

«Йөнтәҫкәй? Ҡайҙа булған?»

«Белмәйем. Киттек тегендә».

Шыңшыған эт артынан йүгерҙе. Уныһы сабып бара бирә лә хужаһының килгәнен көтөп тора. Оло юлдан алыҫ түгел тәгәрәп ятҡан тәпән янына килеп еттеләр.

«Бына ошонда эҙе өҙөлә».

— Машина! Машина эҙе ярылып ята. Ах, кемдең эше булыр икән.— Айвар үртәлеп арлы-бирле йөрөнө. Хәҙер үк арттарынан киткәндә? Юҡ, мөмкин түгел. Айгөлдө билдәһеҙ ваҡытҡа был төпкөлдә ҡалдыра алмай.

— Аҡморон! Йортҡа! Һуңыраҡ килербеҙ.

Айварҙың борсоулы йөҙөн ҡыҙ шунда уҡ күрҙе.

— Айвар ағай, ни булды?

— Насар хәбәр, һеңлем, Йөнтәҫкәй юғалған. Әйҙә, тиҙ генә йыйын, ҡалаға китәбеҙ. Һине илтеп ҡуйғас, эҙенә төшөргә тырышырға кәрәк.

Урман төпкөлөндә булыуына өс көн тигәндә, Айгөл тыуған ҡалаһына юлға сыҡты.

## 15

Ҡайҙарға ғына барып эҙләмәне Айвар айыуҙы. Ҡаныл ғына сығып киткәненә хәҙер үҙе лә үкенә. Түкта, ни өсөн әле ул Йөнтәҫкәйҙе мотлаҡ ҡалала булырға тейеш тип хәл итте. Ошо ҡала менән донъя бөтәме ни? Машина үҙе менән күсермәне ебәргәндә, әллә ҡасан урынында була ине бит инде. Айгөлдө оҙата килгәс, йөрәге түҙмәй шундуҡ тотондо шул, урманға ҡайтып йөрөргә мөмкинлеге булманы. Кеше мыжғып торған урында игеҙәген ярҙамға саҡырыу үҙендә үҙең үлемгә хөкөм итеү менән бер.

Айвар өмөтһөҙләнеп парктағы эскәмйәгә килеп ултырҙы. Хәҙер ни эшләргә? Кермәгән тишек ҡалманы тиерлек. Егет күҙҙәрен йомдо ... һәм шул мәл көтөлмәгән хәл булды — уны ниндәйҙер эске тауыш ҡайҙалыр әйҙәй ине. Үҙ аяҡтарына үҙе хужа була алмай, егет уға буйһондо. Ҡаршы осраған кешеләргә бәрелә яҙып, саҡ машина тәгәрмәсенә эләкмәй, атланы ла атланы. Байтаҡ барҙы егет ярым айыҡ, ярым иҫһеҙ хәлдә. Ғәҙәти кеше был юлды ҡала транспортында ни бары ун биш минутлап ҡына ваҡыт эсендә үтер ине. Ниндәйҙер йыуан олонло ағасҡа бәрелеп туҡтаны һәм ғәжәпләнеп тирә-яғына ҡараны. Сәйер, ул әле генә ултырған эскәмйә ҡайҙа һуң? Һәйкәл дә юҡ, уның урынында ғәжәйеп матур түңәрәк күл ята. Ул үҙенең нисек килгәнен иҫләмәй ине. Мейеһе хәрәкәттәрен тулыһынса контролдә тотһа ла, һуңғы аҙналағы шау-шыу, мәшәкәт күсермә менән ысын Айвар араһындағы гармонияны бер аҙ ҡаҡшатҡайны.

Егет бер аҙ торғас ҡына аңланы — был бөтөнләй икенсе парк. Халыҡ күберәк, ҙур ҙа буғай. Кешеләрҙең ни өсөн мыжғып торғанын тирә-яғын ентекләберәк ҡарағас аңланы — арыраҡ сетка менән урап алынған ниндәйҙер тамаша бара. Айвар шул яҡҡа юл тотто. Барып етергә егерме-утыҙ аҙым ҡалғас, кинәт һиҫкәнде — был зоопарк ине.

Әллә... Айвар мейеһен ярып үткән фекерҙән кинәт туҡтап ҡалды. Йөнтәҫкәй мотлаҡ бында булырға тейеш. Икенсе үлсәмдәге донъяға ҡараған күсермә уны бында

килтерткән. Бөтә Йыһан информацион банкынан хәбәрҙар булып торған игеҙәк өсөн был бер ни тормай.

Айвар зоопарктың ишегенә атылды. Үтә ҡабаланды шикелле — ҡаршыға сығып барған халыҡ ағымында ҡайһыһыналыр бәрелде, кемдеңдер аяғына баҫты. Өс йәштәр самаһындағы малай сәрелдәп әсәһенә йәбеште. Үҙенең алйоттарса ҡыланыуын ҡапыл аңлаған Айвар ғәфү үтенер өсөн ҡатынҡайға ҡараны... һәм тертләне. Уның алдында Гөлүзә баҫып тора ине.

— Айвар... Бына осраштыҡ та...

— Ғәфү итегеҙ, Гөлүзә. Ашыға инем.

— Эйе... Һинең өсөн «һеҙ» ҙә булып киттемме ни? — Өндәшмәй бер аҙ торғас, кинәт иҫенә төшкәндәй, өҫтәне.— Таныш бул, был минең улым. Улым, исемеңде әйт әле ағайға.

Малай әсәһенең артына йәшенде. Үпкәләгән ҡарашын Айварға төбәне.

— Мин улай уҡ усал кеше түгел ул, ҡустым. Шулай килеп сыҡты.

Гөлүзә, күрәһең, был уңайһыҙ хәлдән сығыу өсөнмөлөр, һүҙҙе икенсе яҡҡа бороу яғын ҡараны.

— Ҡайҙа йәшәп ятаһың, Айвар? Ҡаланан киткәнһең шикелле. Һинең хаҡта төрлө хәбәрҙәр ишетелгеләне. Фәнде ысынлап та ҡалдырҙыңмы ни?

— Ҡалдырырға тура килде. Сәбәптәрен ике һүҙ менән генә һөйләп биреп булмаҫ, Гөлүзә.

— Аңлайым.

Һүҙ ялғанманы. Юҡ-бар хәбәр һөйләһәләр ҙә, икеһенең уйҙары бер тирәләрәк өйөрөлдө. Был хаҡта һүҙ ҡушырға Гөлүзә тартынды, Айвар иһә әллә ҡасанғы күңелһеҙ хәлдәрҙе иҫенә төшөрәһе килмәне.

— Шулай ҙа... Бәхетлеме һин, Айвар?

— Бәхет тиһең... Ул тойғоно ҡайҙа һыйҙырып бөтөргә белгән юҡ инде.— Айвар әллә нисек арҡанан ҡырмыҫҡалар йүгерерлек итеп йылмайҙы.

— Былай көтмәгәндә осрашырбыҙ тип уйламаған инем.

— Ә көтөбөрәк осрашһаҡ, ни эшләр инең? — Айвар инде тыйылып ҡала алманы. Ҡасандыр аҡылдан шашып яратҡан, һуңынан ошо ҡыҙҙы осраттырған өсөн яҙмышын ҡәһәрләп, төндәрен йоҡлай алмай сыҡҡан, аҙаҡ килеп, ғүмеренең иң ауыр мәлендә кинәт ташлап киткән моңһоу күҙле был ҡатын алдында оло йөрәкле булып ҡала алманы. Әйткән әсе һүҙҙәре үҙенең йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалғас ҡына, бәғерһеҙлеген аңланы. Ләкин ҡатынҡай рәнйеп өлгөргәйне.

— Ярай, Айвар, беҙ китәбеҙ. Һау бул.— Артына ла боролоп ҡарамай, беҙ үксәле ҡупшы туфлиҙары менән тыҡ-тыҡ баҫып китеп барҙы. Ул киткәс, һауала һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә булып илерткес хушбый еҫе ҡалды.

«Юрмала...» «Юрмала 2...» Айвар ҡасандыр үҙе бүләк иткән хушбыйҙың еҫен айыра алыуына түгел, ә Гөлүзәнең һаман да уны ҡулланыуына ғәжәпләнде. Үкенесле мөхәббәт кеүек тоторoҡло һаҡланған хис әле генә ғорур атлап киткән ҡатында ошондай кескәй флакондағы шыйыҡсаға ҡарата ҡалыуы уның башына ла инеп сыҡманы.

Әллә ҡасанғы үпкәләре өсөн Гөлүзәне рәнйеткәнгә, Айварҙы үкенеү тойғоһо солғап алды. Артынан ҡыуып етеп, ғәфү үтенергәме икән тип тә уйлап ҡуйҙы. Ләкин нилектәндер аяғы тартманы. Ҡапҡанан кереп барған еренән кире боролоп, ҡайынға барып һөйәлде. Ҡалала илереп йөрөүе, ошо паркка килеп сығыуы әлеге осрашыу менән бер һыҙыҡҡа һыймаған һымаҡ ине. Гөлүзә менән һуңғы осрашҡанда, ул ниндәй ине һуң әле? Ә, эйе, ер менән күк араһында. Үҙе менән ҡасан ни булырын белмәй йөрөгән, таянырға терәү таба алмай алйыған саҡ ине бит. Бына шунда үҙ ғүмеренән артыҡ күреп яратҡан һөйгәне уны аңларға теләмәне. Тыңлайһы ла килмәне. Юҡ, был мәлдә иҫенә төшөрәһе килмәй Айварҙың. Ул ваҡыт төҙәлеп бөтә алмаған яра кеүек һаман һулҡылдай.

Бында ни эшләп тора әле ул? Йөнтәҫкәйҙе эҙләп килгәйне лә баһа! Айвар үҙ-үҙен ҡулға алды, өҫ-башын ҡарап сыҡты һәм ныҡлы аҙымдар менән зоопаркка илтеүсе ҡапҡаға йүнәлде. Кеше ни арала кәмегән тип уйларға ла өлгөрмәне, күҙенә ҙур яҙыу салынды — зоопарк ябылған ине инде.

## 16

Янында ғына сабыйы тәтелдәй. Урамда осраған һәр күгәрсенден артынан йүгерә, ҡаршы осраған бөтә тиҫтерҙәренең исемен белергә теләй. Бер минут эсендә әллә нисә һорау бирергә өлгөрә. Ләкин әсәнең сырайы бошонҡо. Бер генә һорау уның йөрәген телгеләй. «Ниңә генә осраның? Ниңә?» Ҡасандыр уны күрмәйенсә йәшәүҙе күҙ алдына килтерә алмаған кеүек, хәҙер аҙым һайын осрай башлаһа, элекке тыныс йәшәлгән йылдарҙың зил-зилбәр килерен йөрәге менән һиҙә.

Гөлүзә бик йонсоған ҡиәфәттә фатирына күтәрелде. Таһир эштән ҡайтҡайны. Ҡатынының кәйефһеҙ сырайын күреп, һораулы ҡарашын уға төбәне, ләкин төпсөшөп торманы.

— Хәйерле кис, аҡыллым.— Үҙе шул ыңғайҙан йүгереп килеп ингән Зөфәрҙе күтәреп алды.— Йә, улым, ҡайҙарҙа булдығыҙ бөгөн?

— Әттә, әттә, беләһеңме, нимә күрҙек...

Уларҙың бер-береһен бүлдереп, әллә ниҙәр хаҡында гәп һатыуҙары Гөлүзәне урап үтте. Тирә-яғында ни булыуын да ишетмәй, үҙ уйҙарына бикләнде. Бер нөктәгә төбәлеп йоҡо бүлмәһендә креслола ҡымшанмай ултырған ҡатынын күреп, Таһир был юлы ғәжәпләнде.

— Гөлүзә! Гөлүзә, ни булды? Әллә берәй насар хәбәрме?

— Юҡ, юҡ, Таһир. Ғәфү ит мине. Мин ятайым әле, башым ауыртып тора. Үҙегеҙ генә ашағыҙ инде, бөтәһе лә плитәлә.

Гөлүзә иренең күҙҙәренә төбәлеп ҡарарға тартынды, уның хәйләһеҙ ҡараштарын күрмәҫ өсөн, арты менән әйләнеп урын йәйергә кереште.

Йоҡоһо килмәй ине уның. Бары тынысланыр, уйҙар ағымына ирек бирер өсөн, һәр кис гөрләп үтә торған ғаилә усағынан ситләште. Бер нәмә лә булмаған кеүек ҡыланыр өсөн йә бик талантлы артистка булырға, йә иһә ныҡ ихтыяр кәрәктер. Ҡыҙғанысҡа, Гөлүзәлә икеһененең бере лә юҡ ине шул.

Ата менән улдың һөйләшеүҙәре байтаҡ ишетелеп торҙо. Аш бүлмәһендә ашанылар, һауыт-һаба йыуғандары ишетелде, унан ҡайһыһылыр сысҡан, ҡайһыһылыр бесәй булды. Күрәһең, Зөфәр уйнаған ерендә йоҡлап киткәйне — Таһир һаҡ ҡына күтәреп уны карауатына индереп һалды. Үҙе лә оҙаҡ булашманы, бер аҙҙан уттарҙы һүндереп, караватҡа килеп ятты. Гөлүзәне йоҡлаған тип уйланы, шикелле — өндәшмәне.

Был мәлдә Гөлүзәнең иң ҙур теләге ошо ине. Әгәр ире бер һүҙ ҡатһа, илап ебәрәсәген һиҙҙе. Ә илар өсөн, дөрөҫөн әйткәндә, ниндәй сәбәп бар һуң әле? Кешенән кәм йәшәйме лә, бәхетһеҙме?

Юҡ, яҙмыш тарафынан үҙен ҡыйырһытылған тип һанай алмай ул. Бик күптәр өсөн хыял булған матур ғаиләһе бар. Унан да бигерәк сабыйын өҙөлөп һөйөүсе әсә. Ләкин... Ләкин... Бына нисәнсе тапҡыр үҙен бер уйҙа тота ҡатын — әгәр ҙә ғүмеренең Айвар менән бәйле өлөшө булмаһа, шашып һөйөүҙең ни икәнен белмәһә... Белмәһә... Донъяһы тулырак булыр инеме икән?

Ваҡыт үтте лә үтте. Сәғәт бер-бер артлы берҙе, унан икене һуҡты. Гөлүзәнең күҙенә йоҡо ҡунманы. Инде әллә нисәнсе тапҡыр бөгөн Айвар менән булған осрашыуҙы хәтерләне. Юҡ, үпкәләй алмай ул егеткә. Рәнйеүе көслө

булғандыр, йөрәге һарҡып ҡанаған кеше генә әллә ҡасанғы әрнеүҙәрен һаман да шулай кисерә алмаҫ ине. Анды-тоңдо белмәй, үҙе лә кинәт күтәреп һуҡты шул. Саҡ ҡына сабыр итергә кәрәк булған. Һуңынан ишетте — ул мәл Айвар өсөн, ысынлап та, бигүк еңелдән булмаған. Нишләйһең, яҙмыштыр инде.

Бер нәмәне һаман аңлап бөтә алмай — нилектән талантлы йәш ғалим бөтәһенән баш тартып, әллә ҡайҙағы урман төпкөлөндә йәшәп ята? Был хаҡта ишеткәс, Гөлүзә иҫен йыя алмай ултырҙы. Уның яҙмышын емереүҙә ҡыйралған мөхәббәт сәбәпсе булһа, егетте шундай язаға дусар иткән өсөн ғүмерҙә лә үҙен ғәфү итәсәк түгел.

Бер нөктәгә төбәлеп, карауатында ултырған Гөлүзәнең күҙ алдында Айварҙың һыны хасил булды. Ғәжәп, унан алыҫ түгел креслола ултыра үҙе. Ҡымшанмай Гөлүзәгә төбәлгән, өндәшмәй.

Ҡатын ҡурҡманы ла, тертләмәне лә. Ул бының ысынлап булыуын төшөнөп бөтмәне, шикелле. Элек нисек күҙгә күҙ төбәшеп ултырһалар, шул ҡиәфәттә ҡала бирҙе.

— Хәйерле төн, Гөлүзә.

— Хәйерле төн. Айвар, һин һаман да шул уҡ.

— Улай уҡ түгел. Элекке Айвар юҡ инде, Гөлүзә.

— Ни өсөн?

— Шулай... Тормошоңдан ҡәнәғәтһеңме?

— Белмәйем, Айвар, белмәйем.

— Был — Яҙмыш, Гөлүзә. Мин бер ҡасан да өйләнә алмаясаҡмын.

— Сәбәбе — минме?

— Юҡ. Үҙ-үҙеңде ҡәһәрләмә. Мөмкин түгел, шул ғына. Сабыйың бар, ғаиләң бар. Бөтә булған йөрәк йылыңды уларға бирергә тейешһең. Теләһәм дә, быны мин ҡабул итә алмайым. Ҡөҙрәтем етмәй.

— Ә мөхәббәт? Ул әкиәттә генәме ни?

— Мөхәббәт — ул талант. Миндә ул үлмәгән һәм үҙем менән бергә ҡәбергә китәсәк. Ләкин һинең өсөн мин донъяла юҡ. Иҫеңдә тот быны.

— Ғәфү ит мине, Айвар.

— Ни өсөн ғәфү үтенергә? Кәрәкмәй.

— Рәнйеүҙәреңде үҙ иңем менән күтәрер инем. Күҙҙәреңә төбәлеп ҡарай алмайым.

— Тыныслан, Гөлүзә. Бөгөнгө тупаҫлығым өсөн ҡыйын. Шуның өсөн килдем дә.

Караует шығырланы. Һиҫкәнеп уянған Таһир ғәжәпләнеп ҡатынына ҡараны.

— Гөлүзә! Һин кем менән һөйләшәһең?

Шунда ғына ҡатынға булған һөйләшеүҙең ысынбарлыҡта икәнлеге барып етте. Күҙҙәрен ҙур итеп асып, берсә иренә, берсә креслоға ҡараны. Кресло буш ине. Гөлүзә бөтә кәүҙәһе менән ҡалтыранып иренә һырыҡты.

— Таһир, мин әллә һаташтым, әллә баҫлыҡтым...

— Йә, йә, тыныслан.

Был ваҡытта яҡындағы ҡунаҡханала мең бәлә менән люкс номерына урынлаша алған Айвар бөгәрләнеп кенә карауатында ята ине. Ғүмерендә иң көслө тойғо ҡалдырған ҡатын менән кинәт осрашыу уның өсөн эҙһеҙ үтмәне.

## 17

Үҙе менән ни булғанын айыу балаһы тәүҙә аңлай алмай аҙапланды. Ул донъяла бер генә кешене белә ине. Һәм уның яғынан һис ҡасан насар мөғәмәлә түгел, асыуланып әйткән һүҙҙе лә ишеткәне булманы. Ә бында буталышҡан ике аяҡлы әҙәми заттар арт яҡты таяҡ менән төйгөсләүҙән башҡаны белмәйҙәр. Үҙҙәре менән һөйләшеп тә булмай, исмаһам. Ҡайҙан йыйғандарҙыр был тиклем телһеҙҙәрҙе.

Йөнтәҫкәйҙе байтаҡ ваҡыт машинала килтерҙеләр. Ҙур фургонда бәргеләнеп йөрөй торғас, аҙаҡҡа табан айыу тирә-йүндә ни барғанын ҡабул итә алмай башланы. Һуңынан ситлеккә бикләп ҡуйҙылар. Бында кеше күп ине. Ул тиклем халыҡ өйөрөн күреп өйрәнмәгән айыу балаһы тәүҙә ситлектән сығып ҡасырға аҙапланды. Бер ни ҙә барып сыҡмағас, арты менән әйләнеп ятты ла ҡуйҙы. Бер көн эсендә килтерелгән аҙыҡ һауыттары йыйыла торҙо. Йөнтәҫкәй уларға әйләнеп тә ҡараманы. Бер һүҙ менән әйткәндә, аслыҡ иғлан итте. Хәлбуки, оло-оло хәрефтәр менән кеше ҡурҡытырлыҡ итеп яҙылған плакат ҡына етмәй ине. Быныһын, әлбиттә, кисерергә мөмкин. Ни тиһәң дә, урман төпкөлөндә этеп-төртөп аттестат биреп сығара торған урта мәктәп түгел, ликбезы ла юҡ шул, нишләйһең.

Шулай итеп, үҙенә ирек даулаған политик тотҡон асыға бирҙе, зоопаркка инеп-сығып йөрөүсе халыҡ алышына торҙо. Бер мәл генә Йөнтәҫкәй үҙендә ғәҙәти булмаған дәрт тойҙо. Уны аңлаусы, һәр ымын дөрөҫ тәкрарлаусы хужаһының үҙенсәлекле еҫе һауала һиҙелә ине. Ситлектә ятҡан урынынан бөтә һауыт-һабаны тигәндәй ауҙарып, килеп торҙо айыу балаһы. Ләкин ашҡыныуы оҙаҡҡа барманы уның. Төңөлөп, ҡабат урынына барып ятты.

Таныш еҫ ситлек тирәһендә башҡаса ҡабатланмаһа ла, айыуҙың ашҡыныуы үтмәне. Бына инде нисәнсе көн булмағанынса, урынынан тороп, үткер күҙҙәре менән тирә-яҡты байҡаны. Ситлек янынан йәшен тиҙлегендә күҙгә күренер-күренмәҫ бер һын үтеп киткәс, үкереп ебәрҙе. Һиҙенеүе алдаманы Йөнтәҫкәйҙе — уға хужаһы ярҙамға ашыға ине.

Ете төн уртаһында айыу балаһының үкереүенә яҡындағы ситлектәрҙәге януарҙар уяныптар, урындарында ризаһыҙлыҡ менән борғоланды. Йөнтәҫкәй уларға әйләнеп тә ҡараманы — күптән көткән ирек янда ғына йөрөй ине.

«Сеү, сеү, тынысла. Шаулама».

Айыу ғәйепле ҡиәфәттә урынында борғоланды.

«Мин ҡыуаныстан ғына. Һиҙмәй ҡалдым».

«Йә, ярар, аҡланма. Нисек ысҡынырға була, шуны ҡарарға кәрәк».

Күҙгә күренер-күренмәҫ кеше һыны ситлектәге йоҙаҡ менән булашырға кереште. Бер аҙҙан Йөнтәҫкәй тыңлаусан ҡиәфәттә зоопарктың тышында хужаһы янында баҫып тора ине.

«Былай ҡала урамы буйлап барып булмаҫ бит әле. Бына нәмә, боҫ ағас аҫтына. Ҡыбырлайһы булма. Мин хәҙер».

Кеше һыны күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә ҡайҙалыр юҡ булды. Ағас төбөнә һырыҡҡан килеш байтаҡ ваҡыт көттө уны Йөнтәҫкәй. Күҙҙәренә машина фараһының яҡтыһы төшкәс, ҡабат тороп сабырға уҡталып ҡуйҙы. Ләкин хужаһының ҡәтғи әмере генә уны был аҙымдан тотоп ҡалды.

Йөк машинаһы сыйылдап ҡыуаҡтар артына барып туҡтаны. Кабина янында таныш һын күренгәс кенә, айыу тынысланды. Сәғәттәр буйы һикәлтәле юлдан бәргеләнеп елеүҙе Йөнтәҫкәй онотмағайны әле.

«Әйҙә, тиҙерәк бул».

Айвар айыуҙы тәүҙә кузовҡа мендерергә аҙапланды. Уныһы дүрт аяғын терәп ҡарышты.

«Йә, ярар, мен бында».

Кабина айыу балаһы өсөн тығыҙ ине. Шулай ҙа януар, тығылып булһа ла, Айвар янына урынлашты.

Төнгө ҡала буйлап байтаҡ барҙылар. Светофорҙарҙың һары уттары ғына йылтлап һүнә. Айварҙың бар теләге таң атҡансы айыу балаһын урманға илтеп, кире боролоу ине. Кеше машинаһын һорауһыҙ алып китте. Икенсе төрлө әйткәндә, енәйәт ҡылды. Ләкин айыуҙы бында ҡалдырып, күрәләтә сиргә һабыштырыуы енәйәт түгелме ни? Уның еңел генә ҡапҡанға ҡабыуында Айварҙың да ғәйебе

бар. Әгәр ҙә ҡулға өйрәтелгән булмаһа, тиҙ генә эләктерә алмаҫтар ине.

Ҡала уттары артта ҡалды. Хәҙер улар биләмәһенә күп түгел, сәғәт-сәғәт ярым ваҡыт эсендә ҡайтып етергә мөмкин. «Ҡотолдоҡ!» тип уйларға ла өлгөрмәне Айвар, машина бер-икене сөскөрҙө лә сыйылдап барып юл ситенә туҡтаны. Дөрөҫөрәге, үҙе туҡтатты — ниҙер боҙолғайны.

— Эх, ҡәһәрең... — Сәғәткә ҡараны. Иртәнге биш тулып килә. Яҡтыра ла башланы. Үртәлеп, Айвар машинаны урап сыҡты. Хәл юҡ, ремонтларға тура килә.

Осраҡлы ғына алып кителгән был машина иҫке генә ине. Бәлки, хужаһы ремонтлап маташҡан булғандыр. Айвар уның менән байтаҡ булашты. Ни тиһәң дә, был кеше организмы түгел, ябай ғына тимер-томор ине шул. Юғары материя менән еңел мөғәмәлә иткән күсермә төрлөсә ҡыландырып ҡоролған ағас менән тимерҙән торған нәмә алдында юғалып ҡалды. Бөтә Йыһан информацион банкыһы менән булған тура бәйләнеш кенә ҡотҡарҙы уны. Өс-дүрт сәғәтләп ваҡыт үткәс, машина менән юлға сығырға мөмкин ине.

Еңел тын алып, Айвар кабинаға күтәрелде. Йөнтәҫкәй рәхәтләнеп йоҡлай, ултырғысҡа һуҙылып ятҡан, руль янына күтәрелерлек тә түгел. Айвар уны йәлләп ҡарап торҙо. Сабый ғына шул, яҙмышының хәүеф аҫтында икәнен төшөнөп бөтмәй. Бәлки, хужаһының уны бәләгә юлыҡтырып ҡалдырмаҫын һиҙәлер.

Башҡаса көтөргә мөмкинлек булмағанлыҡтан, Айвар айыуҙы уятырға үрелде. Ләкин һуҙылған ҡулдары Йөнтәҫкәйгә тейеп өлгөрмәне, кабинала еңелсә томан хасил булды. Икенсе секундта айыу янында торған кеше һыны юҡҡа сыҡты. Ҡайҙалыр ҡунаҡханала ҡалған кәүҙәһе үҙенең рухын ярҙамға саҡыра ине.

## 18

Ишек шаҡынылар. Тәүҙә һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә. Гүйә, иртә таңдан маҙаһыҙлап йөрөгәнгә, бер аҙ уңайһыҙлыҡ кисерәләр ине. Яуап биреүсе булмағас, шаҡылдатыу көсәйә төштө. Ишек артындағыларҙың түҙемлеге ҡырҡа кәмене буғай — бер аҙҙан дөбөрләтә башланылар.

— Номер буш түгел, кисә кис ҡырын үҙем инеп сыҡтым.— Бынаһы йыйыштырыусы ҡатын.

— Унда нәмә, мәрткә киткәндәрме?! — Ҡулына инструменттар йәшниге тотҡан урта йәштәр самаһындағы эш кейемендәге ирҙең түҙемлеге шартлау сигендә.

— Асығыҙ! Тиҙ генә!

Өндәшмәйҙәр. Шаҡылдатыу йәнә ҡабатлана. Күршетирәләге бүлмә халҡы ризаһыҙлыҡ менән ишектәренән үрелеп ҡарай башланы. Береһе әсе генә һүгенеп, ҡабат шап иттереп ишеген ябып ҡуйҙы.

— Йә, ярар, дөбөрләтмә. Запас асҡыс бар бит, хәҙер килтерәм.— Йыйыштырыусы ҡатын тиҙ-тиҙ атлап аҫҡа йүнәлде.

Ир кеше асыуынан ҡыҙара бүртенеп, аҡҡа ҡара менән «Ярамай!» тип аҡырайтып яҙып ҡуйылыуға һыңар күҙе менән дә ҡарамай, тәмәке тоҡандырып ебәрҙе.

— Төшкә тиклем бүкһеп йоҡлап ятмаһалар,— тип һөйләнде ул әллә тәмәкеһенә, әллә иҙәнгә. Бигәйбә, янында башҡа иғтибар менән тыңларҙай ике аяҡлы әҙәми зат күренмәй ине.

Йыйыштырыусы ҡатын, йәш сағын иҫенә төшөрөп буғай, сабып килеп етте. Моғайын да, ҡыҙыу ҡанлы ир кешенең ҡасау-һасауҙары менән ишеккә тондороуынан ҡурҡҡандыр.

Йоҙаҡҡа асҡыс тыҡҡандары ишетелде. Уныһы бер тапҡыр әйләнде... икенсе тапҡыр... Караватта ятҡан кеше һыны ҡыбырламаны. Ишек шығырлап асылды... һәм шул мәлдә генә кешегә йән керҙе. Һулышы көсәйә төштө, бер аҙҙан күҙҙәрен асты. Бүлмәгә дөп-дөп атлап килеп ингән ир кешегә, йыйыштырыусы ҡатынға ғәжәпләнеп ҡараны.

— Һеҙгә ни кәрәк?

— Ни кәрәк... Ни кәрәк... Төнө буйы эт һуғарып оҙон итәктәр янында йөрөйҙәр ҙә... Минең әле тағы биш бүлмә бар. Һәр береһенең йоҡоһо туйғанын көтә башлаһаң, өйгә иртәгә лә ҡайтып етеп булмаҫ.— Ир кеше йыуыныу бүлмәһендә шарт та шорт крандарҙы аҡтарырға кереште.

Айвар бер ни ҙә өндәшмәне. Әгәр ҙә был икәү саҡ ҡына алдараҡ кереп өлгөрһәләр, ремонтлау ҡайғыһы булыр инеме икән уларҙа... Был хаҡта, ҡыҙғаныҫҡа, улар белмәйҙәр ине.

Байтаҡ булашты ирекәй йыуыныу бүлмәһендә. Әллә крандың, әллә кәрәкмәгәндә иҙәнгә дабырлап төшкән әйберҙәренең, шуларға ҡушып бүлмә хужаһының тетмәһен тетте. Ҡулдарын күкрәгенә ҡаушырып, тәҙрәгә ҡарап торған Айвар бер һүҙ ҡатманы — урынһыҙ ине. Әгәр ҙә уның йөрәгендә хәҙерге мәлдә ниндәй дауыл барғанын, исмаһам, берәйһе белһә ине! Ундағы иҫ киткес ихтыяр тойғоларҙың тышҡа бәреп сығыуына юл ҡуйманы.

Юҡ, ҡунаҡхана уңай урын түгел. Ах, бына ни өсөн йәшәй алмай уның кеүектәр кеше араһында! Кәрәкһеҙ минутта тап иттеләр... һәм һәләкәт. Кире ҡағып булмай торған һәләкәт.

Күңелһеҙ уйҙарының осона сыға алмай, Айвар бүлмә буйлап арлы-бирле йөрөй. Ваҡыт та байтаҡ булып китте. Юл өҫтөндә ултырған машинаны хәҙер кемдәр генә тап итмәгәндер. Уның урынында булырына өмөт бик аҙ. «Эх, Йөнтәҫкәй, һөйкөмлө айыу балаһы, ҡотҡарып булмаҫмы ни икән һине... Ә бит һин миңә ихлас ышанғайның. Уянғанһың, янында ҡотҡарыусың юҡтыр. Беләм, үпкәләйһең. Тик ни эшләргә миңә, нишләргә?»

Күсермәһенә хужа булғаны бирле Айвар тәүге тапҡыр үҙенең көсһөҙләгән тойҙо. Эйе, тәүлек әйләнәһе кешеләр араһында йөрөргә мәжбүр булыу уны ҡөҙрәтенән мәхрүм итә ине.

Ниһәйәт, ремонтлаусы эшен тамамланы. Шабырлатып крандан һыу ағыҙып ҡараны, кәрәк-яраҡтарын ҡабат шарт та шорт йәшнигенә тултырҙы, танау аҫтынан ниҙер мығырланы ла ишектән сығып китте. Шуны ғына көтөп торған Айвар атылып барып мөмкин булған бөтә йоҙаҡтарға ишекте бикләне һәм карауатына ауҙы.

## 19

Секунд та ваҡыт үтмәне, күсермә үҙе бер-ике сәғәт элек ҡалдырып киткән юл уртаһында баҫып тора ине. Юл йәнләнгән. Әле теге яҡҡа, әле был яҡҡа туҡтауһыҙ машиналар үтеп-һүтеп йөрөй. Кинәт пәйҙә булған, арты менән торған кешене ҙур КамАЗ шоферы уға барып етер алдынан ғына күреп ҡалды. Тормоздар сыйылданы, ауыр машина, ҡаршы килгән самосвалға бәрелә яҙып, юлға арҡыры туҡтаны. «Ах, тапаным...» Ап-аҡ булған шофер ҡалтыранған ҡулдары менән кабина ишеген аса алмай йөҙәне. Мең бәлә менән шыбыр тиргә батып килеп сыҡҡанда... бер кем дә юҡ ине. Самосвал хужаһы ғына йоҙроҡтарын төйә-төйә машинаһын ҡабыҙып маташа. Бәләнән ҡотолоуына ҡыуанған һәм шул уҡ ваҡытта үҙе менән ни булғанын бигүк аңлап бөтмәгән алйот ҡиәфәтендәге бисараға урынына кереп ултырыуҙан башҡа сара ҡалманы.

Был мәлдә иһә күсермә аңға һыймаҫ тиҙлектә йөк машинаһының тәгәрмәсе эҙенән елә ине. Ул күптән түгел генә үткән булырға тейеш. Һәр хәлдә айыу балаһының мейеһенән таралған импульстарҙы күсермә яҡшы тота.

Ҡала урамы күренде. Тәгәрмәс эҙенән барыу ҡыйынлаша төштө. Кабиналағы айыу үҙен бигүк тыныс тотмай булһа кәрәк. Әгәр ул йоҡлаһа, Айварға эш ауырғараҡ төшөр ине.

Ана ул машина! Икенсе берәүһе менән тарттырып килтергәндәр. Шунһыҙ мөмкин дә булмағандыр — айыу кабинала, ысынлап та, ҡотора ине.

Бынан һуңғы хәлдәр күҙ асып йомған арала булды. Милиция машиналары теҙелеп киткән ерҙә, дөрөҫөрәге, йөк машинаһының алдында, бер һын хасил булды. Тәҙрәнән ҡарап торған дежур милиционер сигнал бирергә лә өлгөрмәне, шул уҡ һын әллә ниндәй мөғжизә менән кабинаға һыймай үкергән айыу янына күсте. Януар уны ботарлап ташлармы тиһә, ҡайҙа ул! Урынында кеше булһа, ауыҙы ҡолағына етте, тип әйтеү ҙә етер ине.

Сәғәҙиев, үҙенең ни эшләргә тейешлеген онотоп, ауыҙын асып күҙәтергә кереште. Ҡайһы аралалыр тарттырып килтергән трос ергә һуҙылып төштө, кабинаһында айыу һәм сәйер кеше ултырған машина үкереп урынынан ҡуҙғалды. Сержант руль артындағы әҙәмдең ғәҙәти булмаған, әллә ниндәй сәйер тойғолар уятыусы йөҙөн генә күреп өлгөрҙө. Машина һуңғы тиҙлектә күҙ асып йомған арала юҡҡа сыҡты. Шунда ғына милиционер иҫенә килде.

— Туҡта! Туҡта тим! — Кемгә туҡтарға ҡушалыр инде байғош. Уның был изге оранына ҡолаҡ һалырҙай кеше заты тирә-яҡта күренмәне... тиһәм, бинанан лейтенант погондары таҡҡан икенсе берәүһе килеп сыҡты.

— Сержант Сәғәҙиев! Кемгә бойораһың ул тиклем моңло тауышың менән? — Ихлас аптыраны лейтенант. Сөнки бер уңға, бер һулға һәм дә алдына-артына йәнә икеөс тапҡыр ҡарап алыу күҙгә эленерҙәй әҙәм затының юҡлығын ныҡлап иҫбатланы.

— Иптәш лейтенант! Әле генә юлда табылған йөк машинаһын тағы урланылар. Айыуы менән бергә.

— Йәғни мәҫәлән! Мин айыуын түмәр башына ултыртып ҡалдырғандарҙыр, тиһәм.— Моратшин, мыҫҡыллы йылмайып, йөк машинаһы торған яҡҡа боролдо... һәм нурлы йылмайыуы ҡыҙғаныс ҡиәфәттә юҡҡа сыҡты.

— Урланылар тиһеңме? Нисек?!

— Үҙем дә аңлай алмай ҡалдым. Бер ҡарағанда, машина бәйләнгән трос янында тора ине. Кабина ишеген асҡанды күрмәнем, әллә ни юл менән айыу янында хасил булды.

—Һин! Шуларҙы күрә тороп, ҡулдан ысҡындырҙыңмы? Етмәһә, тәфсилләп һөйләп тораһың.— Ҡыҙып китте лейтенант. Ҡар булһа, шул мәл ҡот осҡос буран сыҡмай ҡалмаҫ ине. Нилектән шуларҙы күргән көнгә төшкән Сәғәҙиев, бер һүҙ әйтергә ҡыймай, мәхлүк ҡиәфәттә башын эйеп тора бирҙе.


ч 12 54 ММ

Ниһәйәт, дауыл тынды. Моратшин арлы-бирле кәләп һалып туҡтағас, сигаретын һөйрәп сығарҙы. Ауыҙ-мороно тирәһендә паровоз тәтәнә күтәрелә башлағанда, лейтенант тамам тынысланғайны. Быны күреп, сержантҡа ла йән инде.

— Ни, иптәш лейтенант, ул бик сәйер кеше күренде бит әле миңә,— тип тотлоға-тотлоға телмәрен башланы Сәғәҙиев.— Әллә нисек, һөйләп килештерерлек түгел. Бер һүҙ менән әйткәндә, әҙәм кеүек әҙәмгә оҡшамаған. Кеше шикелле йөрөмәй, бер ҡараһаң, бер ерҙә, икенсе ҡараһаң, юҡҡа сыға. Ни... Ул ысынлап кеше булдымы икән...

Тирләп-бешкән сержантҡа ҡарап, Моратшин бот сапты.

— Вәт! Бына һиңә кәрәк булһа! Бәлки, ул урман йыртҡысын мәскәй ҡарсыҡ урлағандыр, ә?

— Ни...

— Әкиәт һөйләп торғансы, юлдағы постарға хәбәр ит, сержант! — Бик мөһим әмер биргәндәй, хәтәр ҡуҡырайып кереп китте лейтенант. Күҙҙәрен сылт-сылт йомғолап, күргәненә үҙе ышанмай башлаған Сәғәҙиев, башҡа сара ҡалмағас, уның артынан өҫтөрәлде.

## 20

Ниһәйәт, айыу балаһы урманда. Ҡунаҡханала ҡалыуҙан хәҙер мәғәнә юҡ. Тиҙерәк ҡайта һалырға кәрәк.

Айвар бүлмә асҡысын тапшырҙы ла йәһәт аҙымдар менән урамға сыҡты. Йөк машинаһын тәү алған урынында ҡалдырып, дөрөҫ эшләнеме икән? Машина юғалды тип хәҙер тағы ғауға ҡупҡандыр. Ни эшләргә? Инеп әйтеү алйотлоҡ. Бәлки, телефон аша ғына хәбәр итергә һәм юҡҡа сығырға? Милиция йортона барған еренән ҡырҡа боролоп, Айвар урамдағы телефон-автоматҡа йүнәлде. Һандар йыйырға ла өлгөрмәне, артында тамаҡ ҡырған тауыш ишетелде.

— Һм... Хөрмәтле иптәш, һеҙҙә артыҡ ваҡ аҡса булмаҫмы?

— Рәхим итегеҙ.— Айвар, боролоп, тинлектәр һуҙҙы. Тегеһе алырға ашыҡманы. Айвар, ғәжәпләнеп, башын күтәреп өндәшеүсегә ҡараны. Янында сержант погондары таҡҡан милиционер тора ине. Егет һуҙған аҡсала эше лә юҡ, уның йөҙөнә тексәйгән.— Рәхим итегеҙ!

— Гражданин, һеҙҙең минең менән бергә бүлеккә үтеүегеҙҙе һорайым.

— Ни өсөн? — Һорауҙы биреүен бирҙе, сәбәбен шул

уҡ ваҡытта ап-асыҡ аңланы Айвар. Тимәк, был милиционер уны күреп өлгөргән.

— Уныһын тегендә асыҡларбыҙ.

Айвар өндәшмәй сержанттың артынан эйәрҙе. Йә инде, ул бит бер ниндәй насар уй менән йөрөмәне. Изгелек уйлап башлаған эштең дә хөрт аҙағы булыуы ҡыҙғаныс. Нишләйһең, эшләгәнһең икән, яуабын да бирә белергә кәрәк.

Улар бинаға ингәндә, арыраҡ тәмәке көйрәтеп торған ике ир кешенән башҡа һис кем юҡ ине. Сержант, ауыҙы саҡ ҡолаҡ артына һәлберәмәй, тегеләр янына тыртаңланы.

— Ислам, Мораtшинды күрмәнеңме?

— Әле генә бүлмәһенә кереп китте. Һин нимә, әллә президентҡа һөжүм яһаусыны ҡолағынан эләктерҙеңме? Ҡиәфәтеңдә ҡарағанда, кәм түгелдер.— Коридорҙы тултырып һаһылдаштылар. Сержант, һеҙҙең менән тел бысратып торғансы тигәнде аңлатып, ҡул ҡына һелтәне лә ишек артына инеп юғалды. Енәйәтсенең үтә намыҫлы булыуына әллә ышанды, әллә үҙенең эш алымы шундайыраҡ ине. Мәгәр Айварға сыҙамлы ғына ҡиәфәттә шунда баҫып ҡалырға тура килде.

Бер-бер артлы эйәртенешеп, сержант менән лейтенант ишектән килеп сыҡтылар.

— Бына ул, иптәш лейтенант.— Сәғәҙиевтың Айвар янында бөтөрөлөүен күргән кеше күркәләрҙең никах алдынан була торған бейеүен иҫкә төшөрмәй ҡалмаҫ ине.— Телефон-автомат эргәһендә эләктерҙем. Ҡайҙалыр шылтыратырға маташа ине.

— Сержант, телефондан шылтыратыу әлегә тиклем енәйәткә иҫәпләнмәне.— Айварҙың йөҙөндә мыҫҡыллы йылмайыу хасил булды.

— Һин яңылышмайһыңмы, Сәғәҙиев? — Лейтенант тегеһенә аптырабыраҡ ҡараны.— Был... ғәп-ғәҙәти кеше лә баһа. Һинең һөйләүеңә ҡарағанда...

— Ә-ә, аңланым, хөрмәтле лейтенант, һеҙ мөгөҙлө кеше эҙләйһегеҙме ни? Ҡыҙғаныҫҡа, минең ундай байлығым юҡ шул.— Егет бөҙрә сәстәрен һыпырҙы.

— Шул ине, иптәш лейтенант. Билләһи тим. Мин уның йөҙөн ап-асыҡ күрҙем. Телефондан шылтыратып, тағы бер этлек уйлап йөрөгәндер әле.

— Йә, ярар, Сәғәҙиев, илт тегендә. Хәҙер янығыҙға инәм. Асыҡларбыҙ.

Сәғәҙиев, бик ҙур йорлоҡ күрһәткән кеше ҡиәфәтендә, саҡ ҡына ситтәрәк урынлашҡан ауыр ишеккә Айварға инергә ымланы.

## 21

Ҙур самолет, тиҙлеген әкренәйтә барып, осоу майҙанына килеп төштө. Көньяҡ ҡояшы йөҙҙәренә шоколад төҫө биргән халыҡ тышҡа ағылды. Араларында берәүһе ҡырҡа айырылып тора. Ял иткән кешегә оҡшамаған, башҡаларҙыҡы һымаҡ ҡосаҡ-ҡосаҡ әйбер, сумаҙандары ла юҡ. Был һуңғы аҡсаларын туҙҙырып бөтөп, аптыраған көндән кире ҡайтыусы Хәмит ине. Хәҙер уға Ҡара күҙлектән ҡурҡаһы түгел, етерлек өлөшөн алды. Унынһы Хәмитте эләктерҙе-эләктермәне — файҙаһы аҙ. Икенсенән, алтын тамсы тамырҙай тойолмаһа, Хәмит ишеләр менән ҡул бысрата торғандарҙан түгел.

Ҡайтыуының төп сәбәбе көньяҡтың кеҫәне тиҙ һайыҡтырыуында ине. Аҡса эшләргә тигән һуңғы өмөттө Стас ҡара сумаҙан менән бергә алып китте. Оҙаҡ баш ватҡандан һуң, үҙенә бер ҡыҙыҡ асыш яһаны Хәмит — уның артынан төшөүсе тайыш табан табылманы. Бер аҙ ҡурҡып йөрөгәс, Миңлеғәле менән телефон аша һөйләшергә батырсылығы етте. Унынһы иҫ киткес яңылыҡ асып һалды — Айгөл иҫән, бер нәмә лә булмаған. Етмәһә, Назаровҡа һыҙмаларын кире ҡайтарып биргәндәр, имеш. Бына һиңә кәрәк булһа! Ул бында аслы-туҡлы көн күрә, ә тегендә аҡса тоҡсайы, бер нәмә лә булмағандай, донъяның артына тибеп йәшәй. Ғәҙел түгел был.

Һуҡыр сысҡандай ҡурҡа-боҫа көн күргән Хәмиттең элекке тәкәбберлеге кире әйләнеп ҡайтты. Бында ниҙер бар. Айгөл үҙе генә эшләй алмаҫ ине, танауы кипмәгән. Тимәк... Тимәк... Туҡта, теге урман ҡараҫҡыһын ҡапшап ҡарағанда, нисек булыр икән, ә? Һыҙмаларҙы кемдер урланы, был факт. Ә нисек итеп? Бына быныһына баш етмәй. Ҡырҡ йоҙаҡлы ишек аша, әллә ниндәй юл менән инеп, урлап ҡас әле. Иҫ киткес бит, ә! Файҙалана белгәндә, донъяны баш түбән әйләндерергә мөмкин.

Тикшерергә кәрәк быны. Айгөлдөң урманда юҡҡа сығыуы менән һыҙмаларҙың юғалыуы араһында ниндәйҙер бәйләнеш бар.

Башҡа бараһы ере булмағас, тура Миңлеғәлегә юл тотто Хәмит. Тегеһе эштән ҡайтып ҡына тора ине. Урамда кейгән әйберҙәрен дә һалып өлгөрмәгән, бышҡыра-бышҡыра йыуынып маташа. Хәмитте ҡатыны тип уйланы, буғай.

— Был ниндәй ғәҙәтең тағы, шылтыратып булашаһың,— тип мығырланы танау аҫтынан. Элекке эшнәһен күргәс, ни өндәшергә белмәй, күҙҙәрен асалаҡ-йомалаҡ

итеп байтаҡ торҙо, йөҙөнә тимгел-тимгел таптар ҡалҡып сыҡты.

— Һин... Ни эшләйһең бында?

— Элекке дуҫтарҙы шулай ҡаршылайҙармы ни? Әҙәпле булмай былай, дуҫ кеше. Һаулыҡ та һорашмай, төпсөнөргә керештең.— Хәмит, фырт ҡына баҫып, Миңлегәләнең янынан үтеп китте һәм арыраҡ торған ултырғысҡа артын терәне. Стас янында һеләгәйен ағыҙған Хәмитте Миңлегәле янында таныр өсөн бик ҙур тырышлыҡ һалырға кәрәк булыр ине.

— Мин ни... Ни тип... Нишләп улай ҡаршылайым ти. Көтмәгәнгә генә инде.— Урманда айыу күргән көндәге шикелле албырғаған Миңлеғәлегә йән керә башланы.— Кире ҡайтырһың тип уйламағайным шул.

— Һәм тынысландың инде. Юҡ, туған, иртәрәк әле һиңә. Эш башлана ғына. Ҡана, ҡапҡыларға бир ҙә үҙемдең пландар менән уртаҡлашам. Беләһеңме, беҙгә күпме байлыҡ килтерәсәк был? Назаровтың һыҙмалары бының янында — тфү, сүп!

Һуңғы арала йүнле ризыҡ күрмәгән көньяҡ ҡунағы өҫтәл өҫтөндә күҙенә ни күренә шуны һоғона бирҙе. Ауыҙы ризыҡтан бушаған арала, ҡаршыһында аптыраған ҡиәфәттә ултырған Миңлеғәлегә хәбәрен теҙҙе:

— Был эштә һинһеҙ бер нисек тә булмай, туған.— Күрәһең, Хәмит пландары менән шул тиклем ҡанатланғайны — ғүмерҙә булмағанды, Миңлеғәле менән ҡәрҙәшкә әйләнергә өлгөрҙө.— Беләһеңме нимә, үткәндә мин һиңә ышанманым ышаныуын, шулай ҙа һинең һүҙҙәреңдә ниҙер бар. Хаҡты һөйләйһең.— Быны ишеткәс, Миңлеғәләнең күкрәге саҡ ҡына алғараҡ кәперәйҙе.— Мин әйтәм, теге саҡ дипломат өҫтөндә ятҡан һыҙмаларҙан ҡолаҡ ҡаҡҡанда...

— Һуң... Уларға мин теймәнем дә инде.

— Ышанам, ышанам. Һүҙ әлегә был хаҡта түгел. Мине бына нәмә ҡыҙыҡһындыра: уларҙы кем алды һәм нисек алды? Бына бит эш ниҙә.

— Әйттем бит стенанан сыҡты тип. Шунда уҡ кереп китте. Аҡылдан яҙҙым тип торам.

— Вәт, вәт... Ә ул албаҫтыға Назаровтың сепрәккә әйләнеп бөткән ҡағыҙҙары ни хәжәт? Ул үҙенә түгел, кемгәлер ярҙам итеү өсөн урлаған, аңлайһыңмы, йыуғыс баш? Һәр нәмәне төпсөп төшөндөрөргә кәрәк. Йә Назаровҡа ярҙам итә, йә теге тиҫкәре ҡыҙ аҡтығына. Минең ни әйтергә теләгәнде аңлайһыңмы?

— Аңлайым да ул.

— Аңлағас, бына шул — беҙгә оҙаҡҡа һуҙмай Стас

менән бәйләнешкә инергә кәрәк. Үҙебеҙгә генә был эште йырып сығып булмаҫ.

— Стас менән? Юҡ, юҡ, ҡәбереӊ яҡын булмаһын. Үткәндә мине нисек биҙәне, һаман һыҙланам.

— Бына бит, йүнәлгәнһеӊ. Һиӊә ҡасан барып етер икән, был эштә миллиондар менән сүп урынына уйнарға мөмкин. Хәйерселектән сығаһыӊ килә икән, туҡмалып ятыуыӊды ла оноторға тура килер.

— Белмәйем шул, бигерәк ҡанһыҙ әҙәм.

— Албаҫты кеүектәрҙе ҡулға төшөрөр өсөн, тап шундайҙар кәрәк тә. Кил инде, иблес, һин миӊә бик оҡшаныӊ, аҡса урларға ярҙам ит, тигәнгә, моғайын, өтәләнеп йүгереп килеп ултырмаҫ.

— Йә, ярай, ризалаштырҙыӊ. Аҙағы хәйерле булһын.

— Эш башланмаҫ борон, ясин сығырға ашыҡма.

Сочиға ҡасҡаны бирле һәр күләгәнән шикләнгән Хәмиткә тәкәбберлеге ҡабат әйләнеп ҡайтты.

## 22

— Һеҙ кем?

— Айвар.

— Фамилияғыҙ?

— Илбәков.

— Йәшәгән урынығыҙ?

— Урманда.

Эшем эйәһеләй ҡайкайып ултырған Сәғәҙиев яӊылыш ишетмәйемме тип, бер ҡаршыһындағы егеткә, бер өҫтәлгә, йәнә лә ишеккә ҡарап алды. Килеп инергә тейешле лейтенант унын ишетеү органдарына файҙалы тәьҫир яһар, тигән фекерҙә ине, шикелле. Көткән әҙәми зат күренмәгәс, ҡабаттан һорарға мәжбүр булды.

— Урманда, тиһегеҙме? Нисек урманда?

— Сержант, урманда ҡуян да бүре генә йәшәй тип уйлаһағыҙ, ныҡ хаталанаһығыҙ.

— Хаталанаммы-юҡмы — унылы минеӊ эш. Һорағанға яуап бирегеҙ.

— Ә мин ни эшләйем? Һеҙҙеӊ ҡолағығыҙҙы тешләйемме? — Үҙенән әллә ниндәй түрә әүәләгән Сәғәҙиев Айварҙыӊ асыуын ҡабарта башланы. Тәүҙә егет барыһын да нисек бар, шулай һөйләп бирергә уйлағайны. Юҡ, былар аӊлай торған халыҡҡа оҡшамаған. Һөйләһәӊ, ни өсөн айыу һеҙҙеке, ни өсөн ҡулға өйрәтелгән тигән тоҙһоҙ һорауҙар бирә башларҙарын көт тә тор. Юлын табып, ысҡынырға кәрәк бынан.

— Шымығыҙ! — Ручкаһы һикереп төшөп ҡасырлыҡ итеп өҫтәлгә һуҡты Сәғәҙиев. Күрәһең, ғүмерендә тәүге әләктергән енәйәтсенең «Ғәйеплемен, хөрмәтле сержант, ярлыҡай ғына күр инде» тигән матур һүҙҙәр һөйләмәүенә бик тә үпкәләне.

— Ниндәй тауыш? Ниңә өҫтәл төйәһегеҙ, сержант? — Ишектән ингән Моратшин ике һорау билдәһе тәзерәйеп торған күҙҙәрен бер Сәғәҙиевкә, бер тотҡонға төбәне.

— Ә, ни... иптәш Моратшин. Бына һорауға яуап бирмәй.

— Һеҙ екерһәгеҙ, тубыҡланып, булғанын да, булмағанын да теҙеп һалыр, тип уйланығыҙ инде.— Айварҙың йөҙөндә йәнә мыҫҡыллы йылмайыу хасил булды.

— Бына күрҙегеҙме, баянан бирле тиҫкәреләшә.

— Йә, ярар, ситкәрәк күс.— «Бына хәҙер мин тотонһам, барыһы ла майлаған шикелле буласаҡ» тигән фекер йөҙөнә йыуан-йыуан хәрефтәр менән яҙылған Моратшин, сержантты этә биреп, уның урынына өҫтәл артына ултырҙы.— Шунан дауам итәйек, Илбәков, кем булып эшләйһегеҙ?

— Урмансы.

— Ни өсөн машинаны урланығыҙ? Урманда техника кәрәк булып киттеме?

— Машина үҙ урынында. Әгәр ҡыҙыҡһынһағыҙ, хәҙер үк телефондан шылтыратып белешегеҙ.

— Ә-ә... тимәк, бур, ысынлап та, һеҙ? Беләһегеҙме, был ниндәй статья буйынса хөкөм ителә? Етмәһә, билдәле булыуынса, кабиналағы айыу зоопарктан урланған булған. Нимә, урманда йыртҡыс ҡороғанмы?

— Ул айыу...

— Аҡланаһығыҙмы?

Айвар өндәшмәне. Былар менән һүҙ көрәштереүҙең мәғәнәһеҙлек икәнлеген ул ап-асыҡ аңланы. Юҡ, бынан һуң егет уларҙың бер һорауына ла яуап бирмәйәсәк.

— Яуап бирегеҙ!

Айвар күҙҙәрен ҙур итеп асып Моратшинға төбәлде. Бер ни тиклем ваҡыт күҙгә-күҙ ҡарашып ултырҙылар. Күрәһең, күтәрә алманы — лейтенант ситкә боролорға маташты, ләкин барып сыҡманы. Ул йылан арбауына бирешкән ҡуян балаһындай, Айварға ҡарап ҡатҡайны. Ситтәрәк баҫып торған сержант, бер ни аңламай, әле береһенә, әле икенсеһенә алмаш-тилмәш күҙҙәрен йүгерткеләне.

— Иптәш лейтенант, һеҙҙең менән ни... — Әйтеп бөтөрә алманы Сәғәҙиев, Айварҙың ихтыярына буйһондо,

ауыҙын яртылаш асҡан килеш, тәҙрә янында торған ултырғысҡа арты менән лып итеп ултырҙы.

Кешеләргә ҡарата тәүге тапҡыр үҙенең сикһеҙ ихтыяр көсөн ҡулланған Айвар үҙе лә көтмәгән һөҙөмтәнән тәүҙә бер аҙ юғалып ҡалды. Ләкин оҙон-оҙаҡ уйлап ултырырға ваҡыт самалы ине. Һаман да уға иҫтәре китеп ҡарап ултырған милиция уҙамандарына тағы бер тапҡыр күҙ һирпеп алды ла ишеккә йүнәлде. Коридорҙа кеше күренмәй ине. Урамға сыға торған ишеккә етер алдынан ғына шундағы бүлмәләрҙең ҡайһыһынандыр бая гәпләшеп торған ирҙәрҙең береһе килеп сыҡты. Айварҙы таныны, ләкин уның тыныс йөҙө, ышаныслы аҙымдары бер ниндәй ҙә шик тыуҙырманы, шикелле — үҙ юлын дауам итте. Тағы ике аҙым, һәм Айвар юҡҡа сыҡты.

## 23

— Туҡта, Сәғәҙиев, һин берәй нәмә иҫләйһеңме?

— Иҫләйһеңме тип. Үҙем дә алйот шикелле төшөнә алмай ултырам. Ә, көтөгөҙ, беләһегеҙме, иптәш лейтенант, һеҙ һорау ала башлағас, бер нисәһенә яуап бирҙе ул. Унан өндәшмәҫ булды. Һеҙгә ни өсөн шулай тексәйгән, тип һорарға ауыҙымды ғына асҡан инем... үлтерегеҙ, ләкин башҡаһын хәтергә төшөрә алмайым.

Сержант менән лейтенант байтаҡ ваҡыт өндәшмәй ултырҙылар. Күп булһа, бер-ике сәғәт элек булған хәл икеһен лә һиңкәҙәткәйне.

— Ә, ни, иптәш лейтенант, бәлки, был хаҡта Әбдрәхимовҡа еткерергәлер? Берәй юлын табыр ине, тиеүем.

Әле генә тып-тыныс ултырған Моратшиндың йөҙөнә тимгел-тимгел таптар ҡалҡып сыҡты, уҫал йылмайып, сержантҡа тишә ҡараны:

— Бар, йүгер, һөрәнлә барыһына ла. Беҙ, ике иҫәр, машина бурын тотторҡ та упайышып ҡарап ултырып ҡалдыҡ, тиген. Бәлки, һине минең урынға күсерерҙәр, мин генералға әйләнермен.— Юлында ни осрай шуны аяғы менән дөбөр-шатыр күсереп, өҫтәлде урап сыҡты Моратшин. Бер-ике ултырғыс көмөшкә эсеп йығылған салбарлы януарҙай туңҡайғас, үсе ҡанғандай булып, ҡабат урынына килеп ултырҙы.

— Туҡта, Сәғәҙиев, һин бит уны элегерәк күргәйнем, тигәйнең. Нисегерәк тойолдо ул һиңә?

— Ни, иптәш лейтенант, әйттем бит инде һеҙгә, машинаны бынан алып киткәндә... теге айыу менән бергә... аптырап ҡарап торҙом. Ысын бына, кабинаны асҡанын

күрмәнем, әллә нисек айыу янында хасил булды. Икмәктәр, ант итәм. Әллә нисек, осоп ҡына йөрөгән һымаҡ ине үҙе.

— Һин улай тиһең дә бит, мин уны тотоп ҡараным, сержант. Тентеү һылтауы менән. Ып-ысын кеше, һинең менән минең һымаҡ. Нисек осоп йөрөй алһын ул?

— Белмәйем шул. Мин һеҙгә күргәнемде һөйләйем.

— Сәйер, бик сәйер. Беҙ бүлмәлә өсәү инек, нисек сығып киткәнен икебеҙ ҙә иҫләмәйбеҙ. Һы... Сәғәт ярым ваҡыт үткән. Аңлашылмай... — Моратшин бүлмә буйлап тағы ла кәләп һалып килде.— Аңлашылмай... Әйт әле, берәй әйберҙе ҡулы менән тоттомо?

Сәғәҙиев елкәһен ҡашып уйланып торҙо.

— Юҡ. Тотманы, шикелле.

— Эх беҙ, алйоттар, ҡулға эләгеү менән, тәүге сиратта һүрәткә төшөрөп, бармаҡ эҙен алаһы ҡалған. Исемфәләне әллә дөрөҫ, әллә уйҙырма... Был бик йылғыр енәйәтсе булырға тейеш. Беҙгә ул берәй нәмә эсерҙеме? Юҡ, был батмай. Газ баллоны ҡулланманы, уны ғына күреп өлгөрөр инек. Ниңә мин бер нәмәне лә иҫләмәйем? — Лейтенант асырғанып урынынан тороп китте. Тәҙрә янына баҫып бергилке торғас, сержантҡа өндәште.— Бына нәмә, Сәғәҙиев, был хәл тураһында шалтырамай тор. Беҙ уны тотманыҡ һәм күрмәнек. Бая алып ингән кешенең машинаға бер ниндәй ҡағылышы юҡ. Аңлашыламы?

— Аңлашыла ла ул. Ә нисек...

— Һөйләгәнде көт. Бында ниҙер бар. Минең ҡулға килеп инеп, ҡабат ысҡынған икән, тимәк, миңә ҡаршы сыҡҡан, тигән һүҙ. Лейтенант Моратшин үҙ-үҙен ихтирам итә әле. Мин уның эҙенә төшәсәкмен. Бөгөндән үк ҡырҡҡа ярыл, әммә фоторобот әҙер булһын. Һәр нәмәне миңә хәбәр итеп тор. Был хаҡта хәҙергә һинең менән минән башҡа бер кем дә белергә тейеш түгел. Төпсөнә башлаһалар, миңә ауҙар. Ә хәҙер китергә мөмкин. Мин әйткәндәрҙе онотма.— Моратшин алдында ятҡан ҡағыҙҙарына эйелде. Уларҙы бер-бер артлы уҡып маташһа ла, мәғәнәһенә төшөнмәне. Күҙ алдында серле рәүештә юҡҡа сыҡҡан урмансының йөҙө тора ине.

## 24

Хәмит менән Миңлегәлене Стас мыҫҡыллы йылмайып ҡаршы алды:

— Нәмә, сепрәкбаштар, балыҡ ҡапмаймы? Һеҙҙең

ишеләрҙең мәкинә тултырылған нәмәһен эшләтеү өсөн, бер тонна тоҙ ашау ҙа аҙ булыр.

— Ни, шеф, һиңә бер эш бар ине.— Стас ҡыҙып китеп ишеккә күрһәтмәҫ элек, йомошон аңлатып ҡалырға ашыҡты Хәмит.— Бик ҙур эш, ыбыр-сыбырҙарҙан түгел.

— О-о, ни ишетәм мин? Бәлки, Өфө урамдарының береһендә асфальт аҫтында алтын ятҡылығы тапҡанһыңдыр, ә? Приискы асыр инек, шулаймы, Миңбай?

— Тыңла әле, шеф, эш итә белгәндә, алтын ятҡылығы ла сүп кенә. Күп тир түгәһе лә түгел.

— Был яңы әйбер.— Стас үҙенең былар янында өҫтөнлөгөн һыҙыҡ өҫтөнә алып, һауалы ғына ҡараш ташланы ла, аяҡтарын бер-береһенә салып, йомшаҡ креслоға барып ҡунаҡланы.

— Йә, һайра, ни менән килдең? Ваҡ-төйәк нәмә булһа, тәҡдим итеп торма, ундайҙарға ваҡыт тығыҙ.

— Бына нәмә, шеф, бик шәп идея тыуып тора. Үткәндә һыҙмалар юғалғайны бит әле.— Әйтеүен әйтте, ләкин телен умырып ташларҙай булды Хәмит — Стас бурҙат ҡыҙыл төҫкә инде. Яҡыныраҡ торһаң, сәйнәп ташларға әҙер. Миңлеғәле ирекһеҙҙән ишек артынараҡ сигенде.

— Һин! Йолҡош! Шуны әйтер өсөн килдеңме бында? Эштең юҡҡа сығыуы өсөн башыңды муйыныңдан бороп алмағанға рәхмәт әйт.

— Көт әле, әйтеп бөткәнде көт. Бар әтнәкәһе лә шунда бит инде: беҙ уларҙың нисек юғалғанын да белмәйбеҙ. Дөрөҫөрәге, беләбеҙ, ләкин әҙәм ышанырлыҡ түгел. Һөйлә әле, Миңлеғәле, эштең нисек булғанын.

— Ни... Үткәндә... Назаровтың фатирында... һыҙмалар менән ҡалғайным.— Тыныс холоҡло, бигүк аралашмаусан Миңлеғәле һәр ҡыйыш һүҙ өсөн өҙгөләп ташларҙай булып ултырған яһил Стас янында бөтөнләй юғалып ҡалды. Уның ҡарашы менән осрашмаҫ өсөн, күҙҙәрен тирә-яҡҡа йүгерткеләне.

— Йә, етер шуны мөңкөлдәтергә, үҙең һөйлә.

Хәмит «Инде күрҙеңме кемдең кемлеген» тигән фекер ярылып ятҡан күҙҙәрен уҫал ялтыратып Миңлеғәлегә ҡарап алды ла, уны яҡтылыҡ тиҙлегендә юха йылмайыу менән алыштырып, Стасҡа яҡыныраҡ шылышты.

— Бына нәмә, шеф, үткәндә беҙ бер тапҡыр ул ҡәһәр һуҡҡан ҡағыҙҙарҙы ҡулдан ысҡындырғайныҡ. Тегенең арҡырыға бөткән бер ҡыҙы бар, шул эләктергән. Унан квартираны тентеп, ҡабат табып алдыҡ. Ышанаһыңмыюҡмы, беҙ икебеҙ генә инек, ишекте өс йоҙаҡҡа бикләнек. Мин аш бүлмәһенә инеп киттем, Миңлеғәле ҡағыҙҙар янында ҡалды. Бына сама менән ошо тирәләрәк ята ине

дипломат. Күҙ алдында булһын тип, һыҙмаларҙы өҫтөнә генә һалдым. Ҡалғанын Миңлеғәле генә күргән.— Хәмит ярҙам һорап Миңлеғәлегә ҡараны, ләкин тегеһе ләм-мим өндәшмәгәс, ҡулын һелтәп үҙе дауам итергә булды.— Бер һүҙ менән әйткәндә, урлаусы әҙәм стена эсенән сыҡҡан.

— Ха! Ха-ха-ха! — Ғүмерҙә ҡыланмағанынса, Стас, эсеп тотоп, креслоның бер ҡабырғаһына йәбеште.— Ну, фантазер! Миңбай, һинән ҡот осҡос фантаст сығыр ине. Беҙҙең ишеләр араһында әрәм генә булып йөрөйһөң.— Һаман да тынyслана алмай, бер нисә минут хахылданы. Унан ҡапыл ҡоро ғына итеп Хәмиткә өндәште.— Һин нимә, шундай әкиәткә ышанырға алйотҡа һанайһыңмы мине? Балалар баҡсаһына килдеңме?

— Туҡта, ҡыҙмай тор. Бар әтнәкеһе шунда ла инде.— Хәмит һаман бирешмәҫкә тырыша.— Ышанмаһам, ышанмаҫ инем, Миңлеғәле бит бер ҡатлы әҙәм, алдашҡанын күргәнем юҡ. Икенсенән, теге ҡормоштоң фатиры крепость кеүек. Ишектән башҡа инер тишек юҡ. Ә ишек бикле ине! Бикле ине!

— Йә, ярай, дауам ит. Шунан, ниндәй файҙа сығарырға уйлайһың ул,— Стас мыҫҡыллы йылмайҙы,— стена аша йөрөй торған әҙәмеңдән?

— Тап өҫтөнә баҫтың, шеф.— Хәмит, майлы йылмайып, тегенең алдынараҡ күсте.— Уйлап ҡара, бөтә магазиндәрҙе, аҡса муҡсаларын нәмә һаҡлай? Стена! — Хәҙерҙән үк үҙе үтә алған кешеләй, маһайып ҡараны Хәмит. Стастың йөҙө иһә икенсе төрлөрәк ҡиәфәт алды — унда тырнаҡ осондай ғына ҡыҙыҡһыныу сағылып ҡалды.

— Тә-әк... Тәк-тәк... Бына быныһы эшкә ярай. Ләкин ул кешене нисек табырға уйлайһың? Берәй планың бармы?

Стастың йомшағыраҡ һөйләшә башлауынан Хәмит иреп китте.

— Булдырабыҙ уны, шеф. Беләһеңме, теге ҡағыҙҙарҙы, һыҙмаларҙы тим, Назаровҡа кире ҡайтарғандар. Ниндәйҙер бер егет ине, тиҙәр, һораштырғыланым. Етмәһә, Айгөл, тегенең ҡыҙы, шул кеше менән ҡайтҡан. Уны юғалтҡайнылар бит. Әй, һин — үҙ кеше, әйткәндә лә ярай, дөрөҫөрәге, беҙ, урманға алып барып, ағасҡа бәйләп киттек. Ҡағыҙҙарҙың ҡайҙалығын әйттереү өсөн. Ә ул юҡҡа сыҡты. Кемдер сисеп алған. Уны эҙләп йөрөгәндә, урмансы йортона юлыҡтыҡ. Бына нәмә, шеф.— Хәмиттең йөҙө бик мөһим нәмә әйтергә йыйынған әҙәм ҡиәфәтен алды.— Теге ҡағыҙҙарҙы килтергән егет хаҡында һораштырғылағайным. Әгәр һиҙенеүем дөрөҫкә сыҡһа, шул урман ҡараусы булырға тейеш. Шикле күренгәйне ул миңә

тәүҙән үк. Уйлап ҡара, ул ҡағыҙҙар Назаров менән беҙҙән башҡа тағы кемгә кәрәк? Бында бәйләнеш ярылып күренеп ята. Ҡыҫҡаһы, минең фекер — ул егетте ҡулға төшөрөргә кәрәк.

Стас бер аҙ өндәшмәй ултырҙы. Күренеп тора — Хәмиттең тәҡдиме күңеленә хуш килгәйне. Стена аша үтеп йөрөй алған кеше ярҙамында ниндәй эштәр атҡарырға мөмкин икәнлеге хаҡында хыялланды. Ләкин ул артыҡ реалист ине, хис-тойғоларға бирелеү — уның өсөн ят нәмә. Әле лә унда иҫәп-хисап үҙенең өҫтөнлөгөн күрһәтте.

— Конкрет алғанда, ул егет менән уртаҡ тел табырға мөмкинме? Беҙҙең кеүектәр менән аралашырҙай рәте бармы, тием?

— Дөрөҫөн әйткәндә, мин быға шикләнәм, шеф. Уны ысҡына алмаҫтай ҡапҡанға эләктерергә кәрәк, минеңсә. Һөйләшеп килешеп, ыңғайға килерҙәйгә һис оҡшамаған.

— Йә, ярар, юлын табырбыҙ. Унан йылғырыраҡ әҙәмдәрҙе ауыҙлыҡлаған бар. Бына нәмә, һеҙгә йөкмәтелгән тәүге эш — Назаров ҡағыҙҙарын килтергән кеше хаҡында тағы бер тапҡыр һораштырығыҙ. Унан урмансы янына юл төтөргә кәрәк булыр. Быныһына үҙем барам. Шулмы-түгелме — миңә асыҡ әйтергә тейеш булаһығыҙ. Ҡалғандарын — аҙаҡ. Ә, онотоп торам, теге туташтың, кем әле, Назаровтың ҡыҙы тинегеҙме, ҡылын тартҡылап ҡарағанда, нисегерәк булыр? Сиселергә мөмкинме?

Хәмит ҡулын һелтәне.

— Уны теленән аҫып ҡуйһаң да, әйтмәйәсәк. Шуның арҡаһында әллә ниндәй бәләләргә тарып бөттөк бит инде.

Стас мыҫҡыллы йылмайҙы.

— Туташтар менән эш итә белергә кәрәк, сепрәкбаштар. Сыбыртҡы шартлатҡанға йүгереп йөрөргә, колхоз һыйыры түгел дәһә. Һеҙгә йөкмәтһәң, тағы әллә нәмә ҡыланырһығыҙ, ҡыҙҙы мин үҙ өҫтөмә алам. Ҡушылған эш аңлашылдымы? — Стас, аяҡтарын да һалып тормай, диванға барып ятты. Был һүҙ шуның менән тамам тигәнде аңлата ине.

## 25

Бер аҙна ваҡыт үтеп китте. Урман ҡыҙырһынмы, элегерәк мөкиббән китеп йәбешеп уҡыған китаптарын ҡулына алһынмы, күңел тынының таба алманы Айвар. Уны ҡолас йәйеп ҡаршыламаһалар ҙа, кешелектең шау-шыуын, ыҙғыш-бәхәстәрен, шатлыҡтарын һәм күҙ йәшен үҙ

итеп өлгөргәйне инде урман тотҡоно. Нишләргә? Нишләргә?

Эштәрҙе тапшырып, әгәр ҙә бөтөнләйгә киткәндә? Һәләк буласаҡ. Тере ҡалғанда ла, ғәп-ғәҙәти кешеләр кеүек көн күрергә тура киләсәк уға. Бына ҡайҙа ул ҡапма-ҡаршылыҡ! Һуңғы арала бында бик һирәк булғыланы. Һөҙөмтәһе — Йөнтәҫкәйгә ҡул һуҙҙылар. Ул тарих, ана бит, нәмәләргә барып олғашты.

Эйе, уның башҡа мөмкинлеге юҡ — урманда йәшәргә, ләкин элеккесә тотҡон хәлендә түгел. Ғүмер бер генә лә баһа. Үҙенә бирелгән ваҡыт эсендә ниҙер ҡылырға өлгөрмәһә, йәшәүенә шунса ғына баһа. Юҡҡамы ни йәшлеген, мөхәббәтен ҡорбан итеп, игеҙәген үҙенә буйһондорған ул.

Аныҡ бер ҡарарға килгәс, ниһәйәт, тынысланып, егет урынынан торҙо. Уның тағы бер эше ҡалған. Айыуҙы урлаған кеше үҙ язаһын алырға тейеш. Ирекгә өйрәнгән йән эйәһен ситлеккә бикләп, аҡса эшләргә уйлаған әҙәмде буш ебәрә алмай ул. Юҡ, үс алып ҡул бысратмай Айвар ундайҙар менән. Шулай ҙа үҙе ҡылғанды иңе менән күтәрәсәк.

Әгәр ҙә теге милиционерҙарға ҡарата ҡулланған алым менән эш иткәндә? Ул икәү Айварҙың ҡаршыһында ултыра ине, бының менән эш ҡатмарлыраҡ. Фотоһын тапҡанда? Ҡараҡтың исемен белмәй шул, ләкин йөҙө, һын-һыйпаты таныш. Үҙе булмағанда нисек итеп Йөнтәҫкәйҙе урлағандарын үткән төн күҙ алдына баҫтырып ҡараны. Икәү булғандар. Ҙур фургонлы машина. Уның буйынса эҙҙәренә төшөргә маташыу бушҡа булды. Күрәһең, үгеҙ һымаҡ үкереп йөрөгән нәмә руль артында ултырған мыштым әҙәмдеке. Бер аҙ баш ватҡас, келт итеп бер нәмә хәтеренә төштө — төп ҡараҡтың исеме Солтан бит. Эйе, эйе, үткәндә, Нәфисә юғалғанда, уны эҙләп килеп сығыусы төркөмдә ине. Бригадир Ишмырҙаның алыҫ туған тейешле кешеһе, шикелле. Тимәк, шул ваҡытта айыуҙы күҙләп, ниәт итеп ҡуйған. Унда ла, ай-һай, бигерәк йылғыр ҡылана ине.

Айвар ишек алдына сыҡты. Аҡморон үҙ урынында һуҙылып ята. Хужаһын күргәс, өтәләнеп һикереп торҙо. Бер нисә көн айырылып торғандың хаҡын ҡайтарырға теләгәндәй, Айвар янында бөтөрөлдө. Йөнтәҫкәйҙең саҡ ҡына арыраҡ ҡыуаҡтар араһында, ботаҡтарҙы шарт-шорт һындырғылап, ниҙер эҙләп булашыуы күренә. Барыһы ла элеккесә... һәм элеккесә түгел. Тәүге уңыштарҙан ҡанатланған Айварҙың күңеле ҙурыраҡ эштәр һорай ине.

## 26

Кыңғырау шылтыраны. Һуңғы дәрестең бөтөүен хәбәр иткәнгәме, айырыуса күңелле сыңғырлаған кеүек тойолдо ул. Йөҙҙәренән бала-сағалыҡ киткән, ләкин өлкәнлек өҫтөнлөк алып өлгөрмәгән үҫмерҙәр тышҡа ағылды. Алдындағы китап-дәфтәрҙәрен дә йыймай, онотолған-дай тәҙрәгә төбәлеп ултырған Айгөл ҡымшанманы.

— Айгөл, ҡайтмайһыңмы ни? Һуңғы дәрес.— Оҙон буйлы, ҡара сәсле үҫмер түҙемле генә ҡиәфәттә ҡыҙҙың партаһы янында баҫып тора. Класташтарының, бер-береһенә мәғәнәле күҙ ҡыҫышып, ишектән сығып бөтөп барыуҙарында эше лә юҡ.

— Ә-ә... Илгиз, мин бөтөнләй онотолғанмын. Дәрестең бөткәнен ишетмәнем.— Ҡыҙ ҡабаланып китаптарын йыйырға кереште, үҫмер уларҙы сумкаға һалырға булышты.

Урамға сыҡтылар. Мәктәп алды ярайһы бушағайны, унда-бында ғына төркөм-төркөм таралышыусы уҡыусылар күренә. Яй ғына атлап тротуар буйлап киттеләр. Һүҙ ялғанманы. Илгиз ҡыҙҙың ни ҙә булһа әйтерен көттө, тегеһе, үҙ уйҙарына батып, шым ғына атлауын белде.

— Айгөл, ни булды һинең менән? Былай түгел инең бит.

— Ҡалай инем һуң?

— Әллә нисегерәкһең... Ни өсөн ҡапыл үҙгәрҙең?

— Үҙгәрҙем? Был ысынлап та ныҡ һиҙеләме?

— Төпсөнә тип асыуланма, уҡыуҙар башланғанда, һин өйҙә түгел инең бит. Августың һуңғы көнөндә мин һеҙгә кереп сыҡтым, әсәйең ҡара көйөп йөрөй ине. Һин бит юғалғайның, Айгөл. Сәбәбе әллә шундамы?

Айгөл өндәшмәне. Нисек кенә аңлатып бирә алһын инде ул. Ярар, атаһының ҡағыҙҙары юғалғанын һөйләр. Шуның артынан йөрөп, үҙенең мажараларға тарыуын да, бәлки, егеткә төшөндөрөп бирер. Ләкин... Ләкин... Ошо өс көндән һуң булған хәлдәр... Баш етмәҫлек шул. Уның иғтибарһыҙға әйләнеүен, сәғәттәр буйына ниҙер хаҡында серәнеп уйланыуын ата-әсәһе генә түгел, ана бит, класташтары ла күреп өлгөргән. Тик үҙен ҡулға ала алмай шул. Ысынлап та, уйын эшме ни...

...Һәр киләһе төндө ҡыҙыҡһынып та, ҡурҡып та ҡаршылай Айгөл. Йоҡларға яталар. Кисен үҙ бүлмәһендәге утты һүндергәндә, ҡыҙҙың башында бер генә уй: «Бөгөн дә күренерме?..» Сәғәт ун икене һуға. Күпмелер ваҡыт үтә, һәм Айгөлдөң карауаты ҡаршыһындағы стенала бер һын хасил була. Тәү күргәндә шул тиклем ҡурҡты ҡыҙ,

саҡ бүлмәнән йүгереп сығып ҡасманы. Ләкин уны ниҙер тота ине. Бер аҙҙан был күренешкә өйрәнде, яйлап тынысланды, тейеш шикелле ҡабул итә башланы. Һәр төн ҡабатланмай был, ләкин ҡыҙ уның хасил булыуын көтөп ала. Сер тулы мәмерйәгә яңылыш ҡына эләккән шикелле хис итә ине ул үҙен. Текләберәк ҡарағас, мейеһен кинәт телеп үткән фекерҙән ҡаушабыраҡ ҡалды — һын урмансы Айварҙы хәтерләтә ине. Урманда яңғыҙы ҡалғанда төнөн күҙенә ниҙер күренеүен иҫләп, Айгөл бының хаҡ булыуын төшөндө.

Шуныһы ғәжәп — тәүге ҡурҡыуҙары үтте, урынына ҡыҙыҡһыныуы көсәйә төштө. Сере менән үҙенә йотоусы упҡын кеүек ине был...

— Айгөл, ниңә өндәшмәйһең? — Илгиз ҡыҙҙың ҡаршыһына баҫҡан да ғәжәпләнеп уға төбәлгән.— Һин мин һөйләгәнде ишетмәйһең, шикелле.

— Ә, эйе... Ысынлап, мин бик тарҡауға әйләндем, ахыры. Ғәфү ит, ни хаҡта һүҙ барғанын аңламай ҡалдым.

— Бәлки, үҙеңдең борсолоуҙарың менән уртаҡлашырһың? Ниҙер һиңә тынғылыҡ бирмәй, мин бит күреп торам.

«Әллә һөйләргәме? Юҡ, булмай, ышанмаясаҡ. Ул артыҡ реалист, теүәл фәндәр короле...»

— Ҡасан да булһа, бәлки, һөйләрмен, тик хәҙер түгел. Ышанмаясаҡһың... һәм төшөнмәйәсәкһең. Минең яңғыҙым ғына булаһым килә. Әгәр ҡалған юлды үҙем генә дауам итһәм, ҡаршы булмаҫһыңмы? — Айгөл егеткә төбәлде. Тегеһе бер ни өндәшмәгәс, боролдо ла яй ғына атлап үҙҙәре йәшәгән йорт яғына китте.

— Айгөл! Туҡта!

Ҡыҙ яртылаш әйләнеп егеткә ҡараны.

— Ни булды, Илгиз?

Әллә ҡабаланып килеүҙән, әллә ҡаушағанлыҡтан, бергилке өндәшә алмай торҙо үҫмер, унан үҙен ҡулға алып, ҡыҙҙың ҡаршыһына баҫты.

— Мин бит... мин бит һине яратам, Айгөл. Быны беләһең. Миңә лә... ни... һин мине... яратаһың кеүек тойолған ине. Иҫләйһеңме, туғыҙынсы класта уҡығанда... май айында. Ниндәй матур ваҡыт булған ул. Уҡыуҙар башланғанын түҙемһеҙлек менән көтөп алдым. Ләкин... һинең менән ниҙер булған. Аңлай алмайым мин һине, Айгөл.

— Тимәк, өлкәнәйәбеҙ, Илгиз. Үпкәләмә.— Сәйер тойғо — Айгөл яратыуын аңлатып биргәнсе шыбыр тиргә батҡан үҫмерҙән үҙен ҡапыл күпкә оло һымаҡ итеп хис итте.— Үпкәләмә, йәме? — Балалар баҡсаһына йөрөүсе һөйкөмлө малайҙарҙы нисек итеп һөйәләр, шуның шикелле битенән супылдатып үбеп алды ҡыҙ Илгизде. Тегеһе

ҡаушаны. Был иһә ҡыҙға мәҙәк булды.— Йә, ярай, хуш, һөйкөмлө малай.

Бер ни булмағандай, сумкаһын һелтәй-һелтәй, ағастар араһына кереп юғалды. Урманда бер нисә көн үткәрергә мәжбүр булыу яҙмышын уйламаған яҡҡа үҙгәртеүен ул аңлап бөтмәгәйне әле.

## 27

Йоҡо бүлмәһенең ишеге кинәт асылды.

— Әсәй! Әсәй, минең паспорт ҡайҙа?

— Бәй! Балаһыңдыр шул. Документтарың ҡайҙа ята, шул урынды ентекләп ҡара. Мин һинең бер нәмәңә лә теймәнем.— Тулы кәүҙәле ханым, эре биҙәкле халатының итәген тартҡылап, ҡабат аш бүлмәһенә кереп китте.

— Һуң, бөтә ерҙе аҡтарып бөттөм бит. Кисә генә телевизор өҫтөнә ырғытҡайным.

— Күпме әйтәм һиңә, ни етте ергә бәреп йөрөмә тип.— Аш бүлмәһенән сыҡҡан тауыштың ҡоролана барыуын һиҙеп, Солтан йәһәтерәк тәртәһен кирегә ҡайырҙы.

— Һе,— тип һөйләнде ул аптыраған ҡиәфәттә,— минең нурлы йөҙөм кемгә хәжәт булды икән?

Йә инде, тик торғанда кәйеф боҙолдо. Бөгөн үк кәрәк ине бит, шайтан алғыры. Йылдар буйы һаҡланып ятҡанда, уның донъяла бармы-юҡмы икәнлеге бер кемде ҡыҙыҡһындырмай юғиһә. Нишләйһең, табылғансы, был эште ситкәрәк ҡуйып торорға тура килер.

Солтан, һөмһөрө ҡойолоп, йыуыныу бүлмәһенән сыҡты ла кейем шкафында аҡтарынырға кереште. Ҡайҙа әле ул аҡсалар? Бик һирәк кейә торған костюмының эске кеҫәһенә тыҡҡайны, шикелле, улары ла юғала күрмәһен. Өтәләнеп кеҫәләрен аҡтарырға керешкән Солтан, бармаҡтары ике пачкаға ҡағылғас, еңел һулап ҡуйҙы. Уларҙы сығарып, оҙаҡ ҡына һоҡланып ҡарап торҙо.

Ләкин... Ләкин шул мәл ниҙер булды. Һәр ваҡыттағыса, уларға ҡарап, үҙен бик эшлекле кешеләй тойоп, диванда аяғын аяҡҡа һалып ята торған Солтандың йөҙө сәйер ҡиәфәт алды. Бер нәмә аңлатмаған ҡараштары хәрәкәтһеҙ ине. Ҡулына ни әләгә шуны шкафтан тартып сығарып өҫтөнә кейгәнсе, бик аҙ ваҡыт үткәндер. Өтәләнеп, ике пачка аҡсаны кеҫәләренә тыҡты.

Сәбилә ханым ҡулдарын алъяпҡысына һөртә-һөртә иртәнге ашҡа уны саҡырырға ингәндә, бүлмәлә бер кем юҡ ине. Кейем-һалым ғына тирә-яҡта тәртипһеҙ туҙышып ята. Ҡатынҡай, аптырап, күрше бүлмәләрҙе байҡап сыҡ-

ты, шаяртмаймы тип, хатта карауат аҫтына эйелеп ҡарарға ла онотманы. Сәйер, бик сәйер ине. Ғәҙәттә, тәмле тамаҡ булған, йоҡонан торғас уҡ билбау аҫтын апаруҡ нығытмайынса ике аяғының береһен йорттан ситкә сығармаған Солтанға оҡшамағайны был. Шуға ла бисара ҡатын, ни уйларға белмәй, бүлмә уртаһында байтаҡ баҫып торҙо.

Ә был ваҡытта Солтан, ике ҡулын кеҫәһенә тығып, ҡала урамы буйлап ашыға ине. Бер нәмә хаҡында ла уйламай, һис кемгә иғтибар итмәй. Светофор йылтылдап һүнһә генә, ниндәйҙер тойғо инстинктив рәүештә ҡыҙыл утҡа яҡын ебәрмәй. Байтаҡ барҙы ул ошо хәлдә. Гүйә, ҡайҙалыр ҡабаланыуы үҙе өсөн бер ниндәй әһәмиәткә эйә түгел ине — ҡараштары бар нәмәгә битараф.

Зоопаркка еткәс, ҡаршы осраған ҡайһы бер таныш кешеләргә күтәрелеп тә ҡарамай, директор кабинетына үтте. Ҡыҫҡа ғына юбка кейеп алған ҡыҙҙың туҡтатырға маташыуы бушҡа булды.

— Эй, иптәш, унда кәңәшмә бара.— Солтандың йөҙөнә ҡарағас, ирекһеҙҙән артҡа сигенде.

Ысынлап та, өҫтәл артында бер нисә кеше ултыра ине. Ғамировтың ниҙер һөйләүен дәүләт кимәлендәге бик мөһим яңылыҡ ишеткәндәй, иҫтәре китеп тыңлайҙар. Ишек асылыуға дәррәү боролоп ҡаранылар. Солтан, бер кемгә иғтибар итмәй, ике пачка аҡсаны директорҙың алдына алып барып һалды. Тегеһе, һис нәмә аңламай, бер аҡсаларға, бер таныш түгел егеткә алмаш-тилмәш күҙҙәрен йүгерткеләне.

— Бына теге айыу өсөн алған аҡсалар. Яртыһын ана Амангилдиндән таптырығыҙ. Ул айыу урланған ине.— Башҡа бер һүҙ өндәшмәне, боролдо ла сығырға йүнәлде. Уның артынан ишек шапылдап ябылғас, бүлмәләгеләр өҫтәлдең икенсе башында, ситтәрәк ултырған Амангилдингә төбәлде. Тегеһе ыҡ-мыҡ итте.

— Рәфҡәт Абуталипович, бәлки, аңлатырһығыҙ?

— Мин... Мин бер нәмә лә белмәйем.

Ғамировтың тауышы ҡатылана төштө.

— Беҙ һеҙҙең аңлатма биреүегеҙҙе һорайбыҙ. Урланған йәнлектәр менән аҡса эшләп, зоопаркка ниндәй дан килтерергә уйланығыҙ?

— Мин... Мин... ғәйепле түгел. Ул үҙе урлап килтерҙе. Аҡсаһын уртаға бүлдек. Теләһәгеҙ, бөгөн үк килтерәм.— Амангилдин шыбыр тиргә батты. Ситтән ҡарағанда, бик үкенгән ҡиәфәттә булһа ла, эсендә асыуы дөрләп яна ине. «Ах һине, үҙ ҡулдарым менән быуырға,— тип ыҫылданы эске тауыш,— намыҫлы әҙәм табылған. Әллә кем

уны аяҡ-ҡулын бәйләп, мәжбүр итеп урлатҡан. Ошо өйөрҙән ҡотолһам, күрмәгәнеңде күрһәтер инем».

Зоопарктан сығып ысҡынғас, иҫенә килә алмай байтаҡ паркта баҫып торҙо. Асыуын нәмә менән баҫырға белә алмай, юлында осраған ағас-таштарҙы типкеләне. Унан күҙенә тәү күренгән телефон-автоматҡа ташланды. Эш ваҡыты икәнлеге, өйҙә булыу-булмауы бөтөнләй иҫенән сыҡҡайны. Ғәжәпкә, трубкала таныш тауыш ишетелде:

— Эйе, тыңлайым.

— Һин... Һин... үләт ҡырғыр нәмә, ни йөҙөң етеп, ул харам аҡсаларыңды тотоп бында килдең? Бына нәмә, әгәр ҙә минең юлымда тағы осраһаң, изгелек көтмә. Юғиһә һау ереңде ҡалдырмаясаҡмын, ҡолағыңа киртеп ҡуй.

Арғы баштан Солтандың ғәжәпһенгән тауышы ишетелде:

— Нәмә? Аҡсаларҙы тотоп барғанмын? Ҡайҙа?

Рәфҡәт бергилке яуап бирә алмай торҙо, унан, иҫенә килеп, матур-матур һүҙҙәрҙе ҡабаттан теге осҡа яуҙыра башланы.

— Һин... Боғаҙыңдан алыр инем, янымда түгелһең...

— Көт, көтөп тор, аңлат, ниндәй аҡсалар?Теге айыу һатып тапҡан аҡсалармы? — Теге баштан Солтандың һаһылдап көлгән тауышы ишетелде.— Нимә, Рәфҡәт дуҫ, мине аҡылдан яҙғанға һанайһыңмы? Нишләп уларҙы ҡабат алып барайым ти. Минең...

Амангилдиндең башҡаса түҙемлеге етмәне, бар көсөнә трубканы ташланы ла, ишекте тибеп асып, телефон будкаһынан сыҡты. Аҡылдан яҙған Солтан уны тамам сығырынан сығарғайны.

Солтан иһә, уның һөйләгән хәбәрҙәренең айышына төшөнөргә тырышып, байтаҡ ултырҙы. Унан аҡса тигән нәмә, ниһәйәт, башына барып еткәс, көтөлмәгән етеҙлектә һикереп тороп, кейем шкафына ташланды. Әлеге костюмын һелкетә тартып сығарҙы. Кеҫәләрен күпме ҡапшамаһын, ҡәҙерле төргәктәрҙе таба алманы. Шунда ғына мейеһенә барып етте Амангилдин һөйләгән хәбәрҙең айышы. Ни иларға, ни көлөргә белә алмай, костюмды тотоп иҙәндә байтаҡ ултырҙы. Иҫенә килгәс, йән асыуы менән ҡулындағы әйберен стенаға атып бәрҙе. Уныһы һыпырылып төшөп, кескәй телевизор өҫтөнә ҡапланды. Шул ыңғай Солтандың яңыраҡ ҡына донъя аҡтарып эҙләгән паспорты иҙәнгә осоп тәштө. Был инде бигерәк саманан артыҡ ине. Аҡылының теүәллегенә шикләнә башлаған Солтан, ике ҡулы менән башын ҡыҫып, диванға һуҙылды.

Үҙенең дөрөҫ ҡарарға килгәнен аңлар өсөн Айварға күп ваҡыт кәрәкмәне. Эйе, ысынлап та, урман — уның һаҡсыһы.

Элегерәк күсермәһен төнө генә иреккә сығара ине. Бер аҙҙан быны яйһыҙ икәнлегенә төшөндө. Ни ҡыҙығы — барыһы ла йоҡлай, ҡарасҡы шикелле арлы-бирле үтәһең дә, күп осраҡта буш әйләнеп ҡайтырға тура килә. Аҡморондоң тоғро һаҡсы икәнлегенә ныҡлап ышанғас, көндөҙ һынап ҡарарға булды.

Айварҙың сит илдә ғүмерҙә лә булғаны юҡ ине. Бер кис гәзит-журналдар аҡтарып ултырғанда, башына иҫ киткес дыуамал уй килде — ә ниңә тәүәккәлләп ҡарамаҫҡа? Виза һорап, илселек ҡапҡаһын һаҡлайһы түгел, ул — үҙенә үҙе илсе. Билет алам тип, валюта табырға кәрәкмәй. Бер һүҙ менән әйткәндә, осар ҡош. Ил сиген үткән өсөн, көньяҡҡа юлланыусы ҡоштарҙы яуапҡа тарттырыу әлегә саҡлы тарихта булғаны юҡ.

Уйланған эш — бөткән эш. Бигерәк тә, уның өсөн. Көндәлек башҡара торған мәшәҡәттәренең бер аҙ осона сыҡҡас, Айвар ниәтен бойомға ашырып ҡарарға булды. Аҡморондо ныҡлап иҫкәртте, тәҙрәләрҙе томаланы, ишекте мөмкин булған бөтә йоҙаҡтарға бикләне. Урынына барып ятты һәм...

...Иҫ киткес ҡуйы, үткеһеҙ ҡара урман. Бына ҡайҙа ул тәбиғәттең кот осҡос ҡырыҫлығы һәм тасуирлап биргеһеҙ хозурлығы. Ҡасандыр әҙәм аяғы баҫҡанлығына ышаныр өсөн, кешенең маймылдан хасил икәнлегенә инаныр кәрәк. Уныһы иһә тағы ла ҡатмарлыраҡ эш. Әйткәндәй, яңылыш һығымта — кешеләрҙең боронғо ата-бабалары менән мөмкин булған бөтә ағас тулы. Сырҡылдашып, ботаҡтан-ботаҡҡа һикерешәләр. Ҡыҙғанысҡа, бөйөк идеологтың фәнни теорияһын иҫбатлау йөҙөнән булһа ла, әҙәми затҡа әүерелергә генә ҡабаланмайҙар. Хәйер, ниңә ашығырға — былай рәхәт тә баһа. Ашарға тап һәм ят та йоҡла. Ике ҡулға бер эш.

Үҙенең, әйтергә яраһа, сәйер ҡиәфәттәге ата-бабалары янында ағас башында бер аҙ тамаша ҡылып ултырҙы Айвар. Маймыл заттары, ана бит беҙҙең сыбыҡ осо ҡәрҙәшебеҙ килгән, ҡыуанайыҡ, булмаһа, тип исем өсөн генә лә яҡты йөҙ күрһәтеүҙе кәрәк тапманы. Хәйер, сыбыҡ осоноң үҙендә лә ундай теләк күренмәй ине булһа кәрәк — донъяға тәү көн тыуғандай булып, иҫе китеп тирә-яҡты күҙәтә. Ағас башында ултырып ялыҡҡас, күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә ерҙә хасил булды. Унда иһә Айварҙы

икенсе даирә көтә ине — юлбарыҫ гәрсә бында мин хужа, тигән оранды плакатҡа яҙып демонстрацияға сыҡмаһа ла, бөтә һын-һыйпаты тауыш-тынһыҙ ғына ҡысҡырып тора. Тап ҡаршыһында пәйҙә булған кешегә иҫе китеп текләп ҡараны — ундай йән эйәһен тәүге күреүе ине, шикелле. Кешенең ҡиәфәтендә ул күреп өйрәнгән ҡурҡыуҙы, күпме тексәйһә лә, элеп ала алманы. Шуға күрә, буғай, ике аяҡлы әҙәм затын шундуҡ тәүге һанлы дошманы яһаны. Уҫал ҡарап яҡыная башланы. Бар һыны ҡорбанына ташланырға әҙер ҡиәфәт алды. Ниһәйәт, күҙҙәренә ҡан һауылды, кәүҙәһе пружина һымаҡ ҡатып ҡалды, һәм юлбарыҫ бар көсөнә алға ырғылды. Һикереү алдағы ҡаршылыҡҡа иҫәпләнгәйне, йыртҡыс, уны осратмай, ергә мәтәлеп барып төштө. Ырғып тороп, ҡанһыраған күҙҙәре менән ҡорбанын тирә-яҡтан эҙләне. Ләкин ул... элекке урынында тора ине. Һыны ғына тоноҡлана төшкән. Ажарланған йыртҡыс тағы ташланды. Әммә һөҙөмтәһе — шул уҡ. Байтаҡ бәргеләнде юлбарыҫ, ахыры сиктә хәлдән тайып, ағас төбөнә барып ятты. Бер нәмә аңлай алмай, әлеге йән эйәһен күҙәтә башланы. Уныһы иһә йыртҡысҡа тамсы ғына иғтибар итһәсе! Ғәрләнгән юлбарыҫ һөжүм яһарға башҡаса тәүәккәлләмәне.

Айварҙы ҡыҙыҡһындырғаны хәҙерге мәлдә башҡа нәмә ине — джунглиҙың йырып сыҡҡыһыҙлығы. Тәбиғәттең үҙ-үҙен һаҡлау көсө өҫтөнлөк алғанмы бында, әллә йыртҡыс хайуандарҙың кеше затына аяуһыҙлығы сәбәпсеме. Ни тиһәң дә, бындағы урмандар ерҙә тәүге кеше яралған замандарҙан башлап аҙ үҙгәреш кисергән. Икенсе берәү булһа, бәлки януарҙарға ғына иғтибар итер ине. Ләкин Айвар урмансы ине. Хоҙай биргән байлыҡты һаҡлау уның ҡанына һеңгәйне.

Байтаҡ йөрөнө егет лианалар менән сырмалып бөткән ҡолас еткеһеҙ ағастар араһында. Ғүмерҙә күрмәгән серле донъя ебәрергә теләмәне. Үтеп сыҡҡыһыҙ урманда ул һаҡлыҡ хаҡында оноткан берҙән-бер йән эйәһе булғандыр. Ошо тирәнең аждаһаһы юлбарыҫты хәлдән тайҙырған әҙәмгә тағы ниндәй януар ҡаршы сыҡһын. Шуға күрә джунглиның мөғжизәле донъяһына онотолоп сумды егет. Кокос сәтләүеген төшөрөргә маташҡан мәлдә күҙенә эләккән баш һөлдәһе генә ысынбарлыҡҡа ҡайтарҙы. Әгәр ҙә Аҡморон менән бер-бер хәл булһа, әгәр ҙә үсле кешеләр йортҡа инһә? Был артыҡ ҡурҡыныс сәйәхәт, бөтөнләйгә онотолоу — тура һәләкәткә юл. Сәтләүек ситкә тәгәрәне. Сәйер әҙәмде иҫтәре китеп күҙәтеп ултырған маймылдарҙы аптыратып, Айвар кинәт юҡҡа сыҡты.

## 29

Һиндостандың кеше ҡырмысҡа иләүеләй мыжғып торған баҙары. Әле тегеһе, әле быныһы үҙенең тауарын маҡтап һөрән һала, үтеп йөрөүселәрҙе эләктерергә тырыша. Күбеһе ҡара тәнле халыҡ, ҡарағусҡыл һарғылт кешеләр ҙә байтаҡ. Әллә ни ҡояшҡа янмаған, янған хәлдә лә, тирә-яҡтағылар араһында аҡ ҡарғалай күренгән Айварға шундуҡ иғтибар иттеләр. Аҡ тәнлеләрҙең аҡсаһы күп, тигән фекерҙә инеләр булһа кәрәк — кемуҙарҙан ярышып, бер-береһенең өҫтәренә менә яҙып, егеттең иғтибарын яуларға тырыштылар. Ниҙәр генә тәҡдим итмәйҙәр — көршәк менән тегелешен бигүк аңлап бөтөрлөк түгел кейем-һалымдан башлап Айвар ғүмерҙә татып ҡарамаған тәғәм-ризыҡҡа тиклем. Ләкин ни эшләһен инде егет — улар тауар хаҡына алырға теләгән аҡсаны төшөндә лә күргәне юҡ. Икенсенән, әйткән һүҙҙәрен аңлай, мейенән килгән импульстарҙы яҡшы тота, ләкин уларса һөйләшә белмәй. Әгәр ҡаршыһында бер генә кеше булһа, мөмкин дә кеүек. Ә был тиклем халыҡҡа аңлатыуҙары... Егеткә яғымлы йылмайып, кеҫәләрен күрһәтеп, ситкә китеүҙән башҡа сара ҡалманы. Ике усын бер-береһенә терәп, маңлайына күтәреп маташты. Уны аңланылар, ҡайһылары ҡул һелтәп, бәғзеләре ышанмайыраҡ, үҙ урындарына таралыштылар.

Ҡаланың үҙәк урамы буйлап артабан юл тотто. Тротуарҙарҙа һыйырҙарҙың көйшәп ятҡаны күренә, кеше күберәк йөрөй торған урындарҙа хәйер һорайҙар. Барыһы ла нисектер сәйер, ят кеүек. Әллә кескәй генә сағынан һинд киноларын мейеһенә һеңеп бөткәс, ниндәйҙер экиәт иле итеп күҙ алдына килтергән ине ул. Үҙе тыуып үҫкән ысынбарлыҡтың йүнленән булмағанын күңеле менән аңлаһа ла, ҡайҙалыр хыял иле барлығына ышанырға теләне. Көткәндең тап киреһен күреп, күңеле ҡайтҡайны. Ҡояшлы Һиндостан урамынан күләгә ҡалдырмай атлап барған егеттең һыны, тоноҡлана барып, бөтөнләй күҙҙән юғалды.

...Мәғрур Мысыр пирамидалары. Егерменсе быуат аҙағында ла кешелек серенә төшөнөп бөтә алмаған тәбиғәт мөғжизәһе. Боронғо замандарҙа ҡолдар ҡулдары менән ташып төҙөгәндәр, тигән фекерҙе мәктәптән алып күңелгә һеңдерергә тырышһалар ҙа, нисектер, ышандырмай. Ышандырмай... Бәй, был серле йомғаҡтың осон эләктерә алмаймы ни Айвар? Егет бөтә иғтибарын бер нөктәгә тупланы. Бына уның күҙ алдынан аҡыл етмәҫ тиҙлектә тарих картиналары уҙа. Һуғыш, мәжлес, туй, ыҙғыш... Ниҙәр генә юҡ. Бер аҙҙан тарихта билдәле булған осорҙар

үтеп бөттө, пирамида ғорур һынын килеп ҡала бирҙе. Ах, бына эш нәмәлә! Икенсе, бөтөнләй башҡа цивилизация! Нисектер, Ер йөҙөндә ғүмер баҡый кеше генә йәшәгән, ул бөткәс, планета ла юҡ, тигән фекер артыҡ күңелгә һеңешкән, шикелле. Миллионлаған йылдар һуҙымында әйләнеп торған Ер шарында кешелек оҙон бер сылбырҙың быуыны ғыналыр, бәлки.

Бер урындан икенсе урынға ҙур тиҙлектә күсеү өҫтөнә Бөтә Йыһан информацион банкына мөрәжәғәт итеү күсермәне хәлһеҙләндерҙе. Аҡтыҡ көсөн йыйып, иғтибарын алыҫта, урман эсендә ҡалған ағас йортҡа туплаһы ул. Бер аҙҙан тәҙрә ҡапҡастары асылды, ишектең биге ысҡынды. Күҙҙәре ҡыҙарған, ҡыл өҙөрлөк хәле ҡалмаһа ла, кәйефе күтәренке Айвар, әле генә яһаған асышына үҙе лә ғәжәпләнеп, тышҡа төбәлгәйне.

## 30

Ҡыҙҙары артынан бүлмә ишеге ябылғас, Хәбир Ғүмәрович оҙаҡ ҡына шул яҡҡа ҡарап торҙо, унан башын ике ҡулы менән ҡыҫып, өҫтәл янына килеп ултырҙы.

— Әсәһе, һин берәй нәмә аңлайһыңмы?

— Үҙем дә борсолам шул, Хәбир. Бөтөнләй үҙгәрҙе бит.— Гөлзифа ханым алъяпҡысын сисеп ултырғысҡа ырғытты, уныһы шыуып иҙәнгә төштө. Бөхтәлек яратҡан ҡатын шунда уҡ тороп элә һала ине, ләкин әле битараф ҡалды. Был хәлдең, ысынлап та, бик ҡатмарлы булыуы хаҡында һөйләй.

— Айгөл былай түгел ине бит. Барыһы ла һыҙмалар юғалғандан һуң башланды. Их, шул ҡәһәр һуҡҡан ҡағыҙҙар... Берҙән-бер баланың яҙмышы менән түләрлекме ни шулар өсөн... Әсәһе, һөйләшеп ҡара әле һин уның менән. Бәлки, берәй нәмә асыҡлай алырһың.

— Белмәйем шул, Хәбир. Һүҙ башлап ҡараным бит инде. Өндәшмәй ҙә ҡуя. Әллә ниндәй сер йәшергән шикелле ҡылана үҙе.

Бер аҙ өндәшмәй ултырҙылар. Икеһенең дә уйы бер тирәләрәк өйөрөлдө. Хәбир Ғүмәрович уфтанды, унан тәүәккәлләп ҡыҙының бүлмәһенә йүнәлде.

— Айгөл! Айгөл, тим. Ас әле.

Тауыш-тын ишетелмәне.

— Айгөл! Һөйләшергә кәрәк.

— Атай, ғәфү ит. Минең йоҡом килә. Иртәгә, йәме?

Назаров ҡулдарын йәйҙе, иңбаштарын һикертте, шунан өмөтһөҙ ҡиәфәттә үҙҙәренең бүлмәһенә йүнәлде.

Ниндәй киҫкен мәлдәрҙә юғалып ҡалмаған баш конструктор хәҙер аптыраған бала хәлендә ине.

Был ваҡытта Айгөл, сәйер ашҡыныуға түҙә алмай, карауатының бер мөйөшөнә бөршәйгәйне. Бына, бына Ул хасил буласаҡ. Ниңә әле ҡыҙыҡай унан ҡурҡмай? Һәр төрлө хөрәфәттәрҙән өркөп бөткән ине ләһә. Әҙәм ышанмаҫ һынды ып-ысын итеп ҡабул итә, хатта уның менән һөйләшергә лә уҡталып ҡуя. Хәйерлегә булһын...

Атаһы китеп, күп ваҡыт үтмәне, стенала Ул пәйҙә булды. Ҡыҙыҡай бергилке өнһөҙ-тынһыҙ һынға ҡарап ҡатты.

— Кем һин? — Ике аҙнаға яҡын дауам иткән өнһөҙ аралашыуҙа тәүге һорау ине был.

Һын өндәшмәне. Тауыш-тынһыҙ ғына ҡыҙға ҡарап торҙо ла, шыуып төшкән һымаҡ, яй ғына иҙәнгә күсте. Стеналағы һүрәттә портрет һымағыраҡ тойолған йән эйәһе ып-ысын кешегә әүерелде.

— Танымайһыңмы ни, һылыуым?

— Әллә...?

— Дөп-дөрөҫ, Айгөл һылыу.

— ...

— Ҡурҡма, Айгөл. Мин һиңә һис ниндәй яуызлыҡ ҡылырға йыйынмайым. Һин тик өндәшмә генә. Башҡаларға, тим. Хатта иң яҡын дуҫ-иштәреңә, ата-әсәңә. Килештекме?

— Килештек. Ләкин...

— Хәлеңде аңлайым. Ҡыйын булһа ла, түҙ. Беләһеңме, был минең ихтыярҙан тыш килеп сыға. Мин бик оҙаҡ кешелектән ситтә йәшәнем, һәм ошо төпкөлдә һинең өс кенә көн булып китеүең бөтә донъяны үҙгәртте. Ул ерҙә мин элеккесә йәшәй алмаясаҡмын. Ҡайһы мәлдәрҙә йортомда һин булған ваҡытты һағынам. Кешеләргә һыуһау тигән төшөнсәне бигүк аңламайһың әле, һылыуым. Тап ошондай тойғо мине иҙә. Үҙем дә һиҙмәҫтән, был мәлдә һинең бүлмәңдә хасил булам. Хәҙер аңлайһыңмы инде?

— Аңлайым, Айвар ағай.

— Рәхмәт һиңә. Тап һинең осрауыңа мин бик шатмын.

— Ләкин һеҙ нисек итеп...

— Уныһын мин хәҙер генә аңлатып бирә алмам, төшөнөп бөтмәҫһең. Ҡасан да булһа һөйләрмен. Вәғәҙә бирәм.

— Ярар, Айвар ағай.

— Шулай итеп, һиңә ышанырға мөмкиндер бит?

— Ышанығыҙ.

— Үкенмәҫһеңме?

— Юҡ.
— Ҡурҡмайһыңмы минән?
— Юҡ, Айвар ағай. Әгәр ҡурҡһам, һеҙҙең менән һөйләшеп ултырмаған булыр инем.
— Һау бул, һылыу.
Карауаттан әллә ни йыраҡ түгел иҙәндә баҫып торған сүптең һыны тоноҡлана башланы, бер аҙҙан ул торған урында еңелсә томан ғына ҡалды. Ике-өс секунд, һәм ул да таралып бөттө. Ҡыҙ иҫенә килә алмай ултыра ине. Әлеге һөйләшеүҙең ысын булғанын белер өсөн, беләген семетеп ҡараны. Ауырта. Һы... Нисек аңларға? Дөрөҫөрәге, ғәжәпләнерлек әллә нәмә юҡ кеүек. Әгәр өнһөҙ аралашыу икһеҙ-сикһеҙ дауам итһә, тиҙерәк аҡылдан яҙырһың. Былай, исмаһам, аң-зиһенден теүәллеген самалап ҡарарға мөмкин. Буталсыҡ уйҙарынан Айгөлдө ишек туҡылдатыу бүлдерҙе.
— Айгөл, һин йоҡламайһыңмы ни? Кем менән һөйләшәһең унда?
Ҡыҙ йәһәт кенә юрған аҫтына сумды. Гөлзифа ханым ишекте асып карауат янына үткәндә, Айгөл кәмендә ике сәғәт тәмле йоҡо сәңгелдәгендә бәүелгән кеше ҡиәфәтен алғайны. Әсәһе юрғанды рәтләп япты, нилектәндер ҡыҙзың маңлайын тотоп ҡараны, тауыш-тынһыҙ бер аҙ ҡарап торғас, сығырға йүнәлде. Һаҡ ятҡан Айгөлдөң ҡолағына әсәһенең уфтанғаны ғына ишетелде. Оҙаҡ йоҡлай алмай ятты ҡыҙ. Сибек кенә иңбаштарын көс еткеһеҙ ауырлығы менән баҫасаҡ серҙең ниндәй хәлдәргә юлыҡтырыры башына ла инеп сыҡмай ине әле уның.

## 31

Алыҫ Төньяҡ ҡалаһындағы гәп-ғәҙәти ике бүлмәле квартира. Бер ҡулын сикәһенә таянып, икенсеһе менән тиҙ-тиҙ ниҙер яҙған етеп килгән ҡыҙҙан башҡа бер кем юҡ бында. Ҡыҙыҡай дәрес эшләй буғай — китаптары өҫтәлдә өйөм-өйөм булып ята, һыймағандары иҙәнгә теҙеп һалынған. Ваҡыт-ваҡыт сәғәткә ҡарап алыуынан ашыҡҡаны һиҙелә.
— Айһылыу...
Саҡ ишетелерлек әйтелгән һүҙҙән ҡыҙыҡай тертләне, ләкин фатирҙа һис кем юҡлығына ныҡлы ышанғанлыҡтан, тирә-яғын байҡап торманы.
— Айһылыу!
Ҡыҙ һикереп торҙо, тәүге мәлдә ни эшләргә белә алмай, ике ҡулын ҡаушырып стенаға арты менән баҫты.

— Һеҙгә ни кәрәк?

— Танымайһыңмы ни, һеңлем? Был мин, Айвар ағайың.

Балалыктан сак сығып барған үҫмер ишек яңағына кулы менән таянып торған йәш кешегә ышанмайырак төбәлде, ләкин торған урынынан кыбырламаны.

— Айвар ағай? Нисек? Һеҙ минең ағайыммы? — Бер аҙ тынысланды шикелле, сак кына якынырак килде.— Минең күптән күргәнем юк.

— Бына бит күреп тораһың.— Кыҙ һағайыбырак калһа ла, Айвар уға якынырак килде, шунда торған йомшак софаға ултырҙы.— Ултырырға мөмкиндер бит? Улайһа, һин минең килеүгә бигүк шат түгелһең, шикелле.

Кыҙыкай уңайһыҙлана ине, әле генә күрһәткән һалкынлыкты нисек итеп бөтөрөргә белә алмай, Айварҙың йәнәшәһенә килеп ултырҙы.

— Ни... Айвар ағай, ғәфү ит. Көтмәгәндә килеп индең бит. Ниңә хәбәр итмәнең һуң? Атайым да, әсәйем дә эштәләр. Оҙакламай кайтырға тейештәр. Әйҙә әле, ни эшләп һиңе хәбәр менән һыйлап ултырам, аш бүлмәһенә. Хәҙер сәй куйып ебәрәм.

— Һинең эшеңде бүлдерҙем. Дәрес эшләй инеңме?

— Алгебранан мәсьәләне сисеп булмай. Төрлөсә кыландырып карайым да ул, сыкмай ҙа куя.

— Ярай, бар һин сәйеңде куя тор, карап карайык, ни нәмә өҫтөндә баш ватаһың икән.

— Бына бында, ағай. Һине юлдан килеп кермәҫ борон ук, эшкә кушыу уңайһыҙ бит әле.

— Уныһы өсөн борсолма.— Айвар һеңлеһе күрһәткән мәсьәләне алдынарак шыуҙырҙы, каралама менән ручканы эҙләп алды. Кыҙ сәй куйып әйләнеп керергә лә өлгөрмәне, сығарылышы яҙылған мәсьәлә өҫтәл өҫтөндә ята ине инде.— Шуның өсөн баш ваттыңмы?

Айһылыу ах итте, кулдарын сәбәкәйләп алды.

— Уй, ағай, һин — даһи!

«Кайһылай Айгөл шикелле кылана. Әллә улар йәшендәге кыҙҙар барыһы ла шулаймы? Хыял донъяһы кыҙҙары... Уларға караһаң, моңһоу ҙа, йәл дә, көнсөллөк тә килә. Аңламаҫһың...» Айварға моңһоу булып китте. Янында бөтөрөлгән һеңлеһенә тағы ни әйтергә белә алмай, аптырап калды. Бына бит төпкөлдә йәшәү нишләтә — әҙәмсә аралашыу онотолған. «Ни эшләй икән Айгөл һылыу? Сәйер, ул кыҙ хакында уйлар өсөн килдеме ни ул алыҫ Төньякка. Аңламаҫһың... Аңламаҫһың...»

— Айһылыу, атайҙар касан кайта?

— Хәҙер, ағай.— Айһылыу осоноп барып сәғәткә ка-

раны.— Теп-теүәл бер сәғәттән, әсәй тағы ла иртәрәк. Ой, нисек ҡыҙыҡ буласаҡ! Бөтөнләй көтмәйҙәр ине.

— Һин хәҙер нисәнселә уҡыйһың әле, һеңлем?

— Һигеҙенселә. Ә ниңә, ағай?

— Былай ғына.

— Ағай, юлда сарсағанһыңдыр. Әйҙә инде, әсәйҙәр ҡайтҡансы, бер-ике шәшке булһа ла, сәй эсеп тор.

— Өлгөрөрбөҙ, һеңлем, ҡабаланма.— Айвар, ҡулдарын ҡаушырып, стена буйына теҙелгән шкафтарҙың ҡаршыһына барып баҫты. «Фотоальбомдар. Сәйер, кем ғүмерен яҡтырта икән улар». Ҡулына эләккән тәүгеһен алып асып ҡараны. Был Айһылыуҙыҡы ине. Бер нисә көнлөктән башлап етеп бөткән ҡыҙ булғансы... Һәр аҙымы тигәндәй теркәлгән. Икенсеһен ҡулына алды. Ғаиләнеке... Атаһы менән әсәһенең туй фотоһынан башлана. Һәм бөткөһөҙ һүрәттәр, һүрәттәр... Улар араһында Айвар ғына бик һирәк ҡунаҡ. Һуңғы рәсемен өс йәшлек сағында төшкән, шикелле. Шуның менән вәссәләм. Их, атай, әсәй, һеҙҙең өсөн мин, ысынлап та, ят бауырмы икән ни? Көцөлһеҙ уйҙарҙан Айварҙың кәйефе китте, алыҫ урман төпкөлөнән улар янына ашҡыныуы мәғәнәһеҙлек булып тойола башланы. Иң ауыр мәлдә барып баш терәр ҡулдарҙың булмауы! Дөрөҫөрәге, булып та, уларға таяна алмау. Аяныс... Уға бары йылы ҡараш, яғымлы һүҙ генә кәрәк. Башҡаһын үҙе лә булдыра ала. Әммә әлеге мәлдә Айвар өсөн бер хәҡиҡәт ап-асыҡ — теленгән икмәк, ысынлап та, кире йәбешмәй икән. Үҙендә көс-ҡөҙрәт тойғас, ярҙам итәһе килгәйне уның. Хәҙер генә ошо теләгененең буш икәнлеген аңланы — хөрлөк бөркөлөп торған был фатирҙа уның кәрәклеге һиҙелмәй.

— Ярай, Айһылыу, бар, сәйеңде әҙерлә. Әсәйҙең ҡайтҡанын көтөп тормайыҡ.

Ҡыҙыҡай йүгереп тигәндәй аш бүлмәһенә сыҡты, һыуыҡкыстан уныһын-быныһын алып теҙҙе. Табаҡһауыттарын шалтыратып, тағы ла ниҙер эшләп булашты. Өҫтәл өҫтө һый менән тулғандай булғас, тағы бер тапҡыр күҙ йүгертеп алды. Барыһы ла урынында кеүек. Әллә табындан, әллә үҙ-үҙенән ҡәнәғәт ҡиәфәттә залға уҙҙы.

— Айвар ағай! — Ғәжәп, бер ерҙә лә күренмәй, йыуыныу бүлмәһендәме юғиһә? Юҡ, буш. Йоҡо бүлмәһенең асыҡ ишеге аша ҡараны, балконға күҙ йүгертте. Бәлки, тартырға баҫҡысҡа сыҡҡандыр? Ишекте асырға үрелгән Айһылыу ҡатып ҡалды, унан әкрен генә артҡа сигенә башланы — ул йоҙаҡлы ине...

## 32

Волейбол секцияһына ҡалырға бөгөн ниңәлер һис кенә лә теләге булманы Айгөлдөң. Дәрестәр тамамланыу менән, бер кемгә бер һүҙ әйтмәҫтән, китап-дәфтәрҙәрен йылдам ғына сумкаһына тултырҙы ла йүгереп урамға сыҡты. Ҡыҙҙың һәр хәрәкәтен күҙәткән Илгиз дә хатта өндәшә алмай ҡалды.

Өс көн элек кис бүлмәһендә булған сәйер һөйләшеү ҡыҙҙың һаман иҫенән сыҡмағайны әле. Киреһенсә, ваҡыт үтеү менән үҙенә нығыраҡ йота барған һымаҡ. Һәр кис тәненең һуңғы күҙәнәгенә тиклем тетрәнеп, таныш һындың пәйҙә булыуын көтә. Ләкин егет нилектәндер күренмәне. Һөйләшеүгә бәйле инеме был кинәт юҡҡа сығыу, әллә икенсе мәшәҡәттәре башынан аштымы — Айгөл аңлай алманы. Сәғәт уҡтарын үҙе күсерерҙәй була ҡыҙ, түҙемһеҙлеге һәр хәрәкәтенән бөркөлөп тора. Үҙенә өндәшкәндәрен ҡайһы саҡ ишетмәй, йә яҙа яуап бирә. Әсәһе менән атаһы бигүк төпсөшмәй, ләкин бер көн килеп барыһын да асыҡтан-асыҡ һөйләүен талап итәсәктәр — быныһы көн кеүек асыҡ. Серҙәренең эреһен дә, ваҡын да йәшермәй ине ҡыҙ уларҙан. Ләкин был юлы... Мәктәптә эш тағы ла ҡатмарлыраҡ. Беренсе кластан тик «бишле»гә генә уҡыған ҡыҙҙың көндәлегенә әкренләп башҡа билдәләр үтеп ингеләй башланы. Уның ҡылығын балалыҡтан күсеү осоро менән бәйләгән булалар, ләкин был ғына ташламаға хоҡуҡ бирмәй.

Күңелһеҙ уйҙарының осона сыға алмай, ҡыҙ әкрен генә асфальт юл буйлап килә. Бер квартал ғына ара ҡалды. Хәҙер фатирҙарына күтәреләсәк, арлы-бирле эштәрен эшләгән булыр, унан көтөү... көтөү... Икһеҙ-сикһеҙ көтөү сәғәттәре...

Айгөл ҡапыл ни булғанын аңлай алмай ҡалды. Йорттарына етергә күп ҡалмағайны. Тыҡрыҡтан кинәт кенә бәһлеүәндәй йәп-йәш ике егет килеп сыҡты. Ҡыҙ башын күтәреп ҡарарға өлгөрмәне, береһе ҡулдарын артҡа шаҡарҙы, икенсеһе көрәктәй устары менән ауыҙын баҫты. Тыпырсынып ҡына ни ҡыла алаһың, бер минут ваҡыт үтмәне, уны ситкә һөйрәйҙәр ине. Исмаһам, бер кеше күренмәй. Көпә-көндөҙ бит әле, етмәһә. Ҡыҙ, бар көсөн йыйып, ике әзмәүерҙең ҡулынан ысҡынырға маташып ҡараны. Ҡайҙа ул! Һелкенерлек тә түгел. Иларға керешкәйне, береһе кескәй мендәр ҙурлығындай йоҙроғон танау төбөнә терәне.

Артабанғы ваҡиғалар һис көтөлмәгәнсә үҙгәрҙе. Ҡаршылағы йорт мөйөшөнән ниндәйҙер ирҙең килеп сыҡҡаны

күренде. Быларҙың әшнәһелер, тип шөрләй төшкәйне Айгөл, улай булмай сыҡты. Улар тәңгәленә етер-етмәҫтән, ҡыҙҙы ҡымтып тотҡан егеттәрҙең береһен һуғып осорҙо, икенсеһе шөрләне шикелле — үҙе тайҙы. Айгөл йорт мөйөшөнә бөршәйеп кенә һөйәлеп тора ине. Ҡыйырһытылған бесәй балаһыныҡылай күҙҙәре мөлдөрәп кенә ҡарай. Оҙон буйлы, утыҙ-утыҙ биш йәштәр тирәһендәге ир, өҫ-башын ҡаҡҡылағас, ҡыҙға күтәрелеп ҡараны.

— Ҡурҡтыңмы, туғаным? — тип өндәште мөләйем йылмайып. Унан, яуап көтөп тормай, дауам итте.— Бына бит донъя ни нәмәгә әйләнеп килә — йәп-йәш ҡыҙ балаға көсө ташып торған ир-ат һөжүм итә. Вәт һин уларҙы! Ҡулдарына көрәк тотторop, эшкә ҡушырға.— Үҙе, бер ни булмағандай, ҡыҙға яҡынайҙы.— Йә, һеңлекәш, ҡайҙа йәшәйһең, оҙатып ҡуяйым.— Ҡыҙҙың ҡулынан сумкаһын алды, ҡурҡыуы һаман үтмәгән Айгөлдө етәкләп тигәндәй юлға сығарҙы.— Минең менән булғанда, бер кемдән дә ҡурҡмаһаң була.

Ҡыҙҙың ҡаушауы әкренләп үтә башланы. Көтмәгәндә ярҙам ҡулы һуҙған ағай кешегә рәхмәт йөҙөнән, йылмайып ҡараны. Ләкин күҙҙәрен күрә алманы — ир кеше ҡара күҙлек кейгәйне.

— Рәхмәт, ағай. Һеҙ килеп сыҡмаһағыҙ, ни менән барып бөтәр ине, белмәйем.

— Уныһы ғына пустәк. Һиндәй ҡыҙға ла ярҙам итмәгәс, ир исеме күтәреп йөрөүҙән ни файҙа... Исемең кем, туғаным?

— Айгөл.

— Бик матур исем. Ә мин Стас ағайың булырмын. Ярҙам кәрәкһә-нитһә, һәр саҡ мөрәжәғәт ит, тартынма.

— Рәхмәт, ағай. Һеҙҙең ваҡытығыҙ юҡтыр, быңдай әтрәгәләмдәр аҙым һайын. Иң хәйерлеһе — алды-артты ҡарап йөрөү.

— Юҡ, юҡ, һис тә тартынма. Кәрәкһә, дуҫлаша алабыҙ. Һинең һаҡ аҫтында икәнеңде белһәләр, ике-өс саҡрымдан урап ҡасасаҡтар, күрерһең.— Ир кеше рәхәтләнеп көлөп ебәрҙе. Кеҫәһенән ҡағыҙ киҫәге сығарып, ниҙер яҙҙы ла ҡыҙға һондо.— Бына минең телефон номеры, кәрәк сыға ҡалһа, шунда уҡ шылтырат. Мин ярҙам итергә һәр саҡ әҙер.— Ҡыҙ ҡағыҙҙы портфеленә һалып ҡуйғас, кинәт иҫенә төшкәндәй, ручкаһын ҡабат тартып сығарҙы.— Һинең адресыңды алайым әле, Айгөл туған. Тау менән тау ғына осрашмай, ти бит.

— Ә мин ошонда ғына йәшәйем.— Ҡыҙ, әйтергәмеюҡмы тип бер аҙ икеләнгәс, кире ҡағыуҙы әҙәпһеҙлек тип

тапты. Ни тиһәң дә, әллә ниндәй әҙәмдәрҙән ҡотҡарҙы бит.— 9-сы квартира. Ә бына быныһы телефон номеры.

— Килештек, һеңлем. Әгәр ҡыйырһыта ҡалһалар, ошо һандарҙы йыяһың да — SOS, SOS! Һәм мин яҡтылыҡ тиҙлегендә янығыҙҙа булырмын, сибәр туташ! — Ҡара күҙлекле оҙон буйлы ир кеше шуҡ ҡына ҡыланып, бер ҡулын сикәһенә терәне лә, хәрбиҙәрсә еңел боролоп, үҙ юлы менән китте. Ҡыҙ подъезд ишегенән кереп юғалғас, күпмелер ваҡыт ирҙең йөҙөндә мөләйемлек һаҡланды әле. Өй мөйөшөнә еткәс, бер ситтәрәк ҡыуаҡтар араһына йәшеренеберәк торған ике егеткә ҡул иҙәне:

— Әйҙәгеҙ, Сергей, Мәхмүт. Һеҙҙең миссия үтәлде. Хәҙергә йортоғоҙға тайығыҙ, күрһәтмәләрҙе һуңыраҡ алырһығыҙ.— Уның ҡиәфәтенә ғәҙәттәге тәкәбберлеге ҡалҡып сыҡҡайны. Егеттәр киткәс, ситтәрәк, тирәк төбөндәге эскәмйәгә барып ултырҙы, түш кеҫәһенән сығарып, сигарет ҡабыҙҙы.

— Ну, аҫыл ҡош, хәҙер һин минең ҡулдаһың...

## 33

Ата-әсәһенең фатирында булып ҡайтҡандан һуң, Айварҙың илгиҙәр кәйефе ниңәлер ҡапыл юҡҡа сыҡты. Көндөҙҙәрен дә, төн уртаһында ла ул хәҙер әллә ни алыҫ араға йөрөмәй ине — теләге булманы. Тирә-яҡтағы урман-далаларҙы, ауылдарҙы байҡап сыҡты, бер нисә тапҡыр ҡалаға һуғылғыла765ны. Айгөл янына инергә уҡталып ҡуйғайны, ләкин ниҙер тотто. Ғәп-ғәҙәти аҡҡан ошо тормошта үҙенең сәйер һәләтен нисек эшкә егергә белә алмай, бер аҙ аптырап ҡалғайны ул. Шуға күрә әле лә көндөң буш үтеүенә йәне көйөп, урман юлына боролдо... һәм боролдо ла, сәйер тойғоға бирешеп, йыуан имән төбөнә сүгәләне. Янғын! Ҡайҙалыр янғын! Имән күләгәһендә, экрандағы һымаҡ ап-асыҡ сағылып, ҡот осҡос күренеш хасил булды. Өс йорт берсә яна. Сентябрь аҙағы булыуға ҡарамай, салт аяҙ торған көндөң һүрелеп барған ҡояшы яҡтыһында янғын бейей.

Айвар ағас төбөнә бөгәрләнеп барып ятты. Уның күсермәһе, кәүҙәнән айырылып, ҡот осҡос тиҙлектә ҡайҙалыр юҡҡа сыҡты. Имән янында ятҡан кеше тоҡ кеүек хәрәкәтһеҙ ҡалды.

Ҡайҙалыр алыҫ-алыҫта, урман-тауҙар ашаһында ятҡан ауылға табан йүнәлештә тоҫмаллап, осто ла осто күсермә. Үҙенә бик оҙайлы ваҡыт үткән кеүек тойолһа ла, бер нисә

секундтан ул ут ҡотorған ауылдың уртаһында баҫып тора ине.

Арлы-бирле кешеләр йүгерешә, үкерешеп машиналар үтә. Бөтә ауыл зыҡ ҡупҡайны. Ут ялмап алған өйҙәрҙең тирә-яғындағы йорт эстәренән кейем-һалым, әйбер ташыйҙар. Мәхшәр ҡупҡан ергә барып етеү менән, Айварҙың күҙенә салынған нәмә иламһырап баҫып торған бер әбекәй булды. Таяҡҡа таянған, ҡуҙғалырлыҡ та рәте юҡ. Ҡаршыһындағы шатырлап янған кескәй йортҡа ҡарап ҡатҡан.

— Әбей, һеҙҙең йортмо? — Шулай икәнен аңлап алһа ла, һораны егет. Ҡарсыҡ йәшкәҙәгән күҙҙәрен таныш түгел кешегә төбәне. Баш ҡына ҡаҡты, унан, батып барыусы һаламға йәбешкән шикелле, мөлдөрәп Айварға ҡараны. Күрәһең, ығы-зығыла уны тыңлаусы ла, ишетеүсе лә булмағандыр.

— Улым, бер генә кейемемде лә, әйберемде лә сығара алмай ҡалдым. Малай-шалай үткән йылдан ҡалған бесән осҫтөндә шырпы менән уйнаған бит. Гөлтләп янды ла китте. Яланғас тороп ҡалам инде... — Үкһеп илап ебәрҙе әбекәй. Айвар иһә оҙаҡ уйланып торманы. Ҡарсыҡ аһ итеп ҡалды, баҫҡан еренән тура янғын эсенә инде лә китте. Өйҙөң байтаҡ өлөшө ялҡын эсендә ине. Шифер менән ябылған түбә шарт-шорт килә.

Иң тәүҙә һандыҡ һымаҡ нәмәне эҙләп тапты егет. Әбей-һәбейҙең ҡомартҡыһы шундай ерҙә һаҡланыусан. Күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә урам уртаһына сығарып ҡуйғас, ут эсенә ҡабаттан ташланды. Әллә күпме әйберҙе ташып өлгөрҙө ул. Уңарса сәйер ҡотҡарыусыға янғын тирәһендә ҡайнашҡан кешеләр ҙә иғтибар итеп өлгөргәйне. Күрше йорт янында өҙгөләнеп йүгереп йөрөгән йәш кенә ҡатын егеттең беләгенә килеп йәбеште.

— Ҡустым! Туғаным, теге йортта газ... газ баллоны. Хәҙер шартлаясаҡ. Зинһар, сығара ғына күр.

Дә-ә, эштәр тағы хәтәрерәк. Айвар, күп уйлап тормай, шул яҡҡа ташланды. Аш бүлмәһенә ут килеп етмәгәйне әле. Баллонды күтәреп алып, байтаҡ алыҫҡа алып барып ташланы. Өсөнсө йорттоң ҙурлығына ҡарағанда, унда ла хәлле генә кешеләр йәшәгән булырға тейеш. Тимәк, газ булыуы мөмкин. Тоҫмаллауы яңылыш түгел ине — ут эсендә ҡалған дүрткел плитә күҙенә салынды. Бер нисә минут — һәм йорт күккә осасаҡ. Ҡыҙа башлаған баллонды ысҡындыра алмай, байтаҡ яфаланды. Аяҡ араһында буталып ятҡан одеял кеүек нәмә ҡулына эләккәс кенә, эш еңеләйә төштө. Күрәһең, яна башлаған йорттан әйберҙәрен ташығанда төшөп ҡалғайны уныһы. Йөн одеял-

ға урап баллонды алып сығып килгәндә, өйҙөң түбәһе ишелеп төштө. Кешеләр аһ итте. Йәшен тиҙлегендә әле теге йортҡа, әле быныһына ташланған егеткә күптәр иғтибар итеп өлгөргәйне. Ләкин ишелеп төшкән йорт эсенән ҡот осҡос итеп шартларлыҡ әйберҙе ҡулына тотоп килеп сыҡҡан Айварҙы күреп, тағы аптырай төштөләр. Уның һәләк булғанлығына ышанғайнылар инде. Ә егеттең бер ере лә янмаған да, көймәгән дә. Уттың тирә-яғында йөрөп кенә лә, ҡоромға буялып бөткән кешеләр таныш түгел егеткә һоҡланып та, сәйерһенеп тә ҡаранылар.

— Балам... Ниндәй генә рәхмәттәр әйтәйем? Миңә йәшәргә күп ҡалмаған да бит, шулай ҙа... — Әбей һүҙен тамамлап өлгөрмәне, ауыл осонан үкерешеп килгән ҡыҙыл төҫтәге янғын һүндереүсе машиналар күренде. Айварҙың бында кәрәге ҡалмағайны инде. Шунда ғына торған егет ҡапыл юҡҡа сыҡты. Уға ҡарап хәбәр һөйләп торған әбекәй ауыҙын асҡан килеш тороп ҡалды.— Әллә күҙемә күренде инде.— Тирә-яғындағы кешеләрҙе байҡап сыҡҡан ҡарсыҡ шунда торған йәш кенә иргә өндәште.— Балам, әле генә минең йорттан әйбер ташыған егет ҡайҙа булды? Шунда ғына тора инесе.

— Үҙем дә аптырап ҡарап торам, Хөсниә әбей. Һеҙҙең янда тора ине, ситкә киткәнен күрмәнем, юҡҡа сыҡты.

Янғын машиналары кемуҙарҙан һыу һиптерә башланы. Көслө ҡойонға ут ҡаршы тора алманы, бөтә ауылды ялмарҙай булып ҡотороһа ла, бер нисә минуттан баҫылды. Күпмелер ваҡыт үтеүгә, иртәнсәк һап-һау ултырған өс йорт урынындағы харабаларҙа сыжылдап ятҡан торонбаштар ғына ҡалғайны.

Халыҡ әбей янына байтаҡ йыйылып китте. Барыһы ла сәйерһенеп әлеге ваҡиғаны һөйләй. Күҙгә күренде, тиерҙәр ине, әбейҙең йортонан сығарылған байтаҡ кейемһалым, табаҡ-һауыт өйөлөп ята. Ҡалған ике йорттоң хужалары, бөтә ғаиләләре менән йүгерешеп йөрөп, ул тиклемде сығарып өлгөрә алманы. Арыраҡ ике газ баллоны тәгәрәшкән. Ун минут самаһы ошо хаҡта һөйләнделәр ҙә, һүҙ әкренләп икенсегә бороллдо. Кинәт ҡупҡан янғын күпселек халыҡҡа көтөлмәгән мәшәҡәт өҫтәгәйне.

## 34

Һыҙғыра-һыҙғыра бүлмә буйлап айт-дваға баҫып йөрөй Сәғәҙиев. Тәҙрә янына килә, эшем эйәһеләй, урамдағы хәрәкәтте бер аҙ ваҡыт күҙәтеп тора, унан ҡабат кәләп

һалырға керешә. Радионан бер туҡтауһыҙ яңғыраған тоҙһоҙ хәбәрҙәрҙе ҡолағының осо менән генә элеп алғылай. Туҡтауһыҙ мыңғырлауынан ялҡып, һүндереп үк ҡуйырға уҡталғайны, үрелгән еренән ҡулын тартып алды, унан тауышын асыбыраҡ ҡуйҙы. Туҡта, ни ти, өс йорт бөрсә янған, тиме? Янһа ни булған, күберәгеп дә күргән бар, тип сержант әфәнделәре өнөн тығырға уйлағайны ла инде. Ләкин өлгөрмәне, киреһенсә, ҡолағы ҡарп итеп ҡалды, хет берәй пар биҙрәне ҡылысынан элеп ҡуй. Янғын ваҡытында таныш түгел егет айырыуса өлгөрлөк күрһәткән, яңғыҙ әбейҙең әйберҙәрен ҡотҡарышырға булышҡан. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, исемен белергә өлгөрмәгәндәр, юҡҡа сыҡҡан. Әбекәй уны табырға ярҙамлашыуҙы үтенә, имеш. Шуға ошо хаҡта ишеткән-күргән һәр кешенең, айырыуса таныш түгел егеттең хәбәр итеүен һорайҙар.

Бына һиңә мә! Сәғәҙиевтың күҙ алдына йәшен тиҙлегендә күсеп йөрөүсе йәш ирҙең һыны килеп баҫты. Шул үк тиҙлек, юҡҡа сығыу, билдәһеҙлек һәм сәйерлек. Бында ниҙер бар!

Сәғәҙиев күп уйлап торманы, әле генә радионан әйтелгән телефон номерын йыйҙы. Арғы башта трубканы күтәреүгә, тауышына иҫ киткес мөләйемлек һәм ҡот осҡос ягымлылыҡтан торған өйрәне ҡушып бытылданы:

— Һылыу, әйтегеҙсе, зинһар, әлеге янғын тураһында һеҙгә ниҙәр билдәле?

— Ә һеҙ кем булаһығыҙ?

— Мин Өфөнән. Социаль тәьминәт бүлегенән.— Министрмын тип үк әйтергә йөрәге етмәне. Үҙенең ышанып ҡуйыуынан ҡурҡты.

— Рәхим итегеҙ.— Тауыш байтаҡҡа йомшара төштө. Күрәһең, унда ултырған ҡыҫҡа итәк ҡасан да булһа үҙенең дә пенсияға көнө ҡалыры хаҡында уйлағандыр.— Унда өс йорт янған. Икеһе — йәш ғаиләнеке, өсөнсөһө яңғыҙ әбейҙең өйө. Ҡыҙғанысҡа, барыһы ла янып бөткән, әйберҙәренең ҡайһы берҙәрен генә ҡотҡарғандар. Колхоз идараһы һәр ҡайһыһына материаль ярҙам бүлде. Ауылдаштары ла ярҙамһыҙ ҡалдырмай.

— Ғәфү итегеҙ, һылыу, минең ишетеүемсә, унда янғын һүндереүҙә ҡатнашҡан ниндәйҙер егетте эҙләйҙәр, шикелле.

— Ә, эйе, ҡыҙыҡһынһағыҙ, рәхим итегеҙ. Ул егет хаҡында сәйер хәбәрҙәр ишетелгеләй. Бер кем менән дә артыҡ һөйләшмәгән, әбейҙең әйберҙәрен сығарған һәм, янғын һүндереү машиналары күренеү менән, күҙ алдында юҡҡа сыҡҡан, тиҙәр. Әбейгә колхоз хужаһыҙ ҡалған

йортто бушлай бирҙе, әйберҙәрен күсерештеләр. Күрәһегеҙ, таныш түгел егет арҡаһында, улай уҡ ҙур зыянға тарыманы ҡарт көнөндә.

Сәғәҙиев бер аҙ өндәшмәй торҙо. Тикшерергә кәрәк был хәлде. Моратшин еңен һыҙғанып тотонған эш менән ҡатнашы юҡмы икән. Оҡшашлыҡтар байтаҡ юғиһә. Сәйер, бик сәйер... Сәғәҙиевтың өндәшмәүен туташ үҙенсә баһаланы.

— Иптәш, кем тип әйтәйем, оҙон һөйләп һеҙҙе ялҡыттымы әллә?

— Юҡ, юҡ, һылыу, адресын аныҡ итеп әйтһәгеҙ, мин бик шат булыр инем.— Әйтерһең дә, йөрәге ярылырлыҡ итеп ҡыуанырға иҫәп тота Сәғәҙиев, теле телгә йоҡмай һайрай ғына.

Шулай итеп, теге баштағы туташ Өфө вәкиле менән үҙен тейешле кимәлдә тота алыуына һөйөнөп, был баштағы сержант министрҙан кәм түгел сирттерә алыуына шат булып, икеһе лә ҡәнәғәт айырылышты. Сәғәҙиев адрес яҙылған ҡағыҙға тағы бер тапҡыр күҙ йүгертеп сыҡты ла, бер ҡарарға килеп, урынынан торҙо. Ул ауылға барып ҡайтырға кәрәк. Бәлки, ептең осо шунда табылыр.

— Иптәш лейтенант! — Ишектән ингән ыңғайға сығып килеүсе Моратшиндың ҡаҡ маңлайына шап итеп бәрелә яҙҙы сержант.— Иптәш лейтенант, мөһим хәбәр!

— Нәмә, әллә... — Ныҡ итеп асыуланырға иҫәп тотҡан Моратшин, инеүсенең йөҙөнә ҡарағас, бар зәһәрен онотоп бөтә яҙҙы. Унда, ысынлап та, кәмендә дәүләт кимәлендәге мөһим сер яҙылғанлығы әллә ҡайҙан ҡысҡырып тора ине.— Әллә тегенең эҙенә төштөңмө?

— Төшә яҙҙым, иптәш Моратшин.— Сәғәҙиев эләгәбутала әле генә радионан ишеткәндәрен һөйләп бирҙе. Дөрөҫөрәге, тәүҙә артҡы өлөшөн тасуирланы, унан башынан аҙ-маҙ тамыҙҙы, урта тирәһенән хәбәренә ҙур ғына ямаулыҡ һалды.

Ҡыҙҙы ла китте Моратшин.

— Нимә һин, егет аҡтығы, тикшереүең шулмы?

— Шулмы ни тип, иптәш лейтенант...

— Ул янғындың машина ҡарағына ни ҡыҫылышы бар?

— Ни, иптәш лейтенант, нит әле, тыңла әле.— Тел ғилемендә булған бөтә ымлыҡтарҙы, теркәүестәрҙе ҡалдырмай, бәйләүестәрҙе етем-еһер итмәй, һөйләп бирҙе тәки сержант. Ярты сәғәткә һуҙылған тойғоларға бай телмәрҙе тыңлағандан һуң, Моратшиндың ҡулы был осраҡтарҙа була торған төп урынына, йәғни елкәһенә

менеп китте. Унда ул тиклем оҙаҡ ваҡыт ни нәмәһен ҡашығандыр, вә ләкин Сәғәҙиев көтөүҙә сыҙамлылыҡ өлгөһөн күрһәтте.

— Сержант, был һис тә бер береһенә йәбешмәй бит әле.— Ниһәйәт, лейтенанттың тауышы йомшара төштө, был ыңғайға сержанттың күкрәге, бер-ике миллиметрға булһа ла, алғараҡ кәпәйҙе.— Беҙ эҙләгән әҙәм машина урланы ла баһа, ул ғына етмәгән, зоопарктан айыу сәлдергән. Ундай енәйәтсе ни эшләп тик торғанда янғында кеше ҡайғыһын уртаҡлашып йөрөргә тейеш әле? Кирелһенсә, кеше әйберен һәптереп, тайыу яғын ҡарар ине.— Әгәр ҙә ысынлап шул була ҡалһа, мин эҙләгән әҙәм енәйәтсе булмай ҡуя инде, тип ҡайғырған ҡиәфәттә тора Моратшин.

— Шулай ҙа, иптәш лейтенант, оҡшашлыҡтар етерлек бит. Мин үткәндә ул кешенең әҙәм ҡулынан килмәҫ тиҙлектә күсеүенә хайран ҡалғайным. Бында ла шуны һөйләйҙәр. Миңә ҡалһа, тикшерергә кәрәктер, тим. Ни, иптәш лейтенант...

— Ташла әле шул таҡылдауыңды, иптәш лейтенант та иптәш лейтенант. Нәмә, әллә минең исемемде оноттоңмо?

Был юлы һис көтмәгәндә Сәғәҙиевтың ауыҙы йырылды — тигеҙ ерҙә эләгеп йығылырлыҡ ҡына түрә булһа ла, Моратшин һәр кемгә исеме менән өндәшергә рөхсәт итә һалып бармай. Күҙҙәрен тезерәйтеп асыуланған була, әммә сержант менән лейтенанттың араһы ошо мәлдән алып нисауа ғына аҙымға яҡынайҙы тигән һүҙ был.

— Ни, Биктимер, әллә барып ҡайтайыҡмы тим. Теге ауылға. Яйы сыҡҡанда, тикшереп ҡалайыҡ. Бәлки, осо табылыр.

Моратшин бая Сәғәҙиев үткән туристик маршрутты сантиметр ҙа яңылышмай, ҙур тырышлыҡ күрһәтеп, башҡарып сыҡты. Тәҙрә янына баҫып, һәйкәлдәрҙә генә була торған аҡыллы ҡиәфәтте алғы фасадына сығарырға ла онотманы. Сәғәҙиевтың алдына килеп туҡтағанда, лейтенанттың йөҙөндә дошман тылына кәмендә теүәл армияны бейәләй эсенә һалып алып инергә уйлаған генералдарға хас тәүәккәллек ярылып ята ине.

— Булды, Самат, китәбеҙ!

Шулай итеп, һис көтмәгәндә улар Биктимер менән Саматҡа әүерелде.

## 35

— Һеҙ бик оҙаҡ булмай торҙоғоҙ, Айвар ағай.

— Ә һин көттөңмө ни, һылыу? — Айвар баҫып тороуҙы килештермәне. Мөйөштәрәк торған ҡупшы банкеткаға барып ултырҙы.— Хәлемдән килһә, бөгөн үк туҡтатыр инем. Күрәһең, һин минең тормошомда эҙ ҡалдырып өлгөрҙөң.

Ҡыҙ өндәшмәне. Мөлдөрәп торған күҙҙәре менән Айварға өнһөҙ-тынһыҙ ҡарап ултыра ине.

— Аңлайым, был рәүешле һинең яҙмышыңа бәреп инеү — бәғерһеҙлек. Әгәр саҡ ҡына уңайһыҙлыҡ кисерһәң, шунда уҡ әйт. Бөтә һәләтемде эшкә егермен, үҙ-үҙемде ҡулға аласаҡмын. Әлегә... дөрөҫөн әйткәндә, миндә ундай теләк булманы. Шул ғына.

— Тс-с... Айвар ағай, шымыраҡ һөйләшегеҙ. Үткәндә һеҙ киткәс, әсәйем инде. Кем менән һөйләштең, тип һорай. Йоҡлағанға һалыштым да ҡуйҙым.

— Күҙеңә ҡарап һораһа, ни тиерһең?

— Бер ни әйтмәйәсәкмен.

Айвар урынынан торҙо, тәҙрә янына барып баҫты. Йөҙө менән ҡыҙға табан боролғанда, Айгөл шул уҡ ҡиәфәттә ултыра ине.

— Был бит алдашыу була.

— Эйе, беләм.

— Тимәк, мин һине ике йөҙлөлөккә этәрәм. Килешмәй былай, һылыуым.

Көтмәгәндә Айгөл урынынан торҙо, егет уны ҡуҙғалыр тип уйламағайны. Йоҡо күлдәгендә генә ҡаршыһына килеп баҫты.

— Айвар ағай! Улар аңларҙар. Атайым мине һәр саҡ үҙаллылыҡҡа өйрәтте, әсәйем кеше итер өсөн бөтә күңелен һалды. Ләкин мин ҡурсаҡ түгел, аңлағыҙ. Беҙ бит бер ниндәй насарлыҡ эшләмәйбеҙ. Һеҙҙең күңелегеҙ изге, беләм. Әгәр ҙә осраҡлы үткенселәр кеүек мәңгегә айырылышһаҡ, минең тормошом төҫһөҙләнәсәк.

— Ярай, үҙең ҡара, һылыу. Ныҡышмайым.

Ҡыҙыҡай егет алдында ошо ҡиәфәттә баҫып тороуына уңайһыҙлана төштө. Йылдам ғына карауат торған яҡҡа боролдо һәм... ҡатып ҡалды. Әгәр ҙә бар ихтыярын туплап, үҙ-үҙен тотмаһа, йә иҙәнгә ауа, йә бөтә йортто аяҡҡа баҫтырырлыҡ тауыш сығарып ҡысҡыра ине. Айгөлдөң ни өсөн күҙҙәрен ҙур асып ҡалтыраныуының сәбәбен төшөнә алмай торҙо егет. Ҡыҙҙың ҡаршыһына килеп баҫты. Сәстәре иңбаштарына таралып төшкән һомғол һынлы сибәркәй иҫе китеп ҡаршыһында торған ҙур

көҙгөгә төбәлгәйне. Айвар шул яҡҡа бороалдо һәм барыһын да аңланы — бүлмә уртаһында егет менән ҡыҙ баҫып тора. Ләкин көҙгөлә... көҙгөлә Айгөлдөң генә сағылышы. Егет юҡ! Юҡ! Бына нәмәгә ҡото алынған икән.

Бер нәмә өндәшә алмай, дер-дер килеп ҡалтыранған ҡыҙҙы һаҡ ҡына күтәреп, карауатына алып барып һалды. Иплап кенә өҫтөнә япты. Тубыҡтарына теҙләнеп, йөҙө өҫтөнән ҡулдарын йөрөтә башланы. Ҡыҙҙың ҡалтыраныуы үтте, әкрен генә күҙҙәрен йомдо. Бер аҙҙан тигеҙ тын алып йоҡлап киткәнлеге ишетелде.

Төнө буйы уның карауаты янында ултырып сыҡты Айвар. Ярай ҡыҙҙың бүлмәһенә инеүсе булманы. Айгөлдө уятып, һаубуллашырға уйлағайны, йәлләне. Былай ғына китеү килешмәй, шундай хәлдән һуң тота килеп юҡҡа сығып өсөн йә бәгерһеҙ булырға, йә үҙеңдең ҡылығың өсөн яуап бирергә ҡурҡыусылар затына ҡарарға кәрәктер.

— Һеҙ кешеме... Айвар ағай?

Үҙ уйҙарына бирелеп, бер нөктәгә төбәлгән егет Айгөлдөң өндәшеүенән тертләне. Таң һыҙылып килә икән дә баһа. Йй ғына ҡыҙҙың карауатына табан бороалдо.

— Мин бит һине иҫкәрткәйнем, туғаным.

Ҡыҙ өндәшмәне. Был осраҡта бер һүҙ ҙә ҡатмауҙы хәйерлерәк һананы, шикелле. Ысынлап та, ниңә төпсөшөргә. Кәрәкле һанағанын серле егет үҙе әйтер. Егет тә тынып ҡалды. Эйе, хәлдәрҙең башҡасараҡ булыуы мөмкин ине бит. Үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫмаған, етмәһә, берҙән-бер ҡыҙҙар бик иркә булыусан. Әгәр ҙә тәү тапҡыр ошо бүлмә стенаһында хасил сағында уҡ, ошо бала ҡысҡырып сығып йүгерһә, ә кисә төнөн әсәһен ярҙамға саҡырһа, һис тә ғәжәпләнмәҫ ине ул. Айгөл бөтөнләй башҡаса тотто үҙен. Шуға күрә Айварҙа уға ҡарата ихтирам, юҡ, ихтирам да түгел, һоҡланыу тойғоһо уянды. Ҡыҙҙың аҡыллы күҙҙәренә ярап ҡараны.

— Мин кеше, һеңлем. Ләкин ғәҙәти әҙәмдәрҙән айырыла торған яҡтарым бар. Һиңә һөйләргә вәғәҙә иткәнмен, ләкин хәҙергә ваҡыты етмәгән. Аңлайһыңмы?

— Эйе.

— Был ҙур сер, һеңлем. Уны белеү һиңә бер ниндәй ҙә еңеллек килтермәйәсәк. Шуға хәҙер үк баш тарта алаһың.

— Юҡ, юҡ, Айвар ағай. Мин үҙ һүҙемде әйткәнмен.

— Ярай, һылыу, ышанам.— Айвар урынынан торҙо.— Миңә китергә кәрәк, туғаным.

— Айвар ағай, бәлки, саҡ ҡына ултырырһығыҙ?

Ҡапыл иҫенә төшкән һымаҡ, егет Айгөлгә табан бороалдо.

— Һылыу, нисек ҡабул итерһең, белмәйем, ләкин минең бер тәҡдимем бар.

— Ниндәй, Айвар ағай?

— Бына нәмә, был бүлмәлә осрашыуҙар, нисегерәк әйтергә, һинең өсөн бигүк яйлынан түгел. Бәлки, башҡа урынға күсерербеҙ?

— Төн уртаһындамы? — Ҡыҙҙың күҙҙәре түңәрәкләнеп китте.

— Юҡ, нишләп.— Егет көлөмһөрәне.— Мин төнөн генә йәшәмәйем бит. Теләһәң, паркта, теләһәң, башҡа урында. Һинән ҡала.

— Ысынлап та. Ә минең һеҙҙең кеүек егеттәр менән осрашҡаным юҡ, ихлас бына. Кластағы дуҫ малай бар, ләкин мин уның янында үҙемде апай һымаҡ тоямсы.

Ҡыҙҙың ярым бышылдап ҡына һөйләгән хәбәрен тыңлай егет, күҙҙәре тәҙрәлә. Яҡтырып килә, ҡайтырға ваҡыт, былай ҙа оҙаҡланы.

— Һау бул, һылыу.

— Хушығыҙ, Айвар ағай.

Егеттең бүлмә уртаһында әкренләп кенә юҡҡа сығыуын Айгөл тәүге тапҡыр тыныс ҡына күҙәтте. Күрәһең, уның башҡа донъянан булыуын ҡыҙ аҡылы менән аңлай алмаһа ла, күңеленән ҡабул итә башлағайны.

## 36

Милиция машинаһы геүелдәп барып колхоз идараһы алдына туҡтаны. Бер аҙ ваҡыт унан бер кем дә төшмәй торҙо, әллә ишектән машинаға тиклем балаҫ йәйеүҙе көттөләр, әллә колхоз рәисенең һөрөнә-абына йүгереп сығыуына кило ярым өмөттәрен һәлберәтеп ултырҙылар — уныһы ҡараңғы ҡалды. Вә ләкин хоҙайҙың рәхмәте менән ҡаршы алыусы табылды — ярты ауылдан торған демонстрация алҡыштарға күммәһә лә, көҙ уртаһы ғына булыуға ҡарамаҫтан, еңһеҙ тире тунын арыҡ иңбаштарына әллә ниндәй ҡөҙрәт менән элеп ҡуйған ҡарт, кәзә һаҡалын һәлберәтеп, туйтаңлап машина эргәһенә килеп етә һалды. Килгән-киткән машиналарҙы оҙатып-ҡаршы алып тороусы һәр ауылда була торған түләүһеҙ дежурный икәнлеге әллә ҡайҙан һөрән һалып тора.

— Ни кәрәк, уландар? — Ҡарт, бик дәрәжәле ҡыланып, кәзә һаҡалын машинаның асыҡ ишегенән индереп ебәрҙе.

— Бабай, әйтегеҙ әле, Хөсниә әбейҙең йорто ҡайҙа?

— Шул ғынамы йомошоғоҙ? Мин һеҙҙе мир эше менән

йөрөйҙөр, тип торам.— Үпкәләне лә китте ҡарт тирәһе. Әйтерһең дә, ҡарсыҡтың йортон һорау зерә лә яҙыҡ эш.

— Мир эше менән йөрөйбөҙ, бабай. Үтә лә мөһим дәүләт эше. Шуға ла бына һеҙҙең ише оло кеше ярҙамынан башҡа бер аҙым да атлай алмаған кеүек, теге әбейһеҙ ҙә һис ни ҡыра алмайбыҙ. Һиҙәһегеҙме инде эштең нисек торғанын.— Һөйләшеүсе милиционер руль артында ултырғанына баш ҡаҡты. Уныһы йөпләгән була.

— Эйе, эйе. Шуға ла иң тәүҙә һеҙҙе күреп китәйек, тинек.

Ҡарт ихлас кеткелдәне. Һандыҡ төбөнә йәшерелгән ҡатып бөткән бер тәңкәң игеҙәк балалаған тиһә лә, ул тиклем һөйөнмәҫ ине, моғайын.

— Әһем... Эй-йе шул, уландар, мин ни, ҡулдан килгәнсе хөкүмәтебеҙгә ярҙам итергә тырышам.— Кәзә һаҡалын һыпырғылап, йөҙөнә үтә аҡыллы ҡиәфәт сығарып аҙапланды.— Хөсниә әбейегеҙҙең йорто ни, алыҫ түгел. Ана тегендә генә, ҡыҙыл башлы өйҙө күрәһегеҙме, шуның артында ултыра. Ә ни, кәрәгем тейһә, һеҙҙең менән барам. Мир эше менән йөрөгәндәргә ваҡытты йәлләп буламы.— Әйҙә, тиһәләр, Өфөләге фатирҙарының ишек төбөнә үк оҙатырға әҙер олуғ әфәнде.

Милиционерҙар бер-береһенә ҡарап көлөмһөрәште.

— Юҡ, бабай, һеҙҙе маҙаһыҙлап тормайбыҙ инде. Күрһәткән ярҙамығыҙ былай ҙа бик ҙур булды, баһалап бөткөһөҙ. Иҫән-һау ғына йөрөп ятығыҙ.

Машина урынынан ҡуҙғалды. Еңе ҡайһы тарафталыр йығылып төшөп әрәм булған тире тунын әллә көҙгө ҡояштан, әллә ике-өс айҙан килеп етәсәк ҡыштан һаҡланыу маҡсатында кейеп алған ҡарт үтә ҡәнәғәт ҡиәфәттә газ еҫен еҫкәп тороп ҡалды.

Әбекәй ир уҙамандарының ни йомош менән йөрөүҙәрен шунда уҡ аңланы. Артыҡ һорау биреп тормай, өйгә саҡырҙы.

— Әйҙәгеҙ, балалар, түргә уҙып ултырығыҙ. Бына ҡарт көнөмдә йорт-ҡураһыҙ ҡалып, ҡабаттан әүештәүеш итеп донъя ҡороп ятҡан булам. Бөтөнләй баш өҫтөндә ябыуһыҙ, урам уртаһында тороп ҡалдым бит, йә инде. Ярай ҙа колхоз был йортто бирҙе. Аңлауымса, һеҙ шул янғын эше менән йөрөйһөгөҙҙөр. Мин ни, ҡарсыҡ кеше, һорап та тормай, үҙ ҡайғымды һүтәм.

— Эйе, эйе, Хөсниә әбей, тап өҫтөнә баҫтығыҙ. Шул эш буйынса килдек.

Әбей, еңел генә ҡуҙғалып, плитә өҫтөнә сәйнүген ҡуя һалып ебәрҙе.

— Юлда сарсап килгәнһегеҙҙер, ҡоро хәбәр менән генә ебәреү килешмәҫ.— Ҡашығаяҡ тирәһендә шалтырап туҡтағас, егеттәрҙең ҡаршыһына килеп ултырҙы.— Йә, уландар, ни хәбәр килтерҙегеҙ? Янғындың нисек сығыуын тикшерәһен тикшереп бөттөләр. Әллә теге егетте беләһегеҙме?

Биктимер менән Самат, ни тиергә белә алмай, ыҡ-мыҡ итте, аптырағас, бер-береһенә ҡараштылар.

— Ни, әбей... — Үҙенең яратҡан ымлығын ең һыҙғанып эшкә ҡушырға ғына ниәтләгәйне Самат, Биктимерҙең ҡарашын күреп, кемдең бында нәсәлник икәнлеген шундуҡ төшөндө. Нисә ай бергә эшләү дәүерендә аңлай алмай аҙапланған икән бисара.

— Хөсниә әбей,— тине Биктимер үҙенең дәрәжәле тауышына үҙе һоҡланып,— һеҙгә ярҙам итеү маҡсатында алыҫ Өфөнөң үҙенән килеп еттек.— Ҡарсыҡҡа барып етәме икән минең мөһим хәбәр тигән шикелле, күтәрелеп бер ҡарарға онотманы.— Ләкин беҙгә ҡайһы бер деталдәр асыҡ түгел. Шул турала һеҙҙең менән бер аҙ һөйләшергә ине.

— Миңә ни, ул егет дитәл-митәлдәрен ҡалдырып йөрөмәне. Арғы урамдағы ултырҙашым сәйгә генә саҡырғайны. Әкренләп ҡайтып килһәм, «Янғын!» да «Янғын!» тип һөрәнләйҙәр. Йортом тапҡырына кәлтер-көлтөр килеп еткән булдым. Янғындан әйбер ҡотҡарырлыҡ йәштәменме ни. Өҫтөмдәге камзул менән күлдәктән генә ҡала инем. Иламһырап баҫып торһам, әллә ҡайҙан бер бала пәйҙә булды. Күргән-белгән кешегә оҡшамаған.

— Вәт, вәт! — Биктимер менән Самат урындарынан икеһе бер ыңғай ҡалҡына төштө. Бер-береһенә ҡарашҡас, ярамаған эш өҫтөндә тотолған ҡиәфәт менән ҡабат ултырыштылар.

— Шул. «Һеҙҙең йортмо, әбей?» тип кенә һораны ла ут эсенә инде лә китте. Ыспартсмин булдымы ул балаҡай, һәләк тиҙ йөрөй ине. Ана Менәүәрәләр дүртәү булып ташып, йүнле нәмәләрен ҡотҡара алманылар. Ә был егет биш-ун минут эсендә бөтә донъямды урамға сығарған да теҙгән. Үҙем ҡарсыҡ ҡына булһам да, донъяның сүп-сары йыйыла бит инде. Йөҙ-ҡиәфәтен айыра әйтергә, абайламай ҡалдым. Ҡара салбар менән йоҡа курткамы, ниҙер кейгәйне шунда.

— Ә, ни, әбей.— Түҙмәне Самат, бер-ике кәлимә булһа ла, һүҙ ҡыҫтырып ҡалырға тырышты.— Шунан һуң юҡ булдымы ни?

— Юҡ, балаҡайҙар.— Әбей, урынынан тороп, ҡайнаған сәйнүген өҫтәл өҫтөнә күсереп ултытты, сәй бешереп,

һый-тәғәмен булғанынса табынға теҙҙе.— Уҙып ултырышығыҙ. Иҫән-һау ғына йөрөп ятһын инде ул бала. Һыңар шәшкеһеҙ ҡала инем бит.— Күҙҙәре йәшкәҙәп китте, яулыҡ осо менән һөрткөләгәс, сәй яһарға кереште.— Әйҙәгеҙ, барынса етешегеҙ. Әллә ниҙәр менән һыйларлыҡ рәтем юҡ, ғәйепкә алмағыҙ.

— Юҡҡа борсолаһығыҙ, Хөсниә әбей, ҡунаҡҡа килмәнек,— тигән булды Биктимер. Үҙе йәһәтерәк өҫтәл янына күсеп ултырып, сәй шөрпөлдәтергә кереште.

— Шунан ни шул. Менәүәрә, йүгереп килеп, теге балаға өндәшә һалды. Газ баллондарын сығарып өлгөрмәгән булғандар. Шартлай бит тип, ҡото ғына осҡан үҙенең. Ирҙәрҙең береһе лә яҡын бара алмай, эт көтөүелә́й булып өйөлөшөп тороуҙарын әйтәйем. Теге егет ут эсенә ҡабаттан инеп китте. Сығарыуын сығарҙы, именаман булды, хоҙайға шөкөр. Бына Фәнәүиҙең йорто емерелде бит, алла ғына һаҡлаһын үҙен, тип теләп торам. Әлеге балаҡай унан да газ баллонын тәки күтәреп сыҡты бит. Бөтә кеше аһ итте. Емерелеп төшкән йорт эсенән сыҡты бит. Әллә доғаларымды хоҙай үҙе ишетте, һау ҡалды. Ата-әсәң кем була, тип һорарға ауыҙымды ғына асҡан инем, үрге остан ут һүндерә торған машиналарҙың килгәне күренде. Кем белгән уның юҡҡа сығырын, еңенән булһа ла тотоп туҡтатыр инем. Ситкә атлағанын күрмәнем, әллә күҙемдең кәре ҡайта. Улай тиһәң, Фәнәүиҙең кесе улы янымда ине. Ул да юҡ булды, тип тора. Белмәйем инде, балалар. Әллә хоҙай тарафынан ебәрелгән берәй изге булды. Һеҙҙең кеүек йәштәргә ундай-быңдайҙы һөйләһәң дә, ышанмайһығыҙ инде.— Ҡарсыҡ шәшкеһенә үрелде. Оҙаҡ ваҡыт шым ғына эстеләр.

— Ни, әбей, минең үҙем менән дә шундай хәл... — Саҡ тәфсилләп машина ҡарағы хаҡында һөйләп ташламаны Самат. Әллә изгеләрҙең донъяла булыуҙарын иҫбатларға маташты, әллә ҡарсыҡҡа ышаныуын күрһәтергә аҙапланды. Вә ләкин арт яғына арыу ғына семетеү эләктереп, һүҙ бутҡаһын башҡа тарафтарға бороп ебәрҙе.— Радионан ниңә эҙләткәйнегеҙ һуң уны?

— Атаҡ ниңә тип ни. Бер нәмәһеҙ ҡалыу анһаттыр шул. Әҙәмсә рәхмәт тә әйтергә өлгөрә алмай ҡалдым бит.

— Ярай, әбей, һеҙ барыһын да һөйләп бөткәнһегеҙҙер инде.— Биктимер урынынан торҙо.

— Һөйләнем, балам, һөйләнем, ниңә йәшерәйем инде.

— Тағы күреүселәр булдымы ул егетте? Янғын ваҡытында, тим.

— Шул Фәнәүизең малайы ғына иғтибар иткән. Ул да мин һөйләгәндән артығын өҫтәй алмаҫ. Үҙегеҙ ҡарағыҙ, уландар.

— Улайһа, башҡа ергә инеп тормайыҡ.— Әллә әбейгә, әллә Саматҡа әйтте. Вә ләкин сержант эйәген һикертеп алыуҙы кәрәк тапты.

Әбей менән хушлашып урамға сыҡҡас, икеһе лә өндәшмәй генә машинаға кереп ултырҙы. Бер осраҡта машина, айыу урлаған кешенең ни өсөн хәҙер килеп ҡарт әбейҙең әйберҙәрен уттан ҡотҡарып йөрөүен икеһе лә аңлай алмай аҙаплана ине.

## 37

Октябрь башы булһа ла, көн салт аяҙ. Көҙҙөң һуңғы йылыһын тирә-яҡҡа өләшергә тырышып ятыуымы, ләкин бөгөн йәйҙең үтеп киткәненә һис кенә ышанып булмай.

Айгөл ҡупшы курткаһын ҡулдарына эләктергән дә йүгерә-атлай урам буйлап килә. Аяғына еңел кроссовка ла тар ғына салбар кейеп алған. Әсәһенең алырға ҡушҡан бөтә әйберҙәрен дә табып бөттө, шикелле. Алып ҡайтып ҡына аш бүлмәһенә ауҙарырға ла кире мәктәпкә йүгерергә кәрәк. Һуңғы айҙарҙа аңҡы-тиңке йөрөп, эштәр йыйылып киткән. Үҙ-үҙен ҡулға алырға ваҡыттыр инде.

Үтеп барышлай магазин витринаһына күҙ һалғайны, ниңә ҡараған көнгә төштө. Унда төрлө биҙәнеү әйберҙәре теҙелеп ята ине. Инмәй сара юҡ. Ҡатын-ҡыҙҙың тәбиғәте шундай: алмаһа ла, ҡарап булһа ла сыҡмайынса тынысланмаясаҡ. Бүлектән бүлеккә йөрөп, оҡшаған бер әйберҙе ентекләп тикшерҙе. Сәғәтенә күҙ һалһа, байтаҡ ваҡыт үтеп киткәйне. Йә инде, һатып алған кешеләй, тора һайланып алып. Юҡҡа ваҡыт үткәреүенә йәне көйөп китте.

Ҡабаланып сығып барғанда, кемгәлер бәрелде. Дөрөҫөрәге, әллә ул бәрелде, әллә уға һуғылдылар. Шулай ҙа ғәфү үтенергә тип, күтәрелеп ҡарағайны, ғәжәпләнә төштө — магазин ишеге төбөндә киң йылмайып, үткәндә уны хулигандарҙан аралап алған ағай баҫып тора ине. Ишекте асҡан да ҡыҙға үтергә ишаралай.

— Әйҙә, әйҙә, һеңлем, рәхим итеп сыға күр. Бәрелгәнем өсөн ғәфү үтенәм. Шундай сибәркәйҙе күрмәй өтәләнеп инеп барғаным өсөн, үҙемә лә уңайһыҙ.

Айгөл көтөлмәгән осрашыуға шатланырға ла, аптырарға ла белә алмай аҙапланды. Күркәм кейемле һомғол буйлы йәш ирҙең кеселекле һөйләшеүе уға оҡшай ине. Ҡыҙҙы нисектер үҫтереп ебәргән кеүек итә. Ләкин ул үҙен был

ағай менән нисек тоторға тейеш һуң әле? Бына быныһы хәл итеп булырлыҡ түгел һымаҡ. Йәштәш малайҙарға ҡараған һымаҡ мөрәжәғәт итә алмай бит инде. Ағай, тиер ине, бөтөнләй ете ят кеше. Үткәндәге көтөлмәгән хәлдән һуң, ҡыҙҙың танышлыҡты дауам итергә уйы юҡ ине. Әле килеп тота һалып үтеп китеү әҙәпһеҙлек буласаҡ. Бер нисә секунд эсендә йөҙ төрлө уй йүгереп үтте ҡыҙҙың башынан. Шулай ҙа ҡара күҙлекле иргә ҡарап ихлас йылмайҙы.

— Ә, был һеҙме ни, Стас ағай? — тигән булды ни тиергә белә алмай.— Бына аҙыҡ-түлек алдым да йортҡа ашыға инем. Магазинға ингәс, ваҡыттың тығыҙлығы хаҡында бөтөнләй онотҡанмын.

— Һи, һеңлем, бындай магазиндарҙа йүнле тауар табып буламы ни! — Стастың йөҙөнә мыҫҡыллы йылмайыу бәреп сыҡты. Ләкин ул актерҙарға хас оҫталыҡ менән уны шундуҡ йәшерҙе.— Ҡара әле, һеңлем.— Ҡыҙҙы бер ситкәрәк ҡултыҡлап алып киткәс, кеҫәһенән ҡупшы флакон тартып сығарҙы.— Күрәһеңме, һинең кеүек ҡыҙҙарға фәҡәт ошондай ғына бүләктәр килешә.

— Француз хушбыйы! — Айгөлдөң иҫе китте. Күпме тапҡырҙар хыялланған нәзәкәтле еҫле һауытты ян-яғынан әйләндереп ҡараны.

Ҡыҙҙың осҡонланып киткән күҙҙәренә ҡарап торған Стас һауытты ҡатырға тышлығына һалып Айгөлгә һондо.

— Ал, һеңлем, был һинеке.

— Ҡуй, ағай, икенсе тапҡыр ғына күрешәбеҙ, ни эшләп мин һеҙҙән бүләк алып торайым. Килешмәгәнде... — Айгөл үпкәләне шикелле. Аҙыҡ-түлек тултырылған сумкаһын күтәреп, ҡайтырға ҡуҙғалды.

— Йә, йә, һылыу. Юҡҡа асыуланып барма. Йәш ҡыҙҙар шундай бүләк хаҡында хыялланыусан була. Һинең һөйөнөүеңде генә күрәһем килгәйне минең. Шул ғына.

Йәнәш атлап киттеләр. Ҡыҙ әленән-әле ҡул сәғәтенә күҙ һала. Стас иһә быны күрмәмешкә һалышып, нисегерәк итеп уртаҡ тел табыу хаҡында баш вата.

— Әйҙә әле, һеңлем, шунда берәй буш эскәмйә юҡмы. Бер аҙ гәпләшеп алайыҡ. Ғүмер бөткәндән һуң да, өс көнлөк эш ҡала ти.

Ирекһеҙҙән риза булды Айгөл. Урамдағы танышлыҡҡа ҡыҙ һалҡын ҡарай ине. Әле килеп был йәш иргә үҙенән ни кәрәк икәнлеген аңларға аҙапланды. Әгәр көтмәгәндә осрап иҫәнлек-һаулыҡ ҡына һорашып үтеп китһә, бигүк аптырамаҫ та ине. Ниңә тота килеп ҡыйбатлы бүләк тәҡдим итә әле ул Айгөлгә? Бына быныһы төшөнөп бөтөрлөк түгел. Һағайып ҡалһа ла, йөҙ һытып торманы. Илгәҙәк кенә итеп Стасҡа өндәште.

— Ағай, ә һеҙ ҡайҙа эшләйһегеҙ?

— О-о, һеңлем. Бик урынлы һорау. Ләкин минең төп шөғөлөм — сибәр ҡыҙҙарҙы урамдағы әкәм-төкәмдән һаҡлау.

— Китегеҙсе, ундай эш буламы ни?

— Ниңә булмаһын? Ир-егеттәрҙең төп хеҙмәте ҡатын-ҡыҙға ел-ямғыр тейҙермәү булырға тейеш. Элегерәк сибәр ҡатындар өсөн дуэлгә сығыр булғандар. Эшләпәле йән эйәләренең хәҙер ҡәҙере китте. Ни өсөн, беләһеңме? Үҙҙәренең төп бурыстарын онотҡан өсөн.

Стастың һөйләгәне Айгөлгә оҡшай ине. Ун алты йәшендә кем генә рыцарь хаҡында хыялланмай! Тап шундай әкиәт иленән килгән батыр шикелле тойола башланы ул ҡыҙға. Һағайыуын онотоп, ихлас көлөп ебәрҙе.

— Һеҙ бигерәк матур һөйләйһегеҙ, Стас ағай.

— Бына, аҡыллы кеше менән һөйләшеүе лә күңелле,— тигән булды Стас, һүҙ ыңғайында һалпы яғына һалам ҡыҫтырырға онотмай.— Мин, ғөмүмән, хәҙерге тәрбиәне аңлап бөтмәйем. Бына һеҙҙең мәктәптә, мәҫәлән, йәмғиәттә үҙ-үҙеңде нисек тоторға өйрәтәләрме? Матур манераларға, әҙәпле итеп һөйләшә белергә, кешеләр менән аралашырға?

Айгөл иңбашын ғына һикертте. Стас иһә, яуап көтөп тормай, хәбәрен сурыта бирҙе.

— Бына шул шул. Ҡатын-ҡыҙҙың ун ете йәшендә аҡҡош шикелле атлай белергә, һөйкөмлө йылмайырға, һәр осраған егет йөрәгенә ут һалырлыҡ ҡараш ташлай алырға һәләте булырға тейеш. Бындай һөнәрҙәр буйынса һеҙҙең урта мәктәбегеҙ бер ни бирә алмай. Ул бит уртаса, һоро кеше өсөн тәғәйенләнгән. Ни йүнле ир-егет, ни әҙәмсә ҡатын-ҡыҙ тәрбиәләргә хәленән килмәй.

Айгөл бер-ике тапҡыр Стастың һөйләгән хәбәрен кире ҡағырға ынтылды, ләкин аҙаҡҡа табан, ни өсөндөр, ир кеше дөрөҫ һөйләгән кеүек тойола башланы. Тыңлауы ҡыҙыҡ булһа ла, ҡайтырға кәрәк икәнен иҫләп, урынынан ҡуҙғалды.

— Йә, ярар, Стас ағай, үпкәләмәгеҙ, миңә ысынлап та ваҡыт.

— Йәл, йәл, ошондай матур көҙгө көндә, алтын тәңкәләй һибелгән һары япраҡтар аҫтында ултырыу үҙе бер ғүмер ҙә бит. Нишләйһең, һине өгөтләргә башҡа көҙрәтем юҡ, маҙаһыҙларға батырсылығым етмәй.

Ҡыҙ иңбаштарын һикертте, һөйкөмлө генә йылмайҙы ла шунда эскәмйәлә торған сумкаһын алды.

— Һеңлем, бәлки, һине оҙатырғалыр? Әйберең һәлмәк күренә.

— Юҡ, юҡ, борсолмағыҙ. Ҡайтып етергә күп ҡалманы.

Етеҙ атлап, Айгөл тротуар буйлап китте. Паркта эскәмйәлә ултырып ҡалған фырт ҡиәфәтле ир хаҡындағы икеле-микеле уйҙарының осона сыға алмай ине ул.

## 38

Алан-йолан ҡарана-ҡарана баҫҡыс буйлап күтәрелеп килә Миңлеғәле. Йөҙ-ҡиәфәте хәс тә ҡаймаҡ урлап ҡойроғонан эләктереүҙән ҡурҡҡан бесәйҙеке шикелле. Бармаһа бармаҫ та ине, бер ҡармаҡҡа ҡапҡас, ысҡыныуҙары ҡыйын эш.

Ҡыңғырауға баҫты. Фатирҙа хужабикә үҙе генә булырға тейеш. Хужа булһа ла, әллә ни ҡурҡаһы түгел — Миңлеғәле улар өсөн ете ят кеше. Ә бына ҡыҙҙары сыға ҡалһа, эштәр хөрт. Хәйер, ҡыҙҙың ҡайҙалыр сығып киткәнен Хәмит менән икәү байтаҡ ҡына өй мөйөшөндә көтөп торҙолар. Әгәр үҙ күҙҙәре менән күрмәһә, арт яғына пушка терәһәләр ҙә, бараһы эше юҡ Миңлеғәленең.

Ишекте һөйкөмлө генә ҡиәфәттәге урта йәштәрҙәге ханым асты. Таныш түгел ирҙе күреп, аптырай төштө.

— Һеҙгә кем кәрәк?

— Һаумыһығыҙ,— тигән булды Миңлеғәле. Әҙерләгән бар һүҙ мөлкәте ишек асылыу менән шаптырлап ҡойолоп бөткәс, уларҙы ҡайһы тарафтан йыйып алырға белә алмай аҙапланды.— Ни, туташ, эй, ханым... мин... һеҙгә... Эйе, эйе, эш буйынса килгәйнем.

— Ниндәй эш буйынса? — Гөлзифа ханым таныш түгел кешене йортҡа саҡырырға ла, саҡырмаҫҡа ла белә алмай аптырай ине. Үтеүен һорар ине, йүнләп ни өсөн килгәнен дә аңлата алмай, әллә ниндәй кеше, кем белә. Былай уңайһыҙ һымаҡ. Байтаҡ ваҡыт улар ыҡ-мыҡ итеп, бер-береһенә ҡарашып торҙолар.

— Эш буйынса инде. Теге ваҡыттағы... — Һыңар аяғына баҫып ҡарай Миңлеғәле, унан алмаштырған була, йәнә аяғы өшөгән ҡаҙ ҡиәфәтен ала. Шулай итеп туйтанлай торғас, тәки һөйләй торған нәмәһе иҫенә төштө эй. Был осраҡта аяҡты алыштырған һайын йә уң яҡҡа, йә һул яҡҡа шабырлап ҡойолған хәбәр тоҡсайын үҙ урынында тотмаған өсөн физика закондарын ғәйепләргәме, йә иһә анатомия өлкәһенә йоҙроҡто төйөргәме — береһенә лә ваҡыты ҡалманы Миңлеғәленең. Сөнки ҡаршыһында торған ҡатынҡай ир кешенең күҙен асалаҡ-йомалаҡ итеп тороуына ҡарап иҫнәй башлағайны. «Тыныс йоҡо, кескәйҙәр» тигән һүҙҙәр ҙә был тиклем тәьҫир итмәҫ.

— Ханым,— тигән булды Миңлеғәле, йөҙөндә ҡот осҡос мөһим ҡиәфәт әтмәләп.— Мин туған тейеш кешене эҙләйем.— Әллә үҙе лә ышанды инде, хәтта күҙҙәре йәшкәҙәп китте.— Бына бер ай инде күргән юҡ. Һеҙгә килмәнеме икән тигәйнем.

Гөлзифа ханым ни тиергә лә белмәне. Карауат аҫтында йәшереп тотҡан кешеләре юҡ. Ундай әҙәмдең тишек-тошоҡта ҡасып ултырғанын да күргәне булманы. Ауыҙ тултырып «Юҡ» тип әйтергә әҙерләнеп кенә бөткәйне, сәйер кеше өтөлөп-ҡырылып хәбәрен теҙергә кереште.

— Таныштар уның һеҙгә кергәнен күргәндәр. Тап ай ярым элек. Эйе, эйе. Быныһы ысынлап та хаҡ. Һеҙҙең ҡыҙығыҙ менән булған, тиҙәр.

Аптырабыраҡ торған ҡатын ҡыҙығыҙ менән тигән һүҙҙе ишеткәс, тертләне. Бер секунд эсендә башынан әллә ниҙәр йүгереп үтеп китте. Өс көн буйына ут йотоп ҡыҙын көтөүен иҫләү йөҙөнә ҡара күләгә булып ятҡайны. Эйе, бик ауыр тәүлектәр булды улар Гөлзифа өсөн. Аҙаҡтан, ҡыҙы һөйләгәс кенә, урмансы егеттең изгелекле кеше булыуын аңлағас ҡына, хафалары тарала төшкәйне.

— Туғаны, тиһегеҙме?

Хужабикәнең йомшағыраҡ һөйләшә башлауын күреп, Миңлеғәле саҡ иреп китмәне. Валлаһи, күләүеккә әйләнеп баҫҡыс буйлап ағып төшөп китәһе ине. Ләкин ир заты кәрәк мәлдә генә үҙенең ышпыйон икәнен иҫләй һалды.

— Эйе, эйе, ханым, кем, туған шул.— Илап күрһәтергәме икән тип, бик ҡаты мәсьәләне сисә алмай интегеп торҙо бер аҙ Миңлеғәле.— Ҡабарып торған ҡуңыр сәсле, аҡ йөҙлө.— Бергилке урмансының ҡиәфәтен хәтерләй алмай аҙапланды.— Ниҙәр кейгәне иҫемә төшмәй,— тип шыттырҙы күҙен дә йоммай.

— Әйҙә, уҙығыҙ түргә. Ни эшләп ишек төбөндә торабыҙ әле.

Аш бүлмәһенә инеп, үҙен ҙур кешеләй хис итергә самаһы юҡ түгел ине Миңлеғәленең. Ләкин ваҡытһыҙ теге ҡыҙ ҡайтып керһә, тоҙ кеүек ирей алмай ҙа баһа. Шуға күрә ирендәрен ялай-ялай, тәмле тәкдимде кире ҡағырға мәжбүр булды.

— Юҡсы, ваҡыт самалы. Әгәр ҙә үткәндә һеҙгә килгән кеше минең ҡустым булһа, эҙләү еңеләйер ине...

— Ҡуңыр сәсле тиһегеҙ инде... Ә, эйе, Айгөл менән килгән егет шундайыраҡ ине, шикелле. Аҡ йөҙлө, быныһы ла хаҡ. Аҡһыл-күк төҫтәге күлдәк кейгәйне.

«Шул! Шул үҙе!» Хужабикәнең тағы ни хаҡындалыр ентекләп һөйләгәнен тыңларға түҙемлеге етмәне Миңлеғәленең. Аяҡ остарына баҫып грузиндарса теттереп бе-

йеп ебәреүҙән үҙен саҡ тыйып, алйот ҡиәфәтендә ауыҙын йырып ҡатынға ҡарап тора башланы. Хәлбуки, Гөлзифа ханым тәүҙә аңламаны, әйләнеп ян-яғына ҡарап алды. Бисараның юғалған ҡустыһы табылды, шикелле, тигән уй мейеһен арҡырыға ла, буйға ла бер нисә тапҡыр пыран-зыран йырып үтеп китте.

— Һеҙҙең менән ни булды?

— Бер ни ҙә түгел! Үҙе! Тап үҙе! — Өсөнсө тиҙлектә баҫҡыстан аҫҡа табан атылып төшөп бара ине, башына килгән елле фекер елкәһенән ҡабат һөйрәп мендерҙе.

— Ханым! Эй, ханым! — Елдереп килеп туҡтағас, фекеренең инеш өлөшөн бышылдап ҡына сығарып ҡуйҙы.— Әйтегеҙ әле...

Әммә әйтерлек кеше табылманы — квартираның ишеге ябылғайны. Ҡыңғырауға ҡабат баҫырға Миңлеғәленең батырсылығы етмәне — йә үткәндә стена эсенән сыҡҡан албаҫты, ҡабат хасил булып, икмәк шүрлегенә менеп китер. Алла һаҡлаһын!

Албаҫты иҫенә төшкәс, ул ысын мәғәнәһендә бензинһыҙ йөрөүсе экспресҡа әүерелде. Бер минуттай ваҡыт үтмәне, был йорт тирәһендә Миңлеғәле түгел, «м» хәрефенең дә еҫе ҡалмағайны.

## 39

Бер бүлмәле ҡала квартираһы. Йорт эсе әллә ҡасандан тәрбиә күрмәгәнлеге күренеп тора — тирә-яҡта әйберҙәр туҙышҡан, иҙәндә сүп-сар. Аш бүлмәһендә байтаҡтан йыуыулмаған булғанға ҡатып бөткән һауыт-һаба. Түрьяҡта ыңғырашҡан тауыш фатирҙа хөкөм һөргән гүр тынлығын әленән-әле боҙғолай. Унда, йыйыштырылмаған карауат өҫтөндә, йөҙөндә нур әҫәре ҡалмаған әбей ята. Ваҡыты-ваҡыты менән күҙҙәре йомолоп, тынып ҡалғандай була. Унан ҡабат һиҫкәнеп уяна, тоноҡланған ҡараштары бүлмә стеналарын һәрмәргә керешә.

Бер аҙна ята инде ул карауатта. Ауыҙына тәғәм ризыҡ ҡапҡаны юҡ. Улай ғына ла түгел, йотом һыу алып эсергә хәле етмәй. Тәүҙәрәк тән ҡыҙыулығынан сыҙай алмай ине, хәҙер аслыҡ бөрә. Ҡарт кешегә күп кәрәкме, тағы бер-ике тәүлек шулай ятһа, гүр әйәһе булырға ла күп ҡалмаясаҡ. Бер кемгә кәрәкмәй, ташланған хәлдә ятып үлеүҙәре бигерәк үкенесле. Ҡарсыҡтың биттәре буйлап эҫе күҙ йәштәре тәгәрәне. Йә инде, насар ғүмер йәшәмәне лә баһа. Балалары бына тигән. Тик ғүмеркәйҙәре сит яҡтарҙа үтә шул. Улы күрше ҡалала ла бит, эш кешеһе

шул, уға ни үпкә. Белһә, былай ыҙалатмаҫ ине әсәһен. Һәр көн килеп хәл белеүсе туған-тыумасаң янында булмағас, ят инде үлем көтөп...

Ҡарсыҡ көс-хәл менән кәүҙәһен ҡыбырлатып, ишек яғына боролоп ятты.

— Их, улым, улым... Янымда булһаң, былай интегеп ятмаҫ инем дә бит.— Ыңғыраша-ыңғыраша янында торған ултырғыстан таблетка алып йоторға аҙапланды, буйы етмәгәс, ҡоро тарамышҡа ҡалған ҡулдар хәлһеҙләнеп һалынып төштө.

...Ниндәй йәш әле Анастасия. Һап-һары толомдарын икегә үреп күкрәгенә төшөргән, бөгөлә-һығыла һыуҙан килә. Ҡытлыҡ заманы икәне һиҙелмәй ҙә уға ҡараһаң. Бына ғәжәп, йәшәүҙәре ниндәй ауыр, ә ҡыҙҙың гелән йылмайып-көлөп кенә тораһы килә. Хәйер, ниндәй генә заманда ла йәшлек йәшлек булып ҡалмаһа, кешелек әллә ҡасан юҡҡа сығыр ине.

...Өлгөр килен булды Настенька. Ҡыҙына дүрт йәштәр самаһы, малайы шыуып ҡына йөрөй. Ләкин ирен ялбырап бөткән сәс менән ҡаршылағанын иҫләмәй.

...Федоры һуғышҡа китә. Их, һуңғы тапҡыр күререн белмәне шул. Әлеге йәшлек, әлеге саялыҡ. Тере килеш ҡайтырына самаһыҙ өмөтләнде. Һуғышты ике-өс айҙан бөтөр, тинеләр...

Ҡарсыҡ иҫен юя башлағайны. Күҙ алдына берсә уҙған ғүмер юлы, берсә фатирындағы тәртипһеҙлек килде. Тора-бара ҡайһыһының ысынбарлыҡ, ҡайһыһының уйхыял икәнен бутай башланы. Күҙ алдары томаланып йоҡоға китһә, һуғышта үлеп ҡалған ире үҙ янына саҡыра. Ана, уны алырға фәрештә лә осоп килде шикелле. Икәү түгел, берәү генә. Улай ҙа ярай, тик ожмахҡа ғына алып барһын, Федоры янына.

— Әбей! Әбей, һеҙ тереме?

Һы, ғәжәп, фәрештәләр һөйләшәме икән ни? Ҡарсыҡ уларҙың әйткәнен ауыҙ асып һүҙ ҡатмаһалар ҙа аңлап була, тип уйлай торғайны.

— Әбей!

Анастасия көс-хәл менән күҙҙәрен асты. Ҡаршыһында йөҙөнөң һыҙаттары берсә тоноҡланып, берсә асылып киткән изге рух баҫып тора ине. Ҡайһылай йылы ҡаршылайҙар уны ожмахта. Йәп-йәш кенә булһа ла, өтәләнеп тора. Тик ниңәлер элегерәк мәрхүм булған яҡындарын ғына тоҫмаллай алмай. Килеп өлгөрмәнеләр, күрәһең.

Хәйер... Ниңә әле тәненең һыҙлауы үтмәй? Был донъя менән бәйләүсе кәүҙәһенән азат булырға тейеш ине лә

baha. Ҡарсыҡтың күҙҙәре йәнә асыла. Алдында ҡот ҡалмаған йортоноң ғәҙәти күренеше хасил булғас, ғәжәпләнеүе көсәйә төштө. Юҡ, китмәгән изге рух. Һаман да тора ҡаршыһында, күҙ ҡараштары бик игелекле. Ләкин ниңәлер фани донъялыҡта башҡара торған эштәр менән була. Анастасия тамам иҫенә килгәндә, ул яҙа-йоҙа сырамыҡҡан йән эйәһе әбейҙең эҫе маңлайына һыулы таҫтамал ҡуйып йөрөй ине. Ирендәре татлы еүешлекте тойоп тамшанған ҡарсыҡ быларҙың ысынбарлыҡта булыуын бик ауырлыҡ менән аңланы.

— Я раббым, улыҡайымды ғына күрмәй китәм инде донъяларҙан...

— Әбей! Әбей, кем һуң улығыҙ?

— Николенька минең улым. Адресы ла бар ине, ана тегендә, ҡумтала.— Тағы ла хәлһеҙләнде.

Күҙҙәре йомолған әбейҙе башҡаса маҙаһыҙламаны таныш түгел егет. Ҡумтаны асып, адресҡа күҙ йүгертте, унан ҡабат ҡарсыҡ янына килде. Маңлайына ҡулын ҡуйҙы — һаман да эҫе. Йәл, дарыу йотторол өлгөрмәне, саҡ ҡына булһа ла ярҙам итер ине. Хәҙер берҙән-бер юл — «Тиҙ ярҙам» машинаһын саҡырыу. Барып ишекте ҡараны — бикле. Ер кешеләре килерҙәр, аса алмаһалар, боролоп ҡабат китәсәктәр. Шуға күрә ҡарсыҡтарға ғына хас булғанса ентекләп эленгән ишектең йоҙаҡтарын асты. Килеп әбейҙең йөҙөнә бер аҙ теклән торҙо — юҡ, үлмәйәсәк.

Анастасия ҡабат иҫенә килгәндә, бүлмә уртаһында уға теклән баҫып торған изге рух әкренләп кенә юғала башлағайны. Бына һуңғы һыҙаттары юйылды, урынында еңелсә томан ғына ҡалды.

— Я раббым... — Ҡарсыҡтың күҙенә йәш төйөлдө.— Ғүмер буйы бер кемде ҡыйырһытҡаным булманы ла baha. Тамуҡҡа ебәрергә хөкөм иттеңме ни, аллам...

Уңарса булмай, ишектең ҡыңғырауына баҫтылар. Әллә Николенька ҡайттымы? Тороп йүгереп кенә асыр ине ишеген, хәлкәйҙәре юҡ шул. Емереп кенә инһә ярар ине. Китмәһен, бары китмәһен! Хәлһеҙ ҡулдар сатырлатып карауат ситенә йәбеште. Ап-аҡ кейенгән өс кешенең йүгереп килеп инеүҙәрен, һаҡ ҡына күтәреп нәмә өҫтөнәлер һалыуҙарын төштәге шикелле генә хәтерләй Анастасия. Үҙен ҡайҙалыр илтеүсе кешеләрҙең йөҙҙәренә теклән ҡарар өсөн башын күтәрергә уҡталғайны, иҫен юғалтып ҡабат урынына ауҙы.

— Лиза! — Пижама кейгән ир йоҡоһонан һиҫкәнеп уянды ла бер аҙ аңҡы-тиңке килеп, аптыраған ҡиәфәттә ултырҙы.

— Лиза! Һин өндәштеңме миңә?

Эргәһендә ятҡан ҡатын да уянғайны. Туҙған сәстәрен ҡулы менән йыйып, тороп ултырҙы.

— Ни булды, Коля? Сирләп киттеңме әллә?

— Әле генә уяндыңмы ни? Мин һин әйткәнһеңдер, тип уйлағайным.

— Нәмә тип? Һин ни һөйләйһең?

Ир кеше ике ҡулы менән сикәһен ҡыҫып өндәшмәй ултырҙы. Унан, кинәт йоҡоһонан уянған кешеләй, һикереп тороп кейенергә кереште.

— Бына нәмә, Лиза. Иртәгә иртүк Кондратьевҡа шылтырат, мин эшкә бара алмайым. Бөтә булған мөһим мәсьәләләрҙе шаршамбыға күсерһен. Хәл итә алырҙайҙарын үҙе хәл итһен.

— Исмаһам, аңлатып әйт. Ҡайҙа йыйынаһың? Ни булды? — Урта йәштәр тирәһендәге ҡатындың ғәжәпләнеү ярылып ятҡан йөҙө ҡурҡынған ҡиәфәт менән алышынды.

— Бер ни аңлата алмайым шул.— Ир кеше карауат ситенә килеп ултырҙы. Ҡараштарында өмөтһөҙлөк, ҡабаланыу, тәүәккәллек — бөтәһе бергә буталғайны.— Уяулы-йоҡоло ята инем, ни булғанын үҙем дә асыҡ иҫләмәйем. Кемдер ҡолағыма килеп бышылдағандай булды. «Әсәйең хәл өҫтөндә ята. Ашыҡ»,— тине. Аңлайһыңмы, үҙ ҡолаҡтарым менән ишеттем. Әсәкәйем, ул бит унда япа-яңғыҙ! Аңлайһыңмы, япа-яңғыҙ! — Ир кеше һикереп тороп әйберҙәрен йыйырға кереште.— Мин хәҙер үк Өфөгә китәм. Һуңғы электричкаға өлгөрөрмөн. Булмаһа, төнгө поезды көтәм.

— Һуң, Коля, иртәгә бит кәңәшмә. Ниндәй мәсьәлә хәл ителерен үҙең беләһең.

— Ҡаҙалып китһен кәңәшмәһе! Бында һүҙ әсәй хаҡында бара, аңлайһыңмы, әсәй хаҡында!

— Әгәр ҙә ҡурҡыныс төш кенә булһа?

— Ул саҡта бигерәк һәйбәт, күңелде тыныслап, кире әйләнеп ҡайтырмын. Бәлки, үҙем менән дә алып килермен.

— Коля, көт. Мин дә һинең менән.— Ҡатын карауаттан тороп кейенергә керешкәйне, ир ҡул хәрәкәте менән генә уны туҡтатты.

— Юҡ, һин ҡал. Балаларҙы кемгә ҡалдырырға уйлайһың? Етмәһә, төн уртаһында.

Ир кеше тиҙ-тиҙ генә әйберҙәрен йыйҙы ла ишектән сыҡты. Елизавета карауатында ултырған килеш ҡалды. «Иҫән-һау ғына булһын инде».

...Әбейгә укол яһағайнылар. Һаташыу менән үткән көндәргә теүәл аҙна тулды тигәндә, тынысланып йоҡоға китте ул. Байтаҡ ваҡыт хәрәкәтһеҙ ятты. Уянғанда, янында сикәләре саллана башлаған, аҡ халат ябынған күркәм ҡиәфәттәге ир ултыра ине. Күҙҙәрен дә алмай, карауатта ятҡан ауырыуға текләгән.

— Әсәй! Әсәй, уяндыңмы?

— Улыҡайым! — Ҡарсыҡтың сикәләре буйлап ҡайнар күҙ йәштәре тәгәрәне.— Ярай, ҡайтып өлгөрҙөң. Шунда ғына ятып гүр эйәһе була инем. Рәхмәт инде үҙеңә.

Николай әсәһенән һуңғы аҙналағы хәл-ваҡиғаларҙы ентекләп һорарға уйлағайны, тыйылды. Ниңә ҡарт кешене борсорға, һөйләшергә өлгөрөрҙәр әле. Тик бер нәмәне аңлай алмай ул: кем «Тиҙ ярҙам» машинаһын саҡырған? Табиптарға әле генә килеп төштөм, тигәйне, ышанманылар. Ысынлап та, төн уртаһында әсәһенең ауырыу икәнен белеп, ҡайҙан килеп етһен ти. Етмәһә, сит ҡаланан. Ниндәйҙер төш тураһында һөйләп тора алмай бит инде. Ни тиһәң дә, етәксе кеше, көлкөгә күтәрерҙәр.

Әйтеүҙәренә ҡарағанда, әсәһе иҫһеҙ ятҡан, ә фатирҙың ишеге асыҡ булған. Ғәжәп... Әсәһе йәшендәге кешеләрҙең ишекте нисек тотоуҙарын яҡшы беләә бит инде. Квартирала бер ни юғалмағайны. Хәйер, урлашыр өсөн ингән кеше ҡотҡарыу хаҡында уйлаймы? Сәйер, бик сәйер. Баш етмәҫлек мәсьәлә. Әсәһе аяҡҡа баҫҡас, ситләтеп кенә белешергә кәрәк булыр. Хәҙерге мәлдә иң мөһиме — уның иҫән ҡалыуы.

Күпте күргән, сәстәре саллана башлаған, иң ҡырҡыу мәлдәрҙә лә юғалып ҡалмаған олпат ир ошо төндә булған ваҡиғаларҙың асылына төшөнә алмай баш вата ине.

## 41

Тәңкә-тәңкә һары япраҡтар ҡойола. Иҫ киткес матур быйыл көҙ. Төрлө биҙәктәр менән нағышланған ағас япраҡтары йәйғор төҫө хасил итеп, келәмдәй булып ергә түшәлә. Иң моңһоу, хәсрәтле кешенең дә кәйефен күтәрә бындай мәл.

Япраҡ ҡойоно уртаһында ағастар араһынан егет менән ҡыҙ килә. Уларҙың тирә-яҡтағы кешеләрҙә лә, һирәкләп кенә үтеп киткеләгән машиналарҙа ла эштәре юҡ. Ҡыҙ бик йәш кенә. Уға ҡараһаң, йәйге аяҙ иртәлә сәскә

тажында мөлдөрәп торған ысыҡ күҙ алдына килә — шундай саф, эскерһеҙ. Егет тормош һынауын үткән, аяҡтары ҡалдырған эҙҙәрҙә байтаҡ әсе тир түгелгәнгә оҡшай. Кинәт ҡупҡан дауылда ышыҡланырлыҡ ҡөҙрәте булған имәнде хәтерләтә ул.

— Айвар ағай, ҡара! — Ҡыҙыҡай һап-һары имән япрағын сәстәренә ҡаҙап ҡарай.— Килешәме батшабикә тажы? — Үҙе ысынлап та тәхет түренә менеп ултырғандай, рәхәтләнеп көлә.

— Белмәй әрәм булған батша заттары. Алтындан эшләп аҙапланғансы, имән япрағын ғына ҡаҙап йөрөрҙәр ине.— Егет йылмая. Айгөлдөң шундай шат, күңелсәк сағы бик оҡшай уға. Ҡыҙыҡайҙың ҡолонсаҡ шикелле йүгереүенә, юҡтан ҡыҙыҡ табып көлөүенә яратып ҡарай.

— Ой, Айвар ағай, беләһеңме, беҙҙең мәктәптә «Алтын көҙ» кисәһе була. Һәр класҡа сюрприз әҙерләргә ҡуштылар. Әйтәйемме, беҙ нишләйбеҙ? — Ҡыҙ салбарын ҡаҡҡылап торҙо ла көтмәгәндә бер тубығын ергә терәне.— О, ҡөҙрәтле тылсым эйәһе, түбәнселек менән һеҙҙең ярҙам итеүегеҙҙе үтенәбеҙ!

Егет аптырап ҡалды. Бер аҙ ваҡыт ҡыҙ ысынлап һораймы, шаяртамы икәнен аңлай алмай торҙо. Айгөл сылтыратып көлөп ебәргәс кенә, ирекһеҙҙән йылмайҙы.

— Белмәйем, һеңлем. Был бит уйын эш түгел. Мин, ғөмүмән, үҙемдең башҡаларҙан айырылып тороуымды бер кемдең дә белеүен теләмәҫ инем.

— Ә беҙ уны былай эшләйбеҙ. Һеҙ саҡ ҡына, тырнаҡ осо тиклем генә ярҙам итегеҙ. Ҡалғандарын үҙебеҙ башҡарабыҙ.

Айвар ағас олонона һөйәлеп уйға ҡалды. Ҡыҙыҡай мөлдөрәп уға төбәлгән, әйтерһең дә, әсәһен үлемдән ҡотҡарыуҙы һорай. Нишләргә? Асыҡтан-асыҡ кешеләргә «Был мин!» тип һөрән һалыу йүнлегә килтермәйәсәк — быныһы көн кеүек асыҡ. Шул уҡ ваҡытта ярҙам ҡулы һуҙыуҙан баш тарта алмай ул. Әле Айгөлдөң үтенесе, әлбиттә, балалыҡ шуҡлығын ныҡыраҡ хәтерләтә. Шулай ҙа... Шулай ҙа...

— Ярар, һылыу.— Айвар бер ҡарарға килгән кеше ҡиәфәтендә ҡыҙҙың ҡаршыһына сығып баҫты.— Мин әҙер. Әммә шарт бар — тулы серлелек булырға тейеш. Йәғни ни булғанын һин күрмәйһең дә, белмәйһең дә. Номер барып сығасаҡ, ләкин, бик теләһәң дә, шаҡ ҡатырғыс итә алмайбыҙ. Ышаныу көсөн юғалтыуҙан бигерәк, һинең шик аҫтына эләгеүеңде теләмәйем.

— Уй, рәхмәт, Айвар ағай! — Айгөл сәбәкәйләп алды.— Һеҙ — даһи! Ысынлап әйтәм. Ну параллель кластың

танауына сиртәбеҙ былай булғас. Фокус эшләүсе малайҙары бар, шуға әллә кем булып маһайышып йөрөйҙәр.

Айвар ҡыҙҙың тәтелдәүенә башын сайҡап ҡарап тора. Хәтәрҙең ситендә генә йөрөүен был бала, бәлки, аңлап бөтмәйҙер, бәлки, төшөнһә лә, үҫмерлеге өҫтөнлөк алалыр. Кем белә... Дөрөҫ эшләнеме икән егет уны үҙенең тормошона ылыҡтырып? Улай тиһәң, яҙмыш үҙе үк ҡыҙҙы урман төпкөлөнә килтерҙе. Ни булһа ла булды, улар хәҙер бер-береһенә «Һау бул!» тип кенә әйтеп, боролоп китә алмайҙар. Мөмкин түгел.

— Айвар ағай, һеҙ мине әллә тыңламайһығыҙмы?

— Тыңлайым, һылыу, әйҙә дауам ит.

— Әлеге кисә ике аҙнанан һуң була. Хәҙерҙән үк әҙерләнә башларға кәрәк, улайһа өлгөрмәйбеҙ.

— Ошо минуттан алыпмы ни? — Айгөлдөң өтәләнеүен күрһә, егеттең йылмаяһы килә — хәс тә ҡабаланып һикергеләп йөрөүсе турғай.

— Минең башҡа бер йүнле нәмә килмәй, һеҙҙең аҡыллы фекерегеҙ генә ҡотҡармаһа.

— Беҙ бына нәмә эшләйек, һылыу. Өс-дүрт көндән йәнә осрашырбыҙ. Шунда мин һиңә үҙемдең ни уйлауым хаҡында әйтермен. Килештекме?

— Әлбиттә. Тик һеҙ ышандырырлыҡ нәмә уйлап сығарығыҙ инде. Беҙ эшләгән тиһендәр.— Ҡыҙ рәхәтләнеп көлә. Теләгән нәмә ҡулынан килеүсе дуҫы хаҡында бик һөйләйһе килә уның. Тәү осраған үткенсегә үк. Ләкин был мөмкин түгел. Шуға ул тешен ҡыҫып түҙәсәк. Ошо ҡая таштай терәк булырлыҡ егет хаҡында уйлау ғына ла күңеленә кинәнес бирә. Ниңә көлмәһен инде ул!

— Айвар ағай, килегеҙ, һеҙҙе шуның өсөн бер әп итәйем.— Айгөл егетте әллә ағаһы урынына күрә башланы, атаһын ҡайһы саҡ нисек итеп сикәһенән үпһә, Айварҙы ла һул битенән кинәт кенә үбеп алды. Үҙенең ҡылығының хәҙерге мәлдә яйһыҙыраҡ икәнен һуңлап аңланы шикелле — аҡ йөҙө ҡып-ҡыҙыл булды, уңайһыҙланып ситкә ҡараны. Бер туҡтамай күңелсәкләнеп һөйләнеп килгән ҡыҙ ҡапыл шымды.

— Йә, ярар, һылыу, юҡ өсөн борсолма. Үбеүең өсөн рәхмәт. Ысынлап әйтәм.— Айварҙың ҡулдары яй ғына өҫкә күтәрелде. Бына ҡыҙыҡай, оялышынан ни эшләргә белә алмай, уның ҡаршыһында баҫып тора. Хәленән килһә, ергә һеңер ине. «Нисек кенә йыуатырға һине, һылыуым?» Егет әкрен генә Айгөлдөң сәстәренән һыйпай. Ошо фәрештәләй нәзәкәтле һылыуҡайҙы күкрәгенә ҡыҫаһы килә, өркөтөүҙән ҡурҡа.

— Рәхмәт, Айгөл.— Һеңлем тип әйтһә, килешмәç кеүек. Туғаны кеүек күрһә, былай итеп күҙҙәренә ҡарап тора алмай ул. Теләһәләр-теләмәһәләр ҙә, сикте аша үттеләр инде.

— Ни өсөн, Айвар... ағай? — Ҡыҙ күҙҙәрен күтәрергә тырыша, булдыра алмай.

— Ағай тимә, яраймы?

— Ярар... Айвар...

Егет башҡаса түҙеп тора алманы — башын эйеп ҡаршыһында баçып торған Айгөлдө ҡапыл ынтылып күкрәгенә ҡыçты. Үҙенән бер башҡа оҙон, киң күкрәкле баһадирҙай Айвар ҡосағында ҡыҙыҡай юғалып ҡалды. Егет әкрен генә итеп сәстәренән һыйпай. Саҡ ҡына ҡыҙҙың эйәген күтәрә бирҙе һәм... башҡаһы төштәге кеүек. Етеп килгән һәр ҡыҙҙың тәненең һуңғы күҙәнәгенә тиклем тертләп көткән мәлдәре була. Шуларҙың иң изгеһе — хыялдағы егеттең ҡосағы һәм... тәүге үбеүе... Айгөлдөң шундай мәле ине хәҙер. Бик тиҙ булыр, тип уйламағайны ул. Ни эшләргә белә алмай, егеттең ҡосағынан ысҡынырға тырышты. Асылда иһә ошо минуттарҙың оҙағыраҡ булыуын теләй ине.

Айвар бер аҙҙан ҡулдарын бушатты. Әле генә шашынып ҡосаҡлаған ҡулдар һаҡ ҡына ҡыҙҙың битенән һыйпаны һәм һалынып төштө.

— Ғәфү ит, Айгөл. Рәнйемә, яраймы?

— Ярай...

Ни өсөн улай ти һуң әле? Килешәме был осраҡта? Ҡыҙҙың башы тамам буталғайны. Йүләр ҡиәфәттә башҡаса ҡала алманы ул — әкрен генә атлап, ҡайтыу яғына ҡуҙғалды.

— Һау булығыҙ... Айвар.

— Айгөл, һине йортоңа ҡәҙәр оҙатырға кәрәктер?

Ҡыҙ баш сайҡаны. Баянан бирле тәүге тапҡыр егеткә күтәрелеп ҡараны... һәм Айварҙың иçе китте. Был ҡараш төпкөлөндә бая ғына һикергеләп йөрөгән турғай кеүек елбәҙәк үçмер урынына еткән ҡыҙ ине. Күрәһең, уның ошо минуттарҙа яңғыҙы ғына булаһы килгәндер. Әкрен генә атлап, ағастар араһынан китте. Уны күҙҙән юғалғансы ҡарап ҡалды Айвар. Улар хәҙер элекке шикелле ябай дуçтар ғына түгел ине инде.

## 42

Был юлы Стас туранан-тура эш итергә булды. Көтөлмәгән осрашыуҙар ойоштороу ялҡытты, дөрөçөрәге,

ышандырмай башланы. Тоторға ла теге себеш менән осрашыу билдәләргә. Ундай ыбыр-сыбыр менән эште оҙаҡ һуҙып тороrға, әлбиттә, ул өйрәнмәгән, шулай ҙа нишләйһең, әлеге мәлдә Хәмит менән Миңлеғәленең миллионлап табыш бирә торған төпһөҙ аҡса тоҡсайы хөрмәтенә ундай ғына ташламалар яһарға ла ярай.

Трубканы Айгөл үҙе алды. Тап шуға өмөтләнгәйне лә Стас. Ҡыҙыҡайҙың үҙе генә йортта сағын әллә ҡасан асыҡлап ҡуйған инде ул. Форма кейеп йөрөгән погонлы заттарың ары торһон.

— Алло, тыңлайым.

— Хәйерле көн, Айгөл һылыу.

Ҡыҙ бер ни тиклем ваҡыт өндәшмәй торҙо. Күрәһең, кем шылтыратҡанын белергә аҙапланды.

— Һаумыһығыҙ.

— Таныйһыңмы мине, сибәркәй?

— ... Стас ағаймы әллә?

— Яратам зирәк ҡыҙҙарҙы. Ни хәлдә? Йәшлек фронты гөрләйме, тием?

— Зарланған юҡ. Йомошоғоҙ бармы әллә?

— Тура һорарға ярата икәнһең. Ярай, мин дә туп-тура әйтәм. Миңә һинең ярҙамың кәрәк.

— Ни булды? Ниндәй ярҙам?

Стас өндәшмәй торҙо. Нисегерәк ышандырырлыҡ итеп әйтергә?

— Был хаҡта телефон аша һөйләшеп булмай инде. Ҡыйын булһа ла, ярты сәғәт ваҡытыңды бүлә алмайһыңмы?

Айгөл өндәшмәне. Стас аңланы — ул икеләнә ине. Йомшаҡ ҡына итеп кире ҡағыр ине, бурыс тигән тойғо тота, ни тиһәң дә уның үҙен ҡотҡарҙы. Шәп уйлап сығарҙы Стас ул һөжүм менән — ниндәй ҡырыҫ тәтәй ҡыҙ үҙе килеп ҡапты ҡармаҡҡа.

— Ярар, Стас ағай. Мин ярҙам итергә әҙер. Әгәр минең ҡулдан килерҙәй эш булһа.

— Һо-о, һеңлем. Унан да ябай ярҙамдың донъяла булғаны юҡ, күрерһең бына.

— Һеҙ осрашып һөйләшергә тәҡдим итәһегеҙме?

— Бына бит, үҙе аңлап торған кеше менән аралашыуы ла еңел. Әлбиттә, осрашырға.

— Ҡасан?

— Хәҙер үк. Булдыра алаһыңмы?

— Ярар. Ләкин оҙаҡҡа түгел, иң күбе — егерме минут.

— О-о, Айгөл һылыу, һеҙ бигерәк. Иң популяр фотомоделдәр ҙә был тиклем һаранланмай. Хәйер, һеҙ улар-

ҙан ҡайһы ерегеҙ менән кәм. Бәлки, киреһенсә.— Бер үк ваҡытта Стастың йөҙөндә мыҫҡыллы йылмайыу йәйелде. «Ҡара һин уны, себеште. Үҙен әллә кемгә ҡуйған була. Һинең һымаҡтарҙың тиҫтәләбен сүп урынына күрмәй тапап үткән бар».

Айгөл, ысынлап та, оҙаҡ көттөрмәне. Стас фатирын бикләп, машина менән ҡыҙҙың йорто ҡаршыһына килеп туҡтауға күп булһа ун биш минут ваҡыт үткәндер — улар ҙур урам буйлап еләләр ине. Айгөл зәңгәр плащта, аяҡтарына шул уҡ төҫтәге беҙ үксәле туфлиҙар кейеп алған. Ул сыҡҡас, тәү тапҡыр күргәндәй ашарҙай итеп ҡараны Стас. Үҙенә күрә түгел, сибәр генә икән дә баһа. Ғүмер баҡый джинсыһын төшөрмәй, куртка, кроссовка һөйрәй ҙә йөрөй торғайны. Әле килеп үҙенән нәзәкәтле туташ әүәләп аҙаплана. Ни булған быға? Стасҡа оҡшайым тип тырышмай торғандыр, әле машинала килеүенән үк күҙгә бәрелеп тора — уйҙары менән әллә ҡайҙарҙа, болоттар араһында йөҙөп йөрөй буғай.

— Айгөл...

Ҡыҙ тертләне. Унан ғәйепле ҡиәфәттә йылмайып ҡуйҙы.

— Ни булды, Стас ағай?

— Ни хаҡында уйлайһың?

— Ә, былай ғына...

Һүҙ тағы ялғанманы. Стастың йәне көйә башланы. Хет ҡаланан ситкә алып кит тә ағасҡа бәйләп ҡуй. Улай тиһәң, был тәтәй ундай ғына һынауҙы үткән шул.

— Туҡтағыҙ, Стас ағай!

— Ниңә тәбиғәт ҡосағында яҡшыраҡ түгелме ни?

— Юҡ, кәрәкмәй. Паркта ғына һөйләшәйек.

Ни эшләйһең, туҡтарға тура килә. Сейә ҡыҙыл төҫтәге «Нива» кеше аҙыраҡ урындарҙы һайлабыраҡ, йүкәләр үҫкән аллеяға килеп туҡтаны. Ир кеше йәһәт кенә төшә һалып, ҡыҙ ултырған яҡтың ишеген асты. Булғас булһын, аҙаҡҡаса әҙәпле ҡыланырға тура килә. Сөсөләнеүгә өйрәнмәгән Стастың ҡоҫаһы килә башланы инде.

— Һеҙгә ниндәй ярҙам кәрәк булды, Стас ағай?

Ир кеше эскәмйәгә йәнәшәһенә килеп ултырғас, һүҙҙе тура шул хаҡтан башланы Айгөл. Оҙон-оҙаҡҡа һуҙып ултырырға һис кенә теләге юҡ ине.

— Һм... Нисегерәк әйтергә. Һиңә тота килеп ярып һалырға ул бик нескә эш, һеңлем. Бер һүҙ менән әйткәндә, йөрәк эше. Аңлайһыңдыр... — Ҡыҙға бер аҙ төбәлеп ҡарап торғас, тағы ла илһамланыбыраҡ дауам итте.— Һине үткәндә бер егет менән күргәндәр. Урмансы булып эшләй тиме..

Айгөл һиҫкәнде. Ялт иттереп Стасҡа бороллдо — йөҙөн ҡуйы ҡыҙыллыҡ ҡаплағайны.

— Ҡасан? Өсөнсө көнмө? — Артығыраҡ ысҡынды-рыуын аңлап алды, йәһәтерәк ситкә бороллдо.

Ах, ҡармаҡҡа ҡаптың, ҡыҙый. Хәҙер инде ауҙан ыс-ҡына алмаясаҡһығыҙ! Стас тантана итә ине. Была бит булдыҡлы ир-егеттең ҡулы нисек — бер һелтәүҙә ике ағасты ауҙара һуға.

Уңарса ҡыҙ тынысланып өлгөргәйне. Йөҙөндәге сәйер алһыулыҡ үтә төшкән. Һис ни булмағандай, эргәһендә ултырған иргә өндәште.

— Һеҙ ни хаҡта, Стас ағай?

Ҡара һин уны, үҙенә күрә түгел. Һалҡын ҡанлы ил инәһен үҙенән әүәләп маташа.

— Мин һине ҡайғыртам, туғаным. Ул егетте бик яман, тиҙәр бит. Бер-бер хәлгә юлыҡтырып ҡуймаһын. Юҡҡа ғына йәп-йәш башы менән урман төпкөлөндә йәшәмәйҙер. Ниндәй ҙур урында эшләй атайың, тиңме ни ул һиңә?

— Ә һеҙ минең атайымдың ҡайҙа эшләүен нисек бел-дегеҙ?

Саманы онотоп ташланың, Стас. Ну, нисауа, ундай ғына йыртыҡҡа ямау табыла.

— Һинең атайың шикелле хөрмәтле кешене лә белмә-гәс. Был бер ҙә килешә торған эш түгел.

— Ярар, уныһы һүҙ ыңғайында ғына. Һеҙгә ниндәй ярҙам кәрәк ине һуң, Стас ағай?

Ир кеше йөҙөнә мөхәббәт ялҡыны сығарып аҙаплан-ды. Уның был тырышлыҡтары ҡыҙҙы ышандырырлыҡ булғандырмы-юҡмы, Айгөлгә яҡыныраҡ күсеп ултырып, бик тә мөһим хәбәр һуҡҡандай, төп һүҙгә күсте.

— Ярҙам уҡ түгел ул, Айгөл. Беләһеңме, минең юлымда күпме ҡатын-ҡыҙ осрағаны бар, ләкин,— Стас ике ҡулын өҫкә һуҙҙы, әллә аллаға ишара яһаны, әллә үҙен алла урынына күтәрергә маташты, быныһы бигүк аңлашылманы,— ләкин йөрәккә бойороп булмай, тиҙәр. Һаман да яңғыҙмын. Үткәндә һине осратҡас, яҙмыш йыл-майҙы, тип ҡыуанғайным, иртәрәк һөйөнгәнмен икән. Әйтсе, ысынлап осрашаһыңмы һин ул егет менән?

Ни тиергә белә алмай аптырап төштө ҡыҙыҡай. Был ағай шаяртамы, ысынды һөйләйме икәнен тиҙ генә аңлап булырлыҡ түгел. Нилектән кинәт Айвар менән ҡыҙыҡһы-на һуң әле ул? Урмансы, тиме... Кинәт ошо урында Айгөл-дөң сикәһен энә сәнскәндәй булды. Урмансы! Ҡайҙан белә ул уны? Айгөл менән күргәндәр ти егетте. Маңлайына яҙылмаған да баһа ҡайҙа эшләгәне. Тимәк, кемдер белә,

кемдер ҡыҙыҡһына... Хәмит! Шунан башҡа берәүҙең дә ҡулы йөрөмәй бында.

— Ә һеҙ ни эшләп уны урман ҡараусы, тинегеҙ әле, Стас ағай?

— Ә-ә, минең бер дуҫ егет таныған кеүек булды ул зәхмәтте. О-о, ниҙәр генә һөйләмәне уның хаҡында. Хатта минең сәстәр үрә торҙо. Маньяк тиме шунда. Һинең һымаҡ йәп-йәш ҡыҙҙар хоббиһы икән.

— Ә ул дуҫығыҙҙың исеме осраҡлы ғына Хәмит түгелме?

Стас өндәшмәй торҙо. Сей себеш, үҙе үк эләктерергә маташа.

— Юҡ, юҡ, күргән-белгән кешем түгел. Шунан, Айгөл, минең тәҡдим хаҡында уйлап ҡарайһыңмы?

— Әлбиттә, Стас ағай. Һеҙгә ҙур рәхмәт. Әлдә донъяла ҡайғыртыусан изге йөрәкле кешеләр бар.— Отҡор уҡыусы булып сыҡты. Стастың тактикаһын һәп иттереп үҙләштереп тә алған. Мөләйем генә йылмайҙы ла ҡыҙ урынынан торҙо.— Рәхмәт иҫкәртеүегеҙ өсөн. Маньяктар осраһа, урабыраҡ үтермен. Һеҙ мине ғәфү итегеҙ инде, бынан алыҫ түгел дуҫ ҡыҙым йәшәй, шуның янына инеп сығайым, тигәйнем. Һау булығыҙ.— Беҙ үксәләрендә тыҡ-тыҡ баҫып китеп барҙы.

Стас ғәҙәтенсә тәмәке көйрәтеп ултырып ҡалды. Өйрәнелгән еңеүсе кәйефе ниңәлер килмәне. Был ҡыҙыҡай ниҙелер һиҙенде, шикелле. Машинаға ултырмаҫ өсөн, әллә ниндәй дуҫ ҡыҙын уйлап сығара һалды. Хәҙер артынан барһа, иманы камил, автобусҡа ултырып өйөнә һыпыртасаҡ. Күрәһең, теге аңра баштарҙың һабағы онотмаҫлыҡ булған. Стас йәне көйөп ласлатҡансы ергә төкөрҙө. Туфта! Шул ауыҙ-мороно кипмәгән баланы ла ауыҙлыҡлай алма, имеш. Туҡта әле, ниңә урман ҡараусы тигәс, ҡып-ҡыҙыл булды? Бында ниҙер бар, теге эшкинмәгәндәрҙе артынан күҙәтергә ҡушырға кәрәк. Эшләп ашаһындар. Барыһы өсөн дә Стас уйларға тейеш, тауыҡ мейеләр. Эсенән генә белгән-белмәгән бөтә кешеләрҙе бергә ҡушып әрләй-әрләй, ул машинаһын ҡабыҙҙы.

## 43

Хәмитте Айгөлдөң бөтә нәҫел-нәсәбе белгәнлектән, ҡыҙҙы күҙәтеү тағы ла Миңлеғәлененең өлөшөнә төштө. Бер көн аҙапланды хәсрәт шымсы таныш йорт эргәһендә, ике көн буталды. Үс иткәндәй, теге ҡыҙ аҡтығы мәктәбенә барып ҡайта ла өй тауығы шикелле бата ла ҡуя. Дөрөҫ,

магазин тирәһенә сығып әйләнгеләй. Ләкин ундай сәйәхәттән генә ни фәтеүә. Эсенән генә бөтә донъяны, унда тыуған һәм тыуасаҡ йән эйәләренең береһен ҡалдырмай тетә генә Миңлегәле. Уның был ялҡынлы телмәрен тыңлау бәхетенә ирешһә, Стас иҫтән ауып йығылыр, унан өс көн тора алмай ятыр ине. Әммә ләкин Ҡара күҙлеккә был шатлыҡты кисереү минуттары насип булманы — өсөнсө көн тигәндә ҡыҙыҡай тәтәй генә кейенеп ҡайҙалыр китте. Үҙенең бөйөк шымсы икәнен онотоп, һикереп тора һалғайны Миңлегәле, ҡабат кире сүгергә мәжбүр булды — Айгөл бит уны белә, һис шикһеҙ таныясаҡ. Етмәһә, Стас апаруҡ иҫкәртте, йоҙроғон танау төбөндә уйнатып алыуҙан да баш тартманы. Тимәк, һағыраҡ булырға кәрәк.

Бер-ике квартал үткәнсе, ҡыҙҙан байтаҡ артта ҡалып барҙы. Айгөлдөң тирә-йүндәге кешеләргә тамсы ла иғтибар итмәүен күргәс, батырая төштө. Ҡыуып етеп уҙып та китә яҙғыланы, әммә ләкин Стастың елле йоҙроғо иҫенә төшөү менән, боронғо киноларҙа ғына була торған тиҙлектә арт яҡҡа выжт итеп ҡалды.

Айгөл аллеяға килеп еткәйне. Ләкин эскә үтмәне, кемделер иғтибар менән эҙләгән кеүек булды. Унан сәғәтенә күҙ һирпеп алғас, ситтәрәк торған промтауарҙар магазинына юл тотто. Теп-теүәл ун минут көттө уны Миңлегәле. Һаман да башына һыйҙыра алмай — шул магазинға кереп юкты бушҡа ауҙарыу өсөн биҙәнгәнһанғанмы икән ни? Туҡта, Стас ни тигәйне һуң — теге урмансы менән бергә күрһәң, хәбәр итерһең, ти ине бит. Ә нишләп был ҡыҙыҡай тота килеп уның менән осрашырға тейеш әле?.. Артына боролоп ҡарағас, ул телен тешләп өҙә яҙҙы. Шулай итеп, донъя йәмәғәтселеге бөйөк шымсының тир түгеп асҡан яңылығын ишетеүҙән саҡ мәхрүм булманы. Икенсе минутта Миңлегәленең арҡаһынан теүәл бер полк ҡырмыҫҡа йүгерешеп үтте — унан ун биш-егерме аҙым ғына арыраҡ үткәндә улар Хәмит менән урманда йортона барып сыҡҡан егет баҫып тора ине. Ҡайһылыр бер мәл ул Миңлегәлегә стенанан сыҡҡан... эйе, эйе, албаҫтыға оҡшаған һымаҡ тойолдо. Тирәяғына ике-өс тапҡыр төкөрөп алғас, теге кеше торған яҡҡа ҡарарға ла баҙмай, ағас артына боҫто.

Инде ни эшләргә? Миңлегәлелә Айгөл артынан тағылып йөрөү теләге тамсы ла ҡалмағайны. Нисек кенә иҫән-һау ысҡынырға был тирәнән? Үткәндә ошо албаҫты арҡаһында ҡабырғаны һананылар. Хәмите лә етерлек зәһәрен сәсте. Миңлегәле ағас олонона ышыҡланып ни үле, ни тере хәлдә йылдай оҙаҡ тойолған ваҡытты көс-хәл менән артынан төрткөләп тигәндәй үткәрҙе. Ошонда ғына

һуҙылып ятып теге донъяға олағырға иҫәбе юҡ түгел ине, әллә ҡыҙғаныҫҡа, әллә бәхеткә ҡаршы, юл ашаһында ҡыҙыҡай күренде. Йөрәге дөп-дөп итә Миңлеғәленең. Теге егет тә Айгөлдө күреп ҡалды, ҡаршыһына барып ниҙер әйтте. Ҡыҙ йораты уңайһыҙланған була, бит-һәттәре ҡыҙарып, башы эйелеп китте. Урман эсендә әле Хәмитте, әле Миңлеғәлене теле менән өтөп алып барған бала тип һис кем әйтмәҫ.

Улар алыҫлашҡан һайын, Миңлеғәлегә йән инә барҙы. Биш-ун минут самаһы ваҡыт үтеүгә, әле генә дер-дер ҡалтырап ағас олоно артына боҫҡан әҙәм урынында әүәлге кеше баҫып тора ине. Тиҙлек арттырып бергилке торғандан һуң, күҙ асып йомғансы унынһы ла юҡҡа сыҡты.

44

Айвар ҡыҙҙан ғәжәпләнгән ҡарашын айыра алмай. Ни булған был бала менән? Илгәҙәкләнеп юҡ-барға көлөп йөрөгән үҫмер үҙгәргән дә ҡуйған. Әллә килешле кейгән кейемдәре шундай тәьҫир ҡалдыра, әллә үҙ-үҙен тотошо — тиҙ генә билдәләрлек түгел.

Айгөл егетте күреү менән Стас хаҡында һөйләргә уйлағайны. Ләкин...

— Айвар ағай!

— Ни булды, һылыу?

Ҡыҙыҡай магазин тәҙрәһенең көҙгөләй ялтырап торған витринаһына ҡараған да иҫе киткән. Айвар уның нимәгә аптырағанын бер аҙ яҡыныраҡ килгәс кенә төшөндө — үткән-һүткән кешеләрҙең сағылыштары күләгәләй эҙ ҡалдырып китә. Ана Айгөл ҡарап тора, ә янында — егет. Эйе, ып-ысын. Бер нисә секунд ваҡыт эсендә Айварҙың күҙ алдына ҡыҙ менән булған шок күренеше килеп баҫты. Тағы ла бер-бер хәл була күрмәһен! Юҡ, ҡыҙ тыныс ине. Ғәҙәти булмаған хәлдәргә ул да өйрәнеп бара, күрәһең. Тик күҙҙәре... күҙҙәре ялбарып ҡарайҙар. «Интектермә мине, һөйлә булдыра алған тиклемен» тигән фекерҙе уҡырға мөмкин уларҙан.

Айвар ҡыҙҙы етәкләп алды. Бер һүҙ өндәшмәй, ситкәрәк киттеләр. Аллеяға ҡабат инеп, буш эскәмйәгә урынлашҡас та, һүҙ ялғанманы. Ҡыҙға ниҙер әйтергә тейешлеген аңлай Айвар, ләкин ниҙән башларға белә алмай.

— Айгөл!

— Эйе.— Ҡыҙыҡай һорау тулы ҡарашын егеткә төбәне. Бынан ярты сәғәт самаһы элек тура ҡарай алмай ыҙа-

лана ине бит. Күрәһең, күҙгә күренеп өлкәнәйә был бала.— Эйе, мин тыңлайым.

— Көҙгөң бармы янында?

Айгөл өндәшмәне. Кескәй сумкаһын етеҙ генә аҡтарғыланы һәм унан түңәрәк кескәй көҙгө алып Айварға һуҙҙы.

— Күрәһеңме мине?

Ышанмайыраҡ төбәлде ҡыҙыҡай. Бер егеткә, бер көҙгөгә алмаш-тилмәш ҡарап байтаҡ ултырҙы. Эйе, унан һәр кешенеке кеүек үк, Айварҙың да сағылышы күренә ине. Керпек бөртөгөнә тиклем.

— Аңламайым...

— Ярар, Айгөл. Һиңә әйтергә тура килә. Ләкин беҙҙең арала булған килешеүҙе онотма. Мин һиңә ышанам.

— Һеҙгә һүҙ биргәнмен, Айвар ағай. Ниндәй генә хәлгә юлыҡһам да, вәғәҙәмде боҙорға йыйынмайым.

— Бына шул шул, һылыу. Һине бәләгә тарытаһы килмәй. Ләкин нишләйһең,— егет ҡулдарын йәйҙе,— һөйләргә тура килә. Билдәһеҙлек — үҙе үк ғазап. Мин һинән бер нәмәне лә йәшермәйәсәкмен. Нисек бар, шулай тасуирлап бирәм.— Бер аҙ тынып ултырғас, Айгөлдөң күҙҙәренә төбәлде.— Бынан биш йыл элек мин Өфөлә йәшәй инем. Аспирантурала уҡып йөрөйөм, күңел тулы дәрт, йөрәктә — мөхәббәт. Әйтерһең дә, донъя минең өсөн генә яратылған. Өйләнергә йыйына инем. Бер мәл командировкаға барырға тура килде. Күп тә түгел, аҙна самаһы ғына булдым. Ләкин ошо аҙна минең әкиәттәге шикелле донъямды пыран-зыран килтерҙе лә инде. Дөйөм алғанда, ҡайтҡанымса Өфөлә миңә ике тамсы кеүек оҡшаш игеҙәгем бөтә булған тормошомдо тартып алғайны. Ике кеше бер генә ғүмергә һыймай, айырылып китеү мөмкин түгел.— Егет моңһоу ғына йылмайып ҡуйҙы.— Бына шул минуттан башланды ла инде башҡа һыймаçлыҡ хәлдәр. Бер кемгә лә серҙе сисмәнем, бәлки, дөрөç эшләмәгәнмендер. Дуçыма булһа ла һөйләргә ине. Икәүләп, бәлки, юлын табыр инек. Дөрөç, әүлиә кеүек изге әҙәмгә генә мөрәжәғәт иттем итеүен. Ул миңә ҡотолоу юлын өйрәтте. Ләкин ошоға тиклемге ғүмер юлыма кәртә ҡуйып китергә мәжбүр булдым.— Айвар оҙаҡ ваҡыт өндәшмәй ултырҙы. Ҡыҙыҡай күҙҙәрен ҙур итеп асып егеткә төбәлгән. Һоҡланыу, ғәжәпләнеү, ҡурҡыу бөтәһе бергә буталған ҡарашы мөлдөрәп кенә тора.— Шул. Бер һүҙ менән әйткәндә, мин икегә айырылдым. Береһе реаль, бына һинең ҡаршыңда ултыра. Икенсеһе уй-хыял, күңелдән яралған күсермә, тиһеңме, тағы ла ниндәйҙер башҡа исем уйлап сығараһыңмы — уныһы һинең эш.

— Тимәк, көҙгөләге... — Айгөл фекерен нисек итеп аңлатырға белә алмай ыҙаланды. Айвар, әлбиттә, уның ни әйтергә теләгәнен төшөнгәйне.

— Дөрөҫ, һылыу. Көҙгөлә сағылған бына мин булам. Сағылмағаны шул уҡ мин, ләкин нисек әйтергә... — Ҡайһылай билдәләмә бирергә егет хатта үҙе лә белмәне. Ярай ҙа, ҡыҙ зирәк.

— Аңланым, Айвар ағай. Әйтегеҙ әле, төндәрен минең бүлмәлә хасил булғаны ул... теге... һеҙҙең игеҙәкме?

— Эйе, Айгөл.

Бер аҙ өндәшмәй ултырҙылар.

— Айвар ағай!

— Әйт, һеңлем.

— Һеҙ хәҙер ни эшләргә уйлайһығыҙ?

— Дөрөҫ һорау бирәһең, Айгөл. Ләкин уға яуап табыуҙары... Һәр бер кеше кеүек, бер нәмә лә булмағандай йәшәп булмаясаҡ. Был бер. Икенсенән, әлеге игеҙәк иҫ китерлек һәләттәргә эйә. Бәлки, кешелеккә тап уның ярҙамы кәрәктер ҙә... — Айвар, үҙ алдына һөйләнгәндәй, бер нөктәгә төбәлеп ултыра. Ҡыҙыҡай был мәл ни тип әйтергә белә алмай ине. Йыуатырғамы? Урынһыҙ. Бындай ир-егеттәр йәлләүгә мохтаж түгелдәр. Ах-ух килеп һоҡланыу мәғәнәһеҙлек кенә. Ни тиергә? Ниҙәр ҡылып ҡына ошо һомғол буйлы һылыу егеттең тамағына ултырған төйөрҙө йомшартырға? Айгөлдөң ҡулдары һаҡ ҡына егеттең сәстәренә ҡағылды. Егет күтәрелеп ҡараны. «Мин һине аңлайым», ти ине ҡыҙҙың күҙҙәре.

— Әйтегеҙсе, Айвар ағай.— Бер мәлгә генә икеләнеп ҡалды Айгөл.— Әйтегеҙсе, ни эшләп һеҙ элек йәшәлгән ғүмергә кәртә ҡуйылды, тинегеҙ. Ни... һеҙҙең игеҙәк... хәҙер башҡасамы ни?

— Ә, эйе, ундай һорау бирергә хаҡың бар, Айгөл. Бынан биш йыл элек ул бойондороҡһоҙ ине. Күҙ алдыңа килтер: мин эш урыныма барам, ә ул күптән тиргә батып ниҙелер хәл итеп ятҡан була. Һөйгәнем янына юл тотам, ә ул... Бер һүҙ менән әйткәндә, өҫтәл өҫтөндә сәскәләр көтә. Мин килтергән сәскәләр... Аңлайһыңмы инде ниндәйерәк тормош булғанын.— Егет күтәрелеп ҡараны. Күҙҙәренең төпкөлөндә ниндәйҙер аңлатып булғыһыҙ моңһағыш сағылып киткән кеүек тойолдо ҡыҙға.— Юҡҡа ғына урман төпкөлөндә йәшәмәйем мин, һылыу. Башҡаса юл юҡ, төшөнәһеңме? Ә игеҙәккә килгәндә, ул тиклем үк борсолма. Хәҙерге мәлдә икебеҙ бер бөтөн. Ул миңә тулыһынса буйһонған. Ғәҙәти юл менән башҡарып булмаған осраҡтарҙа уға мөрәжәғәт итәм.

— Тағы бер генә һорау бирергә мөмкинме?

— Әлбиттә, рәхим ит.

Ҡыҙ ҡыйынһына ине. Шулай ҙа ҡыйыулығын йыйып, һорарға баҙнат итте.

— Ни... һеҙҙең игеҙәк сәйәхәттә булғанда... үҙегеҙ... бынә реаль булған... күҙгөлә сағылған кәүҙәгеҙ ни эшләй? — Әйтеп бөткәс, ялт итеп егеткә боролоп ҡараны. Тегеһенең көлкөгә күтәреүенән ҡурҡтымы, әллә шуны ла аңламаныңмы, тип һорарынан шыртланымы, ләкин әйтеп бөтөргәнсе ҡып-ҡыҙыл төҫкә инде.

— Ә-ә, һине бына ни борсой икән. Эх, Айгөл, Айгөл, минең йомшаҡ ерем тап ошо ла инде. Игеҙәк сәйәхәттә булғанда, һәр минут минең ғүмер өсөн һуңғыһы булыуы мөмкин. Йәғни кәүҙә ятҡан бүлмәгә яңылыш ҡына берәйһе инде, ти. Үҙе лә белмәйенсә генә... — Айвар әйтеп бөтөрмәне. Күрәһең, был хаҡта һөйләү уның үҙенә лә бигүк күңелленән түгел ине. Ҡапыл урынынан торҙо.— Ярай, сибәрем, ваҡыт һуң булып бара.

Айгөл аңланы. Тимәк, егет кәрәк һанағанын әйтте, башҡаса төпсөнөү әҙәпһеҙлек кенә түгел, бәғерһеҙлек тә. Әле генә ишеткәндәрен башына һыйҙыра алмай, үҙенең ниндәй донъяла йәшәүен онотоп, эскәмйәлә ултыра бирҙе. Егеттең һуңғы һүҙҙәрен ишеткәс кенә, уға ла еңел булмауын төшөндө.

— Ғәфү итегеҙ, Айвар ағай. Бәлки, миңә төпсөнмәҫкә кәрәк булғандыр.

— Ғәфү үтенмә, һылыу, кәрәкмәй. Ҡасан да булһа барыбер һиңә һөйләргә тейеш инем, шул ғына.

Ҡыҙҙың йорто яғына йүнәлделәр. Әле генә егет сискән сер уларҙы ни тиклем яҡынайтҡанын Айгөл менән Айвар үҙҙәре генә беләләр ине.

## 45

Мәктәп эсе шау-гөр килеп тора. Бигерәк тә актовый зал яғында йәнлелек. Коридорҙа төрлө төҫтәге япраҡтарҙан эшләнгән күҙҙең яуын алырлыҡ букеттар байрам алдынан була торған тантаналы кәйефте көсәйтә төшә.

Өҫтән, икенсе ҡаттан, бер төркөм ҡыҙҙарҙың төшөп килгәне күренде. Былар һуңғы йылдарын ошо стеналар эсендә үткәреүсе ун беренсе класс уҡыусылары ине.

— Ой, ҡыҙҙар, беҙҙең сюрприз әҙер түгел. Нишләйбеҙ?

— Иҫең китмәй торһон. Ана, Айгөл һис тә ҡайғырмай. 11 «В»нан кәм булмаҫ, тип кенә ебәрә. Әйт әле, бер кем белмәгән ниндәй номер һуң ул? — Өлтөк һары сәсле Зилә

Айгөлдөң быуынына төшә кисәнән бирле. Нисек кенә аңлатһын инде ул?

— Ну, Айгөл, зинһар!

— Нәмәне йәшергән булаһың инде.

— Беҙ ҙә белмәгәс, үҙебеҙҙең класс та инде.

Айгөл ни тиергә лә белмәне. Йә инде, шулай булыры асыҡ ине бит. Йүләрләнеп, сисергә мөмкин булмаған серҙе ниңә мәктәпкә килтереп индерергә? Хәҙер тап яуабын, сигенергә юл бикләнгән...

— Ҡыҙҙар, килеп сығырын-сыҡмаҫын белмәйем бит мин. Шуға алдан әйтеүе ауыр. Әгәр ҙә былай талап итһәгеҙ, бер нәмә лә эшләп булмаясаҡ. Зинһар, төпсөнмәгеҙ, үтенәм...

Ҡыҙҙар шымды. Әле генә уңайы сыҡҡанда төбөнә төшмәйсә туҡтамаҫтай булып шаулашҡан үҫмерҙәр Айгөлдөң йөҙөнә ҡарап иҫтәре китте — саҡ иламай, кемдәлер ярлыҡауҙы һорай, тиерһең.

— Әгәр ҙә вәғәҙә бирһәгеҙ генә барып сығасаҡ, былай — юҡ.

Ни әйтерҙәр икән тип, бер аҙ көтөп торҙо. Иң беренсе Миләүшә телгә килде.

— Йә, ярар, ҡыҙҙар, бимазаламағыҙ. Күреп тораһығыҙ бит. Әйтергә теләмәй икән, тимәк, шулай кәрәк. Етмәһә, теге фокусниктың танауын әҙерәк баҫырға ваҡыт, бигерәк маһая.

Ғәжәпкә, уны Зилә лә йөпләне.

— Ысынлап та, ниңә улай бәйләнәбеҙ әле Айгөлгә. Әйтмәй икән, тимәк, юғары сортлы буласаҡ.

— Ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ малайҙарҙы ҡыҙыҡ итәбеҙ. Был хаҡта бер нәмә лә өндәшмәйбеҙ. Баштары буталһын әле. Үткәндә беҙҙән йәшергән булалар ине.

— О'кей!

— Берегеҙҙән бер ауыҙ һүҙ сыҡмаһын!

— Килештек!

Әле генә килеп тыуған күңелһеҙлек шулай итеп кинәт кенә йәнлелек менән алышынды. Айгөл ҡыҙҙарға берәмберәм ҡарап сыҡты. Аңланылар, тимәк. Иңбашынан ауыр бер йөк төшкәндәй булды.

Ҡалған ваҡытты гүйә өн менән төш араһында үткәрҙе ул. Тирә-яғында шау-шыу, музыка. Нимәгәлер көләләр, кемдәрҙер йырлай-бейей. Былар барыһы, әйтерһең дә, Айгөлдән күп саҡрымдар ситтә үтә — береһенә лә иғтибарын туплай алмай.

— Айгөл! Айгөл тим! — Эргәһендә Миләүшә баҫып тора икән.— Баянан бирле өндәшәм. Йә, нисек, буламы? Оҙаҡламай беҙҙең сығыш. Күрәһеңме теге ҡупыҡты?

Әле генә ошо залға килеп ингәндәй, ҡыҙыҡай тирә-яғына күҙ йүгертте. Сәхнәлә, ысынлап та, 11 «В»-ның маяғы сығыш яһай ине.

— Ой, Миләүшә! Мин хәҙер! — Йүгереп сығып киткән Айгөл артынан башын сайҡап тороп ҡалды класташы. Был ҡыҙ менән ни булғанын аңлап бөтөрлөк түгел.

Үҙҙәренең кабинетына йүгереп килеп ингән Айгөлдә бары бер теләк ине — кеше генә була күрмәһен. Көткәне килде. Хәйер, аҫта шундай ярыш ҡыҙғанда, кем ултырһын инде буш бүлмәлә.

Йыш-йыш һулыш алған ҡыҙ тыныслана төшкәс, иғтибар менән тынлыҡты тыңлай башланы. Уттар һүндерелгән. Бүлмә эсендә стенаға һөйәлгән ҡыҙ һәм... тынлыҡ... тынлыҡ. Шылт иткән тауыш ишетелмәй. Юҡ, яңылышты. Һул яҡта ниҙер ҡыбырланы, тик ҡарарға ҡурҡыта. Әллә ниңә өйрәнә алмай Айгөл. Әкрен генә ҡыҙға яҡыная башланы. Бына ике аҙым, өс аҙым яһаны. Инде ҡыҙҙың алдында баҫып тора. Һомғол ир кешенең һыны үтә ҡала уттары ялт-йолт итә. Юҡ, сибек нервылылар өсөн түгел был күренеш.

— Килдегеҙме... Айвар ағай?

— Эйе, һылыу. Вәғәҙә иткәс, үтәргә кәрәк. Шунан, низән башлайбыҙ?

— Минең һис кенә баш эшләмәй. Ысынбарлыҡмы-түгелме икәнен айырырлыҡ түгел. Әйтерһең дә, томан эсендә йөҙәм.— Шыбырлап ҡына һөйләй ҡыҙ, гүйә алдындағы ҡаҙ ҡауырыйының осоп китеүенән ҡурҡа.

— Һеҙҙең сығыш, һылыу.

— Ой, Айвар ағай, нишләргә?

— Бар, йүгер. Иптәштәрең беләләрҙер бит?

— Эйе, кәрәклеләрен иҫкәрткәнмен.

— Улайһа, тыныс бул.

Айгөл йүгереп актовый залға килеп ингәндә, унда ни барғанын тиҙ генә аңларлыҡ түгел ине. Залдағылар бер ергә өйөлөшкән юғары класс уҡыусыларына ҡарай. Тегеләре аптырашҡан ҡиәфәттә баҫып тора. Айгөл килеп ингәс, һораулы ҡараштарын уға йүнәлттеләр. Ҡыҙыҡай ҡул иҙәне. Ике малай сәхнәгә йүнәлде.

Үтеп барышлай ғына залға ныҡлап иғтибар итте Айгөл. Шығырым тулы, имеш. Ата-әсәләр ҙә байтаҡ килгән. Йәл, уныҡылар юҡ. Бер уйлаһаң, хатта был яҡшыға ла кеүек. Байрамса кейенгән уртаса йәштәрҙәге халыҡ араһынан кинәт таныш йөҙ күренгән кеүек булды. Ҡайҙа күргәне бар ине һуң уны? Иҫе китеп сәхнәгә төбәлгән. Бына был яҡҡа боролдо, һәм ҡыҙыҡайҙың күҙ алдары ҡараңғыланып китте — был бит Хәмиттең әшнәһе! Урманға алып

барып ҡалдырып киткән машина хужаһы! Теге лә ҡыҙҙы күрҙе, шикелле, башын ситкә борҙо. Шулай ҙа күҙ ҡырыйы менән күҙәтә — тимәк, таныны! Ах! Кинәт мейеһен ҡыйып үткән уйҙан ҡыҙыҡай сәхнәгә ни өсөн менеп барғанын онота яҙҙы — был бит класташы Кәбирҙең атаһы! Ысынлап, бигерәк оҡшағандар икән. Шуға күрә элек тә күргән һымаҡ тойолған да инде. Бына донъяның тығыҙлығы!

Сәхнәгә менеп еткәндәр ине. Илгиз менән Вадим икеһе ике яҡтан Айгөлгә ымлай. Йәнәһе, нимәгә иҫең китте, күҙҙе асалаҡ-йомалаҡ итеп торор өсөн менмәгәнбеҙҙер бит. Ярай ҙа зирәктәр, тәнәфес ваҡытында бер генә күрһәткәйне, онотмағандар. Спорт формаһы кейгән Айгөл урталарына килеп баҫҡайны, икеһе ике яҡлап ҡулынан тотто. Ҡалғаны күҙ асып йомған арала булды. Егеттәр үҙҙәре лә аптырап ҡалды, шикелле, мәгәр һыр бирмәнеләр — ҡыҙыҡай ҡулдары менән уларҙың иңбашына таянып баштүбән тора ине. Шунан кинәт кенә әйләнеп аяҡтары менән баҫты. Зал ах итеп ҡалды. Киләһе мәл тағы ла көтөлмәгәнсәрәк ине — һыңар ҡулы менән Илгиздең башына таянған килеш күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә әйләнеп алды.

Айгөл үҙенең ауырлығын һиҙмәй. Ғөмүмән, ни нәмә ҡылғанын да аңламай — кәүҙәһе бәпкә мамығы шикелле һауала өйөрөлә. Әле билен, әле аяғын күҙгә күренмәҫ ҡулдарҙың һаҡлыҡ менән генә тотҡанын һиҙә. Ҡолаҡ төптәрендә — наҙлы бышылдау. Һис кем ишетмәй уны. Бары уға, Айгөлгә, төбәлгән был сихри һүҙҙәр.

«Айгөл! Үҙеңдең ниндәй сибәр икәнлегеңде белмәйһеңдер. Һин аҡҡош, минең генә аҡҡошом. Даръяларға бат, упҡындарға төш, мин һине ҡотҡарасаҡмын. Буй еткеһеҙ йыһандарға аш — табасаҡмын. Сөнки һин минең йондоҙом...»

Әллә үҙе уйлап сығарҙы, әллә Айвар әйтте тылсымлы һүҙҙәрҙе — аңларлыҡ түгел. Ләкин күңеленә бик-бик рәхәт. Ҡыҙыҡай тағы ниҙер эшләне, унан кинәт аңы яҡтырып киткән кеүек булды. Ике класташының иңбаштарына аяҡтары менән баҫҡан килеш бер аҙ тынып торҙо. Зал шып-шым ине. Унан спортсыларға ла ауыр бирелгән трюк — өс тапҡыр сальто әйләнеп, сәхнәгә килеп төштө. Кинәт шау-шыу ҡупты. Әллә аптыранылар, әллә һоҡландылар, мәгәр бөтәһе бер юлы үҙҙәренең фекерен белдерергә ашыҡты.

— Ну, Айгөл, ну, молодец!

— Ҡасан өйрәндең һуң?

— Әйтмәй ҙә йөрөгән бит әле.

— Гимнастика секцияһынан хәҙер ғәрләнеп ҡасып бөтәләр инде, ха-ха!

— Кил, яратайым үҙеңде бер шуның өсөн.

Янындағы шау-шыуҙан әҙерәк арынғас, Айгөл баяғы урынға күҙ ташланы. Ултырғыс буш ине.

## 46

Ах-ух килеп фатирына ҡайтып йығылғас, Миңлеғәле байтаҡ ваҡыт диванда аунап ятты. Ҡатыны икенсе сменала, ни булды тип һағыҙаҡ шикелле йәбешер тип, ҡурҡаһы түгел. Шулай ҙа күңелдә әллә ниндәй шом. Бер нәмә лә булманы кеүек, бер ҡараһаң. Кем уйлаған инде анау ҡыҙҙың малайы менән бер класта уҡығанын. Әгәр белһә, бөгөн мәктәпкә ике аяғының береһен баҫмаҫ ине. Стас юҡҡа ғына күҙәтергә ҡушмағандыр. Бер-бер хәл була ҡалһа, Миңлеғәлегә килеп төртөлмәҫтәр тип, кем әйтә ала. Унан китте баш, ҡалды муйын һерәйеп.

Ғәжәпләнмәҫлек тә түгел — тәүҙә башҡалар шикелле иҫе китеп ауыҙын асып ҡыҙҙың сығышын ҡарап ултырғайны. Ҡайһылыр мәлдә ике малайҙың ҡул осонда орсоҡ кеүек өйөрөлгән Айгөл янында еңелсә томан күҙенә салынғандай булды. Назаровтың фатирында теге ҡағыҙҙар танау төбөнән осҡан мәлде бик хәтерләтте был. Электән ҡыйыулығы менән бигүк алдырмаған Миңлеғәленең ҡото китте бот буйына. Сихырсымы әллә был ҡыҙ, алла һаҡлаһын! Әллә, тфү-тфү, теге албаҫты менән алыш-биреше бармы? Булыр, булыр. Күрҙе бит инде залдағы халыҡтың асҡан ауыҙҙарын яба алмай ултырғандарын. Ҡыҙҙың ундай һәләтен элегерәк белһәләр, китер ине ти иҫтәре.

Был тиклем дә тәрән йөкмәткеле фәлсәфәүи уйҙарының осона сығырға саҡ өлгөрҙө, Миңлеғәле ултырған ултырғыс бушап та ҡуйҙы. Ай күрҙе, ҡояш алды. Мәгәр үҙендәге был яҡтылыҡ тиҙлегенең тап ошо ҡыҙ арҡаһында ҡапҡан мажаралар һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килеүен уйларға ваҡыты булманы хатта.

— Атай! Һин ҡайҙа?

Малайы ҡайтҡан, имеш. Оғлан ата кешенең утты ла яҡтыртмай, улай ғына ла түгел, бәтинкә-һәтинкәләре менән, өҫ-башын сисмәй диванда туңҡайып ятыуына бик аптыраған ҡиәфәттә ҡарап торҙо бер аҙ. Быңдай күренеште нисек тәкрарларға тип, баш ватты, буғай. Ләкин ғәзиз башы ошбу ҡатмарлы уйҙарҙан ватылып уҡ бөтмәне — ата кеше һүҙ ҡатты.

— Кәбир!

— Нимә булды һинең менән?

Миңлегәле тороп ултырҙы. Юғиһә малайының ҡараштарында «Иҫерекме, әллә иҫәрләнгәнме ғәзиз атаҡайым?» тигән һөйләм һәлберәп тора ине.

— Ултыр әле.— Оғлан диванға артын терәне. Миңлегәле ҡайҙан башларға белә алмай бергилке интегеп торғас, күҙҙәре бәтинкәләренә барып төртөлдө. Ауыҙҙан һүҙ сыҡмағанда тыуған бушлыҡты тултырырға етте был аҡыллы фекер — берәм-һәрәм ҡайҙа өҫтәлгә, ҡайҙа ултырғыстарға кейем-һалым оса башланы. Уларға ҡарап илһамланып китте шикелле Миңлегәле.— Теге ҡыҙҙы әйтәм, һеҙҙең класта уҡыймы?

Кәбир баш ҡаҡты. Шул уҡ мәл битенә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе — Айгөлдө оҡшатып йөрөй ине ул. Ләкин асыуға тейгәне шул — тамсы ғына ла иғтибар итмәй, исмаһам. Төҫкә-башҡа әллә ни алдырмаған да, ти. Булһа һуң! Ир-атты тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап ҡына баһалай башлаһаң! Шағир булһа, йөрәгем ялҡынлы, шуны булһа ла һурып бирәм, тиер ине. Мәгәр ғәҙәти кеше булыуы ҡотҡарҙы. Хәйер, улай тип әтәсләнһәләр ҙә, шағирҙарҙың һөйгәндәренә йөрәк бүләк иткәндәрен әлегә тиклем ишеткәне юҡ.

— Эйе, беҙҙең менән.

— Ниндәйерәк ҡыҙ ул Айгөл тигәнегеҙ?

— Ниндәй тип. Ғәп-ғәҙәти инде. Бөгөнгө сығышы ғына аптыратты. Гимнастика менән шөғөлләнмәй торғайны, ҡасан өйрәнгәндер.

— Бына мин һинән ошо хаҡта һорарға теләгәйнем.— Миңлегәле һөйләмен нисек әүәләргә белә алмай ыҙаланды. Был малайға барыһын да һөйләп булмай бит инде. Стас нәҫел-нәсәбеңде йәһәт иҫеңә төшөрөр.— Ә һин ул ҡыҙҙың һуңғы ваҡытта үҙгәреүен һиҙмәнеңме тим? Берике ай эсендә?

— Һуңғы ваҡытта? Ниңә, һин уны белә инеңме ни? — Кәбирҙең иҫе китте. Ләкин уның йөҙөндәге был матур күренеш саҡ фажиғәгә килтермәне, йәғни мәҫәлән Миңлегәле телен тешләп өҙә яҙҙы. Ах, иҫәр, үҙе Стасты уйлаған була, шул уҡ ваҡытта ауанланып малайына ләпелдәй. Ысҡынған хәбәр ысҡынған, баш менән стенаны ватып булмай.

— Беләм дә, осраҡлы ғына,— тигән булды.— Бөгөнгө сығышында кем ярҙам иткән һуң, улай булғас?

— Әлләсе. Кем ярҙам итһен, үҙелер.

Миңлегәлегә кинәт дыуамал фекер килде — әгәр ҙә малай ярҙамында асыҡлап ҡараһаң? Ни тиһәң дә, бер класта уҡыйҙар бит.

— Бирерәк ултыр әле, Кәбир.— Тегеһе атаҡайым бөгөн ысынлап та сәйер, аҙағы хәйерлегә булһын, тип уйлап та өлгөрмәне, ата кеше бер ҡулын улының иңбашына һалды. Бик сентименталь күренеш хасил ине.— Ул ҡыҙ берәй егет менән дуҫлашмаймы?

— Юҡ, күргәнем булманы.

— Бына белеп ҡуй: үткәндә мин уны паркта бер әҙәм менән осраттым. Бик ҡурҡыныс кеше, сихырсымы үҙе.— Кәбирҙең күҙҙәре әкренләп маңлайына менде, елкәгә тәгәрәп төшөргәме-юҡмы тип, бер аҙ уйға батып торғас, түбәлә ҡалыуҙы мәслихәткә һананы.— Һин ул ҡыҙҙан ситләтеп кенә һора әле, ысынмы икән. Ну, теге кешенең ен алыштырған әҙәм булыуы.

Кәбир ыҡ-мыҡ иткәс, көрмәләнә торғас, тәки бер һөйләмде ауыҙ-мороно тирәһенән төрткөләп сығарҙы.

— Һуң... һуң... Ул кешенең сихырсы икәнен нисек беләһең? Күрҙеңме әллә?

— Күрҙем шул. Тик һаман да икеләнәм — шул булдымы-юҡмы. Теге ҡыҙ һин һорағанға аптырап ҡалһа, ул булмаҫ. Әгәр ҙә... — Әйтеп бөтөрмәне. Ысынға сыҡһа, ни күрер ғәзиз башҡайым тигән матур фекер ҡунғайны пеләшенең уртаһына ғына.

— Һөйлә әле, нисегерәк булды! — һағыҙаҡ шикелле йәбешә инде. Нисек ысҡынырға тип ҡаты уйға батып торғас бер аҙ, үҙендәге хәбәр тоҡсайының асылған ауыҙын йәнә лә киңәйтә төштө Миңлеғәле.

— Тик, Кәбир, ҡолағыңа киртеп ҡуй — артығын ысҡындырма, ишетһен ҡолағың. Ул албаҫты стена үтә йөрөй, шикелле, миңә шулай тойолдо.

— Кит, ысынлапмы? — Күҙҙәре янып китте оғландың. Әйтерһең дә, атаһы уға әкиәт һөйләп ултыра.

Асыуланды ла китте Миңлеғәле.

— Тағы ҡарҡылдап йөрө мәктәп буйлап. Иҫкәртәм, түнле менән барып бөтмәҫ был. Ҡыҙҙың үҙенә генә әйт, бер кем ишетмәһен. Уға был хәбәрҙең нисек тәьҫир итеүен белеү генә кәрәк миңә, туң баш! — Хәс тә Хәмит шикелле һиптерә башланы. Бөйөк дуҫлыҡ үҙенең тәүге осҡәләрен бөрө эсенән генә йәлп иттереп күрһәтеп алды.

— Ул... ул һиңә ниңә кәрәк һуң?

— Ә, былай ғына... Бер эш бар.

Кәбир уйға ҡалғайны. Атаһы уртаса кеше ине уның. Күҙгә-башҡа әллә ни бәрелеп бармай, яманлыҡ ҡылмай, изгелек эшләргә атлығып торғандарҙан түгел. Ҡайһы саҡ йәне көйөп ҡуя. Атай булғас, абруй булһын, ҡулынан эш килһен. Ә бының ни дәрәжә, ни мөлкәт. Шуға ана Айгөл кеүектәр күҙенә лә элмәй, исмаһам, Кәбирҙе.

Түрә балаһы булһа, белер ине үҙен нисек тоторға. Юҡ шул, яҙмаған. Тик бына ата кешенең әле һөйләгән хәбәре генә аптыраштa ҡалдырҙы. Ни көнө төшкәндер класташына, ғәжәпләнмәҫлек түгел. Ярар, бата, һорағандан ғына теле ҡоромаҫ. Етмәһә, һис кемгә әйтмә, ти бит әле. Быныһы ла сер йомғағы. Үҙенә иғтибар итмәгән өсөн, теге тәтәй ҡыҙҙың тыныслығын юйғанда ла бик хуп. Белһен кемдең кем икәнлеген, бәлки, иҫәпләшә башлар.

Иртәгә ял көнө булғанға үкенә-үкенә, Кәбир йоҡлап китте.

## 47

Байтаҡтан бирле урман ҡосағында булғаны юҡ ине Айварҙың. Дөрөҫ, эше буйынса арлы-бирле сығып әйләнгеләй. Ләкин былай ғына, бөтә тормош мәшәҡәттәрен, ығы-зығыларҙы онотоп... Ғәжәп, тып-тын урман төпкөлө лә шул тиклем һағындырыр икән. Ылыҫлы саф һауаны егет күкрәген тултырғансы һуланы, әле генә йоҡонан торғандай, мускулдарын шатырлатҡансы кирелде.

«Ни булған был әҙәм менән?» Ҡоласын кирер ултырған ҡарағай күршеһенә өндәшә булыр.

«Күрмәйһеңме ни? Тормошҡа кинәнә...»

«Эх, рәхәт кешеләргә. Ҡыш килә тип, беҙҙең һымаҡ бойоҡмайҙар. Нисек була икән йыл әйләнәһенә йәшәү? Беләһе ине...»

Үтеп барышлай ҡолағына сала-сарпы ишетелеп ҡалған ағастар бышылдауы Айварҙың йөрәген уйып инде. Ысынлап та, бик моңһоу икән көҙгө урман. Йыл әйләнәһенә йәшәү... Көн дә бер төрлө ҡабатланып торған тормошто йәшәү тип атап буламы икән. Тәбиғәт ҡыш көнө ағастарҙың һулышын туҡтатып, бәлки дөрөҫ эшләйҙер ҙә. Белмәҫһең... Белмәҫһең...

Айвар ары атланы. Имән төбөндә ниҙер йыйып булашҡан тейен, кешене күреп, йылт итеп өҫкә менеп китте. «Тейә генә күрмәһен!» Үҙенең күҙҙәре мөлдөрәп кенә тора. Әллә ғүмере, әллә имән аҫтында тәгәрәшеп ятҡан сәтләүектәр өсөн хафалана. Бәлки, икеһенең дә ҡәҙере бер самалыраҡтыр?

Юҡ, тәбиғәт кешене белеп урман тауышына һағыраҫу иткән. Үҙенең йыртҡыс икәнен, бар йәшеллек өсөн туҡмаҡ булыуын белһә, бер көн дә йәшәйһе килмәҫ ине. Әле осраған бер йәнлектең, һулып барған һәр үләндең тауышын тыңлап килә торғас, ҡолаҡ төбөндә «Тейә

генә күрмәһен!» тигән ыңғырашыу аҙым һайын ишетелә һымаҡ тойола башланы.

Көҙҙөң һуңғы биҙәктәрен күреп йөрөп әйләнергә тип башланған сәйәхәт, шулай итеп, барып сыҡманы. Бәлки, Айвар үҙе саҡ ҡына башҡасараҡтыр хәҙер, бәлки, ғөмүмән, әҙәм заты йүнһеҙерәк яҡҡа үҙгәрәлер. Бойоҡ уйҙарының осона сыға алмай килгәндә, ҡайһылыр бер мәл егеттең ҡолағы мотор гөрөлдәүен тотоп алған һымаҡ булды. Ул әле алыҫта, моғайын, шоссе юлынан урманға саҡ борола ғына башлағандыр. Барыбер бер сәғәттән, йә иһә ярты сәғәттән Айвар ул машинаны күрәсәк. Әлегә иһә киләсәкте күҙаллау һәләте буласаҡ осрашыуҙы реаль тауыш иттереп ҡолаҡ ярыларына килтереп еткерҙе. Ҡайһылай булһа ла, сәйәхәт тамам ине. Урмансы бынан ике саҡрымдай алыҫлыҡта ҡалған йортона табан юл тотто.

Һиҙенеүе егетте алдаманы. Тау башынан төшөп килешләй үк, ағас ышығынараҡ ҡуйылған еңел машинаны күреп ҡалды. Эйәләре иһә ситтәрәк торған өҫтәл өҫтөнә табын теҙгәндәр. Ирәүәнләнеп, бар донъяға хужа шикелле, әкрен генә гәп һаталар. Табын түрендә йыуан ҡорһаҡлы ҡыйбатлы француз шарабы. Уны тирәләп теҙелгән тәғәм-ризыҡтар ҙа эсемлегенә торошло.

Йорт-ҡураһында хужаларса ҡыланған таныш түгел әзмәүерҙәй өс ир кешене күреп, Айварҙың асыуы шул тиклем ҡабарҙы. Ләкин ярһыуын тышҡа сығарырға ундағы әҙәплелек юл ҡуйманы. Ни тиһәң дә, ул бит интеллигент ине заманында, урман төпкөлөндә йәшәйем тип кенә януар шикелле ҡыланып булмай ҙаһа.

— Һеҙ миңәме, әфәнделәр? — Күпме йәшерергә тырышмаһын, саҡ ҡына мыҫҡыл теш араһынан һығылып сыҡты. Уны, әлбиттә, саҡырылмаған ҡунаҡтар ҙа һиҙҙе. Арғы башта ултырғанының бит мускулдары тартышып ҡуйҙы, шулай ҙа йөҙ һытып торманы. Ҡара күҙлеген һалып, (ғәжәп, йонсоу көндә лә ни эшләп күркәләй ҡупайып ҡара күҙлек кейә икән был әҙәм, ниндәй яҡтылыҡтан һаҡланалыр, тип уйлап алды Айвар), дәрәжәле ҡыланып, эскәмйәнән торҙо. Бында башлыҡ мин булам, тигән һүҙ ине быныһы.

— Рәхим итегеҙ, хөрмәтле Илбәков, табын түренә. Һеҙҙе генә көтәбеҙ.

— Ни өсөн кәрәк булып киттем әле таныш булмаған кешеләргә? — Һуңғы һүҙҙәренә баҫым нығыраҡ төштө, ахыры. Ҡара күҙлек йәнә лә ишетмәгәнгә һалышты. Айвар һораулы ҡарашын уға төбәне. Егеткә өҫтәл артына ултырыуҙан башҡа сара юҡ ине. Үҙ хужалығында яуап бирергә йыйынған малайҙай баҫып тора алмай ҙа инде.

Ҡара күҙлек иркенләне, хужаларса рюмкаларға шарап ҡойҙо, ризыҡтарҙы Айвар алдынараҡ шыуҙырҙы. Ғәжәпкә, һонтор буйлы ошо ир генә һөйләнеп һөйләнә, ҡалған икәүһе ауыҙҙарына шарап уртлағандармы ни. Йотһаҡ, шеф түләтеп ҡуйырмы икән, тигән һымаҡ мышнап ултыра бирәләр.

— Йә, кем, Айвар ҡусты, етешегеҙ. Сергей, Мәхмүт, әйҙә, һеҙ ҙә ҡалышмағыҙ.— Һонтор башҡаларҙы көтөп тормай, ауыҙына ҡойоп ҡуйҙы.

— Һеҙ ҡайҙан минең исемде беләһегеҙ? Таныш түгелбеҙ кеүек. Бәлки, аңлатырһығыҙ?

— Бына бит танышып ултырабыҙ. Мин Стас булам, үҙ кешеләргә, әлбиттә. Ә былай Станислав Владимирович, тиҙәр. Сергей. Мәхмүт.— Ул әйткәндә, тегеләр тороп баш эйҙе.— Минең ярҙамсыларым.

— О-о, бик хуп. Улай уҡ ярҙамсылар менән йөрөгәс, ҙур түрә булаһығыҙҙыр? — Күпме тырыша һалҡын ҡанлы булырға, юҡ, килеп сыҡмай. Күңеленең әллә ҡайһы мөйөшөндә көтөлмәгән ҡунаҡтарға ҡарата ышанмаусанлыҡ, шик көсәйә бара. Ошо тойғо уға яҡын мөғәмәләгә күсергә ҡамасаулай. Хәйер, үҙе лә бигүк атлығып тормай.— Тыңлайым. Ниндәйерәк йомош килтерҙе мөхтәрәм ҡунаҡтарҙы алыҫ урман тарафтарына?

Хәленән килһә, өйрәнгәненсә, яғаһынан алыр ине Стас был егет аҡтығын. Кемде-кемде, Стастың үҙен мыҫҡыл итеп маташа! Ләкин йомошоноң мөһимлеге генә уны был аҙымдан тыя. Киреһенсә, Айвар әсерәк итеп төрттөргән һайын, майлыраҡ йылмайырға тырышып ятҡан көнө.

— Айвар туған, беҙ эш кешеләре. Мин үҙем уратыпсуратыуҙы яратмайым. Шуның өсөн тура эш хаҡында һөйләшеүгә күсергә уйлайым. Аңларһығыҙ, тип ышанам.— Шундай пафос менән һөйләп ташланы, уйынса, был тиклем дә нәфис һүҙ байлығы ошо урман айыуын йыға һуҡмаһа ла, теҙләндерергә тейеш ине. Ләкин тегеһе упайып ҡарап, түңгәктәй ҡымшанмай ултыра бирҙе. Шуға күрә лә солтан үҙенең ярандарына әмер биреүҙе кәрәкле тапты.— Сергей, Мәхмүт, барығыҙ, машинаны көйләй торогоҙ. Илбәков әфәндене ныҡ йонсотмайыҡ, оҙаҡламай ҡуҙғалырбыҙ.

Ләкин әфәнде, урман айыуы булһа ла, теге ике мыштымдың өҫтәлдән ситкә олаҡтырылыуын шундуҡ аңланы. Ниндәйҙер серҙе уларҙың ишетмәүен теләй, шул ғына. Стас оҙаҡ көттөрмәне.

— Бына нәмә, Айвар туған, һеҙ зирәк кеше, мине дөрөҫ аңларһығыҙ, тип уйлайым. Беҙгә һеҙҙең ярҙамығыҙ кәрәк.

Айвар аптырап китте. Нисегерәк яуап бирергә белә алмай, тәүҙә өнһөҙ ултырҙы.

— Ярҙам, тиһегеҙме? Ниндәй ярҙам?

— Ну-у, Айвар туған. Беҙҙең илдә һәр кеше бер-береһенә дуҫ, иптәш һәм туған, оноттоғоҙмо ни? Һеҙгә үҙегеҙ кеүек үк ябай совет кешеһе ярҙам һорап мөрәжәғәт итә, шул ғына.

— Яҡшы. Асығыраҡ әйтегеҙ, ниндәй ярҙам һәм ниндәйерәк маҡсатта?

— Бына был, исмаһам, ир һүҙе. Күптән шулай тиергә кәрәк ине.— Стас ҡулдарын ыуғылап алды. Әйтерһең дә, Айвар уға өсөнсө ярҙамсы булып тағылып китергә тора.— Эшкә күсәйек, булмаһа. Үҙ-үҙен ихтирам иткән һәр кеше кеүек үк, беҙ хәйерселәргә генә бирелә торған эш хаҡына ҡаршыбыҙ. Йәғни ундай аҡсаға әҙәмсә йәшәү мөмкин түгел. Шуға күрә өҫтәмә килем килтерә торған юлдар эҙләргә мәжбүрбеҙ.

— Йәғни, урлашырға.— Айвар Стастың фекерен дауам иткән рәүешлерәк әйтеп ҡуйҙы.

— Ну-у, ниңә шундай ҡәтғи билдәләмә? Беҙ һеҙҙең менән интеллигент кешеләр, Айвар әфәнде. Яңылышмаһам, ҡайһылыр бер мәл ғилми юл менән барғанһығыҙ.

— О-о, һеҙҙең күҙәтеү яҡшы ҡуйылған. Һоҡланыуымды белдерергә рөхсәт итегеҙ.

Стас урмансының һүҙҙәрен тишек иләк аша үткәреп ебәрҙе.

— ... һәм шуға күрә йомшағыраҡ һүҙҙәр менән мөғәмәлә итәйек. Йәғни, урлашыу түгел, һорамай ҙа, таламай ҙа алыу була был. Хужаһы бармы? Дәүләттеке! Дәүләт ул бына һин һәм мин, тимәк, беҙҙеке. Фәлсәфәүи яҡтан ҡарарға кәрәк был мәсьәләгә.

— Эш фәлсәфәгә төшөп киткәс, әлбиттә, ышанам инде мин. Иртәгә үк урман юлына яңылыш ҡына килеп сыҡҡан берәй ҡартластың кеҫәһенә төшәсәкмен. Уның ғәжәпләнгән һәм асыулы күҙҙәренә туп-тура ҡарап, ошо тәғлимәт нигеҙендә теүәл бер сәғәтлек лекция һөйләргә тура килер. Моғайын, үҙ хатаһын аңлар һәм, әлбиттә, ғүмер буйы яңылыш фекерҙә йөрөүенә ғәфү үтенер. Һуңғы тинен дә тишек-тошоҡ кеҫәләренән эҙләп алып тоттороп китер тигән өмөт бар.

Ғәжәпкә, Стас тағы ла тыныс килеш ҡалды. Айварҙың еүеш морондарҙан түгел икәнен, башҡасараҡ һөйләшеү кәрәклеген аңлағайны инде ул.

— Йә, ярар, Айвар ҡусты. Һүҙ байлығын етерлек күрһәттек, эшкә күсәйек. Һеҙгә мин бергә эшләргә тәҡдим итәм. Һеҙҙең сәйер һәләттәрегеҙ беҙгә яҡшы билдәле.

Миңә уларға урман төпкөлөндә әрәм булып ятырға юл ҡуйырға? Кешелеккә, һис юғында, кешелектең ниндәйҙер бер өлөшөнә хеҙмәт итһендәр. Бына был, исмаһам, советса йәшәү өлгөһө була. Йәғни, коллективизм.

Айварҙың бер ҡашы кинәт өҫкә күтәрелде. Ныҡ аптыраған саҡтарҙа ғына шулай булыусан. Стас быны белмәй ине, шулай ҙа үҙенең һүҙҙәренең хужаға нисегерәк тәьҫир итеүен һиҙҙе.

— Ниндәй һәләттәр хаҡында әйтәһегеҙ?

— Айвар ҡусты, белмәмешкә һалышмағыҙ. Иҫләйһегеҙме, үткәндә бына был йортта бер ҡыҙ булғайны? Һыҙмалар тарихын онотмағанһығыҙҙыр. Ҡыҫҡаһы — ул һыҙмалар миңә килеп етергә тейеш ине. Ҡайҙа булды, тиһегеҙме? Уларҙы һеҙ алдығыҙ! Назаровтың йортонда!

Айвар бер мәлгә өнһөҙ ҡалды. Ах, бына эштәр нисегерәк икән! Егеттең йөҙө үҙгәреүен күреп, Стас үҙенең һүҙҙәренең хаҡлығына инанды. Дөрөҫөн әйткәндә, һынар өсөн генә соҡоп сығарғайны ул был ваҡиғаны. Афарин, Хәмит! Афарин, Миңлеғәле! Әгәр был әҙәмде ҡулға төшөрөп алғанда, уларҙың һыҙмаларҙы юғалтыуын тәбрикләргә генә ҡала.

Айвар үҙен ҡулға алып өлгөргәйне. Аптыраған булып, Стасҡа төбәлде.

— Һеҙ ниндәй ҡыҙ хаҡында? Һәм ниндәй ҡағыҙҙар менән минең башты бутайһығыҙ? Аңламайым...

— Ике йөҙләнмәгеҙ. Кисә генә кем менән осраштығыҙ? Бәлки, яңылыш ҡына Назаровтың ҡыҙылыр? Ҡыҙыҡһынығыҙ, тағы күрһәгеҙ.

— Ярай, осраштым да ти. Ә минең ниндәй һәләттәрем бар икән һуң? Урлашыу буйынса академия бөтмәнем. Белеүемсә, уның өсөн Мәккәгә барып ҡайтыу ҙа талап ителмәй.

— Ярар, һүҙгә тапҡыр икәнһегеҙ, ишеттем. Әйтегеҙ әле, Миңлеғәлененең янында торған дипломат өҫтөндәге ҡағыҙҙарҙы нисек алдығыҙ? Квартира бит бикле булған. Стенанан сыҡҡан албаҫты алды, тип тәкрарлай теге йолҡош. Әммә ләкин һеҙҙе күрһә, ҡабат теге албаҫтыға юлыҡҡан шикелле ҡото алына. Дер-дер ҡалтырай башлай, саҡ тынысландырабыҙ.

— Мин, әлбиттә, бик шатмын. Нисә йыл ғүмер йәшәп, шундай матур сағыштырыуҙар ишетергә тура килмәгәйне. Ә һыҙмаларға килгәндә,— Айвар өҫтәл артынан тороп, Стастың ҡаршыһына килеп баҫты,— минең ундай нәмәләрҙе инде биш йыл күргәнем юҡ. Төшөмә лә инеп сыҡмай хатта.— Инде аңланыңмы, тигән шикелле ҡул-

дарын йәйеп ебәрҙе һәм, аяҡтарын бер-береһенә салып, эскәмйәгә барып ҡунаҡланы.

— Ә бит Назаровҡа уларҙы һеҙ илткәнһегеҙ. Йәшермәгеҙ, барыһын да беләбеҙ.

— Хөрмәтле Стас әфәнде. Бәлки һеҙ Дәүләт именлеге комитеты рәиселер. Бәлки мин үтә серле төргәкте сит ил шымсыһына яңылыш ҡына бүләк иткәнмендер.— Егеттең йөҙө кинәт усал ҡиәфәт алды.— Бына нәмә, мин һеҙҙең алда аҡланырға йыйынмайым. Ни ҡылһам да — минең ихтыяр. Аңлашыламы? Ә хәҙер килгән юлығыҙҙан рәхим итеп кире һыпыртығыҙ. Юғары кимәлдәге осрашыу шуның менән тамам.— Йорт болдорона күтәрелгән еренән боролоп әмер бирҙе.— Өҫтәл өҫтөндәге сүп-сарығыҙҙы кире тейәүегеҙҙе һорайым, бер бөртөгө лә ҡалмаһын.

— Йә, ярар, егет кеше. Яҡшылыҡ менән әйткәнде аңламаның. Үкенер көнөң алда әле.— Эсенә йыйып ултырған бар асыуы йөҙөнә ҡуйы ҡыҙыллыҡ булып бәреп сыҡҡан Стас ниәтенең барып сыҡмауынан шартлай яҙғайны.— Үкенерһең,— тип ыҫылданы ярһыуын тыя алмай.

— Үкенергә? Һеҙҙең шикелле мөхтәрәм ир-аттарға кеше таларға ярҙам итеүҙән баш тартҡан өсөн, әлбиттә, минең төн йоҡоларым ҡасасаҡ. Бер йөк йоҡо дарыуы яҙҙырып алмағанда...

— Көл, көл, әйҙә. Тәүге сиратта үҙең таланасаҡһың, вәғәҙә бирәм. Иң ҡәҙерле нәмәң тартып алынһа, ниндәйерәк тауыш менән йырларһың икән.

«Иң ҡәҙерле нәмәң...» Өс ир ултырған машина ҡуҙғалып киткәс тә, Стастың тауышы оҙаҡ ваҡыт Айварҙың ҡолаҡ төбөнән китмәне. Ғәжәп, ни нәмәне күҙ уңында тотто икән? Ләкин күпме уйланмаһын, үҙе өсөн иң-иң ғәзиз булған төшөнсәне билдәләй алманы.

## 48

Борсолоуы бушҡа булмаған икән — мәктәп тупһаһын аша атлау менән, Айгөл үҙенә иғтибарҙың башҡасараҡ булыуын тойҙо. Ана, түбәнерәк кластарҙа уҡыған ике-өс ҡыҙ, уға боролоп ҡарай-ҡарай, бер-береһенә ниҙер һөйләйҙәр. Параллель класта уҡыған ике егет шаян һүҙ ҡушып китте. «Башлана икән»,— тип уйлап алды Айгөл. Хәҙер төпсөнә башлаясаҡтар — нисек тә ҡайҙан һәм башҡалар. Үҙенең йүләрлеген тағы бер тапҡыр әрләп алды. Сөмбөлдө күндереп булманы бит. Ул, исмаһам, спортсы, шулай тейеш, тип ҡабул итерҙәр ине. Хәйер, был —

мөмкин булмаған эш. Килеп сығырына ышанысы булмаһа, кем ул трюк өсөн сәхнәгә менһен. Айвар хаҡында һөйләй алмай ҙа инде.

Бошонҡо ҡиәфәттә икенсе ҡатҡа күтәрелде. Әмәлгә ҡалғандай, физкультура уҡытыусыһы Рәзит Вәлиәхмәтович төшөп килә ине. Айгөлдө күргәс, ауыҙы саҡ ҡолаҡ артына һәлберәмәне.

— Назарова! Һин мине бик һөйөндөрҙөң әле. Бөгөндән секцияға ҡабул итәм. Ярышҡа әҙерләнәбеҙ, киләһеңме?

Бына һиңә мә! Был әле башы ғына, буғай. Төпсөнөргә урын ҡалдырмай, ярҙы ла һалды ҡыҙыҡай.

— Ул бит фокус ҡына ине, Рәзит Вәлиәхмәтович. Ысынлап. Мин хатта шпагат та ултыра белмәйем.

— Ә сальто? Өс тапҡыр сальто?

— Күҙ буяу! Мираж! — Айгөл йүгереп өҫкә менеп китте. Физкультура уҡытыусыһы тағы бер һорау бирһә, яуап таба алмаҫын аңланы ул. Рәзит Вәлиәхмәтович иһә аптыраған ҡиәфәттә байтаҡ ваҡыт баҫҡыста баҫып торҙо. Күрәһең, менепме, әллә төшөпмө барғанын онотҡайны.

Айгөл сәғәтенә күҙ төшөрҙө — беренсе дәрес башланыуға ун биш минут ваҡыт бар. Физика булырға тейеш. Кабинеттың ишеген асһа — шып-шым. Бер-ике аҙым эскә атлауы булды, Наилдең көр тауышы ишетелде:

— Джентельмендәр! Бер, ике, өс! Башланыҡ!

Биш-алты малай бер ергәрәк баҫҡандар ҙа ауыҙ тип аталған ҡатмарлы инструменттары менән туш уйнап булашалар. Был тиклем дә хәтәр ансамбль менән, һәр ваҡыттағыса, Наил етәкселек итә.

Айгөл ҡул һелтәне лә урынына барып ултырҙы:

— Ҡуйығыҙ әле, егеттәр. Юҡ менән булашмағыҙ.

— Нисек инде юҡ менән? Бына һиңә хәбәр! Юғары класс күрһәтте лә юҡ менән ти.

— Молодец һин Айгөл шулай ҙа!

— Молодецмы, түгелме, хәҙер асыҡлайбыҙ беҙ уны.

Кластағылар шымып ҡалды. Артҡы партала ниндәйҙер мөһим нәмә белгән ҡиәфәттә ултырған Кәбир әйтте быныһын. Үҙенә барыһының да тигәндәй ғәжәпләнеп ҡарағанын күреп, урынынан торҙо, ҡыҙҙың партаһы янына килеп баҫты.

— Бер-ике минут ваҡытҡа мөмкинме һине, Айгөл?

Аҫтыртынлыҡ бөркөлөп торған был малайҙы яратып бөтмәй ине Айгөл. Ләкин ата-әсәһенән күскән итәғәтлек ҡырт киҫергә урын ҡалдырманы.

— Рәхим ит. Һөйләй торған хәбәрең ни хаҡта, сер булмаһа?

— Сер. Шуға күрә ситкәрәк китпәк, яҡшы булыр. Һинең өсөн, әлбиттә.

Тәҙрә янына килделәр. Айгөл, ҡулдарын күкрәгенә ҡаушырып, Кәбиргә төбәлде.

— Йә, тыңлайым.

— Һин, әлбиттә, кисәлә бик матур сығыш яһаның. Тәбрикләйем. Ләкин быны ҡайһы бер нескәлектәре бар.— Тамағын ҡырғылап алғас, һөжүмгә күсте.— Миңә ул сығышыңдың нисек ойошторолғаны билдәле. Һин спорт менән бер ҡасан да ныҡлап шөғөлләнмәнең. Тота килеп юғары класлы трюк күрһәтеүең — алдашыу ғына.

— Шунан?

— Шунан шул. Бөгөн һине сәғәт дүрттә кинотеатр янындағы паркта көтәм. Килмәһәң, барыһына ла һөйләйәсәкмен.

— Мәҫәлән, нимәне һөйләйһең?

— Албаҫтың хаҡында. Һинең шул сихырсы арҡаһында ғына әҙәм ышанмаҫлыҡ номер күрһәткәнеңде белмәй, тиһеңме?

Айгөлдөң күҙ алдары ҡараңғыланып китте. Ах, Айвар, Айвар, кисер мине! Күпме аңлаттың, мин йүләргә тамсы ғынаһы ла барып етмәгән икән. Ниндәй хәлгә ҡуйҙым һине. Ғүмерҙә лә үҙемде ғәфү итмәйәсәкмен...

Айгөлдөң йөҙө үҙгәреүен Кәбир үҙенсә аңланы. Ул тантана итә ине. Эре генә ҡиәфәттә ҡыҙға ҡарап тора. Әйтерһең дә, нимә әйтһәң, шуға ризамын, фаш итә күрмә, тигән һүҙҙәр ишеткән. Ҡыҙҙың күҙ алдына ағасҡа бәйләнеп йәберһенгән мәле, Хәмиттең уҫал йөҙө, Миңлеғәленең аңшайып торған ҡиәфәте килде. Хәҙер шулар шикелле бер әҙәм, танау аҫты ла кибеп бөтмәгән Кәбир, уның йөҙөн йыртыу менән ҡурҡыта, имеш. Асыуы тамағына төйөр булып килеп тығылды.

— Бахыр! — Кинәт әйләнеп Кәбирҙең яңаҡ төбөнә һуҡты. Унан бер кемгә лә әйләнеп ҡарамай, ишектән сығып йүгерҙе. Ҡупшы туфлиҙарының иҙәнгә йыш-йыш бәрелгән тауышы бер аҙ ишетелеп торҙо ла тынды.

Класс шып-шым ине. Кәбир яңағын тотоп тора. Урынына барып ултырырғамы, әллә был осраҡта сығып китеү хәйерлерәкме, тигән мәсьәләне хәл итә алмай, ахыры. Һис кем бер һүҙ өндәшмәй. Тынлыҡты аяҡ тауышы бүлде. Илгиз ултырғысынан торҙо, һалмаҡ аҙымдар менән Кәбирҙең ҡаршыһына килеп баҫты.

— Нимә тип әйттең Айгөлгә?

Был бөтәһе алдында яңағына алған Кәбирҙең асыуын ғына ҡабартты.

— Ә һинең унда ни эшең бар? Айгөл әллә һине әҙәмгә һанай тиһеңме? Тот ҡапсығыңды! Бер убырлы әҙәм менән йөрөй ул, үҙем күрҙем!

— Ҡабатла әле шул һүҙеңде! — Илгиз Кәбирҙең яғаһынан эләктереп алды. Шау-шыу ҡупты. Әлегәсә ни нәмә менән бөтөр икән, тип ултырған егеттәр ҙә, ҡыҙҙар ҙа ян-яҡтан йүгерешеп килеп еттеләр. Әммә был икәү сығырҙарынан сыҡҡайнылар инде. Ысынлап уҡ һуғышырға керештеләр. Дөбөр-шатыр килеп ултырғыстар ауҙы, парталар урындарынан күсте. Физика уҡытыусыһы Эдуард Тимерйәновичтың ингәнен күрмәнеләр ҙә, ишетмәнеләр ҙә.

— Егеттәр, туҡтағыҙ!

— Марат, Кәбирҙе тот!

— Һуң, туҡтағыҙ, тим бит, Эдуард Тимерйәнович ингән.

Шау-шыу ййлап тынды. Бер яҡта аһылдап Илгиз баҫып тора, икенсе яҡта — күҙҙәренән уҫал уттар сәсеп Кәбир. Ҡалғандар әкренләп үҙ урындарына таралышып бөттө.

— Йә, нисек аңлатырһығыҙ был батырлығығыҙҙы?

Өндәшеүсе булманы.

— Мин һеҙҙән һорайым.

Тәүләп Кәбир телгә килде. Күрәһең, ни тиклем тиҙерәк икенсегә ауҙарып ҡалһаң, шул тиклем һыуҙан ҡорораҡ сығып була, тигән уйҙа ине.

— Илгиз үҙе башланы. Мин Айгөл менән һөйләшеп тора инем.

Зилә урынынан һикереп торҙо.

— Юҡты һөйләмә, Кәбир. Илгиз бит һинән Айгөлдө ни өсөн рәнйетеүеңде белергә теләгәйне.

— Ә уның ни ҡыҫылышы бар?

— Ниңә булмаһын? Бына минең дә ҡыҫылышым бар — ни тип әйттең Айгөлгә?

— Бына нәмә, егеттәр, ҡыҙҙар, дәрес башлана. Ваҡыт һанаулы, һәм мин ул минуттарҙы һеҙҙең ыҙғышты тыңлап үткәрергә йыйынмайым.— Уҡытыусы портфелен өҫтәлгә һалды.— Барығыҙ ҙа ултырышығыҙ.— Үҙ урынына йүнәлгән Кәбиргә ишара яһаны.— Ә һин, батыр егет, рәхим итеп директор кабинетына.

— Миңә лә директор янына инергәлер? — Илгиз, яуап көтөп тормай, ишеккә ыңғайланы.

— Әлбиттә, тағы ниндәй һорау булыуы мөмкин.— Улар артынан ишек ябылғас, класҡа өндәште.— Бөгөн һеҙгә, ҡәҙерле иптәштәр, дәрестән һуң ҡалырға тура килер, моғайын. Теманы үтеп өлгөрә алһаҡ — бәхетегеҙ.

Ләкин класта килеп тыуған хәлде асыкламай хәлегеҙ юҡ.— Боролоп, таҡтаға числоны яҙҙы.

Етеп килгән ҡыҙҙар һәм егеттәр дәфтәрҙәренә үрелде. Ләкин барыһының да уйында әле генә кабинетта булған ваҡиға ине.

## 49

— Гөлзифа Сәлиховна, һеҙҙе мин, әлбиттә, аңлайым, ләкин беҙҙең хәлгә лә инергә тейешһегеҙ.— Мәктәп директоры Венера Йосоповна өҫтәл артынан тороп, йәнәшәләге ултырғысҡа килеп ултырҙы.— Һуңғы ваҡытта мин, тураһын әйткәндә, Назарованы аңламайым. Дөрөҫ, дәресфәлән ҡалдырып йөрөгәне юҡ, йәмәғәт эштәренән ситләшмәй. Ләкин... Ләкин... Низер булған уға, ышанығыҙ. Бәлки, әсәләрсә һөйләшеп ҡарарһығыҙ?

Һомғол кәүҙәһенә бик килешле костюм кейгән, шул уҡ төҫтәге эшләпәһе йөҙөнә күркәмлек биреп торған уртаса йәштәрҙәге ханым муйынына ураған ебәк шарфын сисеп алды. Бүлмә һалҡынса булһа ла, һауа етешмәй шикелле тойола ине.

— Белмәйем шул. Үҙем дә ғәжәпләнәм. Миңә ҡалһа, бар сәбәп мәктәптәлер һымаҡ тойолғайны.

— Бында әллә ни күҙгә бәрелерлек хәлдең булғаны юҡ ине. Бөгөн иртәнге ваҡиғаны иҫкә алмағанда. Ләкин ул, күреүегеҙсә, сәбәбе түгел, бәлки, һөҙөмтәһе.

— Шулай ҙа ул малай ни тигән һүң Айгөлгә?

Директор уфтанды. Ҡулдарын йәйеп ебәрҙе.

— Белмәйем. Белмәйем, Гөлзифа Сәлиховна. Һүҙ ошо урынға килеп төртөлһә, өндәшмәй ҙә ҡуя.

— Ә Айгөл әйтмәнеме?

— Ул бөгөн дәрестә булманы.

— Бөтөнләйме?

— Эйе. Ыҙғыш тәүге дәрес алдынан булған бит. Сығып киткән дә башҡаса мәктәптә күренмәне.

Гөлзифа Сәлиховна урынынан һикереп торҙо.

— Ниңә башта уҡ әйтмәнегеҙ? Мин бит эштән тура бында килдем. Бер-бер хәл генә була күрмәһен... — Телефон трубкаһына барып йәбеште.— Мөмкиндер бит? — Үҙе иһә, боролоп та ҡарамай, һандар йыя.

Венера Йосоповна кинәт әйткәненә үкенә биреп ҡуйҙы. Йә шундуҡ хәбәр итергә кәрәк булған. Ысынлап та, ул бала менән ни генә булмаҫҡа мөмкин.

— Алло! Алло, Айгөл, һинме? — Тауышын таныны, ахыры, еңел тын алып ҡуйҙы.— Уф аллам, ҡотто алдың

бит. Мин мәктәптә. Ярай, тыныслан, бер нәмә лә булмаған. Ҡайтҡас һөйләшербеҙ, яраймы?

Трубканы һалғас, Гөлзифа Сәлиховна өндәшмәй ултырҙы. Директор ҙа һис ни әйтмәй — урынһыҙ. Бер нисә минут ваҡыт үтте.

Ханым урынынан торҙо.

— Ярар, Венера Йосоповна, кәңәштәрегеҙ өсөн рәхмәт. Бөгөнгө күңелһеҙ хәлдең сәбәптәрен белергә тырышырбыҙ. Һау булығыҙ.

— Һау булығыҙ.

Ишектән сыҡҡас, ҡатын уйланып торҙо. Ни булған һуң был бала менән? Һәр саҡ бер-береһен аңлай торғайнылар. Һуңғы арала өндәшмәҫкә әйләнде, күрәһең, ата-әсәһенән йәшерә торған ниндәйҙер сере бар. Булһа һуң, аңламаҫтар инеме ни?

Ишекте асыу менән, төпсөп һорарға ҡарар итте. Ләкин ҡыҙының йөҙөн күреү менән төшөндө — хәл күпкә ҡатмарлыраҡ. Ҡабаланмай ғына сисенде, йорт халатын кейгәс, аш бүлмәһенә үтте. Айгөл иһә ғәжәпләнеп әсәһенә ҡарап тора. Ниңә бер нәмә хаҡында ла һорамай? Төпсөнә башлаһа, ҡырт киҫергә лә әҙерләнеп бөткәйне, ә ул иһә, бер ни булмағандай, аш-һыу әҙерләп йөрөй.

Әкренләп ҡараңғы төштө. Оҙаҡламай атаһы ла эштән ҡайтасаҡ. Яуап тотоу көнө булырға оҡшай был кис.

— Айгөл, әйҙә, сыҡ бында. Ашарға әҙер.

— Ниңә, атайымды көтмәйбеҙме ни?

— Юҡ, сыҡ әле.

Айгөл аш бүлмәһенең ишегенә һөйәлде.

— Рәхмәт, ашайһым килмәй.

— Бәлки, һөйләрһең ни булғанын.

— Бер ни ҙә булманы.

— Ә класташтарың ни өсөн һуғышҡан улай булғас?

Айгөлдөң йөҙө үҙгәрҙе. Әсә кеше уның был хаҡта яңы ғына ишетеүен күрҙе.

— Кемдәр?

— Илгиз менән Кәбир тигән малай.

— Һы... Ни етмәгән уларға?

— Бына ошо хаҡта белергә теләгәйнем дә инде.

— Мин бер ни ҙә белмәйем.

— Һуғыш бит Кәбир арҡаһында сыҡҡан. Һине рәнйетте, тиҙәр. Тимәк, сәбәбе һиндә.

— Әсәй, мине тыныслыҡта ҡалдыр. Үтенеп һорайым.— Айгөл үҙ бүлмәһенә кереп китте.

Шул уҡ мәл ишек ҡыңғырауы шылтыраны. Тимәк, хәҙер атаһы башлаясаҡ.

Ысынлап та, оҙаҡ көттөрмәне Хәбир Ғүмәрович. Өҫ-башын алыштырыу менән, ҡыҙының янына инде. Күрә-һең, ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә әсәһе ни булғанын һөйләп өлгөргәйне.

— Айгөл, әйҙә өлкәндәрсә булайыҡ. Һин еткән ҡыҙ, беҙ һинең ата-әсәң. Беҙҙең менән уртаҡлашмаһаң, тағы кемгә үҙ бәләләрең менән бара алаһың?

Айгөл өндәшмәне. Атаһының һүҙҙәре йөрәгенә үтә, ләкин әйтә алмай ул. Әйтә алмай... Хаҡы юҡ... Атаһы дауам итте.

— Һинең өндәшмәүеңде мин үҙемсә аңлайым. Әгәр барыһы ла яҡшы булһа, үҙеңде улай тотмаҫ инең. Тимәк, ниндәйҙер хәлгә тарығанһың. Уртаҡлаш беҙҙең менән, үҙеңә еңел булыр.

— Атай! Аңла мине, мин бер ниндәй ҙә бәләгә осрамаҡым. Ул яғына тыныс булығыҙ. Ләкин... Ләкин һеҙгә мин һөйләй алмайым. Аңлайһыңмы, һөйләй алмайым!

Хәбир Ғүмәрович урынынан торҙо, Айгөлдөң иңбашына ҡулын һалды. Нимер әйтергә уҡталды, әммә өндәшмәне. Боролдо ла яй ғына атлап бүлмәнән сығып китте.

Айгөлгә атаһы менән әсәһе йәл булып китте. Йә инде, тиктомалға иң ҡәҙерле кешеләрен рәнйетте. Изгелектән башҡаны күргәне юҡ бит уларҙан. Тынысландырам тип, Айвар хаҡында барыһын да һөйләргә мөмкин түгел. Үҙ-үҙен ҡулға алырға тейеш, башҡа юл юҡ. Бер нәмә лә булмағандай ҡылана алһа, үтер барыһы ла.

Кәбир иҫенә килеп төштө. Ҡайҙан белгән тип, аптырайһы түгел, атаһын күрҙе бит инде. Ә Миңлеғәлегә нисек барып еткән, бына быныһы — мәсьәлә. Уларҙың изге күреп һаҡлаған серҙәре шулай уҡ сер булыуҙан туҡтанымы икән ни?

## 50

Саҡырылмаған ҡунаҡтар килделәр ҙә, кәрәк нәмәләрен булдыра алмағас, китеп тә барҙылар. Тел төптәренә ҡарағанда, һуңғы осрашыуҙары түгелдер. Күңелдә әллә ниндәй юшҡын ҡалды. Уны китап уҡып, эшкә егелеп, һис юғында урман ҡыҙырып ҡына бөтөрөп булмайҙыр.

Егет ысынлап та уйға ҡалғайны. Кем һуң әле ул? Кешеме, күсермәме? Бындай һорау биреү ҙә үҙе үк урынһыҙ, ләкин һуңғы арала бар ҡылған ҡылыҡтарында игеҙәгенә артыҡ һалына башланы, шикелле. Үҙен унан айырмай берәй эш ҡылырға хәленән киләме икән һуң? Һорауҙы

былай ҡуйыу, тимәк, үҙенә-үҙе саҡырыу ташлау. Бигерәк ғәрсел шул Айвар, нишләйһең. Әгәр ҙә хәҙер ҡулында аҡ бирсәткәләр булһа, һис шикһеҙ өҫтәлгә ташлар ине.

Тимәк, хәл ителде. Иртәгә юлға сығасаҡ. Ҡайҙа бара, ни эшләйәсәк унда — хәҙергә үҙе лә белмәй. Шуныһы ғына асыҡ — реаль, физик кәүҙәһенең дә нигә лә булһа һәләтлеге бар икәнен иҫбат итергә тейеш. Үҙенең намыҫы алдындамы, йөрәге алдындамы — нисек атаһа ла, һуңғы сиктә бер төшөнсәгә барып тоташа, ул — ир-егетлек.

...Һыҙылып таң атҡан ваҡытта егеттең күҙҙәре асыҡ ине. Кем белә, бәлки бөтөнләй йоҡламағандыр. Оҙонан барған төндөң ғүмере, ни тиһәң дә, кешенең асылы, йәшәү мәғәнәһе хаҡындағы уйҙар алдында ҡышҡы көндә йылы тәнгә ҡунып ирегән ҡар бөртөгөләй генә.

Егеттең уйҙарын ҡеүәтләгәндәй, ысынлап та, тәүге ҡар бөртөктәре күренде. Тәүҙә берәм-һәрәм ине, тора-бара өлпәк-өлпәк булып яуа башланы. Оҙаҡламай ҡыш киләсәк. Килер, үтеп китер уныһы ла. Айварҙың йәшенә тағы бер һан өҫтәлер. Был хаҡта иҫләһәң, үтә моңһоу. Ниҙер эшләргә өлгөрөп ҡалаһы килә. Уйҙары был тирәгә килеп төртөлгәс, ул һикереп торҙо. Әйтерһең дә, хәҙер үк кейенеп юлға сыҡмаһа, үтә мөһим ваҡиғанан һуңға ҡала.

Өйөрөлөп-өйөрөлөп һауанан тәңкә ҡар бөртөктәре төшкән мәлдә килеп инде ул ҡала урамына. Ҡарамаҡҡа кескәй генә ҡала, урамдары ике тиҫтәгә лә тулмайҙыр. Ләкин бында меңәр кеше йәшәй, тимәк, төрлө яҙмыш, шунса ғүмер...

Әлбиттә, яҡыныраҡ ергә, берәй ауыл тирәһенә һуғылырға мөмкин ине. Ләкин беҙ ҡапсыҡта ятмай, имеш-мимештәр тарала башлағанын иҫтән сығарырға ярамай. Халыҡ ауыҙын иләк менән баҫып булмай, күргәнен-күрмәгәнен һөйләй бирә. Шуға һағыраҡ булырға тура килер. Үҙен тәжрибә өсөн банкаға һалынған сысҡан итеп һис кенә лә тояһы килмәй егеттең.

Әҙерәк бара биргәс, күҙе аҙыҡ-түлек магазинына төштө. Ҡайҙа инһә лә, барыбер түгелме ни, алдан ныҡлап уйламағас, хәҙер үҙенең ни эшләрен аныҡ ҡына белмәй. Эскә үтте — һәр ваҡыттағыса кеше мыжғып тора, этеш-төртөш. Донъялағы иң ғауғасыл әҙәмдәрҙе генә йыйып бер урынға тултырғандарҙыр, тип уйларға мөмкин. Күрәһең, тотанаҡлы әҙәмдәрҙе лә сығарынан сығара был ожмах мөйөшө.

Ниндәйҙер ризыҡ артынан теҙелгән сираттан саҡ ҡына арыраҡ барып баҫты. Һатыусы йәш кенә булһа ла, йылғыр — үлсәүле әйберҙәрҙе лә йылдам ебәрә. Тынсыу

һауанан әлһерәй башлаған ҡарсыҡ-ҡорсоҡ, һораған аҡсаны биреп, тиҙерәк китеү яғын ҡарай. Айвар иғтибарлап күҙәтә торғас, төшөндө — йәш туташ апаруҡ шылдыра ине. Бер-ике йөҙ грамм еткермәй үлсәһенме, хаҡын арттырыбыраҡ һораһынмы — барыһы ла тыныс ҡына үтеп китеп тора. Тауыш күтәреүсе, хәләл аҡсаһын талап итеүсе күренмәй.

Айварҙы һатыусының намыҫһыҙлығы түгел, ана шул кешеләрҙең көсһөҙлөгө аптыратты. Артыҡ грамм өсөн ыҙғышҡанға сираттан алып ташламаһындар тигән ҡурҡыу ята, күрәһең. Егеттең башына кинәт бер уй килде — әгәр ҙә... Бәй, был, ысынлап та, бик уңайлы осраҡ. Шуның өсөн генә килгән, тиерлек. Күкрәген тултырып тын алды, үткер ҡараштарын һатыусының күҙҙәренә йүнәлтте. Юҡ, уның ҡарауы кәрәкмәй Айварға, бынан бер кемгә файҙа юҡ. Йылан арбаған ҡуяндай Айварға ҡарап ҡатһа, йыйылған халыҡтың ни ҡылырын әйтеп тораһы ла түгел.

Бына йәшерәк бер ҡатын аҡсаһын түләп ситкә китте. Уның артынса ир кеше бер килограмм аҡ май үлсәтте. Һатыусы береһен дә буш ебәрмәне, шикелле. Хатта күҙҙәрен әле аҙыҡҡа, әле үлсәүгә йүгерткеләгән ир ҙә үҙенең алданыуын һиҙмәне. Бына сиратта торған әбекәй полиэтилен тоҡсай менән аҡсаһын һуҙа. Үлсәтеп алды, яй ғына ҡыбырлап ишеккә йүнәлде. Шул саҡ һатыусы менән ниҙер булды. Сығып барған әбейгә, ҡулындағы аҡсаға, үлсәүенә алмаш-тилмәш күҙ йүгерткеләгәс, кинәт ишеккә ынтылды.

— Әбей! Әбекәй, зинһар ғәфү итегеҙ! Һеҙҙең артыҡ аҡсағыҙҙы алдым. Еткермәй үлсәгән инем шул. Кисерегеҙ инде, зинһар. Башҡаса улай итмәм. Бөгөн көнө буйы алданым, улай ғына түгел, өс йыл буйы. Ғәфү итә күрегеҙ... — Иларға уҡ кереште.

Магазиндағы халыҡ иҫтәре китеп уға төбәлгән. Прилавка артында һатыу итеүсе ҡатындар ҙа аңлай алмай бер-береһенә ҡараша. Күрәһең, еткереп өлгөрҙөләр — эске ишектәрҙең береһенән тулы, кәүҙәле, ирендәрен кишер төҫөндәге асыҡ помадаға буяған ҡатын килеп сыҡты.

— Рая! Һин үҙ аҡылыңдамы? Ну-ка, тынyслан. Анфиса, Раяның урынына баҫ. Киттек!

Иҙәнгә тубыҡланған һатыусы ҡарыша, үҙенә аптырап ҡарап торған әбейгә ҡулындағы аҡсаларын һуҙа ине. Әлбиттә, әгәр ҙә һатып алыусыларҙың береһе шулай ҡыланһа, һис кемдең иҫе китмәҫ ине. Әле иһә халыҡ ҡараған да ҡатҡан, был күренеште нисек тәкрарларға белә алмай торалар. Ярайһы уҡ бысранған аҡ халаттағы ҡыҙ-

зың аҡыл яғы зәғиф тигән фекергә килделәр шикелле — йәлләгән ауаздар ишетелә башланы.

Айварға магазин эсендәге күренеш ерәнгес булып китте. Был хәл бөтә йәмғиәттең кесерәйтелгән сағылышы ине. Күсө булған күсһөҙҙө талай, һәм, үҙ сиратында, һуңғылары барыһы өсөн дә үҙен ғәйепле һанай. Өйрәнеп бөткәндәр. Моғайын, бер-ике тапҡыр иманға килтерергә тырышыу менән генә быны үҙгәртеү мөмкин түгелдер. Айварға һуларға һауа етмәй һымаҡ тойола башланы. Гипноздың көсө бөткәс, үҙенең әле генә ҡылған ҡылығына үҙе үк ғәжәпләнеп, берсә тирә-яғындағы халыҡҡа, берсә магазин мөдиренә аптырап ҡарап торған һатыусыға иғтибар итмәҫкә тырышып, тышҡа йүнәлде.

## 51

— Ошо яҡта булырға тейеш.— Мәхмүт шоссенан айырылып урман эсенә кереп киткән юлға иҙәне.— Үткәндә шунан ингәйнек, шикелле.

— Ә йортонда булһа, нишләйбеҙ? — Руль артында ултырған Сергейҙың йөҙө тынысһыҙ.

— Ҡайғырма юҡҡа. Өс көнгә ял һораған. Ҡайһы ваҡытта ебәрергә шеф белмәй тиһеңме?

Тындылар. Ҡар иҙелеп ятҡан урман юлынан машина ауырлыҡ менән бара. Бер аҙ үткәс, үр башланды. Йөк машинаһы көсәнә-көсәнә генә менеп етте. Ҡалған үтәһе юлда тау юҡ буғай. Соҡор-саҡырлы урман юлында батып ултырыу кемдең күңеленә хуш килһен.

— Ярар, туҡтат машинаңды. Уның биләмәләре башланды. Юлға яҡыныраҡ ерҙә ауҙарһаҡ, үҙебеҙгә еңел, кеше күҙенә лә тиҙерәк күренә.— Тәгәрмәстәр әйләнеп бөтөр-бөтмәҫтән, Мәхмүт ергә һикерҙе.— «Дружба»ны ҡайҙа ҡуйҙың?

— Көт, хәҙер бирәм.— Сергей кузовтан бензобысҡы алып ергә ырғытты.

— Ниңә бәрәһең, утынмы ни ул һиңә. Шеф муйынынды борор, бер көнгә генә кешенән алынған.— Һүгенә-һүгенә ағастар араһынан китте. Үҙе һаман һөйләнә.— Иң йыуандарын ауҙарырға кәрәк. Вағыраҡ киҫәктәргә тураҡлайбыҙ ҙа ут төртәбеҙ. Әллә үҙең менән алаһыңмы, ҡыш етте бит, лоджияңды йылытырһың,— тип йәпһеҙ шаяртты. Сергейҙың йүнле йәшәрлек ере юҡлығын ул белә ине. Шуға күрә иң ауыртҡан ере ошо. Тегеһе өндәшмәне, ауыҙ эсенән генә асыулы итеп ниҙер мығырланы һәм арты менән боролдо.

Ҡалған эште өндәшмәй башҡарҙылар. Кеше өркөтөп һәм талап йыйған әҙер аҡсаға типтереп өйрәнгәс, ауыр ҡул эше үҙәктәргә үтә. Стас та тапҡан кемгә ҡушырға, мужикмы ни улар? Ат кеүек егелеп эшләр өсөн уның янында өйөрөләләрме? Һәр ҡайһыһы эстән генә Стасты һүкте.

Ҡыҫҡара барған көндөң ғүмере лә шул — килгәндәренә ике-өс сәғәт ваҡыт үткәндер, күҙ бәйләнә башланы. Ағас байтаҡ ауҙарылғайны. Кескәй генә аҡлансыҡ хасил булған хатта. Төпһәләре оҙон-оҙон булып һерәйеп торалар. Барыһы ла шеф ҡушҡанса. Ҙур эш башҡарғандай, ауҙарылған ағастарға ҡарап торҙолар.

— Етер инде, Мәхмәт.

— Йә, ярар, бата. Бер урынға ташыйыҡ та яндырырбыҙ.

Ағастарҙы ауҙарған ыңғайға ике-өс урындан тураҡлағандарына һөйөнөп ҡуйҙылар. Тәҡәттәре ҡороно, валлаһи, шул килеш бензин һибеп, шырпы һыҙырҙай булып йөрөйҙәр.

Аһылдай-аһылдай ташып бөттөләр. Юҡ, был урман эшендә дурактар ғына эшләһен. Ғөмүмән, шундай мәсхәрә өсөн яралғандармы ни улар донъяға. Өйөлгән ағастар өҫтөнә ултырып, папирос ҡабыҙған ике егеттең уйы бер тирәләрәк өйөрөлдө.

— Ярай, етер. Ут төртөргә лә ысҡынырға. Килтер кәнистрҙе.

— Янып бөткәнен көтмәйбеҙме?

— Ҡарарбыҙ.

Бензин һибелгән ағас өйөмө гөлтләп тоҡанып китте. Ут ләүкелдәп өҫкә күтәрелгәндән-күтәрелә бара.

— Янғын сыға күрмәһен.

— Иҫең китмәһен юҡҡа.— Мәхмүт ҡабына башлаған ағастарға сертләтеп төкөрҙө.— Йәй көнө түгел дәһә. Бер ни ҙә булмаҫ.

Ут әҙерәк һүрелә биргәс, еңел тын алып, кабина эсенә кереп ултырҙылар.

— Артабан ни эшләргә икәнен онотмағанһыңдыр?

Машинаны ҡабыҙып маташҡан Сергей баш ҡаҡты.

— Ҡалаға ҡайтыу менән, мин район хакимиәтенә шылтыратам. Һин теге анонимканы леспромхозға индереп бир ҙә ысҡын. Артыҡ һүҙ әйтмә. Тиҙ эшләргә кәрәк. Почта аша оҙаҡ була. Барыһы ла план буйынса бара, хатты ҡабат яҙып тороуҙың кәрәге юҡ.— Машина ҡуҙғалып киткәс, асыҡ тәҙрә аша папирос төпсөгөн ырғытты.— Икенсе тапҡыр кем менән һөйләшкәнен белеп эш итһен был хәсрәт урмансы.

## 52

— Инергә мөмкинме?

— Әйҙүк, улым, түрҙән уҙ.

Тәпәшерәк ишек башына бәрелмәҫкә тырышып, Айвар эскә атланы. Оло йәштәге кешеләргә хас булғанса йыйыштырылған өй эсендә йәше апаруҡ күренгән бабай кәлтер-көлтөр килеп тамаҡҡа яраштырып йөрөй ине. Егетте күргәс, аҙарынып китте.

— Әйҙә, әйҙә, үт. Хәҙер сәйем дә ҡайнай.

Байтаҡтан кеше менән аралашмаған ҡарттың әҙәм тауышына һыуһауы ине был. Үҙе лә айҙар буйына яңғыҙ йәшәгәс, Айвар быны шундуҡ төшөндө. Ярай ҙа ул йәш, теләй икән сыға ла китә йортонан. Бабайҙың уны мөмкин тиклем үҙ йортонда оҙағыраҡ тоторға теләүен ауырһынмай ғына ҡабул итте шуға күрә. Ул йәйәү килгәнгә сарсап, үтеп барышлай ғына ингәйне. Юлсыға ҡайнар сәй артыҡ ризыҡ түгел. Оло кешенең ҡойто күренгән өҫтәленә ҡала күстәнәстәрен апаруҡ теҙеп ташланы.

— Юҡ менән булаһың, балам. Ғүмер бөтмәһә, ейәһе ризыҡ табылыр. Барына шөкөр.

— Ауырһынмағыҙ, бабай. Исемегеҙҙе белмәйем инде.

— Ибраһим тиҙәр мине. Байтаҡ йәшәлде инде, һикһәнде ҡыуам бит.— Шәшкеләренә сәй ҡоя-ҡоя, бабай әкренләп кенә һүҙгә кереште.— Әбейҙең үлеп киткәненә инде байтаҡ. Ҡайһы саҡ ниңә үҙем элегерәк гүр эйәһе булманым икән тип үкенеп ҡуям. Ни эшләйһең, барына ла хоҙа ҡөҙрәте. Әбей менән алама йәшәмәнек, шөкөр. Төрлө саҡтар булғандыр, уныһы бар. Һуғыш заманына тура килде бит. Артыҡ шашҡанмындыр ҙа бәлки. Әле яңғыҙым көңгөр-ҡаңғыр йәшәп ятҡанда үкендерә лә бит йәшлек дыуамаллығы. Барыһы ла артта шул.

— Балаларығыҙ юҡмы ни?

— Бар, улым, бар. Тик ситтәләр шул. Йәш кешеләргә ауыл тирәһендә оҡшаймы ни хәҙер. Әҙәмсә тормош булһа, ата-баба нигеҙен һыуындырырға атлығып тормаҫтар ине. Йәй көндәрендә отпускыға ғына ҡайтып киткән булалар. Күргәндәй ҙә булмайым, исмаһам.

— Улайһа ярҙам итәһе кешегеҙ ҙә юҡтыр?

— Ҡайҙан булһын инде, улым. Колхоз һуғыш ветеранына тип утын бирә биреүен. Эш итеүсе кеше юҡ шул. Үҙемдең хәлдән киленкерәмәй.— Бабай тәҙрәгә ымланы. Унда, ысынлап та, тракторҙанмы, машинананмы бушатылған утын тырым-тыраҡай туҙышып ята ине.

Айвар һуңғы шәшкеһен эсеп сынаяғын түңкәрҙе лә кейенә башланы.

— Китәһеңдәме ни?
— Юҡ, бабай. Утынығыҙ менән әҙерәк булышайым, тигәйнем.
— Балам, уңайһыҙ бит әле. Эшләтер өсөн һөйләмәгәйнем дә һуң.
— Ярар, юҡҡа хафаланмағыҙ. Бысҡы-балтағыҙ ҡайҙа ҡуйылған?
— Ай алланың изге бәндәһе. Хәҙерге заманда ла ҡоромаған икән тәүфиҡлы балалар.— Бабай һөйләнә-һөйләнә иҫке быймаһын, тунын эләктерҙе.— Хоҙай үҙе килтергәндер инде һине минең йортома.
Айварҙың бысып ярған утындарын бабай, ярҙам итәйем типтер инде, әкренләп өйә барҙы. Ҡуҙғалыуы шул самараҡ, ҡартлыҡ бөрә. Егет тәүҙәрәк уны өйгә индереп ебәрергәме тип йыйынғайны, кире уйланы. Йөрөһөн әйҙә, үҙе беләлер.
Күҙ бәйләнгәнсе, байтаҡ эшләп ташланылар. Эңер төшөү менән, ҡарт Айварҙы өйгә әйҙүкләй башланы.
— Әйҙә, әйҙә, улым, етер инде.
— Аҙ ғына ҡалды бит. Өйөп бөтәйем, тигәйнем.
— Әйтергә теләмәгәйнем дә. Һин йәш кеше, беҙҙең ише ҡарт-ҡороноң хөрәфәтенә ҡолаҡ һалып бармайһығыҙ. Ҡараңғы төшкән мәл ен-пәрейҙең шашҡан сағы, һуғылып ҡуйырһың.
Егеткә бабай артынан эйәреүҙән башҡа сара ҡалманы. Кескәй өйөм утынды бөтәм тип, оло кешенең һүҙен кире ҡағыу килешмәгән эш. Ярай, иртәгә иртүк тамамлар. Төнгә ҡаршы юлға сығып булмай барыбер.
— Рәхмәт инде, улым. Кемгә әйтергә белә алмай аптырап йөрөй инем. Яғырға утын да бөткән.
Айвар ҡосаҡлап индергән утындарын мейес алдына бушатҡас, ҡарт тағы ла йәнләнеп китте.
— Бына, улым, телеграм һуҡҡан булғайным аптыраған көндән. Кесе малайға инде. Яңыраҡ хаты килде. Күршенең ҡыҙы уҡығайны, яртыһын онотоп та бөттөм. Күҙҙәремдең нуры ҡайтҡан. Мәле, улым, тағы бер тапҡыр ҡысҡырып уҡып ебәр. Оҙаҡламай ял алып ҡайтам тип яҙған буғай. Ҡыш көнө йөрөгәне юҡ ине, минең телеграмды алғас, уйлап ебәргәндер инде.— Ибраһим бабай түрьяҡта байтаҡ соҡонғандан һуң, ҡайҙалыр ҡәҙерләп һаҡлаған, таушала төшкән конвертты егеткә килтереп тотторҙо. Күрәһең, уҡый алмаһа ла, әленән-әле алып ҡараштырғылаған. Хатҡа күҙ төшөрөү менән, быны аңлауы ҡыйын түгел.
Айвар конверт эсенән дүрткә бөкләнгән ҡағыҙҙы тартып сығарҙы һәм... шунда уны сәйер тойғо баҫты. Булыуы

мөмкин түгел! Әкрен генә уҡый, бармаҡтары ашығып яҙылған һүҙҙәр өҫтөнән йөрөй. Юҡ, булмаҫ! Ләкин ултырған һайын ныҒыраҡ инана бара — хатты яҙған кеше тере түгел ине. Әйләндереп, датаһына күҙ төшөрҙө — ун көн элек яҙылған...

— Бабай, быны һеҙҙең улығыҙ яҙғанмы?

— Эйе, балам, шуның ҡулы ла баһа.— Егеттең өндәшмәүен үҙенсә баһаланы шикелле.— Нимә, әллә килешмәгән берәй әйбер яҙғанмы?

— Юҡ, юҡ, Ибраһим олатай. Былай ғына.— Айвар ни эшләргә белә алмай аптырап ултыра ине. Әйтергәме бабайға? Был хәбәр уны аяҡтан йығасаҡ. Юҡ, өндәшә алмай егет был хаҡта. Ҡарттың тилмереп торған күҙҙәренә иғтибар иткәс, ҡысҡырып уҡый башланы.— Улығыҙҙың исеме Мөнирме, бабай?

— Эйе, эйе, тап үҙе.

«Тимәк, шул. Үлгән». Егет киң йылмайып хатты бабайға һондо. Унда әллә ни яңылыҡ яҙылмағайны. Мөмкинлек табып, ике-өс аҙнанан ҡайтырға тырышырмын, тигән һөйләмен иғтибарға алмағанда, әлбиттә.

— Ғаиләһе бармы улығыҙҙың?

— Бар, бар. Ике ҡыҙ үҫтерә. Етеп бөтөп баралар инде балалары.

— Ибраһим олатай! — Айвар нисегерәк әйтергә белә алмай ыҙаланды. — Бәлки, икенсе улығыҙға ла телеграмма һуғып ҡарарһығыҙ? Алыҫ ара булһа ла, бәлки, юлы төшөр... — Үҙе бабайҙың күҙҙәренә тура ҡарамаҫҡа тырышты. Алдашыуы еңел эш түгел шул ул. Маҡсаты изге булған хәлдә лә. Уйҙарын икенсе яҡҡа йүнәлтергә тырышты. Кесе улының вафат булыуы хаҡындағы хәбәр килгәнсе, олоһо ла, бәлки, ҡайтып етер.— Бабай, әйҙәгеҙ, иртәгә үҙем ебәрәйем ул телеграмманы. Почта бармы ауылда?

— Ай, рәхмәт төшкөр бала булып сыҡтың да баһа. Изгелегең өсөн алла ярҙам бирһен үҙеңә. Бар пушты ауылда, аллаға шөкөр. Бына йәшәгән ере оло улымдың.— Дәфтәр битенә сыймаҡланған адрес һондо.

Тамаҡ ялғап алғас, хат тураһында ҡабат һүҙ ҡуҙғатмаҫҡа тырышып, Айвар бабай күрһәткән урынға барып ятты. Кешенең ҡулы яҙған яҙыу буйынса уның хәлен белеү һәләтен үҙендә быҒаса һиҙмәгәйне ул. Тәүге осраҡта уҡ ошо ярҙамһыҙ ҡарттың төпсөк улының үлемен белергә мәжбүр булыу уны һиңкәҙәткәйне.

## 53

Ғәжәп шикелле, һуңғы арала Айварҙың урмандағы ғортонан кеше өҙөлмәҫ булып китте. Бына әле ҡайтыуына тағы өс кеше көтөп торған. Ҡыҙғанысҡа, кәйеф ҡырырлыҡ ҡына хәбәр еткерҙеләр. Олораҡы, Хисмәтуллин тигәне, был ваҡытта урмансының ни эшләп ситтә йөрөүе менән ҡыҙыҡһынды. Көн һорауын белгәс тә, кәнәғәтһеҙлек бөркөлөп торған йөҙө үҙгәрмәне.

— Һеҙ әллә күпме ваҡыт ситтә күңел асаһығыҙ, Айвар Айбулатович, ә был мәл,— Йыуан портфеленән акт ҡағыҙы сығарып, егеткә һондо, — һеҙгә беркетелгән биләмәләрҙә әллә нәмә ҡылананалар. Рөхсәт ителмәгән күләмдә, технологияны боҙоп, ҡарағайҙарҙы ауҙарғандар. Етмәһә, янғын...

— Янғын? Ниңә баштан уҡ әйтмәнегеҙ?

— Ултыр! Ултыр урыныңа. — Хисмәтуллин түрәләрсә ҡулын иҙәне.— Янғын уҡ түгел. Ҡырҡылған ағастар ут төртөлгәнгә оҡшай. Ни маҡсат менән эшләнгән — быныһы аңлашылмай.

— Ҡайһы тирәлә һуң?

— Оло юлдан алыҫ түгел. Күрмәнеңме ни? Ә, саңғыла инең бит әле. Бына шулай, хөрмәтле иптәш, барып ҡарайбыҙ ҙа ҡул ҡуяһың актҡа. Штраф түләргә тура килер.

Айвар ишеткәндәрен нисек баһаларға белә алмай ине. Уның биләмәләрендә былдай хәлдең булғаны юҡ. Ағасты ҡырҡып, етмәһә, ут төртөп йөрөргә кемдең көсө артыҡ һәм кемгә хәжәт? Иҫең китер... Ә былар ҡасан белеп өлгөргән һуң?

— Ә, туҡтағыҙ әле, иптәш Хисмәтуллин. Һеҙ ниндәй эш буйынса килгәйнегеҙ? Нисек тап иттегеҙ ул урынды?

— Ялыу бар, Илбәков.

— Ялыу? Кем яҙған?

— Ҡыҙғанысҡа, анонимка. Леспромхозға индереп сыҡҡандар.

— Ҡарарға мөмкинме?

— Рәхим ит.

Айвар машинкала баҫылған дәфтәр битен ҡулына алды. Еренә еткереп эшләгәндәр, ҡәһәрең. Ҡул менән яҙып, бер кемдең дә артынан эҙ ҡалдыраһы килмәй. Унда урман ҡараусы Илбәковтың булған-булмаған гонаһтары теҙелгән, иң һуңынан байтаҡ ағастарҙы рәттән ҡырҡып, туған-тыумасаһына таратыуы, урманды ҡоротоуы хаҡында яҙылғайны.

— Һы... Һеҙ шуға ышандығыҙмы?

— Тикшерергә тура килә, туған. Анонимка булғас, ҡул һөлтәргә мөмкин ине. Район хакимиәтенән ҡыҙыҡһындылар.

— О, унда ла барып еткән. Ниндәй сәйер осраҡлыҡ!

— Һеҙ ни әйтергә теләйһегеҙ, Илбәков?

— Былай ғына. Әйҙәгеҙ киттек. Дөрөҫкә сыҡһа, ҡул ҡуйып, штрафын түләрмен. Тағы ниндәй иҫкәртмәләрегеҙ бар?

— Башҡалары дөрөҫләнмәне. Әлегә ошо ғына. Һеҙҙең туған-тыумасаға яла яҡҡандар. Яңылышмаһам...— Хисмәтуллин ыҡ-мыҡ итте.

— Тураһын әйтегеҙ инде, Хөрмәт Ризаевич, мин ситтән килгән кеше, зат-зәүерем юҡ бында.

— Ысынлап та, тура һүҙгә яуап юҡ.— Комиссия рәйсенә был егет оҡшай башланы. Тетмәһен тетергә әҙерләнеп килгән еренән, уға ҡарата ихтирам һымаҡ нәмә уяныуына ғәжәпләнеп ҡуйҙы.

— Һеҙ бында күптән эшләйһегеҙме, Айвар Айбулатович?

— Биш йылдан ашты.

— Нисек килеп сыҡтығыҙ һуң? Элегерәк аспирантурала уҡып йөрөгәнһегеҙ, тиҙәр. Ҡапыл урман ҡараусыға әйләнеүегеҙ сәйер.

— Был оҙон тарих.— Айвар һүҙҙе кинәт икенсегә борҙо. — Рәхәт ҡышҡы саф һауала йөрөүҙәре. Шулаймы, егеттәр?

Хисмәтуллин менән бергә килгән ике йәш егет баш ҡаҡты. Улар әллә ни һүҙгә ҡыҫылмайҙар ине. Күрәһең, комиссия рәйсе улар өсөн ҙур абруй. Үҙ-ара ғына, тауыштарын артыҡ күтәрмәй, һөйләшеп алалар.

Брезент менән көпләнгән машина тырым-тыраҡай туҙышып ятҡан, янып бөтмәй ҡарайған ағас киҫәктәре һерәйешеп торған ергә килеп туҡтаны. Иң тәүҙә Айвар һикереп төштө. Был күренешкә иҫе киткәйне уның, тәүҙә ни әйтергә белә алмай торҙо. Леспромхоз вәкилдәре урмансының ихлас көйөнгәнен күреп, бер-береһенә ҡаршты.

— Ни, Айвар туған, — Хисмәтуллин фекерен бер төйөнгә туплай алмай ыҙаланды, — бәлки акт төҙөргә кәрәкмәйҙер? Һеҙҙең биләмә районда өлгөлө бит. Ундай-быңдай хәлдең булғаны юҡ ине. Тәүге тапҡыр кисерергә мөмкин.

— Һеҙ ни хаҡта? Ә... акт. Килтерегеҙ, ҡул ҡуям.— Хисмәтуллиндың ҡулынан алып, фамилияһын сыймаҡланы ла урман эсенә атланы. «Һеҙ кем генә булған хәлдә лә, тәүбәгә килтерәсәкмен... Ағастар бит һөйләшә, улар-

...ың да йәне бар. Күпме ғүмер ҡыйылған ут эсендә... Ус алырға тырышыуымы? Ни өсөн? Ә уларҙың ғәйебе нимәлә? Минең урманда үҫкәнгәме? Тәүбәгә киләсәкһегеҙ...»

## 54

Әҙәм ышанмаҫ хәлдең үҙ ярандары менән булғанына иҫе китте Стастың. Сергей менән Мәхмүт леспромхозға барып, үҙҙәренең урманда нисек итеп ҡарағайҙарҙы ауҙарғандарын, барыһының да Стас ҡушыуы буйынса эшләнгәнен һөйләп йөрөгәндәр, имеш. Милиция бүлегенән үҙ исеменә повестка килеп төшкәс, аҙарынып ҡалғайны. Саҡырыуҙың асылын белгәс, фатирында ел-дауыл уйнатты. Әллә ҡайҙан белеп, был хәбәрҙе килтереп еткергән Хәмит хатта үҙенең ошонда торорға мәжбүр булыуына үкенеп ҡуйҙы.

— Уларға ышанырға ярамай, шеф, — тигән булды үҙ баһаһын күтәрергә тырышып.— Башында тамсы ғына аҡылы булған кеше шулай ҡыланамы инде.

Стас өндәшмәне. Тын булмәлә уның тештәренең шығырлағаны ғына ишетелә ине.

— Саҡыр! — Үҙенә аңшайып ҡарап торған Хәмиттең аңламағанына йәне көйөп, кинәт екерҙе.— Саҡыр тим тиҙерәк теге икәүҙе! Бер аяғың бында, икенсеһе тегендә булһын.

Хәмит өтәләнеп сығып йүгерҙе. Ярты сәғәт ваҡыт үттеме-юҡмы, еңеүсе ҡиәфәтендә теге икәүҙе төрткөләп, Стас янына килеп инде. Мәхмүт күҙен алартып Хәмиткә ҡарай. Бынан ике-өс көн элек ҡуштанланып яндарында йүгереп йөрөгән Хәмиттең үҙен әллә кем итеп тотоуына йәне көйә, ләкин хәҙер бер ни тип тә өндәшә алмай ине.

— Шунан, ыласындар, һөйләп ебәрегеҙ үҙегеҙҙең батырлығығыҙ хаҡында. Миңә өйөргә булдығыҙмы инде барыһын да? Йә, мин көтәм!

Уға ҡаршы баш күтәргәс, был икәүҙе ошондай ҡиәфәттә булырҙар, тип уйламағайны Стас. Әле иһә күшеккән тауыҡ шикелле бөршәйеп торғандарын күреп, иҫе китте. Нимә булған былар менән? Әллә аҡыл яҡтары самалана башлағанмы?

— Йә!

— Шеф, ни...

— Нителдәмәй генә. Ни өсөн барҙығыҙ? Һораған кеше булдымы? — Стас күҙҙәренән уттар сәсеп, был икәүҙе урап сыҡты. — Йә!

— Беҙ бер нәмә лә белмәйбеҙ. Нисек барғаныбыҙҙы хәтергә төшөрә алмайым.— Мәхмүт ыҡ-мыҡ итте, Сергейға ҡарап алды. Уныһы баш ҡаҡҡан була.

— Нисе-ек? Эскәйнегеҙме?

— Ю-уҡ, юҡ, тамсы ла йотманыҡ. Быныһын асыҡ беләм. Иҫкә килһәк, Сергей теге көн хат ҡалдырып киткән йорт алдында торабыҙ. Кисә милициянан яҙыу килгәс, ҡабат барҙыҡ. Унда беҙҙең аңлатма ята икән,— Мәхмүт Стасҡа ҡыйыр-ҡыймаҫ күтәрелеп ҡараны ла өҫтәне, — ҡултамғалары менән.

Стас йомшара төштө, шулай ҙа асыуы үтмәгәйне.

— Ҡарағыҙ уны. Һуңғы тапҡыр булһын, ишетһен ҡолағығыҙ. Тағы бер яҙа баҫһағыҙ, минән яҡшылыҡ көтмәгеҙ.— Еңел тын алып ҡуйған ике егеткә күҙҙәрен аларт-ты.— Хәҙер ысҡынығыҙ милиция бүлегенә, барыһын да үҙ өҫтөгөҙгә алаһығыҙ. Минең был эшкә бөтөнләй ҡыҫылышым юҡ.— Яҡыныраҡ килеп өҫтәне. — Ишеттегеҙме, тим?

— Ишеттек, ишеттек, шеф. Барыһы ла эшләнер.— Аллы-артлы сығып киттеләр. Стас иһә был икәү менән ни булғанын аңлай алмай, диванға барып ятты.

## 55

Буран ҡотора. Ауыр машиналар бер-берeһенең өҫтөнә менә яҙып үкерешеп, алға ынтылалар. Һәр кемдең үҙ мәшәҡәте, һәр кем үҙенсә ҡабалана. Шаршау кеүек тотош ҡар ғына ирекһеҙҙән тиҙлекте кәметергә мәжбүр итә. Тәҙрәләрҙе туҡтауһыҙ «һепертке» таҙартып тороуға ҡарамаҫтан, алда ни ҡылыныуын йәһәт кенә төшөнөп бөтөрлөк түгел.

Колоннаһынан бүленеп арттараҡ ҡалған ҙур «Урал» машинаһы тиҙлеген арттыра төштө. Күрәһең, шоферы был яҡтарҙан тәүләп үтәлер — шундай буранда тәүәккәллек итер өсөн, аҙашып ҡалыуҙан ҡурҡырға кәрәк. Еңел машиналарҙы урап уҙа-уҙа, яҡынлаша башланы. Күп тә ҡалманы, бары бер ынтылһа, урынында буласаҡ. Иңенән һалдат формаһын да һалып өлгөрмәгән өлтөк сәсле йәш егет тағы ла газ өҫтәне һәм... сытырлатып күҙҙәрен йомдо. Ҡот осҡос хәлдең сәбәпсеһе, дөрөҫөрәге, шаһиты булмаҫ өсөн. Бер нисә секунд ваҡыт эсендә ҡобаралары осҡан өс-дүрт кешенең ағарынған йөҙҙәре күҙ алдынан уйнап үтте. Аҡ «Москвич» колонна араһынан үтергә аҙапланғанда, ауыр машиналар араһына ҡыҫылғайны. Алға юл юҡ, артҡа сигергә өлгөрмәйәсәк. Шофер

егет бар көсөнә рулгә йәбеште. Юҡ, өлгөрмәй! Өлгөрмәйәсәк! Етмәһә, бураны. Ах!

Әллә серәнгәнгә тештәре шығырланы, әллә тимер тауышы булды. Шулай ҙа күҙҙәрен асты, ни эшләйһең, яуаптан ҡотолоу юлдары юҡ. Исмаһам, берәйһе тере ҡалһа ярай ҙа.

Буран баҫыла төшкәйне. Тәҙрә аша алда ни барыуын тәүҙә аңлай алмай торҙо. «Москвич» йәймәгә әйләнеп, уның машинаһы тәгәрмәстәре аҫтында ятаһыр, тип уйлағайны ул. Уныһы иһә, бер ни булмағандай, юл ситендә ултыра. Дөрөҫөрәге, артҡа табан сигә. Һәм күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә. Ниндәйҙер мәл машинаны этеүсе сәйер һын күҙҙәренә күренгәндәй тойолдо. Ҡулдарын алға һуҙған, ләкин кәүҙәһе үтә машинаның бөтә деталдәре ап-асыҡ тоҫмаллана. Мистика! Шофер күҙҙәрен ыуалап алды, юҡ, ысынлап. Һы! «Урал» туҡтағайны, алда барыусы шундай уҡ машинаға еңелсә бәрелгән.

Эрнст кабинанан һикереп төштө, тунын кейеп тороу иһә башына ла инеп сыҡманы. Һепертмә буран биткә бәрә, йоҡа күлдәккә ҡар һырылып өлгөрҙө. Егет былар- ҙың береһенә лә иғтибар итмәне. Ярай ҙа әйләнә-тирәләге ауыр техника туҡтап өлгөргәйне. Тимәк, иптәштәренең ташлап ҡалдырмаҫына ышанырға була. Хәйер, әллә ни ярҙам да кәрәкмәй, шикелле — иң мөһиме, авария булманы. Тик бер нәмә аңлашылмай — ниндәй ҡөҙрәт ярҙамында ҡотолдо улар?

Эрнст «Москвич»тың тәҙрәһенә эйелде, ләкин теләгәнен әйтә алмай аптырап ҡалды. Руль артында ултырған урта йәштәрҙәге ир ике ҡулы менән баранкаға йәбешкән дә ҡатҡан, ауыҙы яртылаш асыҡ, йөҙө ап-аҡ. Бынан күп булһа биш минут элек үткән хәлдән унда шок ине. Арттағы ике ҡатын тыйыла алмай илайҙар, әллә ҡотолғандарына, әллә тапала яҙғандарына — тиҙ генә төшөнөп бөтөрлөк түгел. Күрәһең, ир кеше генә үҙҙәренең ниндәй тамуҡҡа эләгә яҙғанын шундуҡ күргән. Бындай хәлендә уның ҡотҡарыуына, бик тырышһаң да, ышаныуы ҡыйын.

Шул арала колонналағы башҡа машиналар ҙа туҡтап, шоферҙары йыйылып киткәйне. Ҡайһылары көтөлмәгән туҡталыштың сәбәбен белә алмай аптырашып берберeһенән һорай, берәүҙәре күргән тиклемен тасуирлап маташа. Әммә асыҡ ҡына итеп һөйләп биреүсе табылмағанға оҡшай. Шулай ҙа Эрнст иҫенә килгәнсе, колонна етәксеһе Хоменко барыһын да үҙ ҡулына алырға өлгөргәйне. Уның көслө тауышы әле тегендә, әле бында ишетелә.

— Степанюк, йүгер, «Тиҙ ярҙам» машинаһын саҡыр. Телефон-автоматтар алыҫ түгелдер. Санька, бар һин дә. Милицияға шылтыратырһың. Был кешенең хәле насар була ҡалһа, бәләһе булып тормаһын.— Тағы ла ниҙер әйтергә уҡталғайны, Эрнсты күреп ҡалды. — Һин, дуҫ кеше, тағы ла тиҙлегеңде арттырҙыңмы? Берәй заман ҡатырғанды алып ҡына бырғыталар инде. Бында бит Сахара сүллеге түгел, аңлайһыңмы? — Бер-ике минут пыр туҙынып әрләгәс, кинәт һыуынды.— Йә, ярар, хәҙер нисек итеп тотош колоннаны был мәшәҡәттән алып сығыу сараһын күрергә кәрәк. Тағы бер тәүлеккә ҡала алмайбыҙ ҙа бит.

Ул арала сирена тауышы ишетелде. Руль артында иҫе китеп ултырған ирҙе «Тиҙ ярҙам»ға йәһәт кенә күсерә һалдылар, шалт-шолт итеп ниҙелер фотоға төшөрҙөләр. Эрнстың күҙ алдында, башында бөтәһе бергә буталғайны. Унан ниҙелер һоранылар, ҡайһыһыналыр яуап бирҙе. Булып үткән хәлде мотлаҡ ул аңлатырға тейеш, тип иҫәпләйҙәр ине, шикелле.

Милиция бүлегендә генә егет бер аҙ һөйләрлек хәлгә килде. Дөрөҫөрәге, эҫе сәй йотторoп, тағы әллә ниҙәр ҡаптырып ултыртып ҡуя торғас, үҙе үк тынысланды.

— Йә, туған, һөйләп ебәрә һал. Ана тегендә һине өйөрҙәре менән иптәштәрең көтөп тора. Өтөп алып баралар. Булдыра алһаҡ, бер сәғәт эсендә асыҡлап ҡарайыҡ.— Өлкән йәштәге, йөҙөнән әллә ниндәй яғымлылыҡ һирпелеп торған милиционер алдындағы ҡағыҙҙарына эйелде.— Һине бүлектән бүлеккә һөйрәп йөрөрлөк сәбәп тә юҡ кеүек. Тик бер нәмә аңлашылмай — беҙ үлсәп ҡараныҡ, фотоһүрәттәр ҙә иҫбатлап тора — был осраҡта аварияның ҡотолоу мөмкин булмаған. Тик машина һинең «Урал» аҫтында ҡала яҙғас, Эрнст туған, күберәген күргәнһеңдер, тип уйлайым.

Егет ҡайһы остан башлап алып китергә белә алмай ыҙаланы. Тиҙлекте арттырған өсөн, әлбиттә, уға елле генә штраф сәпәйәсәктәр. Ләкин ғәйеп «Москвич» шоферында ла юҡ түгел. Нисек итеп шул арала юл ситенә ырғылып өлгөрҙө һуң улар? Эрнстың күҙ алдына ҡабаттан үтә күренмәле әҙәм һыны килеп баҫты. Булмаҫ!

— Иптәш милиционер, ышанһағыҙ ҙа, ышанмаһағыҙ ҙа әйтәм, мин «Москвич»ты этеүсе әҙәм ҡиәфәтендәге йән эйәһен күрҙем. Тик ул... тик ул үтәнән-үтә ине, марля һымаҡ. Ысын бына. Тапала яҙған машина крылоһы йөйөнә тиклем күренде.

Милиционер өндәшмәне. Тамағын ҡырғылап, урынынан тороп китте. Өҫтәл өҫтөндәге ниндәйҙер яҙыуҙар-

ҙы аҡтарырға кереште. Уны мыҫҡыллы йылмайыр тип көткәйне Эрнст, ләкин тап киреһе килеп сыҡты. Сал сәсле ағай кәрәкле ҡағыҙын тапҡас, урынына килеп ултырҙы.

— Һм... «Москвич» хужаһы ла шул хаҡта һөйләй бит әле. Әле генә хәбәр иттеләр дауахананан, ҡабул итеү бүлмәһендә оҙаҡ тотмағандар. Күргәндәрен һөйләтеп бер аҙ тынысландырғас, ҡайтарып ебәргәндәр. Бына нәмә, Эрнст,— Нурмөхәмәтов бер ҡулын шапылдатып егеттең яурынына һалды, — ундағы шок тәгәрмәс аҫтында ҡала яҙғандан да түгел. Ә әлеге, һин әйтмешләй, үтә күренмәле әҙәмдән ҡурҡҡан бисараң. Иҫ киткес юғары тиҙлектә ҡайҙандыр хасил булды ла машинаны ҡаҙ ҡауырыйылай этеп юл ситенә сығарып ҡуйҙы ти. Дә-ә, бер кеше генә һөйләһә, ышанмаҫ инем. Былай булғас, белмәйем шул, белмәйем... — Ике ҡулын артҡа ҡаушырып уйланып торҙо, ниндәй ҙә булһа ҡарарға килә алмай ыҙалай ине, шикелле. Шунан көтөлмәгәндә мөләйем йылмайып егеткә бороладо.

— Йә, ярар, ҡустым, һыпырт үҙеңдекеләр янына. Тик ҡара уны, тағы ла тиҙлек арттырып яндырайланһаң, үҙеңә үпкәлә.— Шуның менән һүҙ бөттө тигәндәй, урынына барып ултырҙы.

Эрнст иһә милиция бүлегенән сыҡҡас, ишек яңағына һөйәлеп байтаҡ ваҡыт уйланып торҙо. Күҙ алдына берсә ҡобараһы осҡан ирҙең йөҙө, берсә сәйер ҡиәфәттәге һын килде. Йәнәшәнән генә аҡҡан икенсел донъяның тормошонда саҡ ҡына күләгә ҡалдырып уҙыуы гәп-гәҙәти әҙәм балаһын уйланырға мәжбүр иткәйне.

## 56

— Тағы ла ауыҙҙы асып тороп ҡалдыҡ.— Ишектән ингән Биктимер күп папкаһын шапылдатҡансы өҫтәлгә ташланы.

— Ни булды, Биктимер, әй, иптәш лейтенант? — Урынынан һикереп торған Самат инеүсенең йөҙөн күргәс, был осраҡта ни тип өндәшергә лә белә алмай аптырап ҡалғайны. Тегеһе сержантҡа тамсы иғтибар итеп тормай, был иһә, Саматтың фекеренсә, иҫкелек ҡалдығы, урынына үтте. Һуңғы һуҡыр тине урам уртаһында аҡыртып илатып тартып алынған кешеләй, бит-һәтенә ҡайғылы ҡиәфәт сығарып бер аҙ ултырғас, күҙҙәре асыла төштө, йәғни мәҫәлән, ҡаршыһында ултырған йәмшек танаулы сержантҡа ҡарашы барып төртөлдө.

— Беләһеңме, кисә ҡала ситендә ниндәй хәл булған? Әле генә Нурмөхәмәтовты күрҙем, теге элек бергә эшләгән кеше, һөйләгәйнем бит.

Шефтың тауышы яғымлылана башлауын тойоп, Самат йәнләнә төштө. Ултырғысын лейтенантҡа яҡыныраҡ шыуҙырып, иҫе китеп тыңлаған кешеләй, тегенең ауыҙына төбәлде. Һәр һүҙен йоторға әҙерләнә, тиерһең. Әллә ниңә ҡыҙҙарға ғашиҡ булғандай мөкиббән китқән ул Биктимергә, аптырарһың. Бергә эшләгән хеҙмәттәштәре көлкөгә лә күтәреп бөттө, уға иһә төртмә һүҙҙәр серәкәй тешләгәндәй ҙә тәьҫир итмәй. Лейтенанттың һәр әйткәненә һәп итеп кенә тора.

— Шунан, шунан? — тигән булды Самат тегеһенең һөйләмәй ҡасып китеүенән ҡурҡҡандай.

— Шунан шул, ултырған да шыуған. Кисә ҡала ситендәге трассала авария булған. Дөрөҫөрәге, була яҙған, — тип төҙәтеп ҡуйҙы Биктимер. Унан хәбәрҙең иң кәттәһенә күскәндәй, йөҙөн мөһимләндерә һалды. — Кем булған, тип уйлайһың унда? Һинең теге осоп йөрөй торған әҙәмең! — Саматтың күҙҙәре ҙурая төшкәнен, етмәһә ялтыр-йолтор итә башлауын күреп, үҙе оса алған ҡиәфәттә күнегелгән маршрут менән өҫтәлдән тәҙрәгә, унан кире яҡҡа рейд яһап алды.

— Тағы машина һелтәгәнме әллә?

Иштең хәбәрҙе тигәндәй, Биктимер тегегә өтөп ҡарап ҡуйҙы.

— Юҡ шул. Беҙ уны енәйәтсе тиеберәк эҙләһәк, улай уҡ түгел, буғай. Бер еңел машина буран ваҡытында «Урал» аҫтында ҡала яҙған. Әллә ни арала теге әҙәм килеп сыға һалып, ике секунд ваҡыт эсендә «Москвич»-ты юлдан этеп сығарған, ышанаһыңмы шуға?—Самат ниҙер әйтергә ынтылһа ла, яуап көтөп тормай, артабан дауам итте.—Иң мөһиме, әлеге «Урал»дың шоферы, шунан теге «Москвич»тың эйәһе генә күреп өлгөргән. Күп булһа, биш-алты секунд ҡына ваҡыт күҙгә күренгәндер, ти Нурмөхәмәтов. Аңлайһыңмы, башҡалар иғтибар ҙа итмәгән. Тимәк, һин әйтмешләй, ысынлап та, әҙәмсә хәрәкәт итмәй был... — Ниндәйерәк билдәләмә бирергә белмәй аптырап ҡалды Биктимер. Унан кинәт кенә Саматҡа мөрәжәғәт итте. — Фоторобот менән эштәр нисегерәк тора әле?

— Мин уны бер нисә кешегә генә бирҙем. Үҙең беләһең, үтә ҡурҡынысты енәйәтсе түгел, шуға күрә һәр кемгә бойороп булмай.

— Һм... — Лейтенант уйланып торҙо. Уның өндәшмәүен Самат үҙенсә баһаланы.

— Ни, иптәш лейтенант, әллә эҙләүҙән туҡтарға уйлайһыңмы? Бигерәк ҡыҙыҡ та һа...

— Йә, ярар, ҡотоң алынмаһын. Теләгәнде эҙләргә беҙгә бер кем дә ҡамасауламай. Ләкин уны енәйәтсе итеп түгел, ә аңлайышһыҙ нәмә булараҡ асыҡламағанда... Беләһеңме, Самат, — Биктимер сержанттың янына күсеп ултырып, иңбашына ҡулдарын һалды, — эҙләйек беҙ уны. Үҙен һис күреп белмәһәм дә, әллә ниңә ихтирам итә башланым әле мин. Ғәжәп... Ғәжәп... Тегендә янғын, бында авария... Һәм әллә ҡайҙан ҡотҡарыусы табыла. Иҫән китер.

— Ни, Биктимер... — Самат этенә-төртөнә хәбәрен башлай алмай интекте. Унан һәрмәнеп тигәндәй, һүҙ бутҡаһын төртөп төшөрөрҙәй йырынды табып алды. — Ни, үткәндә зоопарктан айыуҙы алып киткәйне ләһә. Шул юл буйынса асыҡлап булмаҫмы тигәйнем. Кабиналағы айыу уныҡы һымаҡ тойолдо миңә. Ысын бына. Ташланырмы тигәйнем ул әҙәмгә, ҡайҙа ул, телен сығарып һырпалана инесе. Бесәй шикелле.

— Ну, Самат, ну маладис. — Һис көтмәгәндә дәртләнеп, лейтенант урынынан тороп китте. Бындай хәл шеф менән йөҙ йылға бер булғанға күрә, сержант һөйөнөргәме, көйөнөргәме икәнен хәл итә алмай интегеп торҙо бер аҙ. — Әгәр зоопарк аша эҙенә төшә алһаҡ, һин — даһи! Мин хәҙер үк асыҡлап ҡарайым.

Биктимер бүлмәнән сығып киткәс, оҙаҡ ҡына ваҡыт уйға батып ултырҙы әле Самат. Берсә кеше ҡиәфәтендәге йән эйәһен үҙенең дуҫы итеп күрергә хыялланды, берсә лейтенант менән әшнәләрсә мөнәсәбәт барлыҡҡа килеүенә инде әллә нисәнсе ҡабат балаларса һөйөндө. Уйҙарының осона сыға алмағас, бүлмә буйлап айт-дваға баҫып йөрөй башланы. Берҙән-бер сержанттан ғибәрәт армияның рарады ҡыҙған ғына мәлдә, бүлмәгә Биктимер ҡабат килеп инде. Фейерверктары ғына етмәгән был тиклем дә тантаналы марштарға күнегеп бөткәс, иҫе лә китеп торманы, исмаһам. Күңел өсөн генә лә булһа ла. Ҡулындағы ҡағыҙын, әллә кем урлауынан ҡурҡҡандай, ҡәҙерләп өҫтәлгә һалды.

— Самат, һинең һиҙенеүең дөрөҫкә сыҡты, — тип өндәште күҙҙәренә төбәлеп торған бисараға. — Айыу урланған булған. Ләкин... Нисек әйтергә... Зоопаркка килтереп һатҡан кеше, йыртҡыс юғалғас, аҡсаһын кире биргән. Ә үҙен бик ҡомһоҙ әҙәм, тиҙәр. Быларҙың барыһын да төшөнөп бөтә алаһыңмы? Әллә ниндәй бәйләнеш бар, тик ниндәй — аңлайышһыҙ. — Фәлсәфәүи темаға тотош сәғәтлек лекция һөйләп ташларға дәрте юҡ түгел ине,

ҡағыҙына ҡарағас, трибуна артынан һикереп төшкәнен белмәй ҙә ҡалды. — Ҡара әле, Самат, анау кешенең адресы, телефон номеры ла бар. Мотлаҡ күреп һөйләшергә кәрәк. Бәлки, тегенең эҙенә төшөп булыр.

Бер нисә минуттан улар ҡала урамы буйлап машинала елдерәләр ине.

## 57

Мәхмүт менән Сергейҙың уның һәр ҡушҡанына һәп итеп тороуҙарын күреп, Стас уйға ҡалды. Хәҙерге ҡыланыштары менән үткәндәге ваҡиға араһында һис ниндәй бәйләнеш юҡ ине. Әллә эсһәләр ҙә алдайҙармы күҙ ҙә йоммай? Улай тиһәң, иҫерек кешенән кем аңлатма яҙҙырып ултырһын, тура икенсе йортҡа оҙатырҙар ине.

Урман ҡараусыны штраф ярҙамында аҡылға ултыртырға тырышыу шулай итеп барып сыҡманы. Юҡ, бының менән генә ҡотолдом, тип уйлама әле һин, албаҫты... Албаҫты! Ошо һүҙ тел осона килгәс, Стас һикереп торҙо. Әллә шуның эшеме? Булмаҫ! Нисек итеп әзмәүерҙәй ике ирҙе мәжбүр итә алһын ти. Уйлап ҡараһаң, теге йолҡоштарҙың һөйләүенә ҡарағанда, стена аша йөрөгән нәмәнән әллә ниҙәр көтөргә мөмкин. Бәйләнеүе лә ҡурҡыныс ул әҙәм менән, эштәр былайға китһә. Икенсе яҡтан, ялтырашып ятҡан һары алтын тауҙары күңелде ҡытыҡлай... Юҡ, баш тартырға көсө етмәй. Етмәй! Төп кәртте эшкә егергә тура килә инде. Ошо көндәрҙә үк, башҡаса көтөрлөгө ҡалманы.

Ныҡлы ҡарарға килгәс, урынынан торҙо, телефон трубкаһына үрелде. Егерме-егерме биш минут самаһы ваҡыт үтеүгә Сергей менән Мәхмүт килеп ингәндә ул шул уҡ урынында баҫып тора ине. Шефтың тынысһыҙлығын боҙорға баҙмай, тегеләр тамаҡ ҡырған булды. Әүәлгесә екерер тип ҡурҡтылар, буғай. Ғәжәпкә, Стас тауышын күтәрмәне. Хатта, һис көтмәгәндә, иңбаштарына әшнәләрсә шапылдатып һуғып алды.

— Бына нәмә, егеттәр, үҙегеҙҙең гонаһығыҙҙы аҡларға ваҡыт. Бөгөн үк тотонаһығыҙ.

— Ниндәй эш, шеф?

— Эшләйбеҙ уны.

Стас ҡупырайышҡан ике әтәсте көлөмһөрәп урап сыҡты ла әүәлге урынына — креслоға барып ултырҙы. Ни өсөн икәнлеген тәфсилләп аңлатыуҙы кәрәк һанаманы — планын ҡыҫҡаса һөйләп бирҙе. Хәйер, тегеләр һис ҡасан төпсөшөп тормайҙар, шул яҡтары шәп. Стас ҡуша икән, тимәк, кәрәк.

— Тағы анау ҡыҙмы ни?

Мәхмүттең һорауына эйәген генә ҡаҡты. Шуны ла аңламайһың, мәүеш, тигән фекер ҡаҡсып ҡына китте мыйыҡ аҫтынан.

— Йә, төшөндөгөҙмө инде?

Баш һелккән булдылар.

— Ҡарағыҙ уны, был юлы ла йөҙгә ҡара яҡһағыҙ, үҙегеҙгә үпкәләгеҙ. Һуңғы иҫкәртеү.

Мәхмүт менән Сергей Стастың фатирынан сыҡҡас, бер-береһенә ҡарап аптырашып торҙолар.

— Шеф менән ни булған? Машинаһын беҙгә бирмәй торғайны ла һа.

— Әллә теге туташ аҫыл ҡошмо икән? Үткәндә шуның арҡаһында яңаҡҡа ла ҡундырҙы. — Сергей әле генә битенә сәпәп сығарылған шикелле, шырт баҫҡан яңаҡтарын һыйпап ҡуйҙы.

— Ярар, юҡ менән баш ватҡансы, нисегерәк эләктереү сараһын күрәйек.

— Ҡасан сығабыҙ һунарға?

— Уның әллә ҡайҙа барғанын көтөп тормайбыҙ инде. Ҡайтҡан ваҡытын беләбеҙ.

— Бәлки, үткәндәге урында, ә, Мәхмүт?

Тегеһе хәл итеү дилбегәһе үҙ ҡулдарына эләккән әҙәмдәй, елкәһен ҡашып торған булды.

— Ниңә, бата. Шунан да аулаҡ ерҙе табып булмаҫ.

— Килештек.

Стастың машинаһына ултырып, таныш йортҡа йүнәлделәр.

— ....Бөгөн дә булмаһа, шеф муйынды бораса́ҡ.

— Тағы әлеге маңҡа малайын эйәртеп ҡайтырмы икән?

Мәхмүт өндәшмәне, һүгенеп кенә ҡуйҙы. Бына икенсе көн һағалайҙар улар. Кисә подъезд төбөнә тиклем бер малай портфелен тотоп килде. Ҡыҙ бигүк асылып һөйләшеп бармаһа ла, һағыҙаҡ һымаҡ йәбешкән. Мәхмүт машинанан һикереп төшөп, елкәһенә ҡундырырҙай булып ултыра ла эште боҙоуҙан ҡурҡынҡырай. Былай киәфәттәрен төрлөсә ҡыландырғандар: икеһендә лә ҡара күҙлек, Сергей мыйыҡ йәбештергән. Ҡыҙ уларҙы үткәндәгесә күрһә, бер саҡрымдан урап үтәсәк. Әллә Стастың машинаһы таныш тойолдо — һағайған һымаҡ күренде.

— Килә! — Сергей Мәхмүттең ҡабырғаһына төрттө.

— Тағы теге малай менәнме?

— Юҡ, үҙе генә.

— Ысҡындырырға ярамай.

Айгөлдөң улар янынан үтеп киткәнен битараф ҡиәфәттә көтөп ултырҙылар. Ҡыҙыҡай биш-алты аҙым самаһы атлауға, Сергей машинаны ҡабыҙҙы. Ҡалғаны бик тиҙ булды. Машина эргәһендә туҡтағанға ғәжәпләнеп, Айгөл әйләнеп ҡарарға ла өлгөрмәне, Мәхмүт атылып сығып бирсәткә кейгән ҡулы менән ауыҙын баҫты, икенсеһе менән кәүҙәһен аймап тотоп, асыҡ ишеккә табан этте. Тыпырсынған ҡыҙҙы артҡы урынға индереп, йәнәшәһенә ултырырға ул саҡ өлгөрҙө, «Нива» ырғылып урынынан ҡуҙғалды. Ҡар өҫтөндә биге ысҡынған портфель генә ятып ҡалғайны.

## 58

Айвар әленән-әле түҙемһеҙләнеп сәғәтенә ҡарай. Паркта йөрөүенә инде бер сәғәт булып килә, Айгөл юҡ та юҡ. Былай һуңлағаны юҡ ине лә һуң, әллә бер-бер хәл булдымы? Килә алмаһа, алдан хәбәр итә торғайны. Тимәк, сәбәбе етди булырға тейеш. Боролоп ҡына ҡайтып китер ине, күңелендә әллә ниндәй шом. Ҡайтырға уҡталған еренән ебәрмәй билдәһеҙ ептәр.

Йортона барып белгәндә? Әллә нисек, уңайһыҙ кеүек. Икенсе яҡтан, асыҡламайса барыбер тыныслыҡ булмаясаҡ.

Айвар тәүәккәлләне. Ҡулына тотҡан сәскә бәйләмен парктағы һәйкәлгә алып барып һалды, кеҫәһенән кескәй блокнот сығарып, ундағы адресҡа күҙ һирпте һәм тротуарға табан атланы.

...Ҡыңғырауға баҫҡайны, эстән йүгереп килгән аяҡ тауыштары ишетелде. «Әллә Айгөл мине тантаналы ҡаршыларға йыйына инде», — тип уйларға ла өлгөрмәне, ишек асылып китте. Унда илауҙан күҙҙәре шешенеп бөткән Гөлзифа ханым баҫып тора ине.

— Ҡыҙым, әллә... — Башлағанын әйтеп бөтөрә алмай, тыны ҡыҫылғандай туҡтап ҡалды, унан илап ебәрҙе.

Айварҙың йөрәге жыу итеп китте. Шундай уҡ хәл бынан өс-дүрт ай элек булғайны бит инде.

— Гөлзифа Сәлиховна, ни булды? — Яуап биргәнен көтөп тормай эскә уҙҙы, ишекте япты. — Ни булды? Әйтегеҙ әле, зинһар...

— Айгөл... Ҡыҙым юҡ. — Һулҡылдай-һулҡылдай йөҙөн ике ҡулы менән ҡапланы, ниҙер әйтергә ынтылды, хәле етмәне, шикелле, түрьяҡҡа иҙәне. Айвар ул күрһәткән яҡҡа әйләнеп ҡараны ла аптырап ҡалды.

— Бәй, портфеле түгелме һуң? Мәктәптән ҡайтҡайнымы ни?

Ханым йыуыныу бүлмәһенә инеп битен һалҡын һыу менән сайҡаны, сәсен ипләштереп залға үтте. Ул бер аҙ тынысланғайны.

— Айвар туғаным, һеҙҙең ҡапыл килеп сығыуығыҙҙың сәбәбен мин белмәйем. — «Шулай уҡ бер ни ҙә әйтмәнеме икән ни?» тип уйлап алды егет.— Үтенеп һорайым, ни ҙә булһа эшләгеҙ. Зинһар! Үткәндә ярҙамығыҙ ҙур булды, рәхмәт һеҙгә. Әле кемгә мөрәжәғәт итергә белмәйем. Атаһы командировкала. — Бер аҙ тынып торғас, йәнә ҡабаланып дауам итте.— Айгөл юғалды, туғаным.

— Юғалды? Нисек? Ниңә тәүҙән үк әйтмәнегеҙ?

Һикереп торған егеткә ултырырға ымланы. Күрәһең, үҙен ҡулға алырға өлгөргәйне әсә кеше.

— Эйе. Күрше әбей портфелен тапҡан. Эштән ҡайтыуыма индереп бирҙе. Юл ситендә дәфтәрҙәре туҙып ята ине, ти. Ни эшләргә, Айвар туғаным, исмаһам, берәй кәңәш бир.

— Милицияға хәбәр итмәнегеҙме?

— Әлләсе, уйламаным. Тәүҙә үҙе ҡайтыр тип көткәйнем. Инде сәғәт ете тулып бара.

— Хәйер... Хәбәр итеп тороуҙың кәрәге булмаç, моғайын... Үҙем эҙләп ҡарайым.

— Һуң нисек итеп? Шул тиклем ҙур ҡалала бер баланы табыр өсөн... — Әйтеп бөтөрмәне, эргәһендә торған ултырғысҡа ултырҙы.— Белмәйем инде, һуңғы арала тормош әллә нәмәгә әйләнде. Йәй бер шулай борсолоп саҡ аяҡтан йығылманым, үткәндә ыҙғыш сыҡты. Был балаға ни булды — аңламайым.

Айвар һиçкәнде.

— Ыҙғыш, тиһегеҙме? Кем менән һүҙгә килешкәндәр һуң?

Гөлзифа ханым ҡул һелтәне.

— Осһоҙ-ҡырыйһыҙ, эләктереп алырлыҡ төйөнө юҡ. — Әйтергәме-юҡмы тип икеләнеп торҙо ла Айварҙың эскерһеҙлеге әсир итте. Һөйләне лә бирҙе.— Үткәндә бер класташ малайының яңағына һуҡҡан. Ни өсөн икәнен тегеһе лә әйтмәй, быныһы ла өндәшмәй. Айгөлдө яҡлап, Илгиз тигән дуç егете әлеге малай менән һуғышып киткәндәр. Ни өсөн сыҡты был ыҙғыш, тип һорайым, шул урынға килеп төртөлһә, өндәшмәй ҙә ҡуя. Нишләргә лә белгән юҡ. Улай булмай торған ине, аптыралған инде.

Айварға уңайһыҙ булып китте. Был ханымдың ҡайғыһында уның да ғәйебе бар, бәлки, тик ул ғына ғәйеп-

лелер ҙә... Айгөл өндәшмәй икән, тимәк, һүҙ Айвар хаҡында булған. Башҡаса мөмкин түгел. Шулай ҙа ниндәй малай икән һуң ул? Сәйер... Сәйер...

— Ә бөгөн берәй ергә барырға йыйынмай инеме? Бәлки, дуҫ ҡыҙында ултыралыр?

— Юҡтыр шул, туғаным. Улай булһа, бик һәйбәт булыр ине лә бит. Иптәштәренең барыһынан да һорап бөттөм тиерлек. Етмәһә, был портфеле... Юҡҡа ғына юл өҫтөндә ятмағандыр бит.

— Эйе. Һеҙ, ысынлап та, хаҡлы. Эҙләргә кәрәк.

— Һуң, туғаным, нисек ҡоро ҡул менән табырға уйлайһығыҙ? Ундай бала-саға меңләп бит... Балаҡайым, иҫән-һау ғына булһа ярар ине. Исмаһам, атаһы ла өйҙә юҡ бит. — Ханымдың тауышы үҙгәрә башлауын тойоп, Айвар йомшаҡ ҡына, ләкин һыуындырырлыҡ итеп өндәште.

— Гөлзифа Сәлиховна, үҙегеҙҙе ҡулға алығыҙ. Илап ултырып эш сығарып булмаҫ. Кәрәк һанаһағыҙ, милицияға хәбәр итегеҙ. Күңелегеҙгә тынысыраҡ булыр. Төн еткәнсе, табырға тырышырмын. — Айвар быны ышаныс менән әйтте, хатта әсә кеше һулҡылдауынан туҡтап, уға күтәрелеп ҡараны.

— Төн еткәнсе?

— Эйе. — Егеттең хәтеренә бер генә һөйләм килгәйне. Утлы ҡулса шикелле көйҙөрөп тора күңелен. «Иң ҡәҙерле нәмәңдән яҙасаҡһың». Урманды йыртҡыстарса ҡырыу, ялыу, етмәһә Айгөлдөң юғалыуы... Барыһы ла бер сынйырға теҙелә түгелме? Үҙегеҙҙең ҡомһоҙлоғоғоҙ өсөн артыҡ күпте талап итәһегеҙ түгелме, әфәнделәр? Айварҙың йоҙроҡтары йомарланды, күҙҙәрендә уҫал уттар хасил булды. Егеттәге үҙгәреште күреп, ханым аҙарынып китте.

— Ни булды, туғаным?

— Ә... Былай ғына. Артыҡ борсолмаҫҡа тырышығыҙ. Айгөл менән бер ни ҙә булмаҫ. Вәғәҙә бирәм.

— Таба ғына күр инде.— Кинәт иҫенә төшкәндәй, ишектән сығып барған егеткә ҡабат өндәште. — Һорарға ла оноттом, ни өсөн килгәйнегеҙ һуң? Үҙ ҡайғымды һөйләп, башығыҙҙы бутаным.

— Ҡыҙығыҙҙың ни тиклем аҡыллы һәм сибәр булыуын әйтергә.— Киң йылмайҙы. Лифттың ишектәре ябылды, геүләп аҫҡа төшөп китте. Гөлзифа ханым егеттең әйткән һүҙҙәрен нисегерәк баһаларға белмәй, ишеккә һөйәлеп тороп ҡалды.

Ишекте тулы кәүҙәле ханым асты. Милиционер формаһы кейгән ике йәш кешене күреп, күҙҙәре түңәрәкләнде, ык-мык итте. Үҙҙәренең көтөлмәгәндә пәйҙә булыуҙарының әҙемтәһен күреп, Биктимер менән Самат әлеге мәлдә был ханыма ҡаршы һис ниндәй дәғүәләре юҡлығын белдерергә аҙапланды.

— Хәйерле көн!

Ҡатынҡайҙың эйәк аҫтарына юлаҡ-юлаҡ һалынып төшкән ҡышҡа әҙерләнгән запасы ғына яуап ҡайтарҙы. Биктимер, эшем эйәһеләй, кеҫәһенән ҡағыҙ тартып сығарҙы. Үҙҙәре эҙләгән әҙәмдең исем-фамилияһы иҫендә ине юғиһә, ҡаршы алыусының май ҡатламдары һелкенгән ыңғайға, хәтерҙән ҡойолоп бөткән, буғай. Хәрефтәрҙе иҫкә төшөрә-төшөрә, уҡымай булмаҫ.

— Баймөхәмәтов Солтан ошо фатирҙа йәшәйме?

Ҡатынҡай кинәт телгә килде. Көтмәгәндә күҙҙәренән зәһәр уттар бөркөп, әле Биктимергә, әле Саматҡа алмаш-тилмәш ҡарай-ҡарай, теҙеп алып китте.

— Солтан? Ни ҡылған Солтан? Юҡ, минең улым енәйәт эшләмәҫ! Яңылышаһығыҙ!

Морон төптәрендә генә ишек шап итеп ҡала яҙҙы. Ярай ҙа Биктимер танауын алып өлгөрҙө, шул ыңғайға ишек тотҡаһына йәбеште. Был зәһәр ханым ишекте бер япһа, аҙна буйы ас ултырһа ултырыр, крепосынан башҡа сығып күренмәҫ юғиһә. Хәйер, бигүк ябыҡтарҙан тойолмай, ай буйына сыҙауы мөмкин.

— Эй, ханым! Баймөхәмәтова иптәш! Бер ниндәй енәйәт эшләмәгән Солтан. Һөйләшергә генә килдек.

Ҡатынҡай ҡиәфәтте бер нисә секунд эсендә төрлөсә үҙгәртеүҙең өлгөләрен күрһәтә-күрһәтә, ишекте шар асты. Шулай итеп тәртип һаҡлау органдарында эшләүселәрҙең бер нисәүһе бер юлы үтерлек юл әҙер булды. Уғаса бөтә был тамашаның төп геройы, йәғни мәҫәлән Солтан атлы уҙаман, һәр саҡ йоҡоло күренгән күҙҙәрен тырнай-тырнай, үҙ бүлмәһенән килеп сыҡҡайны. Дәрәжәһен белеп кенә публика алдында баш эйергә йыйынған әртис тиәрһең.

— Ни булды, әсәй? Кем бимазалай?

Сәбилә ханым тулы кәүҙәһенә хас булмаған етеҙлектә йылт итеп әллә иртәнге, әллә киске йоҡоһо бүленгән улы кеҫәгененең алдында пәйҙә булды.

— Улым! Солтан! Һине һорайҙар бынау милиционерҙар! Ни ҡылдың һуң?

Үҙ сиратында йән кеҫәктең йөҙөнә аптырау йәйелде.

— Мин?

— Әйе, әйе, һин! — тиергә тура килде Саматҡа. Сөнки ул үҙенең ысынлап та Солтан атлы әҙәм булыуына шикләнә башлағайны.

— Туҡтағыҙ әле, иптәштәр. Бер ниндәй ҙә енәйәт ҡылынмаған. Һорау алырға йыйынмайбыҙ. Беҙ, Баймөхәмәтов иптәш, һеҙҙең менән ҡайһы бер аңлашылмаған нәмәләр хаҡында һөйләшергә йыйынабыҙ. Ҡаршы булмаһағыҙ, әлбиттә.

Биктимерҙең ялҡынлы телмәре Солтандың кинәт осоп киткән йоҡоһон кире бороп ҡайтарманы, әлбиттә, шулай ҙа тынысландырҙы байғошто. Сәбилә ханым иһә хатта йомартланып китеп сәй эсергә ҡыҫтай башланы.

— Юҡ, рәхмәт, апай. Беҙ оҙаҡҡа түгел. Үтергә мөмкиндер бит?

— Әйҙә, әйҙүк, рәхим итегеҙ.

Залға үтеп, диванға ултырҙылар.

— Баймөхәмәтов иптәш, беҙҙе бер генә нәмә ҡыҙыҡһындыра. Ни тиклем йәшермәйерәк һөйләһәң, шул тиклем ваҡытыңды аҙыраҡ алырбыҙ. Үҙең өсөн. Беҙгә лә файҙаға булыр.

— Туҡтағыҙ әле, ни хаҡында һөйләргә тейеш мин?

Биктимер йомшағыраҡ еткерергә һүҙҙәр эҙләне. Кәрәктә улары тел осона килмәй ҙә ҡуя, ҡәһәрең.

— Белеүебеҙсә, һеҙ зоопаркҡа айыу һатҡанһығыҙ. Шуның...

Әйтеп бөтөрә алманы, ишек артында ниҙер дөбөр-шатыр итте. Сәбилә ханым тарафынан ойошторолған, бигүк юғары кимәлгә ҡуйылмаған күҙәтеү шулай итеп үҙенең тәүге моңло тауыштарын сығара башланы. Итәк аҫтынан айыу тиклем айыуҙы шым ғына һатып ятҡан оғланға аптырауҙың тәүге саҡҡылары булды был.

— ...шул хаҡта ентекләп һөйләй алмаҫһығыҙмы? Ҡурҡмағыҙ, протокол алып бармайбыҙ, ни әйтһәгеҙ ҙә, үҙебеҙҙең арала ҡаласаҡ. Беҙҙе был факт булараҡ ҡыҙыҡһындыра. Һеҙҙең өсөн һис ниндәй эҙемтәләре булмаясаҡ, ышаныгыҙ.

Әле генә аяҡ терәп, ғәзиз башын болғай-болғай таныуға әҙерләнеп бөткән Солтан, һуңғы һүҙҙәрҙе ишеткәс, бер аҙ йомшай төштө. Әйтерһең дә, был хәл үҙе биләүҙә ятҡан мәлдә булғандай, бик тә серәнеп иҫләп маташты.

— Ә, әйе шул. Ләкин, хөрмәтле иптәштәр, мин ул аҡсаларҙы кире илттем. Тиненә тиклем.

— Бына был, исмаһам, ир һүҙе.— Биктимерҙең һаламы һалпы яғына бик йәтеш урынлашты. Инде был хәсрәт аусының һис нәмәне йәшермәй теҙеп һалырына

ышанырға мөмкин.— Безгә ул айыу ниндәйҙер юл менән барып эләккән машинаны юл сатында табырға тура килде. Шунан тағы күҙ уңынан ысҡындырҙыҡ. Әйтегеҙ әле, һеҙ ул януарҙы ҡайҙан алғайнығыҙ? Өйрәтелгән айыу түгел инеме?

Солтан уфтанды. Ни эшләйһең инде тигән ҡиәфәттә ҡулдарын йәйеп ебәрҙе.

— Өйрәтелгән айыу ине. Бер урмансыныҡы ул. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, ошо ҡулдарым менән нисек урманда йөрөп ятҡан айыуҙы тотайым мин? Амангилдин генә ана бушҡа аҡса эшләп ята, минең елкәлә...

— Урмансыныҡы тинегеҙме? — Биктимер менән Самат бер-береһенә ҡарашты.— Ҡайҙа йәшәй һуң ул?

Солтан урынынан торҙо, тумбочканан ручка менән ҡағыҙ алып, ниҙер һыҙғыланы.

— Алыҫ түгел инде. Ике сәғәттәй ара булыр.

— Ни, Солтан, әйт әле, бер егерме биш-утыҙ йәштәр самаһындағы кеше түгелме һинең ул урмансың? — Самат йоторҙай булып тексәйгән. Әйтерһең дә, ҡот осҡос серҙе тыны менән һурып алырға әҙерләнә.

— Эйе, шикелле. Нимә, айыуын таптырып һеҙгә барҙымы ни?

Биктимер менән Самат көлөп ебәрҙе. Яуап биреүсе һә быны үҙенсә аңланы.

— Барғандыр шул. Саҡ өйөндә тотмай бит шул тайыш табанын. Уның менән бәйләнгән мин...— Байтаҡ һөйләнде Солтан. Ахыр сиктә уның айыуҙы урларға мәжбүр булыуында урманда аҙашҡан кескәй ҡыҙҙан алып эше юҡлыҡтан януар эйәләштереп ятҡан ҡарауылсыға тиклем ғәйепле булып сыҡты. Баймөхәмәтовтың колоритлы һәм дә образдарға бай шәжәрәһен эстрада йырылай ауыҙ асып тыңлап ултырған Самат түҙмәне ки, ботаҡ һымаҡ сурайып сығып торған кәкре һорауын ҡыҫтырҙы. Шуның менән сәсәнденең татлы телмәренә бер мискә дегет ауҙарҙы.

— Ни, Солтан, һеҙ ни өсөн аҡсаны кире илттегеҙ? Зоопаркка тим.

Солтандың йөҙө боҙолдо. Сөнки физиономияһының тап ҡаршыһына Амангилдиндың елле йоҙроғо һәлберәп килеп баҫҡайны.

— Ни өсөн тип. Иҫәр булынған. Йә инде, ул айыу зоопарктан ҡасҡанға мин ғәйеплеме? — Уф-пуф итте, унан ҡулын һелтәп, ярҙы ла һалды. — Белмәйем, иптәштәр. Һуңынан үкендем дә бит. Дөрөҫөн әйткәндә, нисек илткәнемде иҫләмәйем. Анау Амангилдин тетмәне тетә

башлағас, аҡсаны һалған урынды ҡараһам, бер нәмә юҡ, елдәр иҫкән.

— Ни-исек? — Биктимер менән Саматтың ауыҙынан бер ыңғай атылып сыҡты универсаль һорау. Ләкин уның универсаллеге күкиш булып әйләнде хөрмәтле закон һаҡсыларына — ҡыҙҙы ла китте Солтан.

— Нисек, нисек! Беләмдер шул. Аңлайһығыҙмы, иҫләмәйем тамсы ла! Иҫерек булғанмын, тиер инем, эсмәйенсә алйырға таҡмаҡ әйткәнгә һимергән колхоз һыйыры түгелмен.

Мәгәр тетте генә. Ахыр сиктә туҙға яҙмаған һорау биргәндәре өсөн, ике милиционерға беренсе класс балаларылай ҡыҙарырға, унан ағарырға, һуңынан ишеккә табан сигенергә тура килде.

— Ярар, һеҙгә ҙур рәхмәт, Баймөхәмәтов иптәш.

Биктимерҙең был һүҙҙәрен ишеткәс, Солтан шып туҡтаны. Ул, әлбиттә, айыуҙы урлаған өсөнмө, аҡсаны кире илткәнгәме, һис юғында әрләгәнгәме рәхмәт әйтеүҙәрен аңларға маташты. Ҡайһылай булһа ла, шәп һүҙ икән — май ҡояшылай йылмайыу ҡалҡып сыҡты йөҙөнә. Биктимер менән Самат шым ғына ишеккә табан сигенделәр. Бер минут эсендә йөҙ төрлөгә үҙгәргән кәйефле халыҡ араһынан тиҙерәк тайыу хәйерлерәк ине. Тағы ла буран башланмаҫ борон.

## 60

— Һеҙ оятһыҙ!

— Йә, йә, сәбәләнмә, һылыуҡай. Үҙеңде аҡыллы ғына тотһаң, барыһы ла яҡшы булыр.— Стас түрәләрсә аяғын аяҡҡа һалып ултырған еренән тороп, Айгөл янына килде. Ҡыҙыҡай нәфрәтенән сәсәрҙәй булып уға төбәлгән. Стастың быға иҫе китмәне, шикелле — һис ни булмағандай, уны урап сыҡты ла креслоһына ҡабат сумды. Был хәҙер һиңә беҙ хужа, ни ҡылһабыҙ ҙа иркебеҙҙә, тигәнде аңлатырға тырышыу булды, буғай.

— Беҙгә һинән бер ни кәрәкмәй, башың-тояғың менән ата-әсәңә була күр. Үҙеңә ғашиҡ иткәнһең дә, шуға урланғанһың, тип хыяллана күрмә. Һинең йәштәге ҡыҙыл ауыҙҙар романтик һөйөү хаҡында шапырыныусан. Йәнәһе лә принц килә лә аҡ толпарында алып китә алыҫ тарафтарға. Ха-ха! Аҙбар бысратыусы алаша тотмаһам да, тимер аҡбуҙат бар барлыҡҡа. Ләкин, сибәрем, ул һинең ишеләр менән ваҡланыу өсөн түгел, ә аҡса, ишетәһеңме, аҡса эшләү өсөн яйланған.

— Һеҙгә минән ни кәрәк?

— О-о! Бына был тәкдим. Дөрөҫөрәге, эшлекле фекер. Яратам башлы әҙәмдәрҙе. — Үҙенән әртис әүәләп маташтан еренән, Стас кинәт туктаны. Тауышында уҫаллык сағылып китте. — Бына нәмә, конструктор кыҙы, беҙгә һинең хәжәтең юк. Урмансы дуҫыңмы унда, егетеңме, уныһы миңә караңғы, шуны эйәләштерергә ярҙам итәһең. Унан дүрт яғың кибла. Тырнак менән дә теймәйәсәкбеҙ, джентельмен һүҙе. Мин анауҙар ише, — Стас диванда йоклап яткан ике һунарсыға, йәғни Сергей менән Мәхмүткә төртөп күрһәтте, — мужик түгел, һүҙемдә тора беләм. Йә, килештекме?

Айгөлдөң башы әйләнә башланы. Булған икән, барыһына ла Айвар кәрәк. Их, Айвар, Айвар, әллә мин һиңә ауырлык килтерәм, әллә үҙеңдең яҙмышың шундай. Калай булһа ла, тыныслык юғалды тормошондан. Кем белә, бәлки, үҙең биҙгәнһеңдер һил донъянан... Нисек котолорға бынан? Әсәһе ни хәлдәлер инде, бисара. Айвар паркта көтөп-көтөп кайтып киткәндер. Бәлки, үпкәләгәндер ҙә. Тукта, кайтып киткәндер тип, кайһылай еңел хәл итте, ундайҙарҙан түгел дә инде. Бәлки, шылтыратып белешер. Айгөлдөң күңелендә өмөт саткыһы уянды. Их, белһә ине кыҙҙың ни хәлдә икәнен! Егеттең һәләттәрен бик якшы белә бит ул, бәлки, тулыһынса аңлап та бөтмәйҙер. Һәр хәлдә, был яуыздарҙың тырнағынан арындырырға хәленән киләсәк, кыҙыкай быға үҙенә ышанған шикелле ышана. Тик ошо мәлгә тиклем был әҙәмдәрҙе ярһытмай нисек тә түҙергә, башка сара юк. Йөҙҙәренә төкөрөрҙәй булып торған еренән, кыҙ кинәт һыуынды. Ниңә этте ерле юкка ырылдатырға, бәйһеҙ януарҙан әллә ни көтөргә мөмкин.

— Стас ағай, — тигән булды Айгөл башын иҫәргә һалып, — һеҙгә ул нимәгә һуң? Ағас кәрәк инеме ни?

— Фу! Мин һине акыллыраҡка һанағайным. Бөтә кыҫка итәктәр шикелле, һинең дә сүмәләң сүбәк менән тултырылған икән. Ағас, имеш. Утын кәрәкмәйме, тип һора тағын.— Кыҙып китте, кыҙып китте бер заман. Ағас кыркып, утын яғып яткан әҙәмдәр түбән сортлы халык, тигән мәғәнә аңкып тора ине был телмәрҙән. Мәгәр һорауға үтә үпкәләне.

— Урмансы тигәнгә һорағайным шул.— Айгөл йөҙөнә аңшайған киәфәт сығарып булашты, барып сыкмағас, кинәт һорай куйҙы.— Стас ағай, үткәндә һеҙ мине ошо егеттәрҙән аралап алғайнығыҙ түгелме һуң?

Тегеһе кинәт башын күтәрҙе, кыҙға төбәлеп карап

торҙо. Был баланың уйында ни ятҡанын белергә маташты, буғай.

— Күҙең үткер ни тиһәң дә, танып өлгөргәнһең. Йә ярар, йәшереп тороуҙан һуҡыр тинлек файҙа юҡ, барыбер беләһең. Был тоҙаҡ ҡына ине, аҡыллым. Һин тип, үҙ ярҙамсыларымды бәргеләргә башҡа тай типмәгән. Әйтеп торам бит, кәрәкмәйһең беҙгә. Теге егетте эйәләштерергә генә ярҙам ит.

— Нисек итеп?

— Ну, уныһы һинең эш. Үтенәһеңме, талап итәһеңме. — Ҡыҙҙың янына килеп, бер бармағы менән генә эйәген өҫкә күтәрҙе. — Юғиһә, еңел генә ҡотола алмаясаҡһың беҙҙән. Түрә балаһы тип ҡарап тормабыҙ.

— Ярар, ярар, Стас ағай. Тик юлын ғына өйрәтегеҙ.— «Их, ҡулымда йүнле әйбер булһа, нисек һөйләшергә белер инем, хәшәрәт йән», тип уйлап алды эсенән.

Стас ҡәнәғәт ҡиәфәттә урынына барып ултырҙы.

— Бына быныһы, исмаһам, эшлекле тәҡдим. Юлын табырбыҙ, уныһына — тфү! Һинең ул ағас ҡырҡыусың иртәме-һуңмы, барыбер эҙләп киләсәк. Килергә ҡабаланмаһа, саҡырыу ебәрербеҙ. Батша һарайындағы балға рәхим итегеҙ, барон урман ҡараусы. Бында һеҙҙе баронесса, кем әле исемең, туташ, ә, Айгөл бит әле, баронесса Айгөл түҙемһеҙлек менән көтә. Корсеттарын кейеп бөттө, ойоғон күтәреп ҡуйҙы, әммә ләкин һыңары өйҙә ятып ҡалған, килтереп еткерә алмаҫһығыҙмы, хөрмәтле вә ғиззәтле утын бысыусы, тигән яҙыуҙы алтын хәрефтәр менән яҙырбыҙ һарғайып бөткән ҡағыҙ киҫәгенә.— Телмәре үҙенә иҫ киткес оҡшаны, шикелле, һаһылдап көлөп алды. Асыуынан шартларға етешһә лә, Айгөл өндәшмәне, йөҙөнә тимгел-тимгел ҡыҙыллыҡ ҡына бәреп сыҡты. Бар көсөнә һалҡын ҡанлылыҡ һаҡларға тырыша ине ул.

— Мин ни эшләргә тейеш?

— Вәт-вәт, аҡыллым, икенсе төрләрәк һайрай башланың.— Стас тәкәббер ҡиәфәттә Айгөлгә һөҙөп ҡарап алды. — Тыңла. Ул килгәс, беҙ ҡушҡандарҙың барыһын да эшләйәсәкһең. Йәғни беҙ уға ультиматум ҡуябыҙ. Беҙгә эшләргә ризалашһа — һинең дүрт яғың ҡибла. Юғиһә, — әйткәндәрем ҡыҙға нисек тәьҫир итә икән тип, туҡтап торҙо бер аҙ, — һиңә тиҙ ҡотолоу юҡ был ожмах мөйөшөнән. Вәғәҙә итәм. Урман ҡараусың килеү менән күҙ йәштәреңде түк, ялбар, теҙлән, ләкин ризалаштыр. Аңланыңмы? Аңланыңмы, тим?

— Барыһы ла аңлашыла, Стас ағай. Әйткәндәрегеҙҙе эшләрмен. Ләкин ҡасан килер һуң ул?

— Унының кайғырма. Албаҫты тиҙлеге менән йөрөһә, — Айгөл был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Стасҡа ялт итеп күтәрелеп ҡараны, күҙҙәрендә борсолоу, хафа, ҡурҡыу — барыһы ла бар ине. Ләкин үҙен тиҙ ҡулға алды, йәһәт кенә ҡарашын ситкә күсерҙе. Хатта Стас та аңғармай ҡалды, — иртәгәһе көндән ҡалмаҫ.

— Ярай, мин риза. Әйтегеҙ әле, Стас ағай, ә һеҙ уны ниндәй эшкә ҡушырға уйлайһығыҙ? Урман төпкөлөндә ятҡан кешенең ҡулынан ни килһен? Бәйләнештәре юҡ, дәрәжәле урында эшләмәй. Ниңә кәрәк һуң ул һеҙгә?

— Унында эшең булмаһын.— Стас кинәт ҡыҙға күтәрелеп ҡараны.— Ә һин, аҡыллы баш, ике йөҙлөләнә беләһең. Ул албаҫтының ҡулынан ни килә, миңә ҡарағанда яҡшыраҡ билдәле бит һиңә. Әйт әле, үткәндә мәктәптә ни ҡылдығыҙ? Әҙәм аптыратырлыҡ трюк эшләүегеҙҙе әйтәм.

«Ах, Кәбир! Бына ҡайҙан алып әйткәнһең икән һин. Элегерәк белмәнем бит...»

— Шул утын бысыусыңдың фокусы булдымы? Йә, мин көтәм...

Айгөл ни тиергә белмәне. Эйе, тип ыңғайға һыпырыр ине, тағы төпсөнә башлаясаҡ, юҡ, тиһә, тынысылыҡта ҡалдыра торғандарҙан түгел.

— Йә, яуап бирмәһәң, иҫеңә төшкәс, һөйләрһең. Ваҡыт дефицит түгел. Яйлап хәтереңде яңыртырбыҙ. Һин миңә шуны әйт — һыҙмаларҙы атайыңа кем ҡайтарҙы?

Айгөл һиҫкәнде. Тимәк, бөтә был эшкә ошо һонтор, ҡара күҙлек, джентельмен, ҡатын-ҡыҙ рыцары, тағы әллә ниндәй битлек кейгән әҙәм етәкселек иткән. Күберәк булып китмәйме бер үҙеңә, тип уйлап алды. Яуап бирергә ауыҙын ғына асҡайны, ишек ҡыңғырауына баҫтылар. Күрәһең, бер кемде көтмәй ине — Стас бер Айгөлгә, бер диванда йоҡлап ятыусыларға, йәнә ишеккә ҡарап алды.

— Урыныңда ғына тор, ишеттеңме? — Сергей менән Мәхмүтте төрткөләргә тотондо.— Эй, әрәмтамаҡтар, етер йоҡо һимертергә. Тороғоҙ, тим! — Теге икәү ризаһыҙ ҡиәфәттә ҡыбырлашҡас, бойорҙо. — Ҡыҙҙан күҙ яҙлыҡтырмағыҙ, ишетһен ҡолағығыҙ. — Артынан ишекте ябып, алғы яҡҡа сыҡты. Унда оҙаҡ торманы, күп булһа ярты минут ваҡыт үткәндер. Айгөлдө ҡулынан эләктереп алды ла, этеп, йыуыныу бүлмәһенә индереп ебәрҙе. Артынан элгесте эләктергәс, аңшайып ҡарап ултырған Сергей менән Мәхмүткә екерҙе.— Нишләп ултыраһығыҙ иҫегеҙ китеп? Теге әҙәм килгән. Сысҡан тоҙаҡҡа үҙе үк килеп ҡапты, артынан йөрөйһө лә түгел. Мәхмүт,

ҡыҙҙы һаҡлайһың, шул тирәнән китәһе булма. Башың менән яуап бирәсәкһең. Сергей, залда ҡал. Мин уның менән һөйләшкәнсе, күҙ яҙлыҡтырма.

Айгөл сала-сарпы ишетелеп ҡалған һүҙҙәрҙән килгән кешенең улар өсөн бүләк булмауын аңланы. Өтәләнеп йүгерешәләр, уны ни өсөндөр йәшереп ҡуйҙылар. Әллә... Күңелендә ҡабат өмөт уянды. Ҡолағын ишеккә терәне. Бына йоҙаҡтарҙы ысҡындырғандары ишетелде, Стастың һөмһөҙ тауышы яңғыраны.

— О, принц! Беҙ һине күптән түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ.

«Айвар! Уф аллам, шул ғына булһа ярар ине», тип уйлап алды Айгөл. Йөрәге күкрәген һытырҙай булып ярһып тибә.

— Бына бит, үткәндә әллә кем булып һөйләшә инең, үҙең үк йүгереп килеп еттең. Яуап бирер алдынан башта уйларға кәрәк ине.

— Ҡайҙа Айгөл? — Быныһы Айварҙың тауышы. Ҡыҙыҡай ҡыуанысынан ҡысҡырып ебәрҙе, ишекте дөбөрләтергә кереште.

— Асығыҙ! Айвар, мин бында!

Шул яҡҡа ынтылған егеттең юлына Мәхмүт арҡыры төштө. Күҙҙәрен уҫал йылтыратып ҡарап тора.

— Бына бит, Айвар әфәнде. Яҡшы һунарсы ҡаршыһына кейек үҙе үк йүгереп сыға. Икегеҙ ҙә ҡармаҡҡа ҡаптығыҙ. Ни ҡылһам да, минең иркемдә.— Стас тантана итә ине. Үткәндә йөҙөнә төкөрөп тигәндәй ҡайтарған егеттән бар булған үсен алып ҡалырға тырышты.

— Сығарығыҙ ҡыҙҙы!

— О-о! Үҙ йортомда миңә бойора башланылар. Был, мин һиңә әйтәйем, прогресс! Ундай хәлдең булғаны юҡ ине, кем, утын ҡырҡыусы әфәнде.

— Һеҙгә беҙҙән ни кәрәк?

— Бына быныһы, исмаһам, фекер. Үтегеҙ залға, әҙәпле кешеләргә хас булғанса, культуралы һөйләшәйек.

— Айгөлгә бер нәмә лә булмағанына ышанмай тороп, һөйләшеү хаҡында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел.

— Уға ни булһын, тырнаҡ менән дә теймәнек. Туташ, әйт әле, яфаланыҡмы һине?

Бер аҙ өндәшмәй торҙолар. Унан ишек аша «Юҡ» тигән тауыш ишетелде.

— Йә, ишеттегеҙме? Мин ҡатын-ҡыҙ менән, ғөмүмән, джентельмендарса мөғәмәлә итәм.— Зал ишеген асып, эскә күрһәтте.— Рәхим ит, Айвар әфәнде.

Егет көлөмһөрәне лә бүлмә эсенә атланы. «Йә, һай-

рып ҡара, ниҙәр бытылдарһың икән». Стастың үҙен юғары дәрәжәләге түрәләрсә тоторға тырышыуы мәҙәк ине.

— Ни өсөн урланығыҙ Айгөлдө?

— Ә беҙ уны урламаныҡ. Йүгереп үҙе килеп етте.— Стас һаһылдап көлөп алды.— Ҡотҡарығыҙ әле шул урман ҡараҫҡыһынан, маҙаға тейә, ти. Ну, ундай үтенестәрҙе минең кире ҡаға торған ғәҙәтем юҡ. Ризалашырға тура килде.

— Ҡабатлап һорайым, һеҙгә ни кәрәк?

Стастың йөҙө кинәт уҫал ҡиәфәт алды, маймыллаһып ултырған еренән ашарҙай булып Айварға төбәлде.

— Нисек һин аңламайһың һаман да? Беҙгә һинең эшләүең кәрәк, төшөндөңмө? Йә риза булаһың, йә ул сибешең менән һаубуллаш. Ғүмерҙә лә ҡабат күрмәҫһең.

Айвар, ярһып китеүҙән үҙен саҡ тыйып, урынынан торҙо, Стасҡа яҡынырағ килде.

— Ниндәй эш?

— Ризаһыңмы?

— Ниндәй эш тием?

— Ну, Айвар әфәнде, беҙ ваҡ-төйәк нәмә менән ҡул бысратмайбыҙ инде. Наполеон масштабында, йәғни мәҫәлән.— Бер аҙ егеткә төбәлеп торғас, өҫтәне.— Беҙгә һинең хаҡыңда барыһы ла билдәле. Нисек итеп Назаров фатирынан беҙҙең,— Был һүҙгә баҫым яһап әйтте,— беҙҙең һыҙмаларҙы урлауыңды, стена аша йөрөүеңде, мәктәптә ошо ҡыҙ менән фокус ҡыландырыуыңды — бөтәһен дә беләбеҙ. Ә хәҙер ошо һәләттәреңде эшкә егергә ваҡыт. Беҙҙең файҙаға. Ҡайһы бер нәмәләрҙе, ну, үҙең аңлайһың, йүнлерәк әйберҙәр йыраҡ йәшерелеүсән, алырға ярҙам итерһең. Буш итмәбеҙ, ҡурҡма. Бына минең фатирҙы күрәһеңме, — Тирә-яғындағы ҡыйбатлы мебелгә, гәлсәр люстраларға, видеоаппаратураға төртөп күрһәтте, — кәм йәшәмәҫһең. Йә, ризаһыңмы?

Айвар тәүҙә өндәшмәне. Был тиклем оятһыҙлыҡ башҡа һыймаҫлыҡ ине. Бигерәк тә шуның хаҡына балалыҡтан да сығып бөтмәгән ҡыҙҙы урлау. Шулай ҙа кинәт бирелмәне.

— Әйт әле, Стас, урманды ла шуның өсөн яндырырға ҡуштыңмы?

Стас Айварҙы ризалаша башланы, тип уйланы шикелле, ҡәнәғәт ҡиәфәттә урынына барып ултырҙы.

— Беҙҙең эштә ундай сиккә барып етеү һирәк күренеш түгел. Ни ҡылаһың, ҡайһы берәүҙәргә профилактика йөҙөнән атҡарырға тура килә.— Ҡулдарын йәйеп ебәрҙе.— Был осраҡта ла шулай. Һиңә кескәй генә сюр-

приз эшләргә тура килде. Тыңлаусан ярҙамсылар еңел бирелмәй.

Айвар кинәт тороп Стастың яғаһынан эләктереп алды.

— Ҡәбәхәт, ә һиңә ошондайыраҡ ярҙамсылар кәрәкмәйме? Айгөлгә тағы бер ҡағылып ҡара. Ҡәбереңдән табырмын! — Яңағына һуғып ебәрҙе. Күрәһең, һаҡлыҡ кәрәклекте онотоп ебәргәйне — Стас дөбөр-шатыр итеп арты менән барып төштө. Тәҙрә төбөндәрәк торған Сергей егеткә табан ынтылды, ишекте бәрә асып, Мәхмүт йүгереп килеп инде. Өсөһө өс яҡтан егетте ҡамай башланылар. Күҙҙәрендә — ҡырағай усаллыҡ. Ләкин был ҡараш, күп тә үтмәне, битарафлыҡ менән алышынды. Үҙҙәренең ни эшләгәндәрен дә белмәй, тәүҙә Сергей, унан Мәхмүт, бер аҙ торғас, улар артынан Стас та ҡайһыһы диванға, ҡайһыһы ултырғыс-өҫтәлгә кәкерәйеп ятып йоҡлап киттеләр. Айвар ҡабаланып алғы яҡҡа сыҡты, йыуыныу бүлмәһенең ишеген асып ебәрҙе. Бер мөйөшкә һырығып ҡына унда Айгөл ултыра ине. Күҙҙәре йомолоп-йомолоп бара.

— Айгөл һөйөклөм! Түҙ саҡ ҡына.— Ҡыҙҙы ҡулдарына һаҡ ҡына күтәреп алды ла урамға ынтылды.

## 61

Гөлзифа ханым аш бүлмәһендә йүгереп йөрөп һый әҙерләй. Ҡыҙы менән һис ниндәй бәлә-ҡаза булмағанғамы, әллә икенсе тапҡыр ярҙам ҡулын һуҙған егеттең күңелен күрергә тырышыуымы — инде сәғәткә яҡын табын яраштыра. Әсәһенең өтәләнеүен күреп, Айгөл булышырға уҡталғайны, башы әйләнеп, урынына ҡабат ултырҙы.

— Айгөл, һиңә һаман да ҡыйынмы?

Ҡыҙыҡай көләмһерәне.

— Юҡ. Ә һин ысынлап та рыцарь, Айвар.— Тамағына килеп тығылған төйөндө йотоп ебәрҙе. Күҙҙәренән һығылып ҡына ике тамсы йәш бәреп сыҡты. Күрәһең, күкрәген быуып килгән ниндәйҙер тойғоно еңергә тырыша ине. Булдыра алмағас, креслонан торҙо, тәҙрә янында баҫып торған егеттең янына килде. Бышылдап ҡына өндәште.— Мин һине яратам, Айвар.

Егет өндәшмәне. Әйләнеп, Айгөлдөң йомшаҡ сәстәренән һыйпаны. Башын эйеп ҡаршыһында баҫып торған ҡыҙҙы күкрәгенә ҡыҫты.

— Кисер мине. Әйтмәҫкә тейеш инем был хаҡта. Беләм, һин аҡыллы, көслө, сибәр, мин бала ғына. Шулай

за... Шулай ҙа... Һинең хаҡыңа утҡа ин, тиһәләр, инер инем... Минут та уйлап тормай.

— Йүләркәйем...— Айвар күптән татымаған тойғонан йөрәге ҡыҫып, Айгөлдө һаҡ ҡына тибрәтте.— Утҡа инеү — минең өлөштә.

— Үҙ-үҙемде күпме еңергә тырыштым, ә хәҙер... Хәҙер ҡулымдан килмәй. Һин минең тәүге һәм һуңғы һөйөүем буласаҡһың. Кире ҡаҡһаң, мөхәббәтемде үҙем менән ҡәбергә алып китермен. Ләкин һине яратыу үҙе... үҙе бәхет. — Айгөл башын егеттең күкрәгенә терәне. Айварҙың ирендәренән үбеүенә лә ҡарышманы.

— Һөйөклөм. — Айвар уның эйәген ҡулы менән күтәреп, күҙҙәренә ҡараны.— Ә минең һиңә был хаҡта әйтергә батырсылығым етмәгәйне. Үҙең һүҙ башламаһаң, моғайын, шул килеш ҡалыр ине лә.

— Ни өсөн? Ни өсөн, Айвар?

— Сәбәбе бар.

Айгөл өндәшмәне. Унан кинәт күтәрелеп егеткә ҡараны.

— Башҡа ҡатын-ҡыҙҙыр, моғайын. Мин яңылышмайыммы?

— Яңылышаһың, Айгөл.

— Төпсөнә тип асыуланма, йәме?

— Ниңә асыуланырға.— Айварҙың ҡарашы урамға төбәлгәйне. Ул боролдо, ҡыҙҙың күҙҙәренә туп-тура ҡарап өҫтәне.— Мин уны үлеп яраттым, Айгөл. Яҙмышымды, йәнемде — барыһын да аяҡ аҫтарына ташларға әҙер инем. Күрәһең, ҙур һөйөү — үҙе үк фажиғә.— Ошо һүҙҙәрҙе әйткәндә, әллә ниндәй эске әрнеү тышҡа бәреп сыҡты.

— Хәҙер ул... ҡайҙа?

— Кейәүгә сыҡҡан. Өс йәшлек малайы бар. Үткәндә ҡапыл ғына ҡала урамында осраны. Әллә ниҙәр әйтеп рәнйеттем дә шикелле, үпкәләп китеп барҙы.

— Ә мин һине кеше рәнйетә алмайһыңдыр, тип уйлағайным.

— Тап шул мөхәббәт арҡаһында ике кешегә бүлендем шикелле мин. Һәм шул ике кеше булыуым өсөн дә, Гөлүзәне юғалттым.— Айвар тәҙрәгә ҡарап баҫҡан да әкрен генә һөйләй. Ҡыҙ иһә бүлдерергә баҙнат итмәй, түгелергә торған ҡарашын уға төбәгән.— Ни тиклем ныҡыраҡ һөйһәң, ул мөхәббәтте юғалтыу шунса ауыр. Һалҡын нәмәне лә өрөп ҡаба башлайһың. Ә һинең менән осрашҡас... бөтә был фәлсәфәм селпәрәмә килде. Ҡаршы тора алмайым.

— Һеҙ уның менән өйләнешергә йыйынғайнығыҙмы?

— Эйе, Айгөл. Туйға бер көн ҡалғас, мәңгегә айырылдыҡ. Шунан һуң күргәнем булманы. Үткәндәге ҡапыл осрашыуға тиклем.

— Ни өсөн айырылдығыҙ?

— Ул мине аңларға теләмәне. Бәлки үҙем дә аңлатып әйтә алмағанмындыр. Ә хәҙер теләһәм дә, өйләнә алмаҫ инем.

— ...?

— Мин ғүмер буйы яңғыҙ йәшәргә мәжбүрмен. Сөнки төндәрен ихтыярымдан тыш икегә бүленәм. Янымда тере йән ятһа... ҡасан да булһа... тол ҡаласаҡ. Аңлайһыңмы?

Айгөл өндәшмәне. Һулҡылдап егеттең күкрәгенә ҡапланды.

— Мин һине яратам, Айгөл. Йөрәгем ҡатҡандыр, тип уйлағайным теге хәлдән һуң. Үҙ-үҙемде еңергә тырыштым, булмай. — Ҡыҙҙың арҡаһынан һыйпай ҡулдары, күҙҙәре әллә ҡайҙа төбәлгән. Әйтерһең дә, үҙ алдына һөйләнә.— Ләкин беҙ бергә була алмаясаҡбыҙ, бер ҡасан да. Бәхетһеҙ иткем килмәй... Кисер мине, Айгөл, тәү күреүҙән һуң, алыҫтан урап уҙырға кәрәк булған. Бәлки, башҡа осрашмабыҙ? Һинең хаҡыңа... Оноторһоң, төңөлөрһөң... Ә мин... өйрәнгәнмен инде.

— Юҡ, юҡ. — Ҡыҙ Айварҙың ауыҙын ҡулдары менән баҫты.— Улай тимә. Ишетәһем дә килмәй.

Ни менән барып бөтөр ине был һөйләшеү, аш бүлмәһе яғынан Гөлзифа ханымдың тауышы ишетелде.

— Айгөл ҡыҙым! Үҙеңде яҡшы тойһаң, сыҡ бында. Табын әҙерләргә булыш.

— Хәҙер, әсәй. — Ҡыҙыҡай һағыш, һөйөү, тағы әллә ниндәй хистәр ташып торған күҙҙәре менән егеткә бер һирпелеп ҡарап алды ла бүлмәнән сыҡты.

— Апай, ә миңә ярҙамлашырға мөмкинме? — Еңдәрен төрә-төрә сығып килеүсе егеткә ҡарап, Гөлзифа ханым көлөмһөрәне, унан сәскәле алъяпҡыс һуҙҙы.

— Рәхим итә күр.

Тиҙ генә залдағы оҙон ялтыр өҫтәлде ҙурайтып, ризыҡтарҙы шунда ташынылар. Хужабикә иң һуңынан йәлпәк һауыттағы ликерҙы өҫтәл уртаһына ҡуйҙы.

— Быныһы танышыу хөрмәтенә.— Уймаҡтай ғына гәлсәр рюмкалар сығарҙы.— Ултырышайыҡ. Мин Айгөлдө бала тип йөрөһәм, өлкәнәйеп тә киткән. Һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. — Уның был һүҙҙәрендә үтеп барған ғүмергә ҡарата һағыш һиҙелеп ҡалды.— Йә, етешегеҙ, балалар.— Айварға ҡарап өҫтәне.— Туғаным, бына икен-

се тапҡыр инде ҡыҙымды ҡотҡараһың, рәхмәт һиңә. Үҫеп килгән бала юлында изге кеше осрауы үҙе үк бәхет. Өҙәмдәрҙең төрләләре була.

Айгөл баянан бирле ниҙер әйтергә уҡтала ине, күрәһең, әсәһен бүлдерергә баҙмай. Гөлзифа ханым туҡтағас, тәүәккәлләне.

— Әсәй, кисерегеҙ мине. Беләм, йәйҙән бирле һеҙ минең менән ни булғанын белә алмай йонсойһоғоҙ. Әйтмәүемдең сәбәбе лә бар ине, хәҙер юҡҡа сыҡты. Ул ҡаршығыҙҙа ултыра.

Гөлзифа ханым әле ҡыҙына, әле егеткә алмаш-тилмәш ҡарап алды.

— Нисек? Айварҙы әйтәһеңме?

— Эйе, әсәй.— Егеткә ҡарап алғас, ярҙы ла һалды.— Мин ғашиҡ булдым. Айварға.

— Һуң... Һин йәш бит әле. Өйләнешергә йыйынмайһығыҙҙыр бит?

Айвар тертләне. Иң ауыртҡан ере ошо ине. Ҡыҙҙы рәнйетеп, әсәһе алдында ю-уҡ тип ултыра алмай бит инде.

— Әсәй! Өйләнешеү ул иҫкелек ҡалдығы. Ысынлап.— Үҙе лә ышанмаған нәмәне әсәһенә иҫбатларға маташа бит әле.— Сит илдә хәҙер ике кешенең союзы, ғомүмән, ғаилә менән тамамланырға тейеш, тигән нәмәне инҡар итәләр.

— Һуң, ул бит сит ил.— Аптырағандан әйтте быныһын хужабикә. Ҡыҙы хәбәр иткән яңылыҡ, уны, ысынлап, нык аптыратҡайны. Был һөйкөмлө егет уға, әлбиттә, оҡшай, икенсе генә күреүе булһа ла, яратып өлгөрҙө үҙен. Тик бына... Айгөл әллә низәр һөйләй, башҡа һыймаҫлыҡ хәбәр... Ул алһыу шыйыҡсалы кескәй рюмканы бер ултырта ла бер ала ине. Ахыры сиктә, егеткә төбәп өндәште.— Ә һин, туғаным, был хаҡта ни уйлайһың?

— Айгөл дөрөҫтө һөйләй, Гөлзифа Сәлиховна. Мин дә уға битараф түгел.

— Был бала ниндәй союз хаҡында һүҙ ҡуйырта? Нәшереп кенә ғаилә ҡороп ятмайһығыҙҙыр бит? — Хужабикә ҡупшы күлдәгенә кофеһын түгеп ебәрҙе. Салфеткаға үрелде лә, ҡул һелтәп, ҡабат урынына ултырҙы.

— Йә, әсәй, тыныслан, бер ни ҙә булманы.— Байтаҡтан бирле ҡыланмағанынса, Айгөл йүгереп килеп әсәһен арҡаһынан ҡосаҡлап алды.— Бер ни булманы, әсәкәйем.

Айвар йылмайҙы. Бына бит сысҡан-бесәй уйнау ни нәмәгә килтерә. Унан рюмкаһын күтәрҙе.

— Гөлзифа Сәлиховна, борсолмағыҙ. Һеҙҙең ҡыҙығыҙ саф, эскерһеҙ, сибәр һәм бер ҡасан да алдашмай. Әгәр ҙә ул әйтә икән, ышанығыҙ. Мин был рюмканы

ошондай ҡыҙ үҫтергән өсөн, һеҙҙең хөрмәткә эсергә тәҡдим итәм.

Хужабикәнең күҙҙәре дымланды. Ҡулъяулығының сите менән йәшен һөрттө лә йылмайҙы.

— Рәхмәт, туғаным. Осрашыу һәм танышыу хөрмәтенә!

— Уй, әсәй, улайһа миңә лә, ике генә тамсы.— Айгөл гәлсәр һауытта йымылдап ятҡан аҙ ғына ликерҙы тәмләп ҡараны.— Һеҙҙең икегеҙ өсөн дә! Йәл, атайым өйҙә юҡ, парлап бейер инек.

Ул йүгереп барып, магнитофонды ҡабыҙып ебәрҙе.

— Вальс! Кем мине саҡыра? — Әйтерһең дә, өй тулы кавалер.

Айвар хужабикәгә баш ҡаҡты ла Айгөл янына барып баҫты. Талғын ғына музыка башланды. Был уларҙың тәүге һәм һуңғы бейеүҙәре ине.

## 62

Милиция машинаһы әкрен генә үрҙе артыла башланы. Руль артында — Самат. Биктимер иһә, боронғо папирус киҫәген уҡып маташҡан һәлбер һаҡаллы ғалимдарҙан үҙен һис кенә лә кәм тотмай, Солтан һыҙғылаған ҡағыҙға тексәйгән. Ундағы арҡыры-буйға һыҙғыланған геометрик фигураларҙы ҡулланғанда, алға ла, артҡа ла берҙәй үк уңыш менән китергә мөмкин булыр ине.

— Тфү! — тип ҡуйҙы Биктимер йәне көйөп.— Исмаһам, әҙәмсә лә өйрәтмәне.— Ҡағыҙҙы йомарлап бәрергә генә ынтылғайны, Саматтың тауышы яңғыраны.

— Ҡара, ҡара, Биктимер, ошо юл хаҡында әйтмәгән микән. Күптән ҡарап киләм, уң яҡҡа боролғаны осраманы.

— Ысынлап та.— Үрелеп бер ҡарағас, лейтенант йыһанға ҡарап осорорға әмер биргән тауыш менән өҫтәне.— Ҡайҙа юғалмаған беҙҙең ғәзиз баш, ҡайырыл шул яҡҡа.

Әммә ләкин ул тиклем дә ғәзиз вә хөрмәтле әҙәм баштарын фиҙа ҡылырға аллаһы тәғәләнең ҡул ҡуйып төшөргән фарманы булманы. Бойороҡ булмағас ки, бара торғас, бара торғас, урман уртаһында, тау итәгендә, ете юл сатында уҡ булмаһа ла, ике һуҡмаҡ уртаһында ҡуҡырайып ултырған яңғыҙ йортҡа барып төртөлдөләр. Машина бер ни тиклем ара ҡалдырып туҡтағас, ергә һикерҙеләр.

— Ни, иптәш лейтенант, әҙерәк шөрләтә бит әле,— тип ярҙы ла һалды Самат. Биктимерҙең үҙен дә ошо һымағыраҡ тойғо кимерһә лә, погондары был ямаҡай хискә бирелергә ирек бирмәне, буғай. Лейтенант, бөйөк коммунизм үрен яулаусыларҙан кәм булмаған фиҙаҡәрлек күрһәтеп, алға атланы.

— Әйтеүҙәренә ҡарағанда, әллә ниндәй әҙәм. Бәйләнеүе лә... вай-вай! — һөйләнеп килә Самат. Йыуан олонло имән артынан берәйһе йоҙроҡ төйһә, һис шикһеҙ, дейеү пәрейенең өс башының береһе сәләмләй, тигән һығымта яһар ине.

— Ваҡытынан элек ясин сыҡмай тор. Әллә шуның өйө, әллә юҡ, ҡайҙан беләһең.

— Нисек һүҙ башлайбыҙ, Биктимер, ә?

— Табылыр.

Өй янына килеп еттеләр. Ишектә йоҙаҡ элеүле тора ине. Эт-фәлән күренмәй. Йорт янынан уҡ тиерлек саңғы юлы башлана.

— Ҡара, ҡара, Биктимер! — һөрән һалып ебәрҙе Самат, үҙе яйлап ҡына арт яҡҡа эвакуация башланы. Сонки ағастар араһынан апаруҡ ҙур айыу сығып килә ине.— Ысынлап та, пәрей ояһылыр был. Айыуҙары ла ҡыш көнө урман буйлап тыртаңлап сабып йөрөгәс...

— Туҡтале, Самат, был теге айыу түгелме һуң? — Әйтерһең дә, януар уны майлы йылмайып ҡаршылай, һөйләүү органы ҡоймаҡ шикелле йәйелеп китте.

— Ысынлап та, шуға оҡшаған да баһа.— Самат машинаға табан шыуышыуын да онотто. Күптәнге танышын күргәндәй, арҡаһынан ҡаға-ҡаға хәл-әхүәл һорашыу был осраҡта килешә микән, тигән мәсьәләне хәл итә алмай тора ине, буғай. Биктимерҙең тауышы уны иҫенә килтерҙе.

— Әйҙә, сержант, машинаға кереп ултырайыҡ. Әгәр ҙә былай тыныс йөрөй икән, ҡулға өйрәтелгән. Беҙҙең килгәнде күргәс, урынынан сыҡты. Хужаһы булмағанда, йорт-ҡураны ҡараштырып торалыр, моғайын. Юҡҡа ярһытҡансы, арыраҡ китеү хәйерле.

Машина эсендә ултыра торғас, байтаҡ ваҡыт үтте. Айыу ҙа китмәй, былар ҙа түҙемле. Хәйер, түҙемле тигәс тә, ул нәмәнең сигенә сығып киләләр ине инде. Саңғыла тауҙан шыуып төшөп килеүсе урмансыға тәүҙә Биктимер иғтибар итте. Бер яҡҡа ҡыйшайып, әүен баҙарына барайыммы икән әллә, тип ултырған Саматтың ҡабырғаһына төрттө. Тегеһе һиҫкәнеп китте, айыу һөжүм башланы, тип уйланы, ахыры.

— Нимә? Ни булды?

— Ҡара теге яҡҡа. Таныйһыңмы?

— Бә-әрәмәс! Тап үҙе лә баһа. Нишләйбеҙ?

— Кире тороп һыпыртыр өсөн килмәгәнбеҙҙер. Төшәбеҙ ҙә һаулыҡ һорашабыҙ.— Сержантҡа әйләнеп өҫтәне.— Һин тағы үҙеңдең бүлмәңдәге һымаҡ ҡыланма. Әсир алырға йыйынмайбыҙ.

— Так точно, иптәш лейтенант.— Машинаның был осраҡҡа яраштырылмауы һикереп тороп бер ҡулды сикәгә терәргә ҡамасауланы.— Киләһе күрһәтмәләр нисегерәк булыр?

— Ҡабыҙ машинаңды, яҡыныраҡ барып туҡтайыҡ, булмаһа.

Күрәһең, урмансы уларға шунда уҡ иғтибар иткән. Саңғыларын сискәс, йортона инеп китмәй көтөп торҙо.

Ишекте асып, тәүҙә Биктимер үҙе төштө.

— Һаумыһығыҙ? Һеҙ Илбәковмы?

— Һау ғына. Яңылышмайһығыҙ, тап үҙе.— Милиционерҙарҙы таныны, күҙҙәрендә һиҙелер-һиҙелмәҫ мут йылмайыу уйнап ҡалды.— Әсир итергә килдегеҙме, хөрмәтле лейтенант? Әллә теге машина ҡабаттан ҡанатланып осҡанмы?

— Юҡ, Илбәков, беҙ ул эш буйынса түгел. Әйтергә яраһа, шәхси мәсьәлә.

— Шәхси? Ҡыҙыҡ, бик ҡыҙыҡ... — Йөҙөндә ғәжәпләнеү сағылып ҡалһа ла, төпсөшөп торманы, йортҡа ымланы.— Әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ өй эсенә.

— Ни, ә айыу... — Самат ике күҙен яҡында ғына баянан бирле быларға ҡарап ултырған януарҙан айыра алмай. Тәүге һөйөү хисен татыған малайҙан һис кәм түгел.—... айыу тынысмы?

Айвар көлөмһөрәне.

— Үткәндәге ҡылығын онотмаңығыҙмы ни әле? Аслыҡтан ҡоторған ул. Ана бит, балалар шикелле гонаһһыҙ йән эйәһе.

— Ныу, улай булғас, аллаға шөкөр.— Битен эстән генә һыйпаны ла хужа менән Биктимер артынан өйгә ҡабаланды. Кем белә, элекке танышлыҡ йөҙөнән, берәй әкәмәтен ҡылып ҡуйыр тайыш табан.

Йорт эсенә ингәс, хужа түргә үтергә ымланы.

— Өҫ-башығыҙҙы һалығыҙ. Шәхси уҡ мәсьәлә булғас, моғайын, ҡабалан хәл итергә йыйынмайһығыҙҙыр.— Үҙе ҡашығаяҡ тирәһенә барып, сәйнүк ҡуйып ебәрҙе.— Йә, тыңлайым.

— Илбәков иптәш, — тигән булды Биктимер. Бер аҙ уйлап торғас, үтә рәсми тойолоп китте, шикелле.— Исемегеҙ Айвар бит әле? Һеҙ беҙҙе дөрөҫ аңлағыҙ, һорау

алырға килмәгәнбеҙ, бер ниндәй хилафлыҡта ғәйепләргә лә йыйынмайбыҙ. Нисегерәк әйтергә... Беҙгә һеҙҙең ярҙам кәрәк.— Тәьҫир иттеме икән тип, хужаның йөҙөнә текләп торҙо. Һүҙҙе тап ошонан башларға Биктимер алдан уҡ хәл итеп ҡуйғайны. Сөнки үҙҙәренең был егет артынан һунар итеүҙәренең сәбәбен, дөрөҫөн әйткәндә, үҙе лә белмәй. Ябай ҡыҙыҡһыныуымы, билдәле булмаған нәмәгә ҡарата тартылыуымы, тупаҫ әйткәндә, шайтан белә. Ишетелеп торған хәбәрҙәрҙән Айварҙың иҫ киткес һәләттәргә эйә булыуына торған һайын инана бара. Шуға ла уның йомшаҡ еренән — кешеләргә изгелек ҡылыуҙан бер ҡасан да баш тартмай — эләктереп алырға булды.— Үткәндә һеҙҙән һорау алып маташҡан өсөн ғәфү үтенәбеҙ. Бигүк ихтирамлы тонда ла һөйләшмәнек, буғай. Аҙаҡ асыҡланыҡ — айыу, ысынлап та, урланған. Машина эйәһе һис ниндәй дәғүә белдермәне, киреһенсә,— Ошо һүҙҙәрҙе әйткәндә, йылмайып ҡуйҙы лейтенант,— ни өсөндөр, бик ҡәнәғәт. Алама машинаһы майлағандай эшләп ҡалған.— Бер аҙ шым ултырғас, кинәт һораны.— Ә беҙ һеҙҙең нисек сығып киткәнегеҙҙе күрмәй ҙә ҡалдыҡ, Айвар. Әллә йоҡлағанбыҙ, әллә һөйләшеп онотолғанбыҙ...

Айвар лейтенанттың мут йылмайыуына ҡарап көләмһөрәне. Һағайыбыраҡ ҡаршылаһа ла, был икәү яман уй менән йөрөмәй. Быныһын ул асыҡ аңланы. Ләкин ни килтергән уларҙы ҡышҡы көндә? Етмәһә яҡын ара ер ҙә түгел. Ярҙам кәрәк, тиҙәр. Әммә ярҙамдың да төрлөһө була — кеҫә ҡалынайта, күҙ буяй торғаны...

— Моғайын, кисен ҡыҙҙар артынан оҙағыраҡ йөрөгәнһегеҙҙер.— Ҡапыл һорап ҡуйҙы.— Һеҙгә хәҙер нисә йәш?

— Егерме алты тула инде, ә Саматтың йәшлеге сәскә атта — ни бары егерме йәш.

— Дә-ә, көнләшәм егерме йәшлек халыҡҡа. Башта һис ниндәй ҡайғы юҡ, барыһы ла алда кеүек. Ә ул йәшлек тигән нәмә һиҙелмәй үтә лә ҡуя икән.

— Ҡуйығыҙсы, Айвар, нимә, әллә ҡартайырға йыйынаһығыҙмы? — Биктимер ихлас аптыраны. Әйтерһең дә, хужа кеше, һәлбер һаҡал йәбештереп, уны пенсияға оҙатырға йыйына.

— Юҡ та. Былай ғына әйтәм. Ни тиһәң дә, ғүмер тиҙ үҙа, егеттәр.

Һис көтмәгәндә, еңел генә аралашып киттеләр. Айварҙың үҙ йәштәштәре менән байтаҡтан ошолай гәпләшеп ултырғаны юҡ ине. Ни тиһәң дә, бер быуын кешеләре, уртаҡ нәмәләр байтаҡ булып сыҡты. Кешеләргә

һыуһау тигән нәмә лә ҡайһы саҡ күңелендә ҡыбырлап ҡуя. Табын артында ултыра торғас, сәғәткә яҡын ваҡыт үтеп китте. Ике юлсы үҙҙәренең ни өсөн килгәндәрен онотҡанға оҡшайҙар ине. Күберәк Биктимер менән Айвар гәпләшә, һирәк-һаяҡ Самат та һүҙ ҡыҫтырғылай. Ултыра торғас, ул урмансының әллә ниндәй хәбәрҙәр йөрөгән әҙәм булыуына шикләнә башланы. Ғәп-гәҙәти кеше, хатта шаян да. Хужаға һиҙҙермәй генә ҡулына ҡағылып алды — юҡ, башҡаларҙан һис ни менән айырылмай. Улайһа үткәндә, айыуҙан елдәр иҫкәндә, кемде күргән һуң ул? Ике тамсы кеүек оҡшаш та баһа. Ғәжәп...

— Һеҙ ниндәйҙер ярҙам хаҡында әйтә инегеҙ, шикелле. Хәлдән килһә, рәхим итегеҙ.— Хужаның һүҙҙәре Саматты уйҙарынан бүлдерҙе.

— Ә, эйе.— Биктимер нисегерәк әйтергә белә алмай торҙо. Хужа егеттең тыныс йөҙөн күргәс, тәүәккәлләне.— Беләһегеҙме, беҙ инде әллә нисә ваҡиға хаҡында ишеттек. Барыһында ла һүҙ сәйер ҡотҡарыусы хаҡында бара.— Айварҙың йөҙө үҙгәрмәне. Уға был тыныслыҡтың ниндәй ихтыяр көсө менән бирелеүен, әлбиттә, килеүселәр белмәй ине.— Беҙ уның һеҙ икәнен осраҡлы ғына белдек. Үткәндә үҙебеҙҙә һынаныҡ. — Бер аҙ өндәшмәй торғас, өҫтәне. — Сетерекле бер хәл килеп сыҡты, ябай юл менән хәл итерлек дәлилдәр ҙә, шаһиттар ҙа юҡ. Уйлашҡас, һеҙгә мөрәжәғәт итеүҙән дә яйлыһы юҡ, тигән һығымтаға килдек. Әгәр ҙә серегеҙҙең сиселеүен теләмәһәгеҙ, беҙҙең ауыҙҙан һүҙ сыҡмаҫ. Милиция бүлегендә һеҙгә ҡағылышлы ваҡиғаларҙы Самат менән минән башҡа бер кем белмәй. Әлбиттә, баш тарта алаһығыҙ, үҙегеҙҙең ихтыярҙа. Был осраҡта ла һис ниндәй дәғүәбеҙ юҡ һәм артығын һөйләп йөрөргә шулай уҡ йыйынмайбыҙ.

Айвар уйға ҡалды. Аптыраған булып, һеҙ ни хаҡта һөйләйһегеҙ, ниндәй ваҡиғалар ти тағын тип, ауыҙ йырыр ине. Әммә ундай иҫәрләнеү менән генә алдырып булмаҫ кеүек. Икенсенән, был лейтенант менән сержант унда бик һәйбәт тәьҫир ҡалдырҙы. Асыҡ ауыҙҙарға оҡшамайҙар.

— Ниндәй сетерекле хәл? Ярҙам итеп булһа, уйлап ҡарарға мөмкин.

Биктимер менән Самат бер-береһенә ҡарашты. Кире ҡаҡманы, тимәк, риза. Бына нисә ай инде улар эҙәрләгән сәйер кеше ҡаршыларында ултыра, тигән һүҙ ине был.

Күҙ һирпеп ҡарау менән, Айварҙа был малай сәйер тәьҫир ҡалдырҙы. Ғәп-ғәҙәти бала, һөйләшеүе лә аңлы, һорауҙарға дөрөҫ яуап бирә, ләкин... Күҙҙәре әллә ниндәй, битарафлыҡмы, бушлыҡмы, тиҙ генә билдәләүе ауыр.

— Стресс һөҙөмтәһе, — тип аңлатты лейтенант. — Ниндәйҙер шәхси трагедия кисергән был бала. Тик ниндәй — бер кем белмәй. Япа-яңғыҙын бер йорт ҡаршыһындағы эскәмйәлә ултырған ерենән табып килтергәндәр. Ҡайҙа йәшәгәне билдәле, ләкин атаһы менән унан бер аҙна элек киткәндәр. Сыҡҡандарын иҫләй, артабанғы ваҡиғалар хаҡында бер ауыҙ һүҙ тартып алып булмай.

— Ҡурҡып әйтмәй, тиһегеҙме?

— Юҡ, минеңсә. Ваҡытлыса хәтер туҡталыу — амнезия. Бик һирәк була, ләкин эҙемтәләре күңелленән түгел.

Айвар ултырғыста ултырған баланың ҡаршыһына сүгәләне.

— Исемең кем, ҡустым?

— Илдар.

— Нисә йәш һиңә?

— Ун бер.

— Ә атайыңдың исеме?

— Радмир.

— Ул ҡайҙа?

— ...

— Һеҙ ҡасан килгәйнегеҙ?

— ...

— Ҡасан юлға сыҡтығыҙ?

— Ике көн элек.

Айвар менән Биктимер бер-береһенә ҡараштылар. Малай йәшәгән Наманган ҡалаһынан бер аҙна элек, тип яуап бирҙеләр. Тимәк...

— Аңлашыла.— Айвар аяҡ үрә баҫты.— Был хәл икеөс көн элек булған. Участокка ҡасан килтергәйнеләр?

— Элекке көн.

— Ике-өс көн ҡайҙа етте шунда йөрөгән. — Ҡапыл әйләнеп, малайға өндәште. — Кисә ни эшләнең, ҡустым?

Илдар бер һүҙ ҙә әйтмәне, битараф ҡиәфәттә ултыра бирҙе.

— Башҡа сара юҡ, гипноз сеансы үткәрергә тура килер. — Айвар лейтенантҡа боролдо. — Биктимер, миңә бик ҡына тыныслыҡ кәрәк. Иғтибарҙы бер урынға туплау өсөн.

— Ял бүлмәһе бик ҡулай. Мин малай янында булып торам. Юл күрһәт, Сәғәҙиев.

... — Һин кем?

— Илдар.

— Ни өсөн бында килдегеҙ?

— Йәшәргә.

— Элек ҡайҙа инегеҙ?

— Наманганда.

— Ни өсөн киттегеҙ?

— Әсәйем үлде.

— Бында кемдәрегеҙ бар?

— Апайым. Ауылда.

— Шунда бара инегеҙме?

— Эйе.

— Атайың ҡайҙа?

Малай өндәшмәй торҙо. Унан ҡапыл яуап бирҙе.

— Уны туҡманылар.

— Ни өсөн?

— Аҡса таптыралар.

— Кемдәр?

— Белмәйем. Улар самолеттан төшкәне бирле беҙҙән ҡалманы.

— Ниндәй аҡсалар?

— Йорт мөлкәтен һатҡан.

— Һеҙ бөтөнләйгә ҡайтҡайнығыҙмы?

— Эйе.

— Ҡайһы тирәлә таланылар?

— Поездан төшкәс. Ташландыҡ һарай эсендә.

— Ниндәй станция?

— «25» тинеләр.

— Ә һин нисек бында эләктең?

— Улар үҙҙәре менән алып килделәр. Үлтерергә уйлағайнылар, атайым һорағас, ҡалдырҙылар.

— Ә атайың ни хәлдә хәҙер?

Малай бергилке өндәшмәй торҙо.

— Һарай эсендә. Туңып бара. Астан үлергә ята.

— Һине ни өсөн ҡалдырып киттеләр?

— Бер нәмә лә иҫләмәгәнгә.

— Аңлашылды. — Айвар торҙо. Уларҙы иғтибарлап күҙәткән Моратшин менән Сәғәҙиевкә өндәште.— Һеҙ барыһын да ишеттегеҙ. Тиҙ арала ир кешене ҡотҡарыу сараһын күрергә кәрәк.

— Ҡайһы станцияла тине әле?

— Номеры ғына бар. Эҙләү ауырғараҡ төшә инде. Берәй йүнлерәк исем булһа, эләктерергә йомғаҡ осо булыр ине, исмаһам.

— Хәҙер ни эшләргә һуң? — Мораташин, яуап көткәндәй, Айварға төбәлде. Тегеһе һорауҙың мәғәнәһен аңланы. Дөрөҫөн әйткәндә, бөтә был ярҙам уны һынау шикеллерәк ҡуйылһа ла, кешене ауыр хәлдә ташлай алмай бит инде.

— Ярай, малай хаҡында ҡайғыртығыҙ. Иртәгә ошо ваҡытҡа килеп етергә тырышырмын.— Кейемдәрен элгестән алды ла ишеккә йүнәлде. Малай иһә үҙенең бынан ун-ун биш минут элек һөйләгән хәбәрҙәре хаҡында тамсы ғына ла күҙ алдына килтерә алмай ине инде.

## 64

Үткәндә үҙенең ахмаҡ хәлендә ҡалыуын Кәбир онотмағайны. Айгөл менән класта, барыһының да күҙ алдында, һүҙ башлауы өсөн үкенеп ҡуйҙы. Етмәһә, шул танау буйына ҡарап йөрөгән ҡыҫҡа итәк тип һеләгәйен ағыҙған Илгизе. Һәр бер конкурста, олимпиадала һикереп сығырға өйрәнгән, бында ла шулай, тип уйлай торғандыр. Юҡ, былай ғына ҡалдырмаясаҡ уларҙы Кәбир. Кем икәнен белһендәр. Кисә кис һис уйламағанда атаһы менән уның әшнәһенең һөйләшкәнен ишек ярығынан тыңлағас, ышанысы тағы ла ныҒый төштө. Ул тәтәй ҡыҙ, үҙен күрһәтергә теләгәнсә, бигүк фәрештә лә түгел икән. Һәй көнө бер юғалған, етмәһә, бынан бер аҙна элек урлағандар. Дөрөҫ, уларға килеп йөрөгән теге уҫал ҡарашлы ағай кешенең һүҙҙәренә ҡарағанда, был юлы ла еңел ысҡынған. Тағы теге урман убыры ярҙам иткән, ти. Булһа һуң! Уның ҡарауы, һүҙе ҡалған. Ҡыҙ кеше бит, ни тиһәң дә.

Шуға күрә лә бөгөн иртән Кәбир Айгөлдөң ауыртҡан еренә тағы бер тапҡыр тейеп алырға булды. Был юлы уның башы эшләйәсәк. Класта дошмандарҙың һанын арттырғансы, мәктәпте тирәләп үҫкән ағастар ышығында көтә лә...

Тора торғас, аяҡтары өшөй башланы. Ҡыҙ үтеп китеүҙән ҡурҡып, иртәрәк килгәйне шул. «Ялҡауланып, хәҙергә тиклем йоҡлап ятмаһа» тип эстән генә әрләп алды. Борсола ла башлағайны, Айгөлдөң килгәне күренде. Тунының яғаһын күтәргән, аяҡ аҫтарына ҡарап, ни хаҡындалыр уйлап килә.

— Иҫәнме, туташ? — Кәбир уның ҡаршыһына сығып баҫты.— Донъя хәлдәре нисегерәк, тием?

Айгөл көтөлмәгән ҡаршы алыусыға ғәжәпләнеберәк ҡараны.

— Һаумы. — Урап үтеп китергә уҡталғайны, Кәбир йәнә ҡаршыһына сыҡты.

— Ашыҡмай тор. Башҡаларға теүәл көнөңдә, улай ғына ла түгел, тәүлектәреңде уйлап та тормай бүләк итәһең. Миңә биш минут ваҡытың йәлме ни? Ҡайһы ерем кәм утыҙ йәшлек ирҙәрҙән? Киреһенсә...

Айгөлдөң йөҙө үҙгәрҙе. Шулай ҙа үҙен ҡулға алды.

— Тыңла әле, Кәбир. Һиңә минән ни кәрәк?

— Бына быныһы аҡыллы һүҙ. Бер тапҡыр әйттем бит инде. Теләйһеңме, киноға саҡырам? Бөгөн үк.

— Шунан?

— Шунан шул. Дуҫлашырбыҙ.

Ҡыҙыҡайҙың күҙҙәрендә һиҙелер-һиҙелмәҫ мыҫҡыл сағылып ҡалды. Ләкин тышҡа бәреп сығырға Айгөл уға ирек бирмәне.

— Ҡарап тороуға аҡылһыҙ малай күренмәйһең. Дуҫлыҡты шул рәүешле яулайҙармы ни?

— Һинең менән мәктәп сәхнәһендә берәй нәмә ҡыландырырғамы ни? Ҡыҙғанысҡа, убырлы түгелмен.

Айгөл ниҙер әйтергә уҡталды, ләкин өндәшмәне, мәктәпкә ыңғайланы.

— Туҡта, туташ, минән былай еңел генә ысҡынмайҙар. — Кәбир һөмһөҙләнеп йәнә ҡыҙҙың ҡаршыһына сығып баҫты.— Үҙеңде әллә кем итеп күрһәтергә маташма, кемлегеңде былай ҙа беләбеҙ.

— Йә, кем?

— Ә-ә, ҡыҙыҡһынаһыңмы ни? Үәт, ирмәк, барыһына билдәле, ә ул хан ҡыҙылай ҡылана.— Йөҙөндә әллә ниндәй мимикалар эшләп булашты ла Айгөлгә тишә ҡараны.— Осраған бер кешегә һөйләйәсәкмен. Әйтмәне, тимә.

— Ниҙе һөйләйәсәкһең?

— Ә-ә, ул белмәй! Күрегеҙсе! Үткән аҙнала ҡайҙа булдың? Кем урланы һине? Барыһын да беләм, ғәйбәт таралмаһын тиһәң, минең шарттарға ризалаш. Улайһа...

— О! Ҡотлайым! Барыһына ла өҫтәп, ғәйбәтсе лә икәнһең! Һиңә был бик килешә. Юбка табып кей, яраймы? Бик булмаһа, үҙемдекен бүләк итермен. Таба алмаһаң, ҡайғырып уҡ китмә.— Айгөл малайҙы урап үтте лә мәктәп болдорона йүнәлде. Был юлы Кәбир уны ҡыуып етмәне. Күрәһең, ҡыҙҙың һуңғы һүҙҙәре уны әҙерәк һыуындырғайны. Шулай ҙа артынан һөрәнләмәй тыйыла алманы.

— Принцесса! Королева, имеш! Үҙеңде әллә кемгә ҡуйһаң да, кикрегеңде шиңдерербеҙ.

Айгөл өндәшеп торманы, мәктәпкә инеп китте.

65

Артта йылп-йылп итеп саҡрымдар ҡала. Юлдағы өзмәүерҙәй машиналар, ҡупшы еңел автомобилдәр гөбөргәйел тиҙлеге менән шыуышҡан шикелле тәьҫир тыуҙыра. Йөҙәр саҡрым ара үтһә, бер секундҡа ғына туҡтап ала күсермә. Уныһы ла йүнәлешенең дөрөҫ булыуын аныҡлау өсөн.

Икенсе үлсәмдәге донъяға күсеү менән, Айвар үҙенең ҡайҙа барырға тейешлеген асыҡ билдәләне. Был хәлендә унан йәшеренгән сер, ул белмәгән нәмә юҡ. Шуға күрә лә бараһы еренең ҡайһы тарафта икәнен генә асыҡланы һәм...

Бына ул ташландыҡ һарай. Тирә-яғын көрт баҫҡан, әҙ-фәлән күренмәй. Әҙәм йөрөй торған юл әллә нисә саҡрым ары үтә. Өс-дүрт секунд, һәм Айвар һарайҙың эсендә хасил булды. Түшәме емерек, ҡыйшайған таҡталары араһынан һарай эсенә апаруҡ ҡар тулған. Бер яҡ ситтәрәк иҫке бесән өйөмө күренә. Айвар тирә-яғына күҙ ташланы — әҙәм заты күренмәй ине. Уның ҡарашы әкрен генә бесән ятҡан мөйөшкә йүнәлде. «Шунда!» Ғәҙәти күҙ ярты сәғәт серәнеп ҡарап торһа ла, белерлек түгел. Айвар өйөмдө бер генә хәрәкәт менән аҡтарып төшөрҙө. Унда үлеме, тереме икәнлеген тиҙ генә билдәләрлек түгел утыҙ биш йәштәр самаһындағы ир ята ине. Йөҙ-башы ҡанға туҙған, кейемдәре йыртҡыланған. Күрәһең, арыуыраҡ әйберҙәрен һыпырып алғандар. Үлемгә күрәләтә хөкөм ителгән ине ул. Ысынлап та, ҡышҡы көндә туңыр өсөн күп кәрәкмәй. Быны бары һарайҙың аҙмы-күпме ышыҡ булыуы һәм бесән генә ҡотҡарырға мөмкин. Ҡотҡара алһа.

Эйе, ул үлмәгән ине әле. Айвар башын ҡалҡытып ҡарау менән, йәненең сыҡмай тартышыуын тойҙо. Ир кеше физик яҡтан ныҡ булғанға оҡшай, әллә ҡасан бирешеп теге донъяға олағыр ине юғиһә. Егет кеҫәһенән кескәй генә флакондағы спиртты тартып сығарҙы. Ауызын ҡайырып тигәндәй асып, бер-ике йотомдо шунда тамыҙҙы, унан ағарған бит-ҡулдарын ыуырға кереште. Ир ыңғыраша башланы, күҙҙәрен асмаһа ла, Айварҙың тырышлығы бушҡа булмауы саҡ ҡына үҙен һиҙҙерҙе.

Был йәһәннәм төпкөлөндә оҙаҡ ваҡытҡа ҡалыуҙан мәғәнә юҡ ине. Туңған бит-ҡулдарҙың саҡ ҡына йылына башлауын тойғас та, егет ир кешене йәтешләберәк күсереп һалды. Айвар уйға ҡалғайны. Күрше станцияға барып ярҙам һорауҙан файҙа юҡ кеүек, былай ҙа хәле ҡыл өҫтөндә. Теләһә ҡайһы минутта теге донъяға ола-

ғырға мөмкин. Бер аҙҙан тәүәккәлләне — башҡа сара юҡ, үҙенә алып барырға тура килә. Күҙе күргән, ҡолағы ишеткән кешеләр өсөн, әлбиттә, был бигүк һөйөнөслө күренеш булмаясаҡ. Тик нишләйһең, нахаҡҡа туҡмалып, үлем көтөп ятҡан кеше ғүмере хаҡына был аҙымды яһарға тура киләсәк.

Айвар, тышҡа сығып, һарай ҡапҡаһы алдындағы көрттө таҙартты, ишекте ҡайырып тигәндәй асты. Юл әҙер. Яраларына ҡағылмаҫҡа тырышып, ҡауырыйҙы күтәргән еңеллек менән ир кешене ҡулына алды. Ҡапҡаға табан ике аҙым, өс... Бына улар ҡар яланы йәйрәп ятҡан киңлек алдында торалар. Тағы бер нисә секунд, һәм кейемдәре ярайһы йырткыланған ир һауаға күтәрелде. Ул иҫенә килмәгәйне әле. Әгәр аңында булһа, йә аҡылдан яҙа, йә телдән ҡаласаҡ...

... — Ҡарағыҙ, ҡарағыҙ! Күктә әллә нәмәкәй оса! — Сана шыуып йөрөгән малай-шалай ауыл урамын яңғыратып һөрән һала. Мал эсереүсе ҡатын-ҡыҙ тәүҙә иғтибар итмәгәйне, бала-сағаның тауышы тынмағас, ҡулдарын ҡаш өҫтөнә ҡуйып, күккә төбәлделәр. Әбей-һәбей уҡынып, йәһәтерәк йорттарына табан тыртаңланы. Ғазраилдан ҡасып ҡотолорға тырышып ятҡан көндәре.

Айвар тиҙлеген арттырырға итеп ҡараны, ләкин был мөмкин түгел ине. Үҙе генә булғанда, секундына меңәр саҡрым юл үтеүсе күсермә ғәҙәти кешенең был тиҙлеккә сыҙамаясағын яҡшы белә. Ҡотҡарам тип, күрәләтә гүргә тығып булмай бит инде.

Көс-хәл менән ауылды үтеп киттеләр. Бынан һуң уйлабыраҡ эш итергә кәрәк. Көпә-көндөҙ күҙ алдыңдан әҙәм һыны осоп барһа, белмәгән доғаларыңды иҫеңә төшөрөрһөң.

Ҡалған юлды кеше йәшәгән ерҙәрҙе урабыраҡ үтергә тырышты. Артта тиҫтәләгән ауыл, бәләкәйерәк бер ҡала тороп ҡалды. Ләкин күпме аҙапланмаһын, әҙәм күҙенән барыбер йәшенә алманы. Тауҙа саңғы шыуып йөрөүсе бер төркөм халыҡ, күрәһең, спортсылар, сәйерһенеп, иҫтәре китеп, уларға ҡарап ҡатҡайны. Айвар йәһәт кенә йүнәлешен үҙгәртте. Ләкин быны менән генә ерҙәге кешеләрҙең ҡыҙыҡһыныуы үтмәне. Офоҡҡа кереп юғалғансы, уларҙың ҡараштарын Айвар тәненең һәр бер күҙәнәге менән тойоп барҙы.

Өфөгә яҡынлашҡас та, юлдағы машиналар һаны бермә-бер артты. Нишләргә? Трассаға сығып, ултыртыуҙарын һорарға мөмкин. Ләкин был осраҡта ҡалаға ҡыскә генә барып етәсәктәр. Уңарса булмай, үтеп-һүтеп йөрөүсе машиналарҙың ҡайһы берҙәре күктәге сәйер нәмәгә

иғтибар итеп өлгөргәйне. Бәғзеләре туҡтап тороп күҙәтергә кереште. Ундай ҡыҙыҡһыныу йәһәт таралыусан — шыраҡ ҡына ике еңел автомобиль торған урында ике-өс минуттан бер төркөм халыҡ хасил булғайны. Айвар ситкәрәк ҡайырылды. Бара торған еренән бороло-бораҡ булһа ла, урман артына ышыҡланыуҙы хуп күрҙе. Ул күренмәй башлағас, сәйерһенеп күккә төбәлгән халыҡҡа юл өҫтөндә тороуҙан мәғәнә ҡалманы. Әле генә күргәндәре хаҡында тәьҫораттары менән уртаҡлашып бергәләке торҙолар ҙа яйлап үҙ юлдары менән таралышып бөттөләр. Егеткә шул ғына кәрәк. Һуңғы машина ҡуҙғалып киткәс, йәнә күккә күтәрелде. Ләкин был юлы машиналар геүләп үтеп торған шоссенан алыҫыраҡ булырға тырышты.

Бына Өфө лә күренде. Аҡ йорттары менән күкрәк киреп тау башында ултыра. Ләкин ни рәүешле килеп инергә уға? Әлеге мәлдә был егет өсөн һорауҙарҙың да һорауы. Больница ҡаршыһына күктән осоп килеп төшөп булмай бит инде. Ауырыу хаҡында уйлау түгел, сит планетанан йән эйәһен зоопаркта, ситлек эсендә күрһәткән шикелле, ауыҙҙарын асып уға ҡарап ҡатасаҡтар. Быныһы иң һәйбәт бөткән осраҡта. Иҫтән ауышып йәиһә тырым-тыраҡай ҡасып бөтһәләр ҙә, бер ҙә ғәжәп түгел.

Уйлай торғас тапты, иң түбән тиҙлектә ҡала ситендәге ышығыраҡ ергә килеп төштө. Иҫһеҙ кешене күтәреп, юл ситләп атлап барыусы егеткә шундуҡ иғтибар иттеләр. Бер нисә машина зыйлап яндан үтеп китте. Араларында мәрхәмәтлерәге табылды — оло йәштәрҙәге ағай кеше, тиҙлеген кәметеп, егеткә өндәште.

— Ни булды, ҡустым? Ярҙам кәрәкмәйме?

Айвар туҡтаны. Ағай кешенең ярайһы тос күренгән кәүҙәле уның ыһ та итмәй күтәреп тороуына ғәжәпләнеберәк ҡарауын тойҙо. Ләкин был осраҡлы юлсы уға ярҙам ҡулы һуҙа ине.

— Рәхмәт, ағай. Тәүге осраған автоматҡа уҡ инеп, «Тиҙ ярҙам» саҡырһағыҙ, һәйбәт булыр ине. Туңған, күлә ҡыл өҫтөндә.— Эйәге менән генә ҡулдарында ятыусыға ымланы.

— Бәлки, алып барышырғалыр? — Ағай кеше дәртләнеп үк китте.

— Юҡ, юҡ, машина саҡырһағыҙ ҙа бик хуп. Ләкин тиҙ килеп етерлек булһын.

— Ярай, ҡустым. Ошо тирәләрәк көтөгөҙ.

...Больница алдына килеп туҡтау менән, һаман да иҫһеҙ ятҡан ауырыуҙы носилкала йүгертеп тигәндәй алып инеп киттеләр. Ҡаршы алыусы табип Айварға өндәште.

— Иптәш, был һеҙҙең берәй яҡынығыҙмы?
— Юҡ, доктор. Мин уның исемен генә беләм.
— Уның хаҡында башҡа белешмәләр бирә алмайһығыҙмы ни?
Айвар ҡулдарын йәйҙе.
— Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бер ни белмәйем. Малайы бар, шул ғына билдәле.
Табип уға ғәжәпләнеберәк төбәлде.
— Мин һеҙҙе аңламайым. Улайһа, ауырыуҙы нисек тап иттегеҙ һуң?
— Был оҙон тарих, доктор. Осраҡлы рәүештә.
— Яңылышмаһам, туҡмалғанға оҡшай. Бәлки, үҙегеҙгә билдәле мәғлүмәттәрҙе еткерерһегеҙ?
Айвар аңланы. Аҡ халаттағы тыныс йөҙлө табиптың күңелендә уға ҡарата шик һымағыраҡ нәмә ҡымырйый ине. Ниндәйерәк яуап табырға? Моратшин менән Сәғәҙиевкә лә хәбәр итергә кәрәк. Бәй! Бына бит йомғаҡ осо. Бер ғәйепһеҙ кешенең башын бутағансы, уларҙы ла эшкә егергә ваҡыт.
— Ғәфү итегеҙ, табип иптәш, һеҙҙән милиция бүлегенә шылтыратырға мөмкинме?
— Рәхим итегеҙ. Бик ашығысмы ни?
— Эйе.
...Трубканы Моратшин үҙе алды. Күрәһең, көнө буйы йә Айварҙың үҙен, йә шылтыратыуын көткән. Шундуҡ һәп итеп ҡалыуына ҡарағанда, тоҫмалларға мөмкин.
— Айвар, был һеҙме? Йә, ниндәй яңылыҡтар?
— Мин, мин. Теге баланың атаһын таптым. Әлеге мәлдә дауаханала. Бәлки, үҙегеҙ килерһегеҙ. Апаруҡ бәргеләгәндәр, ҡарарлыҡ ере ҡалмаған. Шулай ҙа тере, аңына килер, тигән өмөт бар.
Биктимер бергилке өндәшә алмай торҙо.
— Шулай ҙа... Шулай ҙа нисек таптың һин уны, ә?
Айвар көлөмһөрәне.
— Фирма сере. Башҡа һорауҙар юҡмы?
— Әлегә юҡ. Китмәй тор, хәҙер барып етербеҙ.— Трубкала ҡыҫҡа гудоктар ишетелде. Айвар уларҙың һөйләшеүен сәйерһенеберәк тыңлаған табипҡа баш ҡаҡты ла ситтәрәк торған кушеткаға барып ултырҙы.

## 66

— Һиңә ул сәйер тойолманымы?
— Кемде әйтәһең, иптәш лейтенант, ниҙеме...
— Кемде булһын, Айварҙы.— Биктимер руль артына

был юлы үҙе ултырғайны. Светофорҙың йәшел уты янғанын көткән мәлдә, түш кеҫәһенән папирос сығарып ҡабыҙҙы.

— Ни... Ысынлап та. Һиңә әйтергәме, тип уйлағайным, тағы көлкөгә күтәрерһең тип ҡурҡтым. Үткәндәге һымаҡ...

Биктимер өндәшмәне. Тәмәке төтөнөн үпкәләрен тултырғансы һурҙы ла машинаның асыҡ ишеге аша тышҡа өрҙө. Уның йөҙө уйсан ине.

— Үткәндә улай түгел ине бит ул. Урманда саҡта мин уның бер хәрәкәтен дә күҙ уңынан ысҡындырманым. Хатта уның теге хәбәр таралған кеше булыуына шикләнә лә башлағайным. Был юлы иһә...

— Ниндәйерәк тиһең?

— Әллә нисек. Беҙҙән метр-метр ярым самаһы аралаыҡ һаҡларға тырышты. Яҡынырaҡ килеүем була, һиҙҙермәҫкә тырышып урынынан күсә. Күҙҙәренә тура ҡараһаң, арҡанан ҡырмыҫҡалар йүгерешә башлай.

— Миңә лә, иптәш лейтенант, ул самаһыҙ тиҙ йөрөгән кеүек тойолдо. Тәбиғи түгел һымаҡ.

— Етмәһә, бынау яҙыуы.— Биктимер эске кеҫәһенән дүрткә бөкләнгән ҡағыҙ бите тартып сығарҙы.

— Нимә һуң ул? Айвар бирҙеме ни?

— Ә, һиңә әйтмәнем бит әле. Малай менән иргә һөжүм итеүселәрҙең йәшәгән ерҙәре. Икәү булғандар. Облава эшләргә тура киләсәк.

Ғәжәпләнеүҙән Саматтың күҙҙәре саҡ маңлайына менмәне.

— Ни-исек? Адрестары? Ҡайҙан тапҡан һуң ул уны?

— Белмәйем, Самат. Миндә лә һиңә билдәле булғандың артығы юҡ. Һүҙ көрәштереп тормай, тотторҙо ла китте. Аңлап ҡара инде хәҙер.

Бер аҙ ваҡыт шым барҙылар. Самат йәнә түҙмәне.

— Теге ирҙе әйтәм, нисек килтергән һуң ул? Бер ни ҙә әйтмәнеме һиңә?

— Ташландыҡ һарайҙа таптым, ти. Моғайын, юлайкан осраған машинаға эләгеп ултырып киткәндәрҙер. Ҡәйәү күтәреп килтерә алмай ҙа баһа.

— Иҫән ҡалыр микән? Бигерәк аямай туҡмағандар бит.

— Әйтеүе ауыр. Шулай ҙа өмөт бар, ти ине табип. Аңын юғалтыу ҡурҡыныcын иҫәпкә алмағанда.

— Дә-ә, тик торғанда башына бәлә төшкән шул.— Самат уфтанды. Сөнки хәл эсендә ятҡан ирҙең тышҡы ҡиәфәте, ысынлап та, йән өшөтөрлөк ине.

— Теге бала йәл. Яңыраҡ әсәһенән ҡалған, атаһы үлем эсендә ята.

— Әйткәндәй, уның да хәлен белергә кәрәк. Атаһы хаҡында хәбәр итербеҙ. Тынысланһа, артыҡ борсолмаһа, үтер ти ине доктор.— Биктимер машинаның газын арттыра төштө.

Милиция урынлашҡан бина ҡаршыһына килеп туҡтанылар. Аллы-артлы төшөп үҙ бүлмәләренә йүнәлгәндә, коридорҙың арғы башынан тауыш ишетелде.

— Иптәш лейтенант! Һеҙҙе таптыралар. Баянан бирле.

— Кем? Ҡайҙа?

— Телефондан. Телефондан һорайҙар. Үҙегеҙҙең бүлмәлә...

Биктимер ашығып инеп трубканы ҡулына алды. Сәғәҙиев тә уның артынан ҡалманы.

— Алло, тыңлайым.

— Моратшин, был һинме?

— Эйе, эйе, мин. Һөйләгеҙ, кем була?

— Нурмөхәмәтов мин. Элекке коллегаларҙы оноторға ярамай.

— Онотҡан юҡ та. Ваҡыт тығыҙ.

— Йә, йә, аҡланма. Быныһы һүҙ ыңғайында ғына.— Ҡарт тамағын ҡырғылап алды. Күрәһең, әйтәһе хәбәрен ҡайһы төштән башларға белә алмай аҙаплана ине.— Ни, Биктимер, беләһеңме, миндә һин ҡыҙыҡһынырлыҡ хәбәр бар.

—Ниндәйерәк?

— Ниндәй тип. Үткәндә бер һөйләгәйнем бит. Күҙҙәреңдең бесән кәбәнеләй дөрләп яныуын иҫләп, әйтмәй булдыра алмайым.— Нурмөхәмәтов кеткелдәп көлөп алды. Былай ҙа сабырһыҙ Моратшиндың түҙемлеген һынау ҡыҙыҡ тойолдо, ахыры. Унан тауышын етдиләндереп, төп һүҙгә күсте.— Теге сәйер йән эйәһе йәнә пәйҙә булған, туған. Дөрөҫ, үҙем күрмәнем, ләкин һөйләүҙәренә ҡарағанда...

— Кем? Сәйер йән эйәһе?

— Эйе, эйе. Үткәндә һөйләгәйнем бит әле. «Урал» аҫтынан еңел машинаны этеп сығарған осраҡ, иҫләйһеңме? Был юлы ла, әйтеүҙәренә ҡарағанда, шул булырға тейеш.

— Ҡайҙа күргәндәр?

— Күреүселәр байтаҡ. Ышанаһыңмы-юҡмы, һауанан осоп бара ине, ти. Ниндәйҙер бер ҡатын-ҡыҙмы шунда, ирме — айырыуы ла ауыр — күтәргән булған. Тәүҙә ысынға алмағайным, шаһиттар байтаҡ булып сыҡты. Өфөгә керер алдынан юл өҫтөндә күргәндәр. Ҡыҙға-

нысҡа, яҡын булмаған, йүнәлешен үҙгәртеп, кинәт юҡҡа сыҡты, тиҙәр.

— Шунан, шунан? Мәләүез яғынан килгән юлда түгелме?

— Эйе, ә һин ҡайҙан беләһең? — Нурмөхәмәтовтың аптыраулы йөҙө хатта телефон сымы аша күренгәндәй булды.

— Былай ғына. Дауам ит.— Биктимер шаҡ ҡатҡайны. Кинәт уның мейеһен бер фекер ярып үтте — Айвар хаҡында һөйләмәйҙәрме икән? Сөнки әлеге уңмаған юлсылар төшкән станциянан алып Өфөгә тиклемге ара... Ай-һай... Ниҙер бар бында.

— Алло, тыңлайһыңмы мине, Биктимер?

— Эйе, эйе, дауам ит.

— Йә, ни әйтерһең?

— Уйларға кәрәк, Нурмөхәмәтов ағай.

— Уның ни нәмәһен уйлайһың. Әйтеп торам бит инде, шул йән эйәһе тип.

— Ярай, хәбәр итеүең өсөн ҙур рәхмәт. Тағы ни ҙә булһа белә алһағыҙ, еткерерһегеҙме?

— Әбизәтелнә. Һорайым әле, ни өсөн уның менән шул тиклем ҡыҙыҡһынаһың?

— Былай ғына. Ярай, һау булығыҙ.— Биктимер трубканы һалды. Уларҙың һөйләшеүенән ни ҙә булһа аңларға тырышып, интегеп ултырған Сәғәҙиевкә өндәште.— Айварҙың теге ирҙе Өфөгә нисек килтергәнен мин беләм, Самат.

## 67

Бына инде сәғәт самаһы ваҡыт Кәбир түшәмгә төбәлеп йоҡлай алмай ята. Айгөлдө ҡурҡытыу барып сыҡманы. Бер нәмә лә булмағандай, йөрөп ятҡан була. Күҙенең осо менән генә лә элһәсе. Быныһына бигерәк асыуы ҡабара Кәбирҙең. Элегерәк һирәк-һаяҡ һүҙ ҡушҡылай ине, хәҙер иһә быялаға ҡараған шикелле үтеп китә ҡараны. Тәкәббер ҡыҙҙың ғорурлығын һындырыр минуттарын нисегерәк еткерергә белә алмай йонсой малай. Әгәр атаһынан ярҙам һорап ҡарағанда? Тфү, юҡ һүҙ. Кем-кем, уға арҡа терәрлек түгел инде. Бына уның Хәмит еиниәһе, исмаһам, ир. Тотҡан еренән һындырып бара. Алдына алғанын үтәмәй ҡалғаны юҡтыр, моғайын. Һөйләшеп ҡарарға кәрәк мәлен тура килтереп.

Класс алдында Айгөлдөң йөҙөн йыртам тип, тағын теге Илгиз менән яғалашып булмай. Һүҙ таратыр ине,

ҡыҙҙы һындырырға өмөтө, бәләкәй булһа ла, бар. Айгөлдөң атаһы төшөп ҡалғандарҙан түгел. Һәр хәлдә, аҡмаһа ла тама тигәндәй, ундай кеше менән йылы мөнәсәбәт ҡамасаулыҡ итмәç ине. Их, Кәбиргә тәтемәне бит шундайыраҡ дәрәжәле әҙәм балаһы булыу. Ошо хаҡта уйлаһа, бер аҙым атлаһа, икенсеһен баçырға ҡурҡып торған атаһына ҡарата асыуы тағы ҡабара төшә.

Уйланып ята торғас, күҙ ҡабаҡтары әкрен генә йомола башланы. Карауат ҡаршыһындағы стенала сәйер хәрәкәт тойоп, уларҙы ҡабат асты һәм, ауыҙын бейәләйҙәй йәйеп, ҡатып ҡалды. Тап уның алдында әҙәм һыны тора ине. Әкрен генә яҡынлай. Ул күскән һайын, Кәбир стенаға нығыраҡ һырыға. Ниһәйәт, ҡаршыһында туҡтаны.

— Ҡурҡма, мин һиңә теймәйем.

Әгәр өндәшмәһә, күҙенә күренә тип, белмәгән доғаларын уҡырға керешер ине малай. Әммә ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, юғалыу түгел, әҙәмсә һөйләшеп булаша.

— Һе-һе-һеҙ кем? — Кәбиргә үҙенең ҡалтыраныуы карауатҡа, стенаға, түшәмгә, унан тотош йортҡа күскән кеүек тойолдо.

— Быныһы икенсе мәсьәлә. Минең һиңә әйтәһе һүҙем бар.— Ысынлап та, ниҙер атҡарырға килгән шикелле, арҡаһында малайҙың кейемдәре эленеп торған ултырғысты бирерәк шыуҙырып, шунда ултырып алды.— Йомош килтерҙе мине бында,— тип өçтәне.

— Нин-дәй йомош?

— Ҡабаланма, өлгөрөрһөң. — Әллә ҡайҙан хасил булған сәйер кеше малайҙың күҙҙәренә төбәлде. Был ҡараштан Кәбир ҡайҙа ҡасып ҡотолорға белә алмай аҙапланды.

— Һеҙ... нисек индегеҙ... беҙҙең йортҡа?

— Уныһы ваҡ мәсьәлә. Теләк булғанда, барыһын да эшләргә мөмкин.

— Бәлки... бәлки... атайыма килгәнһегеҙҙер? Ул күрше бүлмәлә.

— Юҡ, минең йомош һиндә.— Сәйер кеше ултырғысҡа иркенләберәк ултырҙы.— Бына нәмә, мин ике тапҡыр һөйләргә яратмайым. Бер әйтәм, һәм буйынса һеңдерергә тейешһең. Аңлашыламы?

— Аң... Аңлашыла.

— Бына шул. Тәүге һәм һуңғы тапҡыр иçкәртәм — телеңде ҡыçҡараҡ тот. Класығыҙҙағы һин ҡаныҡҡан ҡыҙҙың әгәр ҙә бер генә бөртөк күҙ йәше тамһа ла, әйтмәне тимә. Үпкәләштән булмаһын.

— Аң... Ярай.

— Мин әйткәндәрҙең барыһын да төшөндөңмө?

— Эйе.

— Ҡара уны, һуңғы тапҡыр осрашайыҡ. Мин шаярырға яратмайым.— Кеше урынынан тороп ишеккә йүнәлде. Ул сығып киткәнсе, ситкә ҡарарға ҡурҡып ятты Кәбир. Үҙе үк класташ ҡыҙының албаҫты ла убырлы тип йәненә тейгән кеше менән һөйләшеүен ул, әлбиттә, белмәй ине.

## 68

Подъезд ишегенән көмөрәйеңкерәп урта йәштәр тирәһендәге бер ир килеп сыҡты. Тәүҙә ҡайҙа барырға йыйынғанын белмәгәндәй, аптыраған ҡиәфәттә әле теге яҡҡа, әле был яҡҡа ҡаранып торҙо. Унан ҡулын һелтәне лә китеп барҙы. Үҙ йәшенән кәмендә ун йылға ҡартыраҡ күренә ине ул.

— Һы... — тип һөйләнде ул үҙ алдына.— Мин уларға ни эшләгәнмен. Үҙем уйлап сығарҙыммы ни бар этлекте. Һөйәргә кеше таптылар.

Күҙ алдынан Стастың, янына килеп, ҡолаҡ төбөндә ыҫылдауы китмәй. Йәнәһе лә урман ҡарауысы менән эштең барып сыҡмауында бары ул, Миңлеғәле, ғәйепле. Ныуаш кешегә ғәйеп өйөүе еңел шул. Үҙҙәре кеүек үк яуызлығы ташып торһа, башҡасараҡ һөйләшерҙәр ине. Етмәһә, Хәмите. Асыуҙы килтереп, Стас янында саҡ ҡойроғона баҫып бейемәй. Хәбәрҙең дә ниндәйен һуға бит әле. Имеш, Хәмиттең уйында ла булмаған был өмөтһөҙ эш, бынау алйот (Миңлеғәлегә бар булған ун бармағын берсә төртөп күрһәтә) күндермәһә, башына ла инеп сыҡмаҫ ине. Вәт һин уны, ҡара йөҙҙө. Ғүмер буйы кешенең артыҡ тиненә тейгәне булманы Миңлеғәленең, намыҫлы йәшәйем тип, тапҡан-таянғанына ғына көн күрә. Ә былар... Бер нисә ай эсендә йөҙҙө батҡаҡҡа тығып бутанылар...

Ике ҡулын арҡаһына һалып, ҡайҙа барғанына иғтибар итеп тормай, атланы ла атланы. Өйҙә лә әллә ни күңелгә ятырҙай тормош көтмәй. Ҡатыны менән егерме йылға яҡын ғүмер итәләр. Әллә ошо ваҡыт эсендә һөйләшәһеләрен һөйләшеп бөттөләр, тәүлек эсендә күп булһа бер-ике һөйләм менән алышаларҙыр. Ни хаҡында хәбәр ҡуйыртаһың инде, бер уйлаһаң. Ә малай... Һуңғы арала, ни өсөндөр, бүрегә ҡараған шикелле ҡарай. Әйтерһең дә, ауыҙына ҡапҡан һуңғы тәғәм ризығын тартып алған... Туйҙырҙы был мәғәнәһеҙ тормош. Бөгөндән күтәреп һуҡмағайы.

Миңлеғәле башын баҫып атланы ла атланы. Иҙеүе асыҡ, пальто төймәләре ысҡынған, муйынында эленеп торған шарфы елгә елберләй. Ҡараңғы ла апаруҡ ҡуйырып килә. Халыҡтың эштән ҡайтҡан ваҡыты шул, мыжғып торалар. Әле тегеһе, әле быныһы уға килеп бәрелә. Үҙҙәре ғәйепле булһа ла, ул яҙа баҫһа ла, ни өсөндөр, әрләнеп ҡала.

Уйҙарының осона сыға алмай бара торғас, өҙләкһеҙ транспорт үтеп торған юл өҫтөнә килеп сыҡҡан. Шығырым кеше тулған автобус, фараларын йылт-йылт иттереп, танау төбөнә тигәндәй килеп терәлгәс кенә, күреп ҡалды ул. Тайшанырға уйлағайны, ҡапыл бөтә булмышын вайымһыҙлыҡ баҫты. «Тапай бирһен әйҙә. Был мәғәнәһеҙ тормош йөгөн һөйрәгәнсе...» Яҡынайып килә, яҡынайып килә. Күҙҙәренә шоферҙың ҡобараһы осҡан йөҙө сағылып ҡалды. Бер нисә секунд, һәм барыһы ла бөтәсәк. Был тормошта ҡылған һәм ҡыласаҡ эштәр өсөн ҡурҡып ултыраһы түгел. Барыһына ла хоҙа ҡөҙрәте...

Һәм ҡапыл низер булды. Күҙҙәрен сытырлатып йомоп, үҙ тәҡдирен көтөп торған Миңлеғәле елкәһенән көслө ҡулдарҙың матҡып тотоп алыуын тойҙо. Сәбәләнеп ысҡынырға маташты, ләкин был бармаҡтарҙа хоҙаның үҙендә генә булған ҡөҙрәт бар кеүек ине. Миңлеғәле күҙҙәрен асҡанда, юлдан байтаҡ алыҫта тора, кеше аяғы ла һилерәк. Үҙен кем юл өҫтөнән тартып сығарғанын аңларға тырышып, тирә-яғына күҙ йүгертте. Ҡаршыһында еңелсә генә томан. Ғәжәп, ҡыш көнө лә булыр икән. Әммә Миңлеғәле уға шаҡ ҡатманы. Ҡото алынманы, тороп йүгерергә лә уҡталманы, бары шулай тейеш итеп ҡабул итте. Үҙ ғүмерендә ике тапҡыр осрашырға тура килде уға был сәйер нәмә менән. Әле иһә үҙе менән ни булғанын бигүк төшөнөп бөтә алмай тора. Алды-артты ҡарамай, юлында осраған бар кешене бәрә-йыға елдерергә тейеш ине бит. Йөрәгендә тәненең һәр күҙәнәгенә тиклем яҡшы таныш булған ҡурҡыу тойғоһо тамсы ғына ла юҡ. Киреһенсә — тыныслыҡ, һиллек... Ни булды уның менән?

— Мин ҡайҙа?

— Ерҙә, — тип яуап бирҙе күренмәҫ әҙәм тауышы.

— Һин ҡотҡарҙыңмы мине?

— Эйе.

— Ни өсөн? Туйҙым был донъянан.

— Үҙ-үҙеңә ҡул һалыу — аллаһы тәғәләгә ҡаршы сығыу. Ул һине кисермәйәсәк. Йәнеңдең, керергә урын тапмай, меңәр йылдар яфа сигеүен теләмәйһеңдер бит.

Унан... Барыбер ошо уҡ донъяға ҡайтасаҡһың. Тағы ла ауырыраҡ яҙмышҡа дусар булып...

— Ә был тормош... Был тормош тамуҡтан ҡайһы ере менән артыҡ?

— Тәҡдирең шулдыр. Унан... Иң йәмһеҙ аҡҡан ғүмергә лә йән өрөргә була. Хоҙай кешене был донъяға яратҡанда, быныһы яман, быныһы яҡшы булһын, тип юрамай. Яҙмышты ҡәһәрләү еңелдәрҙән дә еңел эш.

— Ни эшләргә миңә? Ярты ғүмер аҡҡан һыу кеүек үтте лә китте. Һәр ҡайҙа ла мин уртаса, йыуаш, эшкинмәгән, булдыҡһыҙ...

— Тыныслан. Яҡты донъяға һөйөнөргә өйрән. Фани донъялағы тормош ҡыҫҡа ғына. Бында ниндәй булыуыңа ҡарап, мәңгелек йәнеңә урын билдәләрҙәр. Һәр ҡылған ҡылығың була ла онотола, тип уйлай күрмә. Улар мәғрур ағаста үҫкән япраҡ һымаҡ. Йә биҙәй, йә йәмһеҙләй.

— Кемгә кәрәгем бар һуң минең? Үҙ ҡатыныма терәк түгел, үҙ балама кәрәк түгел...

— Кеше ҡайғыһын йөрәгеңә яҡыныраҡ ҡабул итергә өйрән. Башҡалар ҙа һиңә изгелеклерәк, мәрхәмәтлерәк тойолор. Ниндәй мәғәнәһеҙ аҡҡан донъяң да үҙгәрер.

— Белмәйем шул...

— Ғүмер баҡый шикләнеү юлдаш әҙәм балаһына. Ләкин бер кемдең дә тормошо бөткөһөҙ ҡыуаныстан тормай. Уйла был хаҡта...

— Уйларға... Уйларға?

Миңлегәле кинәт һиҫкәнеп китте. Иңбаштарын йылдар буйы баҫып торған сәйер ауырлыҡ һыпырылып төшкән кеүек ине. Ҡаршыһына атлап килеүсе кешеләр ҙә йылмая кеүек. Әллә барыһы ла ишетеп торҙомо икән? Ишетеп? Нимәне? Миңлегәле тирә-яғына ҡараны. Бәй, кем менән һөйләште һуң ул? Янында бер кем дә юҡ та баһа.

— Һеҙ кем?

Ләкин яуап биреүсе табылманы. Әлеге һөйләшеүҙең ысынбарлыҡта булыуына инде шикләнә башлаған Миңлегәле әкрен генә ҡар өҫтөнән атланы. «Фәрештә тигәндәре әллә шул булдымы икән?» Бәлки, ул бөтөнләй автобус аҫтында ҡала яҙмағандыр, бәлки, бер кем менән дә һөйләшмәгәндер ҙә... Шулай ҙа... Шулай ҙа... Тормоштоң ярайһы ҡаҡҡыланған, кәмәһе көрсөккә килеп терәлгән ир уртаһы кешенең был ысынлығына бик-бик ышанаһы килә ине.

— Был килеш ҡалдырырға ярамай ул урман убырлыһын. — Стас кеҫәһенән папирос ҡабы тартып сығарҙы. Ләкин асып ҡараны ла ниңәлер иҙәнгә атып бәрҙе.— Белһен минең кем икәнлекте. Ҡара күҙлек шаяртырға яратмай.

Хәмит, папиростың «п» хәрефе күренә башлау менән, йәһәтерәк мәҙәк формала эшләнгән зажигалкаһын тартып сығара һалғайны, кәрәкмәүенә үтә лә ҡайғырып, кеҫәһенә кире һалып ҡуйҙы. Баянан бирле шефтың нисегерәк итеп күңелен күрергә белә алмай аҙаплана ул. Күрәһең, Хәмиттең һәр һүҙе Стастың һарыуын ғына ҡайната, күҙенең ағы менән һөҙөп ҡарай ҙа туҙыныуын белә.

— Үс алырға кәрәк, шеф.

— Нисек итеп?

— Ну...

— Ныуылдама. Һеҙҙәй эрәмтамаҡтарҙың унлабын ебәрһәң дә, бер аяғығыҙҙы күтәргән килеш, икенсеһе ерҙә көйө хырылдап йоҡлап китәсәкһегеҙ.— Үткәндә Айвар һемәйтеп сығып киткәндә, Стас үҙе, әйтерһең дә, килгән ҡунаҡтарҙы эйелә-бөгөлә, сәләмдәр күндерә-күндерә, оҙатып ҡалған. Уның әлеге һөйләнеүенән күҙҙе лә йоммай шундайыраҡ һығымта яһарға була.— Вәт һин уны. Ата-баба ҡыланмағанды...

Шулай итеп, Стастың ялҡынлы телмәренән урмансының үтә лә шәфҡәтһеҙ, ҡаты бәғерле кеше булыуы асыҡланды. Джентельмендарса һөйләшергә саҡырылған кешенең хужаларҙы сатай-ботай туңҡайтып сығып китеүе эшме ни инде. Йәғни цивилизациялы йәмғиәттә улай ҡыланмайҙар.

Шефтың һүҙҙәренә тәненең һәр күҙәнәге менән ризалашып, һәп итеп торған Хәмит уны йөпләгән булды. Стастың ауыҙынан сыҡҡан бер һүҙенә баш ҡаға-ҡаға, эйәген һелкә-һелкә тора торғас, мейеһенең ҡайһылыр тарафынан елле фекер тәгәрәп төштө. Иҙәнгә ҡойолоп китһә, йыйып алыуы ҡыйын булыр тигән һығымтаға килгәс, күҙҙәрен кәпесләтеп Ҡара күҙлек ҡаршыһына барып баҫты.

— Ни... шеф...

— Тағы ни кәрәк? Һин һаман да ҡайтып китмәнеңме ни әле? Һеҙ эрәмтамаҡтарҙы көнө-төнө ашатып-эсереп ятҡан етмәгән, хаҡын ҡайтарырға ла эшкинмәйһегеҙ.

— Мин...

— Йә, һөйлә. Ҡыҫҡа тот.

— Беләһеңме, шеф, уға ҡаршы сығыуҙан файҙа юҡ. Үҙегеҙ ҙә күрҙегеҙ бит...

— Шуны әйтергә теләгәйнеңме? Һинһеҙ ҙә беләм. Бер кешегә ҡаршы тора алмағас, өйөрөгөҙ менән ни өсөн тотам мин һеҙҙе?

— Икенсе төрлөрәк эш итергә кәрәк тим.

— Йә! Нисегерәк?

— Үҙе юҡта йортон яндырырға! Бәлки, бар булған сихыры өйөндәлер. Әкиәтте беләһегеҙме, тәлмәрйен тунын яндырһалар, тү-тү, оса ла китә. Шуның шикелле. Бер ғиләһе барҙыр ул.

— Дә-ә... — Стас йөҙөнә Архимед ҡиәфәте бирергә тырышып, үтә лә аҡыллы ҡыланып, әле генә йәйелеп ултырған креслоһын урап сыҡты. Унан Хәмиттең ҡаршыһына туҡтап, күҙҙәренә төбәлде. Уның ҡарашынан ҡайҙа ҡасып ҡотолорға белә алмай, йылан арбаған ҡуяндан, әле түшәмгә, әле иҙәнгә төбәлгән булды елле фекер тоҡсайы. — Яҡшы. Бына һин яндырырһың!

— Ни... шеф. Мин тәҡдим генә итәм.

— Бик яҡшы. Тәҡдимең юғары баһаланды тип иҫәплә.

— Ни...

— Был минең һуңғы һүҙем. Иртәгә юлға сығабыҙ. Сергей менән Мәхмүт тә бара, улай уҡ ҡотоң алынмаһын. Ләкин,— ошо һүҙҙе әйткәс, Стас һуҡ бармағын Хәмиттең күкрәгенә терәне,— һин ут төртәсәкһең. Үҙ ҡулдарың менән.

— Мин...

— Бына әйтеп торам бит, һин тип. Ҡурҡма, болашыусы юҡ. Альтернатив кандидаттарҙың булмауы сәбәпле, күнселек тауыш менән был юғары урынға Хәмит атлы фонде тәҡдим ителде һәм алҡыштар аҫтында раҫланды. Ха-ха-ха! — Стас үҙенең гүзәл тауыш менән көлөүенән ҡорһаҡ тип аталған затлы урынының йыртылыуынан ҡурҡты буғай — ике ҡулы менән шул өлкәгә йәбешеп, һелкенә-һелкенә тәхетенә, йәғни, тупаҫ әйткәндә, креслоһына барып ултырҙы. Артын терәгәс тә, байтаҡ дерелдән торҙо әле был почетлы урын. Унан, һәр ваҡыттағыса, кинәт туҡтаны. Был Стас әфәнде «стоп» кнопкаһына басты тигән һүҙ. Ошо мәлде күргән кеше көлөү тауышын магнитофон таҫмаһына яҙҙыра ла кинәт туҡтатып, йөҙөн ҡаржайта тиһәң, һис шикһеҙ ышаныр ине.

— Бына нәмә, хөрмәтле депутатҡа кандидат, был туҙға яҙмаған нәмәне һеҙ уйлап сығарҙығыҙ һәм яуабын да бирәсәкһегеҙ. Ә мин, шунса ваҡытты һеҙҙең ише алйоттар менән әрәмгә үткәргән өсөн, ситтән ҡарап ләззәтләнеп торасаҡмын. Хәҙергә табаныңды ялтырат, мин тағы

ҡыҙып китмәҫ борон. Иртәгә иртән, ҡара уны, минут та һуңламай килеп етәһең.

Хәмит ишеккә табан өҫтөрәлде. Йә инде, башта бик шәп идея булып тойолғайны ла баһа. Теш үтмәҫлек нәмә булып сыҡты. Миңлеғәле албаҫты тип башты ҡатырмаһа, Хәмит һүҙ ҡуҙғатыр инеме ни был хаҡта? Ете ятып бер төшөнә инмәҫ ине юғиһә... Миңлеғәле! Бына кем ут төртөргә тейеш ул йортҡа! Теге убырлы иҫән ҡалған хәлдә лә, шул йолҡош ғәйепле булыр, исмаһам.

Түбәһенең осона һыңар аяғы менән генә эләгеп торған сираттағы елле фекеренән ҡанатланып, Хәмит таныш фатирға табан елдерҙе.

## 70

Күпме дөбөрләтмәһен, Хәмиткә ишекте асманылар. Йәне көйөп, емерергә лә уҡталғайны, эштең ҙурға китеүенән ҡурҡты. «Ҡасҡан!» тигән уй йүгереп үтте башынан. Кисә Миңлеғәлегә һуң ғына килеп инде ул. Ғәжәпкә, уныһы Хәмитте күреү менән өтәләнеп китмәне, һәр һүҙенә ырғып төшөргә лә ашыҡманы. Инде әллә нисә йыл таныш булһалар ҙа, уның былдай сағын һис күргәне юҡ ине. Шуға аптырап, һораштырған булды, тегеһе иһә ҡолағы аша тишек иләктән һөҙгән шикелле үткәреп ебәрә уның төпсөнөүен. Аңла инде шунан донъяла ниҙәр ҡылынғанын.

Хәмиттең ни өсөн килеүен белгәс, ғәҙәтенсә һүҙһеҙ риза булыу түгел, «Уйлашырға кәрәк», тигән була. Ни нәмәһен уйлайһың инде уның. Ҡайҙан табылған аҡыллы баш. Миңлеғәленең ҡиәфәтен күреп, екеренергә лә баҙнат итмәне хатта. Нисегерәк итеп ҡаҡ башындағы ҡаҙанын ҡайнатҡаны бына бөгөн аҡырайып күренеп тора.

Хәмит йәне көйөп, ишеккә йәнә берҙе тибеп алды. Ләкин уныһы, был тиклем дә әсе тәнҡит утына, тупаҫ әйткәндә, төкөрмәне лә, исмаһам — ыржайып урынында ҡала бирҙе. Башҡа сара юҡ — үксәләрҙе күтәрергә тура килә. Былай ҙа Стас әйткән ваҡыт үтеп бара. Ул һөмһөҙ ҡабырғаларҙы һанарға ла күп һорамаҫ.

Миңлеғәлене ете быуын зат-зәүеренән һалдырып әрләй-әрләй килеп еткәндә, барыһы ла урынында ине. Машинаға ултырып, Хәмит ғали йәнәптәрен көтәләр. Уларҙың ҡараштарын күреп, теҙ быуындары былай ҙа бигүк ныҡ булмаған уҙаман арҡаһынан сүмес-сүмес һалҡын һыу аҡҡанын тойҙо.

— Йә!
— Ни... Миңлеғәле йортонда юҡ икән...
— Шунан ни булған?
— Барырмын, тигән ине.
— Үҙе үк ҡул күтәреп риза булдымы ни? — Стас тештәрен ыржайтты.
— Юҡ та. Әйткәйнем, ҡаршы килмәне.
— О! Был эшкинмәгәндәрҙә советса йәшәү өлгөһө күренә башлаған. Йәғни сознательность. Ха! — Машина ишеге төбөндә инерен-инмәҫен белә алмай торған Хәмиткә екерҙе.— Йә, ин, ни эшләп тәҙерәйеп тораһың.— Тегеһе артҡы ултырғысҡа урынлашҡас, руль артындағы Мәхмүткә бойорҙо.— Ҡуҙғал әйҙә, киттек. Йоҡлап йөрөгән Миңлеғәлене көтөп ултырып булмаҫ.
Еңел машина ырғылып урынынан ҡуҙғалды.

71

Был ваҡытта Миңлеғәле ашыға-ашыға тротуар буйлап бара ине. Йөҙөндә — ғүмерҙә булмаған тәүәккәллек.
Алда таныш йорт күренде. Бында уның өсөнсө тапҡыр килеүе. Тәүгеләрендә был тупһаға үҙ теләге менән аяҡ баҫмағайны, ә хәҙер бер кем дә арттан ҡамсыламай. Шулай ҙа керәсәк ул. Миңлеғәлене унда көтөп тормайҙар, күреү менән, бәлки, танау төбөндә генә шапылдатып ишекте ябып ҡуйырҙар. Ләкин индермәһәләр, тәҙрәгә барасаҡ, уныһын да япһалар, форточкаға үреләсәк. Сигенергә юл юҡ.
Тәүәккәлләп ишек ҡыңғырауына баҫты. Эстә ҡыбырлаған тауыш ишетелмәй. Миңлеғәле йәнәштән ике тапҡыр сыңғырлатып алды, унан бармағын төймәнән алмаҫҡа ҡарар ғына иткәйне, йүгереп килгән аяҡ тауышы ишетелде. Уның эсенә йылы кереп китте.
— Һеҙгә кем кәрәк? — Ишекте асҡан Айгөл мөләйем генә һүҙ ҡушҡайны, күрәһең, танып ҡалды — йылмайыуы әкренләп һүнде. Минут самаһы бер-береһенә ҡарашып, өндәшмәй торҙолар.— Һеҙ Кәбирҙең атаһымы?
— Эйе. — Миңлеғәле нисек һүҙ башларға белә алмай ыҙаланды. Әҙерләгән һөйләмдәре лә тырым-тыраҡай ҡасышып бөткәйне. Ләкин юл буйлап дүрт ир ултырған машина еләә, һәм ул бер кемгә лә — ошо ғәжәпләнеп ҡарап торған сибәр йәш ҡыҙға ла, урман төпкөлөндә йәшәп ятҡан фәрештәләй изге йән эйәһенә лә, хатта Миңлеғәлене үҙенә лә яҡшылыҡ килтермәйәсәк. Шуға күрә ул үҙен ҡулға алырға тейеш. Изгелеккә мохтаж ке-

шеләр хаҡына...— Эйе, һеңлем. Тик һүҙ был хаҡта түгел.— Ябып ҡуймаһын тип ҡурҡҡан шикелле, Миңлеғәле ишеккә йәбеште.— Һеңлем, тыңла әле. Һинең урманда йәшәүсе бер дуҫың бар бит әле.

— Бар. Ниңә, тағы кәрәк булдымы ни ул һеҙгә?

— Аңла, туғаным. Уға ҡурҡыныс янай.

Айгөл һиҫкәнде. Тыныслығы һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты.

— Ҡурҡыныс тиһегеҙме? Тағы ни эшләргә йыйыналар?

— Йортон үртәргә. Бына әле генә киткән булырға тейештәр. Дүрт ир кеше, еңел машинала.

— Кемдәр улар?

— Ҡара күҙлек, Хәмит, тағы икәү, уларын белмәйһеңдер.

Айгөл йәһәт кенә пальтоһын эләктереп алды, аяғына итектәрен кейҙе. Ҡуян бүркен ҡулына алғайны, уныһы иҙәнгә тәгәрәне, ҡул һелтәне лә ишекте бикләне. Миңлеғәле баҫҡыс буйлап аҫҡа төшә башлағайны инде.

— Рәхмәт, ағай.

— Ашыҡ, туғаным.

Урамға сыҡҡас, ҡыҙыҡай ҡайһы яҡҡа йүгерергә белә алмай, бер аҙ урынында тапанып торҙо. Ни ҙә булһа эшләргә кәрәк ине. Ҡапыл хәтеренә Айвар менән булған һуңғы осрашыу килде. Ниндәйҙер ике йәш милиционерҙың урмансы йортона килеүе, аҙаҡ уларҙың үтенесе буйынса, малайға гипноз яһауы хаҡында һөйләгәйне түгелме һуң? Дөрөҫ, ир кешене һауанан осороп алып килеүе хаҡында әйтмәне. Ләкин таралған имеш-мимештәрҙән, гәзит биттәрендә күренгеләгән хәбәрҙәрҙән Айгөл ап-асыҡ төшөндө — ул, Айвар! Күңелендә егет өсөн борсолоу, хафа барлыҡҡа килгәйне. Етмәһә, әле генә ишеткән хәбәр.

Әйтеүенә ҡарағанда, әлеге бүлек алыҫ булмаҫҡа тейеш. Ҡыҙыҡай оҙаҡ уйлап торманы, юлдан үтеп барыусы таксиға ҡул иҙәне.

...Тыны бөтөп йүгереп кереп барыусы Айгөл ҡаршы килеүсе милиционерға бәрелә яҙҙы. Уныһы йәш кенә егет булып сыҡты. Башына ла киймәгән ҡыҙға аптырабыраҡ ҡарап торғас, кинәт йөҙөнә йылмайыу һымаҡ нәмә йәйелде.

— О, туташ! Рәхим итегеҙ беҙҙең мөғжизәле һарайға! Рыцарҙарҙың һәр төрлөләре һәм дә ҡырҡ сортлылары һеҙҙең ҡарамаҡта! Дейеү пәрейенән ҡотҡарырғамы, йәиһә аждаһаның танауына сиртергәме? Әйтегеҙ, барыһына әҙербеҙ!

— Иптәш милиционер! Ағай, әйтегеҙ әле, Мораташин тигән кеше бында эшләйме? Зинһар, тиҙерәк булығыҙ.

— Бик ҡыҙғаныс, әлбиттә, шундай һылыуҙарҙың ҡарт лейтенанттарға ғашиҡ булыуы. Йәғни бында лейтенант булмаған йәп-йәш милиционерҙар мөхәббәт утынан һарғайып үлергә торғанда.— Ҡыҙҙың ҡиәфәтен күреп, магнитофон таҫмаһылай һәлберәп торған теленең ҡайһылыр төймәһенә баҫты. Шулай итеп, һәүетемсә һөйләүсе радио тулҡындары хасил булды.— Ул бында, туташ. Йомошоғоҙ бик ашығысмы ни?

— Эйе.

Милиционер арыраҡ үтеп, ниндәйҙер бүлмәнең ишеген асты.

— Иптәш лейтенант! Һеҙгә килгәндәр.

Кабинеттан мөләйем йөҙлө, ҡиәфәтенән тәүәккәллек бөркөлөп торған йәш ир күренде. Йыш-йыш тын алыусы ҡыҙға бер нәмә аңламаған ҡарашын төбәне.

— Һаумыһығыҙ! Һеҙ миңәме?

— Ағай, һеҙ Мораташинмы?

— Эйе. Ни өсөн кәрәгем булып китте? — Унан ишек төбөндә һөйләшеүҙе килештермәне, шикелле, ҡулы менән эскә үтергә ымланы.— Рәхим ит, һылыу. Ултырып һөйләшәйек. Ни булды?

— Рәхмәт, ағай. Кереп тормайым.— Айгөл һүҙен нисегерәк ялғарға белә алмай ыҙаланды.— Мораташин ағай, һеҙ Айварҙы беләһегеҙме? Илбәковты?

— Эйе. Ниңә, әллә уның һеңлеһеме?

— Юҡ та.— Ҡыҙыҡайҙың йөҙөнә ҡуйы ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. Шулай ҙа үҙен тиҙ ҡулға алды ул.— Уға ҡурҡыныс янай, аңлайһығыҙмы? Йортон үртәргә бер еңел машина юлға сыҡҡан. Әле генә белдем һәм шундуҡ бында йүгерҙем. Башҡа ярҙам һорар кешем юҡ.— Айгөл башын түбән эйҙе. Мейеһен бер генә һөйләм өтә ине: «Баш тартмаһын, бары баш тартмаһын...»

— Еңел машина? Кемдәр улар?

— Айварҙы үҙҙәренә эшләтергә маташҡан инеләр. Ул риза булманы, шуға үсләшәләр.

— Аңлашылды. Бар, һеңлем, йортоңа ҡайт, беҙ хәҙер үк юлға сығабыҙ.

— Юҡ, мин дә барам.

— Улайһа, ихтыярың. Шулай ҙа аңла, был урманға саф һауа һуларға барыу түгел. Төрлө хәл булырға мөмкин.

— Юҡ, мин бында ҡала алмайым.

— Урамға сыға тор. Беҙ хәҙер.

Биш минуттан Моратшин, Сәғәҙиев һәм Айгөл ултырған милиция машинаһы, ҡырҡа вираж яһап, бина алдынан сығып китте.

## 72

Һуңғы ваҡиғаның шау-шыу ҡуптарғанын Айвар, әлбиттә, белә ине. Хатта ярҙам һорап килгән ике милиционерға ла уның ауырыуҙы ни рәүешле Өфөгә килтереүенең билдәле булыуын ҡайһылыр бер мәл ап-асыҡ аңланы. Улар ах та ух килеп лаф ороп йөрөмәйәсәктәр — быныһы асыҡ. Ләкин... Ләкин... Күңеленең ҡайһылыр бер өлөшөндә шом һымаҡ нәмә үҫә бара. Икенсенән... Кеше ғүмер буйы бейеклеккә, күккә ынтылған. Осоштоң тәндәрҙе сымырҙатыр ләззәтен татыны ул. Элекке урынданурынға күҙ йомған арала күсеү бик ябай нәмә булған икән. Һис ниндәй ләззәт тойғоһо ла, тәьҫир ҙә ҡалдырмай. Ауырыу кешене ҡотҡарырға тырышыу теләге ирекһеҙҙән уны шундай хистәр даръяһына батырға мәжбүр итте. Баш тарта алырмы икән һуң Айвар тағы ла уны кисереүҙән? Юҡ, көсө етмәҫ кеүек. Осош өсөн яратылғандар, ысынлап та, кеҫәртке шикелле ерҙә генә шыуышып йөрөй алмай.

Бына бөгөн дә зәп-зәңгәр күк тыйып торғоһоҙ дәрт менән үҙенә саҡыра. Үҙен күпме генә еңергә тырышмаһын, был тартыу көсөнә ҡаршы тора алмаясағын Айвар ап-асыҡ аңланы.

...Ниндәй сихри бейеклек! Болоттар ҙа әллә ҡасан түбәндә, ҡоштар осор киңлектә ҡалды. Ә ул күтәрелә лә күтәрелә. Иге-сиге бармы икән был күк даръяһының? Айвар тирә-яғына күҙ йүгертте — ҡаршыһында меңәр саҡрымлап осһоҙ-ҡырыйһыҙ далалар, тауҙар, ҡала-ауылдар йәйрәп киткәйне. Һәр ҡайһыһында тормош бара, кешеләр ҙә көндәлек мәшәҡәттәренән, ығы-зығыларынан бушай алмай, донъя йөгөн һөйрәйҙәрҙер. Бәлки был яҡтарҙа ваҡыт-ваҡыт күренгеләп ҡалыусы сәйер әҙәм хаҡында гәп тә һаталарҙыр. Ошо килеш көпә-көндөҙ берәй ҡала уртаһына килеп төшһә, нишләрҙәр икән? Моғайын, ҡурҡырҙар. Аңлайышһыҙ нәмәләрҙән әҙәм заты ситтәрәк торорға тырышыусан. Бәлки, юҡ итергә маташырҙар ине. Был уйҙарынан Айварға күңелһеҙ булып китте. Уларҙан ҡотолорға тырышҡандай, тағы бер елкенеп күтәрелә бирҙе лә аҫҡа табан төшә башланы. Болоттар өйөлөшкән ергә етеп өлгөрмәне, уң яғынан сәйер геүелдәү ишетелде. «Самолет!» Тәүҙә, ғәҙәтенсә, юҡҡа

сығырға уҡталғайны, башына кинәт дыуамал уй килде. «Ә ниңә? Ғүмерҙәре буйы иҫләрлек әкиәт булһын әле!» Күҙ асып йомғансы, болоттар араһына барып керҙе. Күнереп, ҡарайыбыраҡ торған ҡар болотона яҡынайҙы. Ситтән ҡарағанда, йәйрәп ятҡан ап-аҡ постелдә ҡырын ятыусыны бик тә хәтерләтә ине ул.

Геүләү яҡынайҙы. Бына Айвар пилоттарҙың йөҙҙәрен ап-асыҡ күрә. Ҙур транспорт самолетын өйрәнелеп бөткән гәҙәт буйынса вайымһыҙ ғына алып барыусы уртаса йәштәр тирәһендәге ике ир кешенең ғәжәпләнеүен тасуирлау өсөн, һүҙлектәге мөмкин булған төшөнсәләрҙең береһе лә етмәҫ ине. Айварҙың бөтә булмышында — сәйер елкенеү. Ләкин осҡостоң кәйелеп-кәйелеп китеүен, тигеҙлеген һаҡлай алмай йә уңға, йә һулға сайҡала башлауын күреп, үҙенең малайҙарса ҡыланыуына үкенә биреп ҡуйҙы. Күрәһең, һуңғы сиктә осоусылар болот өҫтөндә йәйрәп ултырыусы кеше һынын мираж, галлюцинация итеп ҡабул иткәйне — бер аҙ ҡыйшая бирҙе лә, үҙ күленә ҡабаттан ҡайтып, самолет үтеп китте.

Айварға болот өҫтөндә ултырырға башҡа сәбәп ҡалманы. Ул урынынан торҙо, тирә-яғына күҙ ташланы һәм күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә, ҡыйғыр бөркөттәй, аҫҡа табан кәйелде. Ҡышҡы саф һауа танауҙы ҡытыҡлаған кеүек тәьҫир ҡалдыра. Физик тәне үҙе менән булмаһа ла, был хис бик яҡшы таныш уға.

Үҙенең биләмәләрен байҡап бөткәс, күсермә бейек-бейек тауҙар башланған яҡҡа йүнәлде. Ҡыйғыр ҡоштар юҡҡа ғына мәғрур ҡаяларҙы төйәк итмәй икән шул. Ишелеп торған тауҙар даръяһы бары ылаҫын кеүек бойондороҡһоҙ йән эйәләрен генә үҙ тиңе итеп ҡабул итәләр.

Осоп барышлай, зәп-зәңгәр боҙо менән ялтырап ятҡан күл уның иғтибарын үҙенә тартты. Юҡ, матурлығы менән түгел. Һәр бер япраҡ ҡыштырлауын да йәһәт тотоп алыусы аң ниңәлер шомланған һымаҡ ине. Иғтибар менән ҡарай торғас, күҙҙәре күлдең ҡап уртаһында яһалған түңәрәккә төштө. Янында әйбер-һәйбер туҙышып ине, сыйылдап бер эт йүгереп йөрөй. Мәкенең ситенә барып сыйнай ҙа тағы еҫкәнеп йүгергеләргә керешә. Айвар түбәнәйә бирҙе. Күлдә кеше-фәлән күренмәй, байтаҡ алыҫта бишекле мотоцикл тора. «Тимәк, ҡаланан килеүсе...» тип кенә уйлап өлгөрҙө, шул уҡ минутта мәке янында хасил булды. Эт өрөргә керешкәйне, ниңәлер, ҡапыл туҡтаны, ҡабат һыу ялтырап ятҡан тишеккә ынтылды. Айвар барыһын да аңланы. Ике... өс тыным, һәм ул һыу эсенә ташланып юҡ булды.

## 73

Стастың һуңғы маркалы машинаһына ҡышҡы юлды үтеү әллә ни ауырға төшмәне. Ике сәғәттәй ваҡыттан улар таш юлдан боролоп, ҡарауылсы йортона табан елдерәләр ине. Берене бер һүҙ ҡатмай. Стастың һөйләшәһе килмәй, тегеләре иһә шефтан уҙып тел сарларға ҡабаланмайҙар. Атаман уйға батҡайны, етмәһә, күңелендә әллә ниндәй шом. Урмансының үткәндә уның фатирына килеүе нисек тамамланыуын бик яҡшы иҫләй Стас. Дөрөҫөрәге, иҫенә төшөрөргә маташа, ләкин бер нәмә барып сыҡмай. Ысынлап та, башҡа һыймаҫлыҡ нәмә — үҙе генә булһа, бәлки, яңылышамдыр, тиер ине. Өсәүләп һөжүм яһарға йыйынған ерҙән һуҙылып ятып йоҡлап китеү... Тфү! Шулай ҙа һағыраҡ булырға кәрәк ул әҙәм менән. Йортонда була ҡалһа, үксәне күтәреү хәйерлерәк. Икенсе ваҡытҡа ҡалдырылыр, ни тиһәң дә, баш икәү түгел.

Алда урмансы йорто күренде. Стас Мәхмүткә туҡтарға бойорҙо. Тегеһе һораулы ҡарашын башлыҡтарына төбәгән дә артабан ни булырын көтә. Тураһын әйткәндә, Стас уныһын үҙе лә белмәй. Был өсәү уға ышана, уның күңелен шом ҡорто кимереүен, әлбиттә, белмәйҙәр. Һиҙенһәләр, борола һалып кирегә тайыуҙы иң яҡшы ысул тип табырҙар ине. Әллә ҡыҙғаныусҡа, әллә бәхеткә, Стас сигенә белмәй шул.

— Бар! — Шефтың тауышына барыһы ла бер юлы әйләнде. Хәмит үҙенә төбәлгән уҫал ҡараштан аҙарынды.

— Мин? Ни өсөн мин?

— Һин булғанға! Ҡарап кил, йортонда микән ул бешмәгән убырлығыҙ.

Хәмит әкрен генә машина ишеген асты, һуйырға алып барылған үгеҙ етеҙлеге менән өҫтөрәлеп сыҡты. Йортҡа тиклемге ара әллә ни алыҫ түгел, боролошто ғына үтәһе һәм...

Ана тора ул йорт. Ҡәһәр һуҡҡан һыҙмалар арҡаһында уға килеп юлыҡҡан көндө ер йотһон. Шул мәлдән бирле мандып булмай, йә эш ырамай, йә табыш юҡ. Яңғыҙ йортто донъялағы мөмкин булған бөтә урмансылары менән бергә ҡушып әрләп, ағас арттарына ышыҡлана-ышыҡлана яҡынайҙы ул. Үткәндә бер балағын өҙөп алған этте күреп, йәнә тертләне. Уныһы, ни сәбәптәндер, ят кешене күрһә лә, сәбәләнеп китмәне, уҫал ҡарап болдор өҫтөндә ята бирҙе. Хәмит йортҡа күҙ ташланы — тәҙрә ҡапҡастары ябыҡ. Әллә алыҫҡа юлланғанмы ул әҙәм? Бигерәк тә һәйбәт, ул сихырсынан йырағыраҡ йөрөү хә-

ierле. Ә бына эт менән эштең мәшәҡәтһеҙ генә бөтәүе икеле. Үрелеберәк күҙ һалды — бөгөн иртәнән бирле ҡар яуа, ә йорттоң тирә-яғында кеше эҙҙәре күренмәй. Гимәк... Киткән! Бында юҡ!

Уның эсенә йылы инеп китте. Стастың үсе ҡанмай тороп, Хәмиткә ҡаныгыуынан туҡтамаясаҡ. Шуға күрә иң хәйерлеһе — исем өсөн йортон үртәп булһа ла, атаман ойтмешләй, нөктә ҡуйырға. Йәғни һуңғы һүҙ — Стастыҡы!

Хәмиттең йәшеренмәй ирәбе атлап килеүенән машиналағылар йәнләнә төштө. Ауыҙына һыу уртлағандай йомерәйеп ултырған башлыҡ та:

— Эшкә керешәбеҙме, егеттәр? — тип һалдырҙы.

Килеп етер-етмәҫтән Хәмит, ҙур эш башҡарған кеүеләй, юлында осраған ҡар төйөндәрен типкеләп алды. Иәнәһе, күрҙегеҙме минең кемлекте.

— Йә!

— Ул юҡ, шеф! Эте генә ята, тәҙрә ҡапҡастары ябыҡ. Яңы ғына йөрөгән эҙҙәр ҙә күренмәй.

— Шәп. Ҡуҙғал, Мәхмүт.

Боролошто уҙып, йортҡа яҡынайҙылар. Шулай ҙа һаҡлыҡ йөҙөнән аралыҡ һаҡлап туҡтарға ҡушты Стас. Әллә ниндәй этлек уйлап табыр ул әҙәм, ышанып ҡара. Шундайыраҡ уй йүгереп үтте Ҡара күҙлектең ғәзиз башынан. Үҙе, әйтерһең дә, изгелек ҡылырға ҡабаланып, кышты ҡыш тимәй, ялан тәпәй йүгереп килеп еткән.

Машинанан һикерешеп төшкәйнеләр, болдорҙа ятҡан эт ажарланып урынынан ырғып торҙо.

— Сергей, ебәр шуға берәй ағасты алып. Беҙҙең менән нисегерәк һөйләшергә кәрәклекте белһен.

Тегеһе ҡулына эләккән ботаҡ киҫәге менән һелтәнгән булды. Эт уның һайын ярһый. Ахыры сиктә бисара Сергей, ярҙам көтөп, ҡалған өсәүгә ҡараны. Дөрөҫөрәге, икәүгә. Сөнки Хәмит атлы уҙаман әллә ҡасан машина артына боҫҡайны. Салбарын сисһә сисеп бирер, ләкин ул аждаһаға ҡаршы бараһы эше юҡ.

— Йә, шул сәкәләүек алдында ла иҫегеҙ китеп тормаһа. Бөтөнләй аҙғанһығыҙ икән, әрәмтамаҡтар!

Шефтың туҙына башлауын күреп, Мәхмүт ярҙамға ашыҡты. Ләкин эт туҡтарға уйламай ҙа. Ҡоторған януар көүек, әле тегеһенә, әле быныһына ташлана.

— Китегеҙ, эшкинмәгәндәр. Һәр ваҡыттағы шикелле, эште үҙемә тамамларға тура килә.— Стас кеҫәһенән пистолет тартып сығарҙы. Алға һуҙып, әкрен генә эткә яҡыная. Уныһы зирәк булып сыҡты, күрәһең, быңдай ҡорал таныш ине. Стас атырға ғына йыйынһа, ситкә тайшана.



Арты менән сигенеп, йорт болдорона барып терәлде. Ир уны тайшанып ҡасыр тип уйлағайны, юҡ, серәнеп ҡарап ултыра. Хатта эттең был ҡыланышынан үҙе үк артҡа сигенә биреп ҡуйҙы. Бер минут үтте, ике минут... Пружина һымаҡ ҡатып ҡалған эт ҡорал тотоп торған иргә ташланды. Атыу тауышы яңғыраны...

Ҡыҙыл таптар ҡарға тамсы-тамсы булып һибелгән. Аҡморондоң күҙҙәренән йәш бөртөктәре тәгәрәп төштө. «Кисер, мин инде көсһөҙ һине һаҡларға» тигән кеүек ине йорт тәҙрәһенә төбәлгән ҡараштар. Маңлайының тап уртаһына пуля эләккән Аҡморон әкрен генә күҙҙәрен йомдо. Ул инде башҡаса асмаясаҡ уларҙы...

Стастың атыуынан бигерәк эттең ҡыланышына хайран ҡалған Мәхмүт менән Сергей улар янына әкрен генә яҡынайҙы. Хатта Хәмит тә боҫоп торған урынынан сыҡты.

— Шеф, ә, шеф, ниндәй нәҫел эт һуң был? Ну, өйрәтелгән, исмаһам! Шундай ярҙамсың булғанда...

Мәхмүттең һөйләнеүенә башлыҡ аҡырайып ҡарап ҡуйҙы. Әйтерһең дә, эш өсөн түгел, эттәр күргәҙмәһенә килгәндәр. Артабан ни ҡылыу хаҡында уйлау түгел, тел сарлауҙарын беләләр.

— Йәгеҙ, тиҙерәк! Ҡайтып өлгөрмәҫ борон, ут төртөргә лә тайырға. Ҡалғаны беҙҙең эш түгел.

— Шеф! Ҡара әле!

Сергейҙың һөрәнләүенә барыһы ла әйләнеп ҡараны. Уныһы тәҙрә ҡапҡасын ҡайырған да, иҫе китеп, эскә төбәлгән. Йүгерешеп янына барҙылар. Йорт эсендә, караватта урман ҡараусы ята ине.

## 74

Мәкегә йығылып төшкән балыҡсының тәнен һалҡын һыуҙан көҙән йыйыра башлағайны. Апаруҡ ҡалын кейенгән мыҡты кәүҙәле ирҙең аяҡ-ҡулдары тартышыуҙан тирә-яҡҡа тулҡын-тулҡын һыу тарала. Күктән килеп төшөү менән, туҡталып та тормай, мәке эсенә инеп киткән күсермә уның ҡайһы тирәләрәк булыуын тап шул дерелдәүгә ҡарап билдәләне. Былай булғас, хәл, ысынлап та, мөшкөл. Ир кеше тонсоға башлағайны инде. Ауыҙмороно тирәһендә тәүҙәрәк күренгеләгән һауа ҡыуыҡтары бөтөнләй тиерлек юҡҡа сыҡты. Үҙ яҙмышына буйһоноп ергә ауған имән шикелле, ул әкрен генә күл төбөнә китә башланы. Ике-өс минут... һәм ерҙә тағы бер ғүмер өҙөләсәк. Айвар, уҡтай атылып, балыҡсы янында

пәйҙә булды, ҡулдары менән матҡып тотоп боҙ уйылған ергә илтергә уҡталғайны...

...Кем саҡыра уны? Йәндәре өҙөлөп-өҙөлөп китә... Секунд ваҡыт та ҡала алмай Айвар бында. Аҙ ғына һуңлаһа, был сағыу яҡтылыҡ дөм-ҡараңғы төнгә әүереләсәк. Балыҡсы уның ҡулдарынан ысҡынып, йәнә төпкә китә башланы... Күсермә, мәке уйымынан һурылып сығып, күктә аҫылып ҡалғайны. Ә бурыс? Алла донъяға уны ни өсөн яратҡан? Ғәп-ғәҙәти әҙәмдәр янынан иң кәрәкле мәлдә генә ҡасыу өсөнмө? Хәл итеlә алмаҫтай уйҙарҙан күсермә үҙенең икегә, йөҙгә, меңгә бүлгеләнеүен тойҙо. Юҡ, китә алмай ул бынан. Бер һәләкәттән ҡасыу барыбер икенсе һәләкәткә килтерәсәк. Өлгөрөргә, бары өлгөрөргә! Бүлгеләнгән өйкөм-өйкөм томандан һыҙаттары асыҡ күренеп торған әҙәм һыны мәке өҫтөндәге һауала йәнә хасил булды. Секунд ҡына ваҡыт аҫылынып торҙо һәм... Алыҫ урмандағы өйө йүнәлешенә атылманы ул, ә туптура боҙ уйымына төшөп китте. Бер аҙҙан ҡулдарына үҙенән ике тапҡыр мыҡтыраҡ ирҙе ҡаҙ ҡауырыйылай ғына итеп күтәреп осоп килеп сыҡты.

...Йорт эсендәге карауатта ятҡан кәүҙә үҙенең рухын өҙөлөп-өҙөлөп кире саҡыра ине.

## 75

Милиция машинаһы урман юлынан боролған мәлдә генә, атыу тауышы яңғыраны. Дөрөҫөрәге, алыҫ-алыҫтарға таралған был тауыш шаңдау булып улар янына ла килеп еткәйне.

— Ой! Уға аттылар! — Айгөл, ҡысҡырып илап ебәрмәҫ өсөн, битен ике ҡулы менән ҡапланы. Иңбаштарының дерелдәүенән генә хәҙер уның ни кисереүен белергә мөмкин.

— Тыныслан, туғаным. Бәлки, һуң түгелдер әле.— Биктимер газ өҫтәй төштө. Былай ҙа мөмкин булғандың сигенә сығып килеүсе апаруҡ таушалған машина ҡышҡы юлдан үкерә-үкерә алға ынтыла. Берәһе бер һүҙ өндәшмәй. Хәҙерге мәлдә ул артыҡ та кеүек. Барыһы ла бер генә төшөнсәгә барып төртөлә — өлгөрөрҙәрме, юҡмы?

— Ана, йорто күренде. — Самат йүгереп төшөп машинаны артынан этерҙәй булып килә. Сөнки тау итәгендә күренеп кенә тора, ә юл... Ҡышҡы юл... Эх...

— Машиналарын күрәһеңме, сержант? — Биктимер боролоп ҡарамай ғына өндәште. Уның бар иғтибары алда һуҙылып ятан тәгәрмәс эҙҙәренә тупланғайны.— Ҡоралыңды әҙерлә, кәрәк булыуы бар.— Үҙе уң ҡулы менән

бил ҡайышын һәрмәп ҡуйҙы.— Ә һин, туғаным, машинанан сыҡмай тор. Атыш булыуы мөмкин.

— Биктимер ағай, мин бында ҡала алмайым. Аңлайһығыҙмы, Айвар унда, йорт эсендә!

— Унда булһа, шул әҙәмдәргә генә бирешеп торорона ышанмайым.

— Һуң... — Айгөл әйтеп бөтөрмәне. Сөнки улар йорттан бер ни тиклем ара ҡалдырып туҡтаған «Нива» янына килеп еткәйнеләр. Стастың машинаһы! Ә арыраҡ... Арыраҡ ҡанға туҙып Аҡморон ята. Баш осонда ҡып-ҡыҙыл күләүек...

— Аҡморон... — Машина туҡтар-туҡтамаç һикереп төшкән Айгөл уның янына теҙләнде. Унан, кинәт иçенә килеп төшкәндәй, йортҡа тороп йүгерҙе.

— Туҡтағыҙ! Туҡтағыҙ, зинһар! Унда инергә ярамай! Һәләк итәһегеҙ бит...

Ҡыҙҙың тауышы, ҡышҡы урман һауаһында сыңлап, алыç-алыçтарға таралды... Йөҙйәшәр имәндәрҙе тертләтеп, сеңләү ишетелгәндәй булды. Ләкин йорт ишеге асыҡ ине инде. Асыҡ ине...

## 76

Алыç тауҙар ҡуйынынан һурылып сығып, күсермә үҙ төбәгенә ынтылды. Һәм... Йәндәре йәнә меңгә бүлгеләнә. Ҡулдары, аяҡтары үрелеп буй етмәçлек ергә тарала кеүек. Тағы бер урынға тупланалар һәм... Ҡышҡы аяҙ көндә күк йөҙөндә ап-асыҡ булған кеше һынының һыҙаттары әкренләп кенә юҡҡа сыға башланы. Ер йөҙөндә яҡтылыҡ булған мәлдә ул инде бер ҡасан да әҙәм күҙенә күренмәйәсәк. Күренә алмаясаҡ...

...Ә был ваҡытта урман төпкөлөндәге йортта тиҙ генә аңлап булмаçлыҡ нәмә ҡылына ине. Ишекте асып ингән дүрт ир йоҡлап ятыусы Айварҙы уятырға аҙапланды. Күҙҙәрен асмағас, төрлөсә ҡыландырып ҡаранылар. Шунда ғына...

— Ә ул үлмәгәнме икән, шеф? Атыу тауышына ла уянмағас...

— Белмәйем.— Стастың йөҙөндәге тәкәбберлек ғәжәпләнеү, унан шик менән алышынды.— Ҡаҙалып китһен! Ысҡындыҡ бынан! Беҙ эшләйһе эште кемдер өлгөргән. Бәлки, теге донъяға үҙе олаҡҡандыр.

Сығырға ынтылғайнылар, машина тауышы ишетелде.

— Менттар! Артҡы тәҙрәнән! — Бойороуын бойорҙо Стас, ләкин ҡапыл кире уйланы.— Туҡтағыҙ әле! Беҙ уға бер нәмә лә эшләмәнек тә баһа. Ҡасһаҡ, ғәйепте таныу була бит. Урынығыҙҙа ҡалығыҙ!

Ҡатын-ҡыҙ тауышы яңғыраны. Әллә ниндәй үҙәктәргә үтерлек хәсрәт бар ине унда. Аҡсанан башҡаны күрмәгән, бәгерҙәре ташҡа әйләнеп бөткән кеүек тойолған ирҙәр бер-береһенә ҡаршты. Бер аҙҙан ҡыҙ үҙе лә күренде. Башына keймәгән, күҙҙәренән тәгәрәп-тәгәрәп йәш тамсылары аға... Бер кемгә иғтибар итеп тормай, карауатта ятҡан Айвар янына барып теҙләнде.

— Айвар... Айвар! Ҡайҙа һин? Ҡайҙа?

Ләкин ул торманы. Ишекте асып, «Мин бында бит! Илама!» тиер кеүек ине. Ләкин ул өндәшмәне...

...Был мәл иһә ҡасандыр, һәр бер ғәҙәти кеше кеүек үк, һәүетемсә йәшәгән йортона әйләнеп ҡайтҡан күҙгә күренмәҫ Рух үҙенең көсһөҙлөгөнән әрнеп бәргеләнә ине. Өй эсенә керә... һәм ҡабат осоп сыға. Тетрәнгән ҡыҙ янына төшөп, сәстәренән һыйпап йыуатыр ине. Мөмкин түгел... Һыйпаһа ла тоймаясаҡ, күҙҙәренә төбәлһә лә күрмәйәсәк. Был донъялағы әҙәмдәр өсөн ул юҡ инде. Мәңгегә юҡҡа сыҡҡан...

...Карауатта һөйкөмлө йәп-йәш ир ята. Ул инде башҡа бер ҡасан да тормаясаҡ. Йәшәйеш сүп-сарынан өҫтөн була алмаған фани донъя кешеләре үҙҙәренең тән менән Рух араһындағы күперҙе емереп үткәндәрен белмәй. Белмәйҙәр...

## ӨСӨНСӨ КИҪӘК

### 1

Йәмле май айы. Нефть институтының алдында йәштәр ҡайнаша. Әллә көндөң матур тороуы, әллә яҡынайыусы йәйҙең ымһындырғыс итеп үҙенә саҡырыуы йөҙҙәренә йылмайыу булып яғылған. Ындай ваҡытта донъяла йәмһеҙ хәлдәрҙең, күңел биҙҙергес ваҡиғаларҙың булыуына ышанаһы ла килмәй.

Бына йорт эсенән йәш кенә ҡыҙ килеп сыҡты. Ҡайҙа барырға тейешлеген онотҡан шикелле, бер мәлгә туҡталып ҡалды. Юҡтан ҡыҙыҡ табып көлөүсе көр күңелле егеттәр һәм ҡыҙҙар араһында урмандан яңылыш килеп эләккән ҡоралай балаһылай күренә ине ул. Баҫҡыстан төшә башланы. Бейек үксәле ҡара туфлиҙары тыҡ-тыҡ итеп ташҡа бәрелә.

— Айгөл! Туҡта әле! — Артынан йүгереп килеп сыҡҡан егет ҡыҙҙың ҡаршыһына баҫты.— Әйтергә онотҡанмын, әле генә иҫкә төштө. Теге фотоларҙы эшләгәйнем, бына.

— Рәхмәт, Надим. Улай тиҙ эшләрһең тип көтмәгәйнем. Ярар, һау бул.

— Айгөл! Бәлки бөгөн кис спектаклгә барырбыҙ? Миндә ике билет бар. Кис тә бик матур булмаҡсы...— Кире ҡағып ҡуйыуҙан ҡурҡҡандай, Надим ашыға-ҡабалана һөйләй.

Айгөлдөң йөҙөндә ҡыйынһыныу күренде — теләге юҡ, ерле юҡҡа егетте рәнйетәһе лә килмәй.

— Үпкәләмә инде, йәме. Бара алмайым. Ә фотоһүрәттәр өсөн ҙур рәхмәт.— Боролдо ла китеп барҙы. Ҡара ерлеккә сағыу ҡыҙыл розалар төшкән шифон күлдәге, тротуарҙа ҡайнашҡан халыҡ араһында ҡырҡа айырылып, байтаҡ күренеп торҙо әле. Уныһы ла күҙҙән юғалғас, төшөнкө ҡиәфәттә баҫып ҡалған егеткә бында тороуҙан мәғәнә ҡалманы — яй ғына боролдо ла үҙ юлы менән китте.

Бына бер йыл була уларҙың бергә уҡыуҙарына. Надим нефть институтына армиянан һуң килгәйне. Уға тиклем дә бер йыл эшләргә өлгөргән егет күбеһе мәктәп эскәмйәһенән генә тороп бында килеүселәргә сәйер тойго менән — йәлләп, шул уҡ ваҡытта көнләшеү кеүегерәк хис менән ҡараны. Мәктәп, тыуған йорт — барыһы ла ал да гөл, сәскәле томандан ғына торған кеүек. Ҙур тормошҡа аяҡ баҫыу менән мотлаҡ ҡолас йәйеп ҡаршы аласаҡтар. Ләкин ике аҙым атлау менән, был рәшә һыпырылып төшә. Шуға ла йәлләй Надим был хыял донъяһы балаларын. Икенсенән... көнләшә. Егерме йәшлек еикте уҙыусылар ерле юҡтан ҡыҙыҡ табып көлә алмайҙар. Ә был?.. Ҡыҙғаныс... Ысынлап та...

Надим Айгөлгә тәүге көндәрҙән үк иғтибар итте. Башҡаларҙан ҡырҡа айырылып, күҙгә лә бәрелеп тормай кеүек. Дөрөҫ, сибәр, әллә ниндәй һөйкөмлө һөйәге бар. Шулай ҙа... Ниңә көлгәндә лә күҙҙәре моңһоу ҡала икән был ҡыҙҙың? Үҙе ихлас йылмая, ҡараштары төпкөлөндә сумырып-сумырып алырлыҡ һағыш ята кеүек. Бер нисә тапҡыр киноға, тансаға саҡырғыланы. Ҡайсаҡ риза була, йәки йомшаҡ ҡына итеп кире ҡаға, ләкин мөнәсәбәттәре дуҫлыҡтан ары китмәне. Надим ҡыҙҙың ҡылығын тәкәбберлеккә һанап, ҡул һелтәргә уйлағайны, барып сыҡманы — әллә ниндәй көс тарта ине уны барыбер.

Бына әле лә кире ҡаҡты. Нишләргә? Билеттарҙы уның өсөн генә алғайны ла баһа. Кеҫәһенән сығарып, Надим уларға бер аҙ ҡарап торҙо. Күҙ алдына театр фойеһы, байрамса кейенгән халыҡтың йылмайыулы йөҙҙәре килде, музыка тауышы ишетелгәндәй булды. Былар барыһы ла мөмкин ине. Ике билетты әйләндергеләп,

күпмелер ваҡыт торҙо. Бына бармаҡтары уларҙы уртаға йырта. Йәнә, йәнә... Ваҡ-ваҡ киҫәктәргә бүлгеләнгән билет киҫәктәре бер аҙҙан урнаға осто. Надим боролдо ла, уларға әйләнеп тә ҡарамай, ятаҡхана яғына йүнәлде.

## 2

Әсәһе эштән ҡайтмағайны әле. Әллә яңғыҙы ғына булғанға, әллә инде ошо аяҙ май айында күңелен өтөп барған юҡһыныуҙан тамағына аш бармай, Айгөлдөң өҫтәл артына ултыраһы килмәне. Йоҡа стаканға һут ҡойоп алды ла яратҡан урынына — ҙур роза гөлө янындағы креслоға барып ултырҙы. Күңелендә аңлатып биргеһеҙ бушлыҡ. Көндән-көн ҡабатланып торған бер төрлө тормоштан йәне биҙгән — һис нәмә хаҡында уйлайһы килмәй. Ә бит уға ун һигеҙ йәш тә тулмаған. Ошо сыуаҡ көнгә, урамда үҫкән сәскәләргә, күктә йылмайған ҡояшҡа — барыһына ла һөйөнөргә тейеш тә бит. Барып сыҡмай...

Күҙҙәре уң яғында торған журнал өҫтәленә төштө. Бәй, Надим биргән фотолар. Ҡараманы ла, шикелле. Май байрамында группалары менән Ағиҙел ярына төшкәйнеләр, шундағы һүрәттәрҙер, моғайын. Ҡыҙ стаканын ҡуйҙы, тубыҡтарын ҡосаҡлап ултырған еренән үрелеп уларҙы ҡулына алды. Фотолар байтаҡ ине. Әллә тик уны ғына төшөрөп йөрөгән был Надим — һүрәт һайын Айгөл. Бына күмәкләп төшкәндәр, нәмәнәндер мәҙәк табып көләләр. Эльза менән ул ни хаҡындалыр серләшәләр. Ә, эйе, Эльза үҙҙәренең яңы күршеләре хаҡында һөйләгәйне шикелле, нәмәләренә иҫе киткәндер.

Айгөлдөң күҙҙәре битараф ҡына һүрәттән һүрәткә күсте. Барыһы ла булды, булған һәм... һис ҡыҙығы ҡалмаған. Ҡарап бөтмәй ырғытырға уйлағайны, ҡарашы иң өҫтә ятҡанына төштө. Айгөл Ағиҙелгә ҡарап тора, ә янына кемдер баҫҡан. Ҡыҙ уны, гүйә, күрмәй ҙә. Кем икән һуң ул? Группаларында ундай кеше юҡ шикелле лә. Ҡыҙ серәнеп һүрәткә йәнә төбәлде. Унан... башы әйләнгәндәй тойолдо, күҙҙәрен устары менән баҫты. Юҡ! Булмаҫ! Булыуы мөмкин түгел!

Бер аҙ тынысланғас, әлеге һүрәткә ҡарамаҫҡа тырышып, байтаҡ ултырҙы. Түҙмәне, йәнә ҡулына алды. Был мәлде бик асыҡ хәтерләй бит ул. Шау-шыуҙан биҙеп, бер яҡ ситкәрәк киткәйне Айгөл. Яңғыҙы ғына булаһы килгәнгә. Һүрәткә төшкән сәйер кеше ҡыҙға ҡараған, тоноғораҡ сыҡһа ла, йөҙөнән танырға була. Был кеше... был... был... Эйе, Айвар ине... Айвар! Айгөлдөң күҙ ал-

дына егеттең карауатта иçһеҙ-тынһыҙ ятҡан кәүҙәһе, ерләү күренеше, ул яратҡан һәм уны ихтирам иткән кешеләрҙең ҡайғылы йөҙҙәре, аҡ ҡар янындағы ҡап-ҡара ҡәбер өйөмө килде. Һәм ул... бында! Ҡыҙ янында! Тере-тере булып, Айгөлгә ҡарап тора. Ләкин ни сәбәпле күрмәгән һуң ул уны? Былар барыһы ла башҡа һыйыр-лыҡ түгел ине. Мейеһен сыйып үткән был уйҙарҙан ҡыҙҙың күҙ алдары ҡараңғыланды, быуындары бушаны, һәм ул яй ғына иҙәнгә шыуып төштө...

## 3

Аяҡтарына итек, өçтөнә ҡаты материалдан тегелгән куртка кейгән оло йәштәге урмансы һуҡмаҡ буйлап атлай. Яурынына аçҡан ҡушкөбәк, хәрәкәт иткән ыңғайға бәүелеп, шунда үçеп ултырған ағас-ҡыуаҡтарға бәрелгеләй. Ҡарт арығандай күренә, әленән-әле туҡтап, тирә-яғын күҙәтә, йәиһә урманды ҡыҙырып сабыусы этенә өндәшә.

— Бим! Бим!

Ҡушаматы сәйерерәк тойолһа ла, һөйкөмлө генә эт әллә ҡайһы арала ҡыуаҡтар араһынан атылып килеп сыҡты.

— Ана йорт та күренде. Етер инде сабауылларға,— тип һөйләнде Хисам ҡарт. Эскәмйәгә килеп ултырғас, йәнә эткә өндәште.— Әҙерәк ял итеп алайыҡ. Арытты, төш тә еткән икән. Хәҙер, хәҙер... — Бер аҙҙан тороп, һөйләнә-һөйләнә ҡушкөбәген ишек яңағындағы сөйгә элде, шунда торған таçтамалды алып, ҡулйыуғысҡа үрелгәйне генә...

Ни нәмәһенә ҡотора был Бим? Ерле юҡҡа сәбәләнмәй торғайны ла баһа. Әллә берәй йыртҡыс яҡынлаймы? Хисам ҡарт мылтығын йәнә ҡулына алды, таçтамалын шунда ырғытты ла ҡабаланып йорттоң икенсе яғына килеп сыҡты һәм аптырап ҡалды. Һис кем юҡ. Бим иһә ҡайын төбөндәге элекке хужанан ҡалған өçтәл тирәһен әйләнеп йөрөп лауылдап өрә. Уның шул тиклем ярһыуынан өçтәл өçтөнә ҡуян балаһы менеп ултырғандыр, тип уйларға мөмкин. Нисек ҡапыл ярһып китһә, шулай уҡ кинәт кенә эт өрөүенән туҡтаны. Улай ғына ла түгел, һис көтмәгәндә саҡ ҡына арыраҡ барҙы ла башын баçып ятты ла ҡуйҙы. Ҡарт ғәжәпкә ҡалды. Эргәһенә килеп янына теҙләнде.

— Бим! Бим, ни булды һинең менән? Әллә сырхап киттеңме?

Лəкин эт торорға уйламай ҙа ине. Бөтə кəүҙəhе менəн ҡалтырана, күҙҙəренəн сөбөрлəп-сөбөрлəп йəш аға. Хисам ҡарт уны күтəреп торғоҙорға маташты, лəкин тегеhе ыжламаны ла.

Урмансы бер ни тиклем Бим тирəhендə аҙапланды, бөтə булған тырышлыҡтарының саҡ ҡына hөҙөмтəhен күрмəгəс, турайып баҫты. Ул ни эшлəргə лə белмəй ине. Аптырабыраҡ бер аҙ торғас, өҫтəл янындағы эскəмйəгə барып ултырҙы. Бим уның хужалығында күптəн түгел, ни бары ай самаhы ваҡыт үткəндер. Лəкин ошо арала икенсе тапҡыр шулай ҡыланыуы. Тəүгеhендə Хисам ҡарт осраҡлылыҡҡа hылтағайны, əле иhə уйға ҡалды. Ветеринарға күрhəтеп ҡарарғамы əллə юғиhə? Ерле юҡҡа үҙен былай тотмайҙыр бит. Ауырыуы көсəйеп китhə, урман төпкөлөндə этhеҙ ауырғараҡ төшəсəк. Йылға яҡын ваҡыт былай ҙа яңғыҙы ғына йəшəне. Элекке хужанан ҡалған йөнтəҫ hоро бесəйҙе иҫəпкə алмағанда... Бəй, Мыяубикə иҫенə төшкəс, ҡарт урынынан ҡалҡына биреп ҡуйҙы. Ул да ҡайhы саҡ үҙен тап Бим кеүек тота ла баhа! Дөрөҫ, ҡурҡҡаны hиҙелмəй, лəкин ерле юҡҡа мыяулап, күҙгə күренмəгəн ниндəйҙер бағанаға hырпаланған шикелле иҙəн буйлап əйлəнергə керешə. Өҙлөкhөҙ мырылдай, кемдеңдер иркəлəүен көткəндəй, арҡаhына ятып тəгəрəп китə. Сəйер, бик сəйер былар барыhы ла...

Баш етмəҫлек был уйҙарының осона сыға алмай, ҡарт эскəмйəлə байтаҡ ултырҙы. Ни ҙə булhа уйлап табырына өмөтө өҙөлгəс, əкрен генə тороп, йортҡа табан атланы. Ҡушкөбəген ҡабат урынына элде, шунда hуҙылып ятҡан таҫтамалын ҡулына алды. Эт hаман да ерҙə ята ине əле. Бергилке уға ҡарап торғас, Хисам йортҡа инеп китте.

## 4

— Надим!

Үҙенə өндəшкəн тауышҡа боролған егет тəҙрə яңағына hөйəлгəн Айгөлдө күрҙе.

— Кил əле бында! Бер генə минутҡа!

— Ни өсөн шулай аҙ? Теүəл сəғəт ваҡытымды йəллəмəй, ошо иҙəнгə hалып тапай алам! — Йорлоҡ күрhəтеп аҙапланған егеттең сəсəнлеге, ҡыҙҙың йөҙөнə төбəлеп ҡарағас, кəмей төштө.— Ни булды, Айгөл? — тип бөтөрөп ҡуйҙы ул ялҡынлы башланған телмəрен.

— Бер ни ҙә булманы. Танының мы был кешене? Кем ул?

Надим ҡыҙҙың ҡулындағы фотоһүрәтте алды.

— Бәй, мин эшләгән түгелме һуң?

— Эйе.

— Ә уның ни нәмәһенә ғәжәпләнәһең?

— Ҡара әле бында.— Айгөл теге сәйер һүрәткә төртөп тигәндәй күрһәтте.— Был кешене танының мы?

Егет күҙҙәрен һүрәткә төбәне. Ҡараштарындағы шаянлыҡ һүнде, уны уйсанлыҡ алыштырҙы, бер аҙҙан аптырау ғәләмәте хасил булды.

— Бәй! Кем һуң был? Һинең бит яңғыҙыңды ғына төшөргәйнем мин. Юрый, иҫтәлек өсөн.— Ни әйтергә белә алмай, бергилке баҫҡан урынында тапанып торҙо.— Һы...— Һүрәткә төбәлеберәк ҡарағас, йәнә ҡабатланы.— Һы... Фотоҡағыҙҙарҙы һалған эретмә иҫке булғанмы икән ни... Фиксаж яңы ине, уға бәйләнерлек түгел. Ә, бәлки, пленкаға берәй нәмә эләккәндер?

— Һуң, Надим, кеше йөҙө ап-асыҡ күренеп тора ла баһа! Ни әйтерһең?

— Эйе, һин хаҡлы, Айгөл. Эш фотоны эшләүгә бәйле түгел, буғай. Ә, туҡта, ни өсөн баш өлөшө генә? Кәүҙәһе асыҡ сыҡмаған?

— Мин дә ғәжәпләнәм. Шуға һиңә килдем бит инде. Тимәк, һин бер нисек тә аңлата алмайһың?

— Юҡ, Айгөл. Мин һүрәткә төшөргәндә, яр буйында һин яңғыҙ инең. Шуны ғына әйтә алам.— Надим ҡулдарын йәйҙе.— Нисек былай килеп сыҡҡандыр...

— Хәйер... Мин беләм кеүек. Ләкин... Ләкин...— Ҡыҙ әйтеп бөтөрмәне, ҡапыл башы түбән эйелде. Уның керпек остарында емелдәгән йәш бөртөктәрен күреп, Надим аҙарынып ҡалғайны.

— Айгөл! Айгөл, тим! Ни булды?

— Былай ғына. Ғәфү ит мине, юҡ өсөн ваҡытыңды алдым. Үпкәләмә.— Кескәй сумкаһынан ҡулъяулығын алып, керпек тирәләрен һаҡ ҡына һөрттө, аптырабыраҡ торған егеткә ҡыҙара төшкән күҙҙәрен төбәне.— Рәхмәт һиңә...

«Ни өсөн рәхмәт? Туҡта әле...»

Эргәһенән атлап киткән ҡыҙға өндәшергә уйлағайны Надим, ниҙер тотто, әллә Айгөлдөң сәйер ҡарашы, әллә, гөмүмән, бөтә был аңлайышһыҙ һөйләшеү.

Тәҙрә төбөндә күпмелер ваҡыт тапанып торғандан һуң, егет лекция булырға тейешле аудиторияға йүнәлде.

## 5

Саф аяҙ кис. Күктә тулған ай йөҙә. Тап ошондай төндәрҙә генә булғанса, иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар күк йөҙөн сыбарлаған. Тик ниңәлер быңдай мәлдә күңелгә шом нығыраҡ үрмәләй. Әйтерһең дә, ирәбе йөҙгән батмандай тулы айҙан кемдер һикереп төшөр ҙә:

— Кеше! Һин бит был донъяла уйынсыҡ ҡына. Ни ҡылырға теләһәм, шунса ҡөҙрәтем бар минең. Ғашиҡтар ҡарап һоҡлана торған гонаһһыҙ күк есеме генә түгелмен. Бар булған тормошоңдоң аҫтын өҫкә әйләндерә алам,— тиер кеүек.

Урман юлында урта йәштәр тирәһендәге һуңға ҡалған юлаусы күренде. Әйбере һәлмәк кенә — бер ҡулына ҙур сумка тотҡан, икенсеһендә — тоҡҡа уралған ниндәйҙер оҙонса тимерҙәр. Бара-бара бирә лә, туҡтап, хәтһеҙ ял итеп ала. Күрәһең, төнгә булһа ла ҡайтып етеренә өмөтө өҙөлдө — юлдан ҡайырылып, һуҡмаҡҡа табан китте. Унда, алыҫ түгел, урмансы йорто булырға тейеш. Таңға хәтлем ҡунып сығырға тура килер. Хисам ҡарт — таныш кеше, йыш ҡына Аҡсатырға һуғылғылай, моғайын, төн йөҙөндә кире бормаҫ.

Күрәһең, ошо ҡарарға килеүе йөгөн еңеләйтә төштө — йылдам ғына атлап, Мотаһар таныш урынға йүнәлде. Бына ул урмансы йорто. Арманһыҙ саҡта баш терәр урын булыуҙан да ҙурыраҡ һөйөнөс юҡ икән. Ҡулындағы әйберҙәрен аҙ ғына ваҡытҡа ергә терәне һәм, йорттоң инде ҡаршыһында булыуын иҫләпме, йәнә үрелде. Башын күтәргәндә... Юлаусының күҙҙәрендә сағылған ҡырағай ҡурҡыуҙы тасуирлар өсөн мөмкин булмаған һүҙҙәрҙе эҙләргә кәрәк булыр ине. Эйе, тап уның ҡаршыһында, ун-ун биш аҙым ғына алдараҡ, аппаҡ һын баҫып тора. Мотаһарға ҡараған да ҡатҡан, ҡыбырламай үҙе, ләкин ғәҙәти нәмә булыуына, боғаҙға бысаҡ терәп иҫбатлаһалар ҙа, ышанырлыҡ түгел. Күпте күргән ирҙе ҡот осҡос ҡурҡыу биләне. Үҙ-үҙен белештермәй, нисә саҡрымдар ҡәҙерләп күтәреп килгән йөгөн тырым-тыраҡай ырғытып, артҡа тороп йүгерҙе. Тамаҡ төбө менән әсе тауыш сығарып ҡысҡырған кеүек ине, ләкин ҡолаҡтары нилектәндер ишетмәне. Бәлки, үҙенә генә шулай тойолғандыр.

Артабанғы юлды ул нисек үткәнен иҫләмәй. Аңына килһә, йорто ҡаршыһында тора, башы менән ҡапҡа бағанаһына терәлгән, өҫ-башы әҙәм ҡарағыһыҙ бысраҡ. Бер нисә урындан ботаҡҡа эләгеп йыртылған кейемдең аламалары һәлберәй. Иҫенә ҡайтҡандай булғас, үҙенең

тон йөҙөндә шулай тороуына йәнә ҡото алынып, өй эсенә атылды. Ҡапҡаға инеп юғалыр алдынан, артҡа боролоп ҡарауҙан тыйыла алманы. Албаҫты арттан ҡыуа килгән һымаҡ тойғо мейеһен туҡтауһыҙ сүкей. Ләкин ауыл урамы — буп-буш. Был шулай ҙа тынысландыра алманы — йәһәт кенә ишектән инеп юғалды.

...Иртән иһә бөтә ауыл Мотаһар менән булған хәлде белә ине. Тынысыраҡ холоҡло кешеләр булһалар, бәлки, был хәбәр ундай уҡ тиҙлек менән таралмаҫ та ине. Мотаһарҙың бисәһе Хөснә еңгә — теле телгә йоҡмай торған ҡатын. Төнгө мажараларынан алйыған ир йоҡоһонан уянырға ла өлгөрмәне, хәләл ефете бөтә ауылды тултырғайны. Күрше-тирәһенә ҡайҙа һыйыр һауған арала, ҡайҙа көтөү ҡыуғанда, үҙе күргәндәй булып татылданы ғына.

Туҡмалғандай булып һыҙлаған кәүҙәһен саҡ ҡыбырлатып бисара ир тороп ултырғанда, Хөснә еңгә ауылды биш урап сығырға өлгөргәйне. Балалары бер ни белмәй йоҡлай, кисә төнө ул ҡайтҡанда, нисек ятһалар, шул килеш. Йоҡоһо туймаған өҫтөнә баҫлығып үткәргән төн осон бар донъяға асыулы Мотаһар, ауыҙ эсенән мыңғырлай-мыңғырлай, кейемдәрен эҙләп үрелде. Ләкин кисә кейгәндәре әҙәм ҡарағыһыҙ булып иҙәндә ята, ҡулға алырлыҡ та түгел. Баҡсаға сығарып ҡараҫҡыға элһәң, бөтә ауылдың ҡош-ҡорттары ҡасып бөтөрлөк.

— Ни нәмәһенә ырғытманың быларҙы? Ултыраһың инде көйҙөрөп...

— Атаҡ! Атаҡ! — Үҙенең ауыл буйлап ҡылған сәйәхәттәрен ире күҙен асыу менән ләззәтләнеп һөйләргә әҙерләнеп ултырған ҡатын был тиклем дә әҙәпһеҙ мөрәжәғәт итеүгә рәнйей төштө.— Мин һиңә ни эшләгәнмен, бынағайыш... Әле генә ауылсылап килдем.

— Һин! Һин!.. — Асыуынан бурҙаттай ҡыҙарып һикереп торған Мотаһар, ҡулына эләккән тәүге нәмәне бисәһе тарафына алып тондорорға уйлап, ян-яғына ҡаранды. Уның был изге уйын ваҡытында аңғарып ҡалған ҡатын йәһәт кенә ишектән сығып һыҙҙы. Уңарса балалары шау-шыуға уянғайны. Уларҙың аптыраулы йөҙҙәрен күреп, ғаилә башлығы һыуына төштө. Шулай ҙа асыуы баҫылманы, түбәнерәк тембрҙа һөйләнеүен дауам итте.— Әҙәм мәсхәрәһенә ҡалдырған алйот бисә... Етмәһә бөтә ауыл алдында! Әйттем бит инде артыҡ һөйләнеп йөрөмә, тип. Теленә тилсә сыҡҡыр нәмә...

Туҙынды-туҙынды ла, аяғын карауаттан һалындырып, уйланып байтаҡ ултырҙы. Өйҙә дауылдың тынға-

нын ишек артына боҫоп көтөп торған бисәһе шым ғына инеп, ҡашығаяҡ тирәһендә буталырға тотондо.

— Йә!

— Ни булды, атаһы?

Ауыл буйлап телен саҡрым ярым һәлберәтеп сабып йөрөгән гүзәл заттың типик вәкиле, нурлы йөҙөнә йыуаш быҙау ҡиәфәтен бик оҫта сығарып, ҡаршыһында баҫып тора ине.

— Килтер кейемдәрҙе!

— Хәҙер, хәҙер, атаһы...— Өтәләнеп йөрөп, таҙа күлдәк-ыштан килтереп еткерә һалды.— Ашарға ултыр, атаһы, сәйем ҡайнаған...

— Үҙең тығын... — Ҡатлы-ҡатлы нәфис һүҙ байлығын эсенән генә әйтеп бөтөрҙө. Хәлбуки, юрған аҫтарынан күренгеләгән бер нисә ялтыр баштың өйҙә ҡупҡан стакан эсендәге дауылдың сәбәбен белә алмай алйығаны күҙенә салынды.— Шундай итеп кеше араһында көлкөгә ҡалдырғандан һуң, тамаҡҡа аш бара тип уйлай алйот бисә. — Һөйләнә-һөйләнә сығып китте. Үс иткәндәй, тимерлеккә юлы ла тап үҙәк урам аша ята, кәртә артлап барырлыҡ та түгел, исмаһам. Ни эшләргә? Кереп ҡасырлыҡ тишек юҡ. Башын баҫып, Мотаһар ауыл урамы буйлап атланы. Ҡаршы осраған кешеләргә күтәрелеп ҡарамай, сәләмләүгә яуап бирмәй. Уның мажаралары хаҡында хәбәрҙар халыҡ ауыҙ асып һүҙ әйтергә баҙманы хатта.

Тимерлектә иһә хәл башҡасараҡ. Күрмәмешкә һалышып ҡотолоу түгел, өҫтәүенә аңҡауға йәбешкән кеүек тойолған телде ҡыбырлатып һөйләшергә кәрәк. Кескәй келәт янындағы ат дағалай торған ҡоролмаға ултырып, өс-дүрт ир тәмәке көйрәтә ине. «Ни нәмәһенә таң һарыһынан йөрөйҙәрҙер», тип уларҙы тимерсе эстән генә әрләп алды. Улай тиһәң, сәбәбе билдәле инде.

— Һа, Мотаһар! Төнө буйы иблес баҫтырып йөрөгәс, бөгөн эшкә сыҡмаҫһың, тип уйлағайныҡ.— Күрше булыуы ҡороһон, Ниғмәтйән аттыҡы кеүек эре тештәрен ыржайта.

— Мөгөҙө бар инеме, Мотаһар?

— Ҡайһы берәүҙәрҙең юлы уңа ла инде, ағай-эне. Һин тиһәң, ен-пәрейҙе эҙләп йөрөп тә күрә алмайһың. Ха-ха!

— Ха-ха-ха!

Мотаһар ҡыҙып китеүҙән бар көсөн һалып үҙен тыйҙы. Былар бисәһе түгел, екереп кенә еңермен, тимә. Шуға күрә, һис ни булмаған шикелле, уларға яҡынырак килде, етмәһә, хатта йөҙөндә аптырау ғәләмәте әтмәләне.

— Иҫәнлек-һаулыҡмы, ағай-эне? Ниндәй ен-пәрей тураһында һүҙ ҡуйыртаһығыҙ?

Ирҙәр шымып ҡалды. Күрәһең, тимерсенән быныдай яуап көтмәгәйнеләр. Бер-береһенә ҡарашҡас, тамағын ҡырғылап, Ғәйфетдин һүҙ ҡатты.

— Мотаһар ҡорҙаш, төрлө хәбәр йөрөй бит ауылда. Ышанмаһаҡ ышанмаҫ инек, бер туған бисәң һөйләп китте. Үҙ ҡолаҡтарым менән ишеттем.

Был юлы иһә Мотаһар һаһылдап көлдө.

— Бисә-сәсә ни һөйләмәҫ. Шуның өсөн дә аллаһы төгәлә уға оҙон сәс биргән, аҡылын оҙайтырға иһә онотҡан. Аңлашылдымы инде?

— Ысынлап бер ни ҙә булманымы?

— Юҡ, тим бит. Ни булһын тағы. Кисә кис үк ҡайтып еттем. Күҙ ҙә өйләнергә өлгөрмәгәйне.

— Йә инде, юҡ-бар хәбәргә ышанһаң.— Ғәйфетдин урынынан тороп китергә уҡталғас, кинәт иҫенә төшкәндәй, Мотаһарға өндәште.— Әй, онотоп торам да, элекегөн ҡыпһыуырҙы ҡалдырғанмын, ҡана, килтер әле.

— Ә ни... — Мотаһар ыҡ-мыҡ итте, сөнки кеҫәләрен күпме тентемәһен, тимерлек асҡысы табылманы.— Асҡыс юҡ, ағай-эне.

— Һуң, йортоңда ҡалғандыр. Бар, йүгерт берәй малай-шалайҙы.

Мотаһар маңлайын ҡулының һырты менән һыпырып, ләп итеп шунда ятҡан бүрәнәгә ултырҙы.

— Йортта ла юҡ шул. Сумка кеҫәһенә һалғайным мин уны. Урмансы өйө янында ҡалған...

## 6

Ҡанына һеңгән ғәҙәт буйынса, Хисам ҡарт офоҡ саҡ ҡына аллана башлау менән үк уянды. Йәше байтаҡ булһа ла, кәүҙәгә ныҡ ине әле ул. Йыбанмай ғына тороп, сәй ҡуйҙы Йылы көртөйөн эләктереп, аҫтағы йылғаға һыуға төшөп менде. Ҡулйыуғысҡа сирҡандырғыс һалғын һыуҙы ҡойоп, йыуынырға ғына әҙерләнгәйне, йортонан саҡ ҡына алыҫтараҡ ятҡан төйөнгә күҙе төштө. Кисә кис юҡ ине, ни булырға мөмкин? Яҡыныраҡ килде — һипләп уралған ниндәйҙер тимер киҫәктәре. Күрмәй ҙә торған, апаруҡ ҙур хужалыҡ сумкаһы ла тәгәрәп ята икән. Эсенән ҡайһы бер ваҡ-төйәге ҡойолған. Бер ҡарарға килә алмай уйланыбыраҡ торғас, Хисам ҡарт уларҙы йыйып алды, сумкаһына ҡабат тултырҙы. Хәл юҡ — йортона индерергә тура килер. Эйәһе берәй килеп

табылмай ҡалмаç. Кеше-фәлән йөрөгәне күренмәй ине, нисек килеп эләккәндер уның йорт-ҡаралтыһы тирәһенә.

Урмансының көндәлек мәшәҡәте байтаҡ. Иртәнгене ашап урман буйлап йөрөп әйләнгәс, көтөлмәгәндә табылған әйберҙәр онотола төштө. Үткән-һүткәндә күҙгә салынһалар ҙа, Хисам ҡарт улар хаҡында баш ватмай ине инде. Мәсьәлә уйламағанда сиселде. Ҡояш апаруҡ күтәрелергә өлгөргәйне. Ат бышҡырғанға тәҙрәнән үрелеп ҡараған урмансы яҡынайып килеүсе арба егелгән күкһел бейәне күрҙе. Ике ир кеше ултырған. Кемдәр булырға мөмкин? Был яҡҡа боролғас, йомоштары унда ғыналыр, моғайын.

Хисам ҡарт болдорға сыҡты. Уңарса көтөлмәгән юлаусылар апаруҡ яҡынайырға өлгөргәйне. Хужаһын күргәс, Бим дә лауылдап абалап сығырға ҡабаланманы, күҙҙәрен алмаш-тилмәш бер аттағыларға, бер ҡартҡа күсереп, тыныс ҡына ята бирҙе.

— Иҫәнлек-һаулыҡмы, Хисам ағай?

— Арыу ғына, аллаға шөкөр. Танымай ҙа торам, Ғәйфетдин, әллә һинме?

— Эйе лә.

Арбанан икенсеһе лә төшөп ҡул бирҙе. Бынығын элегерәк үк сырамытырға өлгөргәйне ҡарт. Ни тиһәң дә, урмансының тимерсегә йомошо төшмәй тормай.

— Ни хәл, Мотаһар ҡусты? Ат егеп тороп, ерле юҡҡа ғына килә ятмайһығыҙҙыр?

Мотаһар ыҡ-мыҡ итте. Уның хәбәрен ҡайһы төштән башларға белә алмай интегеүен күреп, юлдашы ярҙамға ашыҡты.

— Хисам ағай, ни... Кисә кис Мотаһар ҡайтып барғанда, арбаһынан әйберҙәре төшөп ҡалған. Шуны күрмәнегеҙме тип килгәйнек.

— Һм...— Ҡарт тамағын ҡырғылап алды.— Ул әйберҙәр миндә. Тик, мырҙалар, улар ат юлында ятмай ине бит әле. Ни сәбәптәндер, минең йорт ҡаршыһына уҡ килеп тәгәрәшкәндәр. Мәйтәм, әллә аяҡланғандармы...

Ирҙәр бер-береһенә ҡараштты. Бергилке өндәшмәй торғас, яуапларға һүҙ тапманымы, әллә йәшереп файҙа сыҡмаҫына ышандымы, ҡулын һелтәп, Мотаһар барыһын да һөйләне лә бирҙе.

— Ҡуй инде, Хисам ағай, әҙәм ышанмаҫты ысын булһа ла һөйләмә, тиҙәр. Әйтергә тура килә.— Аяҡтарын алыштырғылап бер аҙ торғас, Ғәйфетдиндең ҡулынан тәмәкеһен тартып тигәндәй алды, ғүмерҙә тартҡаны булмаһа ла, бер-ике тапҡыр үпкәләрен тултырғансы һурҙы.

Мәгәр бынан һис ниндәй фәтеүә сыҡманы — урмансы менән юлдашына уның сәсәүе үткәнен көтөп, биш минут самаһы сыҙамлы ғына торорға тура килде.— Әй... Әйтәйем инде. Кисә кис Байгилделәге бажа янынан ҡайтып киләм. Автобус менән барғайным, матайға ғына ултырһам нимә була инде. Анау тимер-томорҙо шалтыратып шөрөткәнсе, тигән булдым. Шунан шул, килә ятам. Бажа, күрәге тейер тип, апаруҡ нәмәләрен тейәне. Кем уйлаған уларҙың барған һайын ауырайырын. Түҙемлек ҡалмағас, һинең йорт яғына ҡайырылдым. Мәйтәм, йоҡларға керетер, моғайын, үҙ кеше, ни тиһәң дә. Таң менән тороп, ауылға ҡайтырмын тигән булам. Юлдан ҡайырылып, һуҡмаҡҡа боролдом. Күп тә ҡалмағайны өйөңә тиклем, бер ынтылырлыҡ ара. Хәйер, минең әйберҙәрҙе алғанда күргәнһеңдер... ни нәмәһен һөйләргә тағы... Шул. Тәүҙә иғтибар итмәгәнменме, әллә булмағанмы, шайтан белһен. Кинәт боролһам, бына ошо тирәләрәк... ышанмаһаң ышанмаçһың... ен тора ине. Ап-аҡ, простыня ябынған әҙәм шикелле. Ысын бына...

Хисам ҡарт, асҡан ауыҙын яба алмай, аптырап ҡалғайны. Иçенә килгәс, асыуланырғамы, көлөргәме белмәй, бик етди ҡиәфәттә уға хәбәр һөйләп торған ике иргә күҙҙәрен йүгерткеләне.

— ...Ҡарап тороуға аҡылы теүәл ир уртаһы кешеләрһегеҙ. Ни нәмәһенә бала-сағаны ҡурҡыта торған әкиәтте миңә килеп һөйләп йөрөйһөгөҙ?

— Асыуланма, Хисам ағай. Ирекkәндән түгел, ышан.

Ҡарт өндәшмәне. Боролоп, йорто яғына йүнәлде. Уның ни эшләргә йыйыныуын белә алмай аптырабыраҡ торған ирҙәр, урмансы өйөнән сумка менән төйөндө күтәреп килеп сыҡҡас ҡына, еңел тын алып ҡуйҙылар.

— Бына, мырҙалар, юғалған байлығығыҙ... Тик, ни эшләптер, ул бер килеп, һинең генә күҙеңә күренә. Мин бында йылға яҡын йәшәйем.

— Белмәйем, Хисам ағай.— Мотаһар ҡарттың ҡулынан әйберҙәрен алып, арбаһына һалды.— Хөрәфәткә ышана торған кеше түгелмен, күҙҙән дә зарланған юҡ. Белмәйем инде...

— Йә, ярар, арыған кешенең күҙенә ни күренмәй.— Урмансы арала үпкә ҡалдырмаçлыҡ тауыш менән әйтеп ҡуйҙы.— Кем менән булмаçҡа мөмкин.

— Тик бына... — Мотаһар ярты һүҙҙә туҡтап ҡалғас, урмансы йорто яғына йүнәлгән ерҙән кире боролдо.— Тик минең бисә бөтә ауылды тултырған. Кисә төнө әйткәйем бит инде һөйләнеп йөрөмә тип. Юҡ, аңламағас аңламай, телен ҡырҡып ала торған нәмә.

Ҡарт ҡулын һелтәне лә үҙ юлы менән китте. Уның был хәбәрҙе ауыр ҡабул итмәүен күреп тынысланған юлсылар, арбаға ултырып, атты урман юлына табан әйҙәне.

## 7

— Юҡ, Хәтмулла ағай, мин ул әкиәткә барыбер ышанмайым.— Ниғмәтйән урынынан тороп уҡ китте.— Төптө буш уйҙырма!

— Мотаһар алдаша торғандарҙан түгел, уны бит мин бәләкәй генә сағынан беләм. Минең күҙ алдында үҫте.

— Үҫһә һуң. Оҫта шылдырыр өсөн күп кәрәкмәй, заманаһы шундай.— Мотаһар менән йәштәш Ниғмәтйән һаман еңешә. Хәйер, Аҡсатыр өсөн был яңылыҡ түгел. Улар икеһе тиңдәштәр, бер класта уҡынылар, армияны йәнәш киттеләр, хатта бер үк ҡыҙҙы ҡармаҡланылар. Ҡыҙғанысҡамы, ҡыуанысҡамы, уныһы Мотаһарға тәтеп ҡуйҙы. Шуға күрә, әйләнгән-тулғанған һайын, Ниғмәтйән күршеһен семетеп алырға тырыша. Уның еңешеүенә ҡаршы бүрәнә өҫтөндә ултырып гәп һатҡан ир-ат араһындағы иң олоһо, етмеште ҡыуып килеүсе Хәтмулла мәғәнәле генә итеп тамағын ҡырып ҡуйҙы. Бының сәбәбен белеүсе ауылдаштары шымып ҡалды. Һүҙгә әүәҫ Хәтмулланың бындай ымы ерле юҡҡа булмай торған.

— Ә һин, Ниғмәтйән ҡусты, Мотаһарҙың үҙенән был хаҡта һораныңмы һуң? Йәнәшәңдә генә ултыра, ауыл аша сабып йөрөйһө түгел.

— Уның ни нәмәһен һорайһың. Уйҙырма, и баста! Бажаһы нығыраҡ һыйлаған. Байгилделә яңы сорт көмөшкә ҡыуа башлағандарҙыр, күҙгә ен-пәрей күрһәтә торған. Ха-ха!

Күршеһе менән булған хәлде уның йәнә көлкөгә күтәрергә тырышыуы был юлы бушҡа булды. Хәтмулла ҡарт абруй менән файҙалана ине. Мотаһар хаҡында әйткән һүҙҙәре башҡаларҙың көлкө төнләгән томалай төштө.

— Уның ни нәмәһен һөйләйһең инде.— Барыһы ла шымып ҡалғанғамы, бөтә был бәхәстең сәбәпсеһе, күрәһең, ни ҙә булһа әйтеүҙе тейешле тапты.— Килеп үҙемә әйтһәләр, бына Ниғмәтйән тиңдәш кеүек, мин дә ышанмаҫ инем.

— Хисам ҡорҙаш ни ти һуң?

— Ышанмай.

— Ә һин күҙеңә күренгән, тип уйламайһыңмы?

— Юҡ, Хәтмулла ағай. Алыҫ булһа, бәлки, шикла-

пер инем, ни бары ун-ун биш аҙым самаһы ине. Анау торған бағанаға тиклемге ара.

— Һм... Быңа нәмә, мырҙалар. Һөйләмәһәм һөйләмәҫ то инем, эштәр былайға киткәс, сиселергә тура килә. Үткөндә эңерләтеп кенә ҡайтып киләм. Теге аҙғын быҙау йәнә көтөүҙән айырылып, бойҙай баҫыуына һыпыртҡан бит. Әбей һуҡрана, пенсиә ашап ятып, шул бер кәкре башмаҡҡа ла баш була алмайһың, ти. Киттем кисләтеп кенә. Ул аҙғынды эҙләп йөрөп, һуң булып китте. Шулай ҙа эҙенә төштөм тәки. Ҡайтып киләбеҙ бер заман. Быҙау сабауыллай, мин уның артынан тыртаңлайым. Юл алама булһа ла, төн яҡты, ай тулған саҡ. Зыярат ҡаршыһына ғына еткәйнек, башмағым йыуашайҙы ла ҡуйҙы, ал бирмәй торған нәмә, таяҡ менән төртөп тә ҡыуырлыҡ түгел. Эт-ҡош йөрөймө, юғиһә, тип башымды күтәреүем булды, ҡаттым да ҡалдым — зыяраттың йыуан-йыуан тарбай ҡайындары араһынан берәү беҙгә ҡарап тора. Тфү-тфү итеп, бисмиллаларымды уҡып, әкрен генә ҡуҙғалып киттем. Ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәйем. Нүгерер инем, арттан ҡыуа төшөүе бар. Шулай ҙа алла исемен иҫкә төшөрөүҙең файҙаһы тейҙе, ахыры — тороп ҡалды. Ни үле, ни тере килеш ҡайтып керҙем әбей янына. Ныгытып иҫкәрттем ҡарсыҡты, мәйтәм, һөйләнеп йөрөйһө булма, олоғайған көндә оятҡа ҡалдырырһың. Ни тиһәң дә, икенсе мәртәбә бит инде, был ҡарт бөтөнләй алйыған, тиерҙәр.

— Нисек икенсе мәртәбә?

— Хәтмулла ағай, ни һөйләйһең? Ҡасан булды тағы?

— Әй эттәгенәһе, уныһын әйтергә онотоп торам да. Өсөнсө йыл буламы, әйтәгүр, минең кесе малай өйләнмәгәйне әле. Ейәнемә йәш тулып уҙҙы, шулайҙыр шул. Бер мәл һунарға сыға ҡуйҙым. Малай йәнде алып бара бит, буласаҡ киленең шундай ҙа бындай. Төлкө тиреһе йүнәт инде туйға, күңеле булһын, ти. Төпсөк улан, ни тиһәң дә. Киттем буранды буран тимәй. Байтаҡ йөрөп арып кителде. Туҡта, мәйтәм, элегерәк үҙ ҡулдарым менән әмәләп ҡуйған ҡыуыш булырға тейеш тә баһа. Тамаҡ ялғап алайым шунда булһа ла, тием. Тирмыҫҡа ҡайнар сәй һалып алғайным, арлы-бирле ҡапҡыларлыҡ ризыҡ бар, тәнгә йылы инеп китер, исмаһам. Ҡыуышым яғына йүнәлеште тоҫмаллап, боролоуым булды, артҡа йығылып китә яҙҙым — яҡында ғына миңә ҡарап теге элекке урмансы баҫып тора. Әллә нисек булып китте, йөрәгемде шом баҫты. Ҡайҙан хасил булғандыр, мәгәр тирә-яғындағы ҡарҙа әҙәм аяғы эҙҙәре юҡ ине. Ниҙер өндәшергә уҡталғайны, ҡот китте табанға, йәһәт кенә боролдом да—

выжт! Әмәлгә ҡалғандай, күҙгә аҡ-ҡара күренмәи килә торғас, һыңар саңғыны ҡайынға бәреп һындырҙым. Инде был көрттө нисек йырып сығырға тип аптырап торһам, әлеге урмансы йәнә ҡыуып етте. Был юлы саңғы кейгән үҙе.

— Нихәл, Хәтмулла олатай? — тип өндәшә, етмәһә. Мин ни, бер ҡот киткәс, тын алырға ҡурҡып торам.— Саңғың һындымы ни? Юҡ өсөн ҡайғырма, мә, минекеләрҙе ал да ҡайт өйөңә. Бөгөн был тирәлә төлкө-фәлән күренмәй, юлың барыбер уңмаясаҡ. Иртәгә сығып ҡара һунарға, — ти был.

Сара юҡ, өндәшмәй генә саңғыларын алдым да һыпырт ауыл яғына. Был ҡарт тилеләнгән тип ҡарап тороп ҡалды, буғай. Ошо хәлдән һуң ул яҡтағы урмандарға байтаҡ ваҡыт сыҡманым.

— Ул урмансының Мотаһар пәрейенә ни ҡыҫылышы бар?

Хәтмулла ҡарт Ниғмәтйәнгә өтөп ҡарап алды. «Шуны ла аңламаныңмы, кәпәс кейеп йөрөүең ҡороһон» тигән һөйләм ярылып яткан ҡарттың йөҙөн күреп, тегеһе ыҡмыҡ итте.

— Эш бына тап шунда ла. Әлегә тиклем аптырабыраҡ йөрөй инем. Мотаһар ҡусты менән булған хәлдән һуң, асыҡлана төшкәндәй тойолдо.— Тамағын ҡырғылап алғас, ҡарт төп һүҙгә күсте.— Ул урмансының үлеме сәйер, ауырыуын тапманылар бит. Берәй әтнәкеһе юҡмы икән, тигәйнем.

— Ниндәй? — Мотаһар менән Ниғмәтйәндең ауыҙынан бер юлы сыҡты был һорау. Бер-береһенә ҡарашҡас, уңайһыҙланғандай, ҡабат урындарына ултырыштылар.

— Тере сағында уҡ шикләнә биргәйнем. Ай-һай, бигүк кеше менән аралаша һалмай, үҙе йәп-йәш, бала-саға үҫтерә торған сағы. Ҡыҙ-ҡырҡынға иғтибар иткәне һиҙелмәне, ни ҙә булһа барҙыр тип...

— Шунан?

Һис көтмәгәндә Хәтмулла ҡарт туҙынды ла китте.

— Мин һеҙҙе күптән аңлағандыр инде, тигәйнем. Үҙегеҙ белмәгәнде, сәйнәп уртығыҙға һалһаң да, барып етмәҫ. — Бер аҙ тынлыҡтан һуң, ҡапыл урынынан торҙо.— Йә, ярай, ҡустылар, әбей көтәлер. Ишетмәнек тип иҫәпләгеҙ.— Ҡулдарын биленә һалып, әкрен генә йортона табан йүнәлде.

Бүрәнә өҫтөндәге ирҙәр бергилке өндәшмәй генә тәмәке көйрәттеләр.

— Был Хәтмулла ағай ғүмерҙә лә туп-тура әйтә белмәҫ. Урата-сурата, әйтерһең дә, йомаҡ ҡойошорға йы-

ышлағанбыҙ.— Ҡыҙыҡһынып тыңлай башлаған Ғәйфетдин әллә әңгәмәнең кинәт өҙөлөүенә, әллә ҡарттың тиктомалға асыуланып киткәненә үпкәләгәндәй итеп әйтеп ҡуйҙы.

— Бала-саға әкиәте.— Ниғмәтйән янып бөтмәгән тәмәке төпсөгөн ситкә атты.— Олоғайған башы менән әүрәтә юҡ-бар уйҙырма менән. Ҡалай ул пәрейҙәре кешеһен һайлап ала. Миңә ғүмерҙә осрағандары юҡ, эңер ваҡытында түгел, төндәрен дә урманда ҡәләп һалған бар.

— Ниғмәт, улар, моғайын, һинең ҡыҫҡа буйыңды һанға һуҡмайҙарҙыр. Бәлки, түмәр аша үҙең күрмәгәнһеңдер. Ха-ха!

Сәмләнеүсән ир, быны ишеткәс, ҡыҙара бүртенеп китте, урынынан һикереп торҙо.

— Ә-ә, шулаймы? Бәхәс? Әллә ҡурҡаһыңмы?

Икеләнеберәк ҡалған Ғәйфетдиндең алдына Мотаһар сығып баҫты.

— Ғәйфетдин ҡорҙаш, ситкәрәк кит. Мин бәхәскә инергә тейеш уның менән. Йә, ни әйтерһең, Ниғмәт?

— Ни әйтәһең... Хуп! Һине оятҡа ҡалдырмаһам, исемем Ниғмәтйән булмаҫ!

— Еңелерәк, еңелерәк! Исемеңде алыштырып йөрөй алмаҫһың бит инде. Башҡаны тәҡдим ит.

— Ә ниңә, ҡалһын! Ниғмәтйән тип түгел, Ҡыҫҡабай, йәиһә Тоҡосйән тиербеҙ, көлкө лә баһа! — Ғәҙәттә һалҡын ҡанлы Ғәйфетдин Ниғмәтйәндең инде нисә көн йәнәштән әйләнгән һайын Мотаһарҙы көлкөгә ҡалдырырға тырышыуына йәне көйөп китте.

— Юҡ менән булмағыҙ, егеттәр! — Мотаһар тауышын күтәрә бирҙе, ир уртаһы кешеләрҙең бисә-сәсә шикелле талаша башлауы һарыуын ҡайната башлағайны.— Хәтмулла ағай шикелле зыяратҡа бараһың, ләкин теләһә ҡайһы ваҡытта түгел, фәҡәт сәғәт төнгө ун икене һуҡҡас ҡына. Алдай алмаҫһың, сөнки тикшерәсәкбеҙ. Йә, ни әйтерһең?

· — Ниңә бармаҫҡа? Барам! Мин һеҙҙең ише ҡуян күргәнгә ыштан төбөн еүешләтә торғандарҙан түгел. Шарты?

— Бына былай: еңһәң, көпә-көндөҙ урам уртаһына сығып, «Мин — алйот, иҫәр!» тип өс тапҡыр мин һөрәнләйем, артынан уҡ әтәс булып ҡысҡырам. Еңелә икәнһең — һин!

— Бата!

Ғәйфетдин тыйыла алмай эсенә йәбеште.

— Хө... Хө... Хөснә еңгә ни тиер икән? Йәш... йәшле-

гемде кемдәргә әрәм иттем, тип сеңләргә тотонһа... Ба! Харап!

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ! — Мотаһар йорто яғына ыңғайланы, унан, боролоп, бүрәнәгә ҡабат артын терәгән Ниғмәтйәнгә өндәште.— Бына, тиңдәш, ғүмер буйы минән өҫтөн булып күренергә тырыштың. Үҙ теләгем менән һиңә ошо мөмкинлекте бирәм.

8

Аҡсатыр ауылынан зыярат әллә ни алыҫ түгел — күҙ күреме ерҙә, ләкин терәлеп тә тормай. Атлай биргәс, Ниғмәтйәндең ҡыйыулығы кәмей төштө. Ярай ҙа, тегеләр күрмәгәндә, йөҙ грамды тамаҡ төбөнә һалып сыҡҡан, бөтөнләй теҙ быуындары ҡалтырар ине. Бына ауылдың һуңғы йорто артта тороп ҡалды, бер ынтылһа, ҡәберлеккә барып етәсәк. Ир-ат араһында ауыҙ йырып батырайыуы бер эш, бындай шомло урынға төн уртаһында, етмәһә япа-яңғыҙың юл тотоуы бөтөнләй башҡа нәмә икән. Бәхәскә ингәне өсөн, Ниғмәтйән үкенә башланы. Йә инде, теле ҡысып ниңә ҡоторғандыр. Мотаһар былай ҙа бар ауыл алдында рисуайға ҡалды, үҙ бисәһе тырышҡан, етмәһә ул да өлөшһөҙ итмәне боламыҡтан әтмәләнгән тимерсене.

Үкенеп-тиргәнеп килә торғас, зыярат ҡапҡаһы күҙенә салынды. Күпме һуҙырға тырышмаһын был юлды, үтеп тә бөткән, имеш. Әгәр ҙә эскә инмәй генә кире һыпыртҡанда? Юҡ, батмай, тегеләр ауыл осонда көтә, шундуҡ һиҙәсәктәр. Атлар-атламаҫ, бер урында байтаҡ тапаныл торғандан һуң, Ниғмәтйән, үҙен мәжбүр итеп тигәндәй, йәнә ҡуҙғалды. Бер аҙым атлай, ян-яғына ҡарап ала һәм тағы аҙым яһай. Ҡапҡа янына еткәс, туҡтап ҡалды. Ах, Ғәйфетдин, теленә тимер аҫып ҡуйырға, уйлап сығара бит, ә! Улай уҡ батыр булһаң, элекке урмансы ҡәберен табып, урап сығырһың, имеш. Үҙен ебәрергә ине ошо урынға, ҡапҡа тышында уҡ йөрәге ярылып туңҡаймаҫ инеме икән. Ниңә тап шул урмансы ҡәбере тип ҡаныҡтылар һуң? Ә, теге боламыҡ шул йәшәгән йорт янында ыштан төбөн еүешләткән бит әле. Етмәһә, анау Хәтмуллаһы. Тере сағында уҡ шикләнгән икән берәү. Кеше үлгәс, артынан һөйләү еңел шул. Үҙе, һунарға сығырға ҡурҡып, өйөндә боҫоп ятһа ла...

Бөтә булған таныш-тоношон зат-зәүеренән һалдырып, эсенән генә йоҙроҡ төйә-төйә ҡыҙып китеп әрләй генә башлағайны Ниғмәтйән, ҡайҙа икәнлеге иҫенә ки-

ген төштө. Бәй, ни эшләп тора әле ул ҡапҡаға һөйәү булып. Тегенең ҡәберен йәһәт кенә табырға, урап сығырға һәм, әйләнеп тә ҡарамай, ауыл яғына һыпыртырға. Үҙ ғүмерендә бер генә тапҡыр булһа ла, Мотаһарҙың танауына сиртергә тейеш тә баһа ул. Етте, күп шашты. Иртәгә бөтә ауыл беләсәк, ул кем дә, Мотаһар кем.

Ҡайҙа күмгәйнеләр әле ул егетте? Унан һуң йыназа булғаны юҡ Аҡсатырҙа, тимәк, шул тәңгәлдәрәк... Ҡәбер таштарына теклә-теклә, әкрен генә боролдо Ниғмәтйән... һәм ни ҡыбырларға, ни ҡысҡырырға белә алмай ҡатты ла ҡалды — ул тоҫмаллаған ҡәбер тирәһендә ниҙер хәрәкәтләнгән кеүек тойолдо. «Юҡ, юҡ, булмаҫ, шомланғанға ғына шулай. Бер ни ҙә юҡ!» Бисәһенән сәлдерен, тегеләрҙән йәшереп йотҡан йөҙ грамм үҙенекен итте — Ниғмәтйән, һуңғы ҡыйыулығын йыйып, алға ынтылды. Алда йыуан, аҡ туҙы ҡап-ҡара суғырмаҡтар менән сыбарланған ҡарт ҡайын, шуны ғына урап сыға ла... Икенсе секундтан һуң ни эшләгәнен, бик тырышһа ла, Ниғмәтйән иҫләй алманы. Ҡайынды урап сығыуға, ул ҡәбер ташына тоташып үҫкән кеүек тойолған ап-аҡ әҙәм һынына ғына иғтибар итергә өлгөрҙө. Әйтерһең дә, был һын ниҙелер юғалтҡан ошо тирәлә, алырға бик тырышһа ла, булдыра алмай...

Биттәренә йөҙәр йыл кеше һөйәктәрен һаҡлап ултырған ҡарт ҡайындарҙың тарбай ботаҡтары бәрелә. Бер нисә урындан тиреһе йыртылып, йылымыс ҡан китте. Ләкин быларҙың береһенә лә иғтибар итмәй, Ниғмәтйән йүгерҙе лә йүгерҙе. Зыярат ҡапҡаһынан атылып сыҡҡас, шып туҡтаны — артынан теге албаҫты килгән кеүек ине. Боролоп ҡарағас, тәнен ток һуҡҡандай булды — килә! Ысынлап та килә! Ниңә генә бәхәскә инде һуң Ниғмәтйән?! Ул туҡтағайны, теге әҙәм дә бағаналай ҡатты. Аҡтыҡ көсөн йыйып, Ниғмәтйән ауыл яғына боролдо. Бер, ике аҙым. Йүгерергә шөрләтә, йәнә ҡыуа башлаясаҡ. Дүрт-биш аҙым яһағайны, тағы түҙмәй боролдо, теге албаҫтының тороп ҡалырына өмөтләнә ине әле ул. Килә бит! Был юлы ирҙең бөтә тәнен көҙән йыйырғандай булды, үҙенең өндәме-төштәме икәнлеген айыра алмай башлағайны инде. Тәненең хәрәкәттәренә хужа була алмауын тойҙо. Әллә атлай, әллә пәрейгә ҡарай — үҙе лә белмәй. Албаҫтыһы ла ғәжәп: әйтерһең дә, Ниғмәтйән уны тимер киҫәген магнит менән тартҡан шикелле күсереп — ҡото табанына киткән ирҙән ун-ун биш аҙымдар самаһы ғына ҡалып, эйәреп килә. Ул туҡтаһа — туҡтай, йүгерһә — артынан сабауылларға керешә. Боролоп ҡарап, дөрөҫ эшләмәне, ахыры. Күҙенә күренеү менән ук,

башты баҫып һуңғы тиҙлектә елдерергә кәрәк булған да бит...

Ни үле, ни тере килеш ҡалтыранып килгән Ниғмәтйән, күҙҙәренә тоноҡ электр яҡтыһы салынғас, йәнләнгәндәй булды. Әйләнеп ҡарамай, шәүлә шикелле күренгән ауыл йорттарына табан тороп сапты. Иң ситтәге өй янындағы эскәмйәлә уны көтөп ултырған Мотаһар менән Ғәйфетдин өндәшергә тип асҡан ауыҙҙарын яба алмай ҡалдылар — ағарыныуы хатта урам лампаһында ап-асыҡ күренгән Ниғмәтйән, ирҙәргә иғтибар итмәй, йүгереп үтеп китте.

— Һа! Был әҙәм экспресҡа әүерелгән дә баһа! Беҙҙең янға туҡтап, ваҡланып та торманы, исмаһам.— Ғәйфетдин өндәшмәй генә Ниғмәтйән киткән яҡҡа ҡарап торған Мотаһарҙың ҡабырғаһына төрттө.— Теге батырҙың кикреге шиңгән, ҡыуан — һин еңдең!

Мотаһар бер ни әйтмәне, ҡулын һелтәне лә йорто яғына йүнәлде. Был икәү менән ни булғанын аңлай алмай аҙапланған Ғәйфетдин, бергилке баҫҡан урынында тапанып торғас, ҡайтырға ҡуҙғалды.

## 9

Өҫ кейемен һалып, үҙ бүлмәһенә йүнәлгән Айгөлдө әсәһе бармаҡ ымы менән туҡтатты.

— Ҡыҙым, — зал яғына үрелеп күҙ һалғас, Гөлзифа Сәлиховна бышылдауға күсте,— атайыңдың һабаҡташ дуҫы килгән. Инеп күреш, уңайһыҙ булыр.

— Кем һуң?

— Беләһең һин уны, тик байтаҡтан беҙҙә булғаны юҡ. Байбурин, ғалим, иҫләйһеңме?

— Ә, эйе, Рәшит Насыровичмы ни?

— Тап үҙе. Бар, һаулыҡ һораш.

Айгөл залға үтте. Уны күреү менән, атаһының йөҙөндә йылмайыу, ә ҡунаҡтыҡында иһә ғәжәпләнеү хасил булды.

— Хәбир! Ҡыҙың шулай ҙа булып киттеме ни? — Тауышында һоҡланыуымы, аптыраумы ныҡыраҡ ишетелгәне асыҡ булмаған мөләйем йөҙлө ир уртаһы кеше Айгөлгә ҡаршы күтәрелде.— Кеше балалары тиҙ үҫә тигән тәғлимәтте ошо мәлдә һис ниндәй икеләнеүһеҙ иҫбатларға була. Һуңғы күргәнемдә аҡ бантик тағып, ҡурсаҡ уйнап ултыра инең бит әле.

— Быныһы инде һеҙҙең гонаһ, Рәшит Насырович. Йөҙ

йылға бер киләһегеҙ, шуға шулай.— Гөлзифа Сәлиховна өҫтәл өҫтөнә ваза менән емештәр ултыртты.

— Эш күп бит, нишләйһең инде, Гөлзифа Сәлиховна. Бөтә был ғилемен, кафедраһын, дәрәжәләрен атып бәрең, малай-шалай шикелле урам буйлап ялан аяҡ йүгерерҙәй булаһың да бит... ҡайҙа ул!

— Ә һин йүгереп ҡара, Рәшит.— Хәбир Ғүмәрович рәхәтләнеп көлдө.— Енләнгән тиерҙәрме, йәиһә аҡылдан яҙғанға һанарҙармы. Ҡайһылай булһа ла, күңелле һүҙ түгел.

— Ә, әйткәндәй, — Байбурин ултырған урынынан тороп китте,— һуңғы яңылыҡ — үткәндә журналда бер мәҡәлә күҙгә салынды. Йәп-йәш кенә бер ғалим иҫбат итә. Нәмәне тиһегеҙме? Хәбир, һин әйткән тап ошо һүҙ хаҡында, ысын, ысын! Ышанмаһаң, күрһәтә алам. Сыңарынан сыҡҡан кешеләрҙе енләнгән, тиҙәрме? Әлбиттә! Ошо ғалим иҫбатлай. Йәнәһе, ҡайһы бер әҙәмдәрҙең организмына сәйер йән эйәләре үтеп инә, шунан һуң улар үҙ ҡылыҡтарына үҙҙәре хужа була алмайҙар икән. Йә, ни әйтерһең, конструктор иптәш?

— Һм... Миңә кеше заттарының конструкцияһы менән ҡыҙыҡһынырға тура килмәне бит әле. Был өлкәлә, тураһын әйткәндә, мин томана наҙан.

— Һуң, һабаҡташ, дөйөм кешелеккә ҡағылышлы нәмәләргә нисек иғтибар итмәҫкә мөмкин! Тимер-томор ғәйәт күңелһеҙ нәмә лә баһа!

— Был осраҡта мин һинең менән ризалаша алмайым, Рәшит. Ҡыҙып китеп, үҙемдең файҙаға дәлилдәр килтерергә тотонһам, ант итәм, башың аша күмеләсәкһең.

— Йә, йә, биреләм, шаяртыу ғына быныһы.— Байбурин уны иғтибар менән тыңлап, ишектән сығырғамы-юҡмы икәнен онотобораҡ торған Айгөлгә өндәште.— Ә һин, Айгөл, ни тиерһең был хаҡта?

— Минме? Ундай мәҡәләне күргәнем юҡ шул.

— Эш мәҡәләлә түгел. Бына, уйлап ҡара, аҡыл яғы ғамаланған кеше үҙенең ни эшләгәнен белмәй. Бөтөнләй бәйләнешһеҙ һүҙҙәр, хәрәкәттәр, ҡылыҡтар. Ҡайҙан алып эшләй уларҙы тип уйлайһың? Өләсәйем мәрхүмә әйтә торғайны, йәнәһе улар ниндәйҙер тауыш ҡына ишетә. Ни бойорһалар, шуға тулыһынса буйһоналар икән.

— Ну-у, Рәшит, һин бигерәк. Ғилми Советығыҙҙағы берәй һаҡаллы аҡыллы баш ишетә ҡалһа был фәлсәфәләреңде, бөттө баш тип ултырырға тура килмәҫме һуңынан?

— Оптимист булырға кәрәк, Хәбир. Башымды киҫергә бирә алам, ниҙер бар был әкиәттәрҙә, ысынлап әйтәм. Их, ғүмер уҙып бара, йәшерәк булынһа, ысынлап өйрәнергә тотонор инем был өлкәне. Әлеге ваҡыт... күпме тартһаң да, һуҙһаң да, етмәгәс етмәй.

Айгөлдөң ҡыҙыҡһыныуы йөҙөнә сыҡты. Ҡыҙындағы үҙгәрешкә иғтибар иткән Хәбир Ғүмәрович был юлы дуҫына ҡаршы бер һүҙ өндәшмәне — һуңғы йылда был бала менән әллә ниндәй үҙгәреш булғайны. Уйҙар ҡосағынан тартып алыу түгел, нәмә менәндер ҡыҙыҡһындырыуы ла мөмкин булмаған эш кеүек тойола башланы атай кешегә.

— Рәшит Насырович,— Айгөл креслоға иркенләп урынлашты,— кеше үлгәс, ни эшләй? Әйтегеҙ әле.

— Нисек ни эшләй? Күмәләр, теге донъяға олаға.

— Мин ысынлап һорайым. Һеҙҙең ошо хаҡта берәй фекерегеҙ бармы?

Байбурин өндәшмәне. Ҡап-ҡара ҡуйшы бакенбардаларын һыйпаштырып ултыра торғас, кинәт күңелсәкләнеп көлөп ебәрҙе.

— Ну, Хәбир! Икәүләп бөтөрәһегеҙ инде һеҙ мине. Яңы ғына балалыҡтан сыҡҡан ҡыҙың, ана, ниҙәр хаҡында һорай.— Бер аҙ өндәшмәй ултырғас, етди тонға күсеп өҫтәне.— Был мине лә ҡыҙыҡһындыра, һеңлекәш. Ғөмүмән, кеше был донъяға яралған мәленән алып уйлана башлаған — ни өсөн ул бар, һәм, юҡҡа сыҡҡас, ни буласаҡ? — Ҡапыл ҡыҙға боролоп, һорай ҡуйҙы.— Ә ни өсөн һин тап ошондай һорау бирҙең әле, Айгөл? Үҙеңдең ниндәйерәк фекерҙәрең бар был хаҡта?

Ҡыҙ икеләнеп ҡалды. Әйтһә, аңларҙармы икән? Көлкөгә күтәрһәләр? Байбуриндың етди йөҙөн күргәс, кинәт кенә хәл итте лә ҡуйҙы — ысынлап, кемдән һорай ала ул был хаҡта? Йылдам ғына тороп, үҙенең бүлмәһенә йүнәлде. Атаһы менән ҡунаҡ кеше уның ни өсөн бер һүҙ әйтмәй сығып китеүен аңларға маташып ултырған арала, төн йоҡоларынан яҙҙырған әлеге фотоһүрәттәрҙе тотоп, ҡыҙ кире сыҡты. Айгөл биргәс, байтаҡ ваҡыт өндәшмәй генә ҡарап ултырҙылар. Аптырауҙары йөҙҙәренә сыҡҡайны — әле булған әңгәмә менән ошо һүрәт араһында һис ниндәй бәйләнеш юҡ кеүек.

— Ни өсөн күрһәтәһең һин быны, ҡыҙым? Ғәп-ғәҙәти нәмә лә баһа. Тоноғораҡ сыҡҡан, шул ҡына.

— Ҡарағыҙ ошо урынға.

— Йә, ни әйтерһең, Рәшит?

— Кем һуң ул, Айгөл?

Айгөл һүрәтте ҡулына алды, янында торған сәйер һынға тағы бер тапҡыр күҙ ташланы.

— Ул үлгән кеше, атай. Тереләр араһында юҡ. Йылдан ашты инде...

Байбурин менән Хәбир Ғүмәрович бер-береһенә ҡараштты — йөҙҙәрендәге ғәжәпләнеү тасуирлап бирергә мөмкин булмаған кимәлдә ине.

— Нисек... үлгән кеше? Ҡыҙым, һин ни һөйләйһең?

— Атай, һин уны беләһең. Хәйер, бер тапҡыр ғына күрҙең, иҫеңдә ҡалмауы мөмкин.

— Кемде әйтәһең?

— Айварҙы. Урмансы булып эшләй ине. Былтыр ҡыш... үлеп ҡалды.

— Шунан был фотоһүрәткә уның ни ҡыҫылышы бар?

— Атай, туп-тура бәйләнгән. Мин бит уны таныйым, ете төн уртаһында уятып, фотоһын күрһәтһәләр ҙә, яңылышасаҡ түгелмен.

— Туҡтағыҙ әле, хөрмәтле публика! Һүҙ ни хаҡта бара? — Аналитик фекерләүгә өйрәнгән баш мейеһенең ата менән ҡыҙ араһында барған һөйләшеүҙең мәғәнәһен аңламауы ғалимдың йөҙөнә бәреп сыҡҡайны.

Хәбир Ғүмәровичтың күҙ алдына үткән йыл ҡыш булған хәл килде. Эйе, ниндәйҙер урмансы үлгәйне шул. Һуңынан асыҡланыуынса, дуҫлашҡан булғандар. Ҡыҙының өҙгөләнеүҙәрен иҫләһә, атай кешегә әле лә эҫелеһыуыҡлы булып киткәндәй тойола. Оҙаҡ ваҡыт иҫенә килә алмай йөрөгәйне Айгөл. Хәйер, ундағы аңҡы-тиңкелек һаман үтеп бөтмәгән шикелле. Әгәр ҙә был ҡыҙының психикаһына тәьҫир итә башлаһа? Билдәле бит, оҙаҡ ваҡыт ҡайғырып уйланып йөрөгән кеше ауырыуға һабыша. Ниңә әлегерәк ошо хаҡта уйламаған Хәбир? Берҙән-бер генә балаһы ла баһа. Уның яҙмышы ҡыл өҫтөндә икән, һис ниндәй аҡланыу юҡ уға. Ошондай уйҙар менән Хәбир Ғүмәрович кинәт урынынан ҡалҡынды.

— Рәшит, һин миңә ни өсөн килгәнеңде әйтмәнең бит әле. Беләм, ярты сәғәт ваҡытың өсөн дә ҡалтыранып ултыраһың. Йә, тураһын ғына ярып һал, ҡайһы һәләтем менән иҫке дуҫты һаҙҙан тартып сығара алам? Кескәй генә һалам булырға ризамын.

— Атай... — Айгөл ниҙер әйтергә ынтылды.

— Ҡыҙым, беҙ был һөйләшеүгә кире ҡайтырбыҙ, вәғәҙә бирәм. Ә хәҙергә тынyслан, үҙ бүлмәңә кереп, ял итә тор, һуңыраҡ асыҡларбыҙ. Бар.— Һыңар ҡулы менән арҡаһынан яратып ҡуйҙы. Айгөлгә сығыуҙан башҡа

сара ҡалманы. Ҡунаҡ кеше, күпме тырышмаһын, ҡыҙ менән ата араһындағы әңгәмәнең мәғәнәһенә төшөнә алманы.

## 10

Магазин эсе ләстит һатырға яратыусы бисә-сәсә менән тулғайны. Ғөмүмән, ауыл тирәһендә был үтә лә изге урын һанала. Бер һүҙ менән әйткәндә, йөрәк ролен үтәй кибет тип аталған ожмах мөйөшө. Ун-ун биш минут ҡына булырға тура килһә лә, ошо ваҡыт эсендә кемдең һыйыры ҡапҡанан арты менән сыҡҡан, кемдең ире, әстәғәфирулла, тфү-тфү, анау тол ҡатындың йортонан сығып килә ине ти, әҙәм ыстырамы, йәки күршенең тауығы, нисә көн аҙашып йөрөгәндән һуң, тыуған йортона юлын тапҡан икән, бахырҡай, кеүегерәк дәүләт күләмендәге мөһим хәбәрҙәрҙе белеп өлгөрөргә мөмкин. Бөгөн иһә Аҡсатыр ауылында сәпсим «свежый» яңылыҡ — Ниғмәтйәнде Байгилде дауаханаһына оҙатҡандар.

— Мотаһарҙы рисуай итәм тигән булып, хәленән килмәһә лә, үҙе йүгергән зыяратҡа. Бер кем дә артынан төрткөләп ебәрмәгән.— Хөснә еңгә иренең итәк аҫтынан күрһәткән йоҙроғон онотмағайны әле. Мәленән элгәре ҡапҡа һайын шапылдап йөрөгәненә һуңынан үкенһә лә, Мотаһарҙың кеше алдында оятҡа ҡалыуы уның өсөн дә һөйөнөс түгел.

— Хөснә еңгә, һиңә йәл түгелме ни Ниғмәтйән ағай? Беҙ һине уларҙың икеһе өсөн дә ҡайғыралыр тиһәк.

— Атағатаҡ! Үҙең иргә бар ҙа, кеше абышҡаларын йәлләп ултырырһың. Ҡартың ҡабырғаларыңдың нисәү икәнен йәһәт иҫеңә төшөрөр.

— Бәй, әллә албаҫты күреп ҡайтҡас, Мотаһар ағай һанарға ла өлгөрҙөмө?

Еңгәбеҙ тағы ла рухланып сутырҙарға ең һыҙғанып әҙерләнеп кенә бөткәйне, ишек асылып китте. Унда Ниғмәтйәндең хәләл ефете Мәһирә күренде. Был иһә кибет эсендәге гүзәл енес эйәләренә ифрат матур тәьҫир яһаны — күҙҙәре йылтырашып китте хатта.

— Ни, Мәһирә апай, Ниғмәтйән ағайҙы болнисҡа оҙатҡандар икән. Сырхап киттеме әллә? — Бер нәмә белмәмеш булып һорап тора әлеге лә баяғы Нәғимә. Үҙе ошо хәбәрҙе килтереп магазиндың мөйөш-һәйешен ҡалдырмай тултырғаны әллә хәтеренән сығып китте.

— Ауырыбыраҡ тора,— тигән булды Мәһирә. Ни эшләһен инде, аҡыра алмай ҙа баһа урам уртаһына сығып.

— Ат һымаҡ ине лә. Кисә генә күрҙем.

— Кисәнән бирле кемдең һыйыры быҙауламаған да кем тигеҙ ерҙә абынмаған.— Ғәҙәттә, тынысыраҡ холоҡло Маһира йәшереүҙән файҙа юҡлығын, күрәһең, бисә-сәсәнең йөҙөнән үк һиҙҙе, ҡулын һелтәне лә һөйләне лә бирҙе.— Ҡуй инде, әйтеп торам, тыңлай торған кешеме лә әйткәнгә иғтибар итеүсе әҙәмме. Ғәйфетдин менән Мотаһарға бәхәскә ингән. — Хөснә менән бигүк борсаҡтары бешмәгәнгә, ул торған яҡҡа күҙ атып алды. Тегеһе, ғәжәпкә, шым ғына тора ине.— Зыяратҡа ете төн уртаһында барып ҡайта, имеш. Өсәүһе ун икене көтөп ултырҙылар ҙа сығып киттеләр. Ни балалар йоҡламай, ни үҙем серемгә китә алмайым. Байтаҡ булып китте. Бохәсләшеп йөрөгәс, үҙ һүҙен һүҙ итер, тигән булам, ҡайҙа ул. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй ҡайтып керҙе.

— Ни булған һуң? Мотаһарҙың пәрейен күргәнме ни?

— Атаҡ! Ни эшләп Мотаһарҙыҡы булһын ти.— Хөснә еңгә ғүмер баҡый дауам иткән ватан һуғышын йәһәт кенә онота һалып, күршеһенә ярҙамға ашыҡты. Мәғлүм ки, дөйөм оборона дошмандарҙы йәһәт дуҫлаштыра.— Үҙегеҙҙең абышҡалар шундайыраҡ хәлгә тарыһа, нисегерәк йырларһығыҙ икән.

— Шунан, Маһира еңгә, артабан нисек булды?

— Ни булды, тип. Енгә һуғылған икән тип торам. Теште тешкә теймәй, арттан ҡыуа килә, ти ҙә ҡабатлай. Төнө буйы йоҡламай сыҡты. Ахыры иртән, һөт йыйыусы машинаға ултыртып, Байгилдегә оҙаттыҡ.

— Күргәнме ни?

— Шулайҙыр, тим. Улай уҡ ҡото алынмаҫ ине.

Магазин эсендәге бисә-сәсә бер юлы шаулашып китте. Һәр кемгә ауыҙын ҡыбырлатырға әмер бирелде, тиерһең.

— Ана, Мотаһарҙан көлә ине. Үҙе болнисҡа уҡ эләккән.— Хөснә еңгә шулай тигәс, ниңәлер ҡапыл шымдылар.

— Эй, Хөснә, Хөснә, һин һаман да шул уҡ. Үҙгәрмәгәс үҙгәрмәй икән кеше. Бәлә ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй. Барыбыҙ ҙа бер ауылда йәшәйбеҙ, бөгөн Мотаһар менән Ниғмәтйән икән, иртәгә — башҡалар. Быға шатланаһы түгел инде... — Башҡа бер һүҙ өндәшмәне, алаһы әйберен дә һорамай, боролдо ла сығып китте. Кибеттә байтаҡ ваҡыт әңгәмә ялғанмай торҙо. Маһира әйткән һүҙҙәр барыһын да уйға һалғайны.

## 11

Ергә һылашҡан төн ҡараңғылығын ярып, ҡайҙандыр йәшкелт ут пәйҙә булды. Бер ни тиклем ваҡыт һауала аҫылып торғандан һуң, ағара төштө. Дүрт-биш секундтан ул әҙәм ҡиәфәтен алғайны. Шаршау кеүек тотош ағастар араһынан кескәй генә аҡлансыҡҡа табан ынтылды. Күктә йөҙгән ай яланды лампа шикелле яҡтырта. Уның нуры аҫтында кеше һынына йән өрөлгән кеүек булды — ул кинәт теремекләнде, беленер-беленмәҫ тоноҡ һыҙаттары асыҡланды, ҡараштары үткерләнә төштө. Был йәненә тыныслыҡ таба алмай Ерҙе гиҙгән Рух ине.

Ҡайһы яҡҡа йүнәлергә тейешлеген белә алмағандай, ул баҫҡан урынында бергилке ҡыбырламай торҙо, унан яй ғына һуҡмаҡҡа табан йүнәлде. Башҡаса хәрәкәт итергә мөмкинлеге булмағандан түгел, был — ул барырға тейешле ергә иң тура юл. Нисә йылдар тапап, һәр соҡор-ташы таныш, ҡанына һеңеп бөткән һуҡмаҡ ине был Рух өсөн. Бына йыл ярым инде ошо ерҙән ысҡынып, үҙ даирәһенә ҡайтырға ынтыла ул, юҡ, барып сыҡмай. Уның кеүек бик күптәр ер йөҙөнән шәһит киткәндәр. Кәүҙәләре тыныс ҡына ер ҡуйынында ята, рухтары иһә Кеше аңы төшөнөп бөтмәҫлек үлсәмдәрҙә икенсел йәшәүҙәрен дауам итәләр. Ерҙәге әҙәмдәр өсөн улар мәңгегә юҡ инде. Ә бына Рух... Фани донъялағы ул кәрәкле һәм уға ғәзиз йән эйәләре менән башҡаса осрашыу мөмкин түгеллегенә һаман да йәне-тәне менән ҡаршы. Әйтерһең дә, үтеп сығыуы мөмкин булмаған таш стенаны башы менән ватырға тырыша. Аҙым һайын, һәр көн, һәр сәғәт һайын осрашыу эҙләй кеше заттары менән. Улар иһә, йәндәре алынып, ҡасыу яғын ҡарайҙар. Шулай уҡ ҡот осорорлоҡмы икән ни ул? Бер кемгә лә зыян теләгәне юҡ та баһа! Их... Әгәр ҙә фани донъяла ғәп-ғәҙәти кешеләр араһында йәшәгән сағында үҙен улар кеүек үк көсһөҙ тойһа, бәлки, хәҙерге мәлдәге бәргеләнеүҙәре-өҙгөләнеүҙәре урынһыҙ булыр ине кеүек. Физик кәүҙәһенән ҡотолоп, Донъяны Барлыҡҡа Килтереүсегә яҡынайыуына йәненең һәр күҙәнәге менән шатланыр, уның икһеҙ-сикһеҙ мәрхәмәтле һөйөүен тойоп ләззәтләнер ине. Һәм был оҙаҡ-оҙаҡ дауам итер. Юғары көс артабанғы тормоштар өсөн уны ҡабат Ергә төшөргәнгә тиклем. Ниндәй булыр ине икән Рухтың киләһе яҙмышы? Моғайын, йәмһеҙ булмаҫ. Бит тормош ҡылған ҡылыҡтар өсөн туҡтауһыҙ яуап биреүгә ҡоролған. Аллаһы тәғәлә ауыр гонаһ ҡылыусыларҙың йәндәрен ҡабул итмәй, улар ғүмер ба-

кый һыйыныр төбәк таба алмай, ни Ерҙә, ни күктә түгел бөргөләнә бит. Ә бәлки... Кешеләрҙең унан ҡурҡыуының төп сәбәбе ошондалыр ҙа. Моғайын... Рух беләә, икенсел донъяның сихри яҡтылыҡ Аллаһы уны яратасаҡ, сөнки Ерҙәге бар тормошо яҡлауһыҙ ошо әҙәм заттарына изгелек ҡылыуҙан торҙо. Ләкин ниңә китә алмай ул Ерҙән? Ни тота уны? Бәлки, ваҡытынан элек кәүҙәһе ер ҡуйынына ингәнгәлер. Тимәк, улай уҡ тиҙ үлергә тейеш булмаған. Тимәк, эшләнәһе эштәре ҡалған был Ерҙә. Ах, бына бит ҡайҙа көс еткеһеҙ ҡаршылыҡ! Ҡылаһы эштәре бөтмәгән, һәм уларҙы эшләргә ҡөҙрәтенән дә килмәй. Ерҙә йәшәй алмай Рух, һәм шул уҡ ваҡытта икенсел донъяға ишек шар асыҡ түгел. Ҡыҫыҡ ҡына тора ул. Бәлки, бер заман асылыр, бәлки...

Рух урман эсендә ултырған яңғыҙ йорт эргәһенә килде. Лапаҫ янындағы ояһында ятҡан эт, тыныс ҡына ҡарап ятҡан еренән, ҡапыл ергә һеңерҙәй булып бөршәйҙе, уҙок өҙгөс итеп бер генә сыйылданы ла башҡа тауышы сыҡманы. Рух уға иғтибар итеп торманы. Сәйер, был фани донъялағы гәп-ғәҙәти йән эйәләре әҙәм балаһына ҡарағанда күпкә һиҙгерерәк. Кеше ҡабул итмәгәнде көн яҡтыһында ла күрәләр, аптырамаҫлыҡ та түгел. Урмансының әлеге эте, Рух йорт тирәһендә пәйҙә булыу менән, ҡото алына, ә Мыяубикә иһә, элекке хужаһын танығас, бигүк иҫе китеп тормай, һөйөнә лә шикелле хатта.

Рух йорт эсенә үтте. Унда Хисам ҡарт, күҙлек кейеп, өҫтәл артында гәзит-журналдар ҡараштырып ултыра ине. Мейес янында мырылдап ятҡан бесәйҙең кинәт һикереп тороуына, күҙлеген ҡаш өҫтөнә күтәреп, ғәжәпләнеберәк ҡараны. Мыяубикәнең ырғығаны ыңғайына түңкәрәлгән тәгәстең ҡабат үҙ урынына барып, һәүетемсә ҡиәфәт алыуына аптырап, ни әйтергә белә алмай ултырҙы.

— Кис, кис, кил әле бында!

Юҡ, иғтибар ҙа итмәй, иҙән уртаһында әйләнепме әйләнә. Бер аҙҙан тәҙрә янына күсте, мырылдай-мырыллап иҙәнгә һуҙылып ятты. Уның ҡыланышын нисегерәк баһаларға белә алмай, байтаҡ ҡына ҡыбырламай ултырҙы әле ҡарт. Унан, кинәт иҫенә төшкәндәй, ултырғыстан торҙо, йәһәт кенә урын-ерҙе йәйҙе, лампаны һүндерергә ынтылғайны, кире уйланы. Бар белгән доғаларын берсә ҡысҡырып, берсә бышылдап ҡына уҡый-уҡый күҙҙәрен йомдо. Утты һүндерә ҡалһа, күҙ алдында ни нәмә хасил булыу мөмкинлеген ул белмәй ине, әлбиттә.

## 12

— Йә, Айгөл, асыҡтан-асыҡ һөйләшергә ваҡыт етте. Һин инде өлкән ҡыҙ, үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫырлыҡһың. Ләкин һинең күңелең тыныс түгел икән, беҙгә лә бер ниндәй еңеллек булмаясаҡ. Шуға күрә төпсөнгәнгә үпкәләмә, нисек бар, шулай һөйләп бир.

Айгөл урынынан торҙо, тәүәккәл ҡиәфәттә ҡаршыһында ултырған атаһының барып муйынынан ҡосаҡланы.

— Эй, атай, һеҙ һаман да шул сер ҙә билдәһеҙлек тип аптырашаһығыҙ, ә минең йәшерерлек бер нәмәм дә юҡ. Юҡ! Ҡыҙғанысҡа ҡаршы...

— Бының менән ни әйтергә теләйһең?

— Тормош төҫһөҙ, бары шул ғына. Донъяның бар йәме бынан йыл ярым элек һүнде. Йәшерерҙәй серем булһа, исмаһам, тамсы ғына бәхетле булыр инем. Уныһы ла юҡ.

— Йә, йә, тыныслан.— Хәбир Ғүмәрович ҡыҙының йәш төйөлә башлаған күҙҙәренең ситен һаҡ ҡына һөрттө. Әңгәмәне тупаҫ башлағаны өсөн үкенә биреп ҡуйҙы.— Нисек кенә ярҙам итергә һиңә, Айгөл...

Ҡыҙ ҡапыл башын күтәрҙе, моңһоу ҡараштарында өмөт саткыһы ялтырап китте.

— Һин ысынлап та ярҙам итергә теләйһеңме, атай?

— Эйе, ҡыҙым.

— Әйт әле, үлгән кешеләр менән бәйләнешкә инеп буламы?

Айгөлдөң һорауы Хәбир Ғүмәровичты тертләтте, күҙҙәрендә хафа күләгәһе хасил булғайны.

— Һин һаман да шул хаҡтамы? Мин инде барыһын да онотҡанһыңдыр тигәйнем.

— Их, атай, мөмкин түгел. Ышанаһыңмы, мөмкин түгел.

Назаров уйға ҡалды. Ҡулдан килмәҫтәйҙе теләй ҡыҙы — быныһы көн кеүек асыҡ. Ләкин нисек итеп күңелен ҡыйырһытмай ғына кире һүрелдерергә? Юҡ-барға рәнйеп бара, һуңғы йылда бигерәк тә...

— Атай, әйт инде берәй һүҙ.

Хәбир Ғүмәрович уфтанды. Ни ҙә булһа әйтергә тейеш ине ул.

— Килтер әле теге фотоһүрәтте.

Айгөл йылдам ғына килтереп ҡулына тотторғас, йәнә текләне. Эйе, сырамытҡан кеүек. Бәй, нисек хәтеренә килмәгән, тәүге тапҡыр үҙ фатирында түгел, ә каби-

астында күргәйне лә баһа. Тап шулай! Мейеһенән йәшен эҙлегендә үтеп киткән был фекерҙән аҙарынып китте.

— Туҡта, Айгөл... Әйт әле, һин быны Айвар икәненә тамсы ла шикләнмәйһеңме?

Ҡыҙ башын сайҡаны.

— Һм... Мин уны иҫләйем. Эйе, эйе. Кабинетта был тайны был хәл. Һин юғалған көндәрҙә. Нисек ингәнен-сыҡҡанын белмәйем, ләкин ул минең менән һөйләште. Ишектән инмәгән, аңлайһыңмы? Йә, ни әйтерһең?

Ғәжәпкә, Айгөлдөң был һорауға иҫе китмәне. Тынысҡына атаһына ҡарап ултыра бирҙе.

— Быны менән нимәне иҫбатларға теләйһең, атай?

— Һуң ул ваҡытта уҡ әҙәмсә инеп-сығып йөрөмәгәс... кеше булғанмы икән һуң ул?

Айгөл урынынан торҙо, тәҙрә янына барып, ҡулдарын ҡаушырып Хәбир Ғүмәровичҡа арты менән баҫты. Оҙаҡ өндәшмәнеләр.

— Мин быларҙың барыһын да белә инем, атай... Хәҙер йәшереүҙән бер ниндәй файҙа юҡ.

— Нисек белә инең?

— Эйе, ул ғәҙәти кеше булманы. Хәйер, аңлатып бирә алмам, барыбер ышанмаясаҡһың.

— Һм-м... Дауам ит.

— Бер һүҙ менән әйткәндә, мин уның күсермәһенең йәшәүен дауам итеүенә ышанам, ул юҡҡа сыға торған нәмә түгел.

— ...Ни әйтергә теләйһең?

Айгөл атаһының янына килде, журнал өҫтөндә ятҡан фотоһүрәтте йәнә ҡулына алды.

— Атай, бына нимә, Айвар тере сағында уҡ икегә бүленә ала ине, йәғни физик кәүҙә һәм биоэнергетик игеҙәк. Кәүҙәһе үлде, ләкин был уның йәненең үлеме түгел, һәм тап ошо һүрәт быны иҫбатлай. Аңлайһыңмы?

Хәбир Ғүмәрович шыбыр тиргә батҡан маңлайын һөртөргә ҡулъяулыҡ эҙләп, әле түш кеҫәһен, әле салбар кеҫәләрен аҡтарғыланы. Тапмағас, шунда ятҡан салфетканы йомарлап, бите буйлап йөрөттө.

— Һы... — Тороп бер тәҙрә янына, бер ҡыҙы эргәһенә килде. — Һы... Һин баш етмәҫлек нәмәләр хаҡында һөйләйһең. Әйткәндәрең хаҡында, исмаһам, ныҡлап уйлап ҡарағаның бармы һуң? Онотма, һин егерменсе быуатта йәшәйһең.

— Атай, был һүрәт минең үткән ҡыштан бирле эҙләгән нәмәне табыуымды ғына иҫбатлай. Ә һин уйланыңмы, тиһең...

— Мин ни тип әйтергә лә белә алмайым, Айгөл...— Хәбир Ғүмәрович ҡапыл ҡыҙына күтәрелеп ҡараны.— Ә һин ниңә уны элек үк әйтмәнең?

— Нимәне?

— Һуң... Икегә бүленә ине, тиһең бит, шуны, тағы нимәне булһын.

— Ярамай ине, атай. Ул хаҡта бары мин генә белдем. Биш минут ҡына элегерәк барып етә алһаҡ, бәлки, ҡотҡарып булыр ине. Өлгөрмәнек...

— Йә, ярар, Айгөл. Һин күпме һөйләмә, мин барыбер аңламаясаҡмын. Әллә ниндәй биоэнергетика тураһында һүҙ ҡуйырта башланың. Был, күрәһең, минең аңлау даирәмдән ситтәрәк ята.

— Ышанмайһың, бары шул ғына. Атай, ә һин ысынлап миңә ярҙам итергә әҙерме?

— Эйе, ә ниңә?

— Улайһа машинаңды биреп тор. Бер генә көнгә.

Назаров сығырға боролған еренән ҡыҙына күтәрелеп ҡараны — аптырауы йөҙөнә сыҡҡайны.

— Ә ниңә ул һиңә? Йөрөтә беләһең әлбиттә. Ләкин урамда шундай хәрәкәт, ҡайсаҡ үҙем ҡаушайым.

— Ну, атай, зинһар!

— Яҡшы, ләкин бер шарт менән — алдыңды-артыңды ҡарап ҡына. Минең артыҡ балам юҡ. Туҡта әле, ҡайҙа барырға йыйынаһың?

— Урманға. Элек Айвар йәшәгән йортҡа.

Хәбир Ғүмәрович был юлы бер ни өндәшмәне, килеп ҡыҙының арҡаһынан ҡаҡты ла ишеккә йүнәлде. Уның кире һүрелдерергә теләгәнен Айгөл күҙ ҡараштарынан аңланы. Атай кеше ҡыҙының күңелен китәһе килмәне.

## 13

— Сибәғәтов, яңы ҡабул ителгән ауырыуҙың хәле нисек?

— Шул килеш, Радик Нурыевич.— Дежур табип алдына ауырыу тарихтарын теҙеп һалды.— Ҡайҙа ине әле уныҡы... Ә бына.

— Диагнозын уҡығыҙ әле.— Аслаев, иртәнге обход алдынан була торған ғәҙәттәге мәшәҡәттәрен бөтөп, сығырға әҙерләнгәйне.

— Нервы өйәнәге. Стресс һөҙөмтәһе. Ҡан баҫымы юғары. Әгәр шул килеш ҡалһа, параличҡа илтеүе мөмкин.— Институтты яңыраҡ ҡына тамамлап килгән Сибә-

итов бер тында уҡып сыҡты ла баш табипҡа күтәрелеп ҡараны.— Йә, ни әйтерһегеҙ?

— Һм... Ниндәй стресс? Асыҡланығыҙмы?

— Байгилдегә шылтыратҡайным...— Егет бергилке ниндәймәй торҙо, күрәһең, ниҙелер әйтергә баҙнат итә алмай ине.— Бында юлайҡан машина менән ебәргәндәр.

— Ҡыҫҡараҡ тот, Юнир. Ниндәй стресс?

— Пәрей күргән, тиҙәр. Ысын бына. Тәүҙә көлгәйнем, асыуланды ла киттеләр. Саҡ трубканы бәрмәнеләр, гәфү үтенеп өлгөрҙөм ярай ҙа.

Баш табип ишеккә боролған еренән кире әйләнеп, егеткә ҡараны.

— Һин нимә, ысынлапмы?

— Эйе.

— Һы... Ярай, ауырыу тарихтарын ал. Обходҡа! Тәүҙә шул палатаға барайыҡ әле. Ҡайһыһында?

— Етенселә, Радик Нурыевич.

Баш табиптың сыҡҡанын көтөп торған аҡ халаттағы ике ҡыҙ менән бергә палатаға йүнәлделәр. Ишек туҡылдатыу менән, эстәге шау-шыу шунда уҡ тынды. Йәше анаруҡ күренгән хәйләкәр ҡарашлы ҡарт, күрәһең, ҡалғандарға ни хаҡындалыр һөйләй ине. Күҙҙәрен мут йылтыратып, карауатына һуҙылып ятты.

— Ни, Радик энекәш.— Көлкөләре ауыҙҙарын йырып сығып килеүсе ҡалған икәүһенә йәһәт кенә күҙ ташлап алды ла ҡарт инеүселәргә төбәлде,— беҙ бына коллектив менән бик мөһим мәсьәләне хәл итеп ятабыҙ бит әле. Йәғни һүҙ ен һәм пәрей заттары хаҡында бара.— Тәҙрә янындағы карауатта быларға арты менән ятыусы иргә күтәрелеп ҡарарға онотманы.— Йәғни мәҫәлән, мин йәшерәк саҡта берәү ҡолаҡҡа төшөрҙө бит бер заман. Бисәң еңгәһенә барам тигән булып, өҫтөңдән йөрөй, тимәһеңме. Минең, мәйтәм, ысынлап ен ҡуҙғалды ла китте. Көк бисәнең сығып киткәнен генә көтөп торҙом да алама ыырастыня ябынып, кәртә артлап ҡына һыпырт ҡайнаға йортона. Бисә оҙаҡ торманы былай, биш-ун минут булып үҙебеҙҙең яҡҡа боролғайны, былт — ҡойма артынан килдем дә сыҡтым. Бахырыңдың туҫтағы көньяҡҡа, үҙе төньяҡҡа осоп китте. Һөйрәп алып ҡайтырға тура килде. Өс көн иҫенә килә алмай ятты. Әле хәтеренә төшһә, минең түпәләге һуңғы сәстәрҙе йолҡорҙай була. Мәйтәм, әллә бынау энекәштең бисәһе минән арттырҙымы икән, тигәйнем.

— Шәймәрҙән ағай, һеҙ берәй заман тыныс ҡына ята алырһығыҙмы икән?

— Булмай, брат. Минең тел туҡтаһа, алла һаҡлаһын, ҡояш төнгө ун икелә ҡалҡып ҡуйыр.

— Йә, ярар, тынысланығыҙ.— Аслаев тура тәҙрә янындағы карауат эргәһенә үтте. Палаталарҙа, ғәҙәттә, оҙон-оҙаҡ туҡтап тормаһалар ҙа, был юлы ултырғыс алып шунда ҡунаҡланы.— Йә, туған, хәлдәр нисек?

Ауырыу табип ултырған яҡҡа боролдо. Уның күҙ төптәре күм-күк ине, ҡараштарының төпкөлөндә йылдар буйы тора алмай ятҡан ауырыуҙарға хас хәсрәт. Быны күргәс, Аслаев аптырабыраҡ ҡалды. Һорар ине, күршеләре йәнә көлкөгә күтәрәсәк. Ошондай мөнәсәбәтте күрә тороп, асылып һөйләшмәйәсәк — көн кеүек асыҡ быныһы.

Баш табип ултырғыстан торҙо.

— Иптәштәр, палатанан сығып тороғоҙ әле. Ун минутҡа.

Ниғмәтйәндең Аслаевҡа ни әйтерен көтөп ҡолаҡтарын ҡарпайтҡан төрлө йәштәрҙәге өс ир ризаһыҙ ҡиәфәттә бүлмәнән сығып киттеләр. Ишектең ябылыуын ғына көткән табип йәнә ауырыуға төбәлде.

— Хәҙер бер нәмәне лә йәшермәй һөйлә.

— Их мин иҫәр, ни нәмәһенә телемде тыя алмағанмындыр.— Тауышында үкенеү ҙә, асыу ҙа бар ине.— Күҙҙе лә асырға ирек бирмәйҙәр.

— Сибәғәтов!

— Эйе, Радик Нурыевич.

— Боксты әҙерләгеҙ, айырым һалабыҙ. Хәҙерге мәлдә уның өсөн иң шифалыһы — тыныслыҡ. Ниндәй генә күршеләр булһа ла, шул уҡ хәл ҡабатланасаҡ.— Сибәғәтовтың сығып китеүен көтөп торҙо ла ауырыуға эйелде.— Ниғмәтйән, тураһын ғына әйтегеҙ әле, ниндәй хәлгә юлыҡтығыҙ?

— Һеҙ барыһын да беләһегеҙ бит, табип иптәш. Тағы һорап йәнемде ҡыймағыҙ. Шуны ғына әйтә алам — барыһы ла дөрөҫ. Ып-ысын ине, зыяраттан ауылғаса мине эҙәрлекләне. Ҡайттым да йығылдым.

— Аңлашыла.— Аслаев урынынан торҙо, шәфҡәт туташтарына өндәште.— Ҡан баҫымын үлсәгеҙ, юғары булһа — шунда уҡ укол. Ә һеҙгә, Ниғмәтйән — тынысланырға, әҙемтәләре ҡалмаһын, тиһәгеҙ, үҙегеҙҙе ҡулға алырға тейешһегеҙ.

Ниғмәтйән арты менән боролоп ятты. Аслаевтың йөҙөндә һуңғы көндәрҙә артыҡ өйрәнелгән мыҫҡыллы аптырау күрмәгәненә үҙе лә ғәжәпләнеберәк ҡалғайны.

## 14

Һуңғы арала үҙ йортонда булған сәйер хәлдәргә аңлатма бирергә тырышып, башы ҡатты Хисам ҡарттың. Дөрөҫ, элегерәк тә булғылай ине, ләкин аҙаҡҡы аҙнала... Нә тик ятҡан еренән китаптың биттәре аҡтарылырға керешә, гөл һауыты урынынан күсә, тәҙрә асылып китә. Әйтерһең дә, күҙгә күренмәгән йән эйәһе ҡарт менән бер өйҙә мыштым ғына йәшәп ята. Тәүҙә осраҡлылыҡҡа һылтап, үҙ-үҙен тынысландырырға тырышҡан Хисам тора-бара шикләнә башланы. Әллә ысынды һөйләгәнме анау Мотаһар? Етмәһә Аҡсатырҙан йәнә берәү дауаханаға эләккән, имеш, тип ишетә биреп ҡалды. Тиккә түгел былар барыһы ла. Ни ҙә булһа ҡылырға кәрәк. Шундай мәлдә баш та эшләмәй бит әле. Йортто өшкөрттөргәндә? Доға ҡылып, аят уҡыһалар, һәүетемсә булып ҡалыр, мөгайын. Алла исеме мең бәләнән ҡотҡара, был юлы ла ярҙамы теймәй ҡалмаҫ. Кәкүк ауылындағы ҡорҙашы Хәбибрахманға һуғылырға тура килер. Сүрәләрҙе яҡшы белә, баш тартмаҫ.

Бесәйҙең һөт һалынған тәрилкәһе әйләнеп-әйләнеп ҡабат урынына килеп ултырыуын күҙәткән Хисам ҡарт был юлы ысынлап ҡаушап ҡалды. Бөгөн үк, хәҙер үк юлға сығырға! Урман уртаһында, япа-яңғыҙы былай көн күрә килә, аҡылдан яҙырға мөмкин. Йәһәт кенә торҙо, юлға кейә торған ыҡсым курткаһын алырға үрелде. Ғәжәпкә, уныһы сөйҙә юҡ ине. Аптырабыраҡ ҡалған урмансы итектәрен эҙләп, һике аҫтына күҙ ташланы — уларҙан да елдәр иҫкән. Күҙ менән ҡаш араһында осҡандар. Бынан ни бары ярты сәғәт элек сискәйне! Әллә ул күрмәгәндә берәйһе йортҡа инеп сыҡҡанмы? Ҡарт, ишекте асып, өй тирәһенә күҙ ташланы. Ат-фәлән күренмәй, берәйһе шаярталыр, тиер ине. Болдорҙа бер аҙ тапанып торғас, кире инергә уҡталғанда, ҡайын башында элеүле ҡара нәмә күҙенә салынды. Аяғына галош элеп, шунда ынтылғайны... саҡ артына ҡоламаны — ағас ботағына итектәре кейҙерелгән, курткаһы елгә елберләй. Етмәһә, мылтығы уларҙы һаҡлапмы, әллә ниҙәндер үҙе һаҡланыу маҡсатындамы, әкрен генә ағаста бәүелә. Бына һиңә мә! Киттең Кәкүк ауылына былай булғас галош һөйрәп...

Хисам ҡарт, ни уйларға белә алмай, болдорға килеп артын терәне. Бөтә кәүҙәһен иҫ киткес хәлһеҙлек баҫҡайны.

Ни эшләргә? Алтынсы тиҫтәне ҡыуып, былай хәлгә тарығаны юҡ. Әмәлгә ҡалғандай, урман эсенән ботаҡ-

тарҙы шарт-шорт һындырғылап, ниндәйҙер мөгөҙлө хайуан килгәне күренде. Оҙаҡ көттөрмәне, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, шунда үҫеп ултырған йыуан-йыуан ағастарға бәрелә-һуғыла, атылып урман эсенән килеп сыҡты. Был сыбар-ала апаруҡ мыҡты кәүҙәле һыйыр ине. Күҙҙәренә ҡан һауған, ауыҙынан һеләгәйе аға, үҙе урынында тороп сыҙай алмай. Әйтерһең дә, ниндәйҙер күҙгә күренмәҫ сыбыртҡы менән туҡтауһыҙ ҡайыҙлайҙар. Хисам ҡарт был көтөлмәгән хәлдән шул тиклем ҡаушаны, хатта йүгереп йортҡа кереп ишекте ябыу мөмкинлеген дә онотто. «Шул!» тигән бер генә һүҙ башына килгәйне. Нишләргә? Атып йыҡҡанда? Ә һуң мылтыҡ? Их! Кисә кисләтеп кенә ветеринар менән ике ир, атты һыбай менеп, урмансы йортона һуғылғайнылар. Колхоздың бер һыйырын ҡоторған эт тешләгән икән. Башҡаларына ҡағылып өлгөрмәгән, атып йыҡҡандар. Ә һыйырҙы иһә һаман таба алмайҙар, ике тәүлек инде ҡайҙалыр ҡыҙыра икән. Мал араһына кереп буталмаҫ элек юҡ итергә тип, артынан төшкән булғандар, таба алмайҙар. Күмәк хайуандарға ҡушылһа — эш харап. Хәҙер иһә тап шул һыйыр үҙ аяҡтары менән уның ҡаршыһына килеп сыҡты, ә ул — көсһөҙ! Бер ни эшләй алмай! Таяҡ тотоп ҡыуып булмай бит инде. Хисам, йәне үртәлеп, аяҡ аҫтына төкөрөп ҡуйҙы. Етмәһә, эҙләргә тырышырмын, тип һүҙ биргән була. Мәүеш! Асыуы ҡабарып, урынынан торорға ғына ынтылғайны, телдән ҡала яҙҙы — ағаста бәүелеп торған ҡушкөбәк йәнләнгән шикелле осоп килде лә тап уның ҡулдары тәңгәлендә аҫылып ҡалды. Устарын һуҙһа, инеп ятасаҡ. Был күренешкә Хисам ҡарт шул тиклем аптыраны, хатта йорт тирәләп ҡоторған һыйыр сабып йөрөгәнен онота яҙҙы. Ни ҙә булһа эшләргә кәрәк, хайуан күҙҙән юғалһа, табыуы ҡыйын буласаҡ. Ҡарт бар ҡыйыулығын йыйып, эсенән генә белгән-белмәгән доғаларын уҡып, ҡулына мылтыҡ алды. Бармаҡтары прикладҡа тейгәс тә, уның ысынлығына ышана алмай, бергилке һиңкәҙәп торҙо әле ул. Ләкин ваҡыт тығыҙ ине. Шуға күрә йорт артына сығып, мөгөҙҙәре менән таштарҙы аҡтарғылап булашҡан һыйырға ташланды. Уныһы әллә сәйер тауышҡа, әллә маҙаһыҙлағанға кәйефе китеп, ҡан һауған күҙҙәрен алартып, урмансыға төбәлде. Әйтерһең дә, ҡарт уның тәүге һанлы дошманы. Тағы бер нисә секунд, һәм ул Хисамды мөгөҙҙәренә элеп, һауаға сөйәсәк. Хайуандың алға ынтылыуы булды, тәтегә баҫырға баҙнат итә алмай торған ҡарт (ни тиһәң дә, ул ауыл кешеһе, өҫтәл өҫтөн мул иткән һыйыр затына кем үҙ теләге менән мылтыҡ тоҫҡай?!) тәүәккәлләне. Маң-

ланының ҡап уртаһына йәҙрә эләккән һыйыр бер аҙ аҡҡы-тиңке килеп баҫып торҙо ла ергә гөрһөлдәне.

Һуңғы ярты сәғәт ваҡыт эсендә булған ваҡиғаларға нисек баһа бирергә белә алмай ҡаңғырған урмансы шундағы сиҙәмгә сүгәләне.

## 15

Ялтырап торған ҡупшы машина урман юлынан килеп сыҡҡанда, Хисам ҡарт һаман да урынынан тормағайны әле. Сигналға баҫтылар, урмансы иһә, быны бөтөнләй ишетмәгән шикелле, ҡыбырламай ултыра бирҙе. Ниһәйәт, ишек асылды. Руль артынан сыҡҡан тәненә һылашып торған салбар, күҙҙәре төҫөндәге зәңгәр блузка кейгән һомғол кәүҙәле ҡыҙ фотоаппаратын иңбашына аҫты ла алға атланы. Хужаның онотолғандай бер нөктәгә төбәлеп хәрәкәтһеҙ ҡалыуын нисек баһаларға белә алмай, бергилке төбәлеп торҙо. Ни ҙә булһа өндәшергә кәрәк ине.

— Хәйерле көн!

Кинәт ишетеп тертләгәндәй, Хисам башын күтәрҙе.

— Һаумыһығыҙ?

— Ә... Эйе... Ни йомош, ҡыҙым?

Борсолоуы йөҙөнә бәреп сыҡҡан ҡыҙ тыныслана төштө, мөләйем йылмайып, ҡартҡа ҡараны.

— Һеҙ урмансы Хисам олатаймы?

— Эйе, балам. Ҡайҙан беләһең?

— Үтеп барышлай Байгилде ауылына һуғылғайным. Ауыл Советынан белештем.

— Ни йомош?

Ҡыҙ, һүҙҙе низән башларға белә алмай, тирә-яғына күҙ йүгертте. Аунап ятҡан ҙур ала һыйыр күҙенә салынғас, берсә ҡартҡа, берсә сиҙәмдә ятҡан мылтыҡҡа гәжәпләнеберәк ҡараны. Инде тыныслана төшкән ҡарт урынынан торҙо.

— Ҡоторған һыйыр ул, ҡыҙым. Бәлә-ҡазанан элегерәк, тәрән соҡорға ырғытырға, йәиһә яндырырға кәрәк. Килеп сығыуың һәйбәт булды әле. Ярҙам итә алаһыңмы?

— Ниндәй ярҙам, Хисам олатай?

— Ветеринарҙы саҡырырға кәрәк. Ә мин һыйырҙы ҡарауыллайым. Ауған нәмәне ботарларға теләүсе табылыр. Байгилделә йәшәй Әхиәров, һорарһың. Булдыра алырһыңмы?

— Әлбиттә. Мин хәҙер! — Машинаға табан йүнәлгән ҡыҙҙы ҡарт ҡул ымы менән туҡтатты.

— Ә, ҡыҙым... Йомошоң нимәлә ине? Килгәсһең, бушҡа йөрөмәйһеңдер?

— Һуңынан, Хисам олатай. Ике һүҙ менән генә һөйләй торған нәмә түгел. Берәй сәғәттән урап килермен.

— Ярай, юлың уңһын.

Машина ҡырҡа боролоп, урман юлынан ҡабат китте. Ул хәрәкәт иткән ыңғайға, юл ситендә үҫкән ҡайын ботаҡтарының дауыл үткәндәй бөгөлөүенә ҡарт иҫе китеп ҡараны. Руль артындағы ҡыҙ быны күрмәне.

— Еңел машина, буғай, үҙе... — Хисам йортона инергә уҡталғайны, кире уйланы. Ни генә булмаҫҡа мөмкин. Эте-бесәйе генә түгел, урман кейеге яңылыштан яҡын юлаһа ла, эш харап. Көтөп ултырыуҙан башҡа сара ҡалмай. Әлеге тиҙлеге менән йөрөһә, моғайын, оҙаҡ көттөрмәҫ. Сәйер, нindәйерәк бала булды һуң был... Ярҙам һорауға ике лә уйламай риза булды. Ҡалай булһа ла, хоҙа ҡөҙрәте менән иң кәрәк саҡта килеп сыҡты, рәхмәт төшкөр.

Ҡарт эсенән генә уҡына-уҡына, кеҫәһенән махорка алып төрҙө. Йыуан кәзә тояғын еүешләп, ауыҙына ғына ҡапҡайны, сығарған шырпыһын ни ҡабыҙырға, ни кире тығырға белә алмай албырғаны — итектәре шым ғына йортҡа табан елдертә, ярайһы таушалған, күпте күргән брезент куртка ла туҙғанмын, тип тормай, аяҡ һауыттарынан ҡалмаҫҡа тырышып ятҡан көнө. Ҡарт ауыҙын асып торған арала, пар итек әкренләп болдорға менеп ултырҙы, куртка мыштым ғына сөйгә барып эленде. Бая мылтыҡ ҡулына килеп ингәндә ҡоторған һыйыр бар булған ҡурҡыуын оҙон мөгөҙҙәре менән һөҙгөләп сығарған икән, әле иһә бөтә был күренештән ағарынды, теҙ быуындары дер-дер ҡалтырана башланы. Кәрәге сыға ҡалһа тип, йәһәт кенә ҡушкөбәген ҡабат эләктереп алды.

Байтаҡ ваҡыт үтте. Урман юлынан Айгөл менән ветеринар ултырған «Вольво», уның артынан йөк машинаһы килеп сыҡҡанда, Хисам ҡарт ниҙелер атырға әҙерләнгән ҡиәфәттә ҡушкөбәген ҡулынан ысҡындырмаған ине әле. Иң тәүҙә Әхиәров күренде.

— Хисам ағай, әллә был мөгөҙлө гүзәл йән эйәһенә дәғүәләшеүселәр байтаҡмы? Һеҙҙең һуғышсан ҡиәфәтегеҙгә ҡарап фекер йөрөткәндә, алла һаҡлаһын булырға тейештер, ахыры,— тине, мәрәкәләп. Ҡартҡа яҡыныраҡ килгәс, көлкөһө һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты.— Бәй, ни булды?

— Бер ни ҙә булманы.— Ҡото алынып ҡурҡыуы тураһында бисә-сәсә шикелле лауылдап тора алмай бит

инде, урмансы урынынан ҡалҡынды.— Онотолоп киткәнмен. Эт-ҡош юлыҡмаһын тип ҡыбырламай ултырғайным...— Тороп, ойоған аяҡтарын яҙа алмай, бер аҙ баҫҡан урынында тапанды.— Әй эттәгенәһе, саҡ ҡына ултырырға ярамай, ҡан ойоша ла китә... Шамил ҡусты, ҡабул ит һыйырыңды, маңлайына атырға тура килде.

— Рәхмәт, Хисам ағай, ҙур бәләнән ҡотҡарҙың.— Әхиәров, боролоп, йөк машинаһындағы ирҙәргә өндәште.— Ҡустылар, ҡулдарығыҙға тышлыҡ бейәләй кейеп ҡуйығыҙ. Машинаға тейәйбеҙ ҙә йәһәтерәк эшен бөтөрөргә кәрәк.

Ала һыйыр тирәһендә мәж килгән ирҙәргә ҡыҙыҡһынып, ыбыраҡ ҡарап торған Айгөлдөң урмансыға күҙе төштө. Был ла сәйер күренгәйне, хәҙер иһә бөтөнләй үҙгәргән. Ни булған уға? Әле Әхиәровтың һөйләүенсә, йылдан ашыу ғына эшләй икән ҡарт бында. Һалҡын аҡыллы, ниңе байтаҡ булһа ла, һаулығы зарланырлыҡ түгел, ти. Әле иһә бер нисә ай ҡуҙғала алмай сирләп ятҡан кешене хәтерләтә. Әллә... Ауылдағы имеш-мимештәр дөрөҫләнәме бында ла? Һүҙсән ветеринар ҡыҙға еткерергә өлгөрҙө бит инде. Быларҙы ишеткәс, тәндәре зымбырлап китһә лә, эсендәге ут-дауылды Айгөл һис кемгә һиҙҙермәҫкә тырышты.

— Хисам олатай!

Ҡыҙҙың өндәшеүенән ҡарт тертләне. Күрәһең, ул ни хаҡындалыр уйланып тора ине. Әлеге мәлдә урмансының килгән халыҡ менән бергә ауыл яғына олағырға ымлалап тороуын Айгөл, әлбиттә, белмәне.

— Мин һеҙгә килгәйнем.

Ҡарт үҙен ҡулға алды. Тимәк, бынан китеү билдәһеҙ ваҡытҡа кисектерелә. Нишләйһең, башҡа сара юҡ.

— Әйҙә уҙ өйгә, ҡыҙым. Тупһа төбөндә тороу килешмәҫ.— Ҡарт тәүҙә йөк машинаһына һыйырҙы тейәп булашҡан ирҙәргә, унан ишек төбөндәге итектәре менән ҡурҡҡаһына күҙ һирпеп алғас, ҡыҙға эскә үтергә ымланы.

Айгөл йорт эсенә атланы. Тупһаны үтеү менән, бар булмышын ошо өй менән бәйле хәтирәләр баҫты. Тамағын быуып килә, ултыр ҙа ила. Ана тәҙрә төбөндәге гөлдәр. Күпереп-күпереп сәскә аталар. Үҙенең шулар янына баҫып, йырлай-йырлай һыу һипкән мәле күҙ алдына килде. Их, ниндәй бошмаҫ булынған! Шул мәлдә бер кемгә эләкмәгән бәхеттең яҡынайыуын һиҙмәнеме икән ни? Һәр хәлдә лә, хәҙерге шикелле түгел бит инде...

Ҡыҙға сәйерһенеберәк ҡараған урмансы уға түргә уҙырға ымланы.

— Йә, ни йомош? Һөйләп ебәр. Яҡын-тирәләге балаға оҡшамайһың. Алыҫтан юлға сығырға, моғайын, сәбәбе булғандыр.

— Мин ниҙән башларға ла белә алмайым, Хисам олатай.— Айгөл, кәрәкле һүҙ таба алмай, тирә-яғына ҡараны. Ни ҙә булһа әйтеүҙе тейешле һанап, ауыҙын ғына асҡайны...— Ай! — Әллә ҡурҡыуы булды, әллә ғәжәпләнеүе — тиҙ генә аңларлыҡ түгел. Стеналағы нәҙек сүс арҡан иҙәнгә һыпырылып төштө лә ҡабат сөйгә барып эленде. Ҡыҙ уны таныны — эйе, ошо тирәләге урмандарға тәү тапҡыр аяҡ баҫҡан көндән ҡалған арҡан ине ул. Айвар мәҙәк күреп, иҫтәлек өсөн тип, стенаға элеп ҡуйғайны. Айвар! Үҙе! Айгөл ултырған урынынан һикереп торҙо.

— Айвар!

Хисам ҡарт һиҫкәнде.

— Ни булды, ҡыҙым?

— Бабай, һеҙ күрҙегеҙме?

— Нәмәне?

— Әле генә ошо арҡан...

Урмансы ҡул һелтәне.

— Эй, балам, ул ғына пүстәк. Минең бында йәшәрлегем ҡалманы инде. Минут һайын ҡабатланып тора ундай әкәм-төкәмдәр. Һуңғы аҙнала бигерәк тә. Аҡылдан яҙырға етештем.

— Тынысланығыҙ, Хисам олатай. Ул һис ниндәй зыян ҡылмай, ышанығыҙ миңә.

— Һы... Һин уны ҡайҙан беләһең, йәп-йәшһең бит әле. Алтынсы тиҫтәне ҡыуып, мин инде шомлана башланым. Ундай-бындайға ышанмай торғайным.

Айгөл ҡарттың янына һикегә күсеп ултырҙы.

— Хисам олатай!

— Эйе.

— Һеҙ был хаҡта арлы-бирле һөйләнеп йөрөмәгеҙ инде, зинһар.

— Бәй... — Ҡарт ни әйтергә белмәне. Тәүге күреүе был баланы. Әллә ҡасандан ошо урман төпкөлөндә көн күргән әҙәмдәй тота үҙен. Аңлашылмай...— Һуң, ҡыҙым... Үҙеңде ҡуйып ҡара минең хәлгә. Олоғайғанмын бит инде, нервылар ҙа таушалған. Етмәһә был әкәм-төкәмдәре...

— Әйтегеҙ әле, тағы ниҙәр булды был йортта?

— Ярай, әләйһә.— Урмансы һаҡалын тызып алды.— Тыңла, ҡыҙыҡһынһаң. Тик торғанда әйберҙәр урынынан күсә башлай, ул әйберме, китапмы, йә иһә һауыт-һаба шалтырарға тотона. Тейгән әҙәм юҡ, ысын бына. Бесәйҙән күрер инем, юҡ — үҙемдең янда ята, йә иһә күҙ ал-

дында йөрөй бит инде. Теге Мотаһарҙың әйткәне ысынға сыға инде, улайһа...

— Кем ул Мотаһар?

— Аҡсатыр ауылынан, тимерсе. Үткәндә минең йорт янынан үтеп барышлай, ниндәйҙер пәрей күргән, тип ауыл тултырып һөйләйҙәр. Көлкөгә күтәреп бөттөләр ул ирҙе. Уныһы бер хәл. Тағы бер ир, шул Мотаһарҙың күршеһе була инде, бәхәсләшеп, зыяратҡа барған икән. Ҡайҙан соҡоп сығарғандарҙыр, бына мин йәшәгән йорттоң элекке хужаһы үткән йыл ҡыш үлеп ҡалғайны, мәрхүмең. Тап шуның ҡәберенә, аптырамаҫлыҡ та түгел.

Ҡыҙҙың йөҙө ағарынды, кинәт ҡысҡырып ебәрмәҫ өсөн, ауыҙын баҫты. Ҡарттың һөйләмәй ҡуйыуынан ҡурҡты, буғай, ҡыҙара төшөп, ғәйепле ҡиәфәттә ғәфү үтенде.

— Дауам итегеҙ инде, Хисам олатай. Шунан ни булған?

— Уныһы миңә ҡараңғы, кеше ни һөйләмәй. Әйтәгүр, Ниғмәтйән — әлеге тимерсенең күршеһе—хәҙер больниста ята. Нервыһы ҡуҙғалған, тиме. Бына бит, эштәр нисегерәк тора. Ә һин кешегә артығын һөйләмә, тиһең. Һөтә мир белә был хаҡта.

— Хисам олатай!

— Әү, ҡыҙым.

— Ә ул үҙенең донъяла барлығын бына беҙгә, кешеләргә, нисек тә булһа белдерергә тырышмаймы икән, тим?

— Нисек? Кем?

— Рух. Элекке урмансының рухы.

Карт ҡыҙға аптырабыраҡ ҡараны.

— Ә һин уны ҡайҙан беләһең?

Айгөл көрһөндө. Бәреп сыҡҡан ҡуйы ҡыҙыллыҡты йәшерергә теләгәндәй, битен устары менән баҫты.

— Мин уны белә инем шул, Хисам олатай. Бик яҡшы белә инем. Хатта артығыраҡын да...— Урмансының ғәжәпһенгән күҙҙәренә бергилке төбәлеп торҙо ла тәүәккәлләне. — Унан ҡурҡмағыҙ, Хисам олатай. Һеҙгә бер ниндәй яуызлыҡ ҡылмаясаҡ ул. Киреһенсә, үҙегеҙҙе һаҡ ҡастында тип тоя алаһығыҙ. Бары тынысланығыҙ, шул ғына.

— Һуң... ҡыҙым...

— Ни әйтергә теләгәнегеҙҙе аңлайым.— Айгөл йәш бәреп сыҡҡан күҙҙәрен ҡайҙа төбәргә белә алмай ыҙаланды.— Әлбиттә, ғәҙәти түгел... шомландыра. Ләкин... Уның бер ҡасан зыян эшләгәне булманы, яҡшылыҡтан башҡаны кешеләр унан күрмәнеләр. Кәүҙәһе һуңғы һу-

лышын алғанда ла, кемделер бәләнән ҡотҡарып йөрөгән. Саҡ ҡына ҡайтып өлгөрмәне...

— Ҡайҙа? Ҡайҙа тиһең, ҡыҙым?

— Үҙенең кәүҙәһенә. Ысын, Хисам олатай.— Айгөл ҡарттың аптыраулы йөҙөнә күҙ һирпеп алды ла артабан дауам итте. Һөйләргә икән һөйләргә. Йәшереүҙән хәҙер бер файҙа юҡ.— Ул урмансының исеме Айвар ине. Беҙ уның менән осраҡлы ғына таныштыҡ. Хәйер, бының инде әһәмиәте юҡ хәҙер. Бер һүҙ менән әйткәндә, тере сағында уҡ уның икегә бүленә алыуын мин генә беләм инем. Кәүҙәһе йортонда ҡала, ә рухы, әҙәм ҡиәфәтен алып, дала-урмандарҙы гиҙә, кешеләр араһында йөрөй, аралаша, ярҙам итә. Бик күптәр изгелек күреп өлгөрҙө унан, ғүмерҙәренең һаҡланыуы менән уға бурыслы әҙәмдәр байтаҡ был донъяла. Ләкин бер мәл... бер мәл ҡайтып өлгөрмәне ул Рух. Кәүҙәһе янына Әҙәм аяҡ баҫты. Һәм ошо минуттан алып ул кәүҙәнән, кәүҙә Рухтан айырылды. Мәңгелеккә... Хәҙер ҡабат кешелек менән аралашырға тырыша. Күрәһең, был мөмкин түгелдер...— Ҡыҙ урынынан торҙо. Ялбарыулы ҡараштарын урмансыға төбәне.— Үтенеп һорайым, зинһар, артығын һөйләмәгеҙ. Кешеләрҙең төрлөләре бар, йортон яндырырға маташырҙар. Минең уйымса, был өй — уның һуңғы терәге. Тәьҫире был тирәлә генә ныҡ һиҙелә, буғай.

Хисам ошо йәш кенә ҡыҙҙың һөйләгән хәбәренән һеңгәҙәп ултыра ине.

— Һуң... Мин...

Айгөл кескәй сумкаһынан фотоһүрәт сығарҙы.

— Ҡарағыҙ, бына ул Рух. Мине эҙләгән ул, ышанам быға. Хәҙер мин уның донъяла барлығын беләм, башҡаһы кәрәкмәй ҙә. Моғайын, тыныслыҡта ҡалдырыр, маҡсатына ирешә бит инде. Бынан һуң шомланмай йәшәгеҙ. Әгәр ҙә тап шундайыраҡ хәл була ҡалһа, тыныс ҡабул итегеҙ. Ә мин уны эҙләйәсәкмен. Осрашҡанға тиклем.

— Ҡурҡмайһыңмы... ҡыҙым?

— Ә уның нәмәһенән ҡурҡырға? Тере сағынан уҡ белә инем бит. Ысын кешене генә түгел, тап әлеге...— Тейешле һүҙҙе таба алманы Айгөл. Урмансы былай ҙа аңлағайны инде.— Ләкин нисек осратырға? Көн яҡтыһында күренмәй. Ә төндәрен... Һәр саҡ хасил буламы икән?

— Белмәйем, ҡыҙым. Күргәнем юҡ.

— Хисам олатай, теге тимерсе ҡайһы ауылда йәшәй?

— Аҡсатырҙа. Әллә һөйләшергә уйың бармы?

— Риза булһа. Барып ҡарайым әле, юл барыбер шул тирәнән үтә бит.— Ҡыҙ әйберҙәрен алды.— Ярай, Хисам олатай, ғәйепкә алмағыҙ. Мин тағы килеп сығырға тырышырмын. Әйткәндәрҙе онотмағыҙ инде, зинһар, йәме?

— Ярай, ярай, хафаланма. Һинең кеүек йәп-йәш ҡыҙ бала ҡурҡмай үҙе осрашыу эҙләгәндә, минең башта кәпәс бар бит әле.— Ҡуҙғалып киткән машинаға бергилке ҡарап торҙо ла, башын сайҡап, йортҡа инеп китте.

## 16

Йәненә тынғы таба алмай бәргеләнеүенә йыл ярым тигәндә, Рух тәүге тапҡыр үҙ асылына ҡайтты. Ул инде хәҙер бер кемде лә борсомаясаҡ. Әгәр ҙә фани донъя кешеләре өсөн уның менән параллель йәшәү фажиғә икән — китәсәк ул. Мәңгелеккә... Ләкин аҙ ғына сабыр итһендәр ине. Рух белә — ҡабат киләсәк был ҡыҙ. Ошо мәлгәсә түҙһен ине был әҙәмдәр. Ҡоттары алынмай, ауырыуға һабышмай ғына... Уға бит күп кәрәкмәй — бер генә осрашыу, артығын һорамай ҙа...

Эй кешеләр... Үҙҙәрен мәңгелек тип уйлай торғандарҙыр. Бер заман уның хәленә ҡалырҙарын белмәйҙәр шул. Саҡ ҡына мәрхәмәтлерәк булырҙар ине. Хәйер... Уларға ни үпкә. Физик кәүҙәләре бирә алған көстәренә таянып, ғүмер һөрәләр. Ғәләмдең улар уйлағанға ҡарағанда күпкә киңерәк, ҡатлаулыраҡ икәнен төшөнөп бөтмәйҙәр. Ни өсөн мәңгелек йән, әҙәм кәүҙәһенә эләгеү менән, күп нәмәне ҡабул итеүҙән мәхрүм? Аңлайышһыҙ... Бәлки, ер кешеләре өсөн был яҡшыраҡтыр ҙа. Рух кимәлендә ҡылынған яуызлыҡ күпкә фажиғәлерәк. Ә кешелек түбән инстинкттарҙан арына алмай. Мөмкин түгел кеүек хатта. Ҡыҙғаныс...

Күсермә, Рухҡа әйләнеү менән, был донъя менән бәйләнгән күп мөмкинлектәрен юғалтты. Уны хәҙер бер кем дә кеше итеп ҡабул итмәйәсәк. Фани донъя өсөн ул үлгән, ә үҙенә ҡасандыр ваҡытлыса булған икенсел үлсәмгә күскән йән хәҙер тотошлайы менән уға ғына буйһона. Кешеләрҙең ҡоттарын алған ап-аҡ әҙәм һыны мәңгелектең осһоҙ-ҡырыйһыҙ дарьяһында таралып тигеҙләнергә өлгөрмәгән тулҡын шикелле. Бер заман ул да бөтәсәк. Өлгөрөргә ине шул мәлгә тиклем... Улайһа ғүмер баҡый йәненә тынғы булмаясаҡ. Был тормоштағы хатаһы өсөн, ул йәшәйәсәк артабанғы әҙәм кәүҙәләре яфаланасаҡ. Бына бит эштәр нисегерәк тора. Барыһы ла бер-береһе менән бәйләнгән был донъяларҙа.

Болоттар араһынан күктән ергә йәнә ай баҡты. Ул көмбәҙгә күтәрелә барған һайын, Рух үҙендәге ҡөҙрәттең икеләтә, унлата артыуын тойҙо. Ана ул Ай! Сихри көстәр аллаһы! Тулы батмандай булып йөҙөн Ергә ҡарап төбәгәндә, кешелек үҙенең тулыһынса тиерлек уның ихтыярына күсеүен белмәй. Бәлки, айырым әҙәм йәндәре генә һиҙенәлер, ләкин был оло дарьялағы тамсы ғына. Ерҙең юлдашы, тиҙәр уны. Ай-һай, шулаймы икән. Бәлки, тап киреһелер ҙә... Бәлки, Ай, көнө-төнө сәңгелдәктән күҙен алмаған әсә шикелле, Ер планетаһын һаҡлай торғандыр. Юҡҡамы ни үҙенә бары руханиҙарҙың йәндәрен ҡабул итә... Шул мәл Рух күктә йөҙгән түп-түңәрәк Айҙың тыйылғыһыҙ көс менән уны үҙенә тартыуын тойҙо. Ул аңланы — Ерҙәге көндәре һанаулы ғына ҡалған. Әле ул бар хәленсә ҡарыша. Бер генә, ике генә көнгә... Киләһе Ай тулған мәлгәсә булһа ла... Ҡапҡа асыла... Мәңгелектең ҡапҡаһы... Юҡ! Китә алмай! Ерҙә уның эше ҡалған!

Ә һуң... ни өсөн Ай уны үҙенә саҡыра? Дингә бер ниндәй ҡыҫылышы булғаны юҡ та баһа! Сихри көстәр аллаһы уны Донъяны Барлыҡҡа Килтереүсегә яҡынайта. Ғәҙәти әҙәмдәр менән сағыштырғанда, бер баҫҡысҡа юғары ҡуя түгелме һуң? Ә, эйе... Уның бар ҡылыҡ-эштәрендә ошо сәйер тәғлимәт нигеҙендә ятҡан төп ҡанундар ине бит. Бар ғүмере, һәр хәлдә ғүмеренең һуңғы өлөшө кешеләргә изгелек ҡылыуҙан торҙо. Бына ни өсөн Ай саҡыра уны үҙенә. Ләкин хәҙер түгел! Бер генә көнгә, бер генә аҙнаға һуңлабыраҡ!

Рух ҡаршы торғоһоҙ тартыу көсөнөң кәмеүен тойҙо. Ап-аҡ түңәрәккә табан ынтыла башлаған һын, күктә аҫылынып торғас, әкрен генә ҡабат ергә төштө.

«Рәхмәт... Мин үҙем йәшәйәсәк әҙәмдәрҙең әлеге тормошомдоң хатаһы өсөн ыҙаланыуҙарын теләмәйем. Донъялағы донъялыҡта ҡылынырға тейешле. Саҡ ҡына ваҡыт бир миңә. Мин килермен һиңә, көт...»

Рух төн ҡараңғылығында таралып юҡҡа сыҡты. Ә күктә тулған Ай йөҙә. Кешеләр иһә тап ошондай көндәрҙә үҙҙәренең ни өсөн башҡасараҡ булыуҙарын белмәйҙәр. Айҙы Ерҙең юлдашы, тиҙәр. Шулаймы икән?

## 17

— Мөмкинме?

Йорт ҡаршыһына килеп туҡтаған машинаны күреп тәҙрәгә ябырылған Хөснә еңгәнең универсаль «Атағата-

ны» һөйләү органынан атылып сығырға ла өлгөрмәне, тупаш болдорҙан менеп еткәйне.

— Инергә яраймы? Һаумыһығыҙ?

— Арыу ғына...— Еңгәбеҙ үҙ ғүмерендә тәүге тапҡыр телһеҙ ҡалды. Ете ят, етмәһә, сибәр йәп-йәш ҡыҙҙың көпә-көндөҙ йорттарына килеп инеүен нисек юрарға белә алмай аптыранып торғанда, тегеһе йәнә телгә килде.

— Мотаһар ағай өйҙәме?

Быныһы инде сәпсим. Хөснә башына килгән елле фекерҙең дөрөҫләнеүенә пыжылдап тоҡанып китергә өлгөрләнеп кенә бөткәйне, тышта аяҡ тауыштары ишетелде.

— Иҫәнлек-һаулыҡмы? Ҡунаҡтар бар икән.— Ишектән ингән Мотаһар ҡулындағы тимер киҫәктәрен мейес артына ҡуйҙы.— Уҙығыҙ, һеңлем. Һеҙ миңәме? Эҙләгәнегеҙҙе әле генә тимерлектә ишеттем дә тура йортҡа һыпырттым.

— Рәхмәт, ағай.— Апай кешенең күҙендә уйнаған ялҡылы-йәшелле уттарҙан иҙәнгә һеңергәме, сығып ҡасырғамы белә алмайыраҡ торған Айгөлдөң йөрәгенә йылы инеп китте.— Мин оҙаҡҡа түгел.

— Оҙаҡҡамы-юҡмы, килгән кешене ишек төбөнән борол ебәрмәйҙәр беҙҙә. Ҡана, бисә, йәһәт кенә сәйеңде өлгөрлә. Бер ыңғай тамаҡ та ялғармын.

Хөснә, тырт-пырт итергә уйлабыраҡ торған еренән, ингәгеп-ыҙалап алғы фасадына ҡунаҡсыллыҡ гәләмәтен төрткөләп сығарҙы. Йәмәғәтенең ҡыҙып китә торған ғәҙәте ҡуп итеп хәтеренә йығылып төшкәйне йәғни мәҫәлән.

— Хәҙер, хәҙер, атаһы,— тигән булды. Үҙенең ике ҡолағы метр ярым булып был яҡҡа һуҙылды. Таныш түгел ҡыҙ менән хәләл ире араһында барған һөйләшеүҙең serep өтөрө лә ҡасып китерлек түгел.

— Борсоғаным өсөн алдан уҡ ғәфү үтенәм, Мотаһар ағай.

«Атағатаҡ! Бигерәк культурный икән, әҙәм ыстырамы!»

Айгөл туфлиҙарын һалып, түрьяҡтағы ултырғысҡа үтеп ултырҙы. Машина асҡысын әле бер ҡулына, әле икенсеһенә күсерҙе. Уның һүҙҙе низән башларға белә алмауын күреп, тимерсе үҙе лә артын диванға барып терәне.

— Йә, йә, һеңлекәш, ҡаушамай ғына. Ни йомош, тура ғына әйт тә ҡуй. Әллә берәй хәбәрсеһеңме?

— Юҡсы, ниңә улай тиһегеҙ?

Мотаһар ҡулын һелтәне.

— Ҡуй инде, башты ҡатырҙылар бит. Тып-тыныс йәшәп ятыла ине, хәҙер көн бөттө. Әле түҙерлек, тәүҙә бигерәк ҡаңғырталар ине.

— Һеҙ... әлеге имеш-мимештәр хаҡындамы ни?

— Бына бит, ят кеше булһаң да, белеп өлгөргәнһең. Тәүҙә көлкөгә күтәргәйнеләр, минең күрше менән булған хәлдән һуң, барыһы ла ҡыҙыҡһынырға булдылар ҙа киттеләр. Ниғмәтйәндең ни өсөн ауырып йығылғанын да аңлатырға тейешмен булып сыға. Вәт донъя...

— Үпкәләмәгеҙ, Мотаһар ағай... — Айгөл тимерсегә күтәрелеп ҡараны.— Мин дә ошо хаҡта...

— Йә, ярар.— Тимерсенең тауышы йомшара төштө,— Күрәһең, миңә яҙғандыр. Ләкин бер нәмә аңлашылмай— ни өсөн ғәфү үтенәһең? Үҙең ғәйепле шикелле...

— Былай ғына... Әйтегеҙ әле, һеҙ уны ысынлап күрҙегеҙме?

— Эйе, һеңлем. Ысынлап.

— Ниндәйерәк ул? — Ҡыҙҙың тауышы ҡалтыраныбыраҡ сыҡты. Мотаһар сәйер ҡунағына йәнә бер күҙ һирпеп алды. Ҡыҙыҡ, ни өсөн кәрәк булған ул пәрей был йәп-йәш сибәр ҡыҙға. Шулай ҙа төпсөнөргә баҙнат итмәне.

— Ниндәй тип... Ап-аҡ, үтә күренмәле ине, шикелле. Әҙәм һыны инде, ир кешене хәтерләтте. Оҙаҡ ҡараманым, тураһын әйтәм, йөрәк етмәне. Нисек ҡайтып еткәнемде лә белмәйем хатта.

— Ҡайһы тирәлә күрҙегеҙ?

— Урмансы йорто эргәһендә.

— Ә Ниғмәтйән ағай... ни өсөн тап уның ҡәберенә барған һуң? Элекке урмансы ҡәберенә?

— Һм... һүҙ йөрәй бит, һеңлекәш. Ни Хәтмулла ағай, утҡа май өҫтәгәндәй, әллә ниндәй тарихтар һөйләп ташланы. Ул егет тере сағында ниҙер күргәнме шунда. Ошонан килеп сыҡты ла инде бар әкәмәт.

— Сәйер...

— Нимәһе сәйер?

— Юҡ, былай ғына... Ниндәй көн булды был хәл, Мотаһар ағай?

— Иҫләмәйем, туғаным. Әйтәгүр, төн уртаһы етеп килһә лә, яп-яҡты ине.

— Яп-яҡты?

— Эйе. Ә ниңә?

— Тимәк... Тимәк... Нисәһе булған икән? — Айгөл кинәт башына килгән фекерҙән һиҫкәнде.— Ай тулған төн?.. Миңә ҡайтырға кәрәк, Мотаһар ағай.

— Бәй, килгәс-килгәс, өҫтәл артына ултырмай китеү килешмәҫ.

— Юҡ, ағай, һөйләгәнегеҙ өсөн рәхмәт.— Ҡыҙ ишеккә йүнәлде.

— Ә, һеңлем, — Хужа инде сыға башлаған ҡыҙға өндәште,— һеҙ кем булаһығыҙ? Әйтмәнегеҙ ҙә...

— Исемем Айгөл минең. Элекке урмансының дуҫы.— Кыҙ артына бороллдо, әллә нисек сәйер итеп йылмайҙы. Хужа аптырабыраҡ тороп ҡалды. Иҫенә килеп тәҙрәгә күҙ һалғанда, еңел машина урынынан ҡуҙғалғайны.

### 18

Бүлмәлә яңғыҙы ғына ҡалыуын Надим көс-хәл менән көтөп алды. Ятаҡханала бергә йәшәгән иптәш егеттәре ырай ҙа, мәшәҡәт табып, төрлөһө-төрлө яҡҡа сығып олаҡты. Хәҙер башлаһа ла була. Ни өсөн башҡаларға һиҙҙермәҫкә тырыша, үҙе лә аңламай. Кисә уны Айгөл эҙләп тапты. Ҡыҙға шулай ҡапыл кәрәгеүенең сәбәбен аңларға маташып, мейеһенең ҡап уртаһына йыуан һорау билдәһе әүәләргә лә өлгөрмәне, тегеһе ай-вайына ҡарамай, урамға алып сығып китте. Был рәүешле әсир төшөргә егет ҡаршы түгел ине, әлбиттә.

— Надим, үпкәләмә, зинһар, эшеңдән бүлдерһәм дә...

— Ниндәй эш булһын инде хәҙерге мәлдә,— тигән булды егет. Тимерҙе ҡыҙыуында һуғып ҡалайым, тигәндәй, Ағиҙел яғына иҙәне.— Бәлки, был яҡҡа юл тоторбоҙ? Хәҙер бигерәк йәмле унда. Белһәң...

— Надим!

— Әү!

— Бына күрәһеңме?

— Нимәне? Фотоаппарат? Тағы ла тарихи һүрәт яһарғамы?

Айгөл егеттең ҡаршыһына сығып баҫты. Күҙҙәрендә ялбарыуымы, әллә ниндәй сәйер өмөтмө — ниҙер бар ине. Был ҡараштан егеттең үҙенә лә ҡыйын булып китте.

— Надим! Минең һиңә бер үтенесем бар. Тик арлыбирле һөйләмә инде, зинһар. Һүрәткә төшөр мине. Яңғыҙымды ғына.

— Ниңә, әллә яңғыҙың төшкән фотоһүрәттәрең юҡмы? Миндә улар бер ҡосаҡ, теләһәң, бүләк итәм.

— Эш унда түгел. Иҫеңдәме, үткәндә Ағиҙел ярында группа менән төшкән инек бит. Шундағыларҙың берелен ҡабат күрһәткәйнем үҙеңә...— Ҡыҙ, артабан ни әй-

тергә белә алмай, туктап ҡалды, башы түбән эйелде. Унан, кинәт тәүәккәлләгән кеше ҡиәфәтендә, дауам итеп алып китте.— Унда мин үҙем генә түгел инем бит. Һин яңғыҙымды ғына төшөрһәң дә... Минең асыҡлайһым килә. Әле лә шулай булырмы икән...

Надим аптырашта ҡалды. Ысынлап та, сәйер һорау. Ләкин баш тарта алмай бит инде.

— Ярай, Айгөл, төшөрөрмөн,— тине һаман да ҡыҙҙың үтенесенә ғәжәпләнеүен йәшерә алмай.— Тик берәй үҙгәреш булырмы икән. Үткәндәгеһенең пленкаһы алама булғандыр, тип уйлағайным. Ни нәмәһенә шундай әһәмиәт бирәһеңдер.

— Кәрәк, Надим, кәрәк.

— Йә, ярай. Ҡайһы тирәгә баҫаһың?

...Надим фотоҙурайтҡыс приборҙы сумаҙанынан һөйрәп сығарҙы, һауыттарға фиксаж һәм һүрәт сығарыусы шыйыҡса ағыҙҙы. Тәҙрә ҡорғандары ярай ҙа ҡалын, ҡояш байып өлгөрмәгән, юғиһә. Ҡараңғы төшкәнен көтөп ултырһа, бүлмәлә яңғыҙы була алмаясаҡ. Ни өсөн иптәштәренән йәшерә ул? Үҙе лә белмәй...

Барыһы ла әҙер, шикелле. Үрелеп стеналағы браға ҡыҙыл лампа бороп ҡуйҙы. Тирә-яҡҡа, күҙҙең нурын алып, инфраҡыҙыл яҡтылыҡ таралды. Бына ул пленка. Бөгөн үк эшләргә йыйынғас, һуңғы кадрҙарға әллә ниндәй әкәмәттәр төшөрөп бөттө. Урамдағы салыш ҡойма менән берәҙек эт тә ситтә ҡалманы, ахыры. Әммә әлеге мәлдә уны бер генә нәмә ҡыҙыҡһындыра — Айгөл төшкән һүрәттәр. Ҡыҙ шундай үтенеп һораны, күҙҙәре тәгәрәп төшөргә йыйынған муйылдай мөлдөрәп тора ине, юғиһә.

Фотоҙурайтҡыс аҫтынан тартып сығарған беренсе һүрәтен шыйыҡсаға батырҙы. Ана, тәүге һыҙаттары күренде. Әкрен генә асыҡлана бара — Айгөлдөң сәстәре, йөҙө, кейгән күлдәге һәр бер йөйөнә тиклем. Бәй! Ҡыҙға иҫе китеп ултыра торғас, иғтибар ҙа итмәгән, имеш — янында ниндәйҙер егет һыны! Надим шул тиклем аптыраны — һүрәтте батырып-ҡалҡытып ултырған ҡыҫҡысы шыйыҡсаға шап итеп ҡалды, һыу тамсылары тирә-яҡҡа сәсрәне. Иҫенә килгәндә, фотоһүрәт ҡарайғайны инде, бер нәмәне асыҡ күрерлек түгел. Надим, иҫенә килә алмай, байтаҡ ултырҙы. Тыныслана төшкәс, эш яйға китте. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, йәйеп һалынған гәзит өҫтөнә байтаҡ һүрәттәр теҙелгәйне. Эйе, дөрөҫ — ҡыҙ үҙе генә түгел. Яңғыҙ төшкәндәрендә лә... Нисек аңларға быны? Фотоаппарат уның ҡулдарында ине. Яңылышыуы мөмкин түгел. Надим үҙе булған фотоларҙы алып ҡара-

ны — быларында бер кем юҡ. Башҡа сара ҡалмай — Айгөлдөң үҙенән һорарға тура килә. Надим тиҙ-тиҙ генә өҫтәл өҫтөндәге әйберҙәрҙе урындарына йыйыштырып ҡуйҙы, фотоһүрәттәрҙең кибеүен дә көтмәй, гәзиткә урап һәм кейенеп урамға сыҡты.

## 19

— Һин бик тиҙ! — Айгөл ишекте асып, Надимды эскә үткәрҙе. Егет өндәшмәй генә алға атланы. Унын ҡулында уралған төргәкте күреп, ҡыҙ ғәжәпләнеберәк ҡалды.— Әллә эшләнең дәме? Ҡайҙа, күрһәт әле.

Айгөл ҡабаланып төргәкте һүтә, бармаҡтарына эләгеп, гәзиттең йыртылыуына ла иғтибар итмәй хатта. Егет ишек яңағына һөйәлгән һәм уға ҡараған. Эйе, һиҙенеүе алдамаған, тимәк — ҡыҙ ниҙелер йәшерә. Дөрөҫөрөгө, белә, бәлки, әйтә алмайҙыр... Донъяла ниҙәр генә булмаҫҡа мөмкин. Фотола яңғыҙы ғына булмаҫына ышанып, Надимға килгән ул. Башҡа бер кем янына түгел, бары уға... Был уйҙарынан егеттең күңелендәге ауыр тойғолар тарала төштө. Һәр хәлдә ошо мәлдән алып ул ҡыҙҙың ниндәйҙер серен һаҡлай, буғай.

— Йә, ни әйтерһең?

Ҡыҙ фотоһүрәттәргә мөкиббән төбәлгән, Надимдың һорауын ишетмәне лә шикелле.

— Шул! Үҙе!

— Кем ул... Айгөл? Бәлки, аңлатырһың?

— Надим... Нисек әйтергә... — Егеттең һаман да ишек төбөнән ары үтмәүен яңы ғына күреп ҡалды, ахыры.— Әйҙә, үт бында. Ни эшләп унда тораһың? — Надим туфлиҙарын һалып, эскә атланы. Ул тирә-яғына күҙ йүгертеп торған арала, ҡыҙ йылт итеп аш бүлмәһенә инеп юғалды. — Әсәйем менән атайым эштәләр, — тигән тауыш ишетелде унан. Сәйнүккә һыу ағыҙып, газ плитәһендә булышты, буғай. Бер аҙҙан ҡыҙ үҙе лә күренде. — Килеүең һәйбәт булды. Әллә ниңә эс боша. Бер кем менән сер уртаҡлаша алмайым. Атайым да, әсәйем дә ышанмайҙар. Һөйләй башлаһаң, сәйер ҡарауҙарын һиҙәм...

— Һин ни хаҡта, Айгөл?

Ҡыҙ уны ишетмәгән шикелле дауам итте.

— ...Ә бына һиңә, ни өсөндөр, таянып булған кеүек тойола миңә. Ярҙам һорамайым һинән, бары тыңла һәм... ышан. Шул ғына.

Надим инде башҡаса һорауын ҡабатламаны. Кәрәк тапҡанын ҡыҙ үҙе лә һөйләйәсәк — бына нәмәне аңланы ул.

— ...Беләһеңме, һин бөгөн минең ышанысымды нығыттың. Мин фотоһүрәттәр хаҡында әйтәм. Ундағы егет һыны кем, тигән һорау һиңә тынғылыҡ бирмәйҙер. Хәҙер әйтә алам, ул — Рух, үлгән кешенең рухы!

Надим һиҫкәнде. Арҡаһына әллә эҫе һыу, әллә һалҡын һыу ҡойҙолар.

— ...Айгөл... һин... нимә? Ысынлапмы?

— Эйе. Ғәжәпләнмә ул тиклем. Барыһын да белһәң, тағы ла ныҒыраҡ аптыраясаҡһың.

Ҡыҙ һөйләне лә һөйләне. Ваҡыты-ваҡыты менән егеттең бүлмәлә икәнлеген дә онотҡандай тойола ине. Шундағы диванда, ҡыҙҙың ҡаршыһында ултырған Надим саҡ ҡына тауыш сығарырға ла ҡурҡа — Айгөл һиҫкәнер ҙә башҡаса дауам итмәҫ кеүек күренә уға. Моңһоу күҙле ошо уйсан ҡыҙҙың тарихын тыңлағас, егеткә үҙенең тормошо ғәйәт төҫһөҙ, һоро кеүек тойола башланы. Күпте күргәнмен, донъяның әсеһен дә, сөсөһөн дә етерлек татығанмын, тип йөрөүе буш ҡыуыҡ шикелле икән дә һә. Ә был баланың тасуирлағаны...

— ...Уны күмгән ваҡытта мине сәйер бер тойғо ҡалдырманы — әйтерһең дә, үҙен ерләгәнде ситтән күҙәтеп тора. Яңғыҙым урман эсенә китеп ҡараным, ләкин әләгерҙәй төйөн табылманы. Шунан атайым менән ул ауылдан ҡайтып киттек, башҡаса барғаным булманы. Элекке көнгә саҡлы. Унда ниҙәр ишеткәнемде беләһең.

— Хәҙер ни эшләргә уйлайһың?

— Осрашыу эҙләйем мин, аңлайһыңмы? Ләкин ниндәйҙер ҡаршылыҡ бар бында. Ниндәй икәнен әйтә алмайым. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы...

— Һуң, уйлап ҡара, был бит уйын эш түгел. Йөрәгеңдең күтәрмәүе бар.

— Ә ниңә? Тере сағында шул уҡ ине бит. Хәҙер кәүҙәһе юҡ, ошо ғына айырма.

Надим урынынан торҙо, тәҙрә янына баҫып, тыштағы ҡала шауын, өҙлөкһөҙ хәрәкәтте күҙәтте. Былар барыһы ла үтә сәйер — Айгөлдөң әлеге һөйләгәндәре һәм, бер ни булмағандай, һәүетемсә йәшәп ятҡан ҡала. Икеһе бер һыҙыҡҡа һыймаған кеүек. Ләкин һыя, һәм параллель йәшәп яталар. Ғәжәп...

— Мин һиңә ярҙам итә аламмы, Айгөл?

— Нисек осрашырға миңә уның менән, Надим?

— Белмәйем шул. Туҡта әле, үҙең әйтәһең бит, төн уртаһында, яп-яҡты булғанда күргәндәр, тиһең. Бәлки,

һиңә лә... — Артабан дауам итергә егеттең теле әйләнмәне. Йәп-йәш ҡыҙ балаға ирҙәр күтәрә алмаған һынауҙы тәҡдим итеү бәғерһеҙлек булып тойолдо.

— Ысынлап та. Мин дә уйлаған инем был хаҡта. Һике кеше бер юлы оҡшаш һығымтаға киләләр икән — тимәк, ниҙер бар. Тәүәккәлләйем!

— Айгөл... — Надим әйтергә теләгәнен эсендә ҡалдырҙы. Сөнки ҡыҙҙың йөҙөнә ҡарау менән, быныңфайҙаһы юҡлығын күрҙе ул. Шуға күрә теле уйлағанының ғап киреһен әйтте.— Мин дә һинең менән барам. Яңғыҙыңды нисек ебәрергә мөмкин?

— Рәхмәт, Надим, ярҙамың өсөн. Ләкин... ғәфү ит, мин үҙем генә булырға тейешмен. Аңлайһыңмы, мөмкинлеге була тороп та, осрашырға теләмәүе бар. Иң ҡурҡҡаным шул.

— Ярай, аңлашыла, Айгөл.— Надим урынынан торҙо. — Мин ҡайтайым. Ә һин ҡасан...— Егет һөйләмен нисегерәк төҙөргә, дөрөҫөрәге, ни тип һорарға белә алмай ине. Айгөл аңланы.

— Мин, моғайын, урмансы йортона барырмын. Унда уның йоғонтоһо нығыраҡ һиҙелә. Таба алһам — бары шунда ғына.

— Уңыштар теләйем.

— Рәхмәт.

Надим ишек тотҡаһына үрелгәс, ҡабат әйләнде.

— Ҡасан юлға сығаһың?

— Ай тулғанды көтәм. Әгәр төн аяҙ икән, башҡа ҡаршылыҡтар булмаҫтыр, тим.— Айгөл ишекте япҡан еренән кире асты.— Рәхмәт һиңә, Надим.

— Ни өсөн?

— Аңлағаныңа.

— Әгәр кәрәгем тейерҙәй булһа саҡыр. Мин һиңә һәр саҡ ярҙам итергә әҙер.

— Онотмам.

Ишек ябылды. Надим стенаға һөйәлде. «Хуш, һөйөүем... Ул уны бер ҡасан да онотмаясаҡ. Йөрәгенән ҡыҫырыҡлап сығарыуы мөмкин түгел...»

## 20

Йөрәге күкрәгенән сығырҙай булып тибә. Ниңә шулай дөп-дөп килә ул? Ҡурҡамы Айгөл, әллә ниҙер булырын һиҙенеүе ошомо? Ҡалай булһа ла, күңеленән һиллек киткән. Бер кем дә ебәрмәне уны бында, ҡыҙ үҙ теләге

менән килде. Шулай ҙа... әллә дөрөҫ эшләмәнеме? Фа
нилыҡтан киткәндәрҙең рухын ҡарауыллап ҡына, ула
ҙы яҡты донъяларға ҡайтарыуы мөмкин түгелдер. Н
өсөн ошондай ябай ғына хәҡиҡәтте лә аңларға теләмә
һуң Айгөл? Их, Айвар ябай кеше түгел ине шул. Әгәр ҙ
гәп-ғәҙәти булһа, ҡыҙ ҡабаттан осрашыу мөмкинлө
генә өмөтләнмәҫ ине. Артыҡ көслө ялҡын булды еге
һәм шуға ла тиҙ дөрләп һүнде. Ә ҡыҙ ышана... Үлгәндә
һуң да, уның үҙенең рухы менән идара итеренә ышан.

Һәр шылт иткән тауышты ситкә ебәрмәҫкә тырышы
тирә-яҡты күҙәткән Айгөл, ҡыбырларға ла ҡурҡы
урмансы йортоноң алдында үҫеп ултырған йыуан ҡа
йынға һөйәлгән. Бына йортта уттар һүнде. Хисам бабай
тимәк, йоҡларға ятты. Хәйер, ышанмай, юрый, ҡыҙҙ
тынысландырыр өсөн, һүндергәндер. Асылда иһә, тәҙр
ҡорғанын саҡ ҡына күсереп, Айгөлдө күҙәтә торған
дыр.

Бер ниндәй һөҙөмтәһеҙ әйләнеп ҡайтырмы икән ни
Ә бит өмөтләнгәйне, сикһеҙ өмөтләнгәйне... Күрәһең
мөмкин булмаҫтай нәмә хаҡында хыялланған. Ҡыҙға-
ныс...

Артта ниҙер шарт итеп һынды. Айгөл, боролоп ҡа-
рарға ҡурҡып, ҡайын олонона һеңерҙәй булып тора. Йө
рәген әллә ниндәй шом баҫты. Ни өсөн килде ул бында
Ғүмере берәү генә лә баһа! Баштараҡ уйларға кәрәк ине
йүләр. Мираж артынан йүгереп, бер кемдең дә алыҫ
офоҡто тота алғаны юҡ әлегәсә...

Айгөл телһеҙ ҡалғандай булды — ағастар араһынан
кемдер берәү уға яҡынлаша ине. Йөрәге дарҫлап тибә
уның ҡағыуы, бөтә урманға яңғырап, шаңдау булып кир
ҡайтҡан кеүек тойола. Эйе, ысынлап та, яҡынлай. Ап-аҡ
әҙәм һыны! Ҡот осҡос! Йә хоҙай — Рух! Кеше түгел
Рух! Ҡыҙҙың ҡулдары сатырлатып ағас ҡайырыһын
йәбешкән, урта бармағының шәбеһе айырылып, бармаҡ-
тары буйлап йылы ҡан китте. Ләкин ул бер нәмәне лә
тоймай ине. Ни өсөн килеүен дә оноҡҡан шикелле, һыны
ҡатып яҡынлашыусы Рухҡа төбәлгән. Әйтерһең дә
айҙар буйы уның менән осрашыу эҙләмәгән, бер күрерге
хыялланып төндәр буйы мендәр сылатып сыҡмаған...

«Ҡурҡма минән. Тыныслан...»

«Һин... кем?»

«Быны беләһең. Һин саҡырҙың, һәм мин килдем».

«Айвар! Айвар, был һинме?»

«Юҡ, мин уның Рухы. Айвар күптән үлгән инде».

Айгөл ҡайын ышығынан сығырға ынтылды. Ләкин
уны ниҙер тота ине. Телдәре аңҡауына йәбешкән ши-

келле тойола. Ғәжәп — ауыҙын асмай нисек һөйләшә ала ул?

«Китмә башҡаса. Ҡал минең янымда. Үтенеп һорайым». Айгөл әкрен генә ергә теҙләнде. Аяҡтары ерҙең һалҡынлығын тоя, ләкин тора алмай. «Минең өсөн йәшәүҙең ҡыҙығы бөттө. Ниңә яраттым мин һине? Ғазапланыр өсөнмө ни?! Һәр көнөм буш, мәғәнәһеҙ, төҫһөҙ...»

«Тыныслан. Ерҙәге тормош ваҡытлыса ғына. Ҡасан да булһа һин дә китерһең унан. Беҙ осрашырбыҙ, ышан миңә...»

«Күпме көтөргә! Сыҙарлыҡ әмәлдәрем ҡалманы...»

«Ерҙә йәшәр өсөн түҙемле булырға кәрәк. Әҙәм башарына һынауҙар күп төшә. Ләкин йәндәренең артабанғы яҙмышы хаҡына, иң ҡәһәрле мәлдәрҙән дә кеше булып сығырға тейештәр. Бер нәмә лә онотолмай, Айгөл...»

«Минең хәҙер үк Ер тормошон ҡалдырғым килә. Китәм мин бынан, Рух. Кисер мине, ләкин башҡа түҙә алмайым. Ал мине үҙ янына».

«Был мөмкин түгел. Үҙ ғүмереңә ҡул һалыу — Аллаға ҡаршы сығыу. Донъялыҡтағы иң ҡәҙерле нәмә — ғүмер. Был осраҡта беҙ мәңге осрашасаҡ түгелбеҙ. Юлдар айырыласаҡ, Айгөл...»

«Һуң... нишләргә миңә, нишләргә?»

«Башыңды юғары күтәр. Кеше Ерҙә йәшәр өсөн тыуа. Һинең балалар үҫтерәһең, уларҙы кеше итәһең бар. Кешенең ҡайғыһын-шатлығын берҙәй яҡын күреп, йөрәгеңә ҡабул итәһең бар...»

«Һин мине йәшәргә өндәйһеңме?»

«Эйе. Әгәр һин хәсрәтле булмаһаң, минең Рух, тынынлыҡ табып, күптән артабанғы үлсәмдәргә күсер инем. Ләкин мин китә алмайым. Һинең ошо хәлдә ҡалыуың — минең выжданда».

«Кәһәрләмә үҙеңде. Мөхәббәттең ни икәнен белмәй, ғүмер һөрөүселәр байтаҡ был донъяла. Үҙҙәренең ни нәмәнән мәхрүм икәнлектәрен белмәйҙәр генә. Ә мин ғүмер буйы һине онотмаясаҡмын».

«Рәхмәт. Ләкин һин балалар үҫтерергә тейешһең. Ҡатын-ҡыҙ донъяға кешелекте дауам итер өсөн яратылған. Онотма был хаҡта...»

«Онотмам».

«Ер кешеләре араһынан бөгөн мин мәңгегә китәм. Башҡаса һис кем минең барлыҡты тоймаҫ. Был үлсәмдәге ғүмер минең өсөн бөттө. Хуш, Айгөл, рәнйемә».

«Юк! Китмә!»

«Был тәбиғәт ҡөҙрәте. Уны үҙгәртергә һинең түгел, минең дә хәлдән килмәйәсәк».

«Мин ни эшләрмен?»

«Йәшәргә тейешһең. Дөрөҫөн әйткәндә, тынысլыҡ таба алмай бәргеләнеү — һәр Рух өсөн дә оло яза. Был яфанан мин ҡотолормон, әгәр ҙә...»

«Әгәр ҙә...?»

«Һинең йөрәгеңә йәшәү дәрте ҡайтһа».

«Вәғәҙә бирәм».

«Рәхмәт. Бәхил бул».

Айгөлдән бер нисә аҙым ситтәрәк ай яҡтыһында нурға ҡойонған шикелле торған Рух әкрен генә иреп юғала башланы. Бынан бер нисә минут элек кенә ҡото алынып ҡурҡыуын да онотҡан ҡыҙ, уның һыҙаттары юйыла башлау менән, ерҙән һикереп торҙо.

— Юҡ! Китмә! Зинһар!

Ләкин уның алдында бер кем дә юҡ ине инде. Башын ике ҡулы менән ҡыҫып, ҡыҙ бер аҙ ваҡыт бәүелеп торҙо ла, аңын юғалтып, ергә ауҙы.

## 21

Айгөл иҫенә килгәндә, таң атып килә ине. Маңлайында — еүеш таҫтамал, карауат янындағы ултырғыста һыулы туҫтаҡ тора. Арыраҡ ултырған Хисам ҡарт, ҡыҙҙың ҡыбырлауын күреү менән, урынынан торҙо.

— Йә, ҡыҙым, уяндыңмы?

— Эйе...

— Маңлайың эҫе. Башың ауыртамы?

— Сатнап бара.

— Һуғылғанһыңдыр.

— Нисек?

Урмансы карауатҡа яҡыныраҡ килде, таҫтамалды йәнә еүешләп рәтләберәк маңлайына һалды.

— Бала-саға түгелһең бит, Айгөл ҡыҙым, белергә тейешһең. Енгә һуғылғанһың.

— Енгә?

Айгөл өнһөҙ ҡалды. Айвар, ул яратҡан Айвар, хәҙер ен буламы ни? Хәйер... Билдәһеҙ нәмә һәр саҡ ҡурҡыта, йәнде өшөтә. Уның өсөн кешеләрҙе ғәйепләргә кәрәкмәйҙер. Иң мөһиме, ул белә — үлгәндәр тереләргә ярҙам итә ала. Кәрәк һаналар, тереләр уға лайыҡ булһа... Ен йә иһә рух тиеү менән, асыл үҙгәрмәйҙер. Бында сик башҡа — ул ниндәй кешенеке булған, шуға ҡарап унан нур тарала. Кешеләр өсөн Ерҙәге тормошон физа иткән Рух Айгөлгә сир килтермәйәсәк — ҡыҙ быны белә. Ләкин ни

өсөн башы сатнап бара? Стресс... Инде икенсе тапҡыр, был юлы мәңгегә юғалтыу аяҡтан йыҡҡан уны.

— Юҡҡа хафаланмағыҙ, Хисам олатай.— Айгөл ятҡан урынынан торорға уҡталды. Ләкин хәле етмәне, ҡабат һуҙылып ятырға мәжбүр булды.— Борсолор өсөн сәбәп юҡ.

— Шулай ҙа... Ни булды? Тиктомалдан аяҡтан йығылмағанһыңдыр бит.

— Һөйләһәң оҙон тарих. Мин әле киләсәкмен бында. Айнарҙың ҡәберенә сәскә атыусы ҡыуаҡ ултыртырға ниәтем бар. Моғайын, һуңғы тапҡыр күрешмәйбеҙҙер. Шунда берәй килгәнемдә барыһын да белерһегеҙ. Ни өсөндөр, һеҙҙән йәшерәһем килмәй, ошо йортта йәшәйһегеҙ бит.

— Ә ниңә хәҙер үк түгел?

— Күп нәмәне уйлайһы, аңлайһы бар. Тынысланып та етмәгәнмен.

— Кисә төнө ысынлап та күрҙеңме һин уны, Айгөл?

— Эйе...

Хисам ҡарт бер ни тиклем ваҡыт өндәшмәне. Күрәһең, ҡыҙҙың әйткәнен ысынға алырғамы, шаяртамы икәнен белергә аҙапланды.

— Утты һүндергәс, көтөүен көттөм мин. Ләкин көн буйы йөрөп арытылған, тәҙрә тупһаһына башты һалып йоҡлағанмын. Уянып китһәм, йортҡа кермәгәнһең, тышта торғаның да күренмәй. Йөрәгем жыу итеп китте. Өтөлә-ҙарылла йүгереп сыҡһам, ерҙәһең. Күпме ваҡыт ятҡанһыңдыр, кем белә. Бәлки, һалҡын бәргәндер, төнгө ер һыуығы ҡырҡыу була.

— Бәлки, һалҡындыр ҙа... — Айгөл әйтеп бөтөрмәне.

— Ата-әсәңә хәбәр итергә кәрәк, был килеш машинаны идара итмәҫһең инде.

— Мин уларҙы борсорға теләмәҫ инем.

— Нишләргә уйлайһың?

— Һеҙ уйлағанса уҡ, хәл мөшкөл түгел бит, Хисам олатай. Кискә, моғайын, юлға сығырлыҡ рәткә килермен.

— Ихтыярың, ҡыҙым. Үҙеңә ҡайһылай уңай, шулай эшлә. Теләһәң, миндә ай буйы йәшә.

— Һеҙ бигерәк изгелекле. Башҡа берәү юҡ артынан йөрөйһөң тип һуҡраныр ине әллә ҡасан. Рәхмәт һеҙгә.

Ҡарт өндәшмәне. Янында бер-ике көн булып, күңелен күтәргәнгә һуҡраныррамы инде был илгәҙәк ҡыҙға. Хәленән килһә, ейәнсәреләй күреп, янынан мәңге ебәрмәҫ ине.

Урмансының уның һүҙҙәрен йөрәгенә үтә яҡын ҡабул итеүен күреп, Айгөл башҡа бер һүҙ ҙә әйтмәне. Күҙҙәренән һығылып ҡына ике тамсы йәш бәреп сыҡты. Алда сикһеҙ оҙон ғүмер бар. Уның балалар үҫтерәһе, уларҙың көләс йөҙҙәрен күреп йылмаяһы бар. Үҙ эшенән ләззәт табып, арып-талсығып, ләкин шат күңел менән үҙ йортона ҡайтаһы бар. Әммә йөрәгенә тамыр үргән һөйөүен йолҡоп ташларға хәленән килмәйәсәк уның. Ҡөҙрәте етмәйәсәк. Хәйер, теләйме икән ул быны? Йөрәк буш булһа, йәшәүҙең ни йәме?

Ҡасан да булһа осрашасаҡ улар. Ләкин уның Рухына тиң булыр өсөн, ус төбөнә һалып кешеләргә йөрәгенең йылыһын илтергә бурыслылыр.

Ғүмер үтә оҙон да, үтә ҡыҫҡа ла. Кеше китһә, барыһы ла бөтә тип уйламағыҙ. Башлана ғына...

*1992—1993 йылдар.*

# ТАҢ АЛДЫНАН КАЙТЫРМЫН



(Фәнни-фантастик повесть)

## 1

Уҡыу бүлмәһендә ығы-зығы. Улай ғынамы! Бөтә медицина институты тигәндәй аяҡҡа баҫҡан. Студенттар алдында лекция һөйләп торған мәлендә профессор Нур Харрасович йөрәк өйәнәгенән йығылды. Уны был шаҡтай ҙур уҡыу бүлмәһенән сығарып йөрөтмәҫкә булдылар. Хәйер, унда-бында күсенеп йөрөргә ваҡыты ла ҡалмағайны — күпте күргән, ярайһы таушалған ҡарт кәүҙә бирешергә лә мөмкин. Студенттарҙың йөҙөндә ҡаушап ҡалғанлыҡ ғәләмәте күренә. Йылдам хәрәкәтле йәш табип Наримановтың буйһондороусан тауышы ғына башҡаларҙы йәһәт ҡыймылдарға мәжбүр итә. Профессорҙы әллә ни яратып бөтмәһә лә, был киҫкен мәлдә уның табиплыҡ намыҫы өҫкәрәк ҡалҡып сыҡты.

— Сабир Хөрмәтович, пульс юғалды! — Лаборант ҡыҙ Ләйсән Наримановҡа мөлдөрәп ҡарай. Уның бар булмышында «Ҡотҡарығыҙ инде, зинһар!» тигән үтенес.

— Кислород мендәрен тиҙерәк! Тәҙрәләрҙе асығыҙ! Рауил, йөрәккә массаж!

Профессорҙың ассистенты Рауил менән Нариманов өҫтәлдә ятҡан иҫһеҙ-тынһыҙ кәүҙә менән мәж килгәндә, бүлмәнең арғы башында дөбөр-шатыр иткән тауыш ишетелде. Әллә яҙа баҫты, әллә башы әйләнде — студенттарҙың береһе бикләнгән тәҙрәне асып маташҡан мәлендә ҡолап төштө. Башҡа ваҡытта булһа бахыр студенттың күҙен дә астырмай көләрҙәр ине, моғайын, ҡатырға сумаҙан күтәреп эшем эйәһе булып йөрөгән халыҡҡа сәбәп кенә булһын. Әле иһә торорға ярҙам иткән булалар.

Йәш яғынан Нур Харрасовичтың үксәһенә баҫып килгән сал сәсле Уразбәков уколды үҙе яһарға булды. Инде был уколдан да йән кермәһә... Яһалма тын алдырыуҙан башҡа сара ла ҡалманы, тиерлек.

— Пульс һиҙелә! Йөрәк тибә башланы! — Йәнгилдин йөрәген тотоп йығылғас ап-аҡ булған Рауилға һөйләшеү һушына ҡайтты, шикелле. Һәр хәлдә, уның ләхеттән тороп ҡыҫҡан кеше ҡиәфәтендә йөрөп ятҡан көнө.

Бер аҙҙан профессор күҙен асты. Тәүҙә үҙенең ни ниҙән ятҡанын аңларға маташты, ахыры. Төшөнә алмагас, аптырағандан хәлһеҙ генә йылмайып ҡуйҙы. Йәнәһе лә, аяҡ-ҡулдар тик ятҡас, бит тиреһе булһа ла, эшһеҙ тормаһын. Ләйсән валерьянка һалып биргәс кенә, дарыуҙың таныш еҫенән ни булғаны иҫенә төштө, шикелле.

— Йә инде, ҡыҙыу эш көнө уртаһында прогул яһап йоҡлап ят инде һуйлайып, — тип һөйләнде ғәйепле кешеләй. Бүлмәләгеләр ошондай хәлдә булып та, тел сарлап ятҡан ҡарттың һөйләнеүенә йылмайышып ҡуйҙылар. Ғөмүмән, студенттар ҙа, бергә эшләгән хеҙмәттәштәре лә ҡарттың был оҙон теленә күнегеп бөткәндәр. Ҡайһы саҡта сәйерерәк ҡыланһа ла, барыһы ла ошо күңелсәклеге арҡаһында онотолоп тора.

— Ҡотто алдығыҙ бит, Нур Харрасович.— Уразбәков уның баш осонараҡ килде.

— Мин һеҙҙең ҡотто алдым, ә теге мырҙам,— Йәнгилдин бая ҡолап төшкән егеткә төртөп күрһәтте,— минең ҡотто табанға ебәрә яҙҙы. Тәҙрәнән генә сығып ҡасайым тигәндә, ер һелкенде икән, тип торам.

— Һеҙгә күп һөйләшергә ярамай, профессор

— Әләккәндә лекциямды уҡып ҡалайым әле. Мин итәм, ошо йәп-йәш мырҙамды күгәртендереп тороп, һаман да шул минең бәлтерәп бөткән кәүҙә менән булалар, иманһыҙҙар. Һис юғында, һеҙҙең яндан һыпыртып, осо булырға уйлап йөрөгән берәй ханыма барып урын биләргә лә иҫәп бар ине, юғиһә.

— Хар-расович! — Наримановҡа уның ни һөйләгәне яңы ғына барып етте. Ғәжәпләнеүенән, һаташмаймы был тип, ҡарттың күҙҙәренә төбәлеп ҡараны. Юҡ, бөтәһе лә үҙ урынында — Йәнгилдин ярым шаян йылмайыу менән хәбәрен һөйләп ята. Тик бына... һөйләгән хәбәренең ахырына төшөнөүе генә ауырыраҡ.

— Нисек инде? Һеҙ уның йығылғанын күрҙегеҙ? Һеҙ бит тын алмай инегеҙ! Күҙҙәрегеҙ ҙә йомоҡ ине. Барыһы ла шаһит.

Йәнгилдиндең йылмайыуы юғалды, йөҙөнә һағыш күләгәһе ятты.

— Эй, ҡустым, ҡустым... Мин бына ошоно аңлатам тип, йөрәктең кәрәсинен бөтөрҙөм бит инде.

Уның хәлен барыһына ҡарағанда ла нығыраҡ белгән

Уразбәков профессорҙы больницаға оҙатыу яғын ҡараны. Әгәр ҙә ҡарттың ошо хәлендә лә үткәндәрен иҫенә төшөрһәң, тағы ла бер өйәнәк булмаҫ, тимә.

«Тиҙ ярҙам» машинаһы Йәнгилдинде алып киткәс, студенттарҙы ла ҡайтарып ебәрҙеләр — уларҙың һуңғы дәресе ине.

Бүлмәлә Рауил менән Нариманов ҡына ҡалды. Нариманов һаман да тыныслана алмай ишекле-түрле йөрөнә.

— Нисек инде? Булмаҫтайҙы ысын булһа ла һөйләмә, тиҙәр. Ғалим булып мин аңлай алмағас, был студент халҡына нисек төшөндөрөргә мөмкин?

— Ә һин, ғалим булғас, төшөнөп ҡара.— Рауил уның сәмләнеүсән холҡон белә, яйы сыҡҡанда төрттөрөп алыуҙан да баш тартмай.

— Һин үҙең ошоно нисек аңлатаһың?

— Профессорҙың һабағы һинең ҡалын-ҡалын китаптарыңа ҡарағанда әллә нисә тапҡыр күпте бирһә лә, хәҡиҡәтте ауыҙ эсендә әүәләргә минең хаҡым юҡ, дуҫ кеше. Һинең һымаҡ ғалимдар алдында булһа ла.

— Шул ҡартҡа иҫең киткән инде.

— Әйтмә инде, дуҫ кеше.— Рауилдың йөҙөн хас Йәнгилдинсә хәйләкәр йылмайыу биләп алды.— Ни алла бабай Нур Харрасовичты билдәре өҙөлөп торған ҡыҙ итеп яратмаған. Исмаһам, бына Ләйсән шикелле итеп булһа ла. Юҡ, улай батмай... Юғиһә, һеҙҙең шикелле китап кимереп, аҙаҡ килеп бер нәмә лә аңламай йөрөләр ине. Мин һуңлап тыуғанмындыр, ахыры. Берәй ханым булғанда ла, ҡамасауламаҫ ине.— Рауил итәк остарын семтеп һәм елпеүес тотҡан булып, йөҙөнә майлы йылмайыу ғәләмәте сығарып, иҙән буйлап йөрөп әйләнде. Шунда ғына улар бая ҡолап төшкән, аптырауҙан асҡан ауыҙын яба алмай ултырған егеткә иғтибар иттеләр.

— Бәй, Рәмзил, һин берәйһен көтәһеңме әллә?

— Эйе, эйе... Ә, юҡ, көтмәйем. Былай ғына... Һау булығыҙ.

## 2

Рәмзилгә ниҙер булды. Күҙгә күренеп үҙгәрҙе егет. Юҡ, башын ҡайғыға һалып, көндәр буйына моңайып та ултырмай ул. Ҡыҙ-ҡырҡынға бер шаян ҡаш һикертеүе менән уларҙы төндәр буйы татлы хыялға бирелеп ятырға мәжбүр иткән «ҡара мыйыҡ, ҡара ҡаш» гүзәл затҡа

иғтибар итмәҫ булды ла ҡуйҙы. Билдәле, гүзәл зат шунда үк. Бының сәбәптәрен асыҡларға кереште. Тәнәфес ваҡытында шыш-быш килеү менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, боронғо яугир ҡатын-ҡыҙҙар затынан икәндәрен иҫтәренә төшөрөп, Рәмзил артынан күҙәтеү ҙә ойоштороғандар, бугай. Һәр хәлдә бер лекция мәлендә егеттең алдына бөкләнгән аҡ ҡағыҙ киҫәге килеп төштө. Асһа, ни күҙе менән күрһен — Рәмзил атлы ир-уҙаман «китапхана» ханымды ҡултыҡлап ЗАГС-ҡа кереп бара. Бахырҡай ғына ханымдың кәкре-бөкрө аяҡтарына никах балдағы кейҙереп ҡуйғандар, етмәһә.

Рәмзил үҙенең энә менән ҡойо ҡаҙығанын әле генә аңланы. Күпме тырышма, бөтә китаптарҙы уҡып сығарға ғүмерең дә етмәҫ. Тап һиңә кәрәклеһе генә бармы һуң? Юҡ, былай булмай. Профессорҙың үҙен табырға ла топ-тура һорарға. Көлһә көлөр, яуап бирмәһә лә — уның эше. Нур Харрасовичты больницанан сыҡҡан тип ишеткәйне. Тимәк, әлеге мәлендә өйөндә дауалана. Бәлки, ошо арала дәрестәр ҙә бирә башлар, тик бер һорау йөрәкте туҡтауһыҙ өйкәп торғанда тыныс ҡына көтөп буламы ни.

Ул бөгөн үк барырға булды. Йорт адресы менән телефон номерын табыу әллә ни ҡыйынлыҡ тыуҙырмай — кереп Ләйсәндән генә белешәһе. Бер минуттан ҡулыңда буласаҡ. Тик бына нисегерәк тип һүҙ башларға? «Профессор, һеҙ йығылғанда, мин дә ҡоланым, шуға килдем әле», тип әйтеп булмай бит инде. Шулай ҙа тәүәккәлләп телефон-автоматҡа керҙе. Уныһы хәйләкәр булып сыҡты — ике тинде йотто ла өндәшмәҫ булды ла ҡуйҙы. Хәрәм аҡса тамағына торҙо, күрәһең.

Ниһәйәт, трубкала таныш тауыш ишетелде:

— Эйе, тыңлайым.

— Нур Харрасович, һаумыһығыҙ! Һеҙ мине ғәфү итегеҙ инде, кәрәкһеҙ ваҡытта борсойом. Мин һеҙҙең шәкертегеҙ Рәмзил Аҡъюлов. Бөгөн һеҙҙең янға инеп сығырға мөмкинме?

— Кил, кил, мырҙам. Ишек һәр саҡ асыҡ.

Уф-ф... Ярай, ни өсөн, тип һораманы. Әҙәплелек бар икән ҡартта ла. Рәмзил теленә ни килһә, шуны әйтер ине. Ә ул сүмәлә башҡа ниҙәр генә кереп сыҡмай. Ғәрлегенән бынау бахыр ғына телефон будкаһының әллә ни сәбәп менән иҫән ҡалған һуңғы быялаһы ҡойолоп төшмәй, тимә.

Ишекте Йәнгилдин үҙе асты. Хәйер, башҡа кеше күренмәй ҙә, ахыры. Рәмзил, ишек тупһаһын аша үткәс кенә, Нур Харрасовичтың ҡатыны Ләлә ханымдың бынан ике йыл элек вафат булғанын хәтерләне. Егет фатир-

ҙың эсенә күҙ һалды. Дә-ә, матурлыҡты тоя белә икән аҡһаҡал... Келәм менән балаҫтар, ике йомшаҡ кресло уртаһындағы ҙур фикус гөлө. Ситтәрәк, гөлдәр араһында, дүрткел быяла һауытта береһенән-береһе матур кескенә балыҡтар йөҙөп йөрөгәне күренә. Нур Харрасович юҡҡа ғына психотерапевт түгел икән шул. Бындай йомшаҡ, тынысландырғыс, зауыҡ менән биҙәлгән донъя иң ҡыйбатлы дарыуға ҡарағанда ла һәйбәт тәьҫир итәлер. Мещанлыҡ тигән төшөнсәнең буш ҡыуыҡ икәнен Рәмзил әле генә аңланы. Эйе, кеше ни өсөн матурлыҡ араһында йәшәргә тейеш түгел?

Бындағы һәр стена Ләлә ханымдың рухын һаҡлай кеүек. Һөнәре буйынса кем ине һуң әле ул? Ә, рәссам... Стенала уның рәсемдәре бит.

Ятаҡханала тараҡандарға өйҙәш булып йәшәп өйрәнгән егет иҫен йыя алмай торғансы, Нур Харрасович батмус тотоп килеп тә сыҡты.

— Әйҙә, улым, мин ҡартластың хәбәренән тегендә лә туйып бөткәнһеңдер, кофе менән һыйлайым әле үҙеңде. Үҙемдә күпме биҙерергә тырышып ҡарайым ошо нәмәнән, булмай.

Йәнгилдин батмусты тәпәшәк кенә өҫтәлгә ҡуйҙы һәм үҙе креслоға ултырҙы.

— Йә, тыңлайым һине, улым.

Нисегерәк һүҙ башларға? Әһә, ул шәкерт кеше бит әле.

— Нур Харрасович, мин һеҙгә килер алдынан күп уйландым, әммә бер һорауҙың осона сыға алманым. Байтаҡ ҡына китап уҡып сыҡтым, береһе булһа ла асыҡларға ярҙам итмәне.— Артабан дауам итһә, әҙәпһеҙлек булмаҫмы икән? — Беләһегеҙме, мине бер һорау ҡыҙыҡһындыра. Нисек инде йөрәк хатта тибеүҙән туҡтағанда, тирә-йүндә ни булғанын белергә мөмкин? Клиник үлем мәлендә?

Егет ошо һөйләмде әйтеп бөтөргәнсе шыбыр тиргә батты, ә ҡарт иһә күңелләнеп көлөп ебәрҙе. Хатта урынынан уҡ тороп китте.

— Афарин, мырҙам! Бындай уҙамандар булғанда, ғилем донъяһы үлмәйәсәк әле. Күптән көттөм мин, улым, ошо минутты. Бына күрерһең, әгәр ҡыҙыҡһынған булһалар, һабаҡташтарыңдың бер-икеһе һорар ҙа шундуҡ оноторҙар. Ә белем өсөн үҙ-үҙеңде аямау һирәктәрҙә генә була. Был ынтылыш тип атала, улым, ҡараңғы ерҙә яҡты ғилем донъяһы тыуҙырыу тип атала. Ошо ынтылыш күп кешеләрҙе бөйөк яһаған.— Ҡарт егетте иңбашынан ҡосаҡлап бер стенаны буйынан-буйына биләгән

шкафтар эргәһенә килтерҙе.— Бына минең хазинам. Теләгәнең булһа, иң оҡшағандарын уҡырһың. Тик бында институттың уҡыу залындағы һымаҡ классиктарҙың йөҙәр томлыҡ әҫәрҙәре түгел. Иғтибар ит — немец, инглиз, француз телдәрендә яҙылған китаптар күберәк.

Дәә, эштәр хана, брат. Немец телен мәктәптә нисә йыл уҡып маташтылар, «һенде хох» менән «зер гут»тан башҡаһы иҫендә ҡалмаған. Әле килеп инглиз телен өйрәнгән булалар. Эх, замана, замана, ниңә шулай мыҫҡыл итәһең улдарыңды?..

Йәнгилдин һүҙен дауам итте:

— Был китаптарҙың тәржемәһе юҡ. Уҡыр өсөн ике телде ныҡлап өйрәнергә тура килде. Француз телендә яҙылғанын һүҙлек менән уҡырға була. Ҡартлыҡ һаҡалын һәлберәтеп килде лә етте бит, йүнһеҙ. Күп нәмәгә өлгөрөп булманы. Инглиз теле менән эштәрең нисек тора?

Егет ни әйтергә лә белмәне, ҡолаҡ остары ғына ҡыҙарҙы. Ҡарт төпсөнмәне.

— Аңлашыла. Барыбыҙ ҙа шуның аша үткәнбеҙ. Ә һин өйрән уны, улым, үкенмәҫһең.— Йәнгилдин бер китапты ҡулына алды.— Ошо китап ҡулға килеп ингән көн минең яҙмышымды икегә бүлде: тәүге яртыһы үҙ аллы, шикшыр-ышанмаҫ ҡына яһалған тәжрибә, икенсеһе үҙемә ныҡ ышанып, тәүәккәллек менән ғилем донъяһына юл ярыу. Мин унда бик күп һорауҙарға яуап таптым. Һине борсоған мәсьәлә лә бар унда.

Рәмзил китапты ҡулына алды. Был Американың атаҡлы ғалимы Станислав Грофтың фәнни хеҙмәте ине.

— Әгәр ҙә уҡып сыға алырыңа ышанһаң, алып тор. Тик шуны ла бел, улым, һин ошо минутта һайлау алдында тораһың: йә тыныс тормош, уйын-көлкө, тансалар, йә ошо китап. Ул һинең донъяға ҡарашыңды үҙгәртәсәк.

— Мин күптән һайлағанмын инде, Нур Харрасович.

— Тап ошо һүҙҙе көткәйнем дә һинән. Уҡып бөткәс тә килерһең. Мин иҫән саҡта күпте белеп ҡалырға кәрәк һеҙгә, уландар.

Йәнгилдин һуңғы һүҙҙәрен әйткәндә Рәмзилгә моңһоу булып китһә лә, ул аҡһаҡал янынан бик күтәренке кәйеф менән сыҡты.

## 3

Бер ай ваҡыт үтте. Рәмзил китапҡа башы-аяғы менән сумғайны. Мәле менән үҙенең наҙанлығына, бигерәк тә инглиз телендә һай йөҙөүенә йәне үртәлеп, уны урнаға

алып тондорорлоҡ сиккә етһә лә, был иҫ киткес серле донъя егеттең бар булмышын үҙенә тартып алды. Дүртенсе курста уҡыйым, биш минуттан — табип, тип йөрөгән уҙаман үҙенең был ғилем алдында себеш кенә икәнлеген аңланы. Рәмзилдең материалистик кәртә аша сығып өйрәнмәгән аҡылы уны бер нисә тапҡыр Йәнгилдин янына ла алып килгеләне. Ҡарт ғәжәпләнмәне. Уның сәйерһенеп биргән һорауҙарына ла, йәшлеге менән ҡыҙып китеп үҙенекен тылҡыуына ла түҙемлелек менән генә яуап ҡайтарҙы.

Һәм бына бөгөн Рәмзил тағы ла Нур Харрасович янына барасаҡ. Күңеле менән тоя — был ғәҙәти саҡырыу түгел. Китапты уҡып бөткәненә лә ярайһы ғына ваҡыт үтте. Унан һуң гүзәл фикус гөлдәре аҫтында байтаҡ серләшкәндәре лә булды. Тик шуныһы — профессорҙы Рәмзил һәр саҡ үҙе таба ине. Аҡһаҡал егеттең килеүен был юлы үҙе һораны. Тимәк, уның өсөн Рәмзил хәҙер ғәҙәти студент ҡына түгел.

Егет фатирға килеп ингәндә, унда профессорҙан башҡа урта йәштәр тирәһендәге олпат ҡына ир һәм бигүк сибәр ҙә түгел, әммә һөйкөмлө ҡатын бар ине. Улар икеһе ике креслола талғын ғына әңгәмәләшә.

Егеттең уңайһыҙланып ҡына һаулыҡ һорашыуына ир кеше:

— Әйҙә үт, ҡустым, Юламан Кәримович булам,— тип ҡул бирҙе.

Ҡатын мөләйем йылмайып:

— Айгөл, — тиеү менән сикләнде.

Бер аҙҙан Рауил менән бергә Ләйсән килеп инде. Нимә-нимә, әммә был тиклемен Рәмзил көтмәгәйне. Күпме егет артынан төрлө калибр менән атып та эш сығара алғаны юҡ, нәҙекәйбилдең башында икенсе ҡайғы икән шул.

Юламан Кәримович университетта уҡыта, психология фәндәре кандидаты, Айгөл ханым иһә аспирантура тигән сират күперен аша үтергә хыялланып йөрөгән фәрештә, имеш.

Нур Харрасович эште оҙон-оҙаҡҡа һуҙманы. Һәр ваҡыттағыса, берәр шәшке кофе менән һыйланы ла күрше бүлмәгә алып сыҡты. Бында ингәс, Рәмзил аптырап туҡтап ҡалды. Бүлмә ҙур ғына булыуға ҡарамаҫтан буп-буш. Иҙәндәге келәм менән тәҙрәләге ауыр бәрхәт ҡорғандарҙан башҡа бер ни юҡ. Хәйер, мөйөштә музыка аппаратураһы күренә.

Уларҙың артынса Айгөл ханым менән Ләйсән дә бүл-

мога үттеләр. Әллә ни арала спорт костюмы кейә һалып ултандар.

— Бында ни булырын Рәмзил ҡустынан башҡа барыһы ла белә. Ҡаушама, мырҙам, имтихан алырға йыйынмайбыҙ. Һинең әле тәжрибәң юҡ, шуға ла бына Ләйсән һылыуға ярҙам ғына итерһең. Айгөл ханым, һеҙгә Юламан Кәримовичты ышанып тапшырам. Күҙ ҡараһы кеүек һаҡлағыҙ, үткән быуаттарға олағып, ҡайтмай ҡуйыуы ла бар. Кем белә, берәй солтан затынан да булыуың бар бит, эйеме, Кәримович?

— Арыу булыр ине лә, Нур Харрасович, тик бындай туташтар янда булғанда солтан һарайынан да йәйәүләп ҡасырһың.

Улар шулай тел сарлай-сарлай тәжрибә үткәрергә ирләнде. Рауил музыка аппаратураһы янында булаша. Көрәкле көй эҙләй, буғай. Нур Харрасович был юлы Рәмзилдең үҙенә генә төбәп өндәште:

— Улым, йөрәкһегәнеңде беләм, тик үҙеңде ҡулға ал. Был минутта һинең өсөн иң мөһиме башлана. Ни булырға тейешлеген яҡынса булһа ла күҙ алдына килтерәһеңдер. Тик шуныһы — ул китап ҡына ине, ә был инде — ысынбарлыҡ. Ләйсән менән Юламан Кәримович балаҫҡа ятасаҡтар, һеҙ улар янына ултырырһығыҙ. Һеҙҙең бурыс — уларға ярҙам итеү. Улар төрлө кисерештәргә биреләсәк, иң мөһиме — һеҙҙең теләктәшлекте тойоу. Ниндәй генә ауыр кисерештәр үткәргәндә лә, уның һөҙөмтәһе бер — кеше ауырыуҙан ҡотола, йә иһә рухи камиллектән арына.

Туҡта, туҡта, былар барыһы ла таныш түгелме һуң әле? Ә-ә, бына бит, эштәр нисегерәк! Өс йыл самаһы элегерәк Рауил Рәхимович фән кандидаты алыу өсөн ирин хеҙмәтендә тап ошо мәсьәләне күтәргән ине, шикелле. Нисек уға иғтибар итмәгән Рәмзил! Рауилды ғилем тауынан түбәнгә дөбөр-шатыр тәгәрәттеләр. Бер нисә алка гәзитендә олпат-олпат ағайҙар мыҫҡыл менән яҙылған хәбәр ҙә әүәләштергеләне. Шуға ла аспирантураны шартлатып «бишле»гә генә тамамлаған талантлы йәш ғалим һаман да аспирант исемен күтәреп йөрөй. Дә-ә, ысынлап та, һирәктәр генә ялан аяҡ үткән һуҡмаҡ икән шул.

Ул арала иҫ киткес матур ҙа, ят та моң ишетелде. Нур Харрасович Юламан Кәримович менән Ләйсәнгә рәтлиберәк ятырға булышты. Икеһе лә татлы хыял донъяһына сумғандай тойола ине. Ләйсән йоҡлағанда бигерәк тә гүзәлдер, моғайын. Ярым ҡараңғы бүлмәлә күкрәктәренең йыш-йыш күтәрелеп төшөүенән генә уның ояу-

лығын самалап була. Рәмзилдең ҡыҙҙар янында һис ҡасан да был тиклем яҡын ултырғаны булманы. Күңеле лә тартманы, теләге лә юҡ ине. Әле иһә, моңдоң илаһи көсөнә бирелеп, бар донъяһын онотто. Бөтә донъяла, гүйә, ошо илаһи зат һәм ул ғына. Күҙҙәре ниндәй төҫтә ине һуң әле? Ә, эйе, зәңгәр... Зәңгәр күҙҙәр һәм ҡуңыр сәс...

Егет хыялға батып ултырғанда, Ләйсәндең ыңғырашҡан тауышы ишетелде. Ул, ярҙам һорағандай, ҡулдарын алға һуҙҙы. Егет ҡалтыранған һап-һалҡын ҡулдарҙы усына ҡыҫты. Ғәжәп, егеттең көрәктәй устарына инеп ятыу менән, был кескәй генә ҡулдарға йән килеп киткәндәй булды. Рәмзил хатта уларҙың бик тиҙ йылынғанлығын тойҙо.

Ҡыҙ бик ауыр кисерештәр үткәрә ине, ахыры. Ниндәйҙер аяуһыҙ, ҡурҡыныс нәмәнән ҡотолорға тырышҡандай, бер аҙҙан уның кәүҙәһе борғолана башланы.

Нур Харрасович килеп етә һалды.

— Рәмзил, етте, тигәнен ишетмәнеңме?

— Юҡ.

— Тимәк, түҙә. Күп ҡалманы инде. Кәүҙәһенә хужа була алмаһа ла, үҙ аңында ул.

Рәмзил ҡыҙҙың сәстәренән һыйпап йыуатырға тырышты. Ысынлап та, бер аҙҙан ҡыҙ тынысланды. Егет еңел тын алып ҡуйҙы. Ул арала моң да әкренәйә барып, бөтөнләй туҡтаны. Моң кәмеү менән бүлмәләгеләр яйлап ҡына ысынбарлыҡҡа ҡайтты.

Ләйсән күҙен асҡас, егет үҙендә ҡыҙҙы юғалтып, ҡабат тапҡан һымаҡ хис уяныуын тойҙо. Улар һис ҡасан да яҡын кешеләр булманылар һәм бына килеп... Юламан Кәримович үҙен тыныс тотҡанғамы, Нур Харрасович иң тәүҙә ҡыҙҙың янына килде.

— Шунан, эштәр нисек, һылыу?

Ҡыҙ өндәшмәне. Бер аҙҙан ғына керпектәрен күтәреп, профессорға төбәлде. Уларҙың остарында йәш тамсылары эленеп тора ине.

— Мине... мине бүре ашаны, — тине ул, ниһәйәт, үкһегән тауыш менән. — Ниндәйҙер ауыр заман ине. Ашарға ла юҡ, кейергә лә алам-һалам. Өйҙә яғырға бер киҫәк утын ҡалмаған. Тышта буран ҡотора. Ике... кескенә сабыйым... алам-һаламға төрөнөп, дер ҡалтырап ултыра. Түҙмәнем, ҡул санаһын әләктереп, яҡындағы урманға киттем. Яҡындағы тигәс тә, хәтһеҙ генә барҙым. Ҡараңғы ла төшөп бөттө. Ваҡ-төйәк ботаҡтарҙы һындырғылап санаға тейәйем, ҙурҙарына көсөм етмәй. Ҡайтырға ғына ҡуҙғалғайным, имәнес әсе олоу ишетелде. Күп тә үтмә-

не, мине бүреләр ҡамап алды. Унлап ине улар. Ҡарышырға ла хәлем етмәне. Тәнемде утлы бысаҡ менән киҫкеләгән һымаҡ булғанда ла, сабыйҙарымды йәлләп иланым. Тик шунынһына ғәжәпләнәм, Нур Харрасович.— Кыҙ бөтөнләй тынысланды, хатта күңелләнә төшкәндәй булды.— Ошо йәшемә еткәнсе тиктомалдан бүре өйөрө араһында ҡалған һымаҡ хис бимазалай ине. Ҡараңғыла яңғыҙым ҡалырға ла ҡурҡа инем хатта. Әле ул тойғо һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты.

— Һинең аңыңда, һылыу, ошо ҡот осҡос ваҡиға хаҡында хәбәр һаҡланып ҡалған, һәм ул һиңә тынғы бирмәгән. Әле тағы ла бер тапҡыр ошо ваҡиғаны кисергәс, хәтерең уларҙан ҡотолдо. Тимәк, юҡҡа илашманыҡ. Юҡһы, мырҙамдың да йәлләүҙән ҡото осто.

Ҡарт Юламан Кәримович янына килде.

— Шунан, Юламан уҙаман, һин беҙҙе нимә менән ҡурҡытырһың?

— Ҡурҡырға теләһәгеҙ ҙә барып сыҡмаясаҡ, Нур Харрасович. Рәхәтләнеп тороп күршеләрҙең баҡсаһынан сейле-бешле алма урланым.

Олпат ирҙең шундай бала-саға хәбәрен һөйләп ултырыуы мәҙәк ине — бүлмәләгеләр барыһы ла көлөп ебәрҙе.

— Ысынлап та, бала саҡтың шуҡлыҡтары онотолоп та бөткәйне. Әле килеп өр-яңынан шул саҡтағы тойғоларҙы кисерҙем. Йәнәһе лә, һуғыш була ҡалһа, мотлаҡ разведчик булырға тейешмен. Шундай һөнәр өсөн шул малайҙың иманын уҡытып алғанда ла ҡамасауламаҫ ине бит, ә, профессор?

— Шулайын шулай ҙа, Кәримович, әммә ул саҡта һуғышта төшкән сейле-бешле алмаларың менән маһаның, күркә кеүек ҡабарып йөрөгәнһеңдер әле.

— Булғандыр инде.

Йәнгилдин Рәмзилгә төбәлде:

— Шунан, улым, батырсылыҡ итәбеҙме?

Егетмен тигән егет шундай мәлде ысҡындыра буламы! Бүре булмай, миңә тимәгәйе, крокодил ашаһын. Ул мәлгүндең эсенә экскурсия яһау кемгә эләккән?

— Был аңдың ғәҙәттән тыш хәле. Ул һиңә бөтөнләй таныш түгел. Тирә-яғыңда ни булып ятҡанын, бөтә фани донъяны оноторға тырыш. Аңлайһыңмы, һинең хәтереңдә ысынбарлыҡ менән бәйле бер нәмә лә ҡалырға тейеш түгел. Шунда ғына һөҙөмтәгә ирешергә мөмкин.

Тағы ла бер нәмә. Әгәр кисерештәр үтә лә ауыр булһа, үҙең уны туҡтата алаһың. Хәрәкәттәреңә баш була алмаһаң да, аңың тулыһынса һиңә буйһона.

...Йөрәгенең дөп-дөп типкәне барыһына ла ишетелде кеүек тойолдо Рәмзилгә. Әммә егет вайымһыҙ ҡыланырға тырышты. Шул уҡ әҙерлек ҡабатланды. Егет күптән үк һуҙылып ятып күҙҙәрен йомғайны инде. Көй ишетелгәнсә теүәл бер кеше ғүмере үткән кеүек тойолдо. Ниһәйәт, ҡайҙандыр, алыҫ-алыҫтан, моң яҡыная башланы. Тәүҙә ул иҫ киткес йыраҡта ине, тора-бара егеттең бар булмышын биләп алды. Рәмзил үҙенең йыш-йыш тын ала башлағанын тойҙо. Бына моң, әйтерһең дә, уның бармаҡ остарынан тәненә үтеп инде. Нур Харрасовичтың тауышы егеткә хас төштәге кеүек ишетелә ине.

Егеттең көй ыңғайына хәрәкәтләнгеһе килде. Бөтә кәүҙәһен иҫ киткес илаһи хис биләп алған. Ғәжәп, ул үҙен һыу эсендә итеп тойған һымаҡ. Бер ни булмағандай, һыу батшаһының кейәүеләй, әллә атлап, әллә йөҙөп, ирәүән атлап йөрөп ятҡан көнө. Бәй, ул ниндәйҙер тоҡ һымаҡ нәмә эсендә, имеш. Тоғо-ние менән ҡайҙалыр сығып китергә аҙаплана. Һыу батшаһының уны бигүк ебәргеһе килмәй, буғай.

Егет кинәт үҙен ситтән күргән һымаҡ булды. Бәй... ул бит... ул бит — сабый! Донъяға килергә аҙапланған кескәй генә сабый! Үҙенең ауырлығын да тоймай, әсә ҡарынынан сығырға аҙаплана. Кескенә йоморсоҡ йән эйәһе, аҙаплана торғас, үҙенең күсә башлағанын тойҙо. Йә хоҙа! Ниндәй тылсымлы яҡтылыҡ! Рәмзил, ғәжәпләнеп, күҙҙәрен асып ҡараны. Юҡ, бүлмә һаман да шул килеш ҡараңғы. Ләйсән уның янында ултыра, башҡалар ҙа үҙ урындарында. Егет күҙҙәрен ҡабат йомдо. Күренеш иһә, бер ни булмағандай, артабан дауам итте. Бөтә сабыйҙар ҙа донъяға килгәндә яҡтылыҡтан шаңҡыу һымаҡ тойғо кисерәләрме икән ни? Моғайын, шулайҙыр. Ни эшләп хәтер уны һаҡламай икән? Кешегә бирелгән ғүмерҙең ҡәҙере хаҡында иҫкә төшөрөп торор ине бит.

Моң әкренәйә барып туҡтаны. Рәмзилдең был хистәрҙән һис тә арынаһы килмәй ине — теләмәй генә күҙҙәрен асты. Нур Харрасович егеттең кәйефе күтәренке булыуын шунда уҡ аңланы. Ошо тәүге тәжрибәне уның нисек үткәреүенә күп нәмә бәйләнгән. Әгәр ҙә күңеле ҡайтһа, уны өгөтләргә Йәнгилдиндең хаҡы юҡ. Ғилем этеү-төртөү ярҙамында ғына бирелә торған нәмә түгел. Йәнгилдиндең дә ғүмере күп ҡалмағандыр, күңеле менән тоя. Эх-х, шәкерттәрҙе күберәк әҙерләп ҡала алманы! Ул уҡытып сығарған студенттар йөҙәрләп булһа ла, уның юлын дауам итеүселәр — Рауил һәм Юламан Кәримович ҡына. Ҡыҙҙар — әлегә нәфис сәскә генә. Сая фән әһелдәре булып китерҙәрме, әллә ихтыярҙары етмәҫме — ваҡыт

күрһәтер. Шуға ла тырыш һәм төплө генә күренгәнгә, Рәмзилгә өмөтләнеп ҡарай ине профессор.

Яйлап тарала башланылар. Рәмзил тәжрибәнән һуң уны тикшереү кеүек нәмә көтһә лә, улай булмай сыҡты. Профессор бер аҙ ваҡыт бирә икән. Ғәҙәттә, кешелә үҙгәреш булмай ҡалмай — ниндәй ҙә булһа кәмселек юҡҡа сыға. Ә бына психик яҡтан... Үҙ кисерештәре буйынса белә профессор — аҙналар буйына күтәренке кәйефтә йөрөйһөң йөрөүен. Тик шундай иҫ киткес тойғолар кисереп, ғәп-ғәҙәти фани донъяларға ҡабат ҡайтыуҙары... Һыҙғыраһы ғына ҡала...

— Нур Харрасович! — Йәнгилдин һиҫкәнеп китте. Рәмзил үҙе генә ҡалғайны.— Һеҙгә һорау бирергә мөмкинме?

— Әлбиттә, улым.

— Ни өсөн Ләйсән күргән күренештәр беҙҙекенән шул тиклем айырыла? Айгөл ханым минең һымаҡ үҙенең донъяға килеүен ҡабат кисерҙе, тик ул ауыр үткәрҙе, шунда ғына айырма. Юламан Кәримовичты ла аңларға була — бында бер ни юҡ, ә һуң Ләйсән?

— Ғәжәпләнмә, улым. Тәбиғәт беҙҙе яратҡан. Унан оҫтөн булып булмай. Кеше үлгәндә «йәне сыҡты» тигәнде ишеткәнең бармы? Был ысынында ла шулай. Кеше физик яҡтан ғына үлә, ә йәне — мәңгелек. Хәтереңдә тот быны, улым. Беҙгә тиклем күп быуындар быны инҡар итеп килде, беҙҙән һуң да ул буласаҡ. Әммә бынан ғына ысынбарлыҡ үҙгәрмәй. Ләйсән һылыуҙың да йәне элек ошо ике балалы ҡатында булған. Минең аңлауымса, ул һуғыш ваҡытындағы хәлдәрҙе һөйләне беҙгә. Туҡта, туҡта, ул үҙенең дә, йәшәгән ауылының да исемен белергә тейеш. Шул ауылды эҙләп тапҡанда?! Эх-ма! — Карт үҙенең бер ҡатлыланып киткәненә үҙе үк көлөп ебәрҙе.— Һөйәкһеҙ тел ни һөйләмәй. Саҡ ҡына йәшлек һәм саҡ ҡына һаулыҡ кәрәк ине лә бит. Күпме тәжрибә үткәрәбеҙ, был тиклем яҡын ваҡыт аралығында булған ваҡиға осрағаны юҡ ине шул әлегә, — тип ҡуйҙы ул аҡланғандай.— Үҙеңдең тыуған мәлеңдә ҡабат кисергәнгә ғәжәпләнмә, улым. Был йыш осрай торған хәл. Сер итеп кенә әйтәм,— Карт мут ҡына ҡыланып Рәмзилдең янына килде һәм, бүлмәлә һис кем булмаһа ла, эйелеп ҡолағына бышылданы,— хатта ирҙәр үҙҙәренең бала тапҡандарын кисерә. Йәғни мәҫәлән, һинең алдыңда торған картлас та үҙ башынан үткәргәне бар.

Улар икеһе лә көлөп ебәрҙе. Валлаһи, Нур Харрасович янында һис ҡасан теләһәң дә томһайып ултыра алмаҫһың.



Нәнгилдин һүҙен дауам итте:

— Икенсенән, кеше үҙенең үткән ғүмерендәге ниндәй ҙә булһа ваҡиғаны хәтерендә ҡабат тергеҙеүсән. Өсөнсөһө һинең һорауға ҡағыла — был кешегә бөтөнләй ҡағылышы булмаған кисерештәр. Шуларҙың береһен булһа ла тикшереп ҡарарға ине лә бит... Юл йөрөүҙәре... ай-һай...

— Нур Харрасович, һеҙҙең менән яҡындан аралаша башлағаны бирле, минең өсөн мөғжизә тулы донъя асылды. Сөсө телләнә, тип уйламағыҙ, был ысынында ла шулай. Тик әйтегеҙ әле, ни өсөн кәрәк был ғәжәйеп тәжрибәләр?

— Тормошта яуызлыҡ тигән төшөнсә бар. Ни өсөн, уйлағаның бармы? Бер ҡараһаң, бар кешелек уға ҡаршы көүек, ә ул ҡылына тора. Быны төп сәбәбе — кеше донъянан киттем дә ҡотолдом, тип уйлай. Барыһы ла тормоштан мөмкин тиклем күберәкте алып ҡалырға тырыша, үткәндәрҙе һаҡлау, киләсәк тураһында ҡайғыртыу — һирәк-һаяҡ иҫкә төшкәндә генә. Ә бит был төптө дөрөҫ түгел. Бынан меңәр йыл элек әллә нисә быуын ата-бабаларыбыҙҙа шул уҡ беҙҙең йән йәшәгән, бер нисә быуаттан һуң беҙгә бөтөнләй оҡшамаған балаларыбыҙҙың кәүҙәһендә беҙ үк йәшәйәсәкбеҙ. Кешелек ошоно белһә, донъяла яуызлыҡ кәмер ине. Бына ни өсөн кәрәк был тәжрибәләр. Кәмселектәрҙән, ауырыуҙан ҡотолоу — ул икенсел генә...

Профессор ҡабат үҙ уйҙарына батты. Уны ошо килеш тиктомалдан ҡалдырып сығыу бер яҡтан әҙәпһеҙлек көүек тойолһа ла, фән кешеһен уйҙарынан бүлдереүҙең алама ғәҙәт икәнлеген аңлаған егет шым ғына атлап бүлмәнән сыҡты. Нимә тип әйтергә теләне һуң аҡһаҡал?

## 4

Был ваҡытҡа ни булды? Әле генә урамда ла, күңелдә лә ҡыш ине бит. Хәҙер килеп... Сибек кенә тамсылар менән бергә күңелдәге боҙ ирене, гөрләүектәр менән шаулап сихрилыҡ килеп инде егет йөрәгенә. Ваҡыт та, яңылышып китеп, күҙ әйәрмәҫ тиҙлек менән елгән тәгәрмәс араһына кереп буталған, тиерһең — елә генә. Бер нигә иҫең китмәй ине бит һинең, Рәмзил Аҡъюлов, шулаймы? Көндө төн алыштыра, таң ата ла кис була. Тик бынан ғына ни мәғәнә — күңелдә бушлыҡ. Ә һуң хәҙер... Яндан ғына елгән иҫ киткес ғәжәп донъяға ниндәйҙер сәбәп менән кинәт эләгеп киткәндәй тоя үҙен егет.

**Замандар төпкөлөнән...**

«...Мин — сәскә. Донъяларҙың шундай хозурлығын минән башҡа ерҙә кем белә?! Елбер-елбер елдәр иҫкәндә лә, күбәләктәр йырлап осҡанда ла, минән гүзәл бер моң эркелә.

Тау башында үҫкән ҡыңғырау сәскә мин. Яҙ көнө, гөрләүектәр ағып бөтөп, ерҙәр йәшелләнгәс, килдем мин был донъяға. Янымда үҫеп ултырған олпат ҡайындың япраҡтары һарғая башлаһа, минең дә ғүмерем бөтәсәк...

Һәр көн таңда ҡояш менән бергә уянам мин. Ҡояш нурҙары иркә генә итеп ҡосаҡлап алғанда, сың-сың тигән тауыш ишетерһегеҙ. Был мин булырмын. Эйе, сәскәләр ҙә һөйләшә. Улар ҙа донъяға килә һәм үлә. Рәнйетмәгеҙ беҙҙе, кешеләр.

Кисә тау башына ғашиҡтар менде. Шундай һылыу ине улар, шундай бәхетлеләр ине. Һоҡланыуымдан үҙем белгән иң гүзәл көйҙө уйнаным.

— Теләйһеңме,— тине егет һылыуға,— мин һиңә донъялағы иң гүзәл, иң моңло сәскәне бүләк итәм? — Һәм ул миңә үрелде. Үҙемдең донъялағы иң гүзәл сәскә булыуымды ишетеү рәхәт ине. Тик минең үлгем килмәй ине шул. Һеҙҙең үлем сигендә ҡалғанығыҙ бармы, кешеләр? Иң ауыр тойғо ул донъяла. Үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр кесерткән йә иһә әрем булмағаныма үкендем. Минең бит бер кемгә лә яуызлыҡ ҡылғаным юҡ. Ниңә һуң һәр бер үткән кеше минең ғүмеремде өҙгөһө килә?!

— Өҙмә,— тине ҡыҙ ҡапыл.— Үҫһен, бигерәк матур бит.

Таждарыма ике тамсы бәреп сыҡты. Ысыҡ тип уйлағанһығыҙҙыр. Күҙ йәштәре ине улар. Әллә рәнйеүҙән, әллә шатлыҡтан илай инем мин...»

* * *

«Урман ситендә талғын ғына усаҡ яна. Йонсоған һалдаттар һәр береһе үҙ эше менән мәшғүл. Ҡайһыһы өҫ-башын таҙарта, ҡоралын рәтләй, ә инде өлгөрҙәре усаҡ янына ҡырын төшөп ятып тәмәке көйрәтә.

Һуғыш бөтөргә лә күп ҡалманы. Ил сиген аша сыҡҡанға бер нисә ай самаһы ваҡыт үтте. Бигерәк тә шундай мәхшәрҙәрҙән һуң нисә йыл бергә яу яланын үткән иптәштәрҙе юғалтыу ауыр...

Һуңғы һуғышта ятып ҡалғандар урынына яңылар килде. Араларында дары еҫен ярайһы ғына еҫкәгәндәре

бар, танау аҫтына бәпкә йөндәре саҡ сыға башлағандары ла байтаҡ. Был «бәпкә йөндәре» кисәнән бирле минең арттан ҡалмайҙар. Ярай ҙа, был ротала ефрейтор Шакир Аллағолов бар, валлаһи, тим. Бынау себештәргә ауыҙ эсендә түмәрҙән сумарҙы кем әүәләр ине? Һиңә кәм тигәндә генералға ҡараған кеүек янында өлтөрәшеп торғанда, ни йәнең етеп үҙеңде солтан итеп хис итмәҫкә мөмкин, мин һиңә әйтәйем.

Һуғышты гелән батырлыҡ ҡылыуҙан ғына торған матур әкиәт тип ҡабул итәләр шул. Ул мәхшәрҙе һөйләп хәҙерҙән йәндәренә ҡурҡыу ҙа һалғы килмәй. Нисауа, өйрәнерҙәр. Беҙ гали йәнәптәре лә, әсә ҡарынынан төшә һалып, ҡулға мылтыҡ тотоп йүгермәгән.

— Бер мәл разведкаға киттем,— тип һүҙ башлап ебәрҙем, усаҡ янына рәтләберәк ятып. «Бәпкә йөндәре»нең күҙҙәре йылтырашып китте. Минең уң яҡта ятҡан Ваня ғына мут йылмайҙы, әммә көлкөһөн мыйыҡ аҫтына тыңҡыслап тыға һалып ҡуйҙы. Минең, исмаһам, разведканың «р» хәрефе менән булһа ла таныш түгеллегемде белә бит, шилма.— Бер үҙем бит, әй. Генерал үҙе килеп арҡанан тапап һөйә-һөйә ҡушты. «Бар, Шакир, — тине, — дошмандың ояһына барып, берәй «тел» алып ҡайт. Һинең батырлығыңды бөтә ғәскәр белә. Тағы ла бер тапҡыр иҫбат ит», — ти был. Риза булдым, ни эшләйһең, шундай ҙур түрә үҙе килеп һорағас. «Так точно, — мин әйтәм,— иптәш генерал, үле көйөмө, тере көйөмө, ул «телде» һә тигәнсе килтереп еткерермен». Көлә был. «Ну, Шакир,— ти,— үле булһа, ул «тел»дең хаҡы нисә тин торор икән?» Бәхәсләшеп торманым, киттем бер заман. Көн барам, төн барам. Ҡояш сыҡһа, ятып серем итәм дә, ҡараңғы төшһә, һыҙғыра-һыҙғыра артабан китәм. Барып еттем бер заман дошмандың ояһына. Ҡарайым: ни ҡала түгел, ни ауыл түгел. Ефрейтор Шакир Аллағоловтан торған бер взводтың ғына һөжүм менән алырға хәленән килмәҫ, тигән һығымтаға килдем был ауыл ишаратын ян-яғынан сығып ҡарағас. Мәғлүм ки, был осраҡта башты эшләтергә тура килә. Оҙон-оҙаҡ уйлағандан һуң, келт итеп бер нәмә иҫкә килеп төштө. Мин әйтәм, ауыл кешеһеме һин, Шакир, әллә юҡмы, шуға ла башың етмәй тора! Кәртә артлап ҡына киттем бер ваҡыт. Ауылдың бөтә мунса мөрйәләренән дә төтөн сығыуын көндөҙ үк күргән инем. Әһә, мәйтәм, күрһәтәйем әле мин һеҙгә мунсаның еллеһен. Иң тәү осрағанының уҡ янында туҡтап, ҡолаҡтарҙы ҡарпайттым. Шакирҙың танауы һиҙгер шул: эстә шабыр-шобор һыу түгелгәне, немецса мөңгөрләп йырлаған тауыштар ишетелә. Ниндәй телдә йыр һуҙырһығыҙ икән,

ҡарап ҡарарбыҙ. Мыштырлап кейенә башланы былар. Бер аҙҙан ах та ух килеп өс фриц сыҡты. Ҡарайым, әллә ни аҫыл ҡоштарға оҡшамағандар. Мәйтәм, Шакир һеҙҙең ишеләр менән бысранып та тормай. Миңә кәм тигәндә генерал кәрәк, һис юғында майоры ла бата. Ана бара юлығыҙ, тип ҡарап тороп ҡалдым арттарынан. Тағы ла икеһенең килгәне күренде. Күп уйлап тормай, мунсаға инеп, эләүкәнең аҫтына индем дә боҫтом. Килеп керҙе былар. Йыуаны арыу ғына тутыйғошҡа оҡшаған. Мине эҙләп килгәнһеңдер инде, рәхмәт төшкөр, тип эстән генә маҡтайым тегене. Икенсеһе адъютанты ине, буғай. Уныһын нәмә артынандыр кире йүгертте. Үҙе иркенләп тороп һыҙғыра-һыҙғыра сисенә. Шәп-шәрә ҡалды был. Эләүкәгә менеп ятып, рәхәтләнеп сабына башланы. Шакир ағағыҙ өҫтөнә гөрләүектәр ағып китмәһенме! Әле һин шулаймы, мәйтәм, йәһәт кенә сыҡтым да ишектәге келәне шалт — элеп тә ҡуйҙым. Ҡоттары осто әфәнденең. Иҙән аҫтынан сыҡҡан пәрей тип уйланы, буғай. Ни уҡынырға, ни суҡынырға белмәй кәкрәйеп тик тора. Ул арала адъютанты ла килеп етә һалып, ишекте тартҡысларға кереште. Шәрә тауыҡҡа пистолеттың осон ғына күрһәткәйнем, шунда уҡ аңланы мөртәт — тегеһен берике матур ғына һүҙ ҙә ҡушып әрләп, оҙатыу яғын ҡараны. Бер аҙ торғас, нимес иҫенә килде. «Ә-ә, Шакир, был һинме ни? Шулай ҡурҡытмаһаң ни була»,— ти етмәһә, хәйерһеҙ. «Минең Шакир булыуым һәр кемгә мәғлүм ки,— тием.— Шуға күрә һәләмәләрең менән шәрә ерҙәреңде ямаштыр ҙа — «марш» ишек яғына!»

Үҙебеҙҙекеләр янына еткәнсе, йүгертеп алып ҡайттым тегене. Аҡбайҙыҡы шикелле телдәре һәлберәп бөттө. Бына ниндәй «тел» алып ҡайтты Шакир ағағыҙ иптәш генералға...

Яңы килеүселәр араһында иң йәше, ситтә ултырған үзбәк егете Усманжон батырсылыҡ итеп һорай ҡуйҙы:

— Ул фриц ысынлап та һине белә инеме ни?

Күмәк көлөүҙән тирә-йүндәге ҡоштар пырхылдап осто. Ваня иһә сыҙай алмай эсен тотоп, үләнгә тәгәрәп китте».

* * *

**«Йәйләүгә күскәнгә бер көн генә ваҡыт үткән. Шуға күрә һаман да мәшәҡәттәрҙән арынып булмай. Ир-ат тирмә ҡора, бер нисәһе мал-тыуар менән булаша. Бисәсәнең эше билдәле инде.**

Минең өлкән малай Иртуған тирмә ҡороусыларға ярҙамлаша. Һүҙенә ҡолаҡ һалалар. Алла бирһә, арҙаҡлы ил ағаһы булып китер. Ырыу башы Байғүбәк бейҙең ғүмере мәңгелек түгел бит. Бер саҡ миңә лә был яҡты донъяны ҡалдырырға тура килер.

Кесе малай Айтуған ниңәлер күренмәй. Ул дыуамал яндырайланып берәй эш боҙоп йөрөмәһә ярай ҙа. Бер ата-әсәнән тыуған балалар ҙа шул тиклем оҡшамаҫтар икән. Ырыу башы итһәң, саҡ ҡына ыҙғыш өсөн дә ир-атты ҡорал тоттороп яуға алып сыҡмаҫ тимә.

Мин үҙебеҙҙең икһеҙ-сикһеҙ биләмәләргә һоҡланып уйға батып торғанда, тирмәнән байбисә Маһиямал туҫтаҡ тотоп килеп сыҡты:

— Мә, атаһы, яңы ғына эшләнгән ҡымыҙ, ауыҙ ит.

— Эх-х, ҡымыҙы ла ҡымыҙы, електәреңә төшөп китә!

— Айтуған ҡайҙа китте, әйтмәнеме?

— Ул, йәйләүҙең арғы сиген ҡарап киләм тип, атҡа атланып киткән ине, ниңәлер күренмәй.

Ул арала түбәндә юл буйлап бер һыбайлының килгәне күренде. Тәүҙә уны Айтуған тип уйлаһам да, ат яҡынлая төшкәс, улай түгеллегенә ышандым. Бындай алмасыбар төҫтәге ат беҙҙең өйөрҙә юҡ. Кем булырға мөмкин? Кем булһа ла — дуҫмы, дошманмы — ғөрөф-ғәҙәтте ихтирам итеп ҡунаҡсыл ҡаршылау тейеш. Бисәләргә һыйхөрмәт әҙерләргә ҡушып, яурынға ҡыҙыл бәрхәт еләнде һалып сыҡҡансы, һыбайлы ла килеп етте. Ул Тамъян ырыуының тирә-яҡҡа билдәле батыры Ҡыҙрас булып сыҡты.

— Әссәләмәғәләйкүм.

— Вәғәләйкүмәссәләм, батыр, хуш киләһең.

Ҡыҙрас батыр атынан төшөп доға ҡылды, унан һыбай килеүҙән талсыҡҡан кәүҙәһен яҙып һелкенеп алды. Уның мөһәбәт кәүҙәһенә, көс ташып торған беләктәренә һоҡланып ҡараным. Минең үҙемдең ырыуҙа ла батырҙар етерлек, аллаға шөкөр, әммә Ҡыҙраҫ батырҙарҙың да батыры шул.

Беҙ аҡ тирмәгә үттек. Батыр түргә аяҡтарын бөкләп менеп ултырҙы.

— Шунан йорт-ер, мал-тыуар именме?

— Зарланмайбыҙ, батыр. Йәйләүгә кисә генә күсеп торабыҙ. Күрән арыу ғына ҡалҡҡан, мал-тыуар утығып китер, алла бойорһа.

Ул арала ҡатындар табаҡ менән боҫо борҡоп торған ит, туҫтаҡтарға һалып, ҡымыҙ сығарып ҡуйҙы. Мин уларҙы ҡунаҡтың алдынараҡ этәрә бирҙем. Ҡыҙрас кеүек билдәле батыр тиккә йөрөй булмаҫ. Шуға ла һағайы-

бырак калғайным. Ул быны шунда уҡ һиҙҙе, шикелле. Хәл-әхүәл һораштырып бер аҙ ултырғас, ҡатын-ҡыҙҙың тирмәнән сығып киткән мәлендә, туҫтаҡты ситкәрәк этәреп, миңә бороллдо:

— Йорт-ил тыныс түгел, Байғүбәк бей.

— Әллә тағы ла ҡан-ҡойошмо?

— Шулайға әйләнеп китеүе лә бар. Юрматыларҙың ерен тартып алып, батша ниҙер төҙөргә әмер биргән. Юрматы егеттәре уларҙы үткәрмәгән. Ата-бабалар һөйәге ятҡан ерҙе тота килеп кафырҙарға бирергә кем риза булһын. Иртәгеһенә һалдаттар килеп бер нисә ауылды яндырған... Бөтә башҡорт иле хәҙер умарта күселәй гөжләй. Беҙ урыҫ батшаһына еребеҙ-ниебеҙ менән ул уны тартып алһын өсөн ҡушылмағанбыҙ, тиҙәр. Ирәндек итәгендә өс көндән йыйын була, бөтә ырыуҙарҙың да аҡһаҡалдарын саҡыралар. Ошо ваҡыт эсендә егеттәреңде барлап, һуғыш кәрәк-яраҡтарығыҙҙы әҙерләп тороғоҙ.

Ҡыҙрас батыр ашыға ине булһа кәрәк. Үрелеп тағы ла бер йотом ҡымыҙ уртланы ла ҡуҙғала башланы. Мин уны ултыра бирергә ҡыҫтап торманым, бының урынһыҙ булыуы көн кеүек асыҡ ине.

— Ярай, Ҡыҙрас батыр, хәлдән килгәндең барыһын да эшләрбеҙ. Егеттәрҙең сослоғонан зарланған юҡ.

— Хуш итәйек.

Ҡыҙрас батырҙың аты күҙҙән юғалғансы ҡарап ҡалдым. Эх, башҡорт ере, тағы ниҙәр көтә һине?»

## 5

Кем һин Рәмзил Аҡъюлов? Сибек кенә ҡыңғырау сәскәме, әллә ерен һаҡлап яуға ҡалҡҡан ир-уҙаманмы? Сәйер, әле ҡасан ғына егеттең башына бындай уйҙың инеп тә сыҡҡаны юҡ ине. Хәҙер иһә ҡарамаҡҡа ябай ғына һорауға яуап таба алмай йөҙәй. Ул үҙен хәҙер өн менән төш араһында буталған кеүек хис итә. Айырма шунда ғына: төш тигән нәмә өҙөк-һурыҡ ҡына, ә инде был кисерештәр, башҡа ла һыя алмаҫ күренештәр, әйтерһең дә, егет унда йәшәгән һымаҡ итеп, Рәмзилде үҙенә тартып ала.

Кисерештәр күберәк булған һайын шуны ла аңлай ине ул: бынан һуң тере сәскәне өҙөү түгел, кескәй генә йән эйәһен дә йәберләргә йөрәге етмәйәсәк. Ҡайһы саҡта үҙендә сәйер тойғо барлыҡҡа килеүенә үҙе лә аптырай: әйтерһең дә, ул бер үк ваҡытта Рәмзил дә, түгел дә

кеүек. Мәле менән үҙ-үҙен ситтә күргән, ҡыланыш-ҡиәфәтен күҙәткән һымаҡ хис уяныуына ғәжәпләнә.

Үҙ заманына хас һыҙаттарҙан ул да азат түгел ине: битарафлыҡ, тоҡанып барыусанлыҡ. Егет үҙендә башҡаларға үҙ-үҙенә ҡараған һымаҡ тойғо уяныуын тойҙо: әйтерһең дә, бына ошо таяҡ таянып көс-хәл менән өҫтөрәлеп килгән ҡартта уның боронғо ата-бабаларының йәне көшәй. Үҙ бабаң ярҙамға мохтаж булғанда, кем тыныс үтә ала?

Бөтә кешеләр ҙә туғандар... Ҡайҙан һуң был юлдар? Ә, эйе, осраҡлы ғына ҡулына килеп ингән бер китаптан уҡығайны егет. Боронғо замандарҙа изгеләр йыш ҡабатлай торған булған ул һүҙҙе. Кем белә, бәлки, ысындыр ҙа...

Үҙен ырыу башы итеп тойғандан һуң, быуынының фәжиғәһен Рәмзил бар булмышы менән аңланы: егеттең йөрәгендә бер ҡасан да ерен әсәһен яратҡан кеүек яратыу хисе булғаны, уның буйлап ирекле һәм ғорур атлап үткәне юҡ. Әйтерһең дә, ул бер ҡунаҡ ҡына. Байғүбәк бей, кисер тоҡомдарыңды. Кисерә алһаң...

Усаҡ янында ятҡан һалдаттарҙы ҡалдырып, үҙ еренә һоҡланып ҡарап баҫып торған Байғүбәк бей булып әүерелгәнсе, егеттең йәне йылҡылдап торған иҫ киткес мәңгәрлек араһында аҙашып йөрөнө. Унан ҡайҙандыр сәскәләргә күмелгән сәхрә пәйҙә булды. Бындай кинәнес рәхәтлекте уның бер ҡасан да кисергәне юҡ ине. Әле бына дәрестәр бөткәндән һуң, ҡайҙа барып бәрелергә белмәй йөрөгән егетте ошо хисте һағыныу һымаҡ тойғо биләне. Бәлки, ҡала баҡсаһына юл тоторғалыр? Хәҙер май айы, унда ла матур ҙа баһа. Күп уйлап торманы Рәмзил, исем өсөн бер китапты эләктерҙе һәм яҡындағы ҡала баҡсаһына йүнәлде. Тюльпандар күпереп үҫкән йәшеллекте бер-ике тапҡыр урап сыҡты. «Эй, донъя... Һинең ығы-зығыларыңа күмелеп, кинәнес тигән тойғоно онотҡанбыҙ... Күңелдәр һуҡырайғанмы? Ниңә?..»

Рәмзил, артабан ни эшләргә белмәй, фонтан эргәһендәге ултырғысҡа килеп ултырҙы. Күңелендә бушлыҡ ине. Үҙ уйына сумған егет бер мәл үҙенә төбәлгән ҡарашты һиҙҙе, әйтерһең дә, арттан кемдер быраулай. Һирпелеп ҡарағайны, тертләне: бер нисә аҙым ғына ситтәрәк Ләйсән ултыра ине. Ирен ситтәрендә йылмайыу уйнай. Рәмзилгә кинәт еңел булып китте — әйтерһең дә, ул тап ошо ҡыҙҙы эҙләгән.

— Һаумы, һылыу, — тине ул ябай ғына итеп, һәм үҙе лә ғәжәпләнде: сибәркәйгә бер һүҙ өндәшһә лә, теле тотлоғор кеүек ине.

— Зарланған юҡ, иптәш табип. Сирләһәм, әллә дауаларға иҫәбең бармы?

— Әгәр ҙә ул йүнһеҙ нәмә килеп ҡағыла ҡалһа, бер йылмайып миңә ҡарауың етә — сығып ҡасҡанын һиҙмәй ҙә ҡалыр.

— Йә, әйтәм, баҡсаны арҡыры-буйға бер нисә тапҡыр күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә үтеп киттең, «Тиҙ ярҙам» машинаһы булып сыҡтың да баһа.

— Хоҙайҙан Ләйсән атлы сибәркәйҙе тап ошо ваҡытта сәскәләр араһында осратырға булыш, тип үтенгәйнем, ярҙамынан мәхрүм итмәне, рәхмәт төшкөрө.

— Эштәр улайға киткәс, ағайым хоҙай тәғәлә булып сыҡты түгелме һуң? Бына, белмәй йөрөлгән. Ул мине баҡсаға саҡырғайны бит.

Ләйсән фонтан яғына ымланы: унда Рауил иңбаштарына төшөп торған һары бөҙрә сәсле ҡыҙ менән әңгәмәләшә ине.

— Рауил Рәхимович! — Рәмзил ихлас аптыраны.— Ул һинең ағайыңмы ни?

Ләйсән телен тешләне. Ләкин хәбәр сығып осҡайны инде.

— Эйе, ике туған ағайым. Тик һин был турала бер кемгә лә әйтмә, йәме. Уныһы ла, бынbackҺы ла осраған һайын һүҙ ҡушып йөҙәтә. Былай тынысыраҡ. Әйткәндәй, кафедралағы уҡытыусыларҙың ҡайһы берҙәре беҙҙе кейәү менән ҡыҙ, тип уйлай, шикелле,— тине лә ҡыҙ көлөп ебәрҙе.

— Рауил Рәхимовичтың ғәзиз башын был һары ла сәс зил-зилбәр әйләндергән, ахыры, һылыуын урлап киткәнде лә күрмәҫ.

— Әллә урларға ла йыйынаһыңмы?

— Сама юҡ түгел. Был мөһим эшкә әҙерлек йөҙөнән, баҡсала йөрөп әйләнергә тәҡдим ҡылам.

Ләйсән ултырып ялыҡҡайны шикелле, күп уйлап тормай риза булды. Улар, әкрен генә атлап, ағастар араһынан китте. Бер аҙ шым барҙылар.

— Ләйсән, әйт әле, һин нисек Нур Харрасовичтың сеанстарына барып эләктең?

— Бында бер ҙә ғәжәпләнәһе түгел. Мин Нурания апайымдарҙа йәшәйем бит. Әсәйемдең бер туған һеңлеһе ул.

— Рауил Рәхимовичтың әсәһе булып сығамы ни?

— Эйе. Еҙнәм осоусы ине, һауала янды. Рауил ағайым да тәүҙә осоусы булырға хыялллана ине, апайым ҡаршы булды. Нур Харрасович осрамаһа, бәлки, ул һаман да үҙ-үҙенә урынды ни һауала, ни ерҙә таба алмай йонсор

ине. Мин уларға мәктәптә уҡығанда уҡ йыш килә инем. Ағайымдың ни тиклем мөкиббән булыуын күреп, үҙем дә табип булырға хәл иттем. Үткән йыл, мәктәпте тамамлағас, имтихандар биргән инем, инеп булманы. Шунан киске бүлектә уҡый башланым. Күреп тораһың, бында бер ниндәй ҙә осраҡлыҡ юҡ.

— Беләһеңме, теге ваҡытта Нур Харрасович сеанс ваҡытында аң тергеҙгән берәй ваҡиғаны тикшерергә ине, тип ысҡындырҙы. Тик һаулығы булмағанға ғына тәүәккәлләй алмай. Асыҡларға ышаныс бар, тип теге... һинең... утынға барған мәлеңдә телгә алғайны. Шундағы үҙеңдең исемеңде, ауылыңдың нисек аталғанын иҫләй алмайһыңмы?

— Көтөп тор, самалап ҡарайым.— Ләйсән маңлайын устары менән ҡыҫып, яҡындағы эскәмйәгә барып ултырҙы.

— Хәтимә... Хәбирә лә түгел. Эйе, эйе, ап-асыҡ иҫләнем — Хәтирә ине исемем. Ауыл исеменә килгәндә.... Ул ауыл бер йылғаны иңләп ултырғайны. Ниндәйҙер ырлап торған исем. Туҡта, ниндәйҙер ағас атамаһы түгел инеме икән? Беҙҙең яҡта ниндәй ағастар үҫә, һана әле.

— Ҡайын, имән, тал... ерек, ҡарағай... миләш, йүкә...

— Иҫләнем — Миләшле!

— Ләйсән, әллә китапханаға инеп, картанан ҡарайбыҙмы?

— Ысынлап та, бәлки ҡайһы тирәлә икәнен асыҡлай алырбыҙ.

Китапханаға инеп, кәрәкле картаны табыу ҡыйын булманы. Тик күпме эҙләмәһендәр, таныш яҙыу күҙҙәренә салынманы. Икеһенең дә кәйефе бер аҙ киткәйне. Асыш бына-бына булыр кеүек ине бит.

— Борсолма, һылыу, ул тиклемен белгәс, берәй яйы сығыр.

Урам буйлап атланылар.

— Һине өйөңә тиклем оҙатырға мөмкиндер бит?

Ҡыҙ өндәшмәне. Ул бынан бер нисә тиҫтә йыл элек Миләшлелә булған ваҡиғаларҙы ҡабаттан кисерә ине булһа кәрәк.

Ҡайтып та еттеләр. Рәмзил нәзәкәтле генә ҡыланып ҡыҙҙың ҡулынан үпте. Үҙ уйҙарына батҡан ҡыҙ моңһоу ғына йылмайҙы, әммә егеттең күңелен күтәрергә ошо ла етте.

Рәмзил дөйөм ятағына юл тотто. Күңелендә шундай рәхәтлек, был урғып килгән ҡыуаныслы хис егетте тик-

томалдан йылмайырға мәжбүр итә. Ҡаршыға осраған халыҡтың сәйерһенеп ҡарауына ла иғтибар итмәй, егет көләмһәрәп атлауын белде.

## 6

Поездан төшкәс, тыуған ауылының алыҫтан күренгән йорттарына ҡарап, Рәмзил елкенеп ҡуйҙы. Ауылға был арала ғына ҡайтырға йыйынмай ине ул. Ләкин кисә Ләйсәнде оҙатып ятаҡханаға ҡайтҡанда, уны телеграмма көтөп торған. «Ҡустың армиянан ҡайтты, мөмкинлегең булһа, ҡайтып ет» тиелгәйне унда. Шәмбе көн дәрестәр бөткәс, егет, күп уйлап тормай, юлға сыҡты. Әле йүгерә-атлай ата йортона ҡайтып килгән көнө.

Рәмзил юлдың тирә-яғында күпереп үҫкән сәскәләргә күҙ һалды. Берәй заман ошо сәскәләр ҙә һулып, кеше булып әүерелерҙәрме икән? Ә, бәлки, йәндәре көслө һәм йыртҡыс януарға күсер? Ғәжәп... Әле улар сибек кенә, ғүмерҙәрен ҡыйырға әллә ни күп көс түгәһе лә түгел. Ә инде януар алдында ҡоралһыҙ кеше үҙе үк сәскә хәлендә. Шулай ҙа мөғжизә был донъя. Әкиәттәрҙәге бер йән эйәһенең икенсегә әүерелеүен төптө буш уйҙырма тип иҫбатлап ҡара һин шунан.

Легенданы иҫләй Рәмзил — бер яһил уғры, әсә ҡарғышын күтәрә алмай, юл ситендә суҡырайып торған таш булып әүерелгән, имеш. Ышаныуы ла ауыр. Әммә ни генә тиһәң дә, ул кешенең йәне күлде наҙлап йөҙөр аҡҡошта йәшәмәҫенә иманы камил. Был донъяла яман менән яҡшы тигән төшөнсә булғас, моғайын, уларҙы айыра торған сик тә булырға тейештер. Кеше донъяла ҡылған ҡылыҡтары өсөн теүәл баһа алалыр бит.

Йорт ихатаһына арт яҡлап яҡынлашҡан Рәмзил алыҫтан уҡ шарт-шорт утын ярған тауышты ишетте. Механизатор булып эшләгән атаһы был ваҡытта утын ярыу түгел, яҙа-йоҙа төшкөнө ашап сығырға саҡ өлгөрә. Санъяр булышалыр, йорт эшен һағынғандыр инде.

Арт ҡапҡаның асылғанына боролған Санъярҙың йөҙө яҡтырып китте, шундуҡ балтаһын ташланы.

— Һаумы, ағай.— Яҡын килгәс, ҡосаҡлап уҡ алды.— Һине кисәнән бирле көтәм. Барыһын да күреп бөттөм, бер үҙең ҡалып бараһың.

Рәмзил ҡустыһын баштан-аяҡ күҙҙән үткәрҙе. Ҡара һин уны — баҙыҡ кәүҙәле ир-егет булған да киткән. Үҙ-үҙен тотошонда мәртәбәлелек, һалмаҡлыҡ һиҙелә.

Йортҡа инделәр. Әсәләре аш бүлмәһендә газ плитәһе эргәһендә булаша ине.

— Эй, улым, тамаҡ тип, ҡайтҡаныңды ла күрмәй торам.— Сания апай килеп улының арҡаһынан яратып алды.

Ашап алғас, егеттәр залға үтте. Санъяр диванға барып ултырҙы.

— Беләһеңме, ошо минуттар тураһында мин күпме хыялландым. Тыуған йорттоң ҡәҙере ситтә генә беленә икән.

Рәмзил ҡустыһының янына килеп ултырырға уйлаған ине, йоҡо бүлмәһенең асыҡ ишеге аша көҙгө алдында ятҡан фотоальбомды күреп ҡалды.

— Һинең һалдат альбомымы? — тип һөйләнеп барып алды, шунан ҡустыһының янына килеп ҡунаҡланы.

Санъяр альбомды уртаға һалып, иркенләп ағаһын таныштыра башланы:

— Быныһы беҙҙең взвод... иптәш егет. Ҡурған өлкәһенән... Күнекмәләр ваҡыты. Гонаһты йыуырға мунсаға китеп барабыҙ...

Рәмзил һөйкөмлө генә ҡыҙҙың һүрәтенә иғтибар итте.

— Кем был? Бер кем менән дә дуҫлашманың, шикелле?

— Ә мин уны күргәнем дә юҡ. Һүрәте буйынса ғына беләм. Дим буйы ҡыҙы. Дуҫым Ришат адресын биргән ине. Алыҫта саҡта хат өмөт кеүек йәнде йылыта... Ә-ә, бына Ришат үҙе лә. Минең иң яҡын дуҫым. Ул бында минең менән килгәйне, бер көн йоҡланы ла һөйөклө Миләшлеһенә ҡайтып китте.

Рәмзилдең тәнен ток һуҡҡан һымаҡ булды.

— Нимә тинең? Ҡабатла әле! Яңылыш ишетмәнемме? Миләүшә тинеңме, әллә Миләшлеме?

Санъяр ағаһына ғәжәпләнеп ҡараны.

— Ну, Миләшле. Шунан ни булған? Уның нимәһенә аптырарға?

— Йә, хоҙай... Былай тиҙ генә табылырына ышанмаған да инем...

Ишекле-түрле йөрөгән Рәмзил ҡустыһының бер ни аңламаған ҡараштарын тотоп алды.

— Һиңә нисек аңлатырға? Ике һүҙҙә генә һөйләй торған нәмә түгел.

Рәмзилдең ярһыуы бер аҙ үтте. Туҡта, ниңә ул шул тиклем йөрәкһеп китте әле? Бәлки, ул ауыл булмаҫ. Аҙмы ни республикала оҡшаш исемле ауылдар. Шулай ҙа күңеле менән һиҙә — бында ниҙер бар.

— Йәл, дуҫыңдың бында сағына тура килмәнем,— тине ул күңелһеҙләнеп.

— Борсолма, ағай, ул мине үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡырҙы, бер-ике аҙнанан, бәлки, юлланырмын да. Мөмкинлегең булһа, әйҙә.

— Санъяр, беләһеңме, был шул тиклем мөһим эш.

— Аңланым, һин юҡҡа ғына былай ярһымаҫһың инде. Ул яҡҡа тик Өфө аша ғына барырға мөмкин бит. Мин бынан тура һинең яныңа барырмын, унан бергәләп китербеҙ.

— Тик өс аҙнанан беҙҙең имтихандар башлана, бәлки, икенсе аҙнала уҡ юлланырбыҙ?

— Ниңә, мөмкин. Мин дә ай буйы ата-әсә елкәһен кимереп ятырға йыйынмайым.

## 7

Рәмзил әленән-әле сәғәтенә күҙ һала. Ләйсәндең фатирында бына ярты сәғәт инде ул ҡыҙҙы көтә. Уныһы бөгөн, юрый тиерһең, Рәмзил эҙләп табам, тигәндә генә, ҡайҙалыр юғалып ҡуя. Шуға ла түҙмәй фатирына килеп еткәйне.

Ниһәйәт, ишектә ҡыңғырау шылтыраны. Егет үрелеп көҙгөгә күҙ һалды. Ләйсән залға ингәндә, Рәмзил ҡарашын алып өлгөрмәгәйне. Ҡыҙ быны күреп көләмһөрәне, әммә йылмайыуын тиҙ генә йәшерҙе.

— Һаумы, Рәмзил, һис тә көтмәгәйнем.

— Һин аңлайһыңмы, мин Миләшле ауылын таптым!

Ләйсәндең тыныслығы һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты.

— Таптың? Ҡасан? Ҡайҙа ул?

— Дим буйында. Ҡустым армиянан ҡайтты бит, ул әйтте.

— Нисек ҡустың әйтте? Ул уны ҡайҙан белә?

Рәмзил өҙөк-һурыҡ һөйләп бер нәмә лә аңлата алмаҫын төшөндө. Ҡабат урынына ултырып күҙҙәрен йомдо, күкрәктәрен тултырып тын алды ла тыныс ҡына дауам итеп китте.

— Ҡустымдың бергә хеҙмәт иткән дуҫы бар, ул Миләшле тигән ауылдан булып сыҡты. Беҙҙең ауылда булған ул, әммә мин ҡайтҡансы китеп өлгөргән. Киләһе аҙнала Санъяр дуҫы янына йыйына, минең унан ҡалырға уйым юҡ. Һине лә барырға ҡоҙалайым. Тап шул ауылмы — әйтә алмайым. Әммә бындай мөмкинлек сыҡҡанда ҡул ҡаушырып ултырырға ярамай.

Ләйсән ниҙер уйлап алды. Кескәй сумкаһынан ниндәйҙер ҡағыҙҙарҙы бушата-бушата, Нурания ханыма өндәште:

— Апай! Мин ашап тормайым. Беҙ Нур Харрасовичка барып киләбеҙ, мөһим эш бар.

— Һин иртәнән бирле ризыҡ ҡапмағанһың бит, ашҡаҙаныңды боҙаһың инде,— тип Нурания ханым шелтәләп ҡалды.

Бәхеткә, профессор өйөндә булып сыҡты. Мәш килеп өҫтәл тирәһендә ниндәйҙер тәғәм әҙерләп ята ине.

— Әйҙәгеҙ, балалар, маҡтап ҡына йөрөйһөгөҙ икән,— тип ҡаршы алды ҡарт.

— Бер өҫтәл эргәһенән ҡасҡайныҡ, хоҙай бер ҙә ҡотан үлтергеһе килмәй,— тип һөйләнә-һөйләнә, Рәмзил ҡартҡа булышырға кереште. Ләйсән бер яҡ ситтә эленеп торған алъяпҡысты биленә быуып алды. Ҡарттың янында улар күптән үҙ кешегә әйләнеп бөткәйнеләр инде.

Өҫтәл янына ултырғас, Рәмзил шунда уҡ әйтәһе хәбәренә күсте. Уны иғтибар менән тыңлаған ҡарттың йөҙө торған һайын яҡтыра барҙы. Бер аҙҙан ул тороп уҡ китте, арлы-бирле йөрөнә башланы. Был уның ныҡ тулҡынланыуы хаҡында һөйләй.

— Һым... Киләһе аҙнала тиһегеҙ инде. Тәк... Тәк... Бер генә көн етмәҫ бит әле, балалар. Фән эше әкәм-төкәм түҙәй торған ҡурсаҡ өйө түгел. Бына нәмә, мин иртәгә деканмен һөйләшермен, һеҙгә өс көн командировка юлларбыҙ. Иркенләп, төбөнә төшөп ҡайтырһығыҙ.

Ләйсән менән Рәмзил бер-береһенә ҡарашып ҡуйны — был тиклемен улар көтмәгәйне.

— Килеүегеҙ яҡшы булды әле.— Ҡарт, инде тынысланып, өҫтәл артына килеп ултырҙы.— Был аҙнала беренсе сеанс үткәреп алырға кәрәк — ваҡыт ҡыҫа. Йәйге яҙға тараләһығыҙ бит. Үткәндәгеләрен дә тикшерергә кәрәк. Шаршамбы һәм кесаҙна көндәре тип самалайбыҙ, үҙгәреш булһа, һеҙгә әйтмәй ҡалмабыҙ.

## 8

Йәнгилдиндең фатирына Рәмзил Рауил Рәхимович һәм Ләйсән менән бергә барып инде. Ғәжәпкә, унда таныш булмаған ике ир кеше һәм оло ғына ҡатын да бар ине. Нур Харрасович бөтә сеанстарҙы ла бер үк кешеләр менән үткәрә икән, тип уйлаған Рәмзил яңылышты. Ғалим яңынан-яңы кешеләрҙе ылыҡтыра икән. Күптәре, сирҙәренән йә иһә кәмселектәренән арынып, профессор-

ға изгелек теләп, үҙ юлдары менән китә, бик һирәктәре генә был ғәҙәти булмаған шөғөлдө яҙмыштары итеп һайлай.

Улар барып ингәндә, Нур Харрасович оло йәштәге ханым менән әңгәмәләшә ине. Был ханым күптән ялға сыҡҡан, медицинаға бер ниндәй ҙә ҡағылышы юҡ икән. Профессор янына уны бик күптәнге сире килтергән. Күренеп тора — ханым бик ҡәнәғәт.

— Күпме интектем шул зәһәр сирҙән, — тип дауам итте ул.— Бала саҡтан бит, йә инде. Әле иһә ике сеанстан һуң юҡҡа сыҡты. Астма тигән нәмә хәҙер ике ятып бер төшөмә инмәй. Ниңә һеҙ элегерәк осраманығыҙ һуң, Нур Харрасович?

Профессор ауыҙ сите менән генә көлөмһөрәп ҡуйҙы, әммә иреп китмәне.

— Тағы ла ниндәй үҙгәрештәр һиҙәһегеҙ?

— Миңә ни, шуныһынан ҡотолғас, башҡалары бер ни тормай кеүек тойола.— Ханым ныҡ тулҡынланыуҙан йәшкәҙәгән күҙҙәрен ҡулъяулыҡ осо менән ҡоротоп алды ла артабан дауам итте.— Хәйер, бер айҙай ғына ваҡыт үтте бит әле. Әгәр тағы ла ниҙер булһа, килермен. Минең был аяҡтар больница тупһаһын тапап сынығып бөткән инде.

Фатима ханым, кинәт иҫенә төшкәндәй, ҡапыл ғына урынынан торҙо.

— Эй, онотоп ултырам да,— тине ул ғәйепле кешеләй. Кире ингәндә уның ҡулында баҙлап торған роза сәскәләре ине.— Быныһы һеҙгә, ысын йөрәктән. Башҡа бер нәмә лә алмаҫығыҙҙы белгәнгә сәскә килтерергә генә батырсылыҡ иттем.

Ләйсән кухняға сығып тиҙ генә һыулы ваза тотоп керҙе.

— Ярай, мин ҡайтайым инде.— Фатима ханым урынынан ҡуҙғалды.

Нур Харрасович сәскәләрҙе Ләйсәнгә тотторҙо.

— Бөгөнгө сеансҡа ҡалмайһығыҙмы?

— Юҡ, рәхмәт барығыҙға ла. Ҡалған ғүмеремә генә был һаулығым етәр инде.

Шул бер-ике сеанс барышында ғына ла был ханым үҙ кеше булып өлгөргәйне, күрәһең, барыһы ла уны йылы оҙатты. Хәйер, Рәмзил һәр сеанс барышында шундай кисереш үткәрә — танышмы-түгелме, бөтә донъя кешеләрен үҙ тәненең органдары һымаҡ яҡын итеп ҡабул итә башлай. Нур Харрасович янына йөрөгән бөтә кешеләр араһында ла иҫ киткес йылы мөнәсәбәт урынлашыуы ла шунан түгелме икән? Сеанстар ваҡытында

шундай хәлдәр ҙә булғылап тора — кеше үҙен организмдағы йә ҡул, йә йөрәк, һис юғында, тырнаҡ итеп тойорға мөмкин. Унан килеп тап киреһе: шул уҡ кеше үҙен ауыл, ҡәбилә, хатта милләт итеп ҡабул итә башлай.

Әле лә хәтерләй егет: икенсеме, әллә өсөнсөмө ҡатнашҡан тәжрибәлә Рәмзил кеше организмында... бөйөр булыуын тойҙо. Уға бик ауыр ине — ниндәйҙер кескәй генә түңәрәк нәмәләр ауырттырып-ауырттырып ала, түҙер генә әмәл юҡ. Илар сиккә етеп уларҙан ҡотолорға тырыша, булмай... Һуңынан ғына ошо мәл иҫенә төштө егеттең. Һәр ваҡыттағыса ай һайын була торған тикшерелеүгә барған мәлдә генә. Бөйөрҙәге таштарҙан күптән интегә ине ул. Әле лә ауыртыу тоймаһа ла барғайны. Әммә ғәжәп — таштар юҡҡа сыҡҡайны. Дауалаусы табип бик ҡәнәғәт ҡалды: «Ниһәйәт, һауыҡтырҙым!» Рәмзил уның кәйефен боҙғоһо килмәгәнгә был турала өндәшмәне.

Нур Харрасович йыш ҡабатлай: «Һеҙ үҙегеҙҙе билдәле бер кисерешкә әҙерләмәгеҙ, бының файҙаһы юҡ. Ниндәй тойғо кәрәклеген организм үҙе белә...»

...Теге таныш түгел ирҙәрҙең дә береһе ҡайтырға ҡуҙғалды. Икенсеһе ҡыҙыҡһыныуын еңә алманы, шикелле. Уның ҡарауы, был юлы ниңәлер Айгөл ханым күренмәй.

Сеансты башлар алдынан Нур Харрасович ҡабаттан Рәмзилгә өндәште:

— Һин, улым, клиник үлем мәлендә тирә-яҡтағы хәлдәрҙе ни өсөн белергә мөмкин икәнлеген асыҡлай алдыңмы-юҡмы? Шуның арҡаһында тотош китапхананы уҡып бөтә яҙғаныңды әллә оноттоңмо?

— Әгәр ҙә шундайыраҡ мөғжизә була тиһәләр, шуның өҫтәүенә тағы бер-ике китапхананы һыуҙай эсеп сығырға ризамын, — тине егет бирешергә теләмәй. Унан, етди ҡиәфәткә инеп, өҫтәне: — Минең уйымса, йөрәк тибеүҙән туҡтағас, кешене йәне ҡалдырған булып сыға. Клиник үлем мәлендә ни тиклем тиҙерәк ярҙам күрһәтеп өлгөрһәң, йәнде кеше тәненә ҡайтарырға өмөт шул тиклем ҙурыраҡ. Ҡайһы бер осраҡтарҙа ошо хәлдәге кеше үҙен алыҫта, мәҫәлән, болонда, сәскәләр араһында тип хис итә. Шундай осраҡтарҙың да булғаны бар.

— Афарин, мырҙам! Кәм тигәндә генеральный секретарь булһам, үҙеңде ошо минутта уҡ берәй әҙәмсәилгә симпозиумға ебәрер инем, валлаһи, кем.

Рәмзил үҙенең ярһып-ярһып һөйләүенә әле генә иғтибар итте. Әммә уңайһыҙланманы. Нур Харрасовичтың яратып ҡына шулай һөйләнеүен белә ул. Тик егет тыныс

түгел. Йәнгилдин үҙен барыһы менән дә, әйтерһең дә, һуңғы тапҡыр күргән һымаҡ тота. Шуға күрә Рәмзилдең йөрәге баянан бирле ҡыҫып-ҡыҫып ала ине.

## 9

### Замандар төпкөлөнән...

«Мин был ауылда күптән түгел генә. Ауыл хужалығы институтын тамамлағас, агроном итеп ебәрҙеләр мине был колхозға. Бәлки, бөтөнләй башҡа ергә лә эләгер инем, әсәйҙең һаулығы шәптән булмағас, яҡыныраҡҡа, тыуған ауылым Чернушкиҙан алыҫ түгел ергә һорарға тура килде. Етмәһә, бер нисә йыл элек һуғышта алған яраларынан мандый алмай атай донъя ҡуйҙы. Һуғыш бөтөргә бер йыл ҡалғас, ауыр яраланып ҡайтҡайны ул. Хәйер, ҡайтҡайны тип әйтеү бигүк дөрөҫ тә булмаҫ. Мин һуғыштан һуң донъяға килгәнмен. Апай менән ағайҙың үҙ донъялары бар. Ауырыу әсәйҙе ҡарау хәҙер минең өҫтә. Аслы-туҡлы йәшәү бөргәндер инде — ашҡаҙанынан сыҙай алмай.

Мин эшләгән поселоктың больницаһы бар, шуға күрә әсәйҙе үҙ яныма алырға уйлайым. Тик риза булырмы-юҡмы — шуныһы ғына икеле. «Атайың һөйәге ятҡан ерҙе нисек ташлап китәйем инде»,— тиәсәк. Аҙна һайын Силәбенең икенсе башына ҡайтып йөрөүе лә мөмкин түгел — ваҡыт көндән-көн ҡыҫыҡлана. Берәй әмәлен табырға тура килер.

Елкенеп-ҡанатланып килеп төштөм мин был яҡтарға. Һуғыш ваҡытында тыуып өлгөрмәнем, йәл. Исмаһам, хәҙер, тыныс тормошта булһа ла, халҡыма хеҙмәт итергә тейеш мин. Ҡаланан ауылдарға йөҙәрләп түгел, меңәрләп йәш йөрәктәр ағылған мәл бит хәҙер. Ауыл эшсәндәре үҙҙәре лә уңған. Тик күбеһен һуғыш ҡына йотҡан шул.

Ләкин... Килеп төшөү менән ғәжәпкә ҡалдым. Ауыл, ҙур ғына булыуға ҡарамаҫтан, ташландыҡ хәлдә ине. Ошоға тиклем мин ҡайҙа йәшәгәнмен? Үҙемдең тыуған ауыл йүнлерәк хәлдәме ни? Бәлки, артыҡ өйрәнгәнгә уға иғтибар итмәгәнмендер. Сит күҙгә тиҙерәк күренә, тиҙәр бит.

Колхоз түрәләре ике-өс көнгә бер күренеп ҡала. Унда ла былай ҙа йөҙҙәре ҡасан һуңғы тапҡыр йылмайғанын оноткан ҡатын-ҡыҙға екерер өсөн генә. Бысраҡ

йырып, бөтә эште үҙ елкәләрендә тартҡан бисәләр уларҙың килеп йөрөмәүен хәйерлерәк күрә.

Ауылда йәш-елкенсәк тә бар барлыҡҡа. Әммә саҡ ҡына үҫмер йәшенә етеп килгәндәренә тиклем хәмер луҫына әйләнешеп бөткәндәр.

Ни эшләргә? «Витя, түҙ, тәүге ауырлыҡтан уҡ бөгөлөп төшөргә оят түгелме һиңә?» — тинем үҙ-үҙемә. Йыйылыш үткәреп, ауыл халҡы менән һөйләшергә уйланым. Ләкин бер нәмә лә барып сыҡманы. Кешеләр килде килеүен, тик ҡайһылары йоҡлап ултырҙы, бәғзеләре артта кәрт һуҡты. Түрәләрҙең сығарған ҡарарын тыңлап та тормай, битараф ҡына ҡул күтәрергә өйрәтелгән халыҡ ине ул.

Кәйеф ныҡ ҡына ҡырылһа ла, сигенергә уйым юҡ ине. Тәүҙә эшсәнерәк күренгән йәшерәк ҡатын-ҡыҙ, ир-ат менән берәм-берәм һөйләшеп сыҡтым. Бөгөн, ниһәйәт, клуб тип әйтһәң, хәтере ҡалыр, әммә шулай ҙа ултырып торорға рәте булған нәмәлә йыйылабыҙ. Был юлы барып сығырға тейеш. Башҡаса мөмкин түгел.

Әле ашығып шул яҡҡа китеп барам. Йәйге матур кис. Төштән һуң ямғыр һибәләп үткәйне, аяҡ аҫты еүеш. Тын алыуҙары иркен. Бөгөн, ниһәйәт, үҙемдә күтәренке кәйеф һиҙәм. Күккә күтәрелеп ҡараған инем — йырлап ебәрә яҙҙым. Август айы — йондоҙ ямғыры мәле, тип юҡҡа әйтмәйҙәр икән. Бер-бер артлы ике йондоҙ атылды. Туҡта, нимә хаҡында уйлап килә инем әле? Тимәк, ул теләктәрем ҡабул булырға тейеш!

Клубҡа етеп килә инем инде. Шул мәл, ай яҡтыһында көрмәкләшкән әҙәмдәрҙе күреп, туҡтап ҡалдым. Дөрөҫөрәге, аҡ күлдәкле бер ҡыҙҙы күмәкләп тыҡрыҡҡа табан өҫтөрәйҙәр ине. Мин аптырап торған арала ҡыҙ ҡысҡырып ебәрҙе:

— Витя... Витя! Ҡотҡар мине, Витя!

Тауышынан таныным — был Оля ине. Унынсыны быйыл ғына тамамлаған Оля. Минең иң ышанысл ярҙамсым булырға өлгөргән Оля. Зәңгәр күҙ...

Үҙ-үҙемде белештермәйенсә, тыҡрыҡҡа ташландым. Араларына барып инеп, ян-яҡҡа этеп ебәргәнемде лә һиҙмәй ҡалдым. Ҡыҙ ҡалтыранып минең артҡа йәшенде. Ауыҙҙарынан араҡы еҫе бөркөлөп торған был өйөрҙөң бар асыуы хәҙер миңә күсте.

— Иҫән-һау сағыңда китеп ҡал! — Бынығы ике аҙна элек төрмәнән ҡайтҡан Валера ине.

— Егеттәр, мин берегеҙгә лә яманлыҡ теләмәйем. Әммә Оляны ҡыйырһытырға бирмәйәсәкмен.

— Ха! Яҡлаусы табылған. Хәҙер мин һеҙҙең икегеҙҙән дә билмән эшләйәсәкмен.— Валераның ҡулында бысаҡ ялтыраны. Ҡалған биш-алтыһы, атамандарына урын бушатып, артҡа сигенде.

Ҡайһы араладыр Оляны артҡа этәреп ебәрҙем. Ул быны шунда уҡ аңланы — төркөм албырғап торған арала, ҡоралай етеҙлеге менән клубҡа табан йүгерҙе.

Аяҡ-ҡулдар спорт күнекмәһен онотмағайны әле. Киҙәнгән Валераның ҡулына тибеп өлгөрҙөм. Бысаҡ ситкә осто. Әммә... ул икенсеһен тартып алғайны. Һикереп икенсе тапҡыр тибергә әҙерләнгәндә, йөрәктә үҙәккә үткес сәнсеү тойҙом. Ул минән йылғырыраҡ булып сыҡты...

Әллә мин ауам, әллә донъя зыр әйләнә... Ҡарасҡылар алан-йолан итеп ситкә йүгерешә. Хәйер, миңә табан да осоп киләләр түгелме һуң? Юҡ, мин үҙем икән дә... Сабый ғына булып атайымдың елкәһен һыбай итеп йөрөйөм. Ниңә йәлләмәйем икән? Атай сирле лә инде. Әйтмәнеме икән һуң миңә... Хәйер, мин сабый бит әле. Юҡ, үҫкәнмен. Ана бит, әсәйемә утын ташырға ярҙам итәм. Атай ауырып ята. Әле генә минең менән уйнай ине, ҡайһы арала йығылған һуң? Бәй, ул үлгән бит! Күмергә алып китеп барабыҙ. Әсәйем иҫтән яҙып йығылды. Минең беләктәрҙә инде көс бар. Әсәйемдең ҡыу ҡурайҙай ғына кәүҙәһен өйгә күтәреп алып ҡайттым. Әсәй... Әсәй... Исмаһам, һин үлмә! Юҡ, үлмәне. Мине уҡырға оҙатты... Әсәй... Минең дә үләһем килмәй.

— Үләһем килмәй...

— Витя... Витя! Бәгерем, үлмә!

Оляның тауышы түгелме һуң? Көс-хәл менән күҙҙәремде асам. Минең өҫкә бер нисә кеше эйелгән. Оля башымды ҡыҫып ҡосаҡлаған да илай.

Йөрәгемдә тағы ла бер тапҡыр ниҙер бөрөп алды. Был юлы ауыртыу бер ни менән дә сағыштырырлыҡ түгел ине. Кинәт... яҡтылыҡтан, әйтерһең дә, күҙҙәрем сағылып киткәндәй булды. Шундай рәхәт! Көмөш болот мине үҙ ҡосағына алды. Мин үлмәнем! Мин үлмәнем!»

* * *

Ләйсән егеткә бик ауыр булыуын аңланы. Ҡатын-ҡыҙға ғына хас булдыҡлылыҡ менән уның ғазаптарын еңеләйтергә тырышты. Көй туҡтап, утты ҡабыҙһалар ҙа, Рәмзил, йөрәген тотоп, ятҡан килеш ҡалғайны. Ҡыҙҙың йөҙөнә хафа йүгерҙе.

— Рәмзил... Рәмзил... Ни булды?

— Йөрәгемә бысаҡ менән ҡаҙанылар... Мин әле лә уны күкрәгемдә тоям. Һинең һымаҡ ҡына ҡыҙҙы ҡотҡарҙым мин. Әммә ул үҙе саҡ ҡына өлгөрмәне... Бер минутҡа ғына һуңланы. Бик тә мине үлемдән йолоп алғыһы килә ине уның. Йәнем ҡанға батҡан кәүҙәнән айырылғас, бер нисә секунд ҡына уларҙың баш осонда торҙом. Ул ҡыҙ һуштан яҙҙы. Шунда ғына унда ниндәй ҙур тойғо булғанын аңланым... Йәнһеҙ кәүҙәгә кире әйләнеп ҡайтырға уҡталдым, әммә юҡҡа ғына. Өҫтөндә осҡан килеш ҡулдарҙы булһа ла хәрәкәтләндерергә тырыштым, ләкин улар миңә буйһонманы... Шунан... ниндәйҙер өйөрмә мине үҙ ҡосағына алды. Иҫ киткес серле яҡтылыҡ ине ул...

«Рәмзил... Рәмзил... Ниңә генә шул мәл үҙем яндарыңда булманым? Бер минут ваҡытымды түгел, бөтә ғүмеремде аяҡ аҫтарыңа ташлар инем, әммә ҡотҡарыр инем... Ҡотҡарыр инем...»

* * *

«Мин касик* йортонан майҙанға сыҡҡанда, халыҡ ниңәлер бер урынға өйөлөшкән ине. Шаулайҙар, бәхәсләшәләр. Беҙ яҡынлашҡас, миңә, юлбашсы ҡатыны булараҡ, юл бирҙеләр. Шунда ғына уртала торған аҡ тәнлене күреп ҡалдым. Уның бит-ҡулдарын ҡарағыһыҙ итеп москиттар талаған, етмәһә, ике ҡулы ла бәйле. Беҙ килеп туҡтағас, шау-шыу кәмене, минең ни әйтеремде көттөләр. Ҡул хәрәкәте менән быуауҙы сисергә бойорҙом.

— Кем был?

— Белмәйбеҙ. Ҙур һыу ситендә таптыҡ, хәлһеҙ, иҫтән яҙған ине. Һорап ҡарағайныҡ, бер нәмә лә аңламай.

— Ярай, һарайға илтегеҙ. Юлбашсы ҡайтҡас, күҙ күрер.

Беҙ һарайға йүнәлгәндә, майҙандағы халыҡ элеккегә ҡарағанда ла нығыраҡ шаулашып ҡалды. Берәһенә лә оҡшамаған ап-аҡ ғәжәп кешене күреү барыһына ла тәьҫир иткән ине. Дөрөҫөн әйткәндә, ул минең өсөн дә

---

* Касик — хәҙерге Мексиканың төп халҡы ацтектарҙа бәләкәй ҡәбилә йәки юлбашсы. Уға тотош ҡала буйһонған. Үҙ сиратында улар ацтек императорына буйһонғандар.

ҙур яңылыҡ. Бары дәрәжә генә хистәрҙе күрһәтергә ирек бирмәй.

Тотҡондо ашатырға бойорҙом. Уның һалҡындан ҡалтыранғанын күреп, ҡаты эсемлек — мескаль да килтерергә ҡуштым. Тотҡон бер нисә көн ашамағайны, шикелле — әҙәп һаҡларға тырышһа ла, үтә асыҡҡаны күренеп тора. Беҙҙеңсә бер ни аңламағас, ҡул хәрәкәттәре менән ҡайһы яҡтарҙан килеп сыҡҡанын белергә тырыштым. Аҙаплана торғас, йөҙөп килгән нәмәләренең ҡаты дауылға эләгеүен, бер нисә көн аҙашып йөрөгәнен аңлай алдым. Өҫтөндәге кейемдәренең һәләмәгә әйләнеп бөткәненән был мөһәбәт егеттең аҙ яфаланмағаны күренеп тора. Ашатҡас, хеҙмәтселәргә был егеткә таҙа кейемһалым бирергә бойорҙом. Төрлө төҫтәге ҡауырыйҙар менән биҙәлгән елән кейгән егет сәйер күренһә лә, бик һөйкөмлө ине.

Күп ваҡыт та үтмәне, үҙен оҙатыусы бер нисә кеше менән касик Чолтитлан да ҡайтып керҙе. Мин уны тәбрикләп, уң ҡулымды иҙәнгә, унан маңлайыма тейҙереп алдым. Элек бындай сәфәрҙәрҙән һуң иғтибарлы булған юлбашсы быны күрмәне лә кеүек. Ул ниңәлер бик асыулы ине. Ярһыуының сәбәбен бер аҙҙан ғына аңланым.

— Майя* ҡәбиләләренә ҡурҡыныс янай. Аҡ тәнлеләр күктән төштө, тип һөйләйҙәр. Ҡайһы берәүҙәр Ҙур һыу яғынан килә, тип тә әйтә. О, һуғыш аллаһы! О, ҡояш аллаһы! Ярлыҡағыҙ беҙҙе! Ниндәй гонаһыбыҙ менән яраманыҡ һеҙгә?

Шунда... О, шым ғына үҙ бүлмәһендә ултырған булһасы! Юлбашсы ярһығанда, уның күҙенә күренмәү хәйерлерәк. Ҡыҙыҡһыныуын еңә алмай, аҡ тәнле беҙҙең янға сыҡты.

Чолтитлан, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмайынса, бергилке өнһөҙ-тынһыҙ торҙо. Унан, иҫенә килгәс, бар ҡарғышын был бер яҡлауһыҙ егеткә яуҙыра башланы. Унан, үсе ҡанғансы әрләгәс, ярҙамсыларына аҡ тәнлене алып китергә бойорҙо. Мин шунда ғына уның ни ҡарарға килгәнен аңланым, һәм сәстәрем үрә торҙо — эйе, ул егетте аллаға ҡорбан итергә хөкөм сығарҙы.

— Чолтитлан...

— Һорама ла, үтенмә лә. Ярлыҡау юҡ уларға. Имеш, уларға алтын кәрәк булған. Беҙҙең кәүҙә аша сыға алһалар, алырҙар.

---

* Майя — Америка ҡитғаһында тел-культура яғынан ҡәрҙәш ҡәбиләләр группаһы.

Уның һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар ине шул. Ысынлап та, ул алтын тигән нәмә беҙҙә күп, һәм әллә ни ҡәҙере лә юҡ. Һуғышсыларҙың, бигерәк тә юғары ҡатлам кешеләренең, һуғыш кәрәк-яраҡтарына тиклем алтындан эшләнгән. Йорт ҡаралтыһын әйтеп тораһы ла түгел.

Ләкин был мәлдә мине кеше ғүмере ныҡыраҡ борсой ине. Майҙан уртаһында ҡалҡып торған ғәйәт ҙур пирамиданы күреп, йәндәрем өшөп китте. Уның өҫтөндә көн һайын кеше ғүмере өҙөлә. Хатта минең ирем, ғорур һәм тәкәббер Чолтитлан да, хөрмәт менән ҡараған ҡара кейемле кешеләр ҡорбандың йөрәген ҡырҡып алып алтын һауытҡа һалалар. Барыһы ла алла хаҡына тип эшләнә. Был аҡ тәнлене лә иртәгә ошо тамуҡ көтә.

Аҡ тәнлене иҫләгәс, үҙемдең улым хәтергә төштө. Ҡалтыранып ҡуйҙым. Эйе, бынан бер йыл элек, күрше ҡәбилә менән һуғыш ваҡытында әсир эләккән ул. Уны ла... иҫән ҡалған берҙән-бер улымды... тап ошондай таш диуар өҫтөндә ҡорбан иткәндәр. Улым иҫкә төшкәс, йәнемдә әсенеү менән бергә ниндәйҙер тәүәккәллек уянды. Мин уны ҡотҡарырға тейеш! Илап күҙ йәштәрем һыуалып бөттө, тағы ла бер әсәгә ошондай яфа теләмәйем.

Чолтитландың тынысланғанын көтөп, байтаҡ ваҡыт үтте. Юлбашсы ярҙамсылары менән һый-тәғәм артында кәңәш ҡорған арала, тиҙ генә ҙур бүлмәгә сыҡтым. Хеҙмәтсегә Ульцитлокты табырға ҡуштым. Минең ышанып тапшырған йомоштарҙы еренә еткереп үтәй алған берҙән-бер кеше ул. Уныһы оҙаҡ көттөрмәне. Минең һөйләгәнде тыңлаған һайын йөҙөнә хафа күләгәһе ята ине. Эйе, был уйын түгел — белеп ҡалһалар, икебеҙгә лә аҡ тәнле урынына ҡорбан булаһы. Ләкин мин тәүәккәллек һыҙығын аша үткәйнем инде. Ульцитлоктың усына аҫыл таштарҙан ғына торған муйынсамды һалдым. Ул шунда уҡ аңланы, муйынсаны тиҙ генә йәшерҙе. Эште еренә еткереренә инде иманым камил. Тағы ла күпме ваҡыт үткәндер, хеҙмәтсе ҡыҙ, минең янға килеп, ым менән сығырға ҡушты. Йорттан сыҡҡансы, йөрәкһегәнде күрһәтмәй, ғорур һәм тыныс атланым. Юлбашсы ҡатынын әлегә бер кемдең дә өтәләнгән меҫкен ҡиәфәттә күргәне юҡ һәм күрмәҫтәр ҙә...

Ульцитлок менән алдан һөйләшеп килешкән урынға еткәндә, унда ике кеше тора ине. Береһе ярлы ғаиләнән, бер нисә көн уны эҙләгән кеше лә булмаясаҡ. Оҙата баралыр. Аҡ тәнлене иһә танырлыҡ та түгел: йөҙөнә, ҡулдарына ҡуйы итеп көрән май һөртөлгән. Өҫтөндәге кейеме лә башҡаларҙан айырырлыҡ түгел.

— Йә, улым, хуш бул. Ҡотолорға яҙһын. Һиңә изге юл теләйем.— Мин аҡ тәнлене маңлайынан үптем. Ул барыһын да аңланы. Әсә мөхәббәте өсөн тәржемәнең кәрәге юҡ. Үҙ телендә егет ниҙер әйтте. Аңлашылмаһа ла, бик йылы һүҙҙәр ине улар. Унан егет беҙҙеңсә итеп уң ҡулын ергә, унан маңлайына тейҙереп алды. Шунан, түҙмәй, минең алға тубыҡланды.

— Йә, ярай, етер, улым. Кит инде, ваҡыт.

Улар ҡараңғыла ирееп юҡҡа сыҡты. Бынан бер йыл элек йыртҡыстарса ҡорбан ителгән улым да тере кеүек ине миңә».

* * *

«Урман яна... Сыҙар хәл юҡ — тамаҡҡа әсе төтөн ултыра. Был донъяға килгәндән алып беҙҙе үҙ ҡосағында аҫраған ғәзиз урман хәҙер дошманға әүерелде. Һәр тарафтан янған ағастар гөрһөлдәшеп өҫкә ауырға тора, ҡасып ҡотолор ғына әмәл юҡ.

Беҙ күмәк инек, беҙ берҙәм инек. Өйөр башы Аҡбүренең тәкмәсеп барып төшкән мәленән беҙҙең өсөн мәхшәр башланды. Малдарын ҡырған өсөн кешеләр беҙҙән шулай үс алды. Өйөр булғанда беҙ кешеләр өсөн ҡурҡыныс инек, хәҙер — юҡ инде. Унан урманда янғын башланды. Мин бала бүре менән шырлыҡҡа атылдым. Ут унда барып етмәгәйне әле. Артта йөндәренә ут ҡапҡан бүреләр сыйылдаша. Минең уларҙа эшем юҡ, мин ҡотолорға тейешмен.

Ут ҡулсаһынан сығып бөтөп килә инек. Шул мәл һыбайлы кешеләр күренде. Мәлғүндәргә тағы ни кәрәк? Ажарланып, уларға ташландым. Әллә кешеләр минән ҡурҡты, әллә аттары өрктө — һыбайлылар ситкә ташланды. Тик бына... артымдан ҡалмай эйәреп килгән берҙән-бер көсөгөм тәкмәсләп барып төштө. Янғын солғаған урманда ҡалған һуңғы йыуанысым ҡанға батып ята ине. Мин уны тештәремә эләктереп, юлымды дауам иттем. Йүгермәнем дә, сапманым да. Минең өсөн хәҙер барыбер ине. Бәхеттәре, артабан һыбайлылар осраманы. Юлыма тап булһалар, ҡоһорон алмай ҡалмаҫ ине. Иҫәңгерәп байтаҡ барҙым. Ниһәйәт, бер йылға янына барып сыҡҡанмын. Туҡтап, көсөгөмдө тештәремдән ысҡындырҙым. Ул үлгәйне инде. Тырышып-тырмашып янғындан ҡасып ҡотолоу хәҙер мәғәнәһеҙлек булып тойолдо. Шунда ғына ятып ҡалһамсы! Хәҙер мин өйөрһөҙ, балаһыҙ ас бүре инем.

Иҫәңгерәп күпме ятҡанмындыр. Әллә йоҡлағанмынмы икән... Күҙҙәремде асҡанда, таң һыҙылып килә ине. Янымда ятҡан көсөктө күргәс кенә кисәге мәхшәр иҫемә төштө. Йәндәрем өшөп ҡуйҙы. Тамаҡ ас, тик һунарға сығырға теләк юҡ.

Туҡта! Тегендә нимәлер ҡыймылдай түгелме һуң? Әкрен генә шыуып яҡынаям. Болан балаһы! Ҡупшы ғына, кескәй генә. Яңы ҡалҡҡан ҡояш нурҙарына иркәләнеп, кирелеп тора. Тамаҡ туйҙырырға ярап ҡалыр. Минең яҡынлашҡанға ла иҫе китмәй, күҙҙәрен түп-түңәрәк итеп ғәжәпләнеп ҡарай.

Шул саҡ имәнес үкереү ишетелде. Ата болан, мөгөҙҙәрен тарбайтып, ҡыуаҡтар араһынан атылып сыҡты. Кемгә-кемгә — миңә ҡаршы сығамы! Икеһе бергә күпме ваҡытлыҡ ҡына эш һуң былар минең өсөн?

Әммә ата болан ҡурҡыу тигән нәмәне онотҡайны. Мөгөҙҙәренән ялтанып, арт һанынан эләктерергә самалап йөрөй башланым. Әммә ҡапыл... ағас төбөндә ятҡан бүре балаһы күҙҙәремә салынды. Бөтә кәүҙәмде хәлһеҙлек баҫты. Туҡтап ҡалдым. Ажарланған ата боланды ҡалдырып, китеп барҙым. Ул бергилке шикләнеп торҙо ла, ҡурҡыныс үткәнен тойоп, балаһы менән шырлыҡҡа табан сапты.

Көсөгөмдөң йомшаҡ йөндәренә морономдо терәп барып яттым. Урман буйлап арлы-бирле йөрөүҙең кәрәге юҡ ине инде...»

## 10

Шәмбе көн Санъяр килеп төштө. Аҙнаның аҙағын ниндәйҙер бер ярһыу менән көткән Рәмзил, ҡустыһын күргәс, шулай ҙа албырғабыраҡ ҡалды. Нисәмә айҙар мөғжизә донъяһында йәшәгән егет был төштөң ысын булмай ҡуйыуынан ҡурҡты. Әгәр ҙә улар күргән-кисергән күренештәр хыялый уй шаяртыуы ғына булып сыҡһа? Юҡ, быға ышанғыһы килмәй егеттең!

Электричкаға ултырғас, әллә ни оҙаҡ барманылар. Поезд туҡтау менән, халыҡ тышҡа ябырылды. Көндәр матур торғанда, дачаларына барыусы халыҡтыр инде.

— Ришат! — Санъяр дуҫын күреп ҡалды. Улар, бер йыл күрешмәй торғандай, ҡосаҡлашып күрештеләр.— Мин, юлды кемдән һорарға икән, тип кенә килә инем әле.

— Өсөнсө электричканы ҡаршылайым инде. Өс һанын

алла ярата, тип юкка әйтмәйҙәр икән,— тине унығы, көләп.

Ришат атаһының еңел машинаһы менән килгән. Өс егет, иғтибарҙа береһенән-береһе уҙҙырырға тырышып, уға иң тәүҙә Ләйсәнде ултырткас, юлға сыктылар. Станциянан ауылға тиклем ара әллә ни алыҫ түгел ине, күрәһең — бер аҙҙан юлсылар алмағас төбөндә әҙерләнгән табында хуш еҫле сәйҙе рәхәтләнеп һемерәләр ине.

Һүҙ әҙерәк ялғангас, Рәмзил әңгәмәне яйлап кына үҙҙәренә кәрәк якка кайырҙы:

— Алмабикә апай, һеҙ һуғыш вакытында ошо Миләшле ауылында инегеҙме?

— Юк, улым, мин был ауылға һуғыш бөткәс килен булып төштөм.

— Хәтирә исемле апай йәшәгән булырға тейеш бында. Шуны асыклайһы ине.

— Юкка борсолмағыҙ. Ауылда өлкән кешеләр етерлек. Бына, тамак ялғап, әҙерәк ял итеп алырһығыҙ ҙа күршеләргә инерһегеҙ. Ришат, Хаят әбейең өйҙә булырға тейеш, кунактарыңды алып барырһың.

Өҫтәл артынан торғас, ял итергә тигән тәкдимдән Рәмзил менән Ләйсән шундук баш тартты. Икеһе лә бик тулкынлана ине. Ришат менән Санъяр бер-береһенә карашып, иңбаштарын һикертте.

Улар күрше йорт капкаһын асып ингәндә, оло ғына әбей тауыктарға ем һибеп йөрөй ине. Ришат, уны күргәс, күңелләнеп китте:

— Бына бит, изге сәғәттә юлға сыкканһығыҙ.— Унан әбейгә барып күрешә һалды.— Һаумыһығыҙ, Хаят әбей. Иҫәнлек-һаулығығыҙ нисек?

Өлкән кешегә күп кәрәкме инде. Ололап барып күрешкәс, күңеле булып, өйгә әйҙүкләргә кереште.

— Юк инде, үпкәләмә, Хаят әбей. Ошонда эскәмйәгә генә ултырып һөйләшәйек, бик булмаһа.

Әбейҙе ултырткас, Ләйсән дә уның эргәһенән урын алды, егеттәр баҫкан килеш калды. Әбей доғаһын кылып битен һыпырҙы ла юлсыларға караны:

— Йә, ни йомош, уландар?

— Һеҙ һуғыш вакытын якшы иҫләйһегеҙме, Хаят әбей?

— Вак-төйәктәрен онотканмындыр ҙа, тик ул замандың ауырлығын былай ғына иҫтән сығарып буламы ни?

— Беҙҙе бер апай кыҙыкһындыра. Был ауылда шул вакытта Хәтирә тигән кеше йәшәгәнме?

Рәмзилдең йөрәге дөп-дөп тибә башланы. Көсөргәнештән кан тамырҙары бүртеп, битенә кыҙыллык бәреп

сыҡты. «Иҫләмәһен дә, әйтмәһен дә, тик «юҡ» тимәһен ине. Бары өмөттән яҙҙырмаһын...»

— Туҡта... туҡта... Бар ине шикелле...

— Һуғыш ваҡытында...— Рәмзил саҡ, бүре ашанымы, тип әйтеп ысҡындырманы,— вафат булып ҡалдымы?

— Эйе, эйе. Ике балаһы ла ҡалғайны мәрхүмәнең. Ире яуҙан әйләнеп ҡайта алманы. Ике бала, бер-береһенә ярҙам итеп, буй еттеләр, сөбханалла. Улы бында, ауылда, йәшәй. Үҙен генә барып күрегеҙ, уландар. Ғиндулла ағайығыҙ миңә ҡарағанда ла күберәкте һөйләр.

Был тиклемен үк көтмәгәйнеләр. Ләйсән Рәмзилгә ҡарағанда ла нығыраҡ тулҡынлана ине. Йә инде... ике балаңды ҡалдырып, урманға кит тә... дүрт-биш тиҫтә йылдан һуң йәп-йәш ҡыҙ булып улар янына ҡайт. Башҡа һыйырлыҡмы ошо хәл?!

Әбейгә рәхмәт әйтеп, сығырға ҡуҙғалдылар. Ришат менән Санъяр был икәүҙе сәйерһенеп күҙәтә ине.

— Ғиндулла ағайға хәҙер үк барабыҙмы? — тип һораны хужа егет.

— Әлбиттә, хәҙер үк. Өйҙәме икән?

— Булырға тейеш. Көн кискә һарҡты бит.

Ҡупшы итеп һалынған бейек йорт янына килеп еттеләр. Әллә ҡайҙан уҡ ниндәй хужа йәшәгәне күренеп тора — йорт кәрниздәре, тәҙрә ҡапҡастары матур итеп семәрләнеп эшләнгән, төрлө төҫтәргә ялтлатып буялған. Йорттоң эсенә үттеләр. Хужабикә аш-һыу яраштыра ине. Төпкө бүлмәлә телевизор һөйләгәне ишетелә.

— Миңйыһан апай, һеҙгә ҡунаҡтар килтерҙем,— тине Ришат, һаулыҡ һорашҡас.

— Әйҙә, әйҙә, уҙығыҙ, ҡунаҡтарға һәр саҡ шатбыҙ.

— Беҙ һеҙгә бер йомош менән килгән инек.

— Йомошоңдо һуңынан. Үҙең ҡунаҡтар килтерҙем, тиһең, үҙең тупһанан да үтмәҫ элек сығып ҡасырға тораһың.— Миңйыһан апай егетте еңелсә шелтәләп алды.— Атаһы, тим, атаһы! Телевизорыңды ҡалдырып тор, кеше килгән.

Төпкө бүлмәнән бер ҡулына күҙлеген, икенсеһенә гәзит тотоп, мөһәбәт кәүҙәле ир сыҡты. Ҡырҡ-илле йәштәр тирәһендә булыр. Уны күргәс, Ләйсәндең башы еңелсә әйләнеп китте. Йә хоҙа... Һәләмәләр араһында ҡалтырап ултырған ҡыу ҡурайҙай ғына малай ошомо икән? Был инде Алмабикә апай менән Хаят әбей түгел. Әсәйемде ҡайҙан беләһегеҙ, тиһә, ни әйтергә? «Ағай, мин һеҙҙең әсәйегеҙ булам», — тип әйтеп булмай бит инде. Былай ҙа Ришат менән Санъяр аптырауға төшөп бөткәндәр.

Миңйыһан апай өлгөр хужабикә булып сыҡты. Ҡунаҡ көтөп тормаһа ла, әллә ни арала өҫтәлде тултырып теҙеп ташланы. Рәмзил бөгөнгө көн эсендә генә лә инде әллә нисәнсе ҡабат бер үк темаға һүҙ башланы. Хужа тәүҙә өндәшмәй генә тыңланы. Унан кинәт кенә һорап ҡуйҙы:

— Барыһы ла аңлашыла, туғаным. Тик бына һеҙҙең йәшегеҙгә ҡарап самалайым да... Үҙем дә яҙа-йоҙа ғына хәтерләгән әсәйҙе һеҙ ҡайҙан беләһегеҙ?

Рәмзил был һорау алдында көсһөҙ ине. Ярҙамға Ләйсән килде:

— Минең өләсәй белә һеҙҙең әсәйҙе, ағай. Улар йәш саҡтарында таныш булғандар. Өләсәйем был хаҡта йыш һөйләй торғайны.— Ҡыҙ үҙе ҡып-ҡыҙыл булды. Уның ниңә шулай бурҙат төҫкә кереүен Рәмзил генә аңланы. Иғтибарҙы Ләйсәндән ситкә йүнәлтер өсөн, хужаға өндәште:

— Һеҙҙең һеңлегеҙ ҙә бар түгелме һуң?

— Эйе. Ләкин ул бында түгел. Ғаиләһе менән Ленинградта йәшәй, улдары ла үҫеп бөткән инде. Беҙ әсәйҙән ҡалғанда миңә ете, уға дүрт кенә йәш ине. Шулай итеп, ете йәшемдә атай ҙа, әсәй ҙә булырға тура килде. Әле лә хәтерләйем, ауыр көн булғанға иҫтә ҡалғандыр инде, әсәй утынға китте. Беҙ ул ваҡытта кәртә-ҡураны яғып бөтөргәйнек инде. Көтәбеҙ-көтәбеҙ, ҡайтмай. Һеңлем илай башланы. Йыуатҡан булам, унан үҙем дә түҙмәй ҡушылып илап ебәрҙем. Бер-беребеҙгә һыйынышып, йоҡлап киткәнбеҙ. Иртән уянғанда, әсәй һаман да ҡайтмағайны әле. Йүгереп күрше Талип бабайҙарға керҙем. Сырхап торһа ла, бабай тороп бригадирҙың йортона китте. Бер нисә ҡатын-ҡыҙҙы эйәртеп, эҙләргә киттеләр. Ҡыҫҡа табан ғына әйләнеп ҡайтты улар. Ҡулдарында әсәйҙең алама быймалары ғына ине...— Ағайға иҫләүе ауыр ине. Шулай ҙа ир кеше үҙен тиҙ ҡулға алды.— Һеңлемә үҫеп еткәнсе һөйләмәнем. Аң кергәнсе әсәйҙең күрше ауылға ҡунаҡҡа киткәненә ышанып йәшәне. Үҙем иртә эшкә төшһәм дә, уны уҡытырға тырыштым. Мәктәбен генә түгел, институтын да тамамланы. Кәм-хур итмәнем, атай-әсәйҙең рухтары алдында йөҙөм яҡты.— Ағайҙың тағы ла күңеле тулышты.

Рәмзил менән Ләйсәнгә башҡа аныҡлауҙар кәрәкмәй ине инде. Хушлашып, ҡайтырға сыҡтылар. Күктә йондоҙҙар ҡалҡҡан, ай ҙа күренә. Яй ғына атлап, түбәнге урамға төшөп киттеләр. Ниңәлер береһенең дә һөйләшкеһе килмәй ине.

## 11

Көтөү китә. Мал-тыуар, ихаталарҙан сығып, ағымға ҡушыла. Томан да таралып бөтмәгән. Иң сихри мәлдәрҙең береһе ул ошо ваҡыт.

Рәмзил, карауатында ултырған килеш, быуындарын шытырлатҡансы киреләде лә йылдам хәрәкәт менән һикереп торҙо. Ихатаға йыуынырға сыҡҡан егетте күреп, Алмабикә апай аптырап китте:

— Бәй, улым, ниңә йоҡлай бирмәйһең? Таң һарыһынан ни...

— Етте, апай. Күпме тырышһаң да, ул йоҡо сүлмәген тултырып булмаҫ.

— Яңы һауған һөт эсәһеңме? — Үҙе, яуап та көтөп тормай, көрөшкәне тултырғансы һалып бирҙе.

Ҡапҡылап алғас, Рәмзил юлға әҙерләнә башланы. Төүге электричкаға, бәлки, өлгөрөп булмаҫ, икенсеһенә мотлаҡ эләгергә тейеш. Кисә кис үк бөгөн таңдан уҡ китергә тейеш икәнлеген ул хәл итеп ҡуйғайны инде. Ләйсәнгә был турала әйтеүҙе кәрәк тип тапманы.

Беренсенән, алыҫ һәм билдәһеҙ юлға алып, ҡыҙҙы йонсоҡоһо килмәй ине уның. Икенсенән, әгәр Виктор тигән кеше булһа һәм уның ғүмере ниндәйҙер билдәһеҙ ептәр менән Рәмзилгә килеп тоташа икән, бөтә был ваҡиғаларҙы ҡабаттан яңғыҙы ғына кисерәһе килә. Сөнки Ләйсәндең нисек тетрәнеүен ул үҙ күҙҙәре менән күрҙе.

Ҡапыл китеүенең өсөнсө сәбәбе лә бар: әгәр юлы уңмаһа, кеше белмәгән эштең ғәрлеге лә әҙерәк. Шуға күрә кисә кис Ғиндулла ағайҙарҙан сыҡҡас, был ауылда эштең йәһәт бөтөүен күреп, ул таң һарыһы менән юлға сығырға ҡарар итте. Ниндәйҙер бер эске тойғо уны ашығырға мәжбүр итә.

Профессор Йәнгилдиндең һуңғы тәжрибәһендә егет үҙе кисергән теге күренеште тикшерергә теләй ине. Һуғыш ваҡытында һәләк булған Хәтирәнең фажиғәһе дөрөҫләнеүе уны елкендереп ебәрҙе. Ә был иһә Силәбе өлкәһендә генә. Рәмзилдәрҙең ауылы Силәбе өлкәһе менән сиктәш тә баһа! Поселоктарҙы урап сығырға күп булһа бер-ике көн китер. Ә ҡалғаны — телдең эше. Ольга исемле рус ҡатынын эҙләргә. Һис юғында, Викторҙы белеүселәрҙе...

— Бәй, улым, китергә йыйынаһың түгелме һуң?

— Эйе, шулай кәрәк, апай.

— Ни күстәнәс-фәлән әҙерләмәгәнмен. Саҡ ҡына көтөп тор, улай килешмәҫ тә.

— Юҡ-юҡ, апай, бер ни кәрәкмәй. Юлсыға янсыҡ та ауыр, тиҙәр бит. Минең сәфәр әле башлана ғына.

Егет әйберҙәрен әҙерләп бөткәс, икеләнеп ҡалды. Унан шым ғына баҫып, ҡыҙҙар йоҡлаған бүлмәгә инде. Вазанан сәскә алды. Бер генә бөртөк. Ләйсәндең бөҙрә сәстәре мендәргә һибелгән. Ирен ситтәрендә йылмайыу яғылып ҡалған. Нимә тураһында төш күрә икән? Егет сәскәне ҡыҙҙың баш осона һалды.

Өфөгә килеп төшкәс, ятаҡханаға ла ҡайтып тормай, Рәмзил тура аэропортҡа юл тотто. Тура килһә, килә икән: бер аҙҙан ҡулына билет тотҡан егет ултырыу майҙанына табан бара ине. Миләшлелә ҡалыусылар Рәмзилдең ниңә шулай ҡапыл китеүенең сәбәбен асыҡлай алмай баш ватҡанда, егет Силәбегә килеп төшкәйне. Бына ғәжәп: уйлап ҡараһаң, күршелә генә, ә был ҡалала егеттең бер ҡасан да булғаны юҡ. Ҡайҙан барып асыҡларға? Дәүләт учреждениеларына индең-инмәнең — кемгә кәрәк һин унда. Бер аҙ башын эшләткәс, вокзалға юл тотто. Әҙәмсә ҡалаларҙа белешмәләр биреүсе бюро була ла инде. Шунан һорарға кәрәктер. Байтаҡ булашҡас, шулай ҙа бөтә поселоктарҙы ла асыҡланы егет. Аҙаҡ килеп, иғтибар үҙәгендә бары ике генә исем тороп ҡалды: Березовка һәм Комсомольск. Егеттең самалауы буйынса, шоларҙың береһе булырға тейеш. Витяның тыуған ауылы Чернушки менән сағыштырғанда, икеһе лә өлкәнең тап икенсе башында урынлашҡан.

Бер нисә сәғәт буйынса автобуста һелкенеп барҙы. Район үҙәгендә кисләтеп кенә төшөп ҡалған Рәмзил үҙендә ғүмерҙә булмағанса арыу тойҙо. Ғүмер буйы юл йөрөгән халыҡҡа хоҙай түҙемлек бирһен. Кешеләрҙән һораштыра-һораштыра, ҡунаҡхана һымаҡ нәмәне эҙләп китергә тура килде. Уныһы, бигүк йүнләнән булмаһа ла, ял итеп сығырға яраны. Һәр хәлдә, иртән урамға сыҡҡанда, егет тәүәккәллек һәм ҡеүәтте үҙендә элеккенән кәм һиҙмәй ине.

Тәүге рейс автобусына ултырып, Березовкаға китте. Район әллә ни ҙур тойолмаһа ла, әллә автобусының рәте шул самараҡ ине, әллә ысынлап алыҫ — ике сәғәт тигәндә генә барып етте.

Һәм бына ул поселок уртаһында баҫып тора. Ҙур ғына ике-өс ҡатлы йорттар ҙа күренә. Дә-ә, тағы ла кәбән эсенән энә эҙләү булып сыға түгелме һуң? Ярай, тәүгеһендә осраҡлыҡтың файҙаһын күрҙеләр. Ә бында... Олялар ғына теүәл бер взвод йыйылыр, моғайын, ни тиһәң дә, таралған исем. Бер-ике осраған кешенән һорап, файҙалы нәмә ишетмәгәс, поселок Советына юл тотто.

Ярай бөгөн дүшәмбе әле, эш көнө. Моғайын, берәй нәмә асыҡлап булыр.

Ят кешене күреп, секретарь ҡыҙыҡай урынынан һикереп торҙо. Райондан эш менән килеүсе, тип уйланы, буғай: эшен ҡуйып тороп, йәһәт кенә поселоктағы Ольга исемле ҡатын-ҡыҙҙарҙың исемлеген төҙөп бирә һалды. Улар әҙ ҙә түгел, күп тә түгел — егерме генә бөртөк ине. Егет һыҙғырып ебәрҙе.

— Ниңә, дөрөҫ эшләмәгәнменме ни?

— Дөрөҫөн дөрөҫтөр ҙә, тик бынан кәрәклеһен нисек табырға һуң? Егерме йорт буйлап сығып китһәм, белмәйем...

— Ә һеҙ иң тәүҙә Ольга Федоровнаға инегеҙ, ул өлкән кеше, беләлер. Йорто бынан алыҫ түгел, ана, күрәһегеҙме, зәңгәр тәҙрәле йорт.

Йорт алдында һалам башлы дүрт-биш йәштәр самаһындағы малай ултыра ине.

— Ольга Федоровна бында йәшәйме? — тигән һорауға һалам баш ихлас аптыраны.

— Бында бер ниндәй ҙә Ольга Федоровна юҡ, бабушка Ольга ғына бар, ышанмаһаң, үҙең һора.

Рәмзилдең көлкөһө килһә лә, өндәшмәне. Шундай хәтәр егетте үпкәләтеп ҡуйһа... Улар ингәндә, оло ғына рус ҡарсығы ҡул станогында балаҫ һуға ине. Ят кешене күргәс, өй түрендәге иконаға ҡарап суҡынып алды.

— Түрҙән уҙығыҙ, изге кешеләр. Ни йомош менән йөрөйһөгөҙ?

— Минең йомош, бәлки, туранан-тура һеҙгә ҡағылмайҙыр ҙа. Шулай ҙа ярҙам итһәгеҙ ине. Бынан бер утыҙ-егерме йылдар элек булған хәлдәрҙе һеҙ иҫләйһегеҙме?

— Хәтеремә зарланғаным юҡ, алла ҡөҙрәте менән.

— Бында агроном булып эшкә килгән Виктор тигән егетте белмәйһегеҙме?

Ҡарсыҡ маңлайын сырыштырып уйланып алды:

— Юҡ, ундай кешенең бында булғаны юҡ. Мин белә-белгәндән һуңғы сирек быуатта өс агроном алышынды. Араларында ундай кеше булғанын белмәйем.

— Аңлашылды... Башҡаһы кәрәкмәй ҙә ине. Ярай, гәфү итегеҙ. Һау булығыҙ.

Рәмзилде ниндәйҙер бер мәл күңел төшөнкөлөгө баҫып алды. Әгәр икенсе поселокта ла булмай сыҡһа? Бөтә өлкәне хәйерселәп йөрөп булмай бит инде. Етмәһә, яңғыҙы. Эх, яңғыҙ юл һүтеүҙәре...

Тәүге осраған машинаны уҡ туҡтатып, Комсомольск яғына юл тотто. Һораштыра-һораштыра машинанан машинаға күсеп ултыра торғас, кисләтеп кенә барып инде

ул унда. Машинанан төшкәс тә, Рәмзилдең күңелен ниндәйҙер сәйер тойғо биләне. Ғүмерҙә лә был яҡтарҙа булмағанын аҡылы менән аңлаһа ла, ауыл ғәжәп таныш шикелле тойолдо. Әйтерһең дә, ана тегендә күренгән болонда ысыҡ кискән, елгә башаҡтарын тибрәткән бойҙайҙың бөртөктәрендә ҡояш йылмайыуын күреп һөйөнгән, тау башында таң ҡаршылаған... Егет ауыл буйлап китте. Ҡайҙа барғанын үҙе лә белмәй ине ул. Поселоктың ҙур һәм төҙөк йорттарына, асфальт урамына ғәжәпләнеп ҡарап атланы ла атланы. Бына ғәжәп... Иҫенә килһә, бер кескәйерәк йорт алдында баҫып тора. Кеше өйрәнеп бөткән эшен нисек итеп башын эшләтмәй генә башҡарһа, ниндәйҙер эске тойғо шул рәүешле Рәмзилде лә ошо өй янына килтергән ине. Егеткә инеүҙән башҡа сара ҡалманы. Солан эсе ҡараңғы ине. Рәмзил, шунда булырға тейеш, тип ишек тотҡаһын эҙләп үрелде һәм яңылышманы. Ишек асылған тауышҡа һикелә серем итеп ятҡан әбей тертләп күҙен асты. Күҙенең күреү ҡеүәте самалы ине, шикелле, егетте күрше малайы тип уйланы.

— Әйҙә, Сергей улым. Әсәйеңә рәхмәт инде, күрше хаҡы — тәңре хаҡы, тип юҡҡа әйтмәйҙәр икән,— тип һөйләнде.— Бына сырхап торам. Быйыл бигерәк рәтем юҡ.

Рәмзилгә түргә уҙыуҙан башҡа сара ҡалманы. Тик нисегерәк итеп үҙенең төптө башҡа кеше булыуын аңлатырға?

— Һаумыһығыҙ. Тик мин Сергей түгел бит әле. Минең исемем Рәмзил була. Йомош менән ингәйнем һеҙгә.

— Мин ҡарсыҡтың күҙҙәре лә шул инде. Һикһәнде ҡыуам бит. Йомошоң ниндәй ине һуң?

— Әбей...

— Клавдия әбейең булырмын, тартынма, әйт.

— Һеҙ Витяны беләә инегеҙме? Агроном Викторҙы?

Ҡарсыҡ һикенән торҙо, яй ғына ҡуҙғалып, ултырғысҡа килеп ултырҙы:

— Белмәй буламмы һуң, үҙемдә йәшәне бит. Ғүмере ҡыҫҡа булды мәрхүмдең. Үҙ баламдай итеп яратҡайным.

Рәмзилдең сикәләре ҡыҫа ине. Маңлайына бәреп сыҡҡан тирҙәрен усы менән һыпырҙы һәм, тынысланырға тырышып, йорт эсенә күҙ йүгертте. Өйҙөң әллә ни йыһазы юҡ. Бөтә йорт-ҡаралты Клавдия әбей йәшендә булғандарға ғына хас боронғо. Ләкин егеткә былар ниңәләр бик яҡын тойолдо. Әйтерһең дә, йәшлегенең бер өлөшө ошо әллә ни зауыҡ та булмаған, әммә һөйкөмлө йорт эсендә ҡалған.

Әбей, ауыр ҡуҙғалып, икенсе яҡҡа сыҡты. Төптәрәк торған тимер карауатҡа күрһәтте:

— Ошонда йоҡлай ине Виктор.— Әллә хәле бөттө, әллә башы әйләнде, әбей торған еренән карауат башына тотоноп сүкәйҙе.— Уф-ф, башым...

— Хәҙер, Клавдия әбей,— Рәмзил ҡарсыҡты еңел генә итеп күтәреп алды һәм һаҡ ҡына һикегә алып барып һалды.— Дарыуҙарығыҙ ҡайҙа?

Табип булырға йыйыныуының нисә тапҡыр файҙаһын күрҙе егет. Әммә был юлы тәүге мәртәбә ләззәт менән башҡарҙы ул ошо эште.

Ҡарсыҡҡа бер аҙҙан хәл керҙе. Рәмзил яһап биргән сәйҙе ҡурай еләге вареньеһы менән эсеп ҡуйҙы.

— Хәҙер әҙерәк тирләһәгеҙ, еңеләйеп китер.

— Рәхмәт инде, улым. Изгелегеңдән һөйөн. Улым, мин әллә ни һөйләй ҙә алмам. Мәктәп директоры Ольга Максимовнаны тап, үкенмәҫһең.

Рәмзил бөхтә һәм яҡты мәктәп эсенә барып ингәндә, унда иҙән йыуған ике ҡатындан башҡа кеше күренмәй ине. Спорт залы яғынан, шикелле, шап-шоп туп бәрелгәне генә ишетелә.

— Хәйерле кис. Ольга Максимовна үҙендәме икән?

— Үҙендәлер. Настя, директорҙың төшкәнен күрмәнеңме? — Йыйыштырыусы ҡатын залдың арғы башындағыһына өндәште.

— Әле генә кабинетына кереп киткәйне.

— Кабинеты ҡайҙа икән, әйтмәҫһегеҙме?

— Икенсе ҡатта, уңға боролһаң, тәүге ишек.

Ишек туҡылдатҡанға эстән «эйе» тигән тауыш ишетелде. Егет бүлмәгә үтте. Күпереп торған аҡһыл сәсле, зәңгәр күҙле бик мөләйем ханым өҫтәл артында яҙышып ултыра ине. Өҫтөнә бик килешле күк костюм кейгән. Ҡырҡ биш йәштәр тирәһендә булһа ла, кәүҙәгә һомғол.

Ханым таныш түгел егетте күргәс, күҙлеген күтәрә биреп, ғәжәпләнеп ҡараны:

— Ғәфү итегеҙ, бигүк танып бөтмәйем.— Унан иҫенә төшкәндәй, урынынан ҡалҡынды.— Һеҙ, моғайын, йәш тарихсы булаһығыҙҙыр. Килеп күреп китергә тигән теләк белдергәйнегеҙ бит, шулаймы? — тип егеттең янына килде.

Егет ни тип өндәшергә лә белмәне. Ул тетрәнгәйне. Эйе, өнөндә ғүмерендә лә күрмәгән Оляны таныны ул. Мәсхәрә итеүҙән яҡлап, үҙе бысаҡ аҫтына кергән Оляны...

— Оля... Витяны... Витяны иҫләйһеңме?

Ханым йәшен һуҡҡан һымаҡ булды.

— Виктор... Нисәмә йыл төштәремдән сыҡмайһың, өндәремдә лә өндәшә башланыңмы... — Ольга Максимовна үҙен ҡулға алды. Әйләнеп, ҡулъяулыҡ остары менән күҙҙәренең ситен һөрттө. Унан, тыныс булырға тырышып, егеткә өндәште:

— Һеҙ Витяны ҡайҙан беләһегеҙ?

Егет был һорауға яуапты әҙерләгәйне:

— Минең атайымдың дуҫы ул. Бергә уҡығандар. Мин һеҙгә үҙемдең кемлегемде лә әйтмәнем, шикелле. Рәмзил Аҡъюлов булам,— тип ҡул һуҙҙы.

— Бик һәйбәт. Ольга Максимовна. Әйткәндәй, һеҙ ҡайҙа туҡтанығыҙ әле? Кискә ҡарай, моғайын, урамда ҡалмаҫһығыҙ.

— Ысынлап та. Мин ул хаҡта бөтөнләй уйламағанмын.

— Улайһа, һеҙҙе үҙ йортома саҡырам. Ҡунағым булырһығыҙ. Витяны саҡ ҡына күреп-белгән кешене лә һый-хөрмәт итергә әҙермен.

Ольга Максимовна әйберҙәрен йыйыштырып, кабинетын бикләне. Улар яй ғына атлап, ҡайтырға ҡуҙғалды.

— Миңә Виктор тураһында һөйләгеҙ әле.

— Был бөтә ғүмергә етерлек тарих. Ә бит, уйлап ҡараһаң, бары ике генә ай таныш булдыҡ. Әллә ни сибәр ҙә түгел ине төҫкә-башҡа. Әммә ундағы дәрт, ярһыу нисә кешегә етер ине икән? Беҙҙең үлеп бөтөп барған күңелдәр, ул бында килеү менән, терелеп китте. Әйтерһең дә, оҙайлы ҡыштан һуң яҙға килеп индек. Беҙ, мәктәпте тамамлаусылар, ситкә китәбеҙ, тип йөрөгән ерҙән бында ҡалырға булдыҡ. Ауылды тергеҙергә кәрәк ине. Ләкин... уйламағанда...— Ольга Максимовнаның тауышы ҡалтыранып китте.— Һаман да үҙемде ғәфү итә алмайым. Бары мин ғәйепле. Минең арҡала ғына һәләк булды ул. Эйе, мин уны ярата инем. Уның өсөн генә бөтә класымды ауылда ҡалырға күндерҙем. Бары Витя хаҡына...

Ул көн һаман ҡәһәрле төйөн булып йөрәгемдә өйкәй. Клубҡа йыйылышҡа ашыға инем. Уйламағандан ғына тыҡрыҡтан иҫерек егеттәр килеп сығып, миңә бәйләнә башланылар. Тороп йүгерергә уйлаған инем, булманы— һөйрәй үк башланылар. Үҙем дә һиҙмәҫтән «Витя!» тип ҡысҡырып ебәрҙем. Көнө-төнө хәтерҙән сыҡмай, телдә ошо исем йөрөгәнгәлер инде, күрәһең. Ә ул... әкиәттәге ҡотҡарыусылай, ҡайҙандыр ҡалҡып сыҡты ла мине яҡларға ташланды. Һуңынан... Һуңынан... Өс көн, өс төн һаташып ауырып яттым. Мин аяҡҡа баҫып урамға сыҡҡанда, уны күмгәйнеләр инде. Ҡәберенә ҡапланып ятып, оҙаҡ иланым.

Был ауылда ҡала алманым мин. Витя һәләк булғанға бер аҙна тигәндә, әйберҙәремде йыйып, ситкә сығып киттем. Ике йыл эшләгәндән һуң, педагогия институтына уҡырға индем. Уны тамамлағас, үҙем бында һораным. Витяның әсәһе Екатерина Ефимовна донъя ҡуйғайны инде. Уның ҡәбере ташландыҡ хәлдәлер тип, кинәт кенә хәл иттем дә ҡуйҙым.

— Ә теге егеттәр... Уларҙы ни эшләттеләр һуң?

— Уларға ни булһын һуң? Төрмәлә ултырып сыҡтылар ҙа шуның менән эштәре бөттө. Унан ғына кеше терелә торған булһа... Хәйер, Валера тағы ла бер тапҡыр ултырҙы. Кәкрене ҡәбер генә төҙәтә, ти бит.

Рәмзил баянан бирле бер һорау бирә алмай килә ине. Ольга Максимовнаның йортона ҡайтып кергәс, барыһы ла үҙенән-үҙе асыҡланды: эйе, ул яңғыҙ ине. Егет, әҙәпһеҙлек һанап, был турала хәбәр ҡуҙғатмаҫҡа уйлағайны, Ольга Максимовна үҙе үк асыҡланы:

— Витянан һуң бер кемгә лә ғашиҡ була алманым. Тәүге йылдарҙа бер кем дә күҙемә күренмәне. Унан йәйләп яралар уңала төшкәс... йәш тә байтаҡ ине инде... Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙ һымаҡ, яңғыҙлыҡтан ҡасып ҡына тормошҡа ла сығырға мөмкин ине, әммә, ниңәлер, миндә ул теләк булманы. Ҙур һөйөүҙән һуң үҙ-үҙеңде һаҡлау мөмкинме икән...

...Иртәгеһенә улар Викторҙың ҡәберенә барҙылар. Буяулы кәртә менән уратып алынған ҡәбер башҡаларына ҡарағанда нығыраҡ тәрбиә күргәне ситтән үк күҙгә ташлана. Рәмзил егеттең ташҡа беркетелгән һүрәтенә төбәлде. Етен сәс... күк күҙҙәр... Эйе, ысынлап та, әллә ни сибәрҙәрҙән түгел шул. Әммә ҡараштары... Әйтерһең дә, һаман да тере. Ә бит, уйлап ҡараһаң, Ольга Максимовна өсөн һаман да йәшәй бит ул.

Егеттең күҙе ҡапыл ҡәбер ташындағы тәрегә төштө. Эйе, тәрене лә,ураҡ айҙы ла бары кешеләр генә уйлап сығарған, үҙ тормоштарын ҡатмарландырыр өсөн генә. Ысынында иһә, бар кешелек бер тамырҙан. Нимәгәлер табынғандан ғына йәшәйештең асылы үҙгәрмәйҙер.

«Һаумы, туған... Дөрөҫөрәге, мин һинең кесе туғаның буламдыр. Бына, нисә йылдар үткәс, яндарыңа ҡабат әйләнеп ҡайттым. Алыҫ та йәшәмәгәнмен һинән, әммә тамырҙарымдың ҡайҙа барып тоташҡанын белмәгәнмен генә. Ә белергә кәрәк ине. Был нәмәлә бар кешелек тома наҙан булмаһа, бәлки, ҡан-ҡойоштар ҙа булмаҫ ине. Кешеләр бер-береһен үҙ-үҙҙәрен хөрмәт иткән һымаҡ ярата башларҙар ине. Булырмы икән шулай берәй заман?

Донъяла насар эҙ ҡалдырмағанһың. Шундай аҡыллы ханымдың һаман да онотмауы — ҙур эш. Баш эйәм һинең алда...»

## 12

Өфөгә килеп төшкәс, егеттең иң тәүге теләге — Нур Харрасовичты күреү ине. Эйе, Йәнгилдин алдында хәҙер уның йөҙө ҡыҙарырлыҡ түгел. Остазының биргән белемен саҡ ҡына ҡапларлыҡ үҙ өлөшө бар егеттең. Шуға ла Рәмзил дәрестәр бөтөү менән профессорҙы күреп һөйләшергә, бар асыҡлағанын теҙеп һалырға уйланы.

Ләкин беренсе пар дәрес үтеү менән, Рәмзилде Ләйсән эҙләп тапты. Аудиторияға йүгерә-атлап килеп инде лә, студенттар байтаҡ ҡына булыуға ла ҡарамаҫтан, ҡысҡырып тигәндәй өндәште:

— Рәмзил, һин ҡайҙа юғалдың?

Ҡыҙҙы бер ҡасан да былдай ярһыған хәлдә күрмәгәнгә, Рәмзил ултырған урынынан һикереп торҙо.

— Ниңә? Ни булды?

Ләйсәндең күҙҙәре түңәрәкләнеп китте.

— Ишетмәненңме ни? Нур Харрасович хәл өҫтөндә ята.

— Хәл өҫтөндә? Ҡасандан?

Ҡыҙ яуап бирә алманы. Үкһеп битен ҡапланы. Тирәяҡтарына ҡыҙыҡһыныусан халыҡ йыйыла башлағанын күреп, Рәмзил, иңбашынан ҡосаҡлап, Ләйсәнде коридорға алып сыҡты.

— Ләйсән, йә, тыныслан инде, асыҡлабыраҡ һөйлә.

— Беҙ дүшәмбе көн Өфөгә ҡайттыҡ. Мин шунда уҡ Нур Харрасовичҡа барып барыһын да һөйләнем. Ниндәйҙер ярһыу менән ҡаршы алды ул мине. Шунан ҡайтып киттем. Ярты сәғәттән һуң «Тиҙ ярҙам» машинаһы уны алып та киткән. Мин килтергән хәбәрҙе йөрәге күтәрә алмаған... Барыһына ла үҙем генә ғәйепле... Ниңә ҡапыл ғына әйтергә ине инде.— Ҡыҙ тағы ла илай башланы.

— Әле ул ҡайһы больницала?

— Эй, мин бит һине шуның өсөн эҙләгәйнем. Нур Харрасович өсөнсө көн инде һине таптыра. Көн һайын һеҙҙең группаға дүрт-биш тапҡыр килеп урайым. Элек ятҡан больницаһында Нур Харрасович.

Рәмзил йүгерә-атлап больница яғына юл тотто. Ул дәрестән киткәне өсөн эләгере хаҡында уйламай ине инде. Барып етеүен етте, әммә ауырыу янына үтә алманы. Медсестра, һөйләшеп тә тормаҫтан, режим яҙылған ҡа-

ғыҙға төртөп күрһәтте лә кире инеп тә китте. Рәмзил профессор янына, тип тә һорап ҡараны. Тегеһе, профессор кеше түгелме ни, уға ла тыныслыҡ кәрәк, тип кенә ҡуйҙы.

Ауырыуға тыныслыҡ кәрәк тигән, инде ҡанына һеңеп бөткән ҡағиҙәне егет беренсе тапҡыр ҡәһәрләне. Әммә унан уҙып булмай ине.

Көс-хәл менән ваҡытты еткерҙе. Килеп инде лә кире сигенде — ярты фойе тик Нур Харрасович янына килгән кешеләр менән тулған ине: күбеһенсә уның янына дауаланырға йөрөүселәр, студенттар ҙа байтаҡ ҡына. Институттағы хеҙмәттәштәре араһынан бары Уразбәков һәм Рауил Рәхимович ҡына.

Был тиклем ағым араһынан ҡасан ғына әләгер икән һуң ул унда! Ауырыу кеше янына шунса кешене үткәрә торғандары ла юҡ. Әммә кәйефе төшкән егетте Уразбәков күреп ҡалды.

— Аҡъюлов! Һин ҡайҙа юғалдың? Бына нисәнсе көн инде Нур Харрасович һине генә көтә.— Үҙе егетте, этәреп тигәндәй, ишектән индереп ебәрҙе. Иңбашына аҡ халат элеп алғас, егет шым ғына баҫып палата эргәһенә килде. Әҙерәк тыңлап торҙо. Тауыш-фәлән ишетелмәй ине. Йәнгилдин әллә Рәмзилдең ингәнен ишетмәне, әллә йоҡлай ине: йөҙөндә бер ниндәй үҙгәреш күренмәне. Бер аҙ ваҡыт үткәс кенә, ул күҙҙәрен асты. Һәм шунда ғына егет уның хәленең ни тиклем мөшкөл икәнен аңланы.

— Килдеңме... улым... Көтөп ала алдым һине... тәки. Әллә ҡайҙа ҡасып йөрөһәң дә. Шунан... ниндәй яңылыҡтар?

— Силәбелә булып ҡайттым, Нур Харрасович. Һуңғы сеанста күргән күренештәр тулыһынса дөрөҫләнде. Иҫләйһегеҙме, мин һеҙгә һөйләгәйнем бит.

— Иҫләйем... Мин барыһын да... иҫләйем. Яңылышмағанмын, тимәк. Шуның өсөн генә һине көттөм... Улмаҫкә тырыштым ошоно ишетер өсөн.

— Нур Харрасович...

— Бүлдермә мине. Барыһын да әйтеп өлгөрөргә тейешмен. Мин... өс көн элек үк үлергә тейеш инем... Дөрөҫләнде, тиһең инде... Хәҙер донъянан китһәм дә, йәл түгел. Улым... Рауил менән бер төптән булығыҙ. Мин киткәс... һеҙҙе бөтөрөргә тырышыусылар күп булыр. Бирешмәгеҙ. Рауилға әйткәнмен... Һинең беҙгә килеүең... хәйерле булды. Бына бит... ниҙәрҙе белеп өлгөрҙөк. Китмә ғилемдән... зинһар. Ҡыуһалар ҙа... китмә. Ә хәҙер... бәхил бул. Минең йәнем... сәйәхәткә сыға.

— Остаз... Үлмә, остаз! — Рәмзилдең биттәре буйлап эре йәш бөрсөктәре тәгәрәне.— Зинһар, үлмә...

— Һуң инде... Мин былай ҙа... өс көнгә артығыраҡ йәшәнем... Йыһанур улымды саҡыр әле...

Рәмзил ауыр хәрәкәттәр менән сығырға ҡуҙғалды. Ишек төбөнә еткәс, туҡтап боролдо. Нур Харрасович һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә итеп керпектәрен ҡаҡты.

Рәмзил сыҡҡас, егеттең артыҡ тулҡынланған булыуын күреп, юл бирҙеләр. Нур Харрасовичтың полковник улы йәһәт хәрәкәттәр менән ишектән инеп юғалды. Тағы ла тынлыҡ урынлашты. Шулай күпме ваҡыт үткәндер. Бер мәл врачтар, медсестралар йүгерешә башланы. Больницаның баш врачы Арыҫлановты йәһәт кенә саҡырып килтерҙеләр. Әммә һуң ине инде... Дежур медсестра сығып, ишек төбөндә торған Уразбәковҡа ниҙер әйтте. Ҡарт еңел кепкаһын ҡулына алды, үҙенең башы түбән эйелде. Ни булғанын барыһы ла аңланы. Рәмзилдең күҙ алдында бер минут эсендә күҙ йәштәрен тыя алмаған Фатима ханым, ағарынған Рауил Рәхимович, өҙгөләнгән Ләйсән, тағы әллә кемдәр үтте. Ул, үҙ-үҙен белештермәйенсә, урамға ташланды. Ҡараңғы төшөп, күктә йондоҙҙар ҡалҡҡайны.

«Остаз, ниңә үлдең? Үҙең бит беҙҙе йән үлемһеҙ, тип өйрәттең. Ниңә генә киттең... Ниңә?»

Кинәт киске күкте тертләтеп йондоҙ атылды. Әллә йондоҙҙар араһынан, әллә ерҙән егет таныш ишеткән һымаҡ булды:

«Улым, ниңә бойоғаһың? Мин бит үлмәнем. Һин бит быны үҙең дә беләһең. Тирә-яғыңа ҡара — тормош бара. Йәшә, шатлан, изгелектәр ҡыл. Йылдар үтер — һәм мин яңынан һеҙҙең арала булырмын. Таң алдынан ҡайтырмын мин. Ҡояш нурҙары менән тәбиғәттә тормош терелә, онотма быны. Шул нурҙар менән алыҫ-алыҫтан, йыһан төпкөлөнән һеҙҙең янға әйләнеп ҡайтырмын. Кескәй генә сабыйҙа табырһың һин мине. Миллионлаған сабыйҙар араһынан, моғайын, береһе мин булырмын. Башыңды эймә, улым...»

Егет тын урам буйлап атланы. Уның ғүмер юлында аҫыл йондоҙ атылып һүнде. Һирәктәр өлөшөнә генә төшә торған йондоҙ. Һәм ул ошо һүнгән йондоҙ рухын кәмһетмәҫкә тырышып йәшәргә тейеш. Эйе, йәшәргә тейеш.

*1990 йыл, ноябрь—декабрь.*

## БҮРЕГӘ ҺУНАР

*(фантастик хикәйә)*

### 1

— Күрше! Күрше тим! Ғиндулла!

Тәҙрә дөбөрләткәнгә һиҫкәнеп уянған Ғиндулла тәүлектең ниндәй ваҡыты икәнен аңлай алмай, бергилке аңҡы-тиңке килеп ултырҙы. Йәнә бер-икене һуҡтылар ҙа, аяҡ тауышы ситкә китте. Кемдеңдер үҙәк өҙгөс итеп ҡысҡырғаны, ҡатын-ҡыҙҙың илағаны ишетелде. Былар барыһы ла уяныр-уянмаҫ ултырған ирҙең йоҡоһон шундуҡ осорҙо — һикереп тороп, ашыҡ-бошоҡ кейемдәрен кейҙе.

— Мәстүрә тим! Көртөй ҡайҙа?

Иғтибар ҙа итмәгән, имеш — эргәһендәге урын буш икән. Ҡайһы арала сыҡҡандыр. Хәйер, урын-ер яңы ғына ҡалдырылғанға оҡшамаған — һап-һалҡын.

Ғиндулла ҡабаланып йорттан сыҡты. Күрше-тирә апаруҡ йыйылып киткәйне. Ҡайһылары аптырашып ҡарап тора, бәғзеләренең ҡурҡҡаны йөҙҙәренә сыҡҡан. Әле генә уны уятҡан Айытҡолдоң ҡатыны Сайма еңгә ергә тубыҡланып, нәмәгәлер ҡапланған. Һыҡтағаны хатта ара-тирә ишетелгеләгән һорауҙарҙы ла күмә.

— Ни булды? Ни булды, Айытҡол ағай?

Уның һорауы яуапһыҙ ҡалды. Үҙе лә аңламағанын белдереп, тегеһе иңбаштарын һикертте.

Сайма еңгәнең тулы кәүҙәһе аша ерҙә ятҡан ҡыҙ баланың күлдәге, яланғас аяҡтары күҙгә салына. Был күршеһенең төпсөк ҡыҙы, ун өс йәше менән барған Сәлимә ине. Әсәһе уны күтәрергә маташа, әллә хәсрәтенән быуынһыҙланған, әллә икенсе сәбәп — хәле етеңкерәмәй. Ярҙамлашырға маташыусыларҙы бисара ҡатын ситкә этә.

— Теймәгеҙ! Ул минең балам! Йә, хоҙай... Кемдең ҡулы күтәрелде? Ни зыяны тейгән? Ай-йййй...

— Сайма апай, тынысланығыҙ!

— Хәҙер Исламғолов килә, бер нәмәһе асыҡланыр.

— Участковый килгәнсе теймәй торорға кәрәк ине лә бит...

— Бөтөнләй башын юғалтты шул.

— Ни булды, иптәштәр? — Форма кейгән утыҙ биш йәштәр самаһындағы ир халыҡты йырыбыраҡ уртаға сыҡты. Уны күргәс шымып ҡалған төркөмгә ҡарап өҫтә-

не.— Барығыҙҙың да таралышыуын һорайым. Шаһиттар ғына ҡалһын.

Әле генә шым торған күрше-тирә йәнә шаулашып китте.

— Йәмәғәт, бергәләберәк асыҡламаһаҡ, балаға ҡул күтәреүсе яҙыу ҡалдырып йөрөмәҫ инде.

— Эйе шул.

— Шамил олатай дөрөҫтө әйтә.

— Йәгеҙ, кем тәүҙә күрҙе?

— Мин Айытҡол ағайҙың тауышын ишетеп йүгереп сыҡтым.

— Юҡ та. Тәүҙә килен ҡысҡырҙы.

Исламғолов һүҙ көрәштереүселәргә ниҙер әйтергә уҡталғас, ҡулын һелтәп, Айытҡолға боролдо.

Милиционерҙан биш-алты ғына йәшкә оло булыуына ҡарамаҫтан, әле пенсия йәшендәге ҡарттай күренгән ир шундағы юнылған ҡарағай ағасына сүгәләне.

— Эй, ҡустым... Былай булырын белһәм...— Тамағына тығылған төйөндө йотоп, башын ситкә борҙо.— Йоҡларға йыйынып бөткәйнек. Был бала,— ҡулын ерҙә ятҡан ҡыҙға табан иҙәне,— йүгереп килеп инде. Кәртә артында бүре йөрөй, ти. Көлкөгә күтәрҙек. Йәй көнө ниндәй бүре булһын? Етмәһә ауыл эсендә.

— Туҡта, туҡта, йоҡларға йыйынғайныҡ, тиһеңме? Сәғәт нисәләр тирәһе ине?

— Әлләсе. Үтә һуң ине, әйтәгүр. Мин эштән ҡараңғы төшкәс ҡайттым. Ураҡ ваҡыты бит ни тиһәң дә.

— Тәк. Сама менән 11-ҙәр бар инеме?

— Унан һуңыраҡ булғандыр. Шул. Ҡабат йүгереп сығып китте. Беҙ ни, уны-быны уйламай, йоҡларға яттыҡ, көн оҙоно арытылған. Шунан Сайма борсола башланы. Кейенеп, кәртә артына сыҡты. Ойоп бара инем, зәһәр итеп ҡысҡырғанына һикереп торғанымды һиҙмәй ҡалдым. Сыҡһам... — Айытҡол һөйләп бөтөрмәне, башын түбән эйҙе.

— Балаға берәй төрлө ярҙам күрһәтелдеме?

— Юҡ, ҡустым. Һуң ине шул...

Исламғолов быуылып илаған Сайманы ҡултыҡлап алып киткәндәрен бер аҙ ҡарап торҙо ла ерҙә ятҡан ҡыҙға эйелде. Фонарын ҡабыҙып, йөҙөнә төбәлеп торҙо, йөрәк тибешен тыңлап ҡараны.— Дә-ә, ысынлап та, ярҙамдың кәрәге юҡ бында.— Шунан ниҙер күргән шикелле, баланың эйәген күтәреберәк төбәлде.— Мәле, ҡустым, яҡтыртып тор. — Биш-ун минут самаһы булашҡас, турайҙы.— Быуғандар...

— Аһ!
— Быуғандар тиме?
— Әстәғәфирулла, хоҙайым, үҙең ярлыҡа.
— Йә инде, сабый балаға ҡул күтәргәндәр.
— Кемгә зыяны тейгәндер...
Бындай хәлдәр хаҡында ишетеп кенә белгән ауыл халҡы төнгө ваҡиғанан иҫәңгерәп ҡалғайны.

2

Иртәгәһенә иһә бар ауыл төнгө хәл хаҡында хәбәрҙар ине. Күрелмәгән ҡанһыҙлыҡ йәшәрен йәшәгән ҡарттарҙы ла һеңгәҙәтте. Эсеп-һуғышып боларыусылар бар, ләкин тиктомалдан, етмәһә бала кешенең йәнен өҙөү...

Бөтә был ваҡиғаның айышын Ғиндулла ҡатыны Мәстүрәнән ишетте. Иртәнге сәйҙе эскән арала ҡыҙара төшкән күҙҙәрен аҫҡа төбәберәк, ир ишетеп өлгөрмәгән нәмәләрҙе теҙҙе, буҫлығып илап та алды.

— Ғиндулла...

— Ни булды? — Хужа сығырға кейенгән еренән туҡталып ҡалды.

— Китмәйерәк тор. Тикшереүсе килгән икән. Юрый киткән, тиерҙәр.

— Ярай, әләйһәң.— Итектәрен сисеп, шундағы һикегә ҡабат ултырҙы.

— Һин тим! Ғиндулла! Кисә төнө ҡайһы арала сыҡтың һуң? Минең арттан уҡмы ни?

— Бәй! Ә һин ҡасан сыҡҡайның? — Ир һалҡын урынерҙе иҫләне, арҡаһынан ҡырмыҫҡалар йүгерешкәндәй тойолдо.

— Сайма ҡысҡырғас та... Тороп дарыу эсеп йөрөгәйнем...— Быларын ни өсөн һөйләйҙер, минутына тиклем иҫләгән икән. Әйтерһең дә, ире унан һорау ала. Уның һөйләгәнен тыңлаған Ғиндулла элегерәк йәшәлгән йылдарға әкрен генә әйләнеп ҡайтты.

Үҙ милләтенән түгел шул ҡатыны. Ҡайһы саҡ берберенен аңламай китеүҙәре шунан түгелме икән? Настя-Мәстүрә улар ауылына ҡарт атаһы менән ҡайҙандыр ситтән килеп юлыҡҡайны. Ауыр ҡарашлы был кешене әле лә иҫләй Ғиндулла. Арт яғына һуйыл сыбығынан бер-нисә тапҡыр өлөш сығыуын да онотмай. Кешеләр менән бөтөнләй тигәндәй аралашмай, гүр эйәһе булды. Ә бына ҡыҙы инде тап киреһе. Һап-һары толомдарын күкрәгенә төшөрөп, йылмая-көлә урам уртаһынан үткәнен күргән бер егет һушын юғалта ине. Әллә милләтенең

башҡа булыуы инде — яусыларға егет-елән бигүк ҡабаланманы. Ғиндулла ғына өҙә һуҡты ла ҡуйҙы. Бына биш йыл инде бергә йәшәйҙәр. Ләкин балалары юҡ — шуныһы үҙәкте өҙә. Был хаҡта һүҙ башларға ла йөрәге етмәй хәҙер ирҙең — Мәстүрә өндәшмәҫкә әйләнә, һүҙ ҙә тартып алырлыҡ түгел.

Тәфтишсе йорттарына инеп, төнгө ваҡиға хаҡында ентекләп һорашҡан ваҡытта ла, Ғиндулла әлеге уйҙарынан арына алманы. Хәтеренә ҡабат һалҡын урын килеп төштө. Ул инеп ятҡанда, Мәстүрә һаман юҡ ине бит. Әллә берәйһе менән буталамы? Күңелен көнләшеү ҡорто кимерә башлауын тойоп, Ғиндулла ҡабалан-ҡабалан итектәрен кейҙе.

## 3

Ауылдағы артабанғы ваҡиғалар йөрәкте өшөтөрлөк дәрәжәлә киҫкенләште. Хатта тикшереүселәр юғалып ҡалды — тағы ике кешенең йәнһеҙ кәүҙәһен табып алып ҡайттылар. Быларында кеше ҡулы теймәгәнлеге асыҡ күренә — икеһенең дә үңәсендә теш эҙҙәре. Оҙаҡламай тирә-йүндәге ауылдарҙы шомло хәбәр баҫты — ҡара көҙгә байтаҡ ваҡыт булһа ла, күкһел төҫтәге апаруҡ ҙур бүрене күреүселәр йышайҙы. Туғай тулып мал-тыуар йөрөй, ләкин ул ниңәлер кешеләргә һөжүм итә. Шулай итеп, яҡын-тирәләге ауылдарға йөрөү бөттө, көтөүселәр малды ҡырға әйҙәүҙән баш тарта башланы. Былары түҙерлек ине әле. Йыртҡыс көпә-көндөҙ ауыл урамына килеп инеп, биш-алты йәштәр самаһындағы малайға ташланғандан һуң, ҡул ҡаушырып ултырыу үҙе бер язаға әйләнде. Район үҙәгенән бер төркөм милиция хеҙмәткәрҙәре килеп, урман-ҡырҙарҙы аҙна самаһы айҡаны. Башҡа юл ҡалмағас, колхоз идараһы һунарсылар йәмғиәте менән килешеү төҙөп ҡараны. Ләкин кешеләргә ҡаныҡҡан күк бүре әҙәм затына хас йылғырлыҡ менән эҙен юғалта торҙо. Бәғзеләре мажара эҙләп, ҡайһылары ирлек күрһәтеүҙе көҫәп сит яҡтарҙан килгән ир-ат ай самаһы ваҡыттан таралышып бөткәс, Юныс ауылы үҙ бәләләре менән йәнә яңғыҙы тороп ҡалды.

...Инде ҡараңғы ла төшөп килә. Көн йәнә бушҡа уҙҙы. Өҫтөнә штормовка, аяҡтарына итектәр кейгән Ғиндулла иңбашына ҡушкөбәген аҫып, әкрен генә урман һуҡмағынан атлай. Шамил ҡарттың кәңәше буйынса, эшен уға тапшырып, бына аҙна-ун көн буйына теге бүрене эҙәрлекләй ул. Тәүге мәлдәрҙәге шикелле, һәр ҡыуаҡты

ентекләп ҡарарға күңеле тартмай — барыбер файҙаһы юҡ. Тирә-яҡты тултырған шомло хәбәр ҡурҡыныс төш кеүек тойола башланы уға. Бер осрамаһа, бер осрар ине, йыртҡыс иһә, һыуға төшкәндәй, юҡҡа сыға.

Икенсенән, ҡатыны... Йә, ни етмәй инде уға? Йәберләгәне, рәнйеткәне булманы, яратҡан да кеүек ине Ғиндулланы. Тот та ташлап сыҡ та кит, имеш. Әллә Ғиндулла үҙе ниҙелер килештерә алманымы?

Ҡатыны һуңғы аҙналарҙа уға тура ҡарамаҫҡа тырышты. Осраҡлы ғына ҡараштары тап килһә, күҙҙәрен ситкә күсерә һала. Хәйер, ир үҙе лә атлығып торманы — элекке мөләйем күҙҙәрҙең төпкөлөндә әллә ниндәй ауыр тойғолар уятыусы ниҙер бар ине... Үҙенең уңмаған тормошон иҫләү былай ҙа булмаған кәйефен бөтөнләй юҡҡа сығарҙы. Бер кем көтөп тормаған һап-һалҡын өйгә ҡайтыуҙан ауыры юҡ. Әллә... Барып һөйләшеп ҡарарғамы Настя менән? Аңламаҫмы икән ни? Ни булһа ла булыр, тәүәккәлләй Ғиндулла. Башына килгән ошо фекерҙән ир күңелләнә төштө һәм, ҡырҡа боролоп, ауылдың теге башына, мәрхүм ҡайныһының иҫке өйө яғына китте. Тәҙрәләрҙә ут күренмәй күренеүен, шулай ҙа үпкәләмәҫ, үҙ ҡатыны ла баһа. Ҡураға яҡынлашҡайны, тертләне — ниҙер уны күҙәтә кеүек. Йөрәген шом баҫты. Әкренләп кенә яҡынлаша, аяҡтары шыуыр-шыумаҫ. Бына һарай мөйөшөнә етте. Үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡушкөбәген иңбашына алып ҡулдарына тотто. Был уға әҙерәк ҡыйыулыҡ өҫтәне — инде ышаныслыраҡ баҫып алға атланы. Ә инде икенсе минутта... Үҙенә табан быҙау ҙурлыҡ йән эйәһенең ырғыуын ғына сырамыта алды. Тәтегә баҫырға өлгөрмәне, мылтыҡ ситкә осто, үҙе иһә икенсе яҡҡа мәтәлеп барып төштө. Бер-ике секундҡа ҡараштары ғына тап килде. Бындай тойғоно кисермәҫ өсөн, тамуҡ тупһаһын үҙ теләге менән аша атларға риза ине ул был мәлдә. Аңына килгәндәй булғас, мылтығына ташланды: «Шул! Үҙе!» Ләкин тирә-яҡта йән эйәһе күренмәй. Бәй! Ни эшләп Ғиндуллаға ҡағылманы? Алланың ҡашҡа тәкәһе түгел дә баһа! Ғәжәп... Мәстүрә! Моғайын, уның башына еткәндер! Ах! Теймәһә генә ярар ине...

Ғиндулла үҙ-үҙен белештермәй, йортҡа ташланды. Ишектең биге юҡ. Ҡатыны өсөн хафаланған ир уны бәрә һуғып барып ингәндә, йорт буш ине.

Тупһала байтаҡ ултырҙы ул. Көн оҙоно йөрөп арыһылған, ултыра торғас, иҫнәй башланы. Бәлки... ҡатыны өйөндә көтәлер? Ниңә бындай уй башына элегерәк килмәгән? Ғиндулла кинәт күңелләнде. Үҙ йортоноң тәҙрәләрендә ут булмауы ла өмөтөн һүндермәне хатта. Ҡап-

ҡаһын ғына асҡайны... Йә хоҙай! Булған икән! Ирҙең йөрәген ҡот осҡос ҡурҡыу биләне. Ҡаршыһында ғына уға бая һөжүм иткән күк бүре ултыра. Йөндәре тулған ай яҡтыһында йым-йым килә. Бөтә ҡиәфәте ажарланып ҡатып ҡалған, күҙҙәрендә зәһәр уҫаллыҡ. Ләкин ниңәлер һөжүм башларға ҡабаланмай. Ғиндулла арҡаһындағы мылтығын алып өлгөрмәҫен ап-асыҡ аңланы. Бер генә ҡыйыш хәрәкәт яһаһа, бүре уның муйынына йәбешәсәк. Нишләргә? Итек ҡуңысында хәнйәр бар ҙа баһа. Күҙҙәрен бүренән алмай, ул әкрен генә эйелде. Бына бармаҡтары хәнйәр һабын ҡапшай. Һөжүм итмәй торһа ине! Бер генә минутҡа! Тура йөрәгенә сәнсергә кәрәк. Яҙа тейҙерҙеме, үҙе теге донъяға олағасаҡ.

Ҡулының хәнйәрҙе ныҡ итеп ҡымтыуын тойғас, ир кинәт турайҙы. Үҙенән ике-өс кенә аҙым ситтәрәк ултырған йыртҡысҡа ташланды. Ләкин ни был? Бүре һөжүм итеүсенең үҙенә йәбешәһе урынға, кинәт ситкә тайшанды. Уның күкрәгенә самаланған хәнйәр ҡолаҡ төбөнә тура килде. Ғиндулла уны киҫеп төшөрҙө буғай— йыртҡыс имәнес тауыш менән сыйылдап ебәрҙе. Ләкин икенсе минутта уҡ күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә ул юҡҡа сыҡҡайны. Хатта ҡаныҡҡан бер кейеген ҡулынан имен ысҡындырмаусы Ғиндулла иҫенә килә алмай ҡалды. Ерҙә йыртҡыстың төбөнә тиклем ҡырҡылған ҡолағы ҡанға туҙып ята. Ир ытырғаныу тойғоһон көс-хәлгә еңеп, уны хәнйәр осо менән генә күтәреп күҙҙәренә яҡын килтерҙе. Әммә шул уҡ минутта ситкә быраҡтырҙы — әллә ниндәй сәйер хистән арына алмай ине ул.

## 4

— Беләһеңме, Шамил олатай, кисә ниндәй хәл булды? Әйтһәң, әҙәм ышанмаҫ. Лутсы күрһәтәйем.— Ғиндулла кисә төнө бүре торған урынға йүнәлде. «Ошонда ятырға тейеш ине лә баһа. Ҡайҙа ырғыттым һуң?»

— Нәмә эҙләйһең, Ғиндулла улым?

— Кисә төнө теге бүре мине ихатала аңдып ултырған, ышанаһыңмы шуға, Шамил олатай? Ҡасып өлгөрҙө, бер ҡолағын хәнйәр менән киҫеп төшөрҙөм. Шуны күрһәтәйем...— Ир әйтеп өлгөрмәне. Йылан арбағандай ҡатып ҡалғайны.— Булмаҫ! — тип шыбырланы ағарынған ирендәре.

— Таптыңмы ни?

Йәш ир туңып ҡалған ҡарашын бер күршеһенә, бер ерҙә ағарыбыраҡ ятҡан нәмәгә алмаш-тилмәш күсерге-

ләй. Ул эҙләгән нәмә табылды, ләкин... ул кеше ҡолағы ине. Ябай ғына алҡаһы ла бар хатта. Тап ошо алҡа саҡ аҡылдан яҙҙырманы ла инде ирҙе. Иҫ киткес таныш ине ул. Ғиндулла әкрен генә артҡа табан сигә. Күҙ алдына әллә ниндәй мәғәнәһеҙ күренештәр килә. Берсә Мәстүрәнең салышайған йөҙө, берсә ерҙә ятҡан һыңар ҡолаҡ... Икенсе минутта ул ҡыҙыу-ҡыҙыу аҙымдар менән ауыл урамы буйлап бара ине. Күршеһе бер нәмә лә аңламаған көйө ихата уртаһында баҫып ҡалды. Ғиндулланың ҡаны ҡайнай. Башҡа һыймаҫлыҡ нәмәгә бар көсө менән ышанмаҫҡа тырышһа ла, шом оторо көсәйә генә.

Ишекте Мәстүрә байтаҡ асмай торҙо. Дөбөрләтә башлағас ҡына, келәнең шылт итеп ысҡынғаны ишетелде. Атылып ингән ир тәүге эш итеп уның иҙеүенән алырға уйлағайны. Ләкин Мәстүрә тып-тыныс ҡарап тора, ә башы... Башы бәйле ине. Уң ҡолағы урынынан һарҡып ҡан сыҡҡан...

— Һин... Һин...

— Йә, ниңә әйтеп бөтөрмәйһең?

— Һин... йыртҡыс. Вәхши... Алты кешенең ғүмере... Ниңә кәрәк булды улар һиңә?

— Их, Ғиндулла... Ғиндулла! — Үҙәк өҙгөс тауыш менән илап ебәргән бисәкәйгә ни әйтергә белә алмай ҡарап торҙо ир. Эйе, уның ҡаршыһында бүрегә әүерелә алыусы йыртҡыс йәнле әҙәм ултыра. Әгәр ҙә үҙ күҙҙәре менән инанмаһа, ғүмерендә лә ышанаһы түгел ине. Нисек мөмкин һуң был? Тәбиғәттең ҡот осҡос яңылышыуымы? Әллә ул да, ҡөҙрәтле тәбиғәт тә, ҡайһы саҡ үҙенең ни эшләгәнен белмәй китәме? Әллә унан да дәһшәтлерәк көс бармы был донъяларҙа? Белмәҫһең... Ана ҡаршыһында ултыра, күҙенән йәштәр сығарып илай. Икенсе ҡарауға үҙе кеүек үк әҙәм балаларына ташланасаҡ. Ике лә уйлап тормай. Юҡ, былай ҡалдырмаясаҡ уны Ғиндулла.

— Мин һине... үлтерәсәкмен, Мәстүрә.

Ҡатын илауҙан туҡтаны. Күрәһең, ҡолаҡ урыны һыҙлай ине, ҡулы менән баҫты, сырайы һытылып ҡуйҙы.

— Ҡөҙрәтең етмәйәсәк.

— Ни-исек?

— Аңламаҫһың барыбер. Һин минең етенсе ҡорбаным булырға тейеш инең. Юлыма үҙең эҙләп сыҡтың. Шул мәлдә генә... мин айнығандай булдым. Ышанмаясаҡһың, беләм, ләкин һөйләгәнде тыңлап бөт.— Мәстүрә иренең хәнйәрен йәтешләберәк тотоуына тамсы ла иғтибар итмәй, өҫтәл янындағы иҫке ултырғысҡа барып ултыр-

ҙы.— Теләһәм, кисә үк яҡты донъя менән хушлаша инең. Ләкин, ышан, мин бер ҡасан да үҙем теләп өҙмәнем әҙәм ғүмерҙәрен. Былар... барыһы ла минең теләктән тыш була... Ете төн уртаһында ҡот осҡос үҙгәрештәр башлана... Әйтерһең дә... әйтерһең дә, тирем эске яғы менән әйләнә. Аңым томалана, үҙемдең ни эшләгәнемде белмәй башлайым. Күрәһең, был ҡарғыш...

— Ниндәй ҡарғыш? — Ғәжәп, ошо күпме һәләкәттәрҙең сәбәпсеһе менән һәүетемсә һөйләшеп ултыра, имеш.

— Ә-ә... Белмәйһең бит әле. Һөйләгәнем булманы, ғәрләндем... Беҙ атайым менән һеҙҙең яҡтарға алтын тауҙар эҙләп килеп сыҡманыҡ.. Беҙҙе ҡыуҙылар...

— Кемдәр?

— Беҙ нәҫелебеҙ менән ҡәһәрләнгән кешеләр. Олатайҙан был донъяла һис кем изгелек күрмәне, атайым күпме ғүмерҙе өҙҙө. Хатта үҙ әсәм уның ҡулынан һәләк булды.— Мәстүрә ҡапыл быуылып илап ебәрҙе.— Ғәйепһеҙ кешеләрҙең күҙ йәштәрен түктермә, Ғиндулла! Һис ҡасан да! Кешеләр рәнйеүе боғаҙыңа бысаҡ булып терәләләр... Атайым үлгәс тә төштәремә инеп йөҙәтте. Күрәһең, йәненә тынырлыҡ таба алмайҙыр. Ярҙам итеүҙе һораған кеүек була. Ни тиһәң дә, атай бит... Сихыр менән ярҙам итәйем, тинем. Һөҙөмтәлә бына нәмәгә килеп терәлдем.

— Әйт әле, Айытҡол ағайҙың ҡыҙын һин...

— Эйе, йәшереүҙән хәҙер ни файҙа. Һин йоҡлап киткәс, һарайға сыҡҡайным. Ул мине күреп ҡалды, хатта низәр ҡылғанымды ла. Үҙем дә һиҙмәй ҡалдым. Артабан... ҡан төҫө күргәс... үҙең дә беләһең... Ышан, Ғиндулла! Мин уларҙың үлемен теләмәнем!

— Минең ышаныуҙан һиңә ни файҙа... Өҫтәүенә... артабан да ҡала алмайһың һин... Йәшәргә хаҡың юҡ.

— Беләм... Ләкин миндә һинең балаң...

— Балам?! Ниңә уны элек үк әйтмәнең? — Ир урынынан һикереп торҙо. Уның ҡиәфәтендә үкенес, йәлләү, күрә алмай — барыһы ла бар ине.

— Ултыр, Ғиндулла! Ул йәшәмәйәсәк. Беҙҙең нәҫел ҡорорға тейеш. Өҫтөбөҙгә яуған рәнйеүҙән күпме ҡотолорға, әҙәмсә йәшәргә тырыштым, булмай. Күрәһең, яҙғаны шулдыр. Баламдың да ыҙаланыуын теләмәйем. Өҫтәүенә... донъяла иң көслө тойғо — әсәлек. Әгәр ҙә ул ҡарынымдан сыҡҡан сабыйымды рәнйетеүҙәрен күрһәм, белмәйем... Ошо ҡарғыштан ҡурҡып, табырға теләмәгәйнем. Хәҙер булһа ла, донъяға килмәйәсәк.

— Аһ! — Ир ике ҡулы менән башына йәбеште. Хәнйәр сыңғырлап урындыҡҡа, унан иҙәнгә төштө. Ғиндулла башҡаса тыңлай алманы, ишекте бәрә асып, тышҡа

атылды. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, ауылдан сығып тауға менеп барыусы иргә ауылдаштары ғәжәпләнеберәк ҡараны. Әллә күпме йөрөнө ул көҙҙө ҡаршыларға йыйынған урман эсендә. Ҡайһылыр ҡарағай төбөндә иҫенә килә алмай ултырҙы, ниндәйҙер ҡайынға хәсрәтле башын терәне. Төндө әллә бәрелеп-һуғылып йөрөп үткәрҙе, әллә ҡайҙалыр серем итте... Иртә таң менән тауҙан төшөп килеүсе Ғиндулланы күреүселәр тиҙ генә таный алмаҫтар ине.

Ә уның тупһаһы төбөндә һыңар ҡолаҡлы күк бүренең үле кәүҙәһе ята ине. Ғиндулла ауылдаштарынан уны яндырыуҙарын һораған, тинеләр...

*1993 йыл.*

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

КЕШЕ-КҮСЕРМӘ *(фантастик роман)* . . . . . . . . . . . . . 5
ТАҢ АЛДЫНАН ҠАЙТЫРМЫН *(фәнни-фантастик повесть)* . . 293
БҮРЕГӘ ҺУНАР *(фантастик хикәйә)* . . . . . . . . . . 343

Литературно-художественное издание

**ИСХАКОВА Фанида Агзамовна**

**ЧЕЛОВЕК-ОТРАЖЕНИЕ**

Роман, повесть

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Лена Сирусина*
Рәссамы *Марат Байназаров*
Биҙәлеш мөхәррире *Фазлетдин Ислахов*
Техник мөхәррире *Венера Абдрахманова*
Корректоры *Әлифә Хажиева*

ИБ № 5443

Йыйырға бирелде 16.01.96. Баҫырға ҡул ҡуйылды 24.06.96. Ҡағыҙ форматы 84×108¹/₃₂. Тип. ҡағыҙы № 2. Балтика гарнитураһы. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 18,48+0,21 форз. Шартлы буяу отт. 18,79. Иҫәп-баҫма таб. 19,39+0,38 форз. Тиражы 7000 дана. Заказ № 158. Хаҡы ирекле.

Башҡортостан «Китап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.